# КРАТКИЙ РУССКО-БАШКИРСКИЙ СЛОВАРЬ МЕДИКО-ГИГИЕНИЧЕСКИХ ТЕРМИНОВ

* * * * * * * *

# МЕДИЦИНА-ГИГИЕНА ТЕРМИНДАРЫНЫҢ ҠЫҪҠАСА РУССА-БАШҠОРТСА ҺҮҘЛЕГЕ

# КРАТКИЙ РУССКО-БАШКИРСКИЙ СЛОВАРЬ МЕДИКО-ГИГИЕНИЧЕСКИХ ТЕРМИНОВ

*Утвержден Терминологической комиссией при Президиуме Верховного Совета Башкирской ССР и Ученым советом*

*Башкирского государственного медицинского института имени 15-летия ВЛКСМ*

УФА
БАШКИРСКОЕ КНИЖНОЕ ИЗДАТЕЛЬСТВО
1990

# МЕДИЦИНА-ГИГИЕНА ТЕРМИНДАРЫНЫҢ ҠЫҪҠАСА РУССА-БАШҠОРТСА ҺҮҘЛЕГЕ

*Башҡорт ССР-ы*

*Верховный Советы Президиумы эргәһендәге Терминология комиссияһы һәм ВЛКСМ-дың 15 йыллығы исемендәге Башҡорт дәүләт медицина институтының Ғилми советы тарафынан раҫланды*

ӨФӨ
БАШҠОРТОСТАН КИТАП НӘШРИӘТЕ
1990

ББК 51.1(2)я21
Г 94

В. З. Гумаров, кандидат медицинских наук
Ответственные редакторы: Р. З. Шакуров, М. С. Сафин

**Гумаров В. З.**

Г 94 Краткий русско-башкирский словарь медико-гигиенических терминов.— Изд. 1-ое.— Уфа: Башк. кн. изд-во, 1990.—272 с.

ISBN 5-295-00411-2

Словарь содержит более 20 тысяч медико-гигиенических терминов. При его составлении учтены последние достижения медицинской науки.

Словарь предназначен для преподавателей общеобразовательных башкирских и татарских школ как пособие при проведении уроков здоровья. Он будет полезен и медработникам, занимающимся санитарно-просветительной работой на родном языке. Словарем могут воспользоваться также работники печати, радио и телевидения, издательств Башкирии.

Г $\frac{4306010000-36}{М\ 121(03)-90}$ 178—90 ББК 51.1(2)я21

ISBN 5-295-00411-2

© Гумаров В. З., 1990

## ПРЕДИСЛОВИЕ

Одной из важнейших социальных задач в области здравоохранения, поставленных XXVIII съездом КПСС, является сохранение, всемерное укрепление здоровья трудяшихся нашей страны.

В решении поставленной задачи чрезвычайно велика роль пропаганды здорового образа жизни, постоянного внимания гигиеническому воспитанию населения и прежде всего подрастающего поколения. Для проведения этой работы в национальной республике необходимо издание русско-башкирского словаря медико-гигиенических терминов.

Подобный словарь был впервые издан в 1935 году (Мухамедов М. Н. и др. «Русско-латинско-башкирский словарь медицинских терминов», Уфа, 1935). Однако с момента его выхода в свет прошло более 50 лет и он стал библиографической редкостью. Кроме того, указанный словарь был выполнен на основе латинского алфавита, который мало понятен современному читателю.

Следует учесть и такое обстоятельство. Истекший период ознаменовался бурным развитием медицинской науки, возникновением большого числа новых терминов. Немало терминов устарело и вышло из употребления.

В 1981 году издан «Русско-башкирский словарь по анатомии и физиологии человека», который быстро разошелся. Это подтверждает практическую надобность подобных изданий.

Все отмеченное явилось основанием для подготовки данного словаря. Он включает в себя более 20 тысяч терминов преимущественно санитарно-гигиенических и клинических. При составлении русского словника, выполнении толкования отдельных терминов, подборе башкирских эквивалентов использован ряд литературных источников (Энциклопедический словарь медицинских терминов, I, II, III тома. М., 1982—1984, под ред. Б. В. Петровского; Русско-башкирский словарь. М., 1958, под ред. Н. К. Дмитриева, К. З. Ахмерова, а также вышеуказанный словарь под ред. М. Н. Мухамедова и др.).

При подготовке словаря автору оказывалась научно-методическая помощь заведующим кафедрой социальной гигиены и организации здравоохранения Башкирского медицинского института, доцен-

том М. С. Сафиным, директором Института истории, языка и литературы Башкирского центра Уральского отделения АН СССР, доктором филологических наук профессором З. Г. Ураксиным. В языковедческом плане улучшению словаря способствовали его редактирование кандидатом филологических наук Р. З. Шакуровым и рекомендации кандидата филологических наук А. Г. Биишева, ученого языковеда И. М. Агишева. Ценными советами поделились рецензенты словаря: сотрудники Башкирского государственного мединститута (зав. кафедрой общей гигиены профессор Я. Н. Аскарова, заслуженный врач Башкирской АССР, доцент кафедры общей хирургии И. Х. Хидиятов), директор Башкирского филиала научно-исследовательского института национальных школ доцент В. Ш. Псянчин, языковед Башкирского государственного педагогического института доцент З. З. Апсалямов и др. Всем перечисленным товарищам составитель словаря приносит глубокую благодарность.

# СПИСОК
## условных сокращений

*анат.*— анатомия
*биол.*— биология
*гиг.*— гигиена
*здрав.*— здравоохранение
*лаб.*— лаборатория
*лек.*— лекарство
*мед.*— медицина
*напр.*— например
*нерв.*— нервный
*пат.*— патология
*процед.*—процедура
*псих.*— психиатрия
*психич.*— психический
*разг.*— разговорный
*санит.*— санитария
*стат.*—статистика
*уст.*— устаревший
*фарм.*— фармакология
*физиол.*— физиология
*физ.*— физкультура
*физич.*— физический
*физиотер.*— физиотерапия

# А

**абази́я** абазия (ауырыу сәбәпле аяҡтан яҙыу)

**абдоминалги́я** абдоминалгия (эс ауыртыуы)

**аберра́ция** аберрация (теге йәки был ағза-туҡыманың йәки уларҙың әшсәнлегенең индивидуаль рәүештә нормаль хәлдән тайпылыуы, мәҫ., *а. половая* енси аберрация; *а. хромосомная* хромосом аберрацияһы)

**аблактаци́я** аблактация (баланы имсәк ташлатыу)

**аблефари́я** аблефария (тыумыштан күҙ ҡабағының һәм күҙ ҡыҫығының юҡлығы)

**або́рт (вы́кидыш)** аборт (буйға ҡалыуҙың тәүге 28 аҙнаһы эсендә ғөманды (баланы) төшөрөү йәки төшөртөү; төрҙәре: *а. инфицированный* инфекцияланған аборт; *а. искусственный* яһалма аборт (яһатылған аборт); *а. криминальный* криминаль аборт (больница шарттарында яһалмаған аборт, совет законы менән тыйылған); *а. медицинский* медицина аборты (врач тарафынан больница шарттарында яһалған аборт); *а. начавшийся* башланған аборт; *а. неполный* ҡалдыҡлы (тулы булмаған) аборт (аналыҡ эсендә толҡат-ғөмандың айырым өлөштәре ҡалған була); *а. поздний* һуңлаған аборт (буйға ҡалыуҙың 16—28 аҙналары эсендә яһалған аборт); *а. полный* тулы аборт; *а. привычный* ғәҙәти аборт (үҙенән-үҙе баланың төшөп тороуы); *а. самопроизвольный* (спонтанный) үҙенән-үҙе булған (спонтан) аборт; *а. септический* септик аборт (сепсис менән ҡатмарлашҡан аборт); *а. трубный* (аналыҡ) торбаһы аборты (үҫештәге түл аналыҡ торбаһында урынлашҡан була); *а. угрожающий* аборт башланыу ҡурҡынысы (үҙенән-үҙе булған аборттың тәүге мәле); *а. шеечный* аналыҡ муйынтығы аборты (үҫештәге түл күҙәнәге аналыҡ муйынтығында урынлашҡан була)

**абра́зия** абразия (ҡырып таҙартыу операцияһы, мәҫ., *а. матки* аналыҡ абразияһы)

**абса́нс** абсанс (эпилепсия ауырыуы булғанда ҡыҫҡа ваҡытҡа һуштан яҙыу йәки аң томаланыу; *ҡара:* **эпилепсия**)

**абсенти́зм** абсентизм (хроник алкоголизмдың еңел төрө)

**абстине́нция** абстиненция (1. эскелектән йәки башҡа токсикоманиянан ҡапыл тыйылғанда барлыҡҡа килгән ауырыу күренеше, *ҡара:* **токсикомания**); 2. *а.*

*половая* енси абстиненция (мәжбүри йәки аңлы рәүештә сексуаль активлыҡты кәметеү)

**абсцеди́рование** абсцеслау (эренләү)

**абсце́сс** абсцесс (эренле шеш; төрҙәре: *а. аппендикулярный* аппендикуляр абсцесс (аҙып киткән аппендицит һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән күренеш); *а. асептический* асептик абсцесс (скипидар йә башҡа матдәне тире аҫтына индереүҙән туҡыманың үлеүе һәм эренләп шешеүе); *а. гангренозный* гангреноз абсцесс (*ҡара:* **гангрена**); *а. геморрагический* геморрагик абсцесс (эренле шешектә эрен ҡан ҡатыш була); *а. заглоточный* тамаҡ төбө абсцесы; *а. метастатический* метастаз абсцесы (*ҡара:* **метастаз**); *а. миндаликовый* миндалина абсцесы (тамаҡ миндалинаһының эренләп шешеүе); *а. парадентальный* парадентaль абсцесс (теш тамыры тәңгәлендәге эренле шеш); *а. паратонзиллярный* паратонзилляр абсцесс (тамаҡ миндалиналары йәнәшендәге туҡыманың эренләп шешеүе); *а. холодный* (натечник) ыйыҡ (күпселек ваҡытта туберкулез һөҙөмтәһендә була торған эренле шеш); *а. хронический* хроник (дауамлы) абсцесс һ. б.)

**абсцессогра́фия** абсцессография (абсцесс шешен рентген ярҙамында тикшереү)

**абули́я** абулия (ауырыу һөҙөмтәһендә ихтыяр көсөнөң түбәнәйеүе, эшкә һәләтлектең булмауы)

**авиа́ция санитарная** санитария авиацияһы

**авируле́нтность** авирулентлыҡ (айырым патоген микробтарҙың ауырыу тыуҙырыуға һәләтле булмауы)

**авируле́нтный** авирулент (авирулентлыҡҡа ҡағылышлы, мәҫ., *микроб авирулентный* авирулент микроб)

**авитамино́зный** авитаминоз (авитаминозға ҡағылышлы)

**автамино́зы** авитаминоздар (витаминдар ныҡ етешмәүҙән барлыҡҡа килгән бер төркөм ауырыуҙар: бери-бери, пеллагра, зәңге һ. б.)

**автогипоте́рм** автогипотерм (тәндең температураһын төшөрә торған аппарат)

**автокла́в** автоклав (төрлө кәрәк нәмәләрҙе стерилизациялай торған аппарат)

**автомати́зм амбулаторный** амбулатор автоматизм (ҡуянсыҡ (эпилепсия) ауырыуының бер билдәһе: ауырыу кеше ваҡыты-ваҡыты менән, аҡылы томаланыу сәбәпле, мәғәнәһеҙ эшхәрәкәттәр яһай)

**автооперацио́нная** автооперационная (йөк машинаһында булдырылған операцион бүлмә)

**авторентге́н** авторентген (йөк машинаһында ҡуйылған рентген аппараты)

**агалакти́я** агалактия (бала тапҡандан һуң әсә кешенең һөтө килмәүе)

**агаммаглобулинеми́я** агаммаглобулинемия (иммуноглобулиндарҙың булмауы менән характерлы ауырыу күренеше)

**агамонематодо́з** агамонематодоз (нематодоз төркөмөнә ингән гельминтоз ауырыуы; *ҡара:* **нематодоз**)

**ага́р (агар-агар)** агар (диңгеҙ ылымыҡтарынан алынған туҡлыҡлы матдә, медицинала ҡулланыла, мәҫ., микробтарҙы үҫтереү өсөн)

**агастри́я** агастрия (тыумыштан ҡорһаҡ көбөнөң өҫкө өлөшө һәм ҡорһаҡтың өҫкө өлөшөндә ятҡан ағзаларҙың булмауы)

**агглютина́ция** агглютинация (микробтарҙың йәки ҡан күҙәнәктәренең уҡмашыуы)

**агглютини́ны** агглютининдар (агглютинация яһай торған антиесемдәрҙең бер төрө)

**агглютиноге́н** агглютиноген (эритроциттарҙағы антиген рәүешендә булған матдә; *ҡара:* **антигены)**

**аггрáва́ция** аггравация (кешенең үҙ ауырыуын арттырып күрһәтеүе)

**аге́нт** агент, мәҫ., *а. болезнетворный* ауырыу тыуҙырғыс агент (бактерия, паразит селәү һ. б.)

**аглосси́я** аглоссия (тыумыштан телдең булмауы)

**агнати́я** агнатия (тыумыштан өҫкө йәки аҫҡы яңаҡтың булмауы)

**агнози́я** агнозия (ҡайһы бер ауырыуҙар һөҙөмтәһендә яҙа күреү, яҙа ишетеү һ. б., мәҫ., *а. слуха* ишетеү агнозияһы; *а. зрительная* күреү агнозияһы; *а. тактильная* тактиль (тейгәнде тойоу) агнозияһы һ. б.)

**агона́льный** агональ (агонияға ҡағылышлы, мәҫ., *агональное состояние* агональ торош)

**аго́ния** агония (үлеү алды ғазабы)

**агорафоби́я** агорафобия (асыҡ араушҡа (пространствоға), майҙан һәм киң урамдарға ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**аграммати́зм** аграмматизм (тел-мәр боҙолоуҙың бер төрө)

**агранулоцито́з** агранулоцитоз (ҡанда гранулоцит лейкоциттарҙың ҡырҡа кәмеүе, мәҫ., *а. медикаментозный* медикаментоз агранулоцитоз һ. б.)

**аграфи́я** аграфия (ҡайһы бер мейе ауырыуҙары һөҙөмтәһендә яҙыу һәләтлегенең кәмеүе йәки юғалыуы)

**адактили́я** адактилия (тыумыштан бармаҡтарҙың юҡлығы)

**адапта́ция** адаптация (яраҡлашыу, мәҫ., *а. глаза* күҙ адаптацияһы (күҙҙең ҡараңғыға йәки яҡтыға өйрәнеп китеүе; *а. психологическая* психологик адаптация һ. б.)

**адгези́вный** адгезив (йәбешкәк, мәҫ., адгезив плеврит)

**адге́зия** адгезия (организмдағы сероз шекәрәләренең ауырыу сәбәпле тоташып йәбешеүе)

**аддисони́зм** аддисонизм (бөйөр өҫтө биҙҙәре зарарланмай тороп, Аддисон ауырыуы билдәләренең булыуы; *ҡара:* **болезнь Аддисонова)**

**адени́т** аденит (ниндәй ҙә булһа биҙҙең йәки лимфатик төйөрҙөң шешеүе)

**аденови́русы** аденовирустар (эсендә ДНК булған һәм ауырытырға һәләтле бер төркөм вирустар; *ҡара:* **кислота дезоксирибонуклеиновая**

**адено́иды** (аденоидные разрастания) аденоидтар (йотҡолоҡ тәңгәлендәге миндалиналарҙың үҫеүенән килгән ябай шеш)

**аденокарцино́ма** аденокарцинома (биҙ туҡымаһынан сыҡҡан рак шеше)

**адено́ма** аденома (биҙҙәге эпителийҙан барлыҡҡа килгән ябай шеш, мәҫ., *а. матки* аналыҡ аденомаһы; *а. предстательной железы* простата биҙе аденомаһы һ. б.)

**аденомато́з** аденоматоз (аденома шештәрҙең күп һанда барлыҡҡа килеүе)

**аденомио́ма** аденомиома (биҙ һәм мускул туҡымаһынан барлыҡҡа килгән ябай шеш)

**аденопати́я** аденопатия (лимфатик төйөрҙәрҙең дауамлы ауырыуы)

**аденосарко́ма** аденосаркома (биҙ туҡымаһынан барлыҡҡа килгән саркома шеше; *ҡара:* **саркома**)

**аденофибро́ма** аденофиброма (биҙ туҡымаһынан барлыҡҡа килгән фиброма шеше; *ҡара:* **фиброма**)

**аденэктоми́я** аденэктомия (биҙҙе алыу операцияһы)

**адинами́я** адинамия (ауырыу сәбәпле организмдың йәки айырым ағзаның хәрәкәт активлығы кәмеүе йәки бөтөүе)

**адипозонекро́з** адипозонекроз (май туҡымаһының некрозы (үлеүе);

**аднекси́т** аднексит (түллектең һәм аналыҡ торбаларының бер юлы шешеүе)

**адо́нис (горицвет) весенний** һары умырзая (нигеҙҙә йөрәк ауырыуҙарынан дауа биреүсе үлән)

**адренали́н** адреналин (бөйөр өҫтө биҙенең мейе матдәһенән сыҡҡан гормон)

**адреналинеми́я** адреналинемия (адреналин гормонының ҡанда булыуы)

**адренокортикостеро́иды** адренокортикостероидтар; *ҡара:* **кортикостероиды**

**а́збука** әлифба, мәҫ., *а. Брайля* Брайль әлифбаһы (һуҡырҙар өсөн төҙөлгән әлифба); *а. глухонемых (на пальцах)* һаңғырау-телһеҙҙәр әлифбаһы һ. б.)

**азооспермато́рея** азооспермaторея (һейгәндән һуң йәки оло ярау иткәндә орлоҡ ҡыуыҡсалары һәм простата биҙе һутының бүленеп сығыуы)

**азооспорми́я** азооспермия (орлоҡта — спермала сперматозоидтарҙың юҡлығы)

**азо́т остаточный** ҡалдыҡ азот (аҡһымдар алмашынғандан һуң ҡалған азотлы матдә)

**азотеми́я** азотемия (ҡанда ҡалдыҡ азоттың күбәйеп китеүе)

**азоторе́я** азоторея (тиҙәк һәм һейҙек менән азотлы матдәләрҙең артыҡ юғалыуы)

**айлурофили́я** айлурофилия (патологик характерҙа самаһыҙ бесәй яратыу)

**акаде́мия** академия (мәҫ., *а. военно-медицинская* хәрби-медицина академияһы (Ленинградта хәрби врачтарҙы әҙерләү буйынса юғары уҡыу йорто); *а. медицинских наук* медицина фәндәре академияһы)

**аканто́з** акантоз (тиренең эпидермис ҡатламының сирле үҙгәреше)

**акантоцефале́зы** акантоцефалездар (акантоцефалдар йоғоуҙан килгән, нигеҙҙә, хайуандарҙа күҙәтелеүсән бер төркөм гельминтоз ауырыуҙары, һирәк осраҡтарҙа уның менән кеше лә сирләй)

**акантоцефа́лы** акантоцефалдар (паразит селәүҙәр)

**акапни́я** акапния (ҡанда күмер әселе газдың кәмеүе)

**акарди́я** акардия (тыумыштан йөрәктең булмауы)

**акариа́з** акариаз (талпан, бетсәләр тыуҙырған ауырыуҙарҙың дөйөмләштерелгән исеме)

**акарофоби́я** акарофобия (ҡысынма ауырыуына ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**акатафази́я** акатафазия (һүҙҙәрҙе бәйләп әйтә алмау менән характерлы телмәр боҙолоуы)

**АКДС** *(ҡара:* **вакцина ассоциированная)**

**акинези́я (акинез)** акинезия (параличтан, ҡайһы бер быуын ауырыуҙарынан йәки башҡа сәбәптән ҡуҙғала алмау)

**акклиматиза́ция** акклиматизация, акклиматизацияланыу (климатҡа яраҡлашыу)

**аккомода́ция (гла́за)** күҙ аккомодацияһы (күҙҙең төрлө алыҫлыҡтағы нәмәне анығ күрергә яраҡлашыуы)

**акне́** акне (һытҡы, шулай уҡ *ҡара:* **угри)**

**акнефоби́я** акнефобия (һытҡы сығыуға ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**акни́т** акнит (тире туберкулезының бер төрө)

**акрани́я** акрания (тыумыштан баш ҡумтаһында көмбәҙ һөйәктәренең булмауы)

**акрогидро́з** акрогидроз (устың йәки табандарҙың артыҡ тирләүсән булыуы)

**акродермати́т** акродерматит (аяҡ башында һәм ҡул суғында күҙәтелгән тире ауырыуҙарының дөйөм исеме)

**акромегали́я** акромегалия (гипофиз биҙе ауырыуы һөҙөмтәһендә бит-баштың, аяҡ-ҡулдың артыҡ үҫеүе)

**акрофоби́я** акрофобия (бейеклектәргә ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**акроцефали́я** акроцефалия (баш һөйәгенең ослайып тороуы)

**акроциано́з** акроцианоз (ҡан әйләнешенең йәки ҡан тамырҙары тонусының боҙолоуынан аяҡ-ҡулдың, ҡолаҡ-танауҙың күгәреүе)

**аксерофто́л** аксерофтол *(ҡара:* **витамин А)**

**аксо́н** аксон (нерв күҙәнәгенең оҙон үҫентеһе)

**акт** акт (мәҫ., *а. дефекации* дефекация (оло ярау итеү акты); *а. дыхания* тын алыу акты һ. б.)

**АКТГ** АКТГ *(ҡара:* **гормон адренокортикотропный)**

**акти́вность** *(биол.)* активлыҡ, мәҫ., *а. лекарства* дарыу активлығы (дауалауҙың тәьҫир итеүсәнлеге һ. б.)

**актиномико́з** актиномикоз (актиномицет бәшмәге йоҡҡанда булған етди бәшмәк ауырыуы; уның бер нисә төрө бар: тире актиномикозы, үпкә актиномикозы һ. б.)

**актинотерапи́я** актинотерапия (ҡояш, кварц, рентген һ. б. нурҙар менән дауалау)

**акупункту́ра** акупунктура *(ҡара:* **иглотерапия)**

**аку́стика** акустика (тауыш-өн тулҡындарын өйрәнә торған фән)

**акуше́р-гинеко́лог** акушер-гинеколог (акушерлыҡ һәм гинекология белгесе, врач)

**акуше́рский** акушер, акушерлыҡ, акушерҙар, мәҫ., акушер эше, акушерлыҡ операцияһы, акушерҙар конференцияһы)

**акуше́рство** акушерлыҡ (медицинаның йөклөлөктә, бәпесләүҙе,

шунан килгән ауырыуҙарҙы һәм дауалауҙы өйрәнә торған бүлеге)

**акцелера́ция** акцелерация (балаларҙың гәҙәттәгенән тиҙерәк үҫеүе һәм енси өлгөргәнлектең иртәрәк килеүе)

**акцеллеротра́вма** акцеллеротравма (ҡапыл һәм үтә тиҙ хәрәкәттә булыуҙан килгән эске ҡолаҡ травмаһы; *ҡара:* **травма)**

**алали́я** алалия (ауырыуҙан йәки тыумыштан баланың насар һөйләшеүе йәки бөтөнләй һөйләшмәүе)

**алейки́я** алейкия *(ҡара:* **агранулоцитоз)**

**алекси́я** алексия (ауырыу сәбәпле китап-яҙманы уҡыу һәләтлегенең боҙолоуы)

**алимента́рный** алиментар (ашамлыҡҡа, туҡланыуға бәйле)

**алкало́з** алкалоз (ҡандағы һелтелектең артыуы)

**алкало́иды** алкалоидтар (үҫемлектәрҙән алынып, дауалау өсөн ҡулланылған азотлы органик матдәләр)

**алкаптонури́я** алкаптонурия (нәҫелдән килгән һәм матдәләр алмашыныуы боҙолоуы менән үткән ауырыу)

**алкоголи́зм** алкоголизм (систематик рәүештә спиртлы эсемлектәрҙе ҡабул итеүҙән барлыҡҡа килгән ауырыу; *а. хронический (токсикомания алкогольная)* хроник алкоголизм (дауамлы эскелектән килгән алкоголь токсикоманияһы; *ҡара:* **токсикомания** һ. б.)

**алкого́ль этиловый** этил алкоголе *(ҡара:* **спирт этиловый)**

**алкого́льный** алкоголле (спиртлы) (мәҫ., алкоголле эсемлек)

**аллерге́н** аллерген (1. аллергия күренешен тыуҙырыусы матдә; 2. аллергик ауырыуҙарҙы билдәләү өсөн ҡулланыла торған матдә)

**аллерге́нность** аллергенлыҡ (аллергия күренешен тыуҙырыу һәләтлеге)

**аллерги́ческий** аллергия, аллергик (мәҫ., аллергия ауырыуы, аллергик үҙгәрештәр)

**аллерги́я** аллергия (организмдың теге йәки был матдәгә ҡарата тәбиғи булмаған һиҙеүсәнлеге, реактивлығы; төрҙәре: *а. бактериальная* бактериаль аллергия; *а. гельминтозная* гельминтоз аллергия (паразит селәү эләгеүҙән килгән аллергия); *а. грибковая* бәшмәк аллергияһы (берәй бәшмәк ауырыуы булғанда); *а. желудочно-кишечная* ашҡаҙан-эсәк аллергияһы (ашамлыҡтан тыш нимәлер килешмәүҙән була); *а. инфекционная* инфекцион аллергия; *а. контактная* контакт аллергия (килешмәгән нәмә тейгән ерҙә (тире йәки тиресәнең аллергик шешеүе); *а. латентная* латент аллергия (йәшерен үтеүсе аллергия); *а. пищевая* (алиментарная) ашамлыҡ (алиментар) аллергияһы; *а. профессиональная* профессиональ аллергия; *а. пылевая* туҙан аллергияһы; *а. пыльцевая* һеркә аллергияһы; *а. холодовая* һалҡындан аллергия (һыуыҡ килешмәүҙән була) һ. б.

**аллерго́зы** аллергозы (аллергия ауырыуҙарының дөйөм исеме)

**аллерго́лог** аллерголог (аллергология белгесе, врач)

**аллергологи́ческий** аллергологик, аллергология

**аллерголо́гия** аллергология (медицинаның аллергендарҙы, ал-

лергияны һәм аллергия ауырыуҙарын өйрәнә торған бүлеге)

**аллопатия** аллопатия (фармакологик препараттар менән дауалау принцибы: дауалау ауырыуҙың билдәләренә ҡаршы йүнәлтелгән була)

**аллопластика** аллопластика (алтын, фил һөйәге, пластмасса кеүек сит есемдәр ярҙамында кеше органындағы дефекттарҙы бөтөрөү операцияһы)

**аллоткань** аллотуҡыма (күсереү операцияһы өсөн ҡулланыла торған трансплантаттың бер төрө)

**аллотрансплантат** аллотрансплантат (кешенән алынған трансплантат; *ҡара:* **трансплантат)**

**аллотрансплантация** аллотрансплантация (бер кешенән алынған ағза-туҡыманы икенсе кешегә күсереү операцияһы)

**алопеция** алопеция (тотороҡло йәки ваҡытлы рәүештә сәстең бөтөнләй йәки бер өлөшөнөң ҡойолоуы йә юҡлығы; төрҙәре: *а. врожденная* тыумыштан килгән алопеция; *а. гнездная* (очаговая) сикле алопеция; *а. диффузная* диффуз алопеция (ҙур урынды алған пеләшлек); *а. лепрозная* лепра алопецияһы *(ҡара:* **лепра)**; *а. наследственная* нәҫелдән килгән алопеция; *а. преждевременная* иртә килгән алопеция; *а. рубцовая* бирсә алопецияһы; *а. себорейная* себорея алопецияһы *(ҡара:* **себорея)**; *а. сифилитическая* сифилис алопецияһы *(ҡара:* **сифилис)**; *а. старческая* ҡартлыҡ алопецияһы; *а. токсическая* токсик алопецияһы (ниндәй ҙә булһа ағыуланыуҙан килгән пеләшлек) һ. б.

**алоэ (столетник)** алоэ (нигеҙҙә, ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙарынан ҡулланылған гөл)

**алтей** һиҙәп үләне, бесәй тырнағы (нигеҙҙә, йүткереүҙән ҡулланылған шифалы үлән)

**альбинизм** альбинизм (тәнгә төҫ биргән меланин пигментының тыумыштан булмауы)

**альбинос** альбинос (альбинизмы булған кеше)

**альбуминурия** *ҡара:* **протеинурия**

**альвеококкоз** альвеококкоз (эхинококкоз ауырыуының бер төрө; *ҡара:* **эхинококкоз)**

**альвеола** *(анат.)* альвеола (ҡыуыҡса, соҡорса, мәҫ., *а. зубная* теш альвеолаһы; *а. легочная* үпкә альвеолаһы һ. б.)

**альвеолит** альвеолит (бер төркөм үпкә альвеолаларының шешеүе)

**альгодисменорея** альгодисменорея (күремдең эс, бил тәңгәлен ауырттырып, дөйөм һыҙланыу менән үтеүе)

**альтерация** альтерация (күҙәнәк, туҡыма һәм ағзаларҙың структураһы боҙолоуы, уларҙың эшсәнлеге үҙгәреүе)

**альфа излучение** (альфа-лучи) альфа нурланыш (ионизациялау нурланышының бер төрө)

**альфа-терапия** альфа-терапия (альфа нурҙарын дауалау өсөн ҡулланыу)

**алюминоз** алюминоз (үпкәгә алюминий туҙаны ултырыуҙан килгән пневмокониоз ауырыуы; *ҡара:* **пневмокониоз)**

**амавроз** амавроз (үҙәк нервы системаһы ауырыуынан булған һуҡырайыу)

**амблиопия** амблиопия (күреү һәләтлегенең түбәнәйеүе)

**амброзия** амброзия (ҡый үлән һеркәһе — көслө аллерген)

**амбулатория** амбулатория (килгәндәрҙе һәм өйҙә ауырығандарҙы ҡарау һәм дауалау учреждениеһы)

**амбулаторный** амбулатория, амбулатор (мәҫ., амбулатория врачы, амбулатор ауырыу)

**амёба** амеба (бер күҙәнәктән торған ябай хайуан; төрҙәре: *а. дизентерийная* дизентерия амебаһы; *ҡара:* **амебиаз** һ. б.)

**амебиаз (дизентерия амебная)** амебиаз (дизентерия амебаһы йоғоуҙан килгән һәм эс китеү һ. б. үҙгәрештәр менән үтеүсе ауырыу)

**амелия** амелия (тыумыштан аяҡ-ҡулдың булмауы)

**аменорея** аменорея (ырыуҙан ҡалғанға тиклемге дәүерҙә булған 6 айҙан артыҡ күрем юҡлығы)

**аменция** аменция (фекер буталыу, ориентация юғалыу һымаҡ нәмәләр менән билдәләнгән психик ауырыу күренеше)

**аметропия** аметропия (күрәгарашлыҡ йәки үтәгарашлыҡ менән характерлы күҙ рефракцияһы аномалияһы)

**амиды** амидтар (матдәләр алмашыныуында актив ҡатнашыусы матдәләр)

**амилаза** амилаза (углевод матдәләрҙе бүлемләүсе фермент)

**амилоз** амилоз (дауамлы рәүештә он туҙаны йотоуҙан килгән пневмокониоз ауырыуы; *ҡара:* **пневмокониоз)**

**амилоид** амилоид (сир һөҙөмтәһендә бауырҙа, талаҡта йәки башҡа ағзала барлыҡҡа килгән үҙенсәлекле аҡһым матдәһе)

**амилоидоз** амилоидоз (ағза-туҡымаларҙа амилоидтың тупланыуы һөҙөмтәһендә матдәләр алмашыныу ауырыуы, мәҫ., бөйөр амилоидозы)

**амимия** амимия (нервы ауырыуы һөҙөмтәһендә йөҙҙөң хәрәкәтһеҙләнеүе, ҡатып ҡалыуы)

**аминокислота** аминокислота (аҡһым составына ингән ҡатмарлы органик матдә, мәҫ., *а. незаменимая* алмаштырғыһыҙ аминокислота (организмда синтезланмай, уны кеше аҙыҡ менән ҡабул итергә тейеш, мәҫ., лизинды, триптофанды һ. б.)

**амины биогенные** биоген аминдар (бер төркөм азотлы органик матдәләр: адреналин, гистамин һ. б.)

**амиотрофия** амиотрофия (мускулдар туҡланыуының насарланыуына бәйле нервы ауырыуы)

**амихофобия** амихофобия (тәнде сыйыу-йәрәхәтләнеүгә ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**амнезия** амнезия (ауырыу рәүешендә элек алынған мәғлүмәтте хәтерләй алмау)

**ампелотерапия** ампелотерапия (йөҙөм менән дауалау)

**ампула** ампула (1. дарыуҙарҙы стериль рәүештә һаҡлау өсөн ҡулланыла торған махсус быяла һауыт; 2. *(анат.)* эсе ҡыуыш ағзаның киңәйеп торған өлөшө, мәҫ., тура эсәк ампулаһы)

**ампутация** ампутация (тотош ағзаның, уның өлөшөнөң өҙөлөүе йәки операция юлы менән алыныуы)

**ампутированный** ампутацияланған

**ампутировать** ампутациялау *(ҡара:* **ампутация)**

**амулет** бетеү (элек халыҡ медицинаһында ауырыуҙан, яраланыуҙан һаҡлар өсөн йәки дауалау маҡсатында ҡулланылған

нәмә, мәҫ., бүре, айыу тырнағы һ. б.)

**анабио́з** анабиоз (организмдағы йәшәү процесының ваҡытлы рәүештә ҡырҡа түбәнәйеүе)

**анавакци́на** анавакцина (формалин иретмәһе ярҙамында үлтерелгән микробтарҙан торған вакцина; *ҡара:* **вакцина)**

**аналги́я** аналгия (ауыртыу тойғоһоноң юҡлығы, юғалыуы)

**аналге́тики** аналгетиктар (ауыртыуҙы кәметә йәки юҡ итә торған дарыуҙар, мәҫ., анальгин, омнопон һ. б.)

**аналгези́рующий (анальгезирующий)** аналгетик (аналгетик дарыуҙарға ҡағылышлы)

**аналгези́я** аналгезия (1. ауыртыу тойғоһон ныҡ кәметеү йәки бөтөрөү; 2. ауыртыу тойғоһоноң юҡлығы)

**анале́птики** аналептиктар (вегетатив нервы системаһын, ҡан әйләнешен, тын алыу үҙәге эшсәнлеген яҡшырта торған дарыуҙар: кофеин, камфора һ. б.)

**ана́лиз** анализ (ауырыуҙы асыҡлау, дауалау барышында йәки санитария-гигиеник һ. б. маҡсатта үткәрелгән тикшереү; төрҙәре: *а. бактериологический* бактериологик анализ; *а. биохимический* биохимик анализ; *а. кала* (йәки тиҙәк) анализы; *а. мокроты* ҡаҡырыҡ анализы; *а. мочи* һейҙек анализы; *а. судебно-медицинский* суд-медицина анализы; *а. фармацевтический* фармацевтика анализы һ. б.)

**анализа́тор** анализатор (тышҡы-эске ҡуҙғытыуҙарҙы ҡабул итеүсе һәм баһалаусы нервы бөтөмдәренән һәм баш мейеһендә урынлашҡан нервы үҙәгенән тороусы ҡатмарлы аппарат, мәҫ., *а. слуховой* ишетеү анализаторы һ. б.)

**ана́льный** аналь (арт юлға ҡағылышлы)

**ана́мнез** анамнез (ауырыу кешенең тормошо, ауырыуы һ. б. хаҡында алынған мәғлүмәт; төрҙәре: *а. акушерский* акушерлыҡ анамнезы (буйға ҡалыуҙың нисек үтеүе хаҡында мәғлүмәттәр); *а. аллергологический* аллергологик анамнез; *а. болезни* ауырыу анамнезы; *а. жизни* тормош анамнезы; *а. наследственный* нәҫел анамнезы; *а. профессиональный* профессия анамнезы; *а. семейный* ғаилә анамнезы; *а. эпидемиологический* эпидемиологик анамнез һ. б.)

**ана́мнестический** анамнез (анамнезға ҡағылышлы)

**анаплази́я** анаплазия (күҙәнәктәрҙең биологик сифатының үҙгәреүе; шуның арҡаһында улар тиҙ ишәйәләр һәм яман шеш күҙәнәктәренә әүереләләр)

**анаса́рка** анасарка (тәндең ҙур өлөшөнөң шешенеүе)

**анастомо́з** анастомоз (эсе ҡыуыш ағзаларҙы бер-береһе менән тоташтырыу операцияһы, мәҫ., *а. кишечный* эсәк анастомозы һ. б.)

**анаткси́н** анатоксин (ағыулығы бөтөрөлгән бактерия токсины, мәҫ., *а. дифтерийный* дифтерия анатоксины һ. б.)

**ана́том** анатом (анатомия фәне белгесе)

**анатоми́рование** анатомик тикшереү

**анатоми́ческая табакерка** баш бармаҡ батынҡыһы (ҡулда)

**анатоми́ческий** анатомия, анатомик (мәҫ., анатомия кафедраһы, анатомик тикшереү)

**анато́мия** анатомия (организмдың

төҙөлөшө тураһындағы фән; төрҙәре: *а. нормальная* нормаль анатомия (һау организмды өйрәнә); *а. патологическая* патологик анатомия (ауырыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән үҙгәрештәрҙе өйрәнә); *а. пластическая* пластик анатомия (ағза-туҡымаларҙың үҙ-ара бәйләнештә урынлашыуын өйрәнә); *а. топографическая* топографик анатомия һ. б.)

**анафилакси́я** анафилаксия (кеше организмына хас булмаған аҡһымды, ҡан сывороткаһын тәнгә ҡабат-ҡабат индереүгә ҡарата булған юғары һиҙеүсәнлек: температура күтәрелә, сабыртма сыға һ. б.)

**анафилакти́ческий** анафилаксия (анафилаксияға ҡағылышлы, мәҫ., анафилаксия шогы)

**анафилактоге́н** анафилактоген (анафилаксия тыуҙырырға һәләтле аллерген)

**анаци́дный** анацид (кислотаһыҙ, мәҫ., анацид гастрит)

**анаэро́б** анаэроб (*ҡара:* **бактерия анаэробная**)

**ангидро́з** ангидроз (ауырыу һөҙөмтәһендә тир бүленмәүе)

**ангии́т** ангиит (*ҡара:* **васкулит**)

**анги́на (острый тонзиллит)** анги́на (1. тамаҡ һәм айырыуса аңҡау миндалиналарының шешеүе менән билдәләнгән инфекцион ауырыу; төрҙәре: *а. катаральная* катараль ангина (миндалиналарҙың ҡыҙарыуы, ҙурайыуы менән билдәләнгән ангина); *а. лакунарная* лакунар ангина (миндалиналар өҫтө эренләү менән билдәләнгән ангина); *а. флегмонозная* флегмоноз ангина (миндалиналар тәңгәле туҡымаһының эренләп шешеүе менән билдәләнгән ангина); *а. фолликулярная* фолликуляр ангина (миндалиналарҙағы лимфатик төйөрҙәрҙең эренләп шешеүе менән билдәләнгән ангина); 2. ҡайһы бер ауырыуҙар билдәһе, мәҫ., *а. дифтерийная* дифтерия ангинаһы; *а. сифилитическая* сифилис ангинаһы һ. б.)

**ангиогра́фия** ангиография (ҡан тамырҙарына контраст матдә индереп үткәрелгән рентгенография)

**ангиокардиогра́фия** ангиокардиография (йөрәк ҡыуышлыҡтарына һәм эре магистраль ҡан тамырҙарына контраст матдә индереп үткәрелгән рентгенография)

**ангиокерато́ма** ангиокератома (бер төркөм тире ауырыуҙарының исеме)

**ангиоло́гия** ангиология (йөрәк, ҡан һәм лимфа тамырҙары хаҡындағы ғилем)

**ангио́ма** ангиома (яңы ҡан, лимфа тамырҙарының үҫеүенән һәм уларҙың киңәйеүенән барлыҡҡа килгән ябай шеш)

**ангиомато́з** ангиоматоз (ҡан тамырҙарының саманан тыш үҫеүе менән характерлы бер төркөм ауырыуҙар)

**ангионевро́з** ангионевроз (тәндең ҡапыл ағарыуы, ҡыҙарыуы, шешеүе, ойоуы һ. б. менән билдәләнгән ҡан тамыры нервыларының неврозы)

**ангиопаре́з** ангиопарез (ҡан тамырҙарының тонусы төшөүе)

**ангиопати́я (вазопати́я)** ангиопатия (нервы регуляцияһының боҙолоуы сәбәпле барлыҡҡа килгән, ҡан тамырҙары тонусы төшөүе менән характерлы бер төркөм ауырыу күренештәре)

**ангиопатоло́гия** ангиопатология (ҡан тамырҙары ауырыуҙары хаҡындағы ғилем)

**ангиопульмонogra̕фия** ангиопульмонография (ангиопневмография) (ҡан әйләнешенең кесе урауына үткәреләторған рентгенография)

**ангиосарко́ма** ангиосаркома (тамырҙарҙан сыҡҡан саркома шеше; *ҡара:* **саркома)**

**ангиосклеро́з** ангиосклероз (тоташтырғыс туҡыма үҫеше һөҙөмтәһендә ҡан тамырҙарының ауырыу характерында ҡалынайыуы һәм тығыҙланыуы)

**ангиоспа́зм** ангиоспазм (ваҡ артериялар һәм капиллярҙар спазмаһы; *ҡара:* **спазм)**

**ангиостронгилоидо́з** ангиостронгилоидоз (нематодоз төркөмөнә ингән бер төркөм гельминтоз ауырыуҙары; *ҡара:* **нематодоз)**

**ангиохолецисти́т** *ҡара:* **холецистохолангит**

**ангиохоли́т** *ҡара:* **холангит**

**ангиоцереброгра́фия** ангиоцеребрография (баш мейеһе ҡан тамырҙарын рентген ярҙамында тикшереү)

**ангиоэндотелио́ма** ангиоэндотелиома (ҡан йәки лимфа тамырҙарынан сыҡҡан яман шештәрҙең бер төрө)

**ангиэктази́я** ангиэктазия (ҡан йәки лимфа тамырҙарының ауырыу рәүешендә тотороҡло киңәйеүе)

**андроге́ны** андрогендар (биологик сифаттары менән ир енес гормондарына оҡшаш матдәләр)

**андроло́гия** андрология (урология фәненең ирҙәрҙең һейҙек-енес ағзаларын өйрәнеүсе бүлеге)

**андрофо́бия** андрофобия (ҡатынҡыҙҙарға, сексуаль тормошҡа ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**аневри́зма** аневризма (тыумыштан йәки ауырыу сәбәпле ҡан тамырының йәки йөрәк ҡыуышлыҡтарының киңәйеүе, мәҫ., аорта аневризмаһы, йөрәк аневризмаһы)

**анеми́чный** анемия, анемиялы (анемияға ҡағылышлы)

**анеми́я** анемия (аҙ ҡанлылыҡ; төрҙәре: *а. алиментарная* алиментар анемия (аслы-туҡлы йәшәүҙән килгән аҙ ҡанлылыҡ); *а. вторичная* эҙемтәле анемия (ҡан юғалыу, ныҡ ябығыу йәки башҡа шуның кеүек сәбәптәрҙән килгән аҙ ҡанлылыҡ); *а. гемолитическая* гемолитик анемия (төрлө сәбәптәр арҡаһында ҡандың ҡыҙыл күҙәнәктәренең самаһыҙ күп тарҡалыуынан килгән аҙ ҡанлылыҡ); *а. гиперхромная* гиперхром анемия (ҡан төҫөнөң күрһәткесе юғары булған аҙ ҡанлылыҡ); *а. гипопластическая (апластическая)* гипопластик анемия (ҡан эшләп сығарыусы ҡыҙыл кимек матдәһе зарарланыуҙан килгән аҙ ҡанлылыҡ); *а. железодефицитная (гипохромная)* тимергә дефицит (гипохром) анемия (тимер етешмәүҙән килгән аҙ ҡанлылыҡ); *а. инфекционная* инфекцион анемия (ниндәйҙер йоғошло ауырыуҙан килгән аҙ ҡанлылыҡ); *а. медикаментозная* медикаментоз анемия; *а. нормохромная* нормохром анемия (ҡан төҫө күрһәткесе нормаль булған аҙ ҡанлылыҡ); *а. пернициозная (Бирмера)* пернициоз анемия ($B_{12}$ витамины етешмәүҙән килгән аҙ ҡанлылыҡ); *а. постгеморрагическая* постгеморрагик анемия (ҡан юғалтыуҙан килгән

аҙ ҡанлылыҡ); *а. постинфекционная* постинфекцион анемия (ҡайһы бер инфекцион ауырыуҙарҙан һуң барлыҡҡа килгән аҙ ҡанлылыҡ); *а. профессиональная* профессиональ аҙ ҡанлылыҡ; *а. хроническая* хроник (дауамлы) анемия һ. б.)

**анергия** анергия (1. теләһә ниндәй ҡуҙғытыуға ҡарамаҫтан, организмдан яуап реакцияһының булмауы; 2. психиатрияла: кешелә психик, хәрәкәт һәм һөйләшеү активлығының ҡырҡа түбәнәйеүе йәки бөтөнләй юҡҡа сығыуы)

**анестезиолог** анестезиолог (врач, анестезиология белгесе)

**анестезиология** анестезиология (клиник медицинаның ауыртыуҙы юҡ итеү мәсьәләләрен, хирургик операция һәм уны эшләгәндән һуңғы дәүерҙә организмдың мөһим йәшәү процестарын өйрәнеүсе тармағы)

**анестезия** анестезия (1. ауырыу сәбәпле тәнгә тейгәнде, температураны, ауыртыуҙы тоймау; 2. ауыртыуҙы баҫа торған методтарҙың (мәҫ., хирургик операция ваҡытында) дөйөм исеме; төрҙәре: *а. внутриартериальная* артериаль (артерия аша) анестезия; *а. внутривенозная* веноз (вена аша) анестезия; *а. ингаляционная* ингаляцион анестезия (ауыртыуҙы баҫа торған дарыу һулатып бирелә); *а. межреберная* ҡабырға-ара анестезия; *а. местная* сикләнгән анестезия (тәндең айырым урынын «туңдырыу»); *а. общая (ҡара:* **наркоз**); *а. проводниковая* нерв буйлап анестезия; *а. ректальная* ректаль анестезия (тура эсәк аша ауыртыуҙы баҫа торған дарыуҙы ебәреү); *а. спинно-мозговая* арҡа мейеһе анестезияһы (ауыртыуҙы баҫа торған дарыуҙы арҡа мейеһе каналына ебәреү һ. б.)

**анестетики** анестетиктар (ауыртыуҙы баҫа торған дарыуҙар, улар рәтенә ғәҙәттә аналгетик һәм наркоз дарыуҙары ла инә)

**анизокория** анизокория (күҙ ҡараларының төрлө күләмдә киңәйгәнлеге)

**анизометропия** анизометропия (уң һәм һул күҙҙәр рефракцияһының төрлө булыуы; *ҡара:* **рефракция глаза**)

**анизорефлексия** анизорефлексия (кәүҙәнең уң һәм һул өлөшөндә рефлекстарҙың төрлө булыуы; *ҡара:* **рефлекс**)

**анизоцитоз** анизоцитоз (күпселектә ҡыҙыл ҡан күҙәнәктәренең төрлө ҙурлыҡта булыуы)

**анис** әнис (емеше эс йомшартҡыс, ҡаҡырыҡ сығарғыс дарыу бирә торған үлән)

**анкилоз** анкилоз (ауырыу йәки хирургик операция һөҙөмтәһендә быуын хәрәкәтсәнлегенең юғалыуы)

**анкилостомидозы** анкилостомидоздар (анкилостомидтар йоғоуҙан булған бер төркөм гельминтоз ауырыуҙар)

**анкилостомиды** анкилостомидтар (нематодтар рәтендәге бер төркөм паразит селәүҙәр)

**аноксемия** *ҡара:* **гипоксемия**

**аноксия** *ҡара:* **гипоксия**

**аномалия развития (организма)** үҫеш аномалияһы (организмдың эмбриональ үҫешенең дөрөҫ бармауынан барлыҡҡа килгән физик йәки функциональ кәмселек, уның ауыр формалары порок (ғәриплек) тип атала)

**анонимография́** анонимография (ауырыу рәүешендә аноним хаттар яҙыуға ынтылыу)

**анонихи́я** анонихия (тырнаҡ пластинкаларының юҡлығы)

**анорекси́я** анорексия (ауырыу сәбәпле ашау теләгенең булмауы)

**анорхи́я (анорхизм)** анорхия (енес биҙҙәр — күкәйҙәрҙең тыумыштан юҡлығы)

**аноскопи́я** аноскопия (махсус көҙгө ярҙамында арт юлды тикшереү)

**аносми́я** аносмия (еҫте тоймау)

**ано́фелес** анофелес (тапма ауырыуын, филяриатоз исемле гельминтозды таратыусы серәкәй, бер нисә төрө бар)

**антагони́зм** *(мед.)* антагонизм (ҡапма-ҡаршылыҡ; бер ағзаның икенсе ағза тәьҫиренә ҡаршы тороуы; бер дарыуҙың икенсе дарыуҙың көсөн бөтөрөүе һ. б., мәҫ., дарыуҙар антагонизмы, микробтар антагонизмы)

**антената́льный** антенаталь (бәпесләгәнгә тиклем ваҡытҡа ҡағылышлы)

**антибактериа́льный** антибактериаль (мәҫ., антибактериаль препарат)

**антибио́тики** антибиотиктар (хайуан, үҫемлек һәм микробтарҙа барлыҡҡа килеп, микробтар һәм ҡайһы бер шеш күҙәнәктәре үҫешен туҡтатыу сифатына эйә булған матдәләр, мәҫ., пенициллин, стрептомицин, тетрациклин һ. б.)

**антибиотикопрофила́ктика** антибиотикопрофилактика (ҡайһы бер йоғошло ауырыуҙарҙы булдырмаҫ өсөн антибиотиктар ҡулланыу)

**антибиотикорезисте́нтность** антибиотикорезистентлыҡ (ҡайһы бер микроб төрҙәренең бер йәки бер нисә антибиотикка бирешмәүсәнлеге)

**антибиотикотерапи́я** антибиотикотерапия (антибиотиктар менән дауалау)

**антиви́рус** антивирус (1. микробтар тәнендә барлыҡҡа килеп, микробтар тарҡалғанда бүленгән матдә; 2. ҡайһы бер йоғошло ауырыуҙарҙан ҡулланылыусы бактериаль препарат)

**антивитами́ны** антивитаминдар (химик төҙөлөшө менән витаминдарға оҡшаш, әммә уларҙың үҙләштерелеүенә ҡаршы тороусы матдәләр)

**антигельми́нтный** антигельминт (паразит селәүҙәргә ҡаршы тороусы, мәҫ., антигельминт дарыу)

**антигеморраги́ческий** антигеморрагик (ҡанауға, ҡан юғалыуға ҡаршы)

**антиге́нность** антигенлыҡ (ҡайһы бер матдәләрҙең организм тарафынан иммунологик яуап тыуҙырыу һәләтлеге)

**антигенотерапи́я** антигенотерапия (антиген ярҙамында дауалау)

**антиге́ны** антигендар (хайуан, үҫемлек, микробтар тәненән сыҡҡан һәм организмға парентераль юл менән индергәндә антиесем тыуҙыра торған аҡһымлы матдәләр)

**антигормо́н** антигормон (гормондар барлыҡҡа килеүенә һәм уларҙың тәьҫиренә ҡаршы тороусы матдә)

**антидепресса́нт** антидепрессант (депрессиянан ҡулланылыусы дарыу: амитриптилин, имизин һ. б.)

**антидо́т** антидот (ағыуланғанда ағыу көсөн юҡ итергә, организмдан сығарыуға йүнәлтелгән да-

рыу, мәç., унитиол, натрий тиосульфаты һ. б.)

**антикоагулянт** антикоагулянт (ҡанды ойоуҙан һаҡлай торған дарыу)

**антимикробный** антимикроб (микробтарға ҡаршы, мәç., антимикроб препарат)

**антимутаген** антимутаген (мутаген тәьçиренә ҡаршы тороусы матдә; *ҡара:* **мутаген)**

**антипатия** антипатия (нимәгәлер күңел ятмау, ерәнеү)

**антиперистальтика** антиперистальтика (эсәк-ҡарын, һейҙек үткәргес көпшә кеүек эсе ҡыуыш ағзаларҙың ҡыçылыу тулҡынының ғәҙәти яҡҡа түгел, ҡапма-ҡаршы йүнәлештә булыуы)

**антипиретики** антипиретиктар (тән эçелеген төшөрә торған дарыуҙар, мәç., аспирин һ. б.)

**антирабический** антирабиес (ҡотороу ауырыуына ҡаршы, мәç., антирабиес вакцинаһы)

**антирахитический** антирахит (рахитҡа ҡаршы; *ҡара:* **рахит)**

**антирезус-агглютинин** антирезус-агглютинин (агглютининдарҙың бер төрө; *ҡара:* **резус-антитело)**

**антисанитария** антисанитария (санитария талаптарының боҙолоуы)

**антисептика** антисептика (яра-йәрәхәттә йәки организмдағы берәй патологик урында булған микробтарҙы комплекслы юҡ итеү сараһы)

**антисептики** антисептиктар (йәки антисептик препараттар, мәç., йод, ляпис һ. б.)

**антисептический** антисептик (антисептикаға ҡағылышлы, мәç., антисептик дарыу)

**антисклеротический** антисклеротик (склерозға ҡаршы, мәç., антисклеротик дарыу)

**антиспазматический** антиспазматик (спазмды юҡ итеүгә ҡағылышлы; *ҡара:* **спазм)**

**антитела** антиесемдәр (микроорганизмдарға, улар бүлгән токсиндарға ҡаршы тороп, ҡан плазмаһындағы организмды һаҡлаусы иммуноглобулиндар, уларҙың аутоантиесемдәр тигән төрҙәре киреһенсә ҡайһы бер ауырыу сығанағы булып тора; *ҡара:* **аутоантитела)**

**антителогенез** антиесемдәр генезы (антиесемдәрҙең барлыҡҡа килеүе)

**антитоксин** антитоксин (бактериялар токсиндарына (ағыуына) ҡаршы тороусы антиесем)

**антитоксический** антитоксин (токсиндарға ҡаршы)

**антитромбин** антитромбин (организмда барлыҡҡа килеп, ҡан ойоуына ҡаршы торған матдә)

**антиферменты** антиферменттар (ҡайһы бер ферменттарҙың көсөн кәметеүсе дарыу матдәләре)

**антифоны (противошумы)** антифондар (шау-шыуға ҡаршы ҡулланылыусы прибор)

**антракоз** антракоз (үпкә туҡымаһына күмер туҙаны ултырыуҙан килгән пневмокониоз ауырыуы; *ҡара:* **пневмокониоз)**

**антрасиликоз** *ҡара:* **силикатоантракоз**

**антрит** антрит (сикә һөйәге артҡы үçентеһенең шешеүе)

**антропометр** антропометр (антропометрия үткәреү өсөн ҡулланыла торған прибор)

**антропометрия** антропометрия (кеше тәнен өйрәнеү буйынса төп ысул: ауырлыҡты, кәүҙә һ. б. нәмәләрҙе билдәләү)

**антропонóзы** антропоноздар (кешегә генә хас булған инфекцион ауырыуҙар)

**антропофобúя** антропофобия (кешеләр менән аралашыуға ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**антропотоксúны** антропотоксиндар (организм эшсәнлегенән барлыҡҡа килгән ағыулы матдәләр: ацетон, аммиак, фенолдар, күмер әселе газ һ. б.)

**анурúя** анурия (етди ауырыу күренеше: һейҙек ҡыуығына бөйөрҙәрҙән һейҙек килмәүе)

**анэнцефалúя** анэнцефалия (тыумыштан баш мейеһенең юҡлығы)

**аóрта** аорта (йөрәктән сыҡҡан иң йыуан артерия тамыры)

**аорталгúя** аорталгия (аорта тамыры ауырыуынан килгән күкрәк тәңгәлендәге ауыртыу)

**аортúт** аортит (аорта тамыры көбөнөң шешеүе; төрҙәре күп: аллергик аортит, инфекцион аортит, ревматизм аортиты, сифилис аортиты һ. б.)

**аортогрáфия** аортография (аортаны, контраст матдә индереп, рентгенологик тикшереү)

**апáтия** апатия (дәртһеҙлек, күңел төшөнкөлөгө)

**апатогéнный** апатоген (сирләтергә һәләте булмаған, мәҫ., апатоген бактерия)

**апексогрáфия** апексография (йөрәк эшсәнлеген тикшереү ысулдарының береһе: йөрәк осо типкән ерҙәге күкрәк һелкенеүен билдәләү)

**апирéксия** апирексия (биҙгәк тотҡан арала тәндең эҫелеге төшкән ваҡыт)

**апитерапúя** апитерапия (бал ҡорто ағыуын һәм унан яһалған дарыу препараттарын дауалау маҡсатында ҡулланыу)

**апифобúя** апифобия (бал ҡорто һәм һағыҙаҡтарға ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**аплáзия (агенезия)** аплазия (тыумыштан килгән ғәриплек: берәй ағзаның йәки уның өлөшөнөң булмауы, мәҫ., бөйөр аплазияһы)

**апнóэ** апноэ (ваҡытлы рәүештә һулыш алыуҙың туҡтауы)

**апоневрóз** апоневроз (киң яҫы тарамыш, мәҫ., *а. ладонный* ус апоневрозы)

**апоплéксия** апоплексия (ниндәй ҙә булһа ағзала тиҙ үтеүсе ҡан һауыу, мәҫ., *а. головного* мозга баш мейеһе апоплексияһы йәки инсульт)

**апоплектифóрмный** апоплектиформ (апоплексияға оҡшаш)

**апоплектúческий** апоплексия (апоплексияға ҡағылышлы)

**аппарáт** аппарат (1. медицинала ҡулланылыусы прибор, ҡорамал, мәҫ., *а. дезинфекционный* дезинфекция аппараты; *а. наркозный* наркоз аппараты; *а. ортопедический* ортопедия аппараты һ. б.; 2. организмда бер үк йүнәлештәге эште башҡарыусы ағзалар төркөмө, мәҫ., *а. дыхательный* тын алыу аппараты; *а. мочеполовой* һейҙек-енес аппараты һ. б.)

**аппéндикс** аппендикс (һуҡыр эсәктең селәү (һымаҡ) үҫентеһе)

**аппендикулярный** аппендикуляр (һуҡыр эсәк үҫентеһенә ҡағылышлы)

**аппендицúт** аппендицит (һуҡыр эсәктәге селәү үҫентеһенең шешеүе; төрҙәре: *а. гангренозный* гангреноз аппендицит *(ҡара:* **гангрена)**; *а. гнойный* эренле аппендицит; *а. острый* киҫкен аппендицит; *а. перфоративный*

перфоратив аппендицит (һуҡыр эсәк үҫентеһенең тишелеүе); *а. подострый* ярым киҫкен аппендицит; *а. флегмонозный* флегмоноз аппендицит *(ҡара:* **флегмона**); *а. хронический* хроник (дауамлы) аппендицит һ. б.)

**аппендэктоми́я** аппендэктомия (һуҡыр эсәк үҫентеһен алыу операцияһы)

**аппети́т** аппетит (ашау теләге)

**аппети́тный** аппетит уятҡыс

**аппликáция** аппликация (физиотерапевтик дауалауҙа ҡулланылыусы йылытыу процедураһы, мәҫ., парафин аппликацияһы, шифалы ләм аппликацияһы)

**апрáксия** апраксия (баш мейеһенең ауырыуы һөҙөмтәһендә ғәҙәттәге эш-хәрәкәткә һәләтлекте юғалтыу)

**аптéка** аптека, дарыухана

**аптéкарь** аптекарь (аптекала эшләүсе)

**аптекоуправлéние** аптекалар идаралығы

**аптéчка** аптечка (1. тәүге ярҙам өсөн әҙерләнгән дарыуҙар, мәҫ., *а. индивидуальная* индивидуаль аптечка (һуғышсыларға бирелә); 2. шул дарыуҙар булған шкаф, ҡумта, мәҫ., *а. домашняя* йорт аптечкаһы

**арахноиди́т** арахноидит (баш йәки арҡа мейеһенең үрмәксе шекәрәһе шешеүе)

**арбови́русы** арбовирустар (ауырытырға һәләтле бер төркөм вирустар)

**аргирóз** аргироз (организмдың теге йәки был еренең көмөш тупланыуҙан ҡарайыуы)

**ареакти́вность иммунологическая** иммунологик ареактивлыҡ (антиген менән тәьҫир итеүгә ҡарамаҫтан, иммунитеттың барлыҡҡа килмәүе)

**арени́я** арения (тыуыштан бөйөрҙөң юҡлығы)

**ареновúрусы** ареновирустар (бер төркөм эсендә рибонуклеин кислотаһы (РНК) булған вирустар, ҡайһылары кешелә ауырыу тыуҙырырға һәләтле)

**ареóл сосочковый** имсәк ҡараһы

**ареоли́т** ареолит (имсәк башы тирәһенең шешеүе)

**аретотерапи́я** аретотерапия (социаль-этик тәрбиә биреү рәүешендәге неврозлдарҙы дауалау ысулы — психотерапияның бер төрө)

**арефлекси́я** арефлексия (бер йәки бер нисә рефлекстың булмауы)

**арибофлавинóз** арибофлавиноз (ашамлыҡта рибофлавин витамины етешмәгәнлектән йәки уның үҙләштерелеүе боҙолғанлыҡтан килгән авитаминоз ауырыуы)

**аритми́чный** аритмиялы (ритм юҡлығы, мәҫ., аритмиялы пульс)

**аритми́я (сердца)** аритмия (йөрәк ритмының боҙолоуы; төрҙәре: *а. дыхательная* йөрәктең тын алыу аритмияһы); *а. мерцательная* йөрәктең тирбәлеү аритмияһы); *а. пароксизмальная* йөрәктең пароксизмаль аритмияһы (ҡапыл башланған һәм ҡапыл туҡтай торған аритмия); *а. синусовая* йөрәктең синус аритмияһы (вагус нервы эшсәнлегенән килә) һ. б.

**аромáтные вóды** ароматһыуҙар (дарыуҙың тәмен яҡшыртыу өсөн ҡулланыла)

**артерии́т** артериит (артерия көбөнөң шешеүе)

**артериогрáфия** артериография (артерия тамырына контраст матдә

индереп рентгенологик тикшереү үткәреү)

**артерио́ла** артериола (ваҡ артерия тамырҙары)

**артериоли́т** артериолит (артериолар шешеүе)

**артерионекро́з** артерионекроз (артериолиттың некроз менән үтеүе)

**артерионефросклеро́з** артерионефросклероз (бөйөрҙәрҙең эске артерияларында атеросклероз күренеше булыуы)

**артериопьезогра́фия** артериопьезография (артериаль пульсты яҙып алыу рәүешендә өйрәнеү)

**артериосклеро́з** артериосклероз (артериялар көбөнөң ҡалынайыуы һәм тығыҙланып ҡатыуы)

**артериоспа́зм** артериоспазм (артерия тамыры спазмаһы; *ҡара:* **спазм)**

**артериостено́з** артериостеноз (артерия тамыры стенозы; *ҡара:* **стеноз)**

**артериэктази́я** артериэктазия (артерия тамыры эктазияһы; *ҡара:* **эктазия)**

**артери́я (артерии)** артерия (йөрәктән сыҡҡан ҡанды ағза-туҡымаларға таратыусы ҡан тамыры, мәҫ., *а. бедренная* бот артерияһы; *а. лучевая* терһәк ҡушары артерияһы; *а. малоберцовая* сираҡ ҡушары артерияһы һ. б.)

**артралги́я** артралгия (бер йәки бер нисә быуындың ауыртыуы)

**артри́т** артрит (быуындың йәки уның берәй еренең шешеүе; төрҙәре: *а. аллергический* аллергик артрит; *а. бруцеллезный* бруцеллез *(ҡара:* **бруцеллез)** артриты; *а. гнойный* эренле артрит; *а. гонорейный* гонорея артриты *(ҡара:* **гонорея)**; *а. деформирующий* деформациялау артриты (быуын формаһының юғалыуына килтергән быуын шешеүе); *а. подагрический* подагра артриты; *а. ревматоидный* ревматоид артрит (коллагеноз рәтенә ингән дауамлы быуындар ауырыуы; *ҡара:* **коллагеноз**; *а. сифилитический* сифилис артриты; *а. скорбутический* скорбут (зәңге) артриты (С витамины етешмәүҙән быуындар шешеүе); *а. травматический* травма артриты; *а. туберкулезный* туберкулез артриты һ. б.)

**артрогра́фия** артрография (рентгенологик ысул менән быуынды тикшереү)

**артроде́з** артродез (быуынды тулыһынса хәрәкәтһеҙләү операцияһы)

**артро́з** артроз (быуындың кимерсәк туҡымаһы дегенератив үҙгәреүе менән характерлы бер төркөм быуын ауырыуҙары)

**артро́лиз** артролиз (быуынды хәрәкәтсел итеү операцияһы)

**артроло́гия** артрология (медицинаның быуын сирҙәрен, уларҙы дауалау һәм иҫкәртеү юлдарын өйрәнеүсе тармағы)

**артропати́я** артропатия (быуындың дистрофия ауырыуҙарының дөйөм исеме)

**артропла́стика** артропластика (ҡатҡан быуынды хәрәкәткә килтереү өсөн яһалған пластик операция)

**архитекто́ника** архитектоника (теге йәки был ағза төҙөлөшө тураһындағы ғилем, мәҫ., *а. головного мозга* баш мейеһе архитектоникаһы)

**артросклеро́з** артросклероз (быуын ҡабы туҡымаларының склерозы; *ҡара:* **склероз)**

**артротомия** артротомия (быуынды ярыу операцияһы)

**артрэктомия** артрэктомия (быуынды алыу операцияһы)

**асбестоз** асбестоз (үпкә туҡымаһына дауамлы рәүештә асбест туҙаны ултырыуҙан килгән пневмокониоз ауырыуы; *ҡара:* **пневмокониоз**)

**асексуальность** асексуаллек (кешелә сексуаль ҡыҙыҡһыныуҙың юҡлығы)

**асептика** асептика (хирургик операция, бәй һалыу, башҡа дауалау һәм диагностик эштәрҙе башҡарғанда организмды микробтарҙан һаҡлау саралары)

**асептический** асептик (асептикаға ҡағылышлы, мәҫ., асептик ысул)

**асимптомный** асимптом (*ҡара:* **бессимптомный**)

**асинергия** асинергия (ауырыу сәбәпле мускулдарҙың берҙәм эшләмәүе)

**асистолия** асистолия (йөрәк эшсәнлегенең тулыһынса туҡтауы)

**аскарида** аскарида, ҡыҫал (кеше, хайуан эсенә эйәләшеүсән паразит йомро селәүе)

**аскаридоз** аскаридоз (аскарида йоғоуҙан килгән эс ауыртыу, күңел уйнау һ. б. үҙгәрештәр менән үтеүсе гельминтоз ауырыуы)

**аспергиллез** аспергиллез (паразит бәшмәк йоғоуҙан килгән етди бәшмәк ауырыуы)

**аспергиллотоксикоз** аспергиллотоксикоз (үңәҙ бәшмәктәре менән зарарланған аҙыҡ менән ағыуланыуҙарҙың дөйөм исеме)

**аспермати́зм** асперматизм (енси бәйләнеш аҙағында эякуляция булмауы; *ҡара:* **эякуляция**)

**аспермия (азооспермия)** аспермия (ир орлоғонда сперматозоидтарҙың юҡлығы)

**аспирация** аспирация (һулыш алғанда тын юлдарына ят есемдең кереүе)

**ассенизация** ассенизация (теге йәки был урында гигиеник шарттарҙы яҡшыртыу, ташландыҡтарҙан таҙартыу, зарарһыҙлау сараһы)

**ассимиляция** ассимиляциялау (ашалған ашамлыҡтың организм тарафынан үҙләштерелеүе)

**ассистент** *(мед.)* ассистент (1. ғилми исем; 2. ярҙамсы, мәҫ., операция ваҡытында хирургка ярҙам күрһәтеүсе)

**ассоциация (в психологии)** ассоциация (билдәле шарттарҙа психик күренештәрҙең, хис-тойғоларҙың үҙ-ара бәйләнештә булыуы)

**астазия** астазия (нервы ауырыуы һөҙөмтәһендә баҫып тороу һәләтлегенең юғалыуы)

**астеник** астеник (*ҡара:* **конституция астеническая**)

**астенический** астения, астеник (астенияға ҡағылышлы)

**астения** астения (тиҙ арыу, кәйефтең үҙгәреүсәнлеге, тиҙ ярһып барыу, хәлһеҙлек, тиҙ илап барыу һ. б. менән характерлы һаулыҡ торошо)

**астенозооспермия** астенозооспермия (эякулятта сперматозоидтарҙың аҙ булыуы һәм уларҙың хәрәкәтсәнлегенең түбәнәйеүе; *ҡара:* **эякулят**)

**астеноспермия** астеноспермия (ир орлоғонда сперматозоидтар хәрәкәтсәнлегенең түбәнәйеүе)

**астигматизм** астигматизм (күҙҙең мөгөҙсә ҡатламы йәки күҙ яҫмығының төрлө меридиандарында яҡтылыҡ нурҙары һыны-

лышының төрлө булыуынан килгән күреү кәмселеге; төрҙәре: *а. гиперметропический* гиперметропия астигматизмы; *ҡара:* **дальнозоркость)**; *а. приобретенный* тормоштан килгән астигматизм; *а. роговичный* күҙ мөгөҙсәһе астигматизмы; *а. физиологический* физиологик астигматизм; *а. хрусталиковый* күҙ яҫмығы астигматизмы)

**астигма́тик** *(разг.)* астигматик (астигматизмы булған кеше)

**а́стма** астма (төрлө сәбәптәрҙән килгән ҡапыл тын бөтөү өйәнәктәренең дөйөм исеме; төрҙәре: *а. аллергическая* аллергия астмаһы *(ҡара:* **аллергия**; *а. бронхиальная* бронхиаль астма (дауамлы үпкә ауырыуы); *а. сердечная* йөрәк астмаһы (йөрәктең дауамлы етешмәүсәнлеге (ҡыҫынҡылығы) һөҙөмтәһендә булған астма)

**астмати́ческий** астма, асматик (мәҫ., *астматический приступ* астма өйәнәге; *астматический больной* астматик ауырыу)

**астрофоби́я** астрофобия (йондоҙло күккә, йондоҙҙарға ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**асфикси́я** асфиксия (быуылыу)

**ата́ка** *(мед.)* атака (өйәнәк, мәҫ., *а. ревматическая* ревматизм атакаһы)

**атакси́я** атаксия (ҡайһы бер нервы ауырыуҙары һөҙөмтәһендә бер төркөм мускулдарҙың бер юлы ҡыҫҡармауы)

**атаракси́я** атараксия (психотроп дарыуҙар ҡабул иткәндән һуң психик сирлеләргә сабырлыҡ килеү; ҡурҡыу, борсолоу һымаҡ күренештәрҙән ҡотолоу)

**ателекта́з** ателектаз (үпкә ҡыуыҡсаларының һауаһыҙ ҡалыуы һәм үпкә туҡымаһының бөрөшөүе)

**атерокальцино́з** атерокальциноз (атеросклероз төйөрсәләренең эзбизләнеүе; *ҡара:* **атеросклероз)**

**атеро́ма** атерома (тире май биҙендәге май сығарыу юлының тығылыуынан килгән шеш)

**атермато́з** атероматоз (артериялар көбөнөң эске ҡатламында холестерин, эзбиз тоҙҙары тупланыуҙан килгән ауырыу)

**атеросклеро́з** атеросклероз (1. артерия көбөндә, нигеҙҙә, холестерин тупланыуы һәм артерия көбөнөң ҡатыуы менән билдәләнгән хроник ауырыу; 2. *а. облитерирующий* облитерациялы атеросклероз (артерияларҙың ныҡ тарайыуы менән характерлы атеросклероз)

**атеросклероти́ческий** атеросклероз, атеросклеротик (атеросклерозға ҡағылышлы)

**атето́з** атетоз (баш мейеһенең стриопаллидар системаһы зарланыу һөҙөмтәһендә ғәҙәттә аяҡ-ҡул бармаҡтарының тартышыуы)

**атипи́ческий** атипик (норманан тайпылыу, мәҫ., атипик микроб)

**атирео́з** атиреоз (тыумыштан ҡалҡан биҙенең юҡлығы)

**атла́нт** атлант (муйындың иң өҫкө умыртҡаһы)

**атле́т** атлет (1. физик яҡтан таҙа, ныҡ, көслө кеше; 2. атлетика менән шөғөлләнеүсе)

**а́томы мече́ные** тамғалы атомдар (медицинала диагноз ҡуйыу, дауалау өсөн ҡулланыла торған радиоактив атомдар, мәҫ., радиоактив йод)

**атони́ческий** атония, атоник (атонияға ҡағылышлы)

**атони́я** атония (ағза-туҡыма тону-

сының юҡлығы: йомшаҡ булыуы, һығылмалылығының кәмеүе, мәҫ., аналыҡ атонияһы, мускулдар атонияһы)

**атопи́я** атопия (нигеҙҙә, нәҫелдән килеүсе аллергик ауырыуҙарҙың дөйөм исеме)

**атрези́я** атрезия (организмдың ҡайһы бер тишек-көпшәле ағзаларының тыумыштан йәки ауырыуҙан һуң бөтәшеүе, мәҫ., аналыҡ атрезияһы, арт юл атрезияһы, ҡыҙыл үңәс атрезияһы)

**атрени́рованность** физик күнекмәгәнлек

**атрепси́я** атрепсия (имсәк баланы дөрөҫ ашатмауҙан килгән бик етди матдәләр алмашыныу ауырыуы)

**атрофи́рованный** атрофияланган (атрофияға ҡағылышлы; *ҡара:* **атрофия)**

**атрофи́ческий** атрофик, атрофия (атрофияға ҡағылышлы, мәҫ., *атрофический процесс* атрофия процесы)

**атрофи́я** атрофия (1. ағза-туҡыманың йәки уның өлөштәренең ауырыуы йә уларҙың эшһеҙлеге һөҙөмтәһендә күләм яғынан кәмеүе, мәҫ., *а. глазного яблока* күҙ алмаһы атрофияһы; *а. мышц* мускулдар атрофияһы; *а. патологическая* патологик атрофия (ауырыу-имгәнеүгә бәйле атрофия); *а. печени острая* бауырҙың киҫкен атрофияһы (үтә етди ауырыу күренеше); *а. старческая* ҡартлыҡ атрофияһы; *а. физиологическая* физиологик атрофия (кешенең йәшенә бәйле атрофия)

**атрофодерми́я** атрофодермия (тире атрофияһы менән үтеүсе бер төркөм ауырыуҙар)

**аттенуа́ция** аттенуация (йоғошло ауырыу тыуҙырыусы микробтарҙың йоғошлолоғон, ағыулылығын яһалма юл менән тотороҡло түбәнәйтеү һәм үҙгәртеү)

**аттеста́ция (врача)** врач аттестацияһы (белгес-врачтың квалификация кимәлен билдәләү һәм теге йәки был квалификацион категория биреү)

**АТФ** АТФ *(ҡара:* **кислота аденозинтрифосфорная)**

**аудиогра́мма** аудиограмма (ишетеү һәләтлегенең график һүрәте)

**аудиоло́гия** аудиология (оториноларингологияның ишетеү һәләтлеген һәм уның боҙолоуын физик, физиологик, психологик һәм социаль аспекттарҙа өйрәнеүсе тармағы)

**а́ура** аура (эпилепсия, истерия һымаҡ ауырыуҙар булғанда ауырыу быуманының башланыуын алдан һиҙенеү)

**аудиометри́я** аудиометрия (аудиометр приборы ярҙамында ишетеү һәләтлеген билдәләү)

**аудиофо́н** аудиофон (ишетеү аппаратының бер төрө)

**аурикулотерапи́я** аурикулотерапия (ҡолаҡ япрағының актив нөктәләренә үткәрелгән рефлексотерапия; *ҡара:* **рефлексотерапия)**

**аускульта́ция** аускультация (эске ағзаларҙың эшсәнлеген тыңлап тикшереү, мәҫ., *а. сердца* йөрәк аускультацияһы; *а. легких* үпкә аускультацияһы)

**аути́зм** аутизм (психик һаулыҡтың, тышҡы донъя менән ҡыҙыҡһынмайынса, тик үҙенең эске кисерештә йәшәүе менән характерлы ҡаҡшауы)

**аутоаллерге́н** аутоаллерген (организмдың үҙендә барлыҡҡа

килгән аллерген, аутоаллергик ауырыу булғанда күҙәтелә)

**аутоаллергиза́ция** аутоаллергизация (организмдың үҙ туҡымаларында барлыҡҡа килгән аутоаллергиндарға ҡаршы һиҙеүсәнлегенең көсәйеүе)

**аутоаллерги́я** аутоаллергия (организмда үҙ аҡһымдарына ҡаршы барлыҡҡа килгән аллергия)

**аутоантиге́ны** аутоантигендар (сирле күренеш; ағза-туҡыма күҙәнәктәренең антиген сифатын алыуы)

**аутоантитела́** аутоантиесемдәр (сирле күренеш; аутоантигендарға ҡаршы барлыҡҡа килгән антиесемдәр)

**аутовакци́на** аутовакцина (сирле кеше организмындағы микробтарҙан әҙерләнгән, ауырыуҙы асыҡлау һәм дауалау өсөн ҡулланылған вакцина)

**аутогемотерапи́я** аутогемотерапия (ауырыу кешене үҙ ҡаны менән укол яһап дауалау)

**аутогемотрансфу́зия** аутогемотрансфузия (сирле кешенән операцияға тиклем (бер нисә көн элек) алынған ҡанды шул уҡ кешегә ебәреү)

**аутокератопла́стика** аутокератопластика (ауырыуҙың үҙенең күҙ мөгөҙсәһе ярҙамында кератопластика операцияһы яһау; *ҡара:* **кератопластика**)

**аутокро́вь** аутоҡан (ауырыу кешенең үҙ ҡаны үҙен дауалау өсөн ҡулланыла, мәҫ., аутогемотерапия өсөн)

**аутопиотерапи́я** аутопиотерапия (сирлелә ниндәйҙер эренләү ауырыуы булғанда, уның үҙ эренен үҙенә ҡаршы ҡулланыу рәүешендә булдырылған иммунотерапия; *ҡара:* **иммунотерапия**)

**аутогипно́з** аутогипноз (үҙеңдең ихтыяр көсөң менән үҙеңә гипноз йоҡоһо булдырыу)

**аутоинокуля́ция** аутоинокуляция (тәнгә эләккән йоғоштоң тәндең бер еренән икенсе еренә күсеүе)

**аутоинтоксика́ция** аутоинтоксикация (организмдағы матдәләр алмашыныуынан барлыҡҡа килгән зарарлы ҡалдыҡтар менән ағыуланыу)

**аутоинфе́кция** аутоинфекция (кешенең үҙендәге аҙ вирулентлы микробтарҙан ауырыуға һабышыуы)

**ауто́лиз** аутолиз (кешенең үҙ ферменттары тәьҫирендә туҡыма күҙәнәктәренең тарҡалыуы)

**аутопла́стика** аутопластика (төҙәкләндереү хирургияһының тармағы: күсереү операцияһы өсөн ауырыуҙың үҙ ағза-туҡымалары ҡулланыла)

**аутопси́я** аутопсия (мәйетте ярып тикшереү)

**аутосенсибилиза́ция** *ҡара:* **аутоаллергизация**

**аутосеротерапи́я** аутосеротерапия (ауырыу кешене үҙ ҡан сыворотҡаһы йәки сероз шыйыҡсаһы менән укол яһап дауалау)

**аутосугге́стия** аутосуггестия (*ҡара:* **самовнушаемость**)

**аутотрансплента́ция** аутотрансплантация (бер үк организм эсендә булдырылған үҙ ағза-туҡымаһын күсереү операцияһы)

**аутотре́нинг** аутотренинг (*ҡара:* **тренинг аутогенный**)

**аутофло́ра** аутофлора (организмға эйәләшкән бөтә микроорганизмдарҙың берғәлеге)

**аутофоби́я** аутофобия (яңғыҙлыҡ-

ҡа ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**афазия** афазия (баш мейе ауырыуы һөҙөмтәһендә тулыһынса йәки яртылаш телдән яҙыу)

**афакия** афакия (тыумыштан, ауырыуҙан йәки операция һөҙөмтәһендә күҙ яҫмығының булмауы)

**афония** афония (тауыштан яҙыу — тик бышылдап ҡына һөйләшеп була)

**афтоз** афтоз (тиресә ҡатламдарҙа күп һанда ваҡ сей яра-йәрәхәт барлыҡҡа килеү менән характерланған ауырыуҙарҙың дөйөм исеме)

**афты** афтылар (тиресә ҡатламына сыҡҡан ваҡ сей яра-йәрәхәт)

**аффект (в психиатрии)** аффект (ҡылған эшенә баһа биреү һәләтлеген юғалтыу менән билдәләнгән ныҡ ярһыу, мәҫ., *а. патологический* патологик аффект (психик һаулыҡтың ҡыҫҡа ваҡытҡа ҡаҡшауы (һ. б.)

**ахейлия** ахейлия (тыумыштан бер йәки ике ирендең дә юҡлығы)

**ахилия** ахилия 1. *а. желудка* ашҡаҙан ахилияһы (ашҡаҙан һутында аш тоҙо кислотаһы һәм пепсин ферментының юҡлығы); 2. *а. панкреатическая* панкреас ахилияһы (панкреас биҙе һутында ферменттарҙың юҡлығы)

**ахлоргидрия** ахлоргидрия (ашҡаҙан һутында химик бәйләнештә булмаған аш тоҙо кислотаһының юҡлығы)

**ахолия** ахолия (нигеҙҙә, дөйөм үт юлының тығылыуы һөҙөмтәһендә бөйән эсәгенә үт килмәүе)

**ахроматопсия (ахромазия)** ахроматопсия (һуҡырлыҡтың бер төрө: кеше төҫтө айыра алмай)

**ахромия** ахромия (тирелә уға төҫ биреүсе пигменттың (буяуҙың) юҡлығы)

**ацетилхолин** ацетилхолин (парасимпатик һәм хәрәкәт иттергес нервы бөтөмдәренән сыҡҡан химик матдә; уның ярҙамында нервы буйлап килгән ҡуҙғытыу ағза-туҡымаларға тапшырыла)

**ацетонемия** ацетонемия (ацетон (кетон) матдәләренең ҡанда булыуы)

**ацетонурия** ацетонурия (ацетон (кетон) матдәләренең һейҙек менән саманан артыҡ бүленеүе)

**ацидоз** ацидоз (ҡанда, туҡымаларҙа кислота матдәләренең артыуы)

**ацидотест** ацидотест (ашҡаҙан һуты әселеген зонд индермәйенсә тикшереү ысулы)

**аэрарий** аэрарий (аэросолярийҙың һауа ваннаһы алыу өсөн ышыҡландырылған майҙансығы)

**аэрация** *(гиг.)* аэрация (бүлмәне елләтеү)

**аэроб** аэроб *(ҡара:* **бактерия аэробная)**

**аэробиоз** аэробиоз (ирекле кислород булған шарттарҙа ғына тереклек итеү, йәшәү)

**аэробный** аэроб (мәҫ., аэроб бактериялар)

**аэрогелиотерапия** аэрогелиотерапия (һауа һәм ҡояш ваннаһы алыу рәүешендә дауалау)

**аэрогидротерапия** аэрогидротерапия (һауа ваннаһы һәм һыу процедураһы ярҙамында дауалау)

**аэродонталгия** аэродонталгия (атмосфера баҫымы үҙгәреүҙән килгән теш һыҙлауы)

**аэроионоингаляция** аэроионоингаляция (дауалау процедураһы: кире йәки ыңғай зарядлы ион-

дар менән байыҡтырылған һауаны һулатыу)

**аэропрофила́ктика** аэропрофилактика (саф һауа ярҙамында сынығыу)

**аэросоля́рий** аэросолярий (һауа һәм ҡояш ванналары алыу өсөн йыһазландырылған бүлмә йәки майҙансыҡ)

**аэротерапи́я** аэротерапия (ҡояштан ышыҡланған урында саф һауа ярҙамында дауалау)

**аэрофаги́я** аэрофагия (һауа йотоу; ашығып-ҡабаланып ашағанда була)

**аэрофоби́я** аэрофобия (үтәнән-үтә өргән елгә, асыҡ тәҙрә, форточканан килгән һауаға ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**аэрофота́рий** аэрофотарий (сынығыу һәм атмосфера һауаһы, яһалма сығанаҡтарҙан төшкән ультрафиолет нурҙар ярҙамында дауаланыу өсөн булдырылған бүлмә)

**аэроэмболи́я** аэроэмболия (һауа инеүҙән булған эмболия; *ҡара:* **эмболия)**

# Б

**ба́бка повивальная** кендек әбейе (инәһе)

**базалио́ма** базалиома (тире рағының бер төрө)

**базедови́зм** базедовизм (еңел үтелешле Базед ауырыуы менән характерлы боғаҡ; *ҡара:* **зоб)**

**базофи́л** базофил (нейтрофил лейкоциттарҙың бер төрө)

**базофили́я** базофилия (периферик ҡанда базофилдарҙың артыуы)

**базофоби́я** базофобия (йөрөүгә ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**бактериа́льный** бактериаль (мәҫ., бактериаль препарат)

**бактери́д** бактерид (тәнгә сыҡҡан инфекцион-аллергик сабыртмаларҙың дөйөмләштерелгән исеме)

**бактериеми́я** бактериемия (бактерияларҙың ваҡытлы рәүештә ҡанда булыуы)

**бактерио́лиз** бактериолиз (бактериолизин антиесеме тарафынан бактерияларҙың тарҡатылыуы)

**бактериолизи́н** бактериолизин (бактерияларҙы юҡ итә торған лизин антиесеме)

**бактериолити́ческий** бактериолитик (бактерияларҙы тарҡатыуға ҡағылышлы, мәҫ., бактериолитик дарыу)

**бактерио́лог** бактериолог (бактериология белгесе, врач)

**бактериологи́ческий** бактериологик, бактериология (мәҫ., бактериологик тикшереү, бактериология лабораторияһы)

**бактериоло́гия** бактериология (микробиологияның бактерияларҙы өйрәнә торған тармағы; төрҙәре: *б. медицинская* медицина бактериологияһы (кешеләрҙә күҙәтелә торған инфекцион ауырыуҙар тыуҙырыусы бактерияларҙы өйрәнә); *б. промышленная* промышленность бактериологияһы (промышленность шарттарында (ашамлыҡты, витаминдарҙы, антибиотик-

тарҙы эшкәрткәндә) ҡулланылыусы бактерияларҙы өйрәнә); *б. санитарная* санитария бактериологияһы (санитария йәһәтенән әһәмиәтле патоген һәм шартлы патоген микроорганизмдарҙың тирә-яҡ мөхиттә йәшәү һәләтлеген һәм улар менән көрәшеү юлдарын өйрәнә); *б. пищевая* (санитарно-пищевая) санитария-ашамлыҡ бактериологияһы (аш-һыуҙа була торған микрофлораны өйрәнә һ. б.)

**бактерионоси́тель** бактерия йөрөтөүсе (бактерия йөрөтөүсәнлеккә эйә булған кеше; *ҡара:* **бактерионосительство)**

**бактерионоси́тельство** бактерия йөрөтөүсәнлек (ауырыу билдәләре булмай тороп ниндәй ҙә булһа инфекцион ауырыу тыуҙырғыстың организмда йөрөтөләүе)

**бактериопланкто́н** бактериопланктон (тәбиғи һыу бассейндарында була торған бактерияларҙың дөйөмләштерелгән исеме)

**бактериоподо́бный** бактерияға оҡшаш

**бактериоскопи́ческий** бактериоскопия, бактериоскопик, мәҫ., бактериоскопия кабинеты, бактериоскопик тикшереү һ. б.

**бактериоскопи́я** бактериоскопия (микроскоп ярҙамында бактерияларҙы өйрәнеү)

**бактериоста́з** бактериостаз (химик йәки физик тәьҫир һөҙөмтәһендә ваҡытлы рәүештә бактерияларҙың үрсемәүе)

**бактериоста́тики** бактериостатиктар (бактериялар үрсеүен ваҡытлыса туҡтатыусы матдәләр)

**бактериостати́ческий** бактериостатик (бактериялар үрсеүен туҡтатыуға ҡағылышлы, мәҫ., бактериостатик препараттар)

**бактериотропи́н** бактериотропин (антиесемдәрҙең бер төрө)

**бактериофа́г** бактериофаг (бактерия тәнендә барлыҡҡа килгән һәм ошо бактерияны юҡ итә торған вирус рәүешендәге тере зат, мәҫ., дизентерия бактериофагы)

**бактериофаги́я** бактериофагия (бактериофаг тарафынан бактерияларҙың юҡ ителеүе)

**бактериофоби́я** бактериофобия (микробтар йоғоуына ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**бактериури́я** бактериурия (ҡайһы бер йоғошло ауырыу кисергәндә бактерияларҙың яңы бүленгән һейҙектә булыуы)

**бактерици́дность** бактерицидлыҡ (физик, химик һәм биологик агенттарҙың (факторҙарҙың) бактерияларҙы юҡ итеү һәләтлеге)

**бактерици́дный** бактерицид (бактерияларҙы юҡ итеүгә ҡағылышлы, мәҫ., бактерицид препараттар)

**бактерици́ды** бактерицидтар (бактерияларҙы юҡ итеүсе матдәләр)

**бакте́рия** бактерия (1. бер күҙәнәктән торған микроорганизм; төрҙәре: *б. анаэробная* анаэроб бактерия (үҙ үҫешендә иректе кислородҡа мохтаж булмаған бактерия, мәҫ., һын ҡатыу ауырыуы (столбняк) бактерияһы); *б. аэробная* аэроб бактерия (үҙ үҫешендә иректе кислородҡа мохтаж булған бактерия, мәҫ., стафилококк һ. б.); *б. болезнетворная* ауырыу тыуҙырғыс (ауырыткыс) бактерия *(ҡара:* **б. патогенная)**; *б. гнилостная* серетткес бактерия; *б. гноеродная (пиогенная)* эренләткес (пиоген) бактерия (мәҫ., стафилококк, стреп-

тококк һ. б.); *б. грамотрицательная* грам кире бактерия (грам буйынса буялмаған бактерия, мәҫ., эсәк бактериялары; *ҡара:* **грама метод**); *б. грамположительная* (грам буйынса буялған бактерия, мәҫ., стафилококк, стрептококк һ. б.); *б. капсульная* капсуллы бактерия (мәҫ., ботулизм бактерияһы); *б. кислотоустойчивая* кислотаға бирешмәҫ бактерия (мәҫ., туберкулез тыуҙырыусы); *б. молочнокислая* һөт әсеткес бактерия; *б. непатогенная (апатогенная)* патоген булмаған (апатоген) бактерия (ауырыу тыуҙырырға һәләтле булмаған бактерия); *б. патогенная* патоген бактерия (кешеләә, хайуандарҙа, үҫемлектә ауырыу тыуҙырырға һәләтле булған бактерия); *б. сапрофитная* сапрофит бактерия (ауырыу тыуҙырырға ҡағылышы булмаған бактерия) һ. б.; 2. таяҡса рәүешендәге һәм спора яһарға һәләтле булмаған бактерия)

**бактеро́иды** бактероидтар (бер төркөм анаэроб бактериялар; *ҡара:* **бактерия анаэробная**)

**балани́т** баланит (ҡаса шешеүе)

**баланопости́т** баланопостит (ир енес ағзаһы башының һәм уны ҡаплаған ҡаса тиресәһенең шешеүе)

**баланопостомико́з** баланопостомикоз (сүпрә рәүешендәге бәшмәктәр тарафынан тыуҙырылған баланопостит)

**балантидиа́з** балантидиаз (эсәк балантидийы йоҡҡандан булған эсәк ауырыуы)

**баланти́дий кишечный** эсәк балантидийы (микроскоп аша күренгән зарарлы иң ябай зат)

**баллистокардиогра́фия** баллистокардиография (баллистокардиограф приборы ярҙамында йөрәк тибешенән килгән тән һелкенеүен өйрәнә торған ысул)

**баллистофоби́я** баллистофобия (бомба, снаряд, пулянан зарарланыуға ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия**)

**балло́н кислородный** кислород баллоны (кислород һаҡлау өсөн һауыт)

**бальза́м** бәлзәм (үҫемлектән йәки синтетик юл менән алынған хуш еҫле матдә; уның ҡайһы берҙәре медицинала ҡулланыла)

**бальзами́рование** бәлзәмләү (анатомик препараттар боҙолмаһын өсөн бәлзәм матдәләре менән эшкәртеү, мәҫ., *б. трупа* мәйетте бәлзәмләү

**бальнеогрязелече́бница** бальнеоләм дауаханаһы (шифалы ләм һәм һыу менән дауалаусы дауалау-профилактик учреждение)

**бальнеолече́бница** бальнеодауаханаһы (шифалы һыу менән дауалаусы дауалау-профилактик учреждение)

**бальнео́лог** бальнеолог (бальнеология белгесе, врач)

**бальнеоло́гия** бальнеология (курортологияның шифалы һыу һәм ләмде өйрәнеүсе тармағы)

**бальнеотерапи́я** бальнеотерапия (шифалы һыу һәм ләм менән дауалау)

**бальнеоте́хник** бальнеотехник (бальнеотехника белгесе)

**бальнеоте́хника** бальнеотехника (1. санитария техникаһының минераль һыу һәм шифалы ләмдән дөрөҫ файҙаланыу мәсьәләһе менән шөғөлләнеүсе тармағы; 2. минераль һыу һәм шифалы ләмдән файҙаланыуҙы тех-

ник яҡтан дөрөç ойоштороу мәсьәләһе менән шөғөлләнеүсе саралар комплексы)

**банда́ж** бандаж (бүçер тишегенән ҡорһаҡ ағзалары сыҡмаһын өсөн, ҡорһаҡ пресын (мускулдарын) нығытыусы һәм ҡорһаҡ ағзаларын төшөүҙән һаҡлаусы махсус бәй, мәç., *б. грыжевой* бүçер бандажы; *б. набрюшник* ҡорһаҡ бандажы)

**ба́нки медицинские** медицина банкалары (тәнгә ҡуйып дауалау өсөн ҡулланыла торған махсус стакандар)

**ба́ня** мунса (төрҙәре: *б. пропускного типа* пропуск тибындағы мунса (һуғыш йылдарында эпидемия ваҡытында санобработка яһап йыуындырыу өсөн махсуслаштырылған мунса); *б. финская* фин мунсаһы һ. б.)

**барбитурати́зм** барбитуратизм (барбитурат дарыуҙарына өйрәнеп китеүҙән булған токсикомания; *ҡара:* **токсикомания)**

**барбитура́ты** барбитураттар (бер төркөм йоҡлатҡыс һәм тынысландырғыс дарыуҙар: веронал, люминал һ. б.

**барока́мера** барокамера (үҙгәртелгән баçымдың кешегә, хайуандарға яһаған йоғонтоһон өйрәнеү өсөн ҡулланылған герметик бина)

**баротерапи́я** баротерапия (үҙгәртелгән һауа баçымы менән дауалау)

**баротра́вма** баротравма (барометрик баçымдың киçкен үҙгәреүе һөҙөмтәһендә ҡолаҡтың, танау ҡыуышлыҡтары һәм үпкәнең зарарланыуы)

**барофоби́я** барофобия (ауыр нәмә күтәреүгә ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**бартолини́т** бартолинит (бартолиний биҙҙәренең шешеүе; *ҡара:* **железы бартолиновы)**

**барье́р** барьер (төрҙәре: *б. гематоофтальмический* гематоофтальмия барьеры (ҡан һәм күҙ шыйыҡсаһы араһында матдәләр алмашыныуын тәьмин итеүсе физиологик механизмдар комплексы); *б. гематоэнцефалический* гематоэнцефалия барьеры (ҡан һәм арҡа мейеһе шыйыҡсаһы араһында матдәләр алмашыныуын тәьмин итеүсе физиологик механизмдар комплексы), *б. иммунологический* иммунологик барьер (организмдың иммун күстәр тарафынан һаҡланыуы һ. б.)

**баци́лла** бацилла (спора яһауға һәләтле таяҡса рәүешендәге бактерия, мәç., *б. ботулизма* ботулизм бациллаһы; *б. сибирской язвы* түләмә бациллаһы һ. б.)

**бациллоноси́тель** *ҡара:* **бактерионоситель**

**бациллоноси́тельство** *ҡара:* **бактерионосительство**

**бацилля́рный** бацилляр, мәç., бацилляр инфекция

**бе́джель** беджель (Көньяҡ Азия һәм Африкала күҙәтелеүсе сифилистың бер төрө)

**бедро́** бот

**бе́дренный(ая)** бот (ботҡа ҡағылышлы)

**безболе́зненный** ауыртыуһыҙ

**безвре́дный** зарарһыҙ

**безгра́мотность санитарная** санитария наҙанлығы

**безде́тность** балаһыҙлыҡ

**безжелту́шный** һарыһыҙ

**безлихора́дочный** биҙгәкһеҙ

**безно́гий** аяҡһыҙ

**безоа́р** безоар (ашҡаҙандағы үҙ-

ләштерелмәгән ашамлыҡ ҡалдыҡтарынан барлыҡҡа килгән шеш)

**безопа́сность** хәүефһеҙлек (мәҫ., *б. движения* хәрәкәт хәүефһеҙлеге һ. б.)

**бе́лая горя́чка** *ҡара:* **делирий алкогольный**

**бе́ли** аҡ, аҡ килеү (ҡайһы бер гинекологик ауырыу ваҡытында килгән эренле бүлендек; төрҙәре: *б. влагалищные* еңсәнән аҡ килеү; *б. гнойные* эренле аҡ килеү; *б. желтые* һары аҡ килеү (эрен ҡатыш аҡ); *б. маточные* аналыҡтан аҡ килеү; *б. трубные* аналыҡ торбаһынан аҡ килеү; *б. шеечные* аналыҡ муйынтығынан аҡ килеү)

**белки́ глаз** күҙ ағы; *ҡара:* **оболочка глаза, белочная**

**бело́к** аҡһым (күҙәнәк терелеген тәьмин иткән иң мөһим ҡатмарлы органик матдә; төрҙәре *б. животный* мал-хайуан аҡһымы, *б. молока* һөт аҡһымы; *б. плазмы* ҡан плазмаһы аҡһымы; *б. простой* ябай аҡһым; *б. сложный* ҡатмарлы аҡһым; *б. сыворотки крови* ҡан сывороткаһы аҡһымы һ. б.)

**белокро́вие** *ҡара:* **лейкоз**

**бельё** белье, кер (мәҫ., *б. чистое* таҙа белье; *б. грязное* керле белье)

**бельмо́** ҡылау (бирсәле үҙгәреү сәбәпле күҙ мөгөҙсәһенең тоноҡланыуы)

**бере́менная** йөклө, (буйға ҡалған) ҡатын

**бере́менность** йөклөлөк, йөклө булыу (төрҙәре: *б. внематочная* аналыҡтан тыш йөклөлөк; *б. многоплодная* күп балалы йөклөлөк (ике йә бынан да артыҡ бала менән йөклө булыу); *б. недоношенная* етлекмәгән йөклөлөк; *б. нормальная* нормаль йөклөлөк; *б. патологическая* патологик йөклөлөк (теге йәки был сир, үҙгәреш менән үтеүсе йөклөлөк); *б. трубная* аналыҡ торбаһындағы йөклөлөк һ. б.)

**бе́ри-бе́ри** бери-бери (тиамин ($B_1$ витамины) етешмәгәнлектән килгән авитаминоз ауырыуы)

**берилли́оз** бериллиоз (бериллий һәм уның зарарлығынан килгән профессиональ үпкә ауырыуы)

**бескро́вный** *(разг.)* *ҡара:* **анемичный**

**беспло́дие** түлһеҙ (балаһыҙ, биҙәү) булыу, мәҫ., *б. женское* биҙәү булыу; *б. климактерическое;* климакс биҙәүе (ырыуҙан ҡалыу) (ҡара: **климакс**); *б. мужское* ырыуһыҙ булыу

**беспло́дный** балаһыҙ, ырыуһыҙ, биҙәү, мәҫ., *б. брак* балаһыҙ ғаилә; *б. женщина* биҙәү ҡатын; *б. мужчина* ырыуһыҙ ир

**бесполо́й** енесһеҙ

**беспо́мощность** ярҙамға мохтажлыҡ

**бессвя́зность мышления** фекер(ләү) буталсыҡлығы

**бессимпто́мный** симптомһыҙ (мәҫ., ауырыуҙың симптомһыҙ үтеүе; *ҡара:* **симптом**)

**бессме́ртник** үлмәҫгөл (сәскәһе, нигеҙҙә, үт ҡыуығын дауалағанда ярҙам итә)

**бессозна́тельный** һушһыҙ, иҫһеҙ

**бессо́нница** йоҡоһоҙлоҡ

**бе́та-диагно́стика** бета-диагностика (радиоизотоп диагностиканың бер төрө: бета-нурланыш изотоптары ярҙамында)

**бе́та-излуче́ние** бета-нурҙар (нурланыш)

**бета-терапи́я** бета-терапия (бета-нурҙар ярҙамында дауалау)

**бете́ль** бетель (бетель үҫемлеге япрағы, тәмәке, иҙелгән әзбиз һ. б. составтан торған сәйнәү өсөн ҡатнашма. Уны ҡулланыу Урта Азияла күҙәтелә; бетелде сәйнәү наркоманияға сәбәпсе, канцероген фактор ҙа; *ҡара:* **канцерогены)**

**бе́шенство (водобоязнь)** ҡотороу ауырыуы (кешеләрҙә һәм хайуандарҙа бер төрлө вирус йоҡҡандан булған үтә етди инфекцион ауырыу)

**бе́шеный** ҡоторған (мәҫ., ҡоторған эт)

**бидистилля́т** бидистиллят (бидистилляция ярҙамында алынған һыу)

**бидистилля́ция** бидистилляция (ҡабатланған дистилляция; *ҡара:* **дистилляция)**

**бикс** бикс (стерилизациялау өсөн махсус һауыт)

**билеверди́н** билевердин (билирубин әсеүҙән килгән пигмент)

**била́рный** билиар (үткә ҡағылышлы)

**билируби́н** билирубин (үттең төп пигменты)

**билирубинеми́я** *ҡара:* **гипербилирубинемия**

**бинокуля́рный** бинокуляр (ике күҙ менән дә ҡарауға ҡағылышлы, мәҫ., бинокуляр микроскоп)

**бинт** бинт (бәй һалыу йәки беркетеү өсөн ҡулланыла торған таҫма йә торба формаһындағы изделие; төрҙәре: *б. ватный* мамыҡ бинты; *б. гипсовый* гипс бинты *(ҡара:* **гипс)**; *б. марлевый* марля бинты; *б, резиновый (Эсмарха)* резина бинты; *б. стерильный* стериль бинт; *б. эластический* эластик бинт (аяҡ веналарының варикоз киңәйеүе булғанда ҡулланыла) һ. б.

**бинтова́ние** бинтлау, бинт һалыу

**биоаку́стика** биоакустика (биологияның һәм физиканың тауыш һелкенеүенең кешегә, хайуандарға йһаған тәьҫирен өйрәнеүсе тармағы)

**биогельми́нт** биогельминт (үҫеше өсөн бер нисә хужа (эйә) кәрәк булған паразит селәү, мәҫ., дуңғыҙ солитеры, һыйыр малы солитеры)

**биогельминто́з** биогельминтоз (кешегә хайуандарҙан йоҡҡан гельминтоз)

**биогене́з** биогенез (организмдарҙың филогенез һәм онтогенездан торған үҫеше)

**биогеогра́фия** биогеография (географияның Ер шарында хайуандарҙың, үҫемлектәрҙең, микроорганизмдарҙың таралыу тәртибен өйрәнеүсе тармағы)

**биодо́за** биодоза (ультра күрән нурҙар көсөнөң бермәмеге)

**биоклиматоло́гия** биоклиматология (биологияның климатогеографик факторҙарҙың тере организмдарға йһаған тәьҫирен өйрәнеүсе тармағы)

**биокре́м** биокрем (эсендә биостимулятор булған крем; *ҡара:* **крем)**

**биологи́ческие часы** биологик сәғәт (тере организмда биологик ритмды тәьмин итеүсе физиологик механизмдар системаһы)

**биомикроскопи́я** биомикроскопия (1. организмдағы тере туҡымаларҙы микроскоп аша тикшереү; 2. тере күҙҙе микроскоп аша тикшереү)

**био́ника** бионика (тере ағзалар төҙөлөшөн һәм эшен өйрәнә торған фән)

**биополимéры** биополимерҙар (тереклекте билдәләгән төп химик берләшмәләр: аҡһымдар, нуклеин кислоталары һ. б.)

**биопотенциáл (биотоки электрические)** биопотенциал (тере туҡымала булған электр потенциалы айырмалығы)

**биопрепарáты (биологические препараты)** биопрепараттар (йоғошло ауырыуҙарға ҡаршы вакцинация үткәреү өсөн ҡулланылған вакциналарҙың дөйөм исеме)

**биопрóба (биологическая проба) в микробиологии** биологик һынау (1. ауырыуҙы асыҡлау маҡсатында лаборатор йәнлеккә ауырыуҙы йоҡтороу; 2. вакцина, сыворотка һымаҡ биологик препараттарҙы лаборатор йәнлектәргә индереү рәүешендә тикшереү, өйрәнеү ысулы)

**биопсúя** биопсия (тере ағза-туҡыма өлөшсәһен операция юлы менән алып диагноз өсөн тикшереү)

**биорадителеметрúя** биорадителеметрия (радиоэлемтә ярҙамында физиологик тикшереү)

**биорúтм** биоритм (*ҡара:* **ритм биологический)**

**биоритмолóгия** биоритмология (биоритмдар хаҡында ғилем)

**биосúнтез** биосинтез (организмдың төрлө химик берләшмәләрҙе синтезлауы)

**биостимулятóры** ҡара: **стимуляторы биогенные**

**биотúн** биотин (*ҡара:* **витамин Н)**

**биотóки** биотоктар (*ҡара:* **биопотенциал)**

**биотрóн** биотрон (яһалма климат булдырылған камера)

**биофармáция** биофармация (дарыуҙарҙың физик, химик һ. б. сифаттарынан сығып биологик тәьҫирен өйрәнеү)

**биофúзика** биофизика (организмда, ағза-туҡымала булған физик күренештәрҙе өйрәнеүсе фән)

**биофúльтр** биофильтр (ташландыҡ һыуҙарҙы биологик таҙартыу өсөн ҡорамал)

**биофлавонóид** биофлавоноид (*ҡара:* **витамин Р)**

**биохúмия** биохимия (*ҡара:* **химия биологическая)**

**биоценóз** биоценоз (Ер шарының ниндәйҙер бер өлөшөндә (биотопта) йәшәүсе бөтә тере организмдар)

**биоэнергéтика** биоэнергетика (тере организмда энергия үҙгәреүе процестарының бергәлеге)

**бисексуалúзм** *ҡара:* **гермафродитизм**

**бúцепс** бицепс (ҡулбаштың ике башлы мускулы)

**благоустрóйство** төҙекләндереү эше (халыҡтың сәләмәтлеге, культуралы тормошо өсөн үткәрелгән бер төркөм сара)

**бластóма** бластома (*ҡара:* **опухоль)**

**бластомикóз** бластомикоз (бластомицета бәшмәге тыуҙырған етди дөйөм ауырыу)

**бластомицéты** бластомицеталар (сүпрә һәм сүпрәгә оҡшаш бер төркөм микроскопик бәшмәктәр)

**блéдная немочь** (*ҡара:* **хлороз ранний)**

**бледнóсть** төҫһеҙлек

**бленнорéя** бленнорея (гонококк бактерияһы йоҡҡандан килгән эренле күҙ ауырыуы)

**блефарúт** блефарит (күҙ ҡабағы ситтәренең шешеүе)

**блефароконъюнктивúт** блефароконъюнктивит (күҙ ҡабағы сит-

тәренең һәм күҙ тиресәһенең бер юлы шешеүе)

**блефаропла́стика** блефаропластика (күҙ ҡабағына яһалған пластик операция)

**блефароплеги́я** блефароплегия (күҙ ҡабағы параличы; *ҡара:* **паралич)**

**блефаропто́з** *ҡара:* **птоз**

**блефароспа́зм** блефароспазм (күҙ ҡыҫығы спазмаһы; *ҡара:* **спазм)**

**блефаростено́з** блефаростеноз (күҙ ҡыҫығы стенозы; *ҡара:* **стеноз)**

**близнецы́** игеҙәк, игеҙәк балалар; төрҙәре: *б. двуяйцевые* ике түл игеҙәктәре; *б. однояйцевые* бер түл игеҙәктәре

**близору́кий** күрәгарашлы (кеше)

**близору́кость** күрәгарау (күҙ рефракцияһының аномалияһы, иң йыш күҙәтелгән күреү кәмселеге; төрҙәре: *б. врожденная* тыумыштан килгән күрәгарау; *б. высокая* юғары күрәгарау; *б. комбинационная* комбинациялы күрәгарау; *б. ночная* төнгө күрәгарау *(ҡара:* **слепота куриная)**; *б. осложненная* ҡатмарлашҡан күрәгарау; *б. прогрессирующая* көсәйә барған күрәгарау; *б. профессиональная* профессиональ күрәгарау; *б. рефракционная* рефракцион күрәгарау *(ҡара:* **рефракция глаза)**; *б. транзиторная* транзитор күрәгарау (ваҡытлы күрәгарау); *б. школьная* мәктәп (балалары) күрәгарауы)

**блока́да** *(мед.)* блокада (1. *б. сердца* йөрәк блокадаһы (йөрәктең теге йәки был өлөшөндә физиологик ҡуҙғытыу-ярһытыуҙы үткәреүсәнлектең насарайыуы йәки өҙөлөүе; бер нисә төрө билдәле); 2. *б. сустава* быуын блокадаһы (быуын эсендә мениск һ. б. туҡыма ҡыҫылыу һөҙөмтәһендә көслө ауыртыу менән үтеүсе быуын хәрәкәтсәнлегенең ваҡытлыса юғалыуы); 3. *б. новокаиновая* новокаин блокадаһы (дауалау маҡсатында теге йәки был урынға новокаин иретмәһе индереү, мәҫ., бөйөр тирәһенә, берәй нервы эргәһенә)

**блондин(ка)** блондин (һары сәсле кеше)

**блоха́** *(челов.)* бөрсә

**бля́шка** төйөрсә (сирле үҙгәреш; төрҙәре: *б. атеросклеротическая* атеросклероз төйөрсәһе (атеросклероз булғанда артерияларҙың урыны-урыны менән ҡалынайыуы); *б. кожная* тире төйөрсәһе (ҡайһы бер тире ауырыуы булғанда күҙәтелә)

**БМП (батальонный медицинский пункт)** батальон медицина пункты

**БОВ (боевые отравляющие вещества)** ағыулы һуғыш матдәләре

**БРВ (боевые радиоактивные вещества)** радиоактив һуғыш матдәләре

**бо́дрость** шат (көр) күңеллелек

**бок** ҡабырға яҡ (ян-яҡ)

**бокс** бокс (1. дауалау-профилактика учреждениеһында инфекцион сирлеләрҙе (йәки инфекцион ауырыуға шик тыуһа) айырыу (изоляциялау) өсөн бина; 2. хәүефле тикшереү үткәреү өсөн айырым бина, камера, мәҫ., бактериологик бокс)

**болево́й** ауыртыу

**боле́зненность** 1. *(стат.)* ауырыу таралғанлығы *(күрһәткес)*; 2. ауыртыу

**боле́зненный** ауыртыулы, ауыртҡан

**болезнетво́рный** ауырыта торған,

ауырыу тыуҙырғыс (мәҫ., бактерия)

**болезнь(и)** 1. ауырыу, сир, мәҫ., *б. Аддисон-Бирмера; ҡара:* **анемия пернициозная:** *б. Аддисонова (бронзовая)* Аддисон ауырыуы (бөйөр өҫтө биҙҙәренең эшсәнлеге боҙолоуынан килгән сир); *б. Базедова* Базед ауырыуы *(ҡара:* **зоб диффузный токсический)**; *б. Боровского (ҡара:* **лейшманиоз кожный)**; *б. Боткина (ҡара:* **гепатит инфекционный)**; *б. бронхоэктатическая* бронхоэктазия ауырыуы (бронхоэктаздар барлыҡҡа килеү менән үтеүсе үпкә шешеүе; *ҡара:* **бронхоэктаз)**; *б. Бюргера* Бюргер ауырыуы (аяҡ артериялары һәм веналары облитерацияһы менән үтеүсе ауырыу); *б. Вакеза* Вакез ауырыуы *(ҡара:* **полицитемия истинная)**; *б. вакцинная* вакцина ауырыуы (натураль сәсәккә ҡаршы вакцинация яһағандан һуң еңелсә сирләштереп алыу); *б. венерическая четвертая (ҡара:* **лимфогрануле-матоз паховый)**; *б. Верльгофа (ҡара:* **пурпура тромбиоцитопеническая)**; *б. вибрационная* вибрация ауырыуы (дауамлы рәүештә һелкенеү (вибрация) тәьҫиренән килгән сир); *б. высотная* юғарылыҡ ауырыуы (юғарыға менгәндә атмосфера баҫымы түбәнәйеүҙән, кислород етешмәүҙән килгән баш ауыртыу, баш әйләнеү, күңел уйнау, ҡоҫтортоу кеүек ауырыу күренеше); *б. гелиотропная* гелиотроп ауырыуы (гелиотроп төрөндәге сүп үләне менән зарарланған игендән бешерелгән икмәк ашап ағыуланыу); *б. гемолитическая новорожденных* яңы тыуған балаларҙың гемолитик ауырыуы (резус факторы килешмәү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән аҙ ҡанлылыҡ сире); *б. гипертоническая* гипертония ауырыуы (ҡан баҫымының дауамлы күтәрелеүе менән характерлы ауырыу); *б. гипотоническая (ҡара:* **гипотензия артериальная первичная)**; *б. Гиршспрунга* Гиршспрунг ауырыуы (ҡорһаҡтағы нервыларҙың зарарланыуы һәм һөҙөмтәлә йыуан эсәктәрҙең киңәйеүе һ. б. үҙгәрештәр менән үтеүсе тыумыштан килгән ауырыу); *б. глютеновая* глютен ауырыуы (ҡайһы бер ферменттар етешмәүҙән килгән һәм эс китеү, ныҡ ябығыу менән үтеүсе сир); *б. гомологичная* гомология ауырыуы (күсереү (трансплантация) операцияһы кисергән кешелә күҙәтелеүсе ауырыу күренеше); *б. горная* тау ауырыуы; *(ҡара:* **болезнь высотная)**; *б. Дауна* Дауна (олигофрения һәм физик зәғифлек менән үтеүсе нәҫел ауырыуы); *б. декомпрессионная* декомпрессия ауырыуы (атмосфера баҫымының киҫкен түбәнәйеүенән килгән сир); *б. денге (ҡара:* **лихорадка денге)**; *б. Деркума* Деркум ауырыуы (тире аҫтында май шештәре барлыҡҡа килеүе йәки май туҡымаһының ныҡ үҫеш алыуы менән характерлы ауырыу); *б. желчнокаменная* үт ташы ауырыуы (үт ҡыуығында йәки үт юлдарында таш барлыҡҡа килеү менән үткән сир); *б. Келера (ҡара:* **остеохондропатия)**; *б. кессонная* кессон ауырыуы (тәрән һыуҙарҙан кеше ҡапыл күтәрелгәндән барлыҡҡа килгән декомпрессия

ауырыуы); *б. кленового сиропа* саған сиробы ауырыуы (валин, лейцин һымаҡ аҡһымдар алмашыныуының боҙолоуынан килгән нәҫел ауырыуы); *б. коронарная (ҡара:* **б. сердца ишемическая)**; *б. лучевая* нур ауырыуы (ионизациялау нурланышы артыҡ булыуҙан килгән сир; уның төрҙәре: *б. лучевая острая* киҫкен нур ауырыуы; *б. лучевая подострая* ярым киҫкен нур ауырыуы; *б. лучевая хроническая* хроник (дауамлы) нур ауырыуы); *б. Меньера (ҡара:* **лабиринтопатия)**; *б. миеломная (Рустицкого)* миелом (Рустицкий) ауырыуы (ҡан эшләп сығарыусы ағзаларҙың ауырыуы); *б. морская* диңгеҙ ауырыуы (ҡарап һелкенеүе һөҙөмтәһендә килгән ауырыу); *б. мочекаменная* һейҙек ташы ауырыуы (таш барлыҡҡа килеү менән үтеүсе сир); *б. мраморная* мәрмәр ауырыуы (һөйәктәрҙең сирле үҙгәреше менән үтеүсе нәҫел ауырыуы); *б. мышиная (ҡара:* **туляремия)**; *б. основная* төп ауырыу (кешелә булған бер нисә ауырыуҙарҙың иң көслөһө); *б. острая* киҫкен ауырыу (ҡапыл башланып оҙаҡҡа һуҙылмаған сир); *б. падучая (ҡара:* **эпилепсия)**; *б. Паркинсона (ҡара:* **паралич дрожательный)**; *б. Педжета* Педжет ауырыуы (1. тире рағының бер төрө; 2. *ҡара:* **остеодистрофия)**; *б. попугайная (ҡара:* **орнитоз)**; *б. постреанимационная* постреонимация ауырыуы (кешене терелткәндән һуң күҙәтелгән дөйөм һаулыҡтың ҡаҡшауы); *б. порфириновая (ҡара:* **порфирия)**; *б. почечнокаменная (нефролитиаз)* бөйөр ташы ауырыуы (һейҙек ташы ауырыуының бер төрө); *б. природно-очаговая* тәбиғәт-сығанаҡлы ауырыу (ниндәйҙер бер географик зонала күҙәтелеүсе инфекцион ауырыу, уны тыуҙырғыс микроскопик зат берәй ҡырағай йәнлектә дауамлы рәүештә йәшәргә тейеш, шул сирҙең сығанағы булып тора); *б. пятая (ҡара:* **эритема инфекционная)**; *б. Рейно* Рейно ауырыуы (нервы системаһы ауырыуы, күпселектә ҡул бармаҡтары артерияларының спазмаһы, ә сир аҙып киткәндә — гангрена менән тамамланырға мөмкин); *б. Рейтера* Рейтер ауырыуы (күҙҙең тиреҫәһе, һейҙек каналы, быуындар шешеү һ. б. үҙгәрештәр менән үтеүсе инфекцион-аллергик ауырыу); *б. сахарная (ҡара:* **диабет сахарный)**; *б. сердца ишемическая* йөрәктең ишемия ауырыуы (йөрәктең артериялары тарайып, йөрәк тәңгәлендә өйәнәк рәүешендәге ауыртыу менән характерлана); *б. Симмонса (ҡара:* **кахексия гипофизарная)**; *б. слюнно-каменная* ауыҙ һыуы таш ауырыуы (ауыҙ һыуы биҙҙәрендә һәм ауыҙ һыуы юлдарында таш барлыҡҡа килеүе); *б. сонная (африканская), ҡара:* **трипаносомоз африканский)**; *б. спаечная* йәбешкәк ауырыуы (хирургик операция йәки ауырыу һөҙөмтәһендә ҡорһаҡ эсендәге ағзаларҙың (нигеҙҙә эсәктәрҙең) йәбешеп үҫеүе); *б. судорожная* тартышыу (көҙән йыйырыу) ауырыуы (нигеҙҙә, эҫе цехтарҙа һыу, тоҙҙар алмашыныуының боҙолоуынан килгән сир); *б. сывороточная* сыворотка ауырыуы (укол менән ят сы-

воротка индереүҙән килгән аллергик сир); *б. Томсона (ҡара:* **миатония врожденная**); *б. тромбоэмболическая* тромэмболия ауырыуы (ҡан тамырҙары эсендә ҡуйырыҡ (тромб) һәм эмболия күренешенең барлыҡҡа килеүе менән характерлы дөйөм ауырыу); *б. укуса крыс (ҡара:* **содоку**); *б. Филатова (ҡара:* **мононуклеоз инфекционный**); *б. Ходжкина (ҡара:* **лимфогранулематоз**); *б. юксовско-сартланская* юксово-сартлан ауырыуы (ҡайһы бер балыҡты ашап ағыуланыу); *б. язвенная* сей яра (язва) ауырыуы (ашҡаҙан һәм бөйән эсәгендә сей яра барлыҡҡа килеү менән характерлы хроник сир); 2. ауырыуҙар, сирҙәр, мәҫ., *б. аденовирусные* аденовирус ауырыуҙар (аденовирустар йоғоуҙан килгән бер төркөм сирҙәр: вирус пневмонияһы, киҫкен респиратор сирҙәр); *б. алиментарные* алиментар ауырыуҙар (ашамлыҡта теге йәки был туҡланыу матдәһенең етешмәүе йәки артыҡ булыуы); *б. аллергические* аллергия ауырыуҙары *(ҡара:* **аллергия**); *б. арбовирусные* арбовирус ауырыуҙары (арбовирустар йоғоуҙан кешеләрҙә һәм хайуандарҙа була торған бер төркөм ауырыуҙар); *б. аутоаллергические* (аутоагрессивные, аутоиммунные) аутоаллергия ауырыуҙары (аутоаллергия һөҙөмтәһендә булалар *(ҡара:* **аутоаллергия**), мәҫ., дерматомиозит, склеродермия, ҡыҙыл сөсө ауырыуы); *б. венерические* венерик ауырыуҙар (нигеҙҙә, енси бәйләнеш ваҡытында йоғоусан сирҙәр: гонорея, сифилис һ. б.); *б. внутренние* эске ауырыуҙар (мәҫ., йөрәк, үпкә ауырыуҙары һ. б.); *б. врожденные* тыумыштан килгән ауырыуҙар (мәҫ., тыумыштан килгән сифилис һ. б.); *б. детские* балалар ауырыуҙары (мәҫ., рахит); *б. инфекционно-аллергические* инфекцион-аллергия ауырыуҙары *(ҡара:* **аллергия**); *б. инфекционные* инфекцион ауырыуҙар (мәҫ., ҡорһаҡ тифы, дизентерия һ. б.), *б. кожные* тире ауырыуҙары (мәҫ., трихофития, экзема һ. б.); *б. коллагеновые* коллаген ауырыуҙар *(ҡара:* **коллагенозы**); *б. легионеров* легионерҙар ауырыуы (үҙенә бер төрлө микроб йоғоуҙан килгән һәм үпкә шешеүе менән үткән инфекцион ауырыу); *б. микоплазменные* микоплазма ауырыуҙары (микоплазма микроорганизмы йоғоуҙан булалар); *б. молекулярные* молекуляр ауырыуҙар (организмдағы аҡһымдар структураһының үҙгәреүенән булалар); *б. накопления* тупланыш ауырыуҙары (нәҫел ауырыуҙарының төрө: теге йә был матдәнең, мәҫ., гликогендың, артыҡ тупланыуы һөҙөмтәһендә була; *б. наследственные* нәҫел ауырыуҙары (гендар, хромосомалар үҙгәреүҙән була), *б. нервные* нервы ауырыуҙары (мәҫ., неврит, радикулит һ. б.); *б. паразитарные (инвазионные)* паразитар (инвазион) ауырыуҙар (паразит селәү, иң ябай йәнлектәр йоғоуҙан булалар. мәҫ., ҡысынма, гельминтоз ауырыуҙары һ. б.); *б. полиомиелитоподобные* полиомиелит һымаҡ ауырыуҙар (үҙенә бер төрлө вирус йоғоуҙан булалар); *б. профессиональные* профессиональ ауырыуҙар (мәҫ.,

вибрация ауырыуы); *б. психические (душевные)* психик ауырыуҙар; *б. рахитоподобные* рахит һымаҡ ауырыуҙар; *б. сопутствующие* эйәрсән ауырыуҙар (мәҫ. ревматизмға тағы ла бер ауырыу өҫтәлә); *б. трансмиссивные* трансмиссив ауырыуҙар (ҡан эскес бөжәктәр: серәкәй, талпан һ. б. таратыусы сирҙәр); *б. тропические* тропик ауырыуҙар (йылы яҡтарға хас сирҙәр); *б. хромосомные* хромосом ауырыуҙар (хромосомалар структураһы үҙгәреүҙән булалар); *б. экзотические* экзотик ауырыуҙар (ҡайҙандыр сит яҡтан килгән ауырыуҙар); *б. эндемические* эндемик ауырыуҙар (берәй ергә даими рәүештә хас сирҙәр, мәҫ., боғаҡ ауырыуы); *б. эндокринные* эндокрин ауырыуҙар (эске секреция (эндокрин) биҙҙәре функцияһы боҙолоуҙан килгән сирҙәр, мәҫ., шәкәр диабеты); *б. энтеровирусные* энтеровирус ауырыуҙар (энтеровирустар йоғоуҙан килгән сирҙәр, *ҡара:* **энтеровирусы**); *б. эпидемические* эпидемик ауырыуҙар (киң таралыш алған инфекцион сирҙәр); *б. эпизоотические* эпизоотик ауырыуҙар (ҡыр йәнлектәре йәки йорт хайуандары араһында киң таралған сирҙәр) һ. б.

**болеутоляющий** ауыртыуҙы баҫа торған (мәҫ., дарыу)

**болтушка***(разг.)* буръяҡ дауа (1. шыйығайтылған шифалы ләм; 2. тәнгә һөртөү өсөн ҡулланыла торған суспензия дарыуы; *(ҡара:* **суспензия)**

**боль** ауыртыу; төрҙәре: *б. ангинозная* ангиноз ауыртыу (йөрәк тәңгәлендәге көслө ауыртыу); *б. внезапная* ҡапыл ауыртыу; *б. высотная* юғарылыҡтағы ауыртыу (декомпрессия ауырыуы билдәһе; *ҡара:* **болезнь декомпрессионная**); *б. головная* баш ауыртыуы (күп төрлө сәбәптән була); *б. голодная* асығыуҙан килгән ауыртыу тойғоһо (ашҡаҙан тәңгәлендәге ашҡаҙандың йәки бөйән эсәгенең сей яра ауырыуы булғанда күҙәтелә); *б. загрудинная* түш (һөйәге) арты ауыртыуы (ғәҙәттә, йөрәк йә нигрә арауығы ағзалары сирҙәре булғанда күҙәтелә); *б. зубная* теш ауыртыуы; *б. иррадирующая* иррадиациялау ауыртыуы (ауырыуға һабышҡан ағзанан алыҫта күҙәтелгән ауыртыу); *б. межменструальная* күрем ара ауыртыу (овуляция булғанда күҙәтелә; *ҡара:* **овуляция**); *б. невралгическая* невралгия ауыртыуы *(ҡара:* **невралгия**); *б. ночная* төнгө ауыртыу (йәки никталгия); *б. опоясывающая* уратма ауыртыу (кәүҙәне уратып борсоған ауыртыу, бындай күренеш холецистит, панкреатит һ. б. сир булғанда күҙәтелә); *б. ноющая* һыҙлап (әрнеп) ауыртыу; *б. острая* киҫкен ауыртыу; *б. отраженная* сағылмалы ауыртыу (ауырыуға һабышҡан ағзанан алыҫыраҡ ятҡан һау ағзала (ерҙә) күҙәтелә); *б. предменструальная* күрем алды ауыртыу; *б. проекционная* проекцион ауыртыу (нервы тәьмин иткән зонала ауыртыу һиҙеү); *б. разлитая* таралмалы ауыртыу (мәҫ., аппендицит булғанда, ауыртыу һуҡыр эсәк тәңгәленән бөтә ҡорһаҡ өлкәһенә тарала); *б. родовая* бәпесләү ауыртыуы; *б. свер-*

*ляшая* бороп ауыртыу; *б. фантомная* фантом ауыртыуы (булмаған, мәç., өҙөлөп төшкән (йә ҡырҡып алынған) ағзала ауыртыу тойоу)

**больница** больница (ятҡырып дауалаусы дауалау-профилактик учреждение; төрҙәре: *б. гериатрическая* гериатрия больницаһы (өлкән һәм ҡарт кешеләрҙе дауалау өсөн); *б. городская* ҡала больницаһы; *б. детская* балалар больницаһы; *б. инфекционная* инфекцион больница; *б. клиническая* клиник больница (медицина институты, врачтарҙы камиллаштырыу һәм ғилми-тикшеренеү институты уҡыусыларын өйрәтеү базаһы булған больница); *б. многопрофильная* күп профилле больница; *б. объединенная* берләштерелгән больница (уның составында ятып дауаланыу өсөн стационар һәм поликлиника бүлеге була); *б. психиатрическая* психиатрия больницаһы; *б. районная* район больницаһы; *б. республиканская* республика больницаһы; *б. скорой медицинской помощи* ашығыс медицина ярҙамы больницаһы; *б. специализированная* махсуслаштырылған больница (мәç., туберкулез менән генә сирләгәндәр өсөн); *б. участковая* участка больницаһы (мәç., ауыл ерендә участка больницаһы) һ. б.

**больничный** больница (мәç., больница режимы)

**больной** ауырыусы, сирле, ауырыу (сирле) кеше (мәç. *б. амбулаторный* амбулатор ауырыусы; *б. инфекционный* инфекцион ауырыусы; *б. легочный* үпкәһе сирле кеше; *б. психический* психик ауырыусы; *б. сердечный* йөрәге сирле кеше; *б. туберкулезный* туберкулез менән ауырыусы һ. б.)

**болячка** *(разг.)* бетсә (һыҙлауыҡ, һытҡы, ҡутыр һ. б. аңлатҡан атама)

**бонификация** бонификация (тапма ауырыуы серәкәйе үрсегән ерҙе кәметеү маҡсатында һыу бассейндарын үләндән таҙартыу һ. б. саралар күреү)

**бор стоматологический** стоматологик бор (теш һөйәген игәү приборы)

**бородавка** һөйәл, сөйәл (ғәҙәттә, ябай үтеүсе шеш; төрҙәре; *б. остроконечная; ҡара:* **кондилома остроконечная)**; *б. плоская* (юношеская) ялпаҡ (йәштәр) һөйәле (нигеҙҙә, бит-ҡулға сығыусан); *б. подошвенная* табан һөйәле; *б. простая* (обыкновенная) ябай (ғәҙәти) һөйәл (ҡулдарға сығыусан); *б. старческая* өлкәндәр (ҡартлыҡ) һөйәле (ғәҙәттә, 40—50 йәште уҙғас, ялпаҡ, көрән төçтәге һөйәлдәр сыға, һирәк осраҡта улар ракка әйләнеүсән)

**бородавчатый** һөйәлле, сөйәлле

**ботриомикома** *ҡара:* **гранулема пиогенная**

**ботулизм** ботулизм (ботулизм бактериялары токсины менән зарарланған ашамлыҡтан ағыуланыу; үтә етди ауырыу күренеше)

**ботулотоксин** ботулотоксин (ботулизм бактериялары бүлгән токсин; *(ҡара:* **токсин)**

**боярышник** энәлек, һыуһар, дунала (емеше йөрәктән, тынысландырғыс дауа биреүсе ағас)

**брадикардия** брадикардия (йөрәк тибешенең һирәгәйеүе)

**брадикинезия** брадикинезия (ауы-

рыу сәбәпле кеше хәрәкәтсәнлегенең һүлпәнәйеүе)

**брадипно́э** брадипноэ (һулыш алыуҙың һирәгәйеүе)

**брадифази́я** брадифазия (телмәр һүлпәнәйеүе)

**брахицефали́я** брахицефалия (тыуған баланың ҡыҫҡа һәм йомро башлы булыуы)

**бра́чность** никахта тороусанлыҡ (демография күрһәткесе: йыл әйләнәһендә 1000 кешегә тура килгән никахлашыу һаны)

**бред** илереү, һаташыу (психик һаулыҡ ҡаҡшауҙан була: *б. алкогольный* алкоголь илереүе; *б. величия* шөһрәт (бөйөклөк) илереүе; *б. галлюцинаторный* галлюцинация илереүе *(ҡара:* **галлюцинации);** *б. лихорадочный* биҙгәк ваҡытындағы илереү; *б. острый* киҫкен илереү (ҡапыл башланып китә); *б. отрицания* кире ҡағыу илереүе; *б. преследования* эҙәрләү илереүе; *б. самообвинения* үҙен ғәйепләү илереүе; *б. старческий* ҡартлыҡ илереүе)

**бре́довый** илереү (илереүгә бәйле)

**брига́да (скорой помощи)** ашығыс ярҙам бригадаһы (ашығыс медицина ярҙамы станцияһы составына инеп, махсуслаштырылған ярҙам күрһәтеү өсөн ебәрелә; төрҙәре: *б. инсультная* инсульт бригадаһы; *ҡара:* **инсульт);** *б. инфарктная (кардиологическая)* инфаркт (кардиология) бригадаһы (йөрәк инфаркты менән көрәшеү өсөн); *б. противошоковая* шокка ҡаршы бригада *(ҡара:* **шок)** һ. б.)

**бровь** ҡаш

**броже́ние** әсеү

**броми́ды** бромидалар (эсендә бром булған бер төркөм тынысландырғыс дауа препараттары)

**броми́зм** бромизм (оҙаҡ ваҡыт буйы бромлы дарыу эсеүҙән ағыуланыу)

**бромоде́рма** бромодерма (дауамлы рәүештә бромлы дарыу ҡабул итеүҙән барлыҡҡа килгән токсинодермия; *ҡара:* **токсикодермия)**

**бронтофоби́я** бронтофобия (күк күкрәүгә ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**бронх** бронхы (үпкә көпшәһе)

**бронхадени́т** бронхаденит (боғарлаҡҡа һәм эре үпкә көпшәләренә (бронхыларына) яҡын ятҡан лимфатик төйөрҙәрҙең шешеүе, мәҫ., *б. туберкулезный* туберкулез бронхоадениты һ. б.)

**бронхио́ла** бронхиола (ваҡ үпкә көпшәһе)

**бронхиоли́т** бронхиолит (ваҡ үпкә көпшәләренең шешеүе)

**бронхи́т** бронхит (үпкә көпшәләренең шешеүе; төрҙәре: *б. астматический* астма бронхиты *(ҡара:* астма); *б. гнойный* эренле бронхит; *б. казеозный* казеоз бронхит *(ҡара:* **распад казеозный);** *б. катаральный* катараль бронхит (бронхылар тиресәһенең шешеүе менән характерлы); *б. некротический* некрозлы бронхит *(ҡара:* **некроз);** *б. острый* киҫкен бронхит; *б. туберкулезный* туберкулез бронхиты; *б. хронический* хроник бронхит һ. б.)

**бронхогра́фия** бронхография (үпкә көпшәләре селтәренә контрастлы матдә индереп яһалған рентгенография)

**бронхокимогра́фия** бронхокимография (рентген ярҙамында үпкә көпшәләрен тикшереүҙең бер төрө)

**бронхолитиа́з** бронхолитиаз (үпкә һәм үпкә көпшәләрендә таш ауырыуы)

**бронхомико́з** бронхомикоз (паразит бәшмәктәр әләгеүҙән булған үпкә көпшәләренең шешеүе)

**бронхопати́я** бронхопатия (үпкә көпшәләре ауырыуҙарының дөйөм исеме)

**бронхопневмони́я** бронхопневмония *(ҡара:* **пневмония очаговая)**

**бронхоскопи́я** бронхоскопия (бронхоскоп приборы ярҙамында үпкә көпшәләрен ҡарап тикшереү)

**бронхоспа́зм** бронхоспазм (үпкә көпшәләренең спазмы; *ҡара:* **спазм)**

**бронхоспирогра́фия** бронхоспирография (үпкәлә барған газ алмашыныу процесын график һүрәт рәүешендә өйрәнеү)

**бронхостено́з** бронхостеноз (үпкә көпшәләренең стенозы; *ҡара:* **стеноз)**

**бронхофони́я** бронхофония (үпкәһе сирлене тыңлағанда уның һөйләшеү тауышы ишетелеүе)

**бронхоэзофагоскопи́я** бронхоэзофагоскопия (боғарлаҡты, йыуан үпкә көпшәләрен, ҡыҙыл үңәсте бронхоэзофагоскоп приборы ярҙамында ҡарап тикшереү)

**бронхоэкта́з** бронхоэктаз (ауырыу сәбәпле үпкә көпшәләренең айырым урындарының киңәйеүе)

**бронхоэктати́ческий** бронхоэктазия (мәç., бронхоэктазия ауырыуы)

**брукси́зм** бруксизм (йоҡо ваҡытында тештәрҙе шығырлатыу)

**бруксомани́я** бруксомания (уяу саҡта ваҡыты-ваҡыты менән тештәрҙе шығырлатыу)

**бруcни́ка** ҡыҙыл көртмәле (еләге һейҙек ҡыуғыс дауаға яраҡлы)

**бруце́лла** бруцелла (бруцеллез тыуҙырыусы коккобактерия, бер нисә төрө билдәле)

**бруцеллёз** бруцеллез (кешелә һәм малда бруцелла бактерияһы йоғоуҙан килгән дауамлы инфекцион ауырыу; төрҙәре: *б. козье-овечьего типа* кәзә-һарыҡ бруцеллезы (кешелә бик ауыр үтә); *б. коровьего типа* һыйыр малы бруцеллезы (кеше, нигеҙҙә, еңел сирләй); *б. острый* киçкен бруцеллез; *б. свиного типа* сусҡа бруцеллезы (кешелә һирәк күҙәтелә); *б. хронический* хроник бруцеллез)

**бруцелли́ды** бруцеллидтар (бруцеллез булғанда тәнгә сыҡҡан аллергик сабыртма)

**бруцелли́н** бруцеллин (бруцеллезды асыҡлау һәм дауалау өсөн ҡулланыла торған бруцеллаларҙан әҙерләнгән препарат)

**брыже́йка** ҡатлы шекәрә (мәç., *б. желудка* ашҡаҙандың ҡатлы шекәрәһе)

**брюшко́** 1. ҡалын ҡорһаҡ; 2. ҡорһаҡса (йыуанырaҡ өлөш, мәç., ҡайһы бер мускулдарҙың)

**брюшно́й пресс** ҡорһаҡ пресы (ҡорһаҡтың алғы көбөндә ятҡан бер төркөм мускулдар)

**бубо́н** бубон (тире аçтында ятҡан лимфатик төйөрҙөң ауырыу сәбәпле ҙурайыуы, мәç., *б. сифилитический* сифилис бубоны *(ҡара:* **сифилис)**, *б. туляремийный* туляремия бубоны *(ҡара:* **туляремия)**, *б. чумной* тагун бубоны *(ҡара:* **чума)**

**бугор** 1. *(анат.)* ҡалҡыулыҡ, мәç., *б. пяточный* үксә ҡалҡыулығы; 2 *(пат.)* төйөр, мәç., *б. сифилитический* сифилис төйөрө

**бугоро́к** 1. (анат.) түмһәләк (мәç., *б. суставной* быуын түмһәләге);

2. *(пат.)* төйөрсә (тәндә ҡалҡа торған сирле үҙгәреш, мәç., *б. туберкулезный* туберкулез төйөрсәһе)

**буддиза́ция** буддизация (һөттө зарарһыҙлау ысулы: водород перикисы өçтәү һәм 52° тиклем йылытыуҙан ғибәрәт)

**буж** буж (көпшә формаһындағы ағзаларҙы тикшереү һәм киңәйтеү өсөн инструмент, мәç., *б. уретральный* уретра (һейеү каналы) бужы)

**бужи́рование** бужлау, буж индереү (мәç., *б. мочеиспускательного канала* һейеү каналын бужлау; *б. пищевода* ҡыҙыл үңәсте бужлау һ. б.)

**булими́я** булимия (ауырыу рәүештә нык асығыу тойғоһо)

**булле́зный** буллез (ҡыуыҡсалы, мәç., буллез дерматит; *ҡара:* **дерматит)**

**бульби́т** бульбит (бөйән эсәге тамырсаһының шешеүе)

**бума́га вощеная** балауыҙлы ҡағыҙ (компресс яһау өсөн ҡулланыла)

**бурси́т** бурсит (синовиаль ҡаптың шешеүе һәм унда һары һыу йыйылыуы)

**бутирометри́я** бутирометрия (һөттәге майҙы бутирометр приборы ярҙамында билдәләү)

**бучéние** бучение (кер-бельены зарарһыҙлау маҡсатында бучильник аппаратында һелтелә ҡайнатыу)

**БЦЖ** *ҡара:* **вакцина БЦЖ**

**БЦЖ-тест** БЦЖ-тесты (туберкулездан килгән инфекцион аллергияны билдәләү ысулы)

**бюдже́т здравоохранения** һаулыҡ һаҡлау эштәре бюджеты

**бюро́** *(мед.)* бюро (мәç., *б. санитарной статистики* санитария статистикаһы бюроһы; *б. судебно-медицинской экспертизы* суд-медицина экспертизаһы бюроһы

# В

**вагини́зм** вагинизм (ҡатындар еңсәһенең юғары тойоусанлығы арҡаһында уның спазмалы ҡыçылыуы; ошо сәбәпле ҡайһы ваҡыт сексуаль тормош мөмкин булмай)

**вагини́т** *ҡара:* **кольпит**

**вагиномико́з** вагиномикоз (патоген бәшмәк эйәләшеүҙән килгән ҡатын-ҡыҙ еңсәһе шешеүе)

**вагосимпати́ческий** вагосимпатик (вагус нервы һәм симпатик нервы системаһы эшмәкәрлегенә ҡағылышлы)

**ваготони́я** ваготония (вагус нервының артыҡ эшләүе)

**ва́гус** вагус (баш мейеһе нервыларының береһе)

**вазели́н** вазелин (дауа һәм гигиеник майҙар әҙерләү өсөн киң ҡулланыла торған нефттән алынған матдә)

**вазелиноде́рма** вазелинодерма (яҡшы таҙартылмаған вазелин тәьçиренән тиренең шешеүе)

**вазогра́фия** *ҡара:* **ангиография**

**вазодилата́ция** вазодилатация (ҡан тамырҙарының киңәйеүе)

**вазоневро́з** *ҡара:* **ангионевроз**

**ва́куум-стимуля́ция** вакуум-стимуляция (бәпесләүҙе тиҙләтеү өсөн ҡулланыла торған акушерлыҡ операцияһы)

**ва́куум-экскохлеа́ция** вакуум-экскохлеация (аборт булдырыу өсөн яһала торған акушерлыҡ операцияһының бер төрө)

**вакуум-экстракция** вакуум-экстракция (вакуум-экстрактор аппараты ярҙамында асфиксия башланған баланың тыуыуын тиҙләтеү)

**вакцина** вакцина (гәҙәттә, көсһеҙләндерелгән йәки үлтерелгән микробтарҙан, уларҙың ағыуынан яһалып, вакцинация үткәреү өсөн ҡулланыла торған препарат; төрҙәре: *в. адсорбированная* адсорбцияланған вакцина (махсус эшкәртеү арҡаһында көсәйтелгән вакцина); *в. антирабическая* антирабиес вакцинаһы (ҡотороу ауырыуына ҡаршы вакцина); *в. ассоциированная (комбинированная)* ассоциацияланған вакцина (бер юлы дифтерия, коклюш (күк йүтәл), һын ҡатыу ауырыуҙарына ҡаршы йүнәлтелгән вакцина); *в. живая* тере вакцина; *в. БЦЖ (противотуберкулезная)* БЦЖ вакцинаһы (хәлһеҙләнгән туберкулез микобактерияларынан әҙерләнгән тере вакцина); *в. вирусная* вирус вакцинаһы (вирустарҙан әҙерләнгән вакцина, мәҫ., полиомиелитҡа ҡаршы вакцина); *в. живая* тере вакцина (тере микроорганизм, вирустарҙан әҙерләнгән вакцина); *в. оспенная* сәсәк вакцинаһы; *в. поливалентная* поливалент вакцина (вакцинаның бер нисә вариантынан әҙерләнә); *в. противополиомиелитная* полиомиелитҡа ҡаршы вакцина (*ҡара:* **полиомиелит**); *в. противочумная* тагунга ҡаршы вакцина (*ҡара:* **чума**); *в. сухая* киптерелгән вакцина; *в. убитая* үлтерелгән вакцина (вакцина фенол, формалин, эфир һымаҡ препараттар йәки физик ысул менән үлтерелгән микроорганизмдарҙан әҙерләнә); *в. формалинизированная* формалинланған вакцина (вакцина әҙерләгәндә микроорганизмдар формалин ярҙамында үлтерелә); *в. химическая* химик вакцина (микроорганизмдарҙан алынып, балласт матдәләрҙән таҙартылған һәм тик антигендарҙан торған вакцина; *ҡара:* **антигены**); *в. эмбриональная* эмбриональ вакцина (ҡош эмбрионында үрсетелгән вирустарҙан әҙерләнгән вакцина); *в. этеризированная* этеризланған вакцина (вакцина әҙерләгәндә микроорганизмдар эфир ярҙамында үлтерелә)

**вакцинация** вакцинация, вакцинациялау (кешегә, хайуандарға вакцина индереп инфекцион ауырыуға ҡаршы актив иммунитет (бирешмәүсәнлек) булдырыу ысулы; төрҙәре: *в. аэрозольная (ингаляционная)* аэрозоль вакцинацияһы (вакцина һулатыу, һулау юлы менән индерелә); *в. внутрикожная* тире эсенә вакцинация; *в. интраназальная* интраназаль вакцинация (вакцина танау тиресәһе аша индерелә); *в. конъюнктивальная* конъюнктиваль вакцинация (күҙ тиресәһе конъюнктивы) аша индерелә); *в. накожная* тирене сыйыу вакцинацияһы; *в. пероральная (энтеральная)* перораль (энтераль) вакцинация (ауыҙ аша вакцина индереү); *в. подкожная* тире аҫтына вакцинация (укол яһап башҡарыла; *в. профилактическая* профилактик вакцинация һ. б.)

**вакцинированный** вакцинацияланған (вакцина алған)

**вакциния** вакциния (1. *ҡара:* **болезнь вакцинальная**; 2. организмдың сәсәккә ҡаршы вакцинация үткәргәндән һуң өҙләгәүе — тәнгә сабыртма сыға)

**вакцино-профилактика** вакцинопрофилактика (вакцинация ярҙамында инфекцион ауырыуҙар менән көрәшеү ысулы)

**вакцинотерапия** вакцинотерапия (вакцина, анатоксин йәки ауырыу тыуҙырғыстың айырым антигендарын файҙаланыу рәүешендә инфекцион ауырыуҙы дауалау)

**валериана** валериана, бесәй үләне (тамыры йөрәк ауырыуынан ярҙам итә, тынысландырғыс дауа бирә торған үлән)

**ванна** ванна (1. гигиеник йәки дауалау процедураһын алыу өсөн махсус һауыт; 2. гигиеник йә дауалау процедураһы; төрҙәре: *в. азотная* азотлы ванна (ванна һыуы азот менән байытылған була); *в. ароматическая* ароматлы ванна (ванна һыуына ароматлы матдә: бөтнөк үләне, ылыҫ һалына); *в. вибрационная* вибрацион ванна (вибратор приборы ярҙамында ванна һыуы механик тулҡыныу, тирбәлеү ала); *в. вихревая* өйөрмәле ванна (махсус сара ярҙамында ванна һыуы өйөрмәле хәрәкәткә килтерелә); *в. водяная* һыу ваннаһы; *в. воздушная* һауа ваннаһы (һауала яланғас ҡалыу); *в. гигиеническая* гигиеник ванна; *в. гидроэлектрическая* гидроэлектрик ванна (ванна һыуына гальваник йәки импульслы электр тогы үткәрелә); *в. горчичная* горчица ваннаһы; *в. горячая* эҫе ванна; *в. грязевая* шифалы ләм ваннаһы; *в. «жемчужная»* «ынйылы» ванна (ванна һыуын яһалма рәүештә һауа индертеп күбекләндереү); *в. йодобромная* йод-бромлы ванна (ванна һыуында йод һәм бром тоҙҙары иретелгән була); *в. кислородная* кислородлы ванна (ванна һыуы кислород менән байытылған була); *в. контрастная* контраст ванна (кеше сиратлап бер йылы, бер һалҡын һыулы ваннаға ултыра); *в. крахмальная* крахмаллы ванна (ванна һыуында крахмал иретелгән була); *в. ледяная* боҙло ванна (ванна һыуында ваҡ боҙ киҫәктәре була); *в. лекарственная* дарыулы ванна (ванна һыуында ниндәй ҙә булһа дарыу иретелгән була); *в. местная* сикләнгына ванна (тәндең теге йә был ере; мәҫ., ҡулдар йәки аяҡтар ғына вана тәьҫирендә була); *в. морская* диңгеҙ һыуы ваннаһы (ваннала диңгеҙ һыуы йәки һыуҙа диңгеҙ һыуындағы тоҙҙар иретелгән була); *в. общая* дөйөм ванна (кеше арттан муйынға тиклем, алдан йөрәк тәңгәленә тиклем ванна һыуында була); *в. паровая* пар (быу) ваннаһы; *в. песочная* ҡом ваннаһы (йылытыу процедураһы өсөн гәҙәти таҙа ҡомдан файҙаланыу); *в. прохладная* һалҡынса ванна (ванна һыуының температураһы +20 —33° тирәһендә була); *в. радиоактивная* радиоактив ванна (ванна һыуында иретелгән хәлдә радон йәки уның тоҙҙары була); *в. световая* яҡтылыҡ ваннаһы (электр лампаһынан төшкән нурҙар йылыһы менән дауалау); *в. сероводород-*

*ная (кара:* **в. сульфидная**); *в. сидячая* ултырып ҡабул ителеүсе ванна; *в. солнечная* ҡояш ваннаһы; *в. субаквальная* субакваль ванна (йылы ванна алғанда арт юл аша һыу ебәреп, эсәктәрҙе йыуып таҙартыу); *в. сульфидная* сульфид ваннаһы (ванна һыуында күкертлө водород иретелгән була); *в. суховоздушная* ҡоро һауа ваннаһы (+70—80 градусҡа тиклем йылытылған ҡоро һауала ултырыу рәүешендә дауаланыу); *в. углекислая* күмер әселе ванна (ваннала күмер кислотаһы иретелгән була); *в. хвойная* ылыҫлы ванна (ваннала ылыҫ экстракты иретелгән була); *в. хлоридная* хлоридлы ванна (ваннала аш тоҙо иретелгән була); *в. холодная* һалҡын ванна (ванна һыуының температураһы +20 градустан түбәнерәк була)

**ванночка** ванночка (мәҫ., күҙ ванночкаһы)

**варикозный** варикоз (төйөрләнеп киңәйеүгә ҡағылышлы, мәҫ., веналарҙың варикоз киңәйеүе)

**варикоцеле** варикоцеле (орлоҡ бауы веналарының варикоз киңәйеүе)

**вариолоид** вариолоид (натураль сәсәккә ҡаршы вакцинация алған кешеләрҙә күҙәтелеүсән еңел үткән натураль сәсәк)

**вариоляция** вариоляция (элекке заманда ҡулланылған натураль сәсәккә ҡаршы актив иммунизация: сирле кешенең сәсәк күперткеһенең эрене һау кешегә индерелгән)

**васкулит** васкулит (ҡан тамырҙары көбөнөң шешеүе; күп төрлө ауырыуҙарға хас күренеш); *в. геморрагический* геморрагик васкулит (аллергик ауырыу: ваҡ ҡан тамырҙарынан ҡан һауыу, һөйәк-быуын шешеүе, эстең ауыртыуы менән үтә); *в. узелковый* төйөрлө васкулит (сирле үҙгәрештәр нигеҙҙә тире ҡан тамырҙарында була)

**васкуляризация** васкуляризация (яңы ҡан тамырҙарының барлыҡҡа килеүе, ҡан тамырҙары менән айырым ағза-туҡыманы тәьмин итеү)

**вата** мамыҡ (төрҙәре: *в. гигиеническая* гигиеник мамыҡ (ҡатынҡыҙҙар гигиеник пакеттары өсөн ҡулланыла); *в. гигроскопическая* гигроскопик мамыҡ (майҙан таҙартылған һәм дым-һыуҙы яҡшы һеңдергән мамыҡ); *в. компрессная* компресс мамыгы (нигеҙҙә, компресс һалыу өсөн ҡулланыла); *в. кровоостанавливающая* ҡан туҡтатҡыс мамыҡ (гигроскопик мамыҡҡа өс хлоридлы тимер индерелә); *в. стерильная* стериль мамыҡ (стерилизация үткән мамыҡ; *кара:* **стерилизация**); *в. хирургическая* хирургик мамыҡ (гигроскопик мамыҡ); *в. целлюлозная* целлюлоз мамыҡ (тәбиғи мамыҡтан һәм целлюлозанан тора); *в. фибринная* фибрин мамыҡ (ҡан плазмаһынан алынып ҡан туҡтатыу өсөн ҡулланыла торған дауа матдәһе)

**введение** *(процед.)* индереү, ебәреү (мәҫ., *в. лекарств в вену* вена аша дарыу ебәреү)

**вдох** тынды эскә алыу

**вдувание** *(процед.)* өрөп индереү (мәҫ., дарыуҙы танауға өрөп индереү)

**вегетарианец** вегетарианец (вегетарианлыҡ системаһын һаҡлап йәшәүсе кеше)

**вегетариа́нство** вегетарианлыҡ (һөттән, үҫемлектән әҙерләнгән аш менән генә туҡланыу системаһы)

**вегета́ции** вегетациялар (тире йәки тиресәнең артыҡ — шеш рәүешендә үҫеш алыуы)

**вегетомиофасци́т** вегетомиофасцит (профессиональ ауырыу: артыҡ физик көсөргәнеш, бер төрлө хәрәкәт, һыуыҡ тейҙереү, вибрация тәьҫиренән була, нигеҙҙә, беләк һәм ҡул суғы зарарлана)

**вегетонevро́з (вегетопатия)** вегетоневроз (неврлоздың бер төрө: вегетатив нервы системаһының тиҙ ярһып барыусанлығы)

**везикули́т** везикулит (орлоҡ ҡыуыҡсаһының шешеүе)

**везикулопростати́т** везикулопростатит (орлоҡ ҡыуыҡсаһы һәм простата биҙенең бер юлы шешеүе)

**ве́ко** күҙ ҡабағы (*в. отечное* шешмәк күҙ ҡабағы)

**векторбаллистокардиогра́фия** векторбаллистокардиография (йөрәккә үткәрелгән баллистокардиографияның бер төрө)

**векторкардиогра́фия** векторкардиография (йөрәктә барған электр процестарын өйрәнеү рәүешендә йөрәк ауырыуҙарын асыҡлау)

**велоэргометри́я** велоэргометрия (физик күнекмәләр биреп, кешенең йөрәк эшсәнлеген тикшереү ысулы)

**ве́на(ы)** вена, веналар (ҡанды йөрәккә алып килеүсе ҡан тамырҙары): *в. бедренная* бот венаһы; *в. безымянная* исемһеҙ вена (күкрәк ситлегендә); *в. воротная* ҡапҡа венаһы (ҡанды эсәк-ҡарындан бауырға килтерә); *в. диафрагмальная* диафрагма (күкрәк ярышауы) венаһы; *в. затылочная* соңҡа (елкә) венаһы; *в. общая подвздошная* дөйөм бығым венаһы (янбаш өлкәһендә); *в. позвоночная* умыртҡалыҡ венаһы; *в. полая* (верхняя, нижняя) өҫкө (аҫҡы) эсе ҡыуыш вена; *в. срамной губы* (задняя, передняя) оят ситенең артҡы (алғы) венаһы; *в. яичковая* күкәй венаһы; *в. яичниковая* түллек венаһы; *в. яремная* (внутренняя, наружная) эске (тышҡы) барлау венаһы (муйында); *в. большого мозга* ҙур мейе веналары; *в. грудные* күкрәк веналары; *в. клитора* клитор (нәфсе төймәһе) веналары һ. б.)

**вендиспансе́р** *ҡара:* **диспансер кожно-венерологический**

**венери́ческий** венерик (мәҫ., венерик ауырыу)

**венерологи́ческий** венерология, венерологик (мәҫ., венерология диспансеры)

**венеро́лог** венеролог (венерик ауырыуҙар белгесе, врач)

**венероло́гия** венерология (медицинаның венерик ауырыуҙарҙы өйрәнеүсе тармағы)

**венерофоби́я** венерофобия (венерик ауырыуҙарга ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**венопу́нкция** венопункция (венаға пункция үткәреү; *ҡара:* **пункция)**

**веносе́кция** веносекция (вена тамырын ярыу)

**веноста́з** веностаз (вена тамырҙарындағы стаз; *ҡара:* **стаз)**

**венотромбо́з** венотромбоз (вена тромбозы; *ҡара:* **тромбоз)**

**вентиля́ция** вентиляция (1. бүлмәне, бинаны елләтеү, мәҫ., *в. вытяжная* һурыу вентиляцияһы (биналағы файҙаланылған һауа-

ны механик юл менән һурҙырып сығарыу); *в. естественная* тәбиғи вентиляция (бина һауаһы тәҙрә, ишек ярыҡтары аша алмаша); *в. искусственная* яһалма вентиляция (вентилятор, компрессор ярҙамында елләтеләә; 2. үпкәгә килгән веноз ҡандың артериаль ҡанға әүерелеүе, мәҫ., *в. легких максимальная* үпкәнең максималь вентиляцияһы (үпкәнең һәләтен билдәләү ысулы); *в. легких искусственная; ҡара:* **дыхание искусственное**)

**вентрикули́т** вентрикулит (баш мейе ҡарынсалары көбөнөң шешеүе)

**вентрикулогра́фия** вентрикулография (рентген ярҙамында баш мейеһе ҡарынсаларын тикшереү ысулы)

**вентрикулоскопи́я** вентрикулоскопия (вентрикулоскоп приборы ярҙамында баш мейеһе ҡарынсаларын ҡарап тикшереү)

**веррукозный** веррукоз (һөйәлгә оҡшаш)

**вертел бедра** бот һөйәге сурайы

**верху́шка** *(анат.)* ос, түбә (мәҫ., *в. легкого* үпкә осо)

**весну́шки** һипкел (көрән-һары төҫтәге пигмент таптар, ультрафиолет нурҙар (мәҫ., ҡояш төшөүҙән) ионизациялау радиациянан һипкелдең ҡарайыуы арта)

**вестибули́т** вестибулит (ҡатын-ҡыҙ енсәһе алды тиресәһенең шешеүе)

**вестибулопати́я** вестибулопатия (эске ҡолаҡ функцияһының боҙолоуы)

**ветвь** тармаҡ (мәҫ., *в. блуждающего нерва* гиҙеүсе нервы тармағы һ. б.)

**ветря́нка** *ҡара:* **оспа ветряная**

**веществó** матдә (мәҫ. *в. витаминоподобное* витаминға оҡшаш матдә (ашамлыҡта була, әммә уларҙың юҡлығы авитаминоз күренеше тыуҙырмай); *в. канцерогенное (ҡара:* **канцерогены**); *в. корковое волоса* сәстең ҡабыҡ матдәһе; *в. корковое надпочечника* бөйөр өҫтө биҙенең ҡабыҡ матдәһе; *в. корковое почки* бөйөрҙөң ҡабыҡ матдәһе; *в. кости, губчатое* кимек һөйәге (матдәһе); *в. кости, компактное* һөйәктең компакт (ҡаты) матдәһе; *в. межклеточное* күҙәнәк-ара матдәһе; *в. мозга белое* мейенең аҡ матдәһе; *в. мозга серое* мейенең һоро матдәһе; *в. отравляющее* ағыулаусы матдә; *в. питательное* туҡлыҡлы матдә; *в. пищевое* аҙыҡ матдәһе, ашамлыҡ матдәһе; *в. радиактивное* радиактив матдә; *в. роговое* мөгөҙ матдәһе; *в. стекловидное* быяла һымаҡ матдә (есем); *в. химическое* химик матдә; *в. экстрактивное* экстрактив матдә (үҫемлек һәм хайуан ағза-туҡымаларындағы аҡһымһыҙ матдә; *в. ядовитое (токсическое)* ағыулы матдә һ. б.)

**взаимопóмощь** *(мед.)* үҙ-ара ярҙам (зарарланған йә ауырып киткән кешегә медик булмаған кеше тарафынан беренсе медицина ярҙамын күрһәтеү)

**взве́сь лекарственная** дарыу буръяғы *(ҡара:* **суспензия**)

**взгляд** ҡараш

**взду́тие живота** эстең күбеүе *(ҡара:* **метеоризм**)

**вибра́ция** вибрация (машина-аппараттарҙың һ. б. механик рәүештә ритмлы тирбәлеүе. Шуның тәьҫиренән вибрация ауы-

рыуы башлана; *кара:* **болезнь вибрационная)**

**вибрио́н** вибрион (өтөргә оҡшаш бактерия, мәҫ., *в. холерный* ваба вибрионы; *в. Эль-тор* Эль-Тор вибрионы (ваба вибрионының бер төрө)

**вибриононоси́тельство** вибрион йөрөтөүсәнлек (вибрионға ҡарата бактерия йөрөтөүсәнлек; *кара:* **бактерионосительство)**

**виброизоля́ция** виброизоляция (көслө вибрация биргән ҡорамалдарҙа, машиналарҙа һ. б. вибрацияны йотоусы «кәртә» төҙөү)

**виброкардиогра́фия** виброкардиография (йөрәк эшсәнлеген өйрәнеү ысулдарының береһе)

**вибромасса́ж** вибромассаж (вибротерапияның бер төрө)

**вибротерапи́я** вибротерапия (механотерапияның бер төрө: түбән йышлыҡтағы һәм амплитудалағы механик тирбәлеүҙең кешенең бөтә тәненә йәки айырым еренә тәьҫир итеүе; *кара:* **механотерапия**

**вибротра́вма** вибротравма (вибрациянан ағза-туҡымаларҙың зарарланыуы)

**вива́рий** виварий (ғилми-тикшеренеү йәки биологик һынау өсөн кәрәк булған хайуан-йәнлектәрҙе аҫрау бинаһы)

**вивисе́кция** вивисекция (ғилми-тикшеренеү, күҙәтеү маҡсатында йәнлектәргә операция яһау)

**визуа́льный** визуаль (күреүгә ҡағылышлы)

**викасо́л** *кара:* **витамин К**

**виноградолече́ние** виноград менән дауалау

**ви́рго** *кара:* **девственница**

**вирили́зм** вирилизм (эндокрин биҙҙәр эшсәнлегенең үҙгәреүе һөҙөмтәһендә ҡатын-ҡыҙҙарҙа ирҙәргә хас өҫтәмә билдәләр (тауыш ҡалынлығы, һаҡал-мыйыҡ үҫеүе һ. б. (барлыҡҡа килеүе)

**вируле́нтность** вирулентлыҡ (микроорганизмдарҙың ауырыу тыуҙырыу һәләтлеге)

**вируле́нтный** вирулент (мәҫ., вирулент микроб)

**вирулици́дность** вирулицидлыҡ (химик матдәнең йәки физик факторҙың вирустарҙы зарарһыҙлау һәләтлеге)

**ви́рус** вирус (тик электрон микроскопы аша күрелә торған иң ваҡ микроскопик зат, мәҫ, *в. аттенуированный* аттенуацияланған вирус (ауырытыу сифаттары юҡ ителгән вирус); *в. бешенства* ҡотороу ауырыуы вирусы; *в. гриппа* грипп вирусы; *в. СПИДа* СПИД вирусы *(кара:* **СПИД** һ. б.)

**вирусеми́я** вирусемия (ауырыу тыуҙырыусы вирустарҙың ҡанда булыуы)

**ви́русный** вирус (мәҫ. вирус ауырыуҙары)

**вирусо́лог** вирусолог (вирусология белгесе)

**вирусоло́гия** вирусология (микробиологияның вирустар хаҡындағы тармағы)

**вирусоноси́тель** вирус йөрөтөүсе

**вирусоноси́тельство** вирус йөрөтөүсәнлек (теге йәки был вирус ауырыуын кисергәндән һуң организмда тере вирустарҙың һаҡланыуы)

**вирусоскопи́я** вирусоскопия (вирустарҙы электрон микроскоп аша ҡарап өйрәнеү)

**вирусури́я** вирусурия (ауырыу тыуҙырғыс вирустың һейҙек менән бүленеүе)

**вискозиметрия** вискозиметрия (ҡан йәбешкәклеген вискозиметр приборы ярҙамында билдәләү)

**витамины** витаминдар бик аҙ миҡдарҙа кәрәк булған һәм организмда барған биохимик һәм физиологик процестарҙа актив ҡатнашыусы органик матдәләр, төрҙәре: *в. А (ретинол, аксерофтол)* А витамины (уға бигерәк тә кишер, ҡуҙғалаҡ, аҡ май, ҡаймаҡ, йомортҡа һарыһы, мал бауыры бай, уның етешмәүе «тауыҡ күҙ» сиренә, тире ҡороуына, сәстең ныҡ ҡойолоуына сәбәпсе); *в.* $B_1$ витамины (уға бигерәк тә сүпрә, ҡара икмәк, һоло, ҡара бойҙай, бауыр бай; уның етешмәүе бери-бери ауырыуына сәбәпсе); *в.* $B_2$ *(рибофлавин)* $B_2$ витамины (уға һөт һәм ит ашамлыҡтары, йомортҡа һарыһы бигерәк тә бай; уның етешмәүе күҙ, тире, эсәк-ҡарын өсөн зарарлы); *в.* $B_3$ *(пантотеновая кислота, пантотенат кальция)* $B_3$ витиманины (уға мал бауыры, йомортҡа һарыһы, һөт, йәшелсә бигерәк тә бай; уның етешмәүе тире боҙолоуына, үсештең һүлпәнәйеүенә һ. б. сирле үҙгәрештәргә сәбәпсе); *в.* $B_4$ (холин) $B_4$ витамины (уға сөгөлдөр, башҡа йәшелсә, мал бауыры бигерәк тә бай, уның етешмәүе төрлө матдәләр алмашыныуына зарар килтерә); *в.* $B_6$ *(пиридоксин)* $B_6$ витамины (уға ит, бауыр, балыҡ, йәшелсә бигерәк тә бай, уның етешмәүе тиренең дерматит ауырыуына, тән тартышыуға, аҙ ҡанлылыҡҡа килтерә); *в.* $B_8$ *(инозит)* $B_8$ витамины (уға йәшелсә бигерәк тә бай, ул С витамины эшсәнлеген көсәйтә); *в.* $B_9$ *(фолиевая кислота)* $B_9$ витамины (уға бауыр, бөйөр һәм йәшелсә бигерәк тә бай, уның етешмәүе аҙ ҡанлылыҡҡа сәбәпсе); *в.* $B_{12}$ *(цианокобаломин)* $B_{12}$ витамины (уға бауыр, бөйөр, йомортҡа бигерәк тә бай, уның етешмәүе аҙ ҡанлылыҡҡа сәбәпсе); *в.* $B_{15}$ *(пангамовая кислота)* $B_{15}$ витамины (етешмәүе кислород ҡыҫынҡылығына, май матдәләре алмашыныуы боҙолоуына килтерә); *в.* $B_r$ *(карнитин)* $B_r$ витамины (уға ит бай, уның етешмәүе май матдәләре алмашыныуы өсөн зарарлы); *в. С (аскорбиновая кислота)* С витамины (уға гөлйемеш, ҡара ҡарағат, ҡыҙыл борос, һуған һ. б. бигерәк тә бай, уның етешмәүе организмдың ауырыуҙарға бирешмәүсәнлеген кәметә, зәңге ауырыуына килтерә); *в. Д (кальциферол)* Д витамины (төрҙәре: *в.* $Д_2$ йәки эргокальциферол $Д_2$ витамины; в. $Д_3$ йәки холекальциферол $Д_3$ витамины, был витаминдарға аҡ май, сыр, йомортҡа һарыһы, бауыр бигерәк тә бай, уларҙың етешмәүе минераль матдәләр алмашыныуын боҙа, рахит ауырыуына сәбәпсе); *в. Е (токоферол)* Е витамины (уға шытҡан иген, үҫемлек майҙары бигерәк тә бай, уның етешмәүе төрлө матдәләр алмашыныуы өсөн зарарлы); *в. F (незаменимые жирные кислоты)* F витамины (мал һәм үҫемлек майҙары составына арахидон, линоль, линолен исемле майлы кислоталар инә, улар төрлө матдәләр алмашыныуында актив ҡатнаша); *в. Н (биотин)* Н витамины (уға йомортҡа һарыһы, сәскәле кәбеҫтә һ. б. бигерәк тә бай, уның етешмәүе тиренең зарар-

ланыуына килтерә); *в. К (филлохиноны)* К витамины (уға үҫемлектәрҙең йәшел өлөшө бай, уның етешмәүе ҡанаусанлыҡҡа килтерә, ферменттар активлығын түбәнәйтә); *в. Р (биофлавоноиды)* Р витамины (ҡан капиллярҙары үткәреүсәнлеген нормаллаштыреуҙә актив ҡатнашыусы матдәләр; *в. РР (никотиновая кислота)* РР витамины (уға малдан алынған аҙыҡ: ит, һөт, май бай, уның етешмәүе пеллагра ауырыуына сәбәпсе), *в.* U U витамины (уға баҡса йәшелсәһе бай, уның етешмәүе матдәләр алмашыныуы өсөн зарарлы) һ. б.)

**витаминиза́ция** витаминизация (1. айырым бер халыҡ төркөмөнә, мәҫ., балаларға витаминлы ашты күберәк ашатыу; 2. Ҡайһы бер аҙыҡҡа, ашамлыҡҡа витамин өҫтәү)

**витами́нный** витамин, витаминлы (витаминдарға ҡағылышлы)

**витаминоло́гия** витаминология (витаминдарҙың төҙөлөшөн, тәьҫир итеү механизмын һәм уларҙы дауалау-профилактик маҡсатта ҡулланыуҙы өйрәнеүсе фән)

**витаминотерапи́я** витаминотерапия (витамин(дар) ярҙамында дауалау)

**витили́го (песь)** витилиго, ала ауырыуы (нервы-эндокрин системаһының ҡаҡшауы сәбәпле тәндә пигментһыҙ — аҡ таптарҙың барлыҡҡа килеүе)

**ВИЧ (вирус иммунодефицита человека (ВИЧ)** кеше иммунодефициты вирусы йәки СПИД вирусы; *ҡара:* **СПИД)**

**ВКК** ВКК *(ҡара:* **комиссия врачебно-консультативная)**

**вкус** тәм (тойоу)

**вла́га глазная камерная** күҙ камераһы шыйыҡсаһы

**влага́лище** еңсә (1. ҡатын-ҡыҙ енес ағзаларының береһе; 2. тарамыш, ҡайһы бер мускул, тамыр-нервыны һ. б. урап алыусы көпшә, мәҫ., *в. зрительного нерва* күреү нервыһы еңсәһе)

**вла́жность** дымлылыҡ (мәҫ., *в. воздуха* һауа дымлылығы; *в. воздуха абсолютная* һауаның абсолют дымлылығы (бер кубик метрға тура килгән һауа дымлылығы), *в. воздуха относительная* һауаның сағыштырма дымлылығы (кеше өсөн иң уңайлыһы 40—60%) һауаның сағыштырма дымлылығы) һ. б.)

**власогла́в человеческий** ҡамсығорт (кеше эсәктәренә эйәләшеүсән паразит селәү, трихоцефалез исемле гельминтоз ауырыуын тыуҙыра)

**влече́ние** мәйел, ынтылыш, әүәҫлек (мәҫ., *в. половое* енси әүәҫлек)

**влива́ние** *(процед.)* дарыу ебәреү (тире аҫтына, венаға, тура эсәккә күпселектә тамсылап күп күләмдә шыйыҡса: физиологик иретмә, ҡан алмаштырғыс һ. б. ебәреү, мәҫ., ҡанды артерия аша ебәреү, дарыуҙы тире аҫтына ебәреү һ. б.)

**вменя́емость** иҫ-аҡыл теүәллеге (енәйәт ҡылған кешенең уголовный яуап бирергә һәләтле булыуы)

**вменя́емый** иҫ-аҡылы теүәл (кеше)

**вмеша́тельство** ҡатнашыу (ярҙам итеү, консультация биреү, дауалау, мәҫ., *в. хирургическое* хирургик ҡатнашыу (операция яһау йәки хирург башҡарған башҡа ярҙам (һ. б.)

**внуша́емость** инандырыусанлыҡ

(психик йоғонтоға тиҙ бирешеүсәнлек)
**внушéние** инандырыу, күңелгә һеңдереү, ышандырыу (психотерапияның төп формаһы; төрҙәре: *в. гипнотическое* гипноз ярҙамында инандырыу *(ҡара:* **гипноз);** *в. зрительное* ҡарап инандырыу; *в. прямое* туранан-тура инандырыу (туранан-тура һөйләшеп); *в. словесное* (вербальное) һөйләшеп (вербаль) инандырыу һ. б.)
**водá** һыу (төрҙәре: *в. дистиллированная* дистиллирланған һыу (татырҙан таҙартылған һыу); *в. жесткая* татырлы һыу; *в. минеральная* минераль һыу; шур; *в. мягкая* йомшаҡ һыу (татырһыҙ һыу); *в. целебная* шифалы һыу; *в. хлорированная* хлорланған һыу)
**водобоя́знь** *ҡара:* **бешенство**
**водогрязелечéбница** һыу-ләм дауаханаһы
**водолечéбница** һыу дауаханаһы
**водопровóд** *(анат.)* һыу үткәргес *(в. мозга* баш мейеһенең һыу үткәргесе (мейенең өсөнсө һәм дүртенсе ҡарынсыҡтарын тоташтырғыс канал); *в. преддверия (внутреннего уха)* эске ҡолаҡ инеш алдының һыу үткәргесе; *в. улитки* ҡусҡар һыу үткәргесе (эске ҡолаҡта)
**водоснабжéние** һыу менән тәьмин итеү (халыҡты, промышленность предприятиеларын, спорт ҡорамалдарын һ. б. һыу менән тәьмин итеү саралары комплексы)
**вóды околоплодные** ғоман һыуы
**вóды сточные** ташландыҡ һыу
**водя́нка** һары һыу ауырыуы (организмдың ниндәй ҙә булһа ҡыуышлығында, мәҫ., күкрәк ситлегендә, эстә һ. б. һары һыу (транссудат) йыйылыуы, мәҫ., *в. сустава* быуында һары һыу ауырыуы һ. б.)
**военврáч (военный врач)** хәрби врач
**военфéльдшер (военный фельдшер)** хәрби фельдшер
**ВОЗ (всемирная организация здравоохранения)** ВОЗ (Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау (эштәре) ойошмаһы)
**возбуди́мость** *(физиол.)* ярһыусанлыҡ (ҡуҙғытыуға яуап биреү һәләтлеге)
**возбуди́тель инфекции** инфекция тыуҙырғыс (мәҫ., дизентерия тыуҙырғыс)
**возбуждéние** ярһыу (1. *(физиол.)* ҡуҙғытыуға яуап реакцияһы; 2. *(в психиатрии)* психик һәм физик активлыҡтың көсәйеүе менән характерлы психик һаулыҡтың ҡаҡшауы)
**воздух** һауа (төрҙәре: *в. влажный* дымлы һауа; *в. горный* тау һауаһы; *в. затхлый (спёртый)* тынсыу (боҙоҡ) һауа; *в. ионизированный* ионизацияланған һауа; *в. кондиционированный* кондиционирланған һауа *(ҡара:* **кондиционирование воздуха);** *в. свежий* саф һауа һ. б.)
**воздухообмéн** һауа алмашыныуы (мәҫ., торлаҡтағы һауа тыштағы атмосфера һауаһы менән алмашына)
**вóзраст** йәш, осор, дәүер (1. *в. календарный* календар йәш, мәҫ., 15 йәш, 20 йәш һ. б.; 2. *в. биологический* биологик йәш (дәүер), мәҫ., *в. грудной* баланың имеү дәүере; *в. дошкольный* мәктәпкәсә йәштәге дәүер; *в. зрелый* кешенең өлгөрөү дәүере (ҡатынҡыҙҙарҙың 20 йәштән алып 55

йәшкә тиклем, ирҙәрҙең 21-ҙән 60-ҡа тиклем); *в. подростковый (пубертатный)* үҫмер йәш дәүере (ҡыҙҙарҙың 12 йәштән 16-ға тиклем, малайҙарҙың 13-тән 17—18 йәшкә тиклем); *в. репродуктивный* репродуктив дәүер (бала табыуға һәләтле дәүер); *в. старческий* ҡартлыҡ дәүере (75-тән алып һәм күберәк йәш); *в. школьный* мәктәп дәүере; *в. юношеский* егет-ҡыҙ дәүере (ҡыҙҙарҙа 16 йәштән алып 21-гә тиклем, егеттәрҙең 17-нән алып 21-гә тиклем дәүер); *в. ясельный; ҡара:* **в. грудной** һ. б.)

**волды́рь** күберсек (ҡапыл бүртеп сыҡҡан сабыртма)

**волокно́** епсә (мәҫ., *в. нерва* нервы епсәһе)

**во́лос (волосы)** сәс, төк, сәс бөртөгө (төрҙәре: *в. вросший* тәнгә батҡан сәс (сәс бөртөгө — осо тәнгә ингән була); *в. белокурый* һары сәс, *в. пушковый* бәпкә йөн (бала йөн); *в. рыжий* ерән сәс; *в. седой* сал (аҡ) сәс; *в. щетинистый* ҡыл сәс, мәҫ., ҡаш, керпек)

**волоса́тик** ҡыл йылан (ваҡ паразит селәү, кешелә күҙәтелмәй)

**волча́нка** сөсө ауырыуы (1. *в. вульгарная (туберкулезная)* туберкулез сөсө ауырыуы (тире туберкулезының бер төрө); 2. *в. красная* ҡыҙыл сөсө ауырыуы (коллагеноз рәтенә ингән тире, быуындарҙы, эске ағзаларҙы зарарлаусы дөйөм ауырыу; төрҙәре: *в. красная дискоидная* дискоид ҡыҙыл сөсө ауырыуы (ғәҙәттә, биттә тиреһе йоҡарған ҡыҙыл таптар сығыу менән билдәләнгән ауырыу); *в. красная диссеминированная* диссеминациялы ҡыҙыл сөсө ауырыуы (тәндең байтаҡ өлөшөн зарарлаусы ауырыу); *в. красная острая* киҫкен ҡыҙыл сөсө ауырыуы (ғәҙәттә, эске ағзаларҙы зарарлаусы етди дөйөм ауырыу һ. б.)

**во́лчья пасть** *ҡара:* **незаращение нёба**

**воро́та** ҡапҡа, инеү урыны (1. *анат.* ҡайһы бер ағзаларҙағы тамыр, нервыларҙың инер-сығыр өсөн соҡорло ере, урыны, мәҫ., *в. легкого* үпкә ҡапҡаһы; 2. йоғошло ауырыу тыуҙырғыс заттың кеше йәки хайуан организмына инеү урыны: *в. инфекции* инфекцияның ингән урыны)

**ворси́нки кишечные** эсәк өбөрсәләре

**воспале́ние** шешеү (төрҙәре: *в. катаральное* катараль шешеү (тиресә ҡатламдың шешеүе, мәҫ., ашҡаҙандың катараль шешеүе); *в. крупозное* крупоз шешеү (үпкә шешеүенең бер төрө); *в. острое* киҫкен шешеү (ҡапыл башлана, оҙаҡҡа һуҙылмай); *в. очаговое* сикле шешеү; *в. подострое* ярым киҫкен шешеү; *в. пролиферативное* пролифератив шешеү (шешкән ерҙәге күҙәнәктәрҙең артыҡ үҫеш алыуы); *в. фибринозное* фибриноз шешеү (фибринлы экссудат бүленеү менән характерлы; *ҡара:* **фибрин**); *в. физиологическое* физиологик шешеү (тәбиғи күренеш, мәҫ., күрем килгәндә аналыҡ тиресәһенең шешеүе); *в. хроническое* хроник шешеү (дауамлы, оҙаҡҡа һуҙылыусан шешеү); *в. экссудативное* экссудатив шешеү (экссудат шыйыҡсаһы бүленеү менән үтә; *ҡара:* **экссудат**) һ. б.

**воспалённый** шешкән

**воспали́тельный** шешеү (мәҫ., шешеү процесы)

**воспита́ние** тәрбиә (төрҙәре: *в. гигиеническое* гигиеник тәрбиә; *в. половое* енси тәрбиә; *в. умственное* аҡыл тәрбиәһе; *в. физическое* физик тәрбиә һ. б.)

**восприя́тие** ҡабул итеү, үҙләштереү (кешегә килгән төрлө информацияны (ишетеү, күреү һ. б.) баш мейеһе тарафынан ҡабул итеү, аңлау системаһы, мәҫ., *в. зрительное* күргәнде ҡабул итеү, күреү һ. б.)

**восприи́мчивость (к инфекции)** бирешеүсәнлек

**восстановле́ние** *(мед.)* ҡайтыу, ҡайтарыу (мәҫ., һаулыҡтың ҡайтыуы (яҡшырыуы); *в. трудоспособности* хеҙмәткә яраҡлылыҡты ҡайтарыу һ. б.)

**вошь** бет (*в. головная* баш бете; *в. лобковая* түмһәкәй бете; *в. платяная* кейем бете)

**впа́дина** *(анат.)* соҡор (мәҫ., *в. глазная* күҙ соҡоро)

**вправле́ние** *(мед.)* ултыртыу, индереү (мәҫ., *в. вывиха* быуын (төшөрөү) ултыртыу; *в. грыжи* бөҫөрҙе индереү)

**впры́скивание (лекарства)** дарыу ҡаҙау (һүҙ аҙ миҡдарҙағы дарыу хаҡында бара, шулай уҡ *ҡара:* **инъекция**)

**врач** врач (мәҫ., *в. главный* баш врач; *в. дежурный* дежур врач; *в. санитарный* санитария врачы; *в. участковый* участка врачы һ. б.)

**враче́бный** врач, врачлыҡ, врачтар (мәҫ., *врачебный совет* врач кәңәше, *врачебная специальность* врачлыҡ һөнәре, *врачебная конференция* врачтар конференцияһы)

**вре́дности профессиональные** профессиональ зарарлыҡ (эштә профессиональ ауырыуға килтерә алған зарарлы күренештәр)

**врождённый** тыумыштан килгән

**вре́мя** ваҡыт (мәҫ., *в. свертывания крови* ҡан ойоу ваҡыты (ҡандың ойоу һәләтлеген билдәләү ысулы) һ. б.)

**всасываемость** һеңеү, һеңдереү (аш ҡайнатыу юлдарынан, ҡорһаҡ, күкрәк ҡыуышлығынан, тиренән төрлө матдәләрҙең ҡанлимфаға үтеүе)

**вска́рмливание (грудных детей)** туйындырыу, туҡландырыу, ашатыу (мәҫ., *в. грудное* имеҙеп туйындырыу (имеҙеү); *в. искусственное* яһалма туйындырыу (имсәк бирмәйенсә, балалар өсөн яраҡлы ашамлыҡтар: туҡлыҡлы ҡатнашмалар һ. б. менән туйындырыу)

**вскры́тие трупа** мәйетте ярып тикшереү) мәҫ., *в. патолого-анатомическое* мәйетте патологияанатомик ярып тикшереү; *в. судебно-медицинское* суд-медицина ярып тикшереүе)

**вспы́шка заболевания** ауырыуҙың киҫкен көбәйеүе (мәҫ., гриптың)

**втира́ние** *(лек.)* ышҡып (ыуып) индереү (тире аша дарыуҙы индереү ысулы)

**ВТЭК** ВТЭК (*ҡара:* **комссия врачебно-трудовая экспертная)**

**вульви́т** вульвит (ҡатын-ҡыҙ тышҡы енес ағзаларының шешеүе)

**вульвовагини́т** вульвовагинит (ҡатын-ҡыҙ тышҡы енес ағзалары һәм еңсәһенең бер юлы шешеүе)

**вход** *(анат.)* инеш (мәҫ., ашҡаҙан инеше)

**вши** *ҡара:* **вошь**

**вши́вость** бетлелек, бетле булыу

**выбуха́ние мозга** мейенең тумпайып (бүртеп) сығыуы (баш мейе шекәрәһендә һәм баш ҡумтаһы һөйәктәрендә дефект (ти-

шек) булғанда күҙәтелгән күренеш)

**вывих** сығыу, тайыу (1. *в. сустава* быуын сығыу; төрҙәре: *в. врождённый* быуындың тыумыштан сығыуы; *в. застарелый* быуындың күптәнге (электән) сығыуы; *в. неполный* быуындың ярты-лаш сығыуы; *в. паралитический* быуындың паралитик сығыуы (быуындың сығыуы урындағы мускулдар параличы һөҙөмтәһендә була); *в. патологический* быуындың патологик сығыуы (ауырыу һөҙөмтәһендә); *в. полный* быуындың тулы сығыуы; *в. привычный* быуындың ҡайтмалы сығыуы (ваҡыты-ваҡыты менән тайыуы); *в. травматический* быуындың травматик сығыуы (травманан һуң); 2. *в. глаза* күҙҙең тайыуы; *в. зуба* тештең тайыуы; *в. хрусталика* күҙ яҫмағы тайыуы һ. б.)

**выворот** әйләнеп сығыуы; төшөүе (мәҫ., *в. век* күҙ ҡабағының әйләнеп сығыуы; *в. влагалища (ҡара:* **выпадение влагалища**); *в. матки* аналыҡтың әйләнеп сығыуы)

**выгреб** ташландыҡ соҡоро (гидроизоляция материалы менән уратып алынған санитария-техник ҡоролма)

**выделение** бүленеү (мәҫ., *в. желчи* үт бүленеүе)

**выделения** бүлендек (мәҫ., *в. влагалищные* еңсә бүлендеге)

**выделительный** бүлеп сығарғыс (мәҫ., бүлеп сығарғыс ағзалар)

**выдёргивание зуба** теш һурыу

**выдох** тынды сығарыу

**выздоравливающий** һауығып (сәләмәтләнеп) килгән

**выздоровление** һауығыу, сәләмәтләнеү

**выкидыш** *ҡара:* **аборт**

**выносливость** сыҙамлылыҡ

**выпадение** төшөү, ҡойолоу (мәҫ., *в. влагалища* еңсә төшөүе; *в. волос* сәс ҡойолоу; *в. зуба* теш төшөүе; *в. прямой кишки* тура эсәк төшөүе)

**выпот (воспалительный)** *ҡара:* **экссудат**

**выпускание (напр. крови)** ҡан алыу

**выпячивание грыжевое** бүҫерҙең бүлтәйеп сығыуы

**вырождение** *ҡара:* **дегенерация**

**выскабливание** ҡырыу (операцияһы). мәҫ., *в. диагностическое* диагнозлау йәки ауырыуҙы асыҡлау маҡсатында ҡырыу операцияһы; *ҡара:* **абразия)**

**выслушивание** *ҡара:* **аускультация**

**выстукивание** *ҡара:* **перкуссия**

**высыпание** сабыртма (шулай уҡ *ҡара:* **сыпь)**

**вытрезвитель** *ҡара:* **медвытрезвитель**

**вытяжение** *(процед.)* һуҙыу, тартыу (мәҫ., *в. скелетное* һөйәктән һуҙыу (һөйәге һынғанда ҡулланыла торған хирургик ярҙам) һ. б.)

**вытяжка** *(фарм.)* һығынты *(ҡара:* **экстракт)**

**вычленение** *ҡара:* **экзартикуляция**

**вяжущий** ҡамаштырғыс, ҡамаштыра торған (мәҫ., ҡамаштырғыс дарыу)

**вязкость крови** ҡан йәбешкәклеге

**вялость** 1. һүлпәнлек, йомшаҡлыҡ (мәҫ., *в. брюшной стенки* ҡорһаҡ көбө һүлпәнлеге); 2. хәлһеҙлек

# Г

**га́битус** габитус (организмдың тышҡы күренеше; кешенең тышҡы ҡиәфәте (тән төҙөлөшө, тән төҫө, йөҙө, ҡиәфәте һ. б.)

**гадю́ки** ҡара йыландар (ағыулы йыландар төрө, мәҫ., *серая гадюка (обыкновенная)* ҡара йылан)

**газ** газ (мәҫ., *г. угарный* һөрөм газы; *г. углеки́слый* күмер әселе (углекислый) газ (тын алғанда бүленә торған газ, медицинала һулышты яҡшыртыу маҡсатында дауа рәүешендә ҡулланыла)

**газовый** газ (газға ҡағылышлы)

**газообме́н** газ алмашыныуы (кеше һәм тышҡы мөхит менән аралашыуы, мәҫ., кеше һауанан кислород ала һәм күмер әселе газ бүлеп сығара)

**газоотведе́ние (кишечных газов)** эсәктәрҙе газдан бушатыу

**газоубе́жище** газоубежище (ағыулы газдан һаҡланыу урыны)

**газоулови́тели** газ йыйыусы ҡоролмалар

**га́зы кишечные** эсәк газдары (эсәктә йыйылған бүлендек газдар)

**гаймори́т** гайморит (яңаҡ ҡыуышлыҡтарының шешеүе); төрҙәре: *г. аллергический* аллергик гайморит *(ҡара:* **аллергия**); *г. атрофи́ческий* атрофик гайморит *(ҡара:* **атрофия**); *г. гнойный* эренле гайморит; *г. катаральный* катараль гайморит *(ҡара:* **воспаление катаральное**); *г. острый* киҫкен гайморит *(ҡара:* **воспаление острое**); *г. хронический* хроник (дауамлы) гайморит һ. б.)

**галакторе́я** галакторея (имсәк һөтөнөң үҙенән-үҙе ағып сығыуы)

**галактоста́з** галактостаз (имсәк биҙендә һөт тулышыу)

**галлюцинато́рный** галлюцинатор (галлюцинацияға ҡағылышлы)

**галлюцина́ции** галлюцинациялар (психик һаулыҡ ҡаҡшау һөҙөмтәһендә килгән һиҙеү-тойоу яңылышыуҙары, мәҫ., *г. зрительные* күреү галлюцинациялары (күҙгә күренеү); *г. слуховые* ишетеү галлюцинацияһы һ. б.)

**галлюцино́з** галлюциноз (төрлө-төрлө галлюцинациялар һәм илереү, һаташыу менән характерлы психопатологик синдром)

**гальваниза́ция** гальванизация (түбән көсөргәнешле даими электр тогын диагноз ҡуйыу, дауалау өсөн ҡулланыу)

**гальваногрязелече́ние** гальваноләм дауалауы (гальванизацияны шифалы ләм менән берлектә ҡулланыу)

**гальванодиатерми́я** гальванодиатермия (гальванизация һәм диатермияны берлектә ҡулланыу)

**гальваноионотерапи́я** *ҡара:* **электрофорез лекарственный**

**гальванока́устика** гальванокаустика (гальванокаутер приборы ярҙамында электр тогы менән тҡымаларҙы көйҙөрөп дауалау)

**гальванотерапи́я** гальванотерапия (электр дауаның бер төрө; быуын, мускул, нерв ауырыуҙарына гальваник йәки даими ток менән тәьҫир итеү)

**гамазориккетсио́з** гамазориккетсиоз (риккетсиялар бактериялары йоғоуынан килгән бер төркөм ауырыуҙар, *ҡара:* **риккетсии**)

**гамбу́зия** гамбузия (тапма ауырыуы серәкәйе менән туҡланыусы ваҡ балыҡ, тапма ауырыуы булған ерҙә үрсетелә)

**га́мма-глобули́н(ы)** гамма-глобулин(дар) (антиесем функцияһына эйә булған ҡан плазмаһы аҡһымдары; *ҡара:* **антитела)**

**гаммаглобулинопрофила́ктика** гаммаглобулинопрофилактика (гаммаглобулиндарҙы инфекцион ауырыу булдырмау маҡсатында ҡулланыу)

**га́мма-излуче́ние** гамма-нурланыш (атом йәҙрәһенең энергетик торошо үҙгәреүенән килгән фотон нурланышы, ул биологик тәьҫир итеүгә эйә)

**га́мма-кардиогра́фия** гамма-кардиография (йөрәк эшсәнлеген тикшереү ысулының бер төрө)

**га́мма-терапи́я** гамма-терапия (гамма-нурланыш ярҙамында дауалау)

**га́мма-энцефалогра́фия** гамма-энцефалография (баш мейеһен тикшереү ысулы)

**га́нглии** ганглийҙар (үҙәк нервы системаһынан тыш булған мейе һоро матдәһе тупланмалары нервы күҙәнәктәренең ҡушылыуынан килә, мәҫ., *г. нервные* нервы ганглийҙары

**ганглиоблока́торы** ганглиоблокаторҙар *(ҡара:* **средство ганглиоблокирующее)**

**ганглионеври́т** ганглионеврит (нервы ганглийы һәм уға ҡараған нервы епсәләренең бер юлы шешеүе)

**ганглионевро́ма** ганглионеврома (нервы ганглийы күҙәнәктәренән сыҡҡан шеш)

**ганглиорадикули́т** ганглиорадикулит (арҡа мейеһе ганглийы һәм уға тура килгән арҡа мейе нервы тамырсаһы шешеүе)

**гангре́на** гангрена (туҡыманың тарҡалып үлеүе) төрҙәре: *г. влажная* дымлы гангрена; *г. газовая* газлы гангрена (анаэроб инфекция); *г. декубитальная (ҡара:* **пролежень)**; *г. диабети́ческая* диабет гангренаһы (ҡаты үткән шәкәр диабеты һөҙөмтәһе); *г. молниеносная* йәшендәй ганрена (анаэроб инфекцияһының ҡаты төрө)

**гангрено́зный** гангреноз (гангренаға ҡағылышлы)

**гастралги́я** гастралгия (ашҡаҙан ауырыуы һөҙөмтәһендә ашҡаҙан ауыртыуы)

**гастри́т** гастрит (ашҡаҙан тиресәһенең шешеүе; төрҙәре: *г. алиментарный* алиментар гастрит (рациональ туҡланмау йәки сәйнәү аппараты (тештәрҙең) боҙолоуынан килгән гастрит; *г. аллергический* аллергия гастриты *(ҡара:* **аллергия)**: *г. анаци́дный* анацид гастрит (ашҡаҙандың ирекле әселеге бөтөү менән билдәләнгән гастрит; *г. атрофический* атрофик гастрит, *(ҡара:* **атрофия**; *г. ахилический* ахилия гастриты *(ҡара:* **ахилия)**; *г. гиперацидный* гиперацид гастрит (ашҡаҙандың әселеге юғары булыуы менән характерлы гастрит); *г. гипертрофический* гипертрофик гастрит (ашҡаҙан тиресәһе ҡалынайыу менән характерлы гастрит); *г. гипацидный* гипацид гастрит (әселеге түбән булыуы менән характерлы гастрит); *г. катаральный* катараль гастрит *(ҡара:* **воспаление катаральное)**; *г. коррозивный (некротический)* коррозив гастрит (ашҡаҙан туҡымаһында некро-

тик үҙгәрештәр менән үтеүсе гастрит; *ҡара:* **некроз)**; *г. острый* киҫкен гастрит *(ҡара:* **воспаление острое)**; *г. полипозный* полипоз гастрит (ашҡаҙан тиресәһендә полип шештәре барлыҡҡа килеү менән үтеүсе гастрит); *г. токсико-химический* токсикохимик гастрит *(ҡара:* **гастрит коррозивный)**; *г. флегмонозный* флегмоноз гастрит (ашҡаҙан тиресәһенең эренләп шешеүе менән характерлы гастрит); *г. хронический* хроник (дауамлы) гастрит; *г. эрозивный* эрозив (сей яралы) гастрит)

**гастробиопси́я** гастробиопсия (ашҡаҙандың эске көбөнә яһалған биопсия; *ҡара:* **биопсия)**

**гастрогра́фия** гастрография (ашҡаҙан эшсәнлеген график һүрәт төшөрөү рәүешендә өйрәнеү)

**гастродуодени́т** гастродуоденит (ашҡаҙан һәм бөйән эсәге тиресәһенең бер юлы шешеүе)

**гастродуоденоскопи́я** гастродуоденоскопия (гастродуоденоскоп приборы ярҙамында ашҡаҙан һәм бөйән эсәге тиресәһен ҡарап тикшереү ысулы)

**гастромаляци́я** гастромаляция (ашҡаҙан көбөнең ауырыу сәбәпле тарҡалып йомшарыуы)

**гастропати́я** гастропатия (ашҡаҙан ауырыуҙарының дөйөм исеме)

**гастропла́стика** гастропластика (ашҡаҙан өлөшөн алмаштырыу пластик операцияһы)

**гастроплеги́я** гастроплегия (ашҡаҙандың нервы-мускулдар аппараты параличы)

**гастропто́з** гастроптоз (ашҡаҙан төшөүе)

**гастроскопи́я** гастроскопия (гастроскоп приборы ярҙамында ашҡаҙан тиресәһен ҡарап тикшереү ысулы)

**гастроспа́зм** гастроспазм (ашҡаҙан спазмаһы; *ҡара:* **спазм)**

**гастрофиброско́п** гастрофиброскоп (ашҡаҙан эсен ҡарау приборы)

**гастроэзофаги́т** гастроэзофагит (ашҡаҙан һәм ҡыҙыл үңәс тиресәләренең бер юлы шешеүе)

**гастроэнтери́т** гастроэнтерит (ашҡаҙан һәм нәҙек эсәк тиресәһенең бер юлы шешеүе)

**гастроэнтероколи́т** гастроэнтероколит (ашҡаҙан, нәҙек һәм туҡ эсәк тиресәһенең бер юлы шешеүе)

**гастроэнтеро́лог** гастроэнтеролог (ашҡаҙан һәм эсәк ауырыуҙары белгесе, врач)

**гастроэнтероло́гия** гастроэнтерология (медицинаның эсәк-ҡарын һәм уларҙың ауырыуҙары хаҡындағы бүлеге)

**гастроэнтеропто́з** гастроэнтероптоз (ашҡаҙан һәм эсәктәрҙең төшөүе)

**гастроэнтеростоми́я** гастроэнтеростомия (оператив юл менән ашҡаҙанды ас эсәккә тоташтырыу)

**гастроэктоми́я** гастроэктомия (ашҡаҙанды тотош алыу операцияһы)

**гаши́ш (анаша, ганша)** гашиш (һинд тармаһы орлоғонан алынған сайыр рәүешендәге наркотик матдә)

**гашиши́зм** гашишизм (гашиш ҡулланыуҙарҙан килгән наркомания; *ҡара:* **наркомания)**

**гвоздь** д л я о с т е о с и н т е з а остеосинтез өсөн сөй (һынған һөйәк остарын тоташтырыу өсөн ҡулланыла)

**гебефрени́я** гебефрения (шизофренияның бер төрө)

**гелиопатоло́гия** гелиопатология (ҡояш нурҙарының артыҡ йәки киреһенсә аҙ төшөүенән килгән ауырыуҙарҙың дөйөм исеме)

**гелиопрофила́ктика** гелиопрофилактика (профилактик маҡсатта ҡояш нурҙарынан файҙаланыу)

**гелиотерапи́я** гелиотерапия (ҡояш нурҙары ярҙамында дауалау ысулы)

**гельминто́з(ы)** гельминтоздар (паразит селәүҙәр — гельминттар йоғоуҙан килгән бер төркөм паразитар ауырыуҙар)

**гельминтозооно́з** гельминтозооноз (гельминтоздың бер төрө; кешелә лә, хайуанда ла паразит селәүҙәр бер стадияла йәшәй)

**гельминтоло́гия** гельминтология (паразит селәүҙәрҙе (гельминттарҙы), улар тыуҙырған ауырыуҙарҙы һәм көрәшеү юлдарын өйрәнеүсе фән)

**гельминтоноси́тельство** гельминт йөрөтөүсәнлек (гельминтоз ауырыуы тыуҙырмайынса паразит селәүҙәрҙең организмда йәшәүе)

**гельминтоовоскопи́я** гельминтоовоскопия (тиҙәкте, һейҙекте, ҡаҡырыҡты һәм организмдың башҡа бүлендектәрен, ағза-туҡымыларҙы, шулай уҡ тирә-яҡ тәбиғәт элементтарын микроскоп ярҙамында гельминт күкәйҙәренә тикшереү үткәреү)

**гельминтофа́уна** гельминтофауна (бер үк территорияла кешелә, хайуан-үҫемлектәрҙә осрай торған бөтә паразит селәүҙәр (гельминттар) бергәлеге)

**гельминтофоби́я** гельминтофобия (гельминттар йоғоуға ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия**)

**гельми́нты (паразитические черви)** гельминттар (кеше, хайуан һәм үҫемлектәрҙә гельминтоз ауырыуҙарын тыуҙырыусы паразит селәүҙәр)

**гем** гем (гемоглобиндың тимергә бай өлөшө)

**гемангио́ма** гемангиома, ҡыҙыл миң (ҡан тамырҙарынан барлыҡҡа килгән ангиома шеше); төрҙәре: *г. артериальная* артериаль гемангиома (артерия тамырҙарынан торған шеш); *г. венозная* веноз ангиома (вена тамырҙарынан торған шеш); *г. ветвистая* тармаҡлы гемангиома; *г. кавернозная* каверноз (көпшәкле) гемангиома; *г. плоская* ялпаҡ гемангиома)

**гемартро́з** гемартроз (быуын эсенә ҡан һауыу)

**гематоге́нный** гематоген (ҡанға, ҡан буйлап барыуға ҡағылышлы)

**гемато́лог** гематолог (ҡан һәм ҡан эшләп сығарыусы ағзалар ауырыуҙары белгесе, врач)

**гематоло́гия** гематология (медицинаның ҡан системаһы һәм ҡан система ауырыуҙарын, уларҙы дауалау һәм булдырмау юлдарын өйрәнеүсе тармағы)

**гемато́ма** гематома (ҡан һауыуҙан барлыҡҡа килгән шеш)

**гематофоби́я** гематофобия (ҡанға ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия**)

**гематоце́ле** гематоцеле (сикле ҡыуыш ағзала ҡан йыйылыуҙан барлыҡҡа килгән шеш)

**гематури́я** гематурия (һейҙектә ҡан булыуы)

**гемералопи́я (куриная слепота)** гемералопия (ҡараңғы төшкәс, күреү һәләтлеге түбәнәйеү менән характерлы күҙ ауырыуы)

**гемиалги́я** гемиалгия (тәндең уң

йәки һул яҡ яртыһының ауыртыуы)

**гемиатрофи́я** гемиатрофия (ауырыу сәбәпле ярты кәүҙәнең кесерәйеүе)

**гемипаре́з** гемипарез (ярты кәүҙә мускулдарының парезы; *ҡара:* **парез)**

**гемиплеги́я** гемиплегия (ярты кәүҙә мускулдарының параличы; *ҡара:* **паралич)**

**гемоглоби́н** гемоглобин (һулышты тәьмин итеп, ҡанға ҡыҙыл төҫ биреүсе эритроциттар эсендәге органик буяу матдәһе)

**гемоглобинеми́я** гемоглобинемия (ҡан плазмаһында иректе гемоглобиндың артыҡ булыуы)

**гемоглобинури́я** гемоглобинурия (һейҙектә иректе гемоглобиндың булыуы)

**гемогра́мма** гемограмма (ҡан тикшергәндә билдәле бер тәртиптә яҙып алынған мәғлүмәт)

**гемодерми́я** гемодермия (ҡан һәм ретикуляр системаһы күҙәнәктәренең яман үҫеш алыуынан килгән тире ауырыуҙарының дөйөм исеме)

**гемодиа́лиз** гемодиализ (яһалма бөйөр аппараты ярҙамында етди бөйөр ауырыуҙарын, ҡайһы бер ағыуланыуҙы дауалау ысулы)

**гемодина́мика** гемодинамика (1. ҡандың ҡан тамырҙары буйлап йөрөүе; 2. ҡандың йөрәк һәм ҡан тамырҙары буйлап йөрөү берлеге)

**гемокульту́ра** гемокультура (микробиологик тикшереү үткәргәндә кеше йә хайуан ҡанында үрсетелгән микробтар)

**гемо́лиз** гемолиз (эритроциттарҙың тарҡалыуы)

**гемолизи́н** гемолизин (эритроциттарҙы тарҡатыусы матдә)

**гемолити́ческий** гемолитик (гемолизға ҡағылышлы)

**гемоперика́рд** гемоперикард (йөрәк ҡабында ҡан йыйылыуы)

**гемоперитоне́ум** гемоперитонеум (ҡорһаҡ эсендә ҡан йыйылыуы)

**гемопневмото́ракс** гемопневмоторакс (плевра эсендә ҡан һәм һауа йыйылыуы)

**геморраги́ческий** геморрагик (ҡан һауыуға ҡағылышлы)

**геморраги́я** геморрагия (ҡанау, ҡан һауыу)

**геморро́й** геморрой (тура эсәктең аҫҡы өлөшөндәге вена тамырҙарының төйөрләнеп киңәйеүе)

**гемосидеро́з** гемосидероз (гемоглобин тарҡалыуынан барлыҡҡа килгән гемосидерин пигментының ағза-туҡымаларҙа тупланыуы)

**гемоспори́дии** гемоспоридиялар (кеше һәм хайуандарға йоғоусан һәм эритроциттарҙы һәм эндотелий күҙәнәктәрҙе зарарлаусы плазмодий төркөмөнә ингән микроскопик ябай хайуан)

**гемоста́з** гемоста́з (1. хирургияла ҡан ағыуҙы туҡтатыу сараһы; 2. ниндәй ҙә булһа ағза-туҡымалағы ҡан тамырҙарында ҡан йөрөшөнөң өҙөлөүе)

**гемостати́ческий** гемостатик (ҡан туҡтауға ҡағылышлы)

**гемотерапи́я** гемотерапия (дауалау маҡсатында ҡан, уның компоненттарын һәм уларҙан әҙерләнгән препараттарҙы ҡулланыуҙың дөйөм исеме)

**гемотокси́ны** гемотоксиндар (микробтар, хайуан, үҫемлектәрҙән сыҡҡан һәм эритроциттарҙы тарҡатып, гемолиз тыуҙырырға һәләтле матдәләр)

**гемото́ракс** гемоторакс (плевра эсенә ҡан һауыу)

**гемотрансфу́зия** гемотрансфузия (кешегә ҡан ебәреү)

**гемофили́я** гемофилия (нәҫел ауырыуы; үҙенән-үҙе йәки йәрәхәттән тиҙ туҡтала алмаҫлыҡ ҡанау менән билдәләнә)

**гемофта́льм** гемофтальм (күҙ эсенә ҡан һауыу)

**гемохромато́з** гемохроматоз (тәндең үтә көрән төҫ алыуы, мөһим ағзаларҙы зарарлау менән үтеүсе етди нәҫел ауырыуы)

**гемоцито́метр** гемоцитометр (ҡандың күҙәнәктәрен билдәләү өсөн прибор)

**ген** ген (организмдың нәҫел сифатын йөрөтөүсе иң ябай биологик берәмек)

**генерализа́ция (в патологии)** генерализация (сикләнгән ауырыуҙың бөтә ағза йәки организм буйлап таралыуы)

**гене́тика** *(медицинская)* генетика (нәҫел һәм организмдың үҙгәреүсәнлеге хаҡындағы фән)

**генита́лии** гениталийҙар (енес ағзалары, мәҫ., ҡатын-ҡыҙ гениталийҙары)

**генитоурогра́фия** генитоурография (ир енес ағзаларын һәм һейҙек ҡыуығын бер юлы рентген ярҙамында тикшереү)

**генодермато́з** генодерматоз (нәҫелдән килгән тире ауырыуҙарының дөйөм исеме)

**генуи́нный** генуин (тыумыштан килгән, тәбиғи һәм үҙенән-үҙе килгән)

**геогельминто́зы** геогельминтоздар (геогельминттар йоғоуҙан килгән гельминтоздар, мәҫ., аскаридоз, энтеробиоз һ. б.; *ҡара:* **геогельминты**)

**геогельми́нты** геогельминттар (паразит селәүҙәрҙең бер төрө: уларҙың аралыҡ (промежуточный) хужаһы юҡ, ә күкәйҙәре, ҡарышлауыҡтары тирә-яҡ тәбиғәттә үҫеш ала. Геогельминттар рәтенә аскарида, бабасыр һ. б. паразит селәүҙәр инә)

**геогигие́на** геогигиена (кеше эшмәкәрлегенән булган тәбиғәт үҙгәрешен өйрәнеүсе фән)

**геогра́фия болезней** *ҡара:* **нозогеография**

**геомедици́на** *ҡара:* **медицина географическая**

**гепари́н** гепарин (организмда барлыҡҡа килеп, ҡанды ойоуҙан һаҡлаусы органик матдә, малдан алынғаны дауалау өсөн ҡулланыла)

**гепаталги́я** гепаталгия (бауыр тәңгәле ауыртыу)

**гепати́т** гепатит (бауыр шешеүе); төрҙәре: *г. аллергический* аллергик гепатит *(ҡара:* **аллергия**); *г. вирусный* вирус гепатиты (инфекцион һәм сыворотка гепатиттарының дөйөм исеме); *г. вирусный безжелтушный* һарыһыҙ вирус гепатиты; *г. вирусный желту́шный* һарылы вирус гепатиты; *г. вирусный латентный* латент вирус гепатиты (ауырыу аҫтыртын үтә); *г. вирусный острый* киҫкен вирус гепатиты; *г. вирусный хронический* хроник вирус гепатиты; *г. инфекционный (эпидемический)* инфекцион гепатит (нигеҙҙә, ауыҙ аша йоғоусы гепатит); *г. сывороточный (парентеральный)* сыворотка гепатиты (укол, ҡан ебәреү аша йоғоусы вирус гепатиты)

**гепатогра́фия** гепатография (бауырҙы рентген ярҙамында тикшереү)

**гепато́з** гепатоз (дистрофик үҙгәрештәр менән үтеүсе бер төр-

кѳм бауыр ауырыуҙары; *кара:* **дистрофия)**

**гепатолитиа́з** гепатолитиаз (бауырҙың үт юлында таш булыуы)

**гепатоло́гия** гепатология (гастроэнтерологияның бауыр, үт юлдары ауырыуҙарын һәм уларҙы дауалау, иҫкәртеү ысулдарын өйрәнеүсе тармағы)

**гепатомегали́я** гепатомегалия (бауырҙың ныҡ ҙурайыуы)

**гепатопто́з** гепатоптоз (бауырҙың төшөүе)

**гепатотоксеми́я** гепатотоксемия (бауыр эшсәнлеге боҙолоу сәбәпле ҡанда токсик (ағыу) матдәләрҙең булыуы)

**гепатохоланги́т** гепатохолангит (бауыр һәм үт юлдарының бер юлы шешеүе)

**гепатохолецисти́т** гепатохолецистит (бауыр менән үт ҡыуығының бер юлы шешеүе)

**гербици́ды** гербицидтар (ауыл хужалығында ҡый үләндәр менән көрәшеү өсөн ҡулланыла торған химик матдәләр, кеше өсөн ағыулы)

**гериа́тр** гериатр (өлкән йәштәгеләргә һәм ҡарттарға медицина ярҙамы биреүсе терапевт врач)

**гериатри́ческий** гериатрик, гериатрия (гериатрияға ҡағылышлы, *кара:* **гериатрия)**

**гериатри́я** гериатрия (медицинаның оло йәштәге һәм ҡарттарҙың ауырыуҙарын дауалау һәм уларҙы иҫкәртеү ысулдарын өйрәнеүсе тармағы)

**гермафроди́т** гермафродит, хөнәсә (гермафродитизм билдәләре булған кеше; ике төрө бар: *г. истинный* ысын гермафродит; *г. ложный* ялған гермафродит; *кара:* **гермафродитизм)**

**гермафродити́зм** гермафродитизм (бер кешелә ике енес затына хас билдәләрҙең булыуы. Гермафродитизмдың ике төрө бар: *г. истинный* ысын гермафродитизм (бер кешелә ирҙәргә һәм ҡатындарға хас енес биҙҙәренең булыуы); *г. ложный* ялған гермафродитизм (ысынбарлыҡта гермафродитизм юҡ, тик ирҙәргә йәки ҡатын-ҡыҙҙарға ғына хас енси биҙҙәре була)

**герогигие́на** герогигиена (геронтологияның тормош шарттарының кешенең ҡартайыу процестарына яһаған тәьҫирен өйрәнеүсе тармағы; *кара:* **геронтология)**

**геродиете́тика** геродиететика (диетологияның өлкән йәштәге һәм ҡарттарҙың туҡланыуын өйрәнеүсе тармағы; *кара:* **диетология)**

**геронтоло́гия** геронтология (биология һәм медицинаның тере организмдарҙың, шул иҫәптән кешенең ҡартайыу барышын өйрәнеүсе бүлеге)

**ге́рпес** герпес (үҙенсәлекле вирустар тыуҙырған һыулы күперткеләр ҡалҡыу менән характерлы бер төркөм тире ауырыуҙары; төрҙәре: *г. беременных* йөклө ҡатындар герпесы; *г. опоясывающий* уратма герпес; *г. простой (пузырьковый)* ябай герпес)

**герпети́ческий** герпес (герпесҡа ҡағылышлы)

**гиалино́з** гиалиноз (бауыр, бөйөр һымаҡ ағзаларҙың гиалин матдәһе барлыҡҡа килеүе менән билдәләнгән дауамлы ауырыу)

**гиганти́зм** гигантизм (кешенең буйға ныҡ үҫеүе — ирҙәрҙең 200 см-ҙан, ҡатын-ҡыҙҙарҙың 190 см-ҙан артығырҕы йәки

тәндең айырым өлөшөнөң ҙурлығы; ҡайһы ваҡыт гигантизм эске секреция биҙҙәре йәки нервы системаһы сирләүенән була)

**гестоз** гестоз (йөклө ҡатындар токсикозының бер төрө)

**гигиена** гигиена (кеше организмына тышҡы шарттар тәьҫирен һәм һаулыҡ һаҡлау сараларын өйрәнеүсе медицина фәне; төрҙәре: *г. военная* хәрби гигиена; *г. быта* көнкүреш гигиенаһы; *г. детей* балалар гигиенаһы; *г. жилища* торлаҡ гигиенаһы; *г. коммунальная* коммуналь гигиена; *г. личная* шәхси гигиена; *г. питания* туҡланыу гигиенаһы; *г. социальная* социаль гигиена (йәмғиәт һаулығы һәм һаулыҡ һаҡлау эштәре хаҡында фән); *г. умственного труда* аҡыл хеҙмәте (эше) гигиенаһы; *г. труда* хеҙмәт (эш) гигиенаһы һ. б.)

**гигиенист** гигиенист (гигиена белгесе, врач)

**гигиенический** гигиена, гигиеник (мәҫ., гигиена фәне, гигиеник тәрбиә)

**гигрометр** гигрометр (һауа дымлылығын билдәләү өсөн прибор)

**гидраденит** гидраденит (эре тир биҙҙәренең эренләп шешеүе, мәҫ., *г. подмышечный* ҡултыҡ аҫты гидрадениты йәки «эт имсәге»)

**гидраденома** гидраденома (тир биҙҙәренән сығыусы тирелəге ябай шеш)

**гидрартроз** гидрартроз (ниндәй ҙә булһа эре быуын эсендә һары һыу йыйылыуы)

**гидремия** гидремия (ҡанда һыуҙың артыҡ булыуы)

**гидроаэроионизатор** гидроаэроионизатор (һауаны ионизациялау өсөн аппарат. Дауалау йәки профилактик маҡсатта ҡулланыла)

**гидроаэроионотерапия** гидроаэроионотерапия (физиотерапияның бер төрө: аэроиондарҙан тын алыу рәүешендә дауаланыу)

**гидроз** гидроз (тир биҙҙәре эшсәнлегенең боҙолоуы)

**гидрокосметика** гидрокосметика (1. косметика сараларын һыу процедураһы менән алмаштырып ҡулланыу. 2. косметик матдәләрҙе һыуҙа әҙерләү)

**гидромассаж** гидромассаж (массаж һыу душы менән берлектә ҡабул ителә)

**гидроменингоцеле** гидроменингоцеле (баш мейеһе бүҫере)

**гидронефроз** гидронефроз (бөйөр лаҡаны һәм ҡыуыҡсалары киңәйеү менән билдәләнгән ауырыу)

**гидроперикард** гидроперикард (йөрәк ҡабында һары һыу йыйылыу)

**гидропневмоторакс** гидропневмоторакс (плевра ҡыуышлығында һары һыу һәм һауа (йәки газ) йыйылыуы)

**гидропульт** гидропульт (ниндәй ҙә булһа шыйыҡсаны һиптертә торған аппарат, дезинфекция үткәреү өсөн ҡулланыла; *ҡара:* **дезинфекция**)

**гидросальпинкс** гидросальпинкс (ауырыу күренеше: түл үткәргестә һары һыу йыйылыуы)

**гидроспермия** гидроспермия (сперма составында сперматозоидтарҙың аҙ, ә шыйыҡсаның күп булыуы; *ҡара:* **сперма**)

**гидротерапия** гидротерапия (һыу процедуралары менән дауалау)

**гидроторакс** гидроторакс (плев-

раль ҡыуышлыҡта һары һыу йыйылыу)

**гидрофобия** гидрофобия (һыу йотоу һөҙөмтәһендә тамаҡ мускулдары ҡыҫылыуҙан ҡурҡыу; ҡотороу, һын ҡатыу, истерия ауырыуҙары булғанда күҙәтелә)

**гидрофтальм** гидрофтальм (тыумыштан килгән глаукома күҙәтелгәндә аҡыш күҙле булыу)

**гидроцеле** гидроцеле (күкәй шекәрәләре араһында һары һыу йыйылыу)

**гидроцефалия** гидроцефалия (баш мейеһе ҡарынсаларында һәм мейе шекәрәләре аҫты арауыҡта арҡа мейеһе шыйыҡсаһының артыҡ йыйылыуы)

**гименолепидоз** гименолепидоз (иргәйел йәки ҡомаҡ паразит селәүе эйәләшеүҙән килгән гельминтоз ауырыуы)

**гимен** *ҡара:* **плева девственная**

**гимнастика** гимнастика (бер төркөм физик күнегеүҙәр; төрҙәре: *г. гигиеническая* гигиеник гимнастика (һаулыҡты яҡшыртыу өсөн яһала торған физик күнегеүҙәр, мәҫ., иртәнге физзарядка); *г. корригирующая* коррекциялау гимнастикаһы (һөйәкбыуын аппаратының ниндәй ҙә булһа сирле үҙгәрешен юҡ итеү йәки уны булдырмау маҡсатында яһалыусы физик күнегеүҙәр); *г. лечебная* дауалау гимнастикаһы; *г. производственная* производство гимнастикаһы)

**гинандрия** гинандрия (*ҡара:* **гермафродитизм ложный)**

**гингивит** гингивит (теш ите тиресәһенең шешеүе)

**гингивостоматит** гингивостоматит (теш ите һәм ауыҙ эсендәге башҡа тиресә ҡатламының шешеүе)

**гиперадренализм** гиперадренализм (ҡанда адреналин гормонының артыуы, вегетатив нервы системаһының симпатик өлөшөнөң эшсәнлеге көсәйеүе менән билдәләнгән ауырыу күренештәре)

**гиперадреналинемия** гиперадреналинемия (ҡанда адреналин гормонының артыҡ булыуы)

**гиперазотурия** гиперазотурия (матдәләр алмашыныуынан килгән азотлы матдәләрҙең һейҙек менән артыҡ бүленеүе)

**гиперацидный** гиперацид (мәҫ., гиперацид гастрит)

**гипербилирубинемия** гипербилирубинемия (ҡанда билирубиндың артыуы; *ҡара:* **билирубин)**

**гипервентиляция** гипервентиляция (көсәйгән һулыш һөҙөмтәһендә үпкә вентиляцияһының артыуы; *ҡара:* **вентиляция)**

**гипервитаминоз** гипервитаминоз (артыҡ витамин ҡабул итеүҙән килгән ағыуланыу һәм бынан булған ауырыу үҙгәрештәре. Былдай хәл ғәҙәттә А һәм Д витаминдарынан була: А гипервитаминозы һәм Д гипервитаминозы)

**гипергаммаглобулинемия** гипергаммаглобулинемия (ҡанда иммуноглобулиндарҙың артыҡ булыуы)

**гипергидроз** гипергидроз (ныҡ тирләү)

**гипергия** гипергия (организм реактивлығының түбәнәйеүе)

**гипергликемия** гипергликемия (ҡанда глюкоза шәкәренең артыуы)

**гипергонадизм** гипергонадизм (енси биҙҙәрҙең гормональ активлығы көслө булыу һөҙөмтәһендә

физик һәм психик яҡтан иртә өлгөрөү менән характерлы сирле күренеш)

**гиперемия** гиперемия (теге йәки был ағзала йәки ағзаның өлөшөндә ҡан тамырҙарының ҡан менән тулышыуы; төрҙәре: *г. артериальная* артериаль гипертония; *г. венозная* веноз гиперемия)

**гиперергия** гиперергия (организмдың көсәйгән реактивлығы; *ҡара:* **реактивность)**

**гиперестезия** гиперестезия (һиҙеү-тойоу ағзаларын ҡуҙғытыуҙан барлыҡҡа килгән артыҡ һиҙеүсәнлек)

**гипериммунизация** гипериммунизация (ҡабатлап башҡарылған иммунизация; *ҡара:* **иммунизация)**

**гиперинсулинизм** гиперинсулинизм (инсулин гормонының ҡанда артыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән гипогликемия; *ҡара:* **гипогликемия)**

**гиперкалиемия** гиперкалиемия (ҡан плазмаһында калийҙың артыҡ булыуы)

**гиперкальциемия** гиперкальциемия (ҡан плазмаһында кальцийҙың артыҡ булыуы)

**гиперкапния** гиперкапния (ҡанда йәки башҡа туҡымаларҙа углекислый газдың артыҡ булыуы)

**гиперкератоз** гиперкератоз (эпидермистағы мөгөҙ ҡатламының ныҡ ҡалынайыуы)

**гиперкинез** гиперкинез (ауырыу һөҙөмтәһендә хәрәкәтсәнлектең көсәйеүе)

**гиперкортицизм** гиперкортицизм (ҡанда кортикостероид гормондарының артыҡ булыуынан килгән ауырыу күренештәре)

**гиперлейкоцитоз** гиперлейкоцитоз (ҡанда лейкоциттарҙың күп булыуы; *ҡара:* **лейкоцит)**

**гиперменорея** гиперменорея (күрем килеүҙең боҙолоуы: күрем ҡаны кәрәгенән артыҡ килә)

**гиперметроп** гиперметроп (үтәғарашлы)

**гиперметропия** *ҡара:* **дальнозоркость**

**гипернефрома** гипернефрома (бөйөр өҫтө биҙенән сыҡҡан шеш)

**гиперпаратиреоз** гиперпаратиреоз (ҡалҡан тәңгәлендәге биҙҙәрҙең артыҡ эшләүе менән характерлы эндокрин ауырыу)

**гиперпигментация** гиперпигментация (тән пигментының артып китеүе йәки элек булмаған ерҙә барлыҡҡа килеүе; мәҫ., һипкел, хлоазма һ. б.)

**гиперпирексия** гиперпирексия (тән температураһының үтә ныҡ — +40°-тан юғарыраҡ күтәрелеүе)

**гиперплазия** гиперплазия (яңы күҙәнәктәр барлыҡҡа килеү һөҙөмтәһендә ағза-туҡыманың ҙурайыуы)

**гиперпноэ** *ҡара:* **гипервентиляция**

**гиперполименорея** гиперполименорея (күрем ҡанының оҙаҡ (6—7 көндән артыҡ) һәм күп килеүе)

**гиперпротеинемия** гиперпротеинемия (ҡанда аҡһымдың артыҡ булыуы)

**гиперсаливация** гиперсаливация (ауыҙ һыуының артыҡ бүленеүе)

**гиперсексуальность** гиперсексуаллек (көсәйгән енси әүәҫлек)

**гиперсомния** гиперсомния (ауырыу рәүешендә йоҡо баҫыусанлыҡ)

**гипертензия** гипертензия (тамырҙарҙа һәм көпшәле (ҡыуышлы) ағзалар эсендә гидростатик ба-

ҫымдың күтәрелеүе, мәҫ., *г. артериальная* артериаль гипертензия; *г. глаза* күҙ гипертензияһы һ. б.)

**гипертерми́я** гипертермия (организмдың температураһы күтәрелеүе)

**гипертирео́з (гипертиреодизм)** гипертиреоз (ҡалҡан биҙе гормоны артыҡ бүленеүҙән килгән ауырыу)

**гипертони́ческий** гипертония, гипертоник (гипертонияға ҡағылышлы)

**гипертони́я** гипертония (1. мускулдар йәки ҡыуышлы ағзаларҙың мускулдар ҡатламы тонусы артыуы; 2. *ҡара:* **гипертензия)**

**гипертрихо́з** гипертрихоз (ғәҙәти булмаған тән өлөшөн, мәҫ., ҡатын-ҡыҙ битен, ирҙәр арҡаһын артыҡ йөн ҡаплауы)

**гипертрофи́я** гипертрофия (теге йәки был ағза-туҡыманың йәки уларҙың өлөшөнөң үҫеүе, күләм яғынан артыуы, мәҫ., йөрәк гипертрофияһы)

**гиперфаланги́я** гиперфалангия (тыумыштан бармаҡтарҙың артыҡ булыуы)

**гиперфосфатеми́я** гиперфосфатемия (ҡанда фосфат матдәләренең артыуы)

**гиперфу́нкция** гиперфункция (ниндәй ҙә булһа ағзаның йәки ағзалар системаһының эшсәнлеге көсәйеүе)

**гиперхлоргидри́я** гиперхлоргидрия (ашҡаҙан һутында аш тоҙо кислотаһының артыуы)

**гиперхолестеринеми́я** гиперхолестеринемия (ҡанда холестериндың артыуы; *ҡара:* **холестерин)**

**гипно́з** гипноз (күпселектә икенсе кеше йоғонтоһонан тәбиғи йоҡоға яҡын хәлдә булыу; төрҙәре: *г. аутогенный* аутоген гипноз (аутоген күнегеүҙәр ҡулланып, үҙ-үҙеңде гипноз йоҡоһона әҙерләү һәм тиҙерәк гипноз йоҡоһона китеү)

**гипнотерапи́я** гипнотерапия (гипнотик инандырыуға нигеҙләнгән дауалау ысулы)

**гипнофоби́я** гипнофобия (йоҡо ваҡытында үлеп ҡалыуға ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**гипоадреналинеми́я** гипоадреналинемия (ҡанда адреналиндың кәмеүе)

**гиповентиля́ция** гиповентиляция (үпкәлә һауа алмашыныуының түбәнәйеүе)

**гиповитамино́з** гиповитаминоз (етерлек миҡдарҙа витамин ҡабул итмәүҙән барлыҡҡа килгән витамин етешмәүсәнлек, мәҫ., *гиповитаминоз* С гиповитаминозы)

**гипогаласти́я** гипогалактия (имеҙеү мәлендә имсәк биҙҙәренән һөттөң аҙ килеүе)

**гипогидрата́ция** гипогидратация (организмда һыуҙың кәмеүе)

**гипогидро́з** гипогидроз (тир сығыуҙың кәмеүе)

**гипогликеми́я** гипогликемия (ҡанда глюкоза шәкәренең кәмеүе)

**гиподинами́я** гиподинамия (физик хәрәкәт, күнегеүҙәрҙең кәмеүе сәбәпле мускулдарҙың хәлһеҙләнеүе)

**гипоинсулинеми́я** гипоинсулинемия (ҡанда инсулиндың аҙайыуы; *ҡара:* **инсулин)**

**гипоинсулини́зм** гипоинсулинизм (инсулиндың аҙ барлыҡҡа килеүе сәбәпле, ҡанда глюкоза шәкәренең артыуы, уның һейҙек менән бүленеүе һ. б.— шәкәр диабеты билдәләре)

**гипокалиеми́я** гипокалиемия (ҡан

сывороткаһында калийҙың кәмеүе)

**гипокальциеми́я** гипокальциемия (ҡан сывороткаһында кальцийҙың кәмеүе)

**гипокапни́я** гипокапния (ҡан сывороткаһында углекислый газдың кәмеүе)

**гипокинези́я** гипокинезия (тормош, профессия үҙенсәлеге һ. б. сәбәптән физик хәрәкәттең кәмеүе)

**гипокортици́зм** гипокортицизм (кортикостероид гормондарҙың аҙ бүленеүенән килгән ауырыу күренештәре: ябығыу, эс китеү һ. б.)

**гипоксеми́я** гипоксемия (ҡанда кислородтың кәмеүе)

**гипокси́я** гипоксия (кислородты аҙ ҡабул итеүҙән булған һаулыҡ ҡаҡшауы)

**гипомагниеми́я** гипомагниемия (ҡан сывороткаһында магний матдәһенең кәмеүе)

**гипоменоре́я** гипоменорея (күрем ҡанының аҙ килеүе)

**гипомнези́я** гипомнезия (хәтерҙең насарайыуы)

**гипонатриеми́я** гипонатриемия (ҡан плазмаһында натрийҙың кәмеүе)

**гипоолигоменоре́я** гипоолигоменорея (күрем килеү ваҡытының ҡыҫҡарыуы, күрем ҡанының аҙ килеүе)

**гипопаратирео́з** гипопаратиреоз (ҡалҡан тирәһе биҙҙәренең тейешенсә эшләмәүенән булған һаулыҡ ҡаҡшауы)

**гипопигмента́ция** гипопигментация (тире һәм тиресә ҡатламдарының тәбиғи төҫө түбәнәйеүе)

**гипоплази́я** гипоплазия (организмда йә берәй ағзала үҫеш аномалияһы булыуы; *ҡара:* **аномалия развития)**

**гипопротеинеми́я** гипопротеинемия (ҡан сывороткаһында аҡһымдың кәмеүе)

**гипопротромбинеми́я** гипопротромбинемия (ҡанда протромбин матдәһенең миҡдары кәмеүе; *ҡара:* **протромбин)**

**гипорефлекси́я** гипорефлексия (рефлекстарҙың (бигерәк тә арҡа мейеһенән килгәндәрҙең) түбәнәйеүе; *ҡара:* **рефлекс)**

**гипосалива́ция** гипосаливация (ауыҙ һыуының әҙерәк бүленеүе)

**гипосенсибилиза́ция** гипосенсибилизация (юғары һиҙеүсәнлекте түбәнәйтеүгә йүнәлтелгән дауалау-профилактика саралары; аллергендарға ҡарата һиҙеүсәнлектең түбәнәйеүе)

**гипоспади́я** гипоспадия (үҫеш аномалияһының бер төрө, мәҫ., *г. мужского мочеиспускательного канала* ирҙәр һейеү каналы гипоспадияһы (һейеү каналының өҫкө яҡ өлөшөнөң юҡлығы); *г. женская* ҡатын-ҡыҙ гипоспадияһы (һейеү каналы һәм еңсәнең дефектлылығы — һейеү каналы еңсә эсенә асыла)

**гипосплени́я** гипоспления (талаҡтың эшсәнлеге түбәнәйеүе)

**гипоста́з** гипостаз (аҫта урынлашҡан ағзаларҙа һәм тәндең аҫтараҡ ятҡан өлөшөндә ҡан тулышыу)

**гипостенури́я** гипостенурия (тотороҡло рәүештә сағыштырма ауырлығы түбәнәйгән һейҙек бүленеүе бөйөрҙәрҙең ауырыу булыуын күрһәтә)

**гипотала́мус** гипоталамус (аралыҡ мейеһенең мөһим өлөшө)

**гипотензия** гипотензия (тамырҙарҙа, көпшәле (ҡыуышлы) ағзаларҙа гидростатик баҫымдың түбәнәйеүе, мәҫ., *г. артериальная первичная* беренсел артериаль гипотензия (йәки гипотония ауырыуы) дөйөм хәлһеҙлек, тиҙ арыу менән үтеүсән; *г. венозная* веноз гипотензия; *г. внутричерепная* мейе ҡумтаһы гипотензияһы һ. б.)

**гипотермия** гипотермия (1. организмдың йылы һаҡлау балансы боҙолоу, тән температураһының түбән булыуы; 2. *г. искусственная* яһалма гипотермия (хирургик операция еңелерәк үтһен өсөн тән температураһын яһалма рәүештә түбәнәйтеү)

**гипотиреоз** гипотиреоз (ҡалҡан биҙе функцияһы эшсәнлеге түбәнәйеүе: нервы-психик һаулыҡтың ҡаҡшауы, тән шешенеүе һ. б. менән үтеүсән)

**гипотонический** гипотония, гипотоник (гипотонияға ҡағылышлы)

**гипотония** гипотония (мускулдар йәки ҡыуышлы ағза көбөндә мускул ҡатламының тонусы түбәнәйеүе)

**гипотрихоз** гипотрихоз (кешенең йәшенә, енесенә, расаһына хас ғәҙәти урындарҙа сәс-йөндөң аҙ булыуы)

**гипотрофия** гипотрофия (имсәк балаларҙың туҡланыуының боҙолоуы, ныҡ ябығыу кеүек үҙгәрештәр менән характерлы дауамлы ауырыу)

**гипофиз** гипофиз (баш мейеһе аҫтында урынлашҡан мөһим эске секреция биҙе)

**гипофизит** гипофизит (гипофиз биҙенең шешеүе)

**гипофосфатазия** гипофосфатазия (нәҫел ауырыуы: һелтеле фосфатаза ферменты аҙ бүленеүе, рахитҡа хас һөйәктәрҙең үҙгәреүе һ. б. менән характерлы)

**гипофрения** гипофрения (олигофренияның еңел төрө; *ҡара:* **олигофрения)**

**гипофункция** гипофункция (ниндәй ҙә булһа ағза йәки туҡыманың функцияһы (эшсәнлеге) түбәнәйеүе, мәҫ., бауыр гипофункцияһы)

**гипохлоргидрия** гипохлоргидрия (ашҡаҙан һутында аш тоҙо кислотаһының миҡдары кәмеүе)

**гипохлоремия** гипохлоремия (ҡан сывороткаһында хлоридтарҙың кәмеүе; *ҡара:* **хлориды)**

**гипохолестеринемия** гипохолестеринемия (ҡанда холестериндың аҙ миҡдарҙа булыуы)

**гипохолия** гипохолия (бөйән эсәгенә үттең етерлек күләмдә килмәүе)

**гипс** гипс (нигеҙҙә, травматология һәм стоматологияла ҡулланылыусы кальций сульфаты минералы)

**гипсофобия** гипсофобия (юғарылыҡҡа һәм бейеклеккә менеүгә ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**гирсутизм** гирсутизм (ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙҙарҙың йөнтәҫ булыуы, һаҡал-мыйыҡ үҫеүе)

**гирудиноз** гирудиноз (тәнгә йәбешкән йәки тын алыу юлдарына, ашҡаҙан-эсәктәргә үткән һөлөк зарарлауынан килгән ауырыу)

**гирудотерапия** гирудотерапия (медицина һөлөктәрен дауалау өсөн ҡулланыу)

**гистероскопия** гистероскопия (гистероскоп приборы ярҙамында аналыҡ эсен ҡарап тикшереү)

**гистидинемия** гистидинемия (нә-

ҫелдән килгән матдәләр алмашыныу ауырыуы)

**гистиоцитóз** гистиоцитоз (1. ҡанда макрофаг күҙәнәктәренең артыуы; 2. матдәләр алмашыныуы боҙолоуҙан килгән бер төркөм ауырыуҙар)

**гистóлиз** гистолиз (протеолитик ферменттар тәьҫиренән туҡыманың тарҡалыуы)

**гистолóгия** гистология (күп күҙәнәкле хайуандар һәм кеше туҡымалары хаҡында фән)

**гистопатолóгия** гистопатология (патоанатомия фәненең ауырыуҙан килгән организмдағы үҙгәрештәрҙе микроскопик өйрәнеүсе тармағы)

**гистоплазмóз** гистоплазмоз (гистоплазма бәшмәге йоғоуҙан килгән дөйөм инфекцион ауырыу)

**гистохи́мия** гистохимия (күҙәнәктә барған химик процестарҙы өйрәнә торған фән)

**главврач (главный врач)** баш врач (мәҫ., *г. больницы* больница баш врачы; *г. государственный санитарный* дәүләт санитарияһы баш врачы һ. б.)

**глаз** күҙ

**глазни́ца** күҙ соҡоро

**гландуля́рный** гландуляр (ниндәй ҙә булһа биҙгә ҡағылышлы)

**глаукóма** глаукома, ҡара (һары) һыу ауырыуы (күҙ эсе баҫымы күтәрелеүе, күреү һәләтлеге түбәнәйеүе менән характерлы ауырыу; төрҙәре: *абсолют глаукома* тыуымыштан килгән глаукома һ. б.)

**глаукоматóзный** глаукоматоз (глаукомаға ҡағылышлы)

**гликеми́я** гликемия (ҡанда глюкоза шәкәренең булыуы)

**гликогéн** гликоген (бауырҙа глюкоза шәкәренән синтезланған ҡатмарлы углевод)

**гликогенóз** гликогеноз (углевод матдәләре алмашыныуы менән характерлы бер төркөм нәҫел ауырыуы)

**гликозидóзы** гликозидозалар (гликозидоза ферменттары етешмәүенән килгән бер төркөм нәҫел ауырыуы)

**гликози́ды** гликозидалар (бер төркөм органик матдәләр: ҡайһы бер витаминдар, антибиотиктар һ. б.)

**гликозури́я** гликозурия (һейҙек менән күп шәкәр юғалыу)

**гликокортикóиды** гликокортикоидтар (бөйөр өҫтө биҙенән сыҡҡан гормондарҙың бер төркөмө)

**глиобластóма** глиобластома (яман шеш: глиома шешенең бер төрө)

**глиóма** глиома (үҙәк нервы системаһында барлыҡҡа килгән шеш)

**глиосаркóма** глиосаркома (үҙәк нервы системаһында барлыҡҡа килгән яман шеш)

**гли́сты** глистар (кешегә һәм хайуандарға эйәләшеүсән гельминттар; *ҡара:* **гельминты)**

**глицери́н** глицерин (гигиеник маҡсатта киң ҡулланылыусы өс атомлы спирт)

**глóбули** глобулдар (еңсәгә индереү өсөн ҡулланыла торған йомро шар рәүешендәге суппозиторий; *ҡара:* **суппозиторий)**

**глобулинури́я** глобулинурия (һейҙек менән глобулин исемле аҡһымдың бүленеүе)

**гломéрул** гломерул *(ҡара:* **клубочек почечный)**

**гломерули́т** гломерулит (бөйөр йомғаҡсаларының шешеүе)

**гломерулонефри́т** гломерулонефрит (ике яҡ бөйөрҙөң дә диффуз

(тотош) шешеүе; төрҙәре: киҫкен гломерулонефрит, хроник гломерулонефрит һ. б.)
**гломерулосклеро́з диабети́ческий** диабет гломерулосклерозы (бөйөр йомғаҡсалары зарарланыуы менән характерлы диабет ҡатмарлашыуы)
**глоссалги́я** глоссалгия (ҡайһы бер ауырыу һөҙөмтәһендә телдең ҡысытыуы, «яныуы» һ. б.)
**глосси́т** глоссит (тел шешеүе)
**глоссолали́я** глоссолалия (ауырыу сәбәпле телмәрҙең боҙолоуы)
**глоссоплеги́я** глоссоплегия (тел мускулдарының параличы; *ҡара:* **паралич)**
**гло́тка** тамаҡ, йотҡолоҡ
**глото́к** йотом, бер йотом
**гло́хнуть** 1. һаңғырауланыу; 2. ҡолаҡ тоноу
**глухо́й** һаңғырау
**глухонемо́й** һаңғырау-телһеҙ (әпе, бүтек)
**глухонемота́** һаңғырау-телһеҙлек, әпелек
**глухота́** һаңғыраулыҡ (төрҙәре: *г. контузионная* контузия һаңғыраулығы; *г. профессиональная* профессиональ һаңғыраулыҡ һ. б.)
**глюко́за** глюкоза (ябай углевод, организмда төрлө туҡлыҡлы матдәләрҙән яһала һәм матдәләр алмашыныуында мөһим роль уйнай)
**глюкозури́я** глюкозурия (глюкоза шәкәренең һейҙеккә күсеүе)
**глюкокортико́иды** глюкокортикоидтар (бөйөр өҫтө биҙҙәренән сыҡҡан бер төркөм гормондар; синтетик юл менән табылғандары, малдан алынғаны дауалау өсөн ҡулланыла)
**гнатостомо́з** гнатостомоз (гнатомостома исемле паразит селәүйоғоуҙан килгән гельминтоз; *ҡара:* **гельминтоз)**
**гни́да** һеркә, йәбешкәк (бет йомортҡаһы)
**гние́ние** сереү
**гни́лостный** серек, сереткес
**гноеро́дный** эренләткес
**гноетече́ние** эрен килеү
**гной** эрен
**гнойни́к** *ҡара:* **абсцесс**
**гнойничко́вый** ваҡ эренле шеш (мәҫ., ваҡ эренле шеш сабыртмаһы)
**гнойничо́к** ваҡ эренле шеш
**гнотобиоло́гия** гнотобиология (биологияның организмдың стериль шарттарҙа йәшәүен өйрәнеүсе бүлеге)
**гноя́щийся** эренләүсе
**гнус** гнус (серекәй, ваҡ себен, күгәүен һ. б. пар ҡанатлы осоп йөрөүсе бөжәктәрҙең дөйөм исеме)
**гнуса́вость** тыңҡышлыҡ, тыңҡаулыҡ, танау менән һөйләшеү
**гнуса́вый** тыңҡыш, тыңҡау (михым, һиңерәү танау) мәҫ., тыңҡыш һөйләшеү
**го́лень** сираҡ *(г. саблевидная* ҡылыс сираҡ (сираҡ һөйәктәренең алға сығыбыраҡ тороуы — ауырыу күренеше)
**голова́** баш
**голо́вка** баш (мәҫ., ҡулбаш һөйәге башы, ир енес ағзаһы башы һ. б.)
**головокруже́ние** баш әйләнеү (күп төрлө сәбәптән була)
**го́лод** аслыҡ
**голода́ние** 1. ас йәшәү, аслыҡ (төрҙәре: *г. абсолютное* абсолют аслыҡ (ашамлыҡ та, һыу ҙа ҡабул ителмәй); *г. лечебное* дауалау маҡсатында ас тороу (дауалауҙың бер төрө — больница шарттарында ашау-эсеүҙең сик-

ләнеүе); *г. полное* тулы аслыҡ (һыу ғына эселә); 2. етешмәүсәнлек (теге-йәки был ризыҡтың дауамлы рәүештә етешмәүе, мәҫ., *г. белковое* аҡһым етешмәүсәнлеге; *г. витаминное* витамин (витаминдар) етешмәүсәнлеге; *г. кислородное* кислород етешмәүсәнлеге һ. б.)

**го́лос** тауыш (төрҙәре: *г. охриплый* ҡарлыҡҡан тауыш һ. б.)

**гомеопа́тия** гомеопатия (теге йәки был ауырыуға оҡшаш үҙгәрештәр тыуҙыра алған дарыуҙы бик аҙ миҡдарҙа биреп дауалау ысулы)

**гомеоста́зис** гомеостазис (кешенең эске средаһының сағыштырма рәүештә динамик тотороҡлолоҡта һаҡланыуы)

**гомилофоби́я** гомилофобия (көлкө хәлгә ҡалмаҫ өсөн кешеләр менән аралашыуға ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия**)

**гомопла́стика** *ҡара:* **аллопластика**

**гомосексуали́зм** гомосексуализм (ир енесле кешеләр араһындағы сексуаль әүәҫлектең булыуы менән характерлы енси боҙоҡлоҡ)

**гомотрансплanта́ция** *ҡара:* **аллотрансплантация**

**гомоцистинури́я** гомоцистинурия (метионин аҡһымы етешмәүҙән килгән нәҫел ауырыуы)

**гона́да** гонада (енес биҙе)

**гонадотокси́чность** гонадотоксиклыҡ (ҡайһы бер матдәләрҙең енес биҙҙәренә ағыулы (токсик) тәьҫир итеүе)

**гони́т** гонит (тубыҡ быуынының шешеүе)

**гонобленноре́я** гонобленнорея (гонококк микробы йоғоуҙан килгән бленнорея; *ҡара:* **бленнорея**)

**гоноко́кк** гонококк (ике шарҙан торған гонорея тыуҙырғыс бактерия)

**гоноре́я** гонорея (гонококк йоҡҡандан килгән венерик ауырыу; төрҙәре: *г. восходящая* ҡатын-ҡыҙҙа гонореяның ҡатмарлашыуы: аналыҡ, аналыҡ өҫтө ағзаларының, янбаш эсендәге ҡатлы шекәрәләрҙең шешеүе; *г. латентная асимптомная* латент гонорея (аҫтыртын үтеүсе гонорея); *г. осложнённая* ҡатмарлашҡан гонорея; *г. ректальная* ректаль гонорея (тура эсәк гонореяһы); *г. свежая* яңы башланған гонорея (ауырыуҙың башланыуына ике айҙан аҙыраҡ ваҡыт үткән була); *г. торпидная* торпид гонорея (һиҙелер-һиҙелмәҫ үтеүсе гонорея); *г. хроническая* хроник гонорея (ике айҙан күберәк ваҡыт үткән гонорея йәки уның башланыу мәле билдәһеҙ)

**гонусе́псис** гоносепсис (сепсис менән ҡатмарлашҡан гонорея)

**горб** көмрәлек (күкрәк тәңгәле умыртҡаларының һәм күкрәк ситлегенең сирле характерҙа артҡа йә алға табан тумпайып сығыуы; төрҙәре: *г. рахитический* рахит көмрәлеге; *г. сердечный* йөрәк көмрәлеге (йөрәк ауырыуынан күкрәктең алға табан тумпайыуы; *г. старческий* ҡартлыҡ көмрәлеге; *г. туберкулезный* туберкулез көмрәлеге (умыртҡалар туберкулезы булғанда күҙәтелә ) һ. б.)

**горба́тый** көмрө (бөкрө), мәҫ., көмрө кеше;

**гореча́вка** бабасыр үте (тамыры, нигеҙҙә, аппетит уятҡыс дарыу бирә торған үлән)

**го́речи** әсе дарыуҙар (ашау теләген уятыу, ашҡаҙан секреция-

һын арттырыу өсөн ҡулланыла торған дарыуҙар)

**го́речь во рту** әсе тәм (тойоу)

**горздра́вотдел (городской отдел здравоохранения)** ҡала һаулыҡ һаҡлау бүлеге

**горицве́т** *ҡара:* **адонис**

**го́рло (дыха́тельное)** *ҡара:* **трахея**

**гормо́н** гормон (эске секреция биҙҙәре һәм шулай уҡ ҡайһы бер туҡыма эшләп сығарған актив биологик матдә, мәҫ., адреналин, инсулин; *г. адренокортикотропный* адренокортикотроп гормон (гипофиз биҙе эшләп сығарған гормон) һ. б.)

**гормона́льный** гормональ (гормондарға ҡағылышлы, мәҫ., гормональ препарат)

**гормонотерапи́я** гормонотерапия (дауалау маҡсатында теге йәки был гормонды ҡулланыу)

**горчи́чники** горчичниктар (горчица орлоғо онтағы менән ҡапланған һәм дауалау өсөн ҡулланыла торған дүрткел ҡағыҙ биттәре)

**горя́чка белая** аҡ биҙгәк (эскелектән килгән дауамлы психик ауырыу)

**горта́нь** ҡурылдай

**госпитализа́ция** госпитализация, госпитализациялау (дауалау йәки ҡарап тикшереү маҡсатында ауырыуҙы дауалау учреждениеһына һалыу)

**госпитали́зм** госпитализм (оҙаҡ ваҡыт дауалау учреждениеһында булыуҙан килгән һаулыҡтың ҡаҡшауы)

**го́спиталь** госпиталь (нигеҙҙә, хәрби кешеләр өсөн дауалау учреждениеһы; төрҙәре: *г. авиационный* авиацион госпиталь; *г. военный* хәрби госпиталь; *г. гарнизонный* гарнизон госпитале; *г. полевой подвижный* хәрәкәттәге ялан госпитале; *г. специализированный* махсуслаштырылған госпиталь һ. б.)

**госпита́льный** госпиталь (мәҫ., госпиталь база, госпиталь режим)

**гостепарази́ты** гостепаразиттар (эткә эйәләшеүсән паразит селәүҙәр, эттән улар кешегә лә йоғоусан)

**гра́дусник** *(мед.) ҡара:* **термометр медицинский**

**Гра́ма ме́тод** Грам методы (бактерияларҙы буятыу ысулы, бактериялар күрән (фиолет) төҫ алһа, Грам ыңғай *(Грам положительный);* ҡыҙыл төҫ алһа, Грам кире *(Грам отрицательный)* буятыу тип атала)

**гра́нула** *(в фармации)* гранула (ваҡ борсаҡ рәүешендәге дарыу формаһы, йотоп ҡабул ителә)

**гранулёма** гранулёма (1. төйөр рәүешендәге шештең бер төрө, мәҫ., *г. инфекционная* инфекцион гранулема; *г. сифилитическая* сифилис гранулемаһы һ. б..; 2. *г. венерическая* венерик гранулема (нигеҙҙә тышҡы енес ағзаларҙа сей яралар барлыҡҡа килеү менән үтеүсе һәм тропик, субтропик илдәрҙә күҙәтелеүсе венерик ауырыу); 3. *г. пиогенная* пиоген гранулема (эренләткес бактериялар тыуҙырған эренле шештәрҙең бер төрө) һ. б.)

**гранулемато́з** гранулематоз (гранулема шештәре сығыу менән характерлы ауырыуҙарҙың дөйөмләштерелгән исеме)

**гранулоци́т** гранулоцит (цитоплазмаһында бөртөклө есемдәре булған лейкоцит; *ҡара:* **лейкоцит)**

**гранулоцито́з** гранулоцитоз (ҡан-

да гранулоциттарҙың һаны артыуы)

**гранулоцитопени́я** гранулоцитопения (ҡанда гранулоциттар һанының кәмеүе)

**грануля́ции (грануляционная ткань)** грануляциялар (яра-йәрәхәтле шешеү булған ерҙә яңы тоташтырғыс туҡыма барлыҡҡа килеүе)

**графоло́гия** графология (психик ауырыуҙы асыҡлау маҡсатында сирлеләрҙең почеркын өйрәнеү)

**графома́ния** графомания (ауырыу рәүешендә күп яҙырға ынтылыу)

**графофоби́я** графофобия (яҙыуға ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия**)

**гре́бень** *(анат.)* ҡыр (мәҫ., *г. лобный* маңлай һөйәге ҡыры)

**гре́лка** йылытҡыс (тәндең теге йә был ерен йылытыу өсөн ҡулланыла торған ҡулайлама; төрҙәре: *г. резиновая* резина йылытҡыс; *г. химическая* химик йылытҡыс; *г. электрическая* электр йылытҡысы)

**грибки́ (грибы) паразитические** паразит бәшмәктәр (кешелә һәм хайуандарҙа ауырыу тыуҙырыусы микроскопик үҫемлек заттары)

**грибко́вый** бәшмәк

**грипп** грипп (үҙенсәлекле вирус йоғоуҙан килгән киҫкен инфекцион ауырыу)

**гриппо́зный** грипп, гриппоз (грипҡа ҡағылышлы, мәҫ., грипп вирусы, грипп (гриппоз) эпидемияһы)

**гриппоподо́бный** грипп һымаҡ (мәҫ., грипп һымаҡ ауырыу)

**гру́ди** түш *(ҡара:* **железа грудная)**

**грудна́я жа́ба** *ҡара:* **стенокардия**

**груди́ца** *(разг.) ҡара:* **мастит**

**грудобрюшна́я преграда** күкрәк шаршауы

**грудь** күкрәк, түш (мәҫ., *г. куриная* тауыҡ түш (рахит менән сирләгәндән һуң түш һөйәгенең ослайып тороуы); *г. широкая* киң күкрәк һ. б.)

**грундиммуните́т** грундиммунитет (беренсе иммунизациянан (прививканан) һуң барлыҡҡа килгән иммунитет)

**гру́ппа здоро́вья** һаулыҡ группаһы (тренер етәкселегендә физик культура менән шөғөлләнеүсе бер төркөм өлкән һәм урта йәштәге һау кешеләр)

**гру́ппа инвали́дности** инвалидлыҡ группаһы (өс группа бар: I группа инвалидлыҡ, II группа инвалидлыҡ, III группа инвалидлыҡ)

**гру́ппа кро́ви** ҡан группаһы (кеше ҡанының биохимик үҙенсәлеге менән айырылған төрө; төп 4 группа бар: I(O) ҡан группаһы, II(A) ҡан группаһы, III(B) ҡан группаһы, IV(AB) ҡан группаһы)

**гры́жа** бүҫер (1. ағзаның йәки уның өлөшөнөң тире аҫтына йәки мускулдар-ара арауыҡҡа һ. б. ҡыуышлы ергә тумпайып сығыуы; төрҙәре күп: *г. бедренная* бот төбө бүҫере; *г. белой линии живота* ҡорһаҡтың аҡ һыҙат бүҫере; *г. вправимая* ҡайтмалы бүҫер (сығып, урынына кире инә алған бүҫер); *г. врождённая* тыумыштан килгән бүҫер; *г. диафрагмальная* күкрәк шаршауы (диафрагма) бүҫере; *г. живота нару́жная* ҡорһаҡтың тышҡы бүҫере; *г. жировая* май бүҫере (бүҫер ҡабына эс майы ингән

була); *г. кишечная* эсәк бүҫере (бүҫер ҡабына эсәк ингән була); *г. мошоночная* тоҡса (инәк) бүҫере (тоҡсаға төшкән сандыр бүҫере); *г. невправимая* ҡайтарғыһыҙ бүҫер (бер сыҡҡан бүҫерҙе кире урынына кертеп булмай, ашығыс хирургик ярҙам талап итеүә; *г. паховая* сандыр бүҫере (сандыр каналынан сыҡҡан ҡорһаҡ бүҫере); *г. пахово-мошоночная* сандыр-тоҡса бүҫере; *г. послеоперационная* операциянан һуңғы бүҫер; *г. приобретенная* тормошта барлыҡҡа килгән бүҫер; *г. промежностная* сат бүҫере; *г. пупочная* кендек бүҫере; *г. скользящая* хәрәкәтсән бүҫер; *г. ущемленная* ҡыҫылған бүҫер (бүҫерҙең бер сығып, бүҫер тишегенең ҡыҫылыуы һөҙөмтәһендә бүҫер эсендә булған нәмәнең ҡорһаҡ эсенә кире ҡайта алмауы); 2. айырым ағзаларҙың тумпайып сығыуы (мәҫ., *г. влагалища* еңсә бүҫере; *г. головного мозга* баш мейеһе бүҫере; *г. спинного мозга* арҡа мейеһе бүҫере; *г. стекловидного тела* күҙҙең быяла (һымаҡ) есеме бүҫере; *г. хрусталика* күҙ яҫмығы бүҫере)

**грыжево́й** бүҫер (мәҫ., бүҫер ҡабы)

**грыжесече́ние** бүҫерҙе алыу операцияһы

**грызуны́** кимереүселәр (ҡомаҡсыҫҡандар)

**грязево́й** ләм (мәҫ., ләм ваннаһы)

**грязеводолече́бница** ләм-һыу дауаханаһы (шифалы ләм һәм һыу менән дауалау учреждениеһы)

**грязелече́ние** шифалы ләм менән дауалау

**грязь лечебная (пелоид)** шифалы (батҡаҡ) ләм (төрҙәре: диңгеҙ ләме һ. б.)

**губа́(ы)** 1. ирен *(г. заячья ҡара:* **расщелина губы**). 2. сит. мәҫ., *г. половые (срамные)* енес (оят) ситтәре; *г. половые большие* ҙур енес ситтәре; *г. половые малые* кесе енес ситтәре

**гу́мма** гумма (шештәрҙең бер төрө, мәҫ., *г. сифилитическая* сифилис гуммаһы)

**гуммо́зный** гумма (гуммаға ҡағылышлы)

**гумора́льный** гумораль (организмдың эске шыйыҡсаларына (ҡан, лимфа) ҡағылышлы)

**гумус** гумус (төрлө ташландыҡтар сереүе һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән матдә)

**гу́сеница** ҡарышлауыҡ

# Д

**давле́ние** баҫым (мәҫ., ҡан баҫымы)

**дакриоадени́т** дакриоаденит (күҙ йәше биҙенең шешеүе)

**дакриолитиа́з** дакриолитиаз (күҙ йәше биҙендә таш барлыҡҡа килеүе)

**дакриостено́з** дакриостеноз (танаукүҙ йәше каналының стенозы, *ҡара:* **стеноз**)

**дакриоцисти́т** дакриоцистит (күҙ йәше ҡабының шешеүе)

**дактилалги́я** дактилалгия (бармаҡтар ауыртыуы)

**дактили́т** дактилит (туберкулез һөҙөмтәһендә бармаҡ фалангаларының шешеүе)
**дактилоло́гия** дактилология (һаңғырау-телһеҙ кешеләрҙең ҡул элифбаһы ярҙамында бер-береһе менән аралашыуы)
**дактилоскопи́я** дактилоскопия (ҡул бармаҡтарының ус яҡ һүрәтен өйрәнеү; криминалистикала һәм медицина генетикаһында ҡулланыла)
**дальнозо́ркий** үтәғарашлы, алыҫтан яҡшы күреүсе (кеше)
**дальнозо́ркость** үтәғарау, үтәғарашлылыҡ (күҙ алмаһы диаметры үҫешенең туҡтауынан килгән күреү кәмселеге, мәҫ. *д. старческая* өлкәндәр (ҡарттар) үтәғарауы)
**дальтони́зм** дальтонизм (ҡыҙыл, йәшел төҫтө айыра алмауҙан торған күреү етешһеҙлеге)
**дальто́ник** дальтоник (дальтонизмы булған кеше)
**данти́ст** дантист (теш ауырыуҙары буйынса урта белемле медицина хеҙмәткәре, элек ҡулланылған термин)
**дарсонвализа́ция** дарсонвализация (юғары йышлыҡтағы һәм көсөргәнешлектәге электр-магнит майҙансығында дауалау; төрҙәре: *д. местная* сикле дарсонвализация (мәҫ., баш тәңгәлен генә дауалау); *д. общая* дөйөм дарсонвализация (тотош бөтә тәнде дауалау)
**движе́ние** хәрәкәт (мәҫ., *д. непроизвольное* ирекһеҙ хәрәкәт)
**двое́ние (в глазах)** ҡуш күренеү
**дво́йня** ике игеҙәк бала (төрө: *д. двуяйцо́вая* ике түл игеҙәктәре; *д. однояйцовая* бер түл игеҙәктәре)
**двукры́лые (насекомые)** пар ҡанатлы бөжәктәр (себен, серекәй һ. б.)
**двуо́кись углерода (углекислый газ)** углерод ике окисы (организмда окисланыу процесы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килеп, һулыш алғанда тышҡа сығарылған газ)
**двупа́лость (бидактилия)** ҡушбармаҡлылыҡ
**двуу́стка печеночная** *ҡара:* **фасциола печеночная**
**деби́льность** дебиллек (олигофренияның еңел төрө; *ҡара:* **олигофрения**)
**деби́льный** дебиль (дебиллеккә ҡағылышлы, мәҫ, ´дебиль кеше, *ҡара:* **дебильность**)
**деби́т сердца** йөрәк дебиты (йөрәк ҡарынсалары тарафынан бер берәмек ваҡытта (бер секундта, бер минутта) сығарылған ҡан миҡдары)
**девастáция** девастация (кеше, хайуан һәм үҫемлектәрҙә эйәләшеүсән паразит селәүҙәрҙе (бөтә үҫеш дәүерендә) ҡырыу саралары комплексы)
**де́вственница** ғиффәтле (саф) ҡыҙ
**девяси́л** андыҙ (тамыры нигеҙҙә ҡаҡырыҡ сығартҡыс дарыу бирә торған үлән)
**дегазáтор** дегазатор (1. дегазация үткәреүсе кеше; 2. ағыулы матдә менән химик реакцияға кереп уны зарарһыҙлаусы матдә)
**дегазáция** дегазация (тирә-яҡ ерҙе, кейемде һ. б. ағыулы матдәләрҙән зарарһыҙлау)
**дегельминтизáция** дегельминтизация (паразит селәүҙәр менән көрәшеү, уларҙан дауаланыу)
**дегенерáция** дегенерация (1. *ҡара:* **дистрофия**; 2. бер нисә ауырыу исеме, мәҫ, *д. психическая* психик дегенерация (нәҫелдән кил-

гән бер нисә психик ауырыуҙарҙың дөйөм исеме); *д. сетчатки* күҙҙең селтәрле шекәрәһе дегенерацияһы (дистрофик үҙгәреш менән үтеүсе бер нисә күҙ ауырыуының дөйөм исеме һ. б.)

**дегидрóз** дегидроз (тир бүленеүҙең кәмеүе)

**деградáция** деградация (1. *(биол.) ҡара:* **дегенерация**; 2. ҡайһы бер психик ауырыуҙарға ҡағылышлы термин, мәҫ., *д. алкогольная* алкоголле деградация (2—3-сө дәрәжәләге хроник алкоголизмдан килгән күренеш: хеҙмәткә һәләтлектең юғалыуы, фекер буталыуы һ. б.); *д. личности* шәхес деградацияһы (шәхестең фекер йөрөтөү, йәшәү активлығы, хис-тойғоһо кәмеүе менән характерлы психик күренеш)

**дегустáция** дегустация (ашамлыҡ матдәләренең, әҙер блюдалар һәм эсемлектәр сифатын органолептик юл (ашап ҡарау, еҫкәү һ. б.) менән билдәләү)

**Дедерлéйна палочка** Дедерлейн таяҡсаһы (ҡатын-ҡыҙ еңсәһендә ғәҙәти йәшәүсе бактерия)

**дезаггравáция** дезаггравация (сирле кеше тарафынан үҙ ауырыуын кәметеп күрһәтеү йәки ауырыуҙың айырым билдәләрен йәшереү)

**дезактивáтор** дезактиватор (ағыуға ҡаршы матдә; уның тәьҫире химик реакция тыуҙырыуға ҡайтып ҡала, һөҙөмтәлә организмға эләккән ағыу тулыһынса йәки бер ни тиклем зарарһыҙлана)

**дезактивáция** дезактивация (радиацион зарарлауҙы булдырмау ниәтенән теге йәки был объектты һәм уға эләккән радиактив матдәләрҙән таҙартыу саралары: *д. полная* тулы дезактивация; *д. частичная* ярым дезактивация (тик радиактив матдә төшкән ерҙе таҙартыу)

**дезинсéкция** дезинсекция (инфекцион һәм инвазион ауырыуҙар тыуҙырғыс бөжәктәрҙе ҡырыу)

**дезинстрýктор** дезинструктор (санэпидстанцияның йәки дезинфекция станцияһының дезинфекция, дезинсекция һәм дератизация эшен ойоштороусы урта белемле медицина работнигы)

**дезинтоксикáция** дезинтоксикация (организм тарафынан унда эләккән йәки барлыҡҡа килгән ағыуҙың биологик активлығын, концентрацияһын кәметеү һәм зарарлы тәьҫирен юҡ итеү комплекслы реакциялары)

**дезинфéктор** дезинфектор (санитария-эпидемиология службаһы, махсус әҙерлек алған һәм дезинфекция, дезинсекция һәм дератизация эшен башҡарыусы работник)

**дезинфекциóнная(ый)** дезинфекция, дезинфекцион (мәҫ., дезинфекция станцияһы, дезинфекцион матдә)

**дезинфéкция** дезинфекция (тирә-яҡ мөхиттә инфекцион ауырыу тыуҙырғыс заттарҙы ҡырыу; төрҙәре: *д. биологическая* биологик дезинфекция (тирә-яҡ мөхиттә барған биологик процестарға нигеҙләнгән була); *д. влажная* дымлы (еүеш) дезинфекция (эшкәртеү өсөн шыйыҡ дезинфекциялау матдәләре, мәҫ., хлорлы эзбиз, риванол һ. б. ҡулланыла); *д. газовая* газлы дезинфекция; *д. заключительная* йомғаҡлау дезинфекцияһы; *д.*

*профилактическая* профилактик дезинфекция (инфекцион ауырыуға шик тыуғанда һаҡланыу маҡсатында башҡарыла); *д. текущая* көндәлек дезинфекция (сирле кеше бүлендектәренә һәм тотонған әйберҙәренә ауырыу барышында дезинфекция үткәреп тороу)

**дезодора́тор** дезодоратор (дезодорация матдәһе булған махсус һауыт; *ҡара:* **дезодорация**)

**дезодора́ция** дезодорация (дезодорация матдәләре ҡулланып, насар еҫте бөтөрөү йәки кәметеү сараһы)

**дезориентиро́вка** *(в психиатрии)* дезориентировка (психик һаулыҡ ҡаҡшау сәбәпле тормошта ориентация юғалтыу)

**дезста́нция (дезинфекционная станция)** дезстанция (дезинфекция үткәреү учреждениеһы)

**де́йствие** *(мед.)* тәьҫир (итеү), мәҫ., дарыу тәьҫире

**декальцина́ция** *(в патологии)* декальцинация (ҡайһы бер физиологик йәки ауырыу процесы булғанда һөйәк туҡымаһы тарафынан кальций матдәһен юғалтыу)

**деканцерогениза́ция** деканцерогенизация (тирә-яҡ мөхит объекттарын канцероген матдәләрҙән таҙартыу; *ҡара:* **канцерогены**)

**декапита́ция** *(в акушерстве)* декапитация (йөклө ҡатындың ғүмерен һаҡлау маҡсатында, арҡыры ятҡан ғоманға (башы тәңгәлендә) тарҡатыу операцияһы)

**декапсуля́ция** декапсуляция (ағзаның фиброз ҡабын алыу операцияһы, мәҫ., бөйөр декапсуляцияһы)

**декомпенса́ция** декомпенсация (ниндәй ҙә булһа ағзаның функциональ етешмәүсәнлеге, мәҫ., йөрәк эшсәнлеге декомпенсацияһы)

**декомпре́ссия** декомпрессия (1. кешене солғап алған тирәлә барометр баҫымының киҫкен түбәнәйеүе, мәҫ., кессондан сыҡҡанда, үтә юғарыла осҡанда һ. б.; 2. ағза-туҡыманың эшсәнлегенә ҡамасаулаған артыҡ баҫымды кәметеү маҡсатында яһала торған хирургик операция, мәҫ., баш һөйәге трепанацияһы, бөйөр декапсуляцияһы һ. б.)

**декортика́ция** декортикация (1. баш мейеһе ярымшарҙарын алыу йәки уларҙың функциональ һәләтлеген кәметеү операцияһы; 2. ниндәй ҙә булһа ағзаның ҡабыҡ ҡатламын алыу операцияһы)

**деларва́ция** деларвация (тирә-яҡ мөхиттәге бөжәктәрҙе, беренсе нәүбәттә уларҙың ҡарышлауыҡтарын ҡырыу саралары)

**деле́ние** бүленеү (мәҫ., бактерия бүленеүе, күҙәнәк бүленеүе)

**дели́рий** делирий (аҡыл томаланыу, юҡ-бар күренеү, мәғәнәһеҙ хәрәкәт яһау һ. б. менән характерлы психик һаулыҡтың ҡаҡшауы, мәҫ., *д. алкогольный* алкоголь делирийы һ. б.)

**демарка́ция** *(в патологии)* демаркация (организмда барлыҡҡа килгән үле туҡыманың һау ҡалғанынан айырылып тороуы)

**деме́нция** деменция (кешенең йәшәгән дәүерендә барлыҡҡа килгән еңел аҡыллылыҡ)

**деминерализа́ция** *(в медицине)* деминерализация (организмда йәки һөйәк туҡымаһында минераль матдәләрҙең кәмеүе)

**демо́граф** демограф (демография белгесе)

**демогра́фия** демография (халыҡ һанының үҫеше, халыҡ составындағы үҙгәрештәрҙе өйрәнә торған фән)

**демодико́з** демодикоз (нигеҙҙә, биттең сәс фолликулаларында һәм тире май биҙҙәрендә демодекс исемле талпандың бер төрө эйәләшеү һөҙөмтәһендә ваҡ һытҡы, ҡыҙыл таплы шештәр барлыҡҡа килеү менән характерлы тире ауырыуы)

**демонома́ния** демономания (организмда «шайтан-фәлән» эйәләшеү илереүе менән характерлы психик һаулыҡтың ҡаҡшауы)

**демонофо́бия** демонофобия (шайтан-фәләнгә ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**де́мпинг-синдро́м** демпинг-синдром (ашҡаҙандың ҙур өлөшөн операция юлы менән алғандан һуң барлыҡҡа килгән ауырыу үҙгәрештәре: эс ауыртыу, күңел болғаныу һ. б.)

**де́нге** *ҡара:* **лихорадка денге**

**денерва́ция** денервация (тәндең берәй ерен нервыһыҙ ҡалдырыу, ҡайһы ваҡыт дауалау маҡсатында булдырыла)

**денти́н** дентин (тештең төп ҡаты матдәһе)

**денти́ция** дентиция (һөт йәки даими тештәрҙең сығып килеүе)

**деонтоло́гия медицинская** медицина деонтологияһы (медицина работниктарының ауырыу кешегә ҡарата үҙҙәрен тотоу принциптары системаһы)

**деперсонализа́ция** деперсонализация (үҙ шәхесе абруйын юғалтыу, йәмғиәттән ситләшеү тойғоһо булыу менән характерлы психик һаулыҡтың ҡаҡшауы)

**депигмента́ция** депигментация (туҡыма тарафынан пигменттың тулыһынса йәки бер өлөшөнөң юғалыуы, мәҫ., ошондай хәл тән өҫтөндә булһа, аҡ таптар барлыҡҡа килә)

**депиля́ция** депиляция (сәс тамырсаһына зарар килтермәйенсә сәс бөртөктәрен алыу)

**депре́ссия** депрессия (күңелһеҙлеккә бирелеү, психик активлыҡтың юғалыуы, рух йәки күңел төшөнкөлөгө һ. б. күренештәр менән характерлы һаулыҡтың ҡаҡшауы; депрессияның сәбәбе һәм төрҙәре күп)

**дератиза́ция** дератизация (ауырыу таратҡыс йәки экономик зыян килтерә торған кимереүселәрҙе (сысҡан, ҡомаҡ һ. б.) ҡырыу саралары)

**де́рма** дерма (тиренең эпидермис аҫтында ятҡан уртансы ҡатламы)

**дермати́т** дерматит (тиренең шешеүе; төрҙәре: *д. лекарственный* дарыу дерматиты (дарыу килешмәгәнлектән була); *д. профессиональный* профессиональ дерматит; *д. солнечный* ҡояш дерматиты һ. б.)

**дерматовенеро́лог** дерматовенеролог (тире һәм венерик ауырыуҙар белегесе, врач)

**дерматовенерологи́ческий** дерматовенерологик, дерматовенерология (мәҫ., дерматовенерологик ярҙам, дерматовенерология диспансеры)

**дермато́з** дерматоз (тирелә булған төрлө ауырыуҙарҙың дөйөм исеме)

**дерматозооно́з** дерматозооноз (кешегә хайуан бетсәләре йоҡҡандан килгән тире ауырыуы)

**дерматокониóз** дерматокониоз (ҡайһы бер профессияла туҙан ҡуныу һөҙөмтәһендә тире пигментацияһы: көрән, ҡара һ. б. төҫ алыуы)

**дерматóлог** дерматолог (тире ауырыуҙары белгесе, врач)

**дерматологи́ческий** дерматологик, дерматология (мәҫ., дерматологик ауырыуҙар, дерматология кафедраһы)

**дерматолóгия** дерматология (медицинаның тире ауырыуҙарын, уларҙы дауалау һәм иҫкәртеү ысулдарын өйрәнеүсе тармағы)

**дерматомáния** дерматомания (үҙ сәсен йолҡоу, тәнен тырнап сыйыу менән характерлы невроз)

**дерматомиáз** дерматомиаз (тире эсендә ҡайһы бер себендәрҙең ҡарышлауыҡтары эйәләшеүенән килгән тире ауырыуы)

**дерматомикóз** дерматомикоз (патоген бәшмәктәр йоғоуҙан килгән тире ауырыуы)

**дерматомиози́т** дерматомиозит (мускулдар һәм тире зарарланыуы менән характерлы коллагеноз рәтенә ингән етди дөйөм ауырыу)

**дерматопатофоби́я** дерматопатофобия (тире ауырыуҙарына ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**дерматосклерóз** дерматосклероз (нигеҙҙә, ауырыу сәбәпле тиренең айырым өлөштәренең ҡатыуы)

**дерматофибрóма** дерматофиброма (тоташтырғыс туҡыманан сыҡҡан ябай тире шеше)

**дермовакци́на** дермовакцина (нигеҙҙә, бызау тиреһендә үрсетелгән натураль сәсәк вирустарынан әҙерләнгән вакцина)

**дермографи́зм** дермографизм (механик ярһытыуға тире нервыларының яуап реакцияһы: нигеҙҙә, тиренең ҡыҙарыуы йәки ағарыуы менән характерлы, мәҫ., аҡ дермографизм, ҡыҙыл дермографизм)

**дермóид** дермоид (киста шешенең бер төрө; *ҡара:* **киста)**

**десенсибилизáция** десенсибилизация (организмдың юғары һиҙеүсәнлеген (сенсибилизацияһын) кәметеү йәки юҡ итеү)

**десквамáция** десквамация (тәбиғи йәки ауырыу сәбәпле эпидермис күҙәнәктәренең уйылып төшөүе)

**десмóид** десмоид (тоташтырғыс туҡыманан сыҡҡан шештәрҙең бер төрө)

**десмурги́я** десмургия (хирургияның бәй һалыу ысулдарын өйрәнә торған бүлеге)

**деснá** теш ите (ҡаҙнаһы)

**дестру́кция** *(в патологии)* деструкция (туҡыма күҙәнәктәрҙең тарҡалыуы)

**деторождéние** бала тыуыу

**детсáд (детский сад)** балалар баҡсаһы

**дéтские учреждéния** балалар учреждениелары (мәҫ., ясле һ. б.)

**дéтское мéсто** ғоман (бала ятҡылығы) яҫтығы (һуңғылыҡтың төп өлөшө)

**дефáнс (мышечный)** мускулдар дефансы (ҡорһаҡ шекәрәһе шешкәндә ҡорһаҡ мускулдарының тартышып ҡатыуы; был ҡайһы бер етди ҡорһаҡ ауырыуының билдәһе)

**дефекáция** дефекация (оло ярау итеү йәки иттереү (мәҫ., клизма ярҙамында һ. б.)

**дефéкт** дефект (1. (псих.) ауырыу сәбәпле шәхес психикаһы үҙгәреүе; 2. ағза-туҡыманың ана-

томик йәһәтенән кәмселекле булыуы, мәç., *д. межпредсердный* йөрәк алды-ара дефекты; 3. *д. рентгенологический* рентгенологик дефект (тикшерелгән ағзала уйым табылыуы)

**деферентит** деферентит (орлоҡ сығарғыс юлдың шешеүе)

**дефлорант** дефлорант (пестицид препараттарҙың береһе; *ҡара:* **пестициды)**

**дефлорация** дефлорация (ҡыҙлыҡ пәрҙәһенең боҙолоуы)

**деформация** деформация (кешенең теге йәки был ағза-туҡымаһының формаһы боҙолоуы, мәç., быуын деформацияһы)

**дефторирование (обесфторирование) воды** һыуҙы дефторлау (нигеҙҙә, халыҡты флюороз ауырыуынан һаҡлау маҡсатында яһалма юл менән тәбиғи һыуҙа фтор тоҙҙарын кәметеү)

**дехлорирование воды** һыуҙы дехлорирлау (хлорлау үткәргәндә йәғни хлорлағанда һыуға артыҡ эләккән хлорҙы кәметеү ысулы)

**децеребрация** децеребрация (фәнни өйрәнеү маҡсатында хайуандарҙың баш мейеһе өлөшөн алыу операцияһы)

**деятельность** *(физиол.)* эшсәнлек, эш (мәç., ашҡаҙан эшсәнлеге, мускулдар эшсәнлеге һ. б.)

**диабет** диабет (һейҙек аша организмдан шәкәр бүленеүе менән характерлы бер төркөм ауырыуҙарҙың дөйөмләштерелгән исеме; төрҙәре: *д. адреналиновый* адреналин диабеты (адреналин гормоны артыҡ бүленеүҙән килгән диабет); *д. бронзовый; ҡара:* **гемохроматоз;** *д. несахарный* шәкәрһеҙ диабет (антидиуретин гормоны барлыҡҡа килмәүҙән, йә аҙ эшләнеүенән йәки бөйәр каналсыҡтары эпителийының был гормонға ҡарата һиҙмәүсән булыуынан килгән диабет күренеше); *д. почечный* бөйөр диабеты (бөйөр каналсыҡтары сирле булыу сәбәпле һейҙек менән шәкәр юғалтыу); *д. сахарный* шәкәр диабеты (ашҡаҙан аҫты биҙе сирле үҙгәрешенән һәм һөҙөмтәлә углеводтар алмашыныуы боҙолоуынан килгән диабет); төрҙәре: *д. взрослых* өлкәндәр диабеты; *д. потенциальный* потенциаль диабет (нәҫелдән килгән диабетҡа бирешеүсәнлек); *д. старческий* ҡарттар диабеты (65 йәше уҙған кешеләрҙә күҙәтелә торған еңелерәк үтеүсе шәкәр диабеты); *д. юношеский (ювенильный)* йәштәр (ювениль) диабеты (шәкәр диабетының бер төрө) һ. б.

**диабетид** диабетид (диабет булғанда тире һәм тиресә ҡатламдарҙа барлыҡҡа килгән сабыртма)

**диабетический** диабет, диабетик (диабетҡа бәйле)

**диагноз** диагноз (кешенең һаулығы, булған ауырыуы хаҡында медицина һығымтаһы; төрҙәре: *д. гистологический* гистологик диагноз (гистологик тикшереүгә нигеҙләнгән диагноз); *д. дифференциальный* дифференциаль диагноз (башҡа сирҙәрҙән айырыу); *д. клинический* клиник диагноз (клиник тикшереү нигеҙендә ауырыуҙы билдәләү); *д. окончательный* һуңғы диагноз; *д. патологоанатомический* патолого-анатомик диагноз (кеше үлгәндән һуң һәм ярып тикшергәс ҡуйылған диагноз); *д. предварительный* тәүге диагноз (ауырыу кешене беренсе ҡарау менән генә ҡуйылған диаг-

ноз); *д. судебно-медицинский* суд-медицина диагнозы (суд-медицина тикшереүе үткәргәндән һуң ҡуйылған диагноз)

**диагно́стика** диагностика (1. медицинаның ауырыуҙы йәки үҙенсәлекле физиологик хәлде асыҡлау юлдарын өйрәнеүсе тармағы; 2. ауырыуҙы асыҡлау юлдары: *д. биохимическая* биохимик диагностика (биохимик тикшереү ярҙамында ауырыуҙы асыҡлау); *д. инструментальная* инструменталь диагностика (төрлө прибор, инструмент ярҙамында ауырыуҙы асыҡлау); *д. лабораторная* лаборатор диагностика (микроскопик, бактериологик һ. б. тикшереү үткәреп ауырыуҙы асыҡлау); *д. машинная* машина диагностикаһы (иҫәпләү методын һәм техниканы ҡулланып ауырыуҙы асыҡлау); *д. морфологическая* морфологик диагностика (ағза-туҡыма һәм күҙәнәктәр структураһын өйрәнеп, ауырыуҙы асыҡлау); *д, радиоизотопная* радиоизотоп диагностикаһы (радиоактив изотоптар ҡулланып ауырыуҙы асыҡлау); *д. рентгенологическая* рентгенологик диагностика; *д. серологическая* серологик диагностика (серологик тикшереүҙәр үткәреп ауырыуҙы асыҡлау, *ҡара:* **реакция серологическая**); *д. функциональная* функциональ диагностика (организмдың йәки айырым ағза-туҡыманың эшсәнлеген тикшереп ауырыуҙы асыҡлау); *д. цитологическая* цитологик диагностика (ағза-туҡымаларҙан алынған күҙәнәктәрҙе тикшереп ауырыуҙы асыҡлау)

**диагно́стикум** диагностикум (серологик тикшереүҙәр үткәргәндә антиген рәүешендә ҡулланылыусы стандарт препарат)

**диагности́ческий** диагностик, диагностика (диагностикаға ҡағылышлы)

**диа́лиз** диализ (коллоидаль һ. б. иретмәләрҙе таҙартыу ысулы. Был ысул медицина-биологик тикшереүҙәрҙә киң ҡулланыла, «яһалма бөйөр» аппаратының эше лә диализға нигеҙләнгән)

**диапеде́з** диапедез (ҡан тамыры көбө аша ҡан күҙәнәктәренең сығыуы)

**диаре́я** диарея (эс китеү)

**диа́стола** диастола (йөрәк эшсәнлегенең, уның мускулдары йомшарыу менән үткән дәүере)

**диате́з** диатез (теге йәки был ауырыуға бирешеүсәнлек йәки адекват булмаған реакция биреү менән характерлы конституция аномалияһы; төрҙәре: *д. геморрагический* геморрагик диатез (ҡанау, ҡан һауыуға бирешеүсәнлек менән характерлы); *д. лимфатико-гипопластический* лимфатик-гипопластик диатез (аллергия һәм аутоаллергия реакцияларына, ауырыуға тиҙ бирешеп барыу менән характерлы); *д. невропатический* невропатия диатезы (тиҙ ҡыҙып барыу, йоҡо, аппетит боҙолоу менән характерлы); *д. нервно-артритический* нервы-артрит диатезы (һимереүгә, шәкәр диабетына, атеросклерозға, гипертония ауырыуына, подаграға, матдәләр алмашыныу артриттарына (быуындар шешеүенә) бирешеүсән булыу менән характерлы диатез); *д. оксалемический* оксалемия диатезы (нервы артрит диатезының бер төрө: ҡуҙғалаҡ кислотаһының алма-

шыныуы боҙолоу менән характерлы); *д. спазмофилический* спазмофилия диатезы *(ҡара:* **спазмофилия**); *д. тромбофилический* тромбофилия диатезы (ҡан тиҙ ойоп барыу менән характерлы диатез); *д. экссудативно-катаральный* экссудатив-катараль диатез (дауамлы шешенеүҙәргә, аллергик реакцияларға һ. б. бирешеүсәнлек менән характерлы диатез); *д. язвенный* сей яра диатезы (ашҡаҙан һәм бөйән эсәгендә сей яра барлыҡҡа килеүгә бәйле диатез)

**диатерми́я** диатермия (юғары йышлыҡтағы электр ярҙамында тәндең тәрән ятҡан ерен йылытып дауалау)

**диатермогрязелече́ние** диатермоләм дауалауы (диатермия һәм шифалы ләм менән бер юлы дауалау)

**диатермокоагуля́ция** диатермокоагуляция (юғары йышлыҡтағы электр менән көйҙөрөп дауалау)

**диатермоэлектрофоре́з** диатермоэлектрофорез (диатермия һәм дарыу электрофорезын бер юлы ҡулланып дауалау)

**диафаноскопи́я** диафаноскопия (тар яҡтылыҡ шәлкеме менән ағза-туҡыманы үтәнән-үтә яҡтыртып тикшереү ысулы)

**диа́физ** диафиз (көпшәле һөйәктең урта өлөшө)

**диафизи́т** диафизит (көпшәле һөйәктең урта өлөшөнөң шешеүе)

**диафра́гма** диафрагма (1. шаршау; *(ҡара:* **грудобрюшная преграда**); 2. мәҫ., *д. таза* янбаш диафрагмаһы (янбаш төбөндәге бөтә йомшаҡ туҡымалар)

**диафрагмати́т** диафрагматит (күкрәк шаршауының шешеүе)

**дивакци́на** дивакцина (бер юлы ике йоғошло ауырыуға ҡаршы йүнәлтелгән вакцина; *ҡара:* **вакцина**)

**диверге́нция глаз** күҙ дивергенцияһы (күҙ алмаларының ян-яҡҡа тайпылыуы)

**диверти́кул** дивертикул (ҡыуышлы ағза көбөнөң тыш яҡҡа бүртеп сыҡҡан өлөшө)

**дивертикули́т** дивертикулит (дивертикулдың шешеүе; *ҡара:* **дивертикул**)

**дие́та** диета (ауырыу кешегә тәғәйенләнгән туҡланыу рационы һәм режимы, диета төрҙәре: *д. печеночная* бауыры сирле кешеләр диетаһы; *д. разгрузочная* еңеләйтелгән диета һ. б.)

**диети́ческий** диетик, диетика (мәҫ., диетик туҡланыу)

**дието́лог** диетолог (диетология белгесе, врач)

**диетоло́гия** диетология (һау һәм ауырыу кешене рациональ туҡландырыу хаҡында ғилем)

**диетотерапи́я** диетотерапия (һайлап алынған диеталар ярҙамында дауалау ысулы)

**диетсестра́** диетсестра (ятып дауаланыу учреждениеһында диета төҙөй торған медсестра)

**диетстоло́вая** (диети́ческая столо́вая) диетик ашхана

**дизадапта́ция** дизадаптация (организмдың тирә-яҡ мөхит һәм эске среда факторҙары йоғонтоһона ҡарата яраҡлашыуының боҙолоуы)

**дизакузи́я** дизакузия (ишетеү ағзаларының һаулығы ҡаҡшау)

**дизартри́я** дизартрия (нервы системаһы ҡаҡшауы һөҙөмтәһендә асыҡ, аңлайышлы итеп һөйләшә алмау)

**дизентери́я** дизентерия (1. үҙенә

хас бактерия йоғоуҙан килгән инфекцион ауырыу, нигеҙҙә, нәҙек һәм йыуан эсәктәр зарарлана; төрҙәре: *д. острая* кисҡен дизентерия; *д. субклиническая* субклиник дизентерия (еңел, беленер-беленмәҫ үтеүсе дизентерия); *д. токсическая* токсик дизентерия (ауыр үтеүсе дизентерия; 2. патоген ябай микроскопик хайуандар йоғоуҙан килгән ауырыу: мәҫ., *д. амёбная* амебалы дизентерия *(ҡара:* **амебиаз**); *д. инфузорная* инфузория дизентерияһы; *ҡара:* **балантидиаз)**

**дизостóз** дизостоз (нәҫелдән килгән һөйәк ауырыуҙарының дөйөм исеме)

**дизурúя** дизурия (кесе ярау боҙолоуҙарының (йыш, ауыртыу менән һейеү һ. б.) дөйөм исеме)

**дизэмбриогенезúя** дизэмбриогенезия (эмбриональ үҫеш боҙолоуҙарының дөйөм исеме)

**дизэнзимóз** дизэнзимоз (ферменттар етешмәүсәнлегенең дөйөм исеме)

**дилатáция** дилатация (ниндәй ҙә булһа ҡыуышлы ағзаның тороҡло рәүештә киңәйеүе, мәҫ., *д. сердца* йөрәк дилатацияһы)

**динамографúя** динамография (график һүрәт төшөрөү рәүешендә мускулдар эшсәнлеген өйрәнеү)

**динамокардиографúя** динамокардиография (йөрәк-тамыр системаһын өйрәнеү ысулы)

**динамóметр** *(в мед. технике)* динамометр (физик көстө билдәләү өсөн прибор)

**динамометрúя** динамометрия (динамометр ярҙамында мускулдың йәки бер төркөм мускулдарҙың көсөн билдәләү)

**диóптрика глаза** күҙ диоптрикаһы (күҙҙең һынылыш средаларын өйрәнеү ысулы)

**диоптрúя** диоптрия (оптика системаһында, нигеҙҙә, күҙлек быялаларының һынылыш көсөн билдәләй торған берәмек)

**диплегúя** диплегия (ике яҡлы паралич, мәҫ., *д. верхних конечностей* ике ҡул диплегияһы)

**диплобактéрия** диплобактерия (ике таяҡсанан торған бактерия)

**диплокóкк** диплококк (ике шарҙан торған бактерия)

**диплопúя** диплопия (бер нәмәне ике итеп күреү менән характерлы күреү кәмселеге)

**дипсоманúя** *ҡара:* **пьянство запойное**

**дирофиляриóз** дирофиляриоз (дирофилярий исемле паразит селәү йоғоуҙан һәм, нигеҙҙә, күҙҙәр, тире аҫты туҡымаһы зарарланыу менән характерлы гельминтоз ауырыуы)

**дисбактериóз** дисбактериоз (кеше организмында, нигеҙҙә, эсәктәрҙә нормаль микрофлораның тәбиғи булмаған микробтар менән алмашыныуы һәм шунлыҡтан килгән сирле үҙгәрештәр)

**дисбалáнс пищевы́х вещéств** ашамлыҡ матдәләренең дисбалансы (рацион, айырым ашамлыҡ составында биологик мөһим туҡлыҡлы матдәләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәте боҙолоуы)

**дисгармóния психúческая** психик дисгармония (шәхестең бер психик сифаттары нык үҫеш алған булһа, икенселәре артта, үҫмәй ҡала)

**дисгидрóз** дисгидроз (1. тир бүленеү боҙолоуҙарының дөйөм исе-

ме; 2. тир юлдары тығылыу һөҙөмтәһендә ус-табандарҙың шешеүе)

**диск** *(анат.)* диск (1. ҡайһы бер быуын эсендәге ваҡ кимерсәк; 2. *д. зрительного нерва* күреү нервы дискыһы — нервы өлөшсәһе)

**дискерато́з** дискератоз (эпидермистың үҫеше боҙолоуы һәм уның ҡатыуы, мәҫ., *д. врожденный* тыумыштан килгән дискератоз)

**дискинези́я** дискинезия (ниндәй ҙә булһа ағзаның хәрәкәт эшсәнлеге координацияһы боҙолоуы һәм һөҙөмтәлә ауырыу билдәләре барлыҡҡа килеүе, мәҫ., *д. желчных путей* үт юлдары дискинезияһы һ. б.)

**дислока́ция мо́зга** мейе дислокацияһы (ауырыу сәбәпле баш мейеһенең урынынан күсеүе)

**дисменоре́я** дисменорея (күрем килеү циклының боҙолоуы)

**дисмнези́я** дисмнезия (хәтерләү һәләте түбәнәйеүенең бер төрө)

**дисморфофоби́я** дисморфофобия (үҙеңдәге ниндәй ҙә булһа физик йәки физиологик кәмселекте психик яҡтан ауыр кисереү)

**диспансе́р** диспансер (дауалау менән бер ҡатарҙан актив профилактик эш алып барған махсус медицина учреждениеһы; төрҙәре: *д. врачебно-физкультурный* врачлыҡ-физкультура диспансеры; *д. глаукоматозный* глаукоматоз диспансер (глаукома ауырыуын дауалау һәм булдырмау саралары менән шөғөлләнә); *д. кардиологический* кардиология диспансеры (йөрәк ауырыуҙарын дауалау һәм булдырмау саралары менән шөғөлләнә); *д. онкологический* онкология диспансеры (шеш ауырыуҙарын дауалау һәм булдырмау саралары менән шөғөлләнә); *д. кожно-венерологический* тире-венерология диспансеры; *д, психо-неврологический* психо-неврология диспансеры; *д. противотуберкулезный* туберкулезға ҡаршы диспансер)

**диспансериза́ция** диспансеризация, диспансерлау (1. һаулыҡ һаҡлау эшен алып барыу системаһы; 2. дауалау-профилактика маҡсатында алып барылған медицина күҙәтеүе)

**диспареуни́я** диспареуния (ҡатынҡыҙ енес ауырыуҙарының дөйөм исеме)

**диспепси́я** диспепсия (аппетит юғалыу, эс китеү һ. б. билдәләр менән үтеүсе аш үҙләштереү ауырыуы); төрҙәре: *д. бродильная* әсеү диспепсияһы (углевод матдәләрен үҙләштереүе боҙолоу менән билдәләнгән диспепсия); *д. гастрогенная* гастроген диспепсия (ашҡаҙанда аш үҙләштереүе боҙолоу менән билдәләнгән диспепсия); *д. гнилостная* сереткес диспепсия (туғ-әсәктә серетеү процестарының көсәйеүе менән билдәләнгән диспепсия); *д. кишечная* эсәк диспепсияһы (аш үҙләштереү процесы эсәктәрҙә боҙолоу менән билдәләнгән диспепсия); *д. мочевая* һейеү диспепсияһы (хроник рәүештә ваҡытында һейҙек тышҡа сығарылмау һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән диспепсия); *д. нервная* нервы диспепсияһы (нервы системаһы эшсәнлеге боҙолоуҙан килгән диспепсия); *д. панкреатическая* панкреатик

диспепсия (ашҡаҙан аҫты биҙе эшсәнлеге боҙолоуҙан килгән диспепсия); *д. парентеральная* парентераль диспепсия (ниндәй ҙә булһа инфекцион ауырыу кисергәндә барлыҡҡа килгән диспепсия); *д. печёночная* бауыр диспепсияһы (бауыр тарафынан үттең аҙ бүленеүенән килгән диспепсия); *д. физиологическая* физиологик диспепсия (3—5 көнлөк яңы тыуған балаларҙа күҙәтелеүсе диспепсия) һ. б.)

**диспепти́ческий** диспепсия, диспептик (диспепсияға ҡағылышлы)

**дисплази́я** дисплазия (ағза-туҡымаларҙың дөрөҫ үҫмәүенең дөйөм исеме)

**диспно́э** диспноэ (тын ҡурылыу, тын бөтөү)

**диспротеинеми́я** диспротеинемия (ҡан аҡһымдарының үҙ-ара мөнәсәбәте боҙолоуы)

**диссемина́ция** диссеминация (ҡан, лимфа тамырҙары, үпкә көпшәләре буйлап ауырыу тыуҙырғыс заттарҙың, шеш күҙәнәктәренең организмдың икенсе еренә күсеүе, мәҫ., *д. опухоли* шеш диссеминацияһы)

**диссемини́рованный** диссеминацияланған (диссеминацияға ҡағылышлы)

**диссимиля́ция** диссимиляция (күҙәнәк эсендәге ҡатмарлы органик берләшмәләрҙең ябайыраҡ матдәләргә бүлгеләнеүе)

**диссимуля́ция** диссимуляция (үҙ һаулығы тураһында яңылыш фекер тыуҙырыу маҡсатында ауырыуын йә уның айырым билдәләрен йәшереү)

**диста́льный** дисталь (кәүҙә үҙәгенән алыҫыраҡ ятҡан ағза өлөшөнә ҡарата ҡулланылыусы термин, мәҫ., аяҡтың дисталь өлөшө)

**дистилля́ция** дистилляция (шыйыҡсаны таҙартыу)

**дистими́я** дистимия (сәбәпһеҙ, ваҡытлыса кәйефтең боҙолоуы)

**дистирео́з** дистиреоз (боғаҡ ауырыуы булғанда күҙәтелгән күренеш: бер юлы гипертиреоз һәм гипотиреоз билдәләренең булыуы; *ҡара:* **гипотиреоз, гипертиреоз)**

**дистони́я** дистония (мускулдар, тамырҙар тонусының норманан тайпылыуы; ҡайһы бер туҡымаларҙа тонустың түбән йәки юғары булыуы)

**дисторси́я** дисторсия (быуын тарамыштары һуҙылыуы йәки өҙөлөүе)

**дистре́сс** дистресс (стрестың киреһе; *ҡара:* **стресс)**

**дистрофи́ческий** дистрофия, дистрофик (дистрофияға ҡағылышлы)

**дистрофи́я** дистрофия (матдәләр алмашыныуы боҙолоу менән характерлы патологик процесс; уның төрҙәре: *д. белко́вая* аҡһымлы дистрофия; *д. жирова́я* майлы дистрофия; *д. печёночная* бауыр дистрофияһы һ. б.)

**дисфаги́я** дисфагия (йота алмау менән характерлы ауырыуҙарҙың дөйөм исеме)

**дисфази́я** дисфазия (төрлө сәбәптән телмәр боҙолоуы)

**дисфони́я** дисфония (тауыш яңғырауыҡлылығының боҙолоуы; ҡарлығыуы, насар ишетелеүе һ. б.)

**дисфори́я** дисфория (күңелһеҙлеккә, ҡыҙып китеүгә бирелеүсәнлек менән характерлы һаулыҡ ҡаҡшауы)

**дисфу́нкция** дисфункция (организмдың теге йәки был ағзаһы һәм туҡымаһының эшсәнлеге боҙолоуы)

**дисхромия кожи** тире (тән) дисхромияһы (тәндең тәбиғи төҫө үҙгәреүенең дөйөм исеме)

**диуре́з** диурез (1. һейҙек эшләнеше һәм бүленеүе; 2. һейҙектең тәүлек әйләнәһендәге күләме)

**диуре́тик** диуретик (һейҙек ҡыуғыс дарыу)

**дифиллоботрио́з** дифиллоботриоз (киң таҫма паразит селәүе йоғоуҙан килгән һәм, нигеҙҙә, эсәктәрҙе, нервы системаһын зарарлаған гельминтоз ауырыуы, уны ғәҙәттә сей балыҡ ашап йоҡторалар)

**дифтери́йный** дифтерия (дифтерияға ҡағылышлы, мәҫ., дифтерия токсины)

**дифтери́я** дифтерия (дифтерия бактерияһы йоғоуҙан килгән етди инфекцион ауырыу, тамаҡ, танау, ҡурылдай, боғарлаҡ (һирәк осраҡта башҡа ағзалар) тиресәһе зарарланыу менән характерлы; төрҙәре: *д. глаза* күҙ дифтерияһы; *д. кожи* тире дифтерияһы; *д. носа* танау дифтерияһы; *д. токсическая* токсик дифтерия (дифтерияның үтә ҡаты формаһы һ. б.)

**дифтеро́иды** дифтероидтар (дифтерия бактерияһына бер ни тиклем оҡшаған бер төркөм бактериялар)

**дихромази́я** дихромазия (тыумыштан килгән төҫтө айыра алмау; күҙ дефекты)

**диэлектрогра́фия** диэлектрография (ағза-туҡымаларҙың ҡан менән тулышыуын өйрәнеү ысулы)

**диэнцефали́т** (баш мейеһенең урталыҡ өлөшөнән шешеүе)

**ДНК** ДНК (*ҡара:* **кислота дезоксирибонуклеиновая)**

**дно** *(анат.)* төп (мәҫ., *д. глазное* күҙ эсе төбө; *д. желудка* ашҡаҙан төбө; *д. матки* аналыҡ төбө һ. б.)

**доброкачественный(ая)** ябай (яҡшы) сифатлы, ябай, мәҫ., *опухоль доброкачественная* ябай (ҡурҡыныcһыҙ) шеш; *пища доброкачественная* яҡшы сифатлы ашамлыҡ

**до́за** доза (дарыуҙың бер тапҡыр йәки бер тәүлектә эсеү өсөн билдәләнгән миҡдары); 1. *д. лекарст. вещества* дарыу дозаһы; *д. высшая (максимальная)* иң юғары доза; *д. лечебная (терапевтическая)* дауалау (терапевтик) доза; *д. разовая* бер ҡулланыу дозаһы (бер тапҡыр ҡабул итеү дозаһы); *д. суточная* тәүлек дозаһы; 2. нурланыш дозаһы; мәҫ., *д. рентгеновского излучения* рентген нурланыш дозаһы һ. б.)

**доза́тор** дозатор (ниндәй ҙә булһа матдәнең күләмен, миҡдарын билдәләү аппараты)

**дози́метр** дозиметр (1. радиактив нур таралыу миҡдарын үлсәй торған прибор; 2. энергия миҡдарын үлсәй торған прибор)

**дозиметри́ст** дозиметрист (дозиметрия үткәреүсе кеше)

**дозиметри́я** дозиметрия (1. радиактив нур таралыу дозаһын һәм кимәлен билдәләү. 2. энергия дозаһын билдәләү)

**дозиро́вка** дозировка, дозалау, дозаны билдәләү

**до́ктор** доктор (1. ғилми дәрәжә; 2. һөйләү теләндә — врач)

**документа́ция медицинская** медицина документацияһы

**долголе́тие** оҙон ғүмерлелек, ғүмерле булыу

**до́лька** өлөшсә (мәҫ., бауыр өлөшсәһе)

**доля** өлөш (мәҫ., үпкә өлөшө)

**дом** йорт *(д. инвалидов* инвалидтар йорто; *д.-интернат для престарелых и инвалидов* ҡарттар һәм инвалидтар өсөн интернат йорт; *д. отдыха* ял йорто; *д. ребёнка* балалар йорто (махсус дауалау-профилактика учреждениеһы, унда 3 йәшкә тиклем етем йәки яңғыҙ әсә балалары урынлаштырыла; *д. ребёнка санато́рного типа* санаторий тибындағы балалар йорто (сирле балалар өсөн дауалау учреждениеһы һ. б.)

**домина́нтность** *(в генетике)* доминантлыҡ (ике пар гендарҙың береһе нәҫел сифатын биреүҙә өҫтөнлөк тотоу)

**до́нор** донор (сирлеләргә ҡанын, теге йәки был ағза-туҡымаһын биреүсе кеше, мәҫ., *д. безвозмездный* түләүһеҙ донор (донорлыҡ иткән өсөн түләнмәй); *д. универсальный* универсаль донор (1 (0) группа ҡаны булған кеше, уның ҡаны һәр кемгә ярай)

**до́норство** донорлыҡ (үҙ ихтыяры менән донор булыу)

**доно́шенность** етлегеп тыуғанлыҡ (әсә ҡарынында 39—40 аҙна үҫештә булып донъяға килеү)

**доно́шенный** етлегеп тыуған (бала)

**до́пинг** допинг (ваҡытлыса физик һәм психик һәләтлекте көсәйтеүсе матдә; ярыш ваҡытында спортсмендарға допинг ҡулланыу тыйыла)

**доце́нт** доцент (ғилми исем)

**драже́** драже (әселеген йәшереү өсөн шәкәр, шоколад менән ҡапланған төймә рәүешендәге дарыу)

**драку́нкулез (ришта)** дракункулез (йылы яҡтарҙа күҙәтелеүсән, үҙенә бер төрлө йомро паразит селәү йоғоуҙан килгән гельминтоз ауырыуы)

**дрена́ж** *(мед.)* дренаж (ярала йәки организмдың ниндәй ҙә булһа ҡыуышлығында барлыҡҡа килгән бүлендекте, шыйыҡсаны сығарыу өсөн ҡоролма)

**дрени́рование** дренажлау (дренажға нигеҙләнгән дауалау ысулы)

**дрожа́ние** ҡалтырау, дерелдәү

**дро́жжи** сүпрә бәшмәге (микроскопик бәшмәктәр, ҡайһы берәүҙәре ауырыу тыуҙыра)

**дру́за (актиномицеты)** друза (актиномицет бәшмәктәренең тупланышы)

**дря́хлость** бәлтерәгәнлек

**дуга́** *(анат.)* дуға (мәҫ., *д. зубная* теш тәр дуғаһы)

**дуодени́т** дуоденит (бөйән эсәгенең шешеүе)

**дуоденогра́фия** дуоденография (бөйән эсәген рентген ярҙамында тикшереү)

**дуоденоскопи́я** дуоденоскопия (махсус прибор — гастродуоденоскоп ярҙамында бөйән эсәген ҡарап тикшереү)

**дуоденохоланги́т** дуоденохолангит (бөйән эсәге һәм үт юлдарының бер юлы шешеүе)

**дупло́ (зуба)** серек теш соҡоро

**дуст** дуст (инсектицид ағыуы менән ҡатнаш онтаҡ препарат)

**духота́** тонсоу, томра, томорҡо, бөркөү

**душ** душ (1. һыу ярҙамында башҡарылған дауалау йәки гигиеник процедура; төрҙәре: *д. восходящий (промежностный)* үрләүсе душ (һыу ағымы сат өлкәһенә йүнәлтелгән була); *д.*

*гигиенический* гигиеник душ; *д. кишечный восходящий* үрләүсе эсәк душы (арт юлдан башлап һыу ағымы эсәктәр буйлап ебәрелә торған дауалау процедураһы); *д. Шарко* Шарко душы (1,5—3 атмосфера баҫымлы дауалау душы); 2. һауа һәм ҡайһы бер электр процедуралары ла душ тип атала: *д. воздушный* һауа душы, *д. электростатический* электростатик душ (даими электр ярҙамында башҡарылған физиотерапия процедураһы һ. б.)

**душевнобольной** психик ауырыуы (сирле)

**душица (обыкновенная)** мәтрүшкә (сәскәһе, япрағы, гәҙәттә, тирләткес, эс йомшартҡыс дауа бирә торған үлән)

**дыхание** һулыш, тын алыу (төрҙәре: *д. астматическое* астма һулышы *(ҡара:* **астма**); *д. брюшное (диафрагмальное)* ҡорһаҡ һулышы (ҡорһаҡ мускулдары ярҙамында һулышты көсәйтеү); *д. везикулярное* везикуляр һулыш (һау кеше күкрәген тыңлағанда ишетелгән һулау тауышы); *д. внешнее* тышҡы һулыш (тышҡы тирә-яҡ мөхит менән булған газ алмашыныуы); *д. «второе»* «өҫтәмә» һулыш (ныҡ арығандан һәм уңышһыҙлыҡтарҙан һуң өҫтәмә көс кереү, образлы әйтем); *д. глубокое* тәрән һулыш; *д. грудное* күкрәк һулышы; *д. жесткое* ҡаты һулыш (ҡайһы бер үпкә ауырыуы булғанда, тыңлағанда күкрәктән килгән һулыш тауышы); *д. искусственное* яһалма һулатыу (тын алдыртыу); *д. искусственное аппаратное* аппарат ярҙамында яһалма һулатыу; *д. искусственое «изо рта в нос»* ауыҙҙан танауға» яһалма һулатыу; *д. искусственное «изо рта в рот»* «ауыҙҙан ауыҙға» яһалма һулатыу; *д. кожное* тән һулышы; *д. патологическое* патологик һулыш (тәбиғи булмаған, ниндәйҙер ауырыу күренеше, мәҫ., үпкә шешеүенән килгән һулыш); *д. поверхностное* өҫтән (тәрән булмаған) һулыш; *д. тканевое* туҡыма аша һулыш һ. б.)

**дыхательный** һулыш, тын алыу (мәҫ., һулыш мускулдары)

**дягиль лекарственный** айыу көпшәһе (нигеҙҙә, һыуыҡ тейгәндә, ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙары булғанда дауа биреүсе шифалы үлән)

# Е

**евгеника** евгеника (кешенең нәҫел сифаттарын яҡшыртыуға йүнәлтелгән ғилем, буржуаз илдәрҙә йыш ҡына реакцион маҡсатта файҙаланыла)

**евнух** евнух, алашар (гаремда хеҙмәт итеү өсөн бестерелгән кеше)

**евнухоид** евнухоид (евнухоидизмы булған кеше)

**евнухоидизм** евнухоидизм (енси биҙҙәр етерлек дәрәжәлә эшләмәүенән барлыҡҡа килгән үҙгәрештәр)

**евстахиит** евстахиит (ишетеү торбаһының шешеүе)

**единица** берәмек (ниндәй ҙә булһа активлыҡты үлсәү төрө, мәҫ., *е. антитоксина* антитоксин берәмеге)

**ёканье** *ҡара:* **икота**

**ёмкость** һыйым (мәҫ., *е. крови, кислородная* ҡандың кислород һыйымы)

**естественная надобность** тышҡа сығыу (оло йәки кесе ярау итеү)

**еюни́т** еюнит (ас эсәктең шешеүе)

# Ж

**жа́ба грудная** *ҡара:* **стенокардия**

**жа́жда** һыуһау (тойғоһо), сарсау

**жа́лобы больного** ауырыу кеше (сирленең) зары

**жар (тела)** тән эҫелеге (яныуы)

**жаропонижа́ющий** тән эҫелеген баҫыусы йәки баҫа торған (мәҫ., тән эҫелеген баҫа торған дарыу)

**жгут кровоостанавливающий** ҡан туҡтатҡыс жгут (бау)

**жгу́тик бактерии** бактерия ҡамсыһы (ҡайһы бер бактерияларҙа була торған үҫенте, хәрәкәттә ярҙам итә)

**желва́к** урт ите (төйөрө)

**железа́(ы)** биҙ, биҙҙәр (мәҫ., *ж. бартолиновы* бартолин биҙҙәре (ҡатын-ҡыҙҙарҙың енес биҙҙәренең береһе); *ж. внутренней секреции* эске секреция биҙҙәре (гипофиз, эпифиз һ. б.); *ж. грудная* имсәк биҙе; *ж. Куперова* Купер биҙе (ир енес биҙҙәренең береһе); *ж. поджелудочная* ашҡаҙан аҫты (йәки панкреас) биҙе (аш ҡайнатыу биҙе); *ж. предстательная* простата биҙе (ир енес биҙҙәренең береһе); *ж. щитовидная* ҡалҡан биҙ (муйында)

**желе́зница** *ҡара:* **демодикоз**

**желту́ха** һары, һарыға һабышыу (1. сирле күренеш: ҡанда үт пигменты — билирубиндың күбәйеүенән тире һәм тиресә ҡатламдарҙың һары төҫ алыуы; төрҙәре: *ж. беременных* йөклө ҡатындар һарылығы (ҡайһы ваҡыт буйға ҡалыу токсикозы булғанда күҙәтелә); *ж. врождённая негемолитическая* гемолитик булмаған, тыумыштан килгән һарылыҡ; *ж. гемолитическая* гемолитик һарылыҡ (ҡандың ҡыҙыл күҙәнәктәре нык тарҡалыуы һөҙөмтәһендә була); *ж. инфекционная (ҡара:* **гепатит вирусный**); *ж. медикаментозная* медикаментоз һарылыҡ (ҡайһы бер ҡабул ителгән дарыуҙың зарарлығынан килгән күренеш); *ж. обтурационная (механическая)* обтурацион (механик) һарылыҡ (үт юлдары тығылыу һәм эсәктәргә үт һәм үт пигменттарының үтә алмауынан килгән күренеш); *ж. печёночная* бауыр һарылығы (бауыр күҙәнәктәре зарарланыуынан килгән күренеш, мәҫ., ағыуланыуҙан, инфекциянан); *ж. физиологическая (новорожденных)* физиологик (яңы тыуған балалар) һарылығы (донъяға килгән балаларҙың беренсе йәшәү көндәрендәге ваҡытлы һарылығы, үҙенән-үҙе бөтә); 2. «Һары ауырыуы»; *ҡара:* **гепатит вирусный**

**желту́шность** һарылыҡ (мәҫ., күҙ ағы һарылығы)

**желу́док** ашҡаҙан

**желу́дочек(ки)** ҡарынса (мәҫ., *ж. сердца* йөрәк ҡарынсалары; *желудочки головного мозга* баш мейеһе ҡарынсалары, улар дүртәү)

**жёлчь** үт

**женьше́нь** женьшень (тамыры, нигеҙҙә, гипотония, неврастения,

арығанлыҡтан дауа бирә торған үлән)

**жже́ние** әсетеү, әрнетеү, әрнетеп ауыртыу

**жёсткость воды** һыу татырлығы (һыуҙың минерализацияһын билдәләүсе күрһәткес)

**живот** ҡорһаҡ, эс, ҡарын (*ж. вздутый* күпкән ҡорһаҡ; *ж. доскообразный* «таҡта» ҡорһаҡ (дөйөм перитонит булғанда ҡорһаҡтың алғы көбө мускулдарының тартышып ҡатыуы; *ҡара:* **перитонит**); *ж. «острый»* «киҫкен ҡорһаҡ» (кисектергеһеҙ хирургик ярҙам талап иткән ауырыу күренеше, мәҫ., ашҡаҙан тишелеүе, киҫкен аппендицит һ. б.); *ж. отвислый* һалынып төшкән ҡорһаҡ)

**живо́тное** хайуан, йәнлек (*ж. лабораторное (экспериментальное)* лаборатор (эксперименталь) хайуан, мәҫ., ҡуян, сысҡан һ. б.)

**живу́честь** йәшәүсәнлек, йәшәү һәләте

**жи́вчик** *(разг.) ҡара:* **сперматозоид**

**жи́дкость** шыйыҡса, мәҫ., 1. *(анат.) ж. внутриглазная* күҙ эсе шыйыҡсаһы; *ж. внутреннего уха (лабиринтная)* эске ҡолаҡ шыйыҡсаһы; *ж. спинномозговая (цереброспинальная)* арҡа мейеһе шыйыҡсаһы; *ж. тканевая* туҡыма шыйыҡсаһы; *ж. улитки* ҡусҡар шыйыҡсаһы һ. б.; 2. *(лек.) ж. противошоковая* шок дауалау шыйыҡсаһы һ. б.

**жизнеде́ятельность** йәшәү эшмәкәрлеге, тереклек итеү. мәҫ., *ж. клетки* күҙәнәктең тереклек итеүе; *ж. организма* организмдың йәшәү эшмәкәрлеге

**жи́зненная емкость легкого** үпкәнең йәшәү һыйымы (бик тәрән итеп эскә һулағандан һуң һулап сығарған һауа күләме)

**жизнеспосо́бность (пло́да)** йәшәү һәләтлеге

**жи́знь** тормош, йәшәү, ғүмер, тереклек, мәҫ., *ж. внутриутробная (эмбриональная)* ҡарындағы тереклек; *ж. половая (сексуальная)* енси тормош

**жи́ла** *ҡара:* **1. сухожи́лие; 2. сосуд кровеносный**

**жи́ление** көсәнеү (*ҡара:* **тенезмы)**

**жи́листый** 1. тарамышлы (һеңерле); 2. *ҡара.* **сухощавый**

**жировик жировичок** *ҡара:* **липома**

**жирорастворимый** майҙа иреүсән (мәҫ., майҙа иреүсән А витамины)

**жиры** майҙар

**жом** *(анат.) ҡара:* **сфинктер**

# З

**забере́менеть** буйға (ауырға) ҡалыу

**забинтова́ть** бинт һалыу, бинтлау

**заболева́емость** ауырыусанлыҡ (1. халыҡта йәки уның берәй төркөмөндә ауырыуҙарҙың таралғанлығы; 2. беренсе тапҡыр ауырыуға һабышҡан кешеләр һанын белдергән статистик күрһәткес, мәҫ., *з. с временной утратой трудоспособности* хеҙмәткә һәләтлекте ваҡытлыса юғалтыу менән үтеүсе ауырыусанлыҡ; *з. госпитализированная* госпита́ль ауырыусанлыҡ (ятып дауаланыу учреждениеларына эләккән ауырыусыларға ҡарата күрһәткес); *з. общая ҡара:* за-

болеваемость; *з. профессиональная* профессиональ ауырыусанлыҡ)

**заболева́ние** 1. *ҡара:* **болезнь;** 2. ауырыуға (сиргә) һабышыу (айырым кешенең сирләп китеү факты, мәҫ., *з. интеркуррентное* интеркуррент ауырыуға һабышыу (бер ауырыу өҫтөнә икенсеһенең башланыуы); *з. профессиональное* профессиональ ауырыуға һабышыу; *з. ятрогенное* ятроген ауырыуына һабышыу (нигеҙҙә, медиктар тарафынан һаҡһыҙыраҡ әйтелгән һүҙҙән кеше үҙендә булмаған ауырыу «табыуы» йәки үҙендә булған сирҙең үтә ҡаты ауырыу, тигән яңылыш фекерҙә булып яфаланыуы)

**заболе́ть** ауырып (сирләп) китеү

**забы́вчивость** онотоусанлыҡ, хәтер насарлығы

**завито́к ушной раковины** ҡолаҡ (уралсаһы) кәкерсәге (ҡолаҡ япрағында)

**за́ворот** эскә әйләнеү, уралыу, ишелеү (мәҫ., *з. века* күҙ ҡабағының эске әйләнеүе; *з. желудка* ашҡаҙандың уралыуы; *з. (перекручивание) кишок* эсәк ишелеүе һ. б.)

**за́втрак пробный** һынау ашы (ашҡаҙан һутын алыр алдынан бирелгән икмәк менән һыу)

**завши́веть** бетләү

**загазо́ванность** газланыу, газ менән зарарланыу

**зага́р** ҡояшта (ультрафиолет нурҙар тәьҫиренән) ҡарайыу

**заги́б (изгиб)** бөгөм (мәҫ., *за́гиб матки* аналыҡ бөгөмө (аналыҡтың алға йәки артҡа ныҡ бөгөлөүе)

**загипнотизи́ровать** гипнозлау

**загова́риваться (от болезни)** алъяу

**загово́р (болезни)** им-том (итеү)

**загора́ние** ҡояшта ҡыҙыныу

**загоре́лый** ҡояшта ҡарайған

**загрязнённость окружа́ющей среды́** тирә-яҡ тәбиғәттең бысранғанлығы (тирә-яҡ тәбиғәттең ниндәй ҙә булһа матдә менән бысраныуын характерлаған гигиеник күрһәтмә)

**заде́ржка** *(физиол.)* килмәү, туҡталыу (мәҫ., *з. мочи* кесе ярау килмәү; *з. месячных* күрем (ваҡытында) килмәү; *з. желчи* үт килмәүе һ. б.)

**за́дний прохо́д (заднепроходное отверстие)** арт юл

**задыха́ться** *ҡара:* **одышка**

**зае́да** ауыҙлыҡ (стрептококк, стафилококк йәки сүпрә бәшмәге йоғоуҙан килгән ауыҙ мөйөштәре сейләнеп боҙолоуы)

**заживле́ние** уңалыу, тоташыу (мәҫ., *з. вторичным натяжением* яраның ит үреп уңалыуы; *з. первичным натяжением* яраның тегелгән ерҙән уңалыуы)

**зажи́м** *(в медицине)* ҡыҫҡыс(инструмент)

**за́йка** тотлоғоп һөйләшкән кеше

**заика́ние** тотлоғоу, тотлоғоп һөйләшеү

**зака́ливание** сыныҡыу

**заклина́ние болезни** им-том итеү

**законода́тельство** *(здрав.)* закондар (йыйынтығы), законодательство (мәҫ., *з. о здравоохранении* һаулыҡ һаҡлау эштәре закондары; *з. санитарное* санитария закондары йыйынтығы)

**заку́порка** тығылыу (мәҫ., *з. желчного протока* үт юлы тығылыуы)

**зал секционный** секция залы (мәйеттәрҙе ярып тикшереү бинаһы)

**залóженность** тоноу (мәҫ., *з. носа* (или насморк) танау тоноу; *з. уха* ҡолаҡ тоноу)

**замерзáние (общее)** туңыу (туңып үлеү)

**«замирáние» сердца** йөрәк «өшөүе» (көслө кисерештән һуң йөрәк туҡтап ҡалған һымаҡ тойолоу)

**«заморáживание»** *(мед.)* **«туңдырыу»** (ҡара: **анестезия местная)**

**занавéска нёбная** *ҡара:* **язычок (небный)**

**занемóчь** *ҡара:* **заболеть**

**занóза** шырау, сүп (тәнгә ҡаҙалған сүп-фәлән)

**занóс плодный (дегенерация плода)** толҡат дегенерацияһы (аталанған түлдең дөрөҫ үҫеш алмайынса, йөҙөм һымаҡ ҡыуыҡланып үҙгәреүе һәм үлеүе)

**заны́ть, защеми́ть (о больном месте)** *ҡара:* **боль ноющая**

**западéние** батыу (мәҫ., *з. глазного яблока ҡара:* энофтальм; *з. спинки носа* танау батыуы (күпселектә сифилистан була), *з. языка* тел батыуы (һушһыҙ ҡалғанда телдең тамаҡҡа төшөүе — етди ауырыу күренеше)

**зáпах** еҫ (мәҫ., һаҫыҡ еҫ)

**запóй** *ҡара:* **пьянство запойное**

**запóр** эс ҡатыу (ҡаталаҡ, ҡаталау); төрҙәре: *з. алиментарный* алиментар ҡаталау (оҙаҡ ваҡыт буйы еңел үҙләштерелгән ашамлыҡ менән туҡланыуҙан була); *з. воспалительный* шешеүҙән ҡаталау (йыуан эсәк көбө шешкәндә була); *з. медикаментозный* медикаментоз ҡаталау (ҡабул ителгән ҡайһы бер дарыу тәьҫиренән була); *з. неврогенный* неврoген ҡаталау (эсәктәрҙең нервы регуляцияһы боҙолоуҙан була); *з. привычный* ғәҙәти ҡаталау (нигеҙҙә, күп ултырып эшләгән һәм туҡланыу режимын һаҡламаған кешеләрҙә күҙәтелә); *з. профессиональный* профессиональ ҡаталау (ҡурғаш, анилин буяуы, тәмәке һ. б. менән дауамлы ағыуланғанда була); *з. токсический* токсик ҡаталау (нимә менәндер дауамлы ағыуланыуҙан, мәҫ., ҡурғаштан) була); *з. хронический* хроник эс ҡатыу һ. б.)

**запя́стье** шаушаҡ, беләҙек (ҡул суғының беләк яғында ятҡан өлөшө)

**заражéние** 1. йоғоу, йоҡтороу; 2. ағыуланыу

**заражённый** 1. ауырыу йоҡтортҡан; 2. ағыуланған

**зарáза (заразное начало)** *ҡара:* **возбудитель болезни**

**зарази́тельность** йоғоусанлыҡ (шулай уҡ ҡара: **контагиозность)**

**зарáзный** йоғошло, йоғоусан

**заращéние** бөтәшеү (мәҫ., *з. зрачка* күҙ ҡараһы бөтәшеүе һ. б.)

**зарóдыш (человеческий)** толҡат (инә күҙәнәктең аталаныуҙан һуңғы 3 ай эсендәге үҫеш осоро, 3 ай үткәс ул ҡарындағы бала йәки ғоман тип атала)

**зарóдышевый** толҡат

**зарубцевáться** уңалыу, ит үреү (мәҫ., яраның)

**зарядка (гигиеническая)** гигиеник зарядка (күнегеүҙәр)

**застóй** тулышыу (мәҫ., *з. венозный* веноз ҡан тулышыуы; *з. желчи* үт тулышыу һ. б.)

**застóйный** тулышҡан

**«затемнéние» в легких** үпкәгә «тап төшөү» (рентген менән тик-

шергәндә үпкәлә ниндәйҙер шешеү үҙгәреше күренеүе)

**за́тхлый (застоялый)** тынсыу, тынсыған (мәç., тынсыу һауа)

**заты́лок** соңҡа (баштың артҡы өлөшө)

**заусе́ница** шайтан (йәки эт) тырнағы (тырнаҡ шәбе ситтәренең ярылыуы)

**зау́шница** *ҡара:* **паротит эпидемический**

**зача́тие** буйға ҡалыу (түлдең аталаныуы һәм толҡаттың барлыҡҡа килеүе)

**защи́та** һаҡланыу (мәç., *з. противохимическая* химикаттарҙан һаҡланыу һ. б.)

**защи́тный** һаҡлағыс, мәç., һаҡлағыс костюм

**зверобо́й** һары мәтрүшкә (нигеҙҙә, эс китеү, ауыҙ-тамаҡ боҙолоуҙан һ. б. ауырыуҙарҙан дауа үләне)

**звон в ушах** *ҡара:* **шум в ушах**

**звук (при обследовании больного)** өн (мәç., *з. перкуторный* перкутор өн (ағза-туҡыманы һуҡҡылап тикшергәндә ишетелгән өн); *з. перкуторный звучный* яңғыраулыҡ перкутор өн; *з. перкуторный тупой* тоноҡ перкутор өн)

**звукообразова́ние** өн-ауаздың барлыҡҡа килеүе

**здоро́вый** һау, сәләмәт (таҙа, мыҡты, иçән)

**здоро́вье** һаулыҡ, сәләмәтлек (иçәнлек, таҙалыҡ, иçәнлек-һаулыҡ)

**здра́вница** һаулыҡхана (шифахана йәки санаторий)

**здравоохране́ние** һаулыҡ һаҡлау, һаулыҡ һаҡлау эштәре (халыҡтың һаулығын һаҡлауға, ауырыуҙарҙы булдырмауға һәм дауалауға йүнәлтелгән дәүләт һәм йәмғиәт системаһы, мәç., *з. советское* совет һаулыҡ һаҡлау эштәре)

**здравпу́нкт** һаулыҡ һаҡлау пункты, здравпункт (медицина ярҙамын күрһәтеү пункты; ике төрө бар: *з. врачебный* врачлыҡ здравпункты; *з. фельдшерский* фельдшерлыҡ здравпункты)

**зев** *(анат.)* тишек, тарлыҡ тишеге (мәç., *з. глоточный* тамаҡ тарлығы тишеге; *з. шейки матки* аналыҡ муйынтығы тишеге)

**зево́та** иçнәү, иçнәтеү

**зе́ркало** *(мед.)* көҙгө (теге-был ағзаны йә уның эсен тикшереү өсөн инструмент, мәç., *з. глазное* (йәки офтальмоскоп) күҙ көҙгөһө; *з. гортанное* ҡурылдай көҙгөһө һ. б.)

**зёрна трахоматозные** трахома бөрсөктәре (күҙ тиресәһендә барлыҡҡа килгән трахома үҙгәрештәре)

**зерни́стость лейкоцита** лейкоцит бөртөксәләре (ҡандың аҡ күҙәнәге цитоплазмаһында булған есемдәр)

**злово́ние** һаçыҡ еç

**злока́чественный** яман, яман үтешле (мәç., яман шеш)

**зме́и** йыландар

**зна́харство** имселек, бағымсылыҡ (1. халыҡ тәжрибәһенән алынып примитив дауа ысулдары менән дауалау; 2. медицина уҡыуы һәм танытмаһы (дипломы) булмай тороп, законһыҙ рәүештә дауалау менән шөғөлләнеү

**зна́харь** имсе, им-томсо, бағымсы

**зоб** боғаҡ (ҡалҡан биҙенең ауырыу рәүештә ҙурайыуы; төрҙәре: *з. диффузный токсический* диффуз токсик боғаҡ (ҡалҡан биҙенең төрлө яҡҡа тигеҙ ҙурайыуы һәм тиреотоксикоз бил-

дәләре менән үтеүсе боғаҡ; *ҡара:* тиреотоксикоз); *з. заглоточный* тамаҡ арты боғағы; *з. злокачественный* яман үтелешле боғаҡ (диффуз токсик боғаҡтың ауыр формаһы) *з. кистозный* кистоз боғаҡ *(ҡара:* киста); *з. сосудистый* тамырлы боғаҡ (ҡалҡан биҙендә ҡан тамырҙарының үҫеш алған була); *з. токсический* токсик боғаҡ *(ҡара:* зоб диффузный токсический; *з. узловатый* төйөрлө боғаҡ; *з. фиброзный* фиброз боғаҡ (ҡалҡан биҙендә тоташтырғыс туҡыманың үҫешкән була); *з. эндемический* эндемик боғаҡ (йәшәгән ерҙең һыу-тупрағы йодҡа ярлы булыуынан килгән боғаҡ) һ. б.)

**золототы́сячник** һарыгүҙ (аппетит-ты аса торған дарыу үләне)

**золотуха** *ҡара:* **строфулюс**

**зо́на** зона (1. *анат.*, мәҫ., *з. зрительная* күреү зонаһы (баш мейеһенең соңҡа өлөшөндә); 2. *сан.-гиг.*, мәҫ., *з. здоровья* һаулыҡ (сәләмәтлек) зонаһы (ҡала, ҡала тирәһе йәки район тирәһендә халыҡтың ял итеү, физкультура менән шөғөлләнеү урыны); *з. санитарной охраны* санитария һаҡлау зонаһы (һыу сығанаҡтарын һаҡлау сараларының береһе) һ. б.)

**зонд** *(мед.)* зонд (ағзаны тикшереү йәки дауалау өсөн ҡулланылған көпшә рәүешендәге ҡыуыш йәки тишекле инструмент, мәҫ., *з. желудочный* ашҡаҙан зонды; *з. уретральный* уретраль зонд (һейеү каналы өсөн) һ. б.)

**зонди́рование** зондирлау, зонд индереү (мәҫ., *з. желудка* ашҡаҙанды зондирлау; *з. сердца* йөрәкте зондирлау һ. б.)

**зооно́з** (в эпидемиологии) зооноз (хайуандарҙағы инфекцион һәм инвазион ауырыуҙарҙың кешеләрҙә лә күҙәтелеүсән төрҙәренең дөйөм исеме; *ҡара:* **инфекция, инвазия)**

**зоопарази́т** зоопаразит (паразитик рәүештә йәшәй торған хайуандарҙың дөйөм исеме; *ҡара:* **паразит)**

**зоофоби́я** зоофобия (ниндәй ҙә булһа хайуанға ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**зрачо́к** күҙ ҡараһы

**зрачо́к иску́сственный** яһалма күҙ ҡараһы

**зре́лость** *(физич.)* балиғ булыу, буйға еткәнлек, өлгөрөү (мәҫ., *з. половая* енси етлегеү (өлгөргәнлек)

**зре́ние** күреү (төрҙәре: *з. бинокулярное* бинокуляр күреү (ике күҙ менән дә күреү); *з. глубинное (стереоскопическое)* күләмле (стереоскопик) күреү (ҡаралған әйбер-объектты күләмле күреү); *з. дневное* көндөҙгө күреү; *з. нормальное* нормаль күреү; *з. ночное (сумеречное)* төнгө күреү; *з. периферическое* периферик күреү (бер ҡарауҙа тирә-яҡты байҡау); *з. пространственное* араүыҡ (пространство) күреүе (күҙ алдында булған объекттарҙың формаһын, араһын билдәләү һәләте); *з. старческое (ҡара:* **дальнозоркость старческая)**; *з. цветовое* төҫтө айыра алыу һәләте; *з. центральное* үҙәк (үҙәктән) күреүе (күҙ эсе төбөндәге һары тап уртаһы менән күреү)

**зри́тельный** күреү (мәҫ., *з. нерв* күреү нервы)

**зря́чий** күҙле

**зуб** теш *(з. кариозный* кариоз теш

*(ҡара:* **кариес)**; *з. клык* ҡаҙыҡ теш; *з. коренной* сәйнәм (аҙау) теш; *з. молочный* һөт теше; *з. мудрости* аҡыл теше; *з. пломбированный* пломбалы теш; *з. постоянный* даими теш; *з. резец* ҡырҡҡыс теш; *з. штифтовой* штифт теш (алынмай торған теш протезы)

**зубно́й(ая)** теш, тештәр (мәҫ., *з. щетка* теш щеткаһы; *з. налёт* теш ҡуныгы; *з. протез* теш протезы; *з. ряд* тештәр рәте һ. б.)

**зубовраче́бный** теш дауалау (мәҫ., *з. кабинет* теш дауалау кабинеты йәки стоматология кабинеты; *з. кресло* теш дауалау креслоһы)

**зубоврачева́ние** теш дауалау эше

**зубочи́стка** һыҙлыҡ (теш таҙартҡыс)

**зу́бы Гетчинсо́на** Гетчинсон тештәре (тыумыштан килгән сифилис булғанда килгән теш үҙгәреше)

**зуд** ҡысытыу, ҡысыу, (ҡысытыу төрлө сәбәптән — берәй эске ауырыуҙан, аллергиянан, ҡысынма талпаны йоғоуҙан һ. б. була; төрҙәре: *з. аллергический* аллергик ҡысытыу *(ҡара:* **аллергия)**; *з. беременных* йөклө ҡатындар ҡысыныуы (буйға ҡалыу токсикозының бер билдәһе; *ҡара:* **токсикоз беременных)**; *з. генерализованный* генерализацияланған (тотош бөтә тән) ҡысытыу; *з. диабетический* диабет ҡысытыуы (шәкәр диабеты булғанда күҙәтелә); *з. заднего прохода* арт юл ҡысытыуы (сәбәп күпселектә геморрой, эс ҡаталауға һ. б.-ға ҡайтып ҡала); *з. старческий* ҡартлыҡ ҡысытыуы (нейродермиттың бер төрө; *ҡара:* **нейродермит)** һ. б.)

**зу́день чесоточный** *ҡара:* **клещ чесо́точный**

**зудоуспока́ивающий** ҡысытыуҙы баҫа торған

**зябкость** көжөрәйтеү, өшөтөү

# И

**ива́н-чай** ҡыртан үләне (халыҡ медицинаһында ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙарынан ҡулланылыусы үлән)

**игла́** *(мед.)* энә (тегеү һәм дарыуфәлән индереү өсөн ҡулланыла торған инструмент; төрҙәре: *и. инфузионная* инфузия энәһе (дауа шыйыҡсаһын күп күләмдә ҡаҙап ебәреү энәһе); *и. инъекционная* инъекция энәһе (ҡаҙап, аҙ күләмле дауа шыйыҡсаһы ебәреү өсөн энә); *и. хирургическая* хирургик энә (тегеү өсөн энә һ. б.)

**иглотерапи́я (иглоука́лывание)** иглотерапия (махсус энә менән тәнгә сәнсеү рәүешендә үткәрелгән дауалау, ҡытай халыҡ медицинаһы ысулы)

**иде́и** *(пат.)* идеялар, мәҫ., 1. *и. бредовые* илереү идеялары (реаль ысынбарлыҡҡа нигеҙләнмәгән фекерләү, гәҙәттә, психик һаулыҡтың ҡаҡшауынан була); 2. *и. навязчивые* бәйләнсек идея-

лар (фекерләүенең яңылыш булыуын кеше аңлай, әммә уларҙан ҡотола алмай)

**идиопати́ческий** идиопатия, идиопатик (билдәһеҙ сәбәптән башланған ауырыуҙы аңлатҡан термин, мәҫ., идиопатия ауырыуҙары)

**идиосинкрази́я** идиосинкразия (организмдың ҡайһы бер матдәләргә йәки тәьҫирҙәргә ҡарата юғары һиҙеүсәнлеге (мәҫ., ҡайын еләгенә, йодҡа һ. б.), мәҫ., дарыу идиосинкразияһы)

**идиоти́я** идиотия (олигофренияның иң ауыр формаһы, идиотияның төрҙәре күп; *ҡара:* **олигофрения)**

**иерсинио́з** иерсиниоз (эсәк иерсинияһы тигән бактерия йоғоуҙан килгән һәм, нигеҙҙә, эсәк-ҡарындың зарарланыуы менән характерлы инфекцион ауырыу)

**и́звесть хлорная** хлорлы эҙбиз (дезинфекция өсөн ҡулланыла торған антисептик матдә)

**изви́лина** йыйырса (мәҫ., *и. головного мозга* баш мейеһе йыйырсаһы)

**извлече́ние плода́** баланы сығарыу (баланы инструмент ярҙамында тыуҙырыу)

**извраще́ние половое** енси боҙоҡлоҡ (енси мөнәсәбәттә тәбиғи булмаған күренеш, мәҫ., гомосексуализм)

**изги́б** *(анат.)* бөгөлөш, бөгөм (мәҫ., *и. двенадцатиперстной кишки* бөйән эсәге бөгөлөшө)

**изжо́га** үҙәк көйөү (һарыу ҡайнау)

**излуче́ние** нурланыш (электромагнит тулҡындар йәки элементар киҫәксәләр таралышы; төрҙәре: *и. инфракрасное* инфраҡыҙыл нурланыш; *и. ионизирующее* ионизациялау нурланышы; *и. рентгеновское* рентген нурланышы; *и. ультрафиолетовое* ультрафиолет нурланышы һ. б.)

**измере́ние** үлсәү, билдәләү (мәҫ., ҡан баҫымын үлсәү)

**изнаси́лование** көсләү (енси көсләү)

**изнуре́ние** әлһерәү (бик ныҡ хәлдән тайыу)

**изоагглютини́ны** изоагглютининдар (ҡандың үҙ күҙәнәктәренә ҡаршы барлыҡҡа килгән антиесемдәр; *ҡара:* **агглютинины)**

**изоантиге́ны** изоантигендар (эритроцит, лейкоцит һ. б. ҡан күҙәнәктәре антигендарының дөйөм исеме; *ҡара:* **антигены)**

**изоантитела́** изоантиесемдәр (изоантигендарға ҡаршы йүнәлтелгән антиесемдәр; *ҡара:* **антитела)**

**изогемолизи́ны** изогемолизиндар (эритроциттарға ҡаршы йүнәлтелгән изоантиесемдәр)

**изоля́тор** изолятор (йоғошло ауырыулы йәки йоғошло ауырыуға шик тыуҙырған кешене ваҡытлыса урынлаштырыу өсөн айырым бүлмә)

**изоля́ция (в эпидемиологии)** изоляциялау (мәҫ., инфекцион ауырыу кешене изоляциялау, атап әйткәндә, сәләмәт кешеләрҙән айырыу)

**изостенури́я** изостенурия (сағыштырма ауырлығы бер кимәлдә булған һейҙектең бүленеүе — бөйөрҙәр етешмәүсәнлегенең (ҡыҫынҡылығының) бер күренеше)

**изото́п радиакти́вный** радиактив изотоп (ҡайһы бер изотоптар ауырыуҙы асыҡлау йәки дауалау өсөн ҡулланыла)

**изоферме́нты** изоферменттар (ферменттарҙың төҙөлөш йәһәтенән

бер аҙ айырылып торған төрҙәре)

**изохромосо́ма** изохромосома (хромосоманың төрө; *ҡара:* хромосома)

**изъязвле́ние** *ҡара:* **язва**

**ико́та** осҡолоҡ (осҡолоҡ тотоу, сиҡаҡлау)

**и́кры** *(анат.)* балтыр

**иле́йт** илеит (бығым эсәгенең шешеүе)

**илеотифли́т** илеотифлит (бығым һәм һуҡыр эсәктәрҙең бер юлы шешеүе)

**и́леус** илеус; *ҡара:* **непроходимость кишечника**

**иллю́зия** иллюзия (ҡайһы бер психик ауырыу йәки ағыуланыу һөҙөмтәһендә, ныҡ йонсоғанда ысынбарлыҡты боҙоп, яңылыш аңлау, мәҫ., эленеп торған пальто кеше булып күренә һ. б.)

**имбеци́л** имбецил (имбециллығы булған кеше)

**имбеци́льность** имбециллыҡ (олигофренияның бер төрө; *ҡара:* **олигофрения)**

**иммобилиза́ция** иммобилизация, иммобилизациялау (тәндең теге йәки был еренә тыныслыҡ, хәрәкәтһеҙлек булдырыу, мәҫ., һөйәк һынғанда, гипс иммобилизацияһы)

**иммобилизу́ющий** иммобилизациялаусы

**иммуниза́ция** иммунизация, иммунизациялау (1. иммунитет булдырыу өсөн кешегә вакцина, анатоксин йәки иммун сыворотка индереү; 2. иммун сыворотка алыу өсөн малға, кешегә ҡан индереү; төрҙәре: *и. активная* актив иммунизация (вакцина йәки анатоксин индереп иммунизациялау); *и. пассивная* пассив иммунизация (организмға антиесемдәр индереп иммунизациялау) һ. б.

**иммунизи́рованный** иммунизацияланған

**иммуните́т** иммунитет (1. йоғошло ауырыуҙарға һәм ҡайһы бер ағыуланыуҙарға ҡаршы тыумыштан булған йәки барлыҡҡа килгән организм бирешмәүсәнлеге; төрҙәре: *и. активный* актив иммунитет (вакцинация—прививка ярҙамында булдырыла); *и. антибактериальный* антибактериаль иммунитет; *и. антитоксический* антитоксик иммунитет; *и. наследственный (врожденный)* нәҫелдән (тыумыштан) килгән иммунитет; *и. пассивный* пассив иммунитет (иммуноглобулин йәки иммун сыворотка индереү арҡаһында йәки әсә ҡарынында күскән иммунитет); *и. поствакцинальный (прививочный)* поствакциналь иммунитет (вакцина индереп булдырылған иммунитет); *и. приобретенный* тормошта килгән иммунитет (йоғошло ауырыу кисергәндән һуң тыуған иммунитет); 2. *и. трансплантационный* трансплантация иммунитеты (трансплантация (күсереү) операцияһы ваҡытында күсерелгән ағза-туҡымаға ҡаршы иммунитет (күсерелеп килгән ағза-туҡыма организм тарафынан ҡабул ителмәй) һ. б.)

**иммý нный** иммун (мәҫ., иммун сыворотка)

**иммуногематоло́гия** иммуногематология (гематологияның ҡан эшләп сығара торған ағзаларҙың иммун үҙгәрештәргә бәйле ауырыуҙарын өйрәнә торған бүлеге)

**иммуногене́з** иммуногенез (орга-

низмда иммунитеттың барлыҡҡа килеү барышы)

**иммуногене́тика** иммуногенетика (генетикаға бәйле иммунитет мәсьәләләрен өйрәнеүсе фән)

**иммуноге́нность** иммуногенлыҡ (ниндәй ҙә булһа матдәнең специфик иммунитет тыуҙыра алыу һәләте)

**иммуногистохи́мия** иммуногистохимия (иммунология һәм гистохимияның туҡымаларҙа иммунитет барлыҡҡа килеүгә бәйле химик процестарҙы өйрәнеүсе тармағы)

**иммуноглобули́н** иммуноглобулин (антиесем сифатына эйә булған аҡһым)

**иммунодепресса́нт** иммунодепрессант (иммунологик процесы баҫырға йүнәлтелгән дарыу препараты)

**иммунодиагно́стика** иммунодиагностика (антиген һәм антиесемдәр араһында барған иммунологик реакцияларҙан файҙаланыуға нигеҙләнгән ауырыу күренештәрҙе билдәләү ысулы)

**иммуноло́гия** иммунология (кешеләге һәм хайуандарҙағы йоғошло ауырыуҙарға, ағыуланыуҙарға ҡаршы иммунитетты өйрәнә торған фән)

**иммуноморфоло́гия** иммуноморфология (иммунологияның иммунитеттың күҙәнәктәр кимәлендәге нигеҙен өйрәнеүсе тармағы)

**иммунопрофила́ктика** иммунопрофилактика (иммунитет булдырыу рәүешендә инфекцион ауырыуҙар менән көрәшеү)

**иммунотерапи́я** иммунотерапия (вакцина һәм иммун сывороткалар ярҙамында дауалау)

**иммунотрансфу́зия** иммунотрансфузия (иммунотерапияның бер төрө: сирлегә шул уҡ ауырыу кисергән кешенең ҡанын ебәреү)

**иммунохи́мия** иммунохимия (иммунологияның иммун бәйләнештәрҙең биохимик нигеҙен өйрәнеүсе бүлеге)

**импети́го** импетиго (тиренең өҫкө ҡатламында күҙәтелгән пиодермия, ваҡ эренле күперткеләр сығыуы һәм уларҙың һытылып ҡутырланыуы менән характерлы; төрҙәре: *и. стафилококковое* стафилококк импетигоһы; *и. стрептококковое* стрептококк импетигоһы һ. б.)

**имплантáт** *(в хирургии)* имплантат (ят организмдан йәки яһалма материалдан алынған трансплантат; *ҡара:* **трансплантат**)

**имплантáция** *(в хирургии)* имплантация (1. ниндәй ҙә булһа ят материалды кешегә индереү операцияһы; 2. күп төрлө пластик операцияларҙың дөйөм исеме)

**импоте́нт** импотент (импотенцияһы булған ир кеше)

**импоте́нция** импотенция (эрекцияның йомшарыуы һөҙөмтәһендә енси акттың нормаль үтәлешенең ҡаҡшауы)

**импульс** импульс (ниндәй ҙә булһа ярһыу, мәҫ., *и. нервный* нервы импульсы һ. б.)

**импульси́вные влечения** импульсив ынтылыштар (ҡайһы бер психик ауырыу күренеше: нимәгәлер көслө теләк булыуы, үтәй алмаҫлыҡ эшкә тотонорға тырышыу һ. б.)

**инактивáция** инактивация, инактивациялау (ниндәй ҙә булһа биологик актив матдә һәм микробтарҙың активлығын тулыһынса йәки яртылаш юҡ итеү)

**инвагинация кишок** эсәк инвагинацияһы (бер эсәктең икенсе эсәккә кереү һөҙөмтәһендә эсәктәрҙең киҫкен тығылыуы; *кара:* **непроходимость)**

**инвазивность** инвазивлыҡ (инфекцион ауырыу тыуҙырыусы заттарҙың (вирустар, бактериялар, бәшмәктәр, микроскопик ябай хайуандар) кеше, хайуан, үҫемлек тәненә үтергә һәм унда йәшәргә һәләтлеге)

**инвазия** инвазия (ябай микроскопик хайуандарҙың (мәҫ., амебаларҙың), паразит селәүҙәрҙең, бөжәктәрҙең кеше йәки хайуан организмына инеү һәм үрсеп йәшәүе)

**инвалид** инвалид (ауырыу йәки имгәнеү һөҙөмтәһендә, ғүмергә йәки оҙайлы ваҡытҡа эшкә һәләтлелеген юғалтҡан кеше)

**инвалидность** инвалидлыҡ (тотороҡло йәки оҙаҡҡа профессиональ эште башҡарыу һәләтлеген юғалтыу йәки уның сикләнеүе; инвалидлыҡтың 3 төркөмө бар: *и. I группы* I группа инвалидлыҡ; *и. II группы* II группа инвалидлыҡ; *и. III группы* III группа инвалидлыҡ)

**инволюция** инволюция (1. организмдың, ағза-туҡыманың кире үҫеше, элекке торошона ҡайтыуы, мәҫ., бәпесләгәндән һуң аналыҡтың элекке торошона ҡайтыуы; 2. ҡартайыу ваҡытында бөтә йәшәү процестарының һүнә барыуы)

**ингалятор** ингалятор (ингаляция үткәреү приборы)

**ингаляторий** ингаляторий (ингаляция үткәреү өсөн бина)

**ингаляция** ингаляция (быуға, газға, ваҡ-ваҡ тамсыларға әйләндерелгән шыйыҡсаны еҫкәтеү юлы менән дауалау, мәҫ., быу ингаляцияһы)

**ингибитор** ингибитор (организмда барған физиологик һәм биохимик процестарҙы түбәнәйтә, туҡтата торған химик матдә)

**ингредиент** *(в фармакологии)* ингредиент (дарыу составына ингән матдә)

**индекс** *(в медицине)* индекс (ниндәй ҙә булһа күрһәткес, мәҫ., *и. здоровья* һаулыҡ индексы (бер йәшкә тиклем балалар араһында бөтөнләй ауырымағандарын күрһәтеүсе һан); *и. пораженности* зарарланыу индексы (инфекцион сирлеләрҙең һанын билдәләүсе һан) һ. б.)

**индикан** индикан (ҡалдыҡ азоттың бер төрө, һейҙек менән сығарыла)

**индиканемия** индеканемия (индикандың ҡанда булыуы)

**индиканурия** индиканурия (һейҙек менән индикандың артыҡ бүленеүе)

**индуктотермия** индуктотермия (электр менән дауалауҙың бер төрө: ауыртҡан ергә юғары йышлыҡтағы һәм үҙгәреп тороусы магнит майҙансығы менән тәьҫир итеү)

**индурация** индурация (ауырыу сәбәпле ниндәй ҙә булһа ағзаның йәки уның өлөшөнөң тығыҙланып ҡатыуы, мәҫ., *и. полового члена* ир енес ағзаһы индурацияһы (дауамлы ауырыу) һ. б.)

**инертность** инертлыҡ (һүлпәнлек, дәртһеҙлек)

**инкапсуляция** инкапсуляция (шешкән ерҙең йәки организм

өсөн ят булған матдә-есемдең тоташтырғыс туҡыма тарафынан уратып алыныуы)

**инкре́т** инкрет (ағза йәки туҡыма тарафынан ҡанға йәки лимфаға бүленгән матдә, мәҫ., ҡалҡан биҙе гормоны һ. б.)

**инкрето́рный** инкретор (эске секреция биҙҙәренә ҡағылышлы)

**инкре́ция** инкреция *(ҡара:* **секреция внутренняя)**

**инкуба́тор медицинский** медицина инкубаторы (етлекмәй тыуған балаларҙы тәрбиәләү өсөн махсус камера: унда һауаның тейешле температураһы, составы, дымлылығы булдырыла)

**инкубацио́нный** инкубацион (мәҫ., инкубацион дәүер; *ҡара:* **пери́од инкубацио́нный)**

**инкура́бельность** инкурабеллек (ауырыу кешенең дауалана алмаҫлыҡ хәлдә булыуы)

**иннерва́ция** иннервация (ағза-туҡыманың нервы менән тәьмин ителеүе, мәҫ., *и. лица* бит иннервацияһы)

**инози́т** *ҡара:* **витамин $B_8$**

**инокуляция** (в паразитологи) инокуляция (бөжәк, талпан тешләгәндә кеше йәки хайуан ҡанына ауырыу тыуҙырғыс заттың ебәрелеүе)

**инопера́бельность** иноперабеллек (ауырыу кешенең хирургик операция ярҙамында дауалана алмаҫлыҡ хәлдә булыуы)

**инсектици́ды** инсектицидтар (зарарлы бөжәктәрҙе ҡырыу өсөн ҡулланылған ағыулы химикаттар)

**инсектофунгици́ды** инсектофунгицидтар (зарарлы бөжәк һәм бәшмәктәрҙе ҡырыу өсөн ҡулланылған ағыулы химикаттар)

**инсоля́ция** инсоляция (ерҙең ҡояш тарафынан нурланыуы)

**инстилля́ция** инстилляция (шыйыҡ дарыуҙы һейеү каналына, күҙгә тамсылап ебәреү)

**инсти́нкт** инстинкт (тыумыштан булған тәбиғи һиҙемләү тойғоһо, мәҫ., *и. самозащиты* үҙ-үҙеңде һаҡлау инстинкты һ. б.)

**институ́т** институт (1. юғары уҡыу йорто; *и. медицинский* медицина институты; *и. санитарно-гигиенический* санитария-гигиена институты һ. б.; 2. ғилми-тикшеренеү учреждениеһы; *и. гигиены труда и профессиональных болезней* хеҙмәт гигиенаһы һәм профессиональ ауырыуҙар институты; *и. нейрохирургический* нейрохирургия институты һ. б.)

**инструме́нт медици́нский** медицина инструменты

**инструмента́рий медици́нский** медицина инструментарийы (бер төркөм медицина инструменты, мәҫ., хирургик инструментарий)

**инсули́н** инсулин (ашҡаҙан аҫты биҙенең Лангерганс утрауҙары тигән өлөшөндә барлыҡҡа килгән гормон, малдан алынғаны дауалау өсөн ҡулланыла)

**инсулинотерапи́я** инсулинотерапия (инсулин менән дауалау)

**инсу́льт (мозговой)** инсульт (мейелә ге ҡан әйләнешенең ҡапыл боҙолоуынан (ҡан һауыу һ. б. сәбәптән) баш мейеһе йәки уның берәй өлөшө эшсәнлегенең киҫкен насарайыуы)

**инсуффля́ция** инсуффляция (порошок формаһындағы дарыуҙы ҡолаҡҡа, өҫкө тын юлдарына, яраға һ. б. өрҙөртөп индереү)

**интелле́кт** интеллект (кешенең уйлау, фекер йөрөтөү һәләте)

**интеркурре́нтный** интеркуррент (осраҡлы күренеш, мәҫ., берәй башҡа ауырыу ҡушылыуы һөҙөмтәһендә төп сирҙең ҡатмарлашыуы, мәҫ., интеркуррент инфекция)

**интéрн** интерн (интернатура үтеүсе йәш врач)

**интернату́ра** интернатура (медицина институтын тамамлаған врачтарҙың бер йыллыҡ тәүге специализацияһы)

**интероцеце́птор** интерорецептор (эске ағзаларҙа булған рецептор)

**интерсексуа́льность (интерсексуализм)** интерсексуаллек (*ҡара:* **гермафродитизм)**

**интерферо́н** интерферон (организмда һәм күҙәнәктәр культураһында барлыҡҡа килгән аҡһым; дауалау өсөн ҡулланыла)

**и́нтима** интима (капиллярҙан тыш бөтә ҡан тамырҙары көбөнөң эске ҡатламы)

**интоксика́ция** интоксикация (тыштан килгән йәки организмда барлыҡҡа килгән ағыулы матдәләр менән ағыуланыу, мәҫ., *и. алиментарная* алиментар интоксикация (аҙыҡ менән ағыуланыу); *и. бактериальная* бактериал интоксикация (бактериялар токсины (ағыуы) менән ағыуланыу); *и. медикаментозная* медикаментоз интоксикация (дарыу менән ағыуланыу); *и. промышленная* промышленность интоксикацияһы (производство шарттарында бүленгән ағыулы матдәләр менән ағыуланыу); *и. экзогенная* экзоген интоксикацияһы (тирә-яҡ мөхиттәге ағыулы матдәләр менән ағыуланыу); *и. эндогенная* эндоген интоксикация (организмда барлыҡҡа килгән ағыуҙар менән ағыуланыу) һ. б.)

**интуба́ция** интубация (ҡурылдайҙың киҫкен стенозы булғанда һәм шулай уҡ дарыу кертеү, интубацион наркоз үткәреү өсөн ҡурылдайға махсус көпшә — интубатор индереү; *ҡара;* **стеноз)**

**интуи́ция** интуиция (белем һәм тәжрибә нигеҙендә алдан һиҙеүеү)

**инфантили́зм** инфантилизм (кешенең физик һәм психик үҫештә артта ҡалыуы һәм бер килке балалыҡ сифаттарының һаҡланыуы; төрҙәре: *и. врожденный* тыумыштан килгән инфантилизм; *и. половой* енси инфантилизм; *и. психический* психик инфантилизм һ. б.)

**инфа́ркт** инфаркт (ҡан йөрөшө боҙолоуҙан ағза-туҡымала үле өлөштөң барлыҡҡа килеүе, мәҫ., *и. миокарда* миокард (йөрәктең мускул ҡатламы) инфаркты; *и. миокарда мелкоочаговый* миокардтың ваҡ сығанаҡлы инфаркты; *и. легких* үпкә инфаркты һ. б.)

**инфекциони́ст** инфекционист (йоғошло ауырыуҙар белгесе, врач)

**инфекцио́нный** инфекцион, инфекция (мәҫ., инфекцион процесс)

**инфе́кция** инфекция (1. микроорганизмдың макроорганизмға, мәҫ., кешегә инеүе, ишәйеүе һәм ауырыу тыуҙырыуы йәки ауырыу тыуҙырғыс затты йөрөтөүсәнлеге барлыҡҡа килеүе; төрҙәре: *и. абортивная* абортив инфекция (ғәҙәттән тыш тиҙ тамамланыусы инфекцион ауырыу); *и. генерализованная* генерализациялы инфекция (ауырыу тыуҙырыусы заттың бөтә организмға таралыуы); *и. дремлющая (криптогенная)* криптоген

инфекция (ауырыу тыуҙырғыс-тар тәндең берәй ерендә, мәҫ., миндалиналарҙа һаҡлана, ә һаулыҡ ҡаҡшағанда улар көсәйә һәм кешене сиргә һабыштыра); *и. интеркуррентная* интеркуррент инфекция (бер инфекцион ауырыуға икенсеһе өҫтәлеү); *и. латентная* латент инфекция (ауырыу билдәләре булмай тороп организмда ауырыу тыуҙырғыс заттың оҙаҡ һаҡланыуы менән характерлы инфекция); *и. очаговая (фокальная)* сикле (фокаль) инфекция (инфекцион процесс айырым ағза йәки туҡымала ғына бара); *и. смешанная* ҡатнаш инфекция (бер юлы бер нисә инфекцион ауырыу йоға); *и. стёртая* һиҙелер-һиҙелмәҫ инфекция; *и. экзогенная* экзоген инфекция (тирә-яҡ мөхиттән йоҡҡан инфекция); *и. эндогенная* эндоген инфекция *(ҡара:* **аутоинфекция**); 2. йоғоу юлдары йәки үтелеше менән оҡшаш бер төркөм инфекцион ауырыуҙар һәм бактериялар, мәҫ., *и. анаэробная* анаэроб инфекция (анаэроб бактериялар йоғоуҙан килгән инфекцион ауырыуҙар: газлы гангрена һ. б.); *и. бактериальная* бактериаль инфекция (патоген бактериялар тыуҙырған инфекцион ауырыуҙар: дизентерия, дифтерия һ. б.); *и. вирусная* вирус инфекцияһы (вирустар йоғоуҙан килгән инфекцион ауырыуҙар: грипп, полиомиелит һ. б.); *и. внутрибольничная (внутригоспитальная)* больница инфекцияһы (больница шарттарында таралып киткән инфекцион ауырыу); *и. герпетическая* герпес инфекцияһы (вирус инфекцияһының төрө, мәҫ., *г. простой* ябай герпес; *г. опоясывающий* уратма герпес); *и. гнилостная* сереткес инфекция (бер төркөм шартлы патоген бактериялар менән ҡатмарлашҡан ауырыу); *и. гнойная* эренле инфекция (стафилококк, стрептококк һымаҡ эренләткес бактериялар тыуҙырған ауырыу); *и. детская* балалар инфекцияһы (нигеҙҙә, балалар араһында күҙәтелеүсе инфекциялар: скарлатина, һыулы сәсәк һ. б.); *и. дыхательных путей* тын юлдары инфекцияһы (мәҫ., ангина, грипп һ. б.); *и. карантинная* карантин инфекция (халыҡ-ара медицина-санитария ҡағиҙәләре ҡарамағында булған етди инфекцион ауырыуҙар: тагун, ваба, натураль сәсәк, һары биҙгәк); *и. кишечная* эсәк инфекцияһы (ауыҙ аша йоғоусы һәм, нигеҙҙә, эсәктәрҙе зарарлаусы инфекцион ауырыуҙар: ҡорһаҡ тифы, дизентерия, полиомиелит, ваба һ. б.); *и. кровяная* ҡан инфекцияһы (берәй бөжәк: серекәй, талпан һ. б. тешләүе һәм ҡан, лимфала ишәйеп йәшәүсе заттар тыуҙырған инфекцион ауырыуҙар: геморрагик биҙгәк, сабыртмалы тиф, талпан энцефалиты һ. б.); *и. менингококковая* менингококк инфекцияһы (һауа һәм сәсрәгән тамсы аша менингококк бактерияһы йоғоуҙан килгән киҫкен инфекцион ауырыу (күп осраҡта мейе шекәрәләре зарарлана); *и. особо опасная* үтә хәүефле инфекция (бик тиҙ таралыусан һәм үтә ауыр үтеүсән инфекцион ауырыуҙар: натураль сәсәк, ваба, тагун); *и. периодонтальная* периодонталь инфекция (теш тамыры ше-

шеүе һөҙөмтәһендә килгән эренле инфекция); *и. послеродовая* бәпесләгәндән һуңғы инфекция (бала табыу мәлендә бәпесләү юлдары йәрәхәте аша микробтар йоғоуҙан килгән ҡатмарлашыу); *и. хирургическая* хирургик инфекция (хирургик ярҙам талап иткән һәм микробтар тыуҙырған ауырыу, мәҫ., һөйәк-быуын туберкулезы, һын ҡатыу ауырыуы һ. б.)

**инфильтра́т** инфильтрат (ауырыуға һабышҡан туҡыманың күләм йәһәтенән артыуы һәм тығыҙланып шешеүе)

**инфильтра́ция** инфильтрация (шешеүҙән килгән матдәләрҙең туҡымаға һеңеүе)

**инфици́рование** инфицирлау (ауырыу тыуҙырғыс заттың ниндәй ҙә булһа организмға йоғоуы йәки тирә-яҡ объектҡа әләгеүе)

**инфици́рованность** инфицирланғанлыҡ *(ҡара:* **инфицирование)**

**инфици́рованный** инфицирланған *(ҡара:* **инфицирование)**

**инфразву́к** инфра тауыш (түбән йышлыҡтағы тауыш тирбәлеүҙәре, уларҙың дауамлы тәьҫире кеше һаулығы өсөн зарарлы)

**инфу́зия** инфузия *(ҡара:* **вливание)**

**инфузо́рий** инфузорийҙар (ябай микроскопик хайуандарҙың бер төрө, мәҫ., эсәк балантизийы, ул кеше өсөн зарарлы)

**инци́зия** инцизия (ярыу, ҡырҡыу)

**инъе́ктор безыгольный** энәһеҙ инъектор (дарыуҙы энәһеҙ көслө һиптереү рәүешендә кеше тәненә ебәреү аппараты)

**инъе́кция** инъекция (1. шыйыҡса рәүешендәге дарыуҙы энә ярҙамында кеше тәненә индереү; төрҙәре: артерия (вена, тире, һөйәк, мускул, йөрәк аша инъекция; 2. ҡан тулышыу, мәҫ., күҙ тамырҙары инъекцияһы)

**ионогальваниза́ция (ионофорез)** *ҡара:* **электрофорез лекарственный**

**ипохо́ндрия** *ҡара:* **депрессия**

**иридоцикли́т** иридоциклит (күҙҙең төҫлө ҡатламы менән цилиар тәндең бер юлы шешеүе; уның төрҙәре: мәҫ., сифилис иридоциклиты, туберкулез иридоциклиты һ. б.)

**ири́т** ирит (күҙҙең төҫлө ҡатламының шешеүе)

**иррадиа́ция болевы́х ощуще́ний** ауыртыу иррадиацияһы (ауыртыуҙың тирә-яҡҡа таралыуы)

**искривле́ние** кәкрәйеү (мәҫ., танау аралығының кәкрәйеүе, умыртҡа бағанаһының кәкрәйеүе һ. б.)

**испражне́ние** оло ярау итеү

**испражне́ния** тиҙәк (йәки кал)

**иссече́ние** ярып (киҫеп) алыу (хирургик операция, мәҫ., шеште ярып алыу)

**иссле́дование** *(мед.-гиг.)* тикшереү, ҡарау (мәҫ., *и. бактериологическое* бактериологик тикшереү; *и. диагностическое* диагностик тикшереү; *и. рентгенологическое* рентгенологик тикшереү; *и. судебно-медицинское* суд-медицина тикшереүе һ. б.)

**истери́я** истерия (невроз ауырыуының бер төрө; *ҡара:* **невроз)**

**истероневрастени́я** истероневрастения (кешелә бер юлы истерия һәм неврастения билдәләренең булыуы)

**истероэпиле́псия** истероэпилепсия (истерияның эпилепсияға оҡшап үтеүе, *ҡара:* **эпилепсия)**

**исто́рия** тарих (1. *и. болезни* ауы-

рыу тарихы (дауалау учреждениеһында ятҡан кешегә алып барылған төп медицина документы); 2. *и. развития ребёнка* бала үҫеше тарихы (балалар поликлиникаһында күҙәтелгән балаға алып барылған төп медицина документы; 3. *и. родов* бәпесләү тарихы (бәпесләү йортонда әсә һаулығы тураһында алып барылған төп медицина документы; 4. *и. медицины* медицина тарихы (медицина үҫеш юлы тураһындағы фән) һ. б.)

**исто́чник** сығанаҡ (мәҫ., *и. водоснабжения* һыу сығанағы (йылға, күл һ. б.); *и. инвазии* инвазия сығанағы (берәй паразит зат менән зарарланған кеше йәки хайуан, уларҙан ауырыу башҡаларға тарала); *и. инфекции* инфекция сығанағы (патоген микроорганизмдары менән зарарланған кеше йәки хайуан, уларҙан инфекция башҡаларға тарала); *и. ионизирующего излучения* ионизациялау нурланышы сығанағы һ. б.)

**истребле́ние** *(санит.)* ҡырыу (мәҫ., сысҡандарҙы ҡырыу)

**исхуда́ние** ябығыу

**исцеле́ние** һауығыу

**ихоро́зный** ихороз (сереүгә бәйле, мәҫ., ихороз еҫ)

**ихтио́з** ихтиоз (тәндең ҡоролого, балыҡ тәңкәһенә оҡшаш ҡауаҡҡабырсаҡ ҡапланыуы менән билдәләнгән тыумыштан килгән йоғошһоҙ тире ауырыуы)

**ихтиотоксико́з** ихтиотоксикоз (ағыулы балыҡ ашап ағыуланыу)

**ишеми́я** ишемия (теге йәки был ағза-туҡымаға ҡандың етерлек күләмдә килмәүе, мәҫ., йөрәк ишемияһы)

**ишиалги́я** ишиалгия (ултырыш нервыһы буйлап ауыртыу барлыҡҡа килеү)

**и́шиас** ишиас *(ҡара:* **радикулит пояснично-крестцовый)**

**ишури́я** ишурия (бәүел итә алмау һөҙөмтәһендә һейҙектең һейҙек ҡыуығында артыҡ тупланыуы)

# Й

**йо́га** йога (Боронғо Индияла дини һәм философик тәғлимәттәрҙең бер төркөм элементтары; дауалау һәм профилактик маҡсатта ҡулланылған йога күнекмәләре физиологик яҡтан нигеҙләнмәгән, күп осраҡта һаулыҡ өсөн зарарлы)

**йод** йод (ҡалҡан биҙе эшләүе өсөн мөһим булған химик элемент, дауалау өсөн дә киң ҡулланыла)

**йододе́рма** йододерма (йодлы дарыу ҡабул итеү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән һытҡы рәүешендәге тире ауырыуы)

**йодопси́н** йодопсин (күҙ колбочкаларында барлыҡҡа килеүсе һәм күреүҙе тәшкил итеүсе органик матдә)

# К

**кабине́т** *(мед. гиг.)* кабинет (мәҫ., *к. врачебный* врач кабинеты; *к. инфекционных заболеваний* инфекцион ауырыуҙар кабинеты; *к. педиатрический* педиатрия кабинеты; *к. смотровой* смотр (профилактик ҡарау) кабинеты; *к. физиотерапевтический* физиотерапия кабинеты; *к. функциональной диагностики* функциональ-диагностика кабинеты һ. б.)

**каве́рна** каверна (ауырыу һөҙөмтәһендә ағза-туҡыма өлөшсәһенең тарҡалыуынан килгән ҡыуышлыҡ, мәҫ., үпкә кавернаһы)

**каверни́т** кавернит (ир енес ағзаһындағы күпшәкле тәндең шешеүе, мәҫ., гонорея каверниты)

**каверно́зный** каверноз (күпшәкле, мәҫ., каверноз тән)

**кавернопла́стика** кавернопластика (ир енес ағзаһының күпшәкле тәненә яһалған пластик операция)

**кадавери́н** кадаверин (мәйет боҙолоп тарҡалғанда барлыҡҡа килгән ағыу)

**кады́к (ада́мово я́блоко)** күмәгәй

**ка́дры медици́нские** медицина кадрҙары

**казео́зный** казеоз (эремсеккә оҡшап тарҡалыуҙы аңлатыусы термин, мәҫ., ауырыу һөҙөмтәһендә үпкәнең казеоз тарҡалыуы)

**казуи́стика** *(в мед.)* казуистика (гәҙиттә, һирәк йәки үҙенсәлекле үткән ауырыу хаҡында хәбәр итеү йәки ташҡа баҫып сығарыу)

**кайма́ губы** ирен йөҙө

**кал** кал (йыуан эсәктә булған бушандыҡ, оло ярау ваҡытында сыҡҡан тиҙәк)

**кала́-аза́р** кала-азар *(ҡара:* **лейшманиоз висцеральный)**

**кале́ка** ғәрип, зәғиф

**календа́рь** календарь (мәҫ., *к. акушерский (беременных)* акушерлыҡ (йәки йөклө ҡатындар) календары; *к. прививок* прививка (вакцинация) үткәреү календары һ. б.)

**ка́лий** калий (организмда барған биохимик процестарҙа актив ҡатнашыусы элемент)

**кали́на** балан (ҡабығы эске ҡан ағыуҙы туҡтатҡан, еләге ҡан баҫымын түбәнәйткән дауа биреүсе ағас)

**калоприёмник** кал йыйғыс һауыт (1. йөрөй алмаған сирлеләрҙең тиҙәген йыйыу һауыты; 2. кал бөтәү яраһынан (свищынан) тиҙәкте йыйыу өсөн пластик ҡап)

**калори́йность (пищи)** калорийлыҡ (ашамлыҡтың энергетик ҡиммәтлеге)

**калори́йный** калорийлы (туҡлыҡлы)

**калориметри́я** калориметрия (организмда барған матдәләрҙең энергетик алмашыныуын билдәләү)

**калькулёз** калькулез (бөйөр ҡыуышлығында, һейҙек, үт ҡыуығы кеүек ағзаларҙа таш барлыҡҡа килеү)

**кальций** кальций (һөйәк туҡымаһының төп компоненты)

**кальцино́з** кальциноз (кальций тоҙҙарының организм туҡымаларында тупланыуы)

**кальциферо́л** *ҡара:* **витамин Д**

**ка́мень** таш (ҡыуышлы ағзала йәки туҡымала минераль тоҙ ултырыуҙан барлыҡҡа килгән есем, мәҫ., *к. желчного пузыря* үт ҡыуығы ташы; *к. зубной* теш ташы; *к. каловый* кал (тиҙәк) ташы; *к. мочевого пузыря* һейҙек ҡыуығы ташы һ. б.)

**ка́мера** камера 1. ҡайһы бер анатомик ҡыуышлыҡ, мәҫ., *к. сердца* йөрәк камералары (йәки ҡыуышлыҡтары); *к. глаза* күҙ камералары һ. б.; 2. ҡайһы бер ҡорамал, мәҫ., *к. дезинфекционная* дезинфекция камераһы)

**камнедробле́ние** таш ватыу (махсус прибор ярҙамында һейҙек ҡыуығындағы ташты ватыу)

**камнесече́ние** таш алыу операцияһы (һейҙек ҡыуығындағы ташты операция юлы менән алыу)

**кана́л** *(анат.)* канал (тамыр, нервы һ. б. үтеү өсөн ер, мәҫ., *к. зрительный* күреү нервыһы каналы; *к. мочеиспускательный* һейеү каналы; *к. пищеварительный* аш һеңдереү (ҡайнатыу) каналы (ауыҙҙан алып арт юлға тиклем); *к. спинномозговой* арҡа мейеһе каналы; *к. шейки матки* аналыҡ муйынтығы каналы һ. б.)

**кана́лец** *(анат.)* каналсыҡ (мәҫ., *к. зубной* теш каналсығы; *к. слезный* күҙ йәше каналсығы һ. б.)

**канализа́ция** канализация (ташландыҡ һыуҙарҙы йыйыу һәм халыҡ йәшәгән ерҙән ситкә оҙатыу өсөн санитария һәм техник ҡорамалдар комплексы)

**кандида́т** *(фән)* кандидат (мәҫ., медицина фәндәре кандидаты)

**кана́тик** *(анат.)* канатик, бау (мәҫ., *к. семенной* орлоҡ канатиғы)

**канди́да** кандида (бер төркөм сүпрә бәшмәктәренә оҡшаш микроскопик бәшмәктәр, уларҙың ҡайһылары ауырыу тыуҙыра ала)

**кандидо́з** кандидоз (кандида бәшмәге йоғоуҙан килгән ауырыу: эске ағзаларҙы, тире һәм тиресә ҡатламдарҙы зарарлай ала; төрҙәре; *к. висцеральный* висцераль кандидоз (эске ағзалар кандидозы); *к. кожи* тире кандидозы һ. б.)

**канцерогене́з** канцерогенез (яман шештәрҙең барлыҡҡа килеүе һәм үҫеше)

**канцероге́ны** канцерогендар (рак һәм башҡа яман шештәр башланыуға килтереүсе химик матдәләр)

**каню́ля** канюля (диагностик йәки дауалау маҡсатында көпшәле йәки ҡыуышлы ағзаға индереү өсөн ҡыҫҡа көпшә)

**каолино́з** каолиноз (каолин туҙанын систематик рәүештә һулауҙан килгән пневмокониоз ауырыуы; *ҡара:* **пневмокониоз)**

**ка́пельница** тамыҙғыс (сирлегә дарыуҙы тамсылап ебәреү өсөн ҡулайлама йәки һауыт)

**капилля́р** капилляр (иң нәҙек тамыр, мәҫ., ҡан капиллярлы, лимфа капиллярлы, үт капиллярлы)

**капилляроскопи́я** капилляроскопия (капилляроскоп приборы ярҙамында капиллярҙарҙы ҡарап тикшереү)

**капилляротоксико́з** капилляротоксикоз *(ҡара:* **васкулит геморрагический)**

**ка́пли** *(лекарст.)* тамсылы дарыу, мәҫ., тамсылы ҡолаҡ дарыуы, тамсылы күҙ дарыуы һ. б.)

**ка́пля висячая** элмәле тамсы (микроскоп аша микробтарҙы тере

көйөнсә тикшереү өсөн ҡулланыла торған ысул)

**ка́псула** капсула (1. *фарм.* үтә әсе һәм көслө дарыуҙы һалыр өсөн крахмал йәки желатиндан әҙерләнгән кескәй генә ҡап, ул дарыуы менән йотола; 2. быуын, ҡайһы бер эске ағзаны уратып алыусы бөркәнсек, мәҫ., *к. печени* бауыр капсулаһы (шулай уҡ *ҡара:* **сумка**); 3. организмға эләккән ят есемде. мәҫ., ярсыҡ, пуляны уратып алыусы бөркәнсек; 4. ыңғай булмаған шарттарға эләккән ҡайһы бер микроорганизмдарҙың үҙен һаҡлау формаһы: *к. микробная* микроб капсулаһы)

**капу́ста морская** диңгеҙ кәбеҫтәһе (нигеҙҙә, эс ҡатыуҙан ҡулланылыусы диңгеҙ үләне)

**караку́рт** ҡарағорт (ағыулы бөжәк, Урта Азияла осрай)

**каранда́ш лека́рственный** дарыу ҡәләме (дарыу формаһы, мәҫ., ляпис ҡәләме)

**каранти́н** карантин (1. йоғошло ауырыу таралмаһын өсөн күрелгән санитария саралары; 2. йоғошло ауырыулы кешеләр менән аралашҡандарҙы һау-сәләмәт кешеләрҙән айырыу; 3. йоғошло ауырыу таралған ерҙә йәшәгән кешеләрҙе, транспортты, ундағы тауарҙарҙы тикшереү урыны)

**карбгемоглоби́н** карбгемоглобин (ҡанда гемоглобиндың углекислый газ менән аралашыуынан барлыҡҡа килгән берләшмә)

**карбоксигемоглоби́н** карбоксигемоглобин (углерод окисының гемоглобин менән аралашыуынан барлыҡҡа килгән матдә; ул кешенең ағыуланыуына, еҫ тейеүгә килтерә)

**карбу́нкул** карбункул, ҡуш сиҡан (1. бер нисә үҙәкле сиҡан шеше; 2. *к. чумной* тагун карбункулы; *ҡара:* **чума**)

**кардиалги́я** кардиалгия (йөрәк тәңгәлендәге ауыртыу)

**кардиа́льный** кардиаль (йөрәккә һәм ашҡаҙандың өҫкө тишегенә ҡағылышлы)

**кардиоваскуля́рный** кардиоваскуляр (бер юлы йөрәк һәм тамырҙарға ҡағылышлы)

**кардиогра́мма** кардиограмма (кардиография ярҙамында алынған йөрәк эшсәнлегенең график һүрәте)

**кардиогра́фия** кардиография (1. йөрәк эшсәнлеген график һүрәт рәүешендә өйрәнеү; 2. йөрәк эшсәнлегенән килгән күкрәк һелкенеүенең график һүрәте)

**кардиоиндуктография** кардиоиндуктография (йөрәк эшсәнлеген индукцион ток ярҙамында тикшереү ысулы)

**кардиокинематогра́фия** кардиокинематография (йөрәктең рентген һүрәтен киноға төшөрөү)

**кардиоклиматопатоло́гия** кардиоклиматопатология (медицинаның йөрәк ауырыуҙарының башланыуы һәм үтеүенең климат һәм метереологик факторҙарға бәйле булыуына ҡағылышлы мәсьәләләрҙе өйрәнеүсе тармағы)

**кардио́лог** кардиолог (йөрәк ауырыуҙары белгесе, врач)

**кардиоло́гия** кардиология (медицинаның йөрәк, ҡан тамырҙары ауырыуҙарын булдырмау һәм дарыулау ысулдарын өйрәнеүсе тармағы)

**кардиомегали́я** кардиомегалия (йөрәктең күләм яғынан ҙурайыуы)

**кардиомиопати́я** кардиомиопатия (йөрәк мускулдарының (миокардтың) зарарланыуы менән үтеүсе һәм әле тулыһынса асыҡланмаған бер төркөм ауырыуҙар исеме)

**кардиомонито́р** кардиомонитор (йөрәк эшсәнлеген күҙәтеүсе бер төркөм прибор һәм аппараттар)

**кардионевро́з** кардионевроз (йөрәктең йыш тибеүе, ауыртыу менән үтеүсе йөрәк неврозы; *ҡара:* **невроз)**

**кардиопла́стика** кардиопластика (ашҡаҙан һәм ҡыҙыл үңәс тоташҡан ергә яһалған бер төркөм пластик операцияларҙың дөйөм исеме)

**кардиоплеги́я** кардиоплегия (йөрәккә операция яһағанда ваҡытлыса йөрәктең эшен туҡтатыу йәки киҫкен һүлпәнәйтеү)

**кардиосклеро́з** кардиосклероз (йөрәк мускулдарында тоташтырғыс туҡыманың артыҡ үҫеш алыуы)

**кардиоспа́зм** кардиоспазм (ҡыҙыл үңәстең аҫҡы өлөшөнөң спазмаһы; *ҡара:* **спазм)**

**кардиостимуля́ция** кардиостимуляция (йөрәктең эшен стимуллаштырыу)

**кардиофоби́я** кардиофобия (йөрәк ауырыуҙарына ҡарата булған фобия; *ҡара:* **фобия)**

**кардиохиру́рг** кардиохирург (кардиохирургия белгесе)

**кардиохирурги́я** кардиохирургия (медицинаның йөрәк ауырыуҙарын операция юлы менән дауалай торған бүлеге)

**карди́т** кардит (йөрәк шешеүе)

**ка́риес** кариес (һөйәктең ҡаты өлөшөнөң тарҡалыуы, мәҫ., *к. зуба* теш кариесы)

**карио́зный** кариозлы (кариесҡа ҡағылышлы, мәҫ., кариозлы теш)

**ка́рлик** иргәйел, мәҫ., *к. гипофизарный* гипофизар иргәйел (гипофиз биҙенең ҡайһы бер сирле үҙгәрешенән килгән иргәйеллек)

**ка́рликовость** иргәйеллек (ауырыу һөҙөмтәһендә буйҙың нормаға ҡарағанда бәләкәй: ирҙәр 130 см, ҡатын-ҡыҙ 120 см-ҙан түбәнерәк булыуы)

**карнити́н** карнитин (матдәләр алмашыныуҙа ҡатнашҡан витаминға оҡшаш матдә;

**карнифика́ция** карнификация (ауырыу һөҙөмтәһендә туҡыманың иткә оҡшашлы тығыҙланыуы, мәҫ., үпкә карнификацияһы)

**кароти́н** каротин (кишер, йомортҡа һарыһында булған һәм төҙөлөшө менән А витаминына яҡын булған матдә; кеше организмында унан А витамины барлыҡҡа килә)

**каротинеми́я** каротинемия (ҡанда каротиндың артыҡ булыуы)

**ка́рта** *(мед.)* карта (мәҫ., амбулатор карта, санаторий-курорт картаһы, санитария күҙәтеү картаһы һ. б.)

**карта́вость (косноязычие)** һаҡаулыҡ, һаҡау һөйләшеү

**карта́вый** һаҡау

**карти́на** картина, торош (мәҫ., *к. болезни* ауырыу картинаһы (торошо) һ. б.)

**карцино́ма** карцинома *(ҡара:* **рак)**

**карциносарко́ма** карциносаркома (рак менән саркоманың ҡушылып барлыҡҡа килеүе)

**кастеля́нша** кастелянша *(ҡара:* **сестра-хозяйка)**

**касто́рка** *(разг.)* касторка *(ҡара:* **масло касторовое)**

**кастрация** кастрация (нигеҙҙә, яман шеш барлыҡҡа килгәндә күкәй йәки түллек биҙен алыу операцияһы йәки уларҙың функцияһын нурланыш, гормондар ярҙамында туҡтатыу)

**катаболизм** катаболизм (организмда барған биохимик процестарҙың береһе: ябай матдәләрҙең ҡатмарлашыу барышы)

**каталепсия** каталепсия (истерия һәм башҡа ҡайһы бер психик ауырыу булғанда ҡатып ҡалыу күренеше)

**каталка (для больных)** каталка (ауырыу кешеләрҙе күсереү өсөн арба)

**катаплексия** катаплексия (көслө психик кисерештән һуң күҙәтелә торған мускулдарҙың киҫкен хәлһеҙләнеүе)

**катар** *ҡара:* **воспаление катаральное**

**катаракта** катаракта, ҡара ҡылау (күҙ яҫмығы һәм уның капсулаһының тотошлай йәки бер өлөшөнөң тоноҡланыуы менән характерлы күҙ ауырыуы; төрҙәре: *к. врожденная* тыумыштан килгән катаракта; *к. диабетическая* диабетик катаракта һ. б.)

**катаральный** катараль (катараль шешеүгә бәйле; *ҡара:* **воспаление катаральное**)

**кататония** *ҡара:* **синдром кататонический**

**катафазия** катафазия (тотлоғоуҙың бер төрө: бер үк һорауға ҡат-ҡат яуап ҡайтарыу)

**катетер** катетер (ҡыуышлы йәки көпшәле ағзаларҙы тикшереү йәки дауалау өсөн ҡулланылыусы инструмент, мәҫ., *к. мужской* ирҙәр катетеры; *к. резиновый* резина катетер һ. б.)

**катетеризация** катетеризация, катетеризациялау (катетерҙы ҡыуышлы йәки көпшәле ағзаға индереү, мәҫ., *к. мочевого пузыря* һейҙек ҡыуығы катетеризацияһы)

**катехоламины** катехоламиндар (биоген амидтар рәтенә ингән физиологик актив матдәләр: адреналин, норадреналин һ. б. гормондар)

**каузалгия** каузалгия (периферия нервылары йәрәхәтләнгәндә күҙәтелгән үтә ҡаты ауыртыу)

**кахексия** кахексия 1. ҡаты ауырыу кисереү, оҙаҡ ваҡыт буйы аслы-туҡлы йәшәү йәки ҡартайыу һөҙөмтәһендә ныҡ ябығыу, хәлдән тайыу, аҙ ҡанлылыҡ барлыҡҡа килеү, мәҫ., алиментар (насар туҡланыуға бәйле) кахексия; 2 *к. гипофизарная (болезнь Симмондса)* гипофизар кахексия (баш мейеһенең гипоталамус өлөшө һәм гипофиз биҙе зарарланыуҙан килгән, нығ ябығыу менән тамамланыусы дөйөм ауырыу)

**кахектический** кахексия, кахексиялы (мәҫ., кахексиялы (ауырыу) кеше)

**кашель** йүткереү, йүтәл, йүтәлләү; (төрҙәре: *к. влажный* ҡаҡырыҡлы йүтәл; *к. приступообразный* быума йүтәл; *к. сухой* ҡоро йүтәл һ. б.)

**квашиоркор** квашиоркор (дауамлы рәүештә ашамлыҡта аҡһымдар етешмәүҙән килгән, физик үҫеш туҡтауы, шешенеү, психик яҡтан камил булмау, эс китеү менән характерлы балалар ауырыуы)

**келоид** келоид (тиреләге тоташтырғыс туҡыманың шеш рәүешендә үҫеш алыуы)

**кенофобия** кенофобия (асыҡ һәм ялан ергә ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**кератит** кератит (күҙҙең мөгөҙсә шекәрәһенең шешеүе; төрҙәре: *к. аллергический* аллергик кератит; *к. вирусный* вирус кератиты; *к. туберкулёзный* туберкулез кератиты һ. б.)

**кератодермия** кератодермия (ус, табан тиреһе ҡатыуы, ҡалынайыуы менән билдәләнгән ауырыу)

**кератоз** кератоз (тиренең ҡалынайып ҡатыуы менән билдәләнгән ауырыуҙарҙың дөйөм исеме)

**кератоирит** кератоирит (күҙҙең мөгөҙсә һәм төҫлө шекәрәһенең бер юлы шешеүе)

**кератома** кератома (тиренең ябай шеше, мәҫ., *к. старческая* өлкәндәр кератомаһы)

**кератомикоз** кератомикоз (тирелә ге мөгөҙ ҡатламының өҫкө өлөшөн зарарлаған бәшмәк ауырыуы)

**кератопластика** кератопластика (күҙҙең мөгөҙсә шекәрәһенә яһала торған пластик операция)

**кератосклерит** кератосклерит (күҙ мөгөҙсәһе һәм күҙ ағының бер юлы шешеүе)

**кератосклероувеит** кератосклероувеит (күҙ мөгөҙсәһенең, күҙ ағының һәм күҙҙең тамырлы шекәрәһенең бер юлы шешеүе)

**кератоувеит** кератоувеит (күҙҙең мөгөҙсә һәм тамырлы шекәрәләренең бер юлы шешеүе)

**кератэктазия** кератэктазия (күҙ мөгөҙсәһенең йоҡарыуы һәм бүртеп сығыуы)

**Кесарево сечение** Кесарь операцияһы (ҡарындағы баланы ярып алыу операцияһы)

**кетгут** кетгут (ғәҙәттә, һарыҡ эсәгенән яһалған һәм хирургик операция ваҡытында тегеү өсөн ҡулланылған еп)

**кетоацидоз** кетоацидоз (ҡанда кетон матдәләре: ацетон, ацетон-һеркә һ. б. кислоталарҙың артыуынан килгән ацидоз; *ҡара:* **ацидоз)**

**кефалгематома** кефалгематома (яңы тыуған баланың баш һөйәге өҫтөндә барлыҡҡа килгән ҡанлы шеш)

**кефалометрия** кефалометрия (баш ҙурлығын махсус инструмент ярҙамында билдәләү)

**кибернетика медицинская** медицина кабернетикаһы (кибернетиканың кеше организмындағы процестарға һәм дауалау-профилактикаға ҡағылышлы информацияны өйрәнеүсе тармағы)

**кимография** кимография (организмдың эшсәнлеген график һүрәт рәүешендә өйрәнеү)

**кинезиграфия** кинезиграфия (ут юлдарын өйрәнеү ысулдарының береһе)

**кинетокардиография** кинетокардиография (йөрәк эшен өйрәнеү ысулдарының береһе)

**кинины** кининдар (организм зарарланғанда барлыҡҡа килгән биологик актив матдәләр)

**кинофобия** кинофобия (эттән ҡурҡыу; ҡоторған эт тешләүгә ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**кислородная подушка** кислород ҡапсығы (кислород тултырыу өсөн резина тоҡ)

**кислородотерапия** кислородотерапия (кислород менән дауалау)

**кислота(ы)** кислота(лар) мәҫ., *к. аденозинтрифосфорная (АТФ)* аденозинтрифосфор кислотаһы (дауалау өсөн киң ҡулланыла

торған мөһим фермент); *к. аскорбиновая* аскорбин кислотаһы (*ҡара:* **витамин С**); *к. дезоксирибонуклеиновая (ДНК)* дезоксирибонуклеин кислотаһы (нәҫел сифатын йөрөтөүсе нуклеин кислотаһы); *к. желчные* үт кислоталары; *к. жирные* май кислоталары (стеарин кислотаһы, олеин кислотаһы һ. б.); *к. жирные (незаменимые)* алмаштырғыһыҙ май кислоталары (*ҡара:* **витамин F**); *к. молочная* һөт кислотаһы; *к. мочевая* һейҙек кислотаһы; *к. никотиновая* никотин кислотаһы (*ҡара:* **витамин РР**); *к. нуклеиновая* нуклеин кислотаһы (күҙәнәк составына инеп нәҫел сифатын йөрөтөүсе органик матдә); *к. пангамовая пангам кислотаһы (ҡара:* **витамин $B_{15}$**); *к. рибонуклеиновая* (РНК) рибонуклеин кислотаһы (күҙәнәктәге актив биологик есем, аҡһым эшләп сығарыуҙа актив роль уйнай); *к. фолиевая* фолий кислотаһы (*ҡара:* **витамин $B_9$** һ. б.)

**кисломолочные продукты** әсе һөт аҙығы (мәҫ., ҡатыҡ, кефир, ряженка һ. б.)

**кислотность** кислотлылыҡ, әселек (ниндәй ҙә булһа шыйыҡсала водород иондарының артыҡ булыуы, мәҫ., *к. желудка общая* ашҡаҙандың дөйөм әселеге; *к. желудка повышенная* ашҡаҙандың артыҡ (юғары) әселеге; *к. желудка пониженная* ашҡаҙандың түбәнәйгән әселеге; *к. желудка свободная* ашҡаҙандың ирекле әселеге (химик бәйләнештә булмаған әселек); *к. желудка связанная* ашҡаҙандың бәйле әселеге; *к. мочи* һейҙек әселеге һ. б.)

**кислотоусто́йчивый** кислотаға бирешмәҫ (мәҫ., кислотаға бирешмәҫ бактерия)

**киста́** киста́ (әсендә шыйыҡ йәки бутҡаға оҡшаш матдәһе булған ябай шеш, мәҫ., теш кистаһы)

**кисто́зный** киста, кистоз (мәҫ., киста шеше)

**кисть** *(анат.)* ҡул суғы, суҡ

**кифо́з** кифоз (умыртҡа бағанаһының тигеҙ рәүештә артҡа табан бөкрәйеп сығыуы; төрҙәре: *к. грудной* күкрәк кифозы; *к. патологический* патологик кифоз (ауырыуҙан, имгәнеүҙән булған кифоз); *к. старческий* ҡартлыҡ кифозы; *к. туберкулёзный* туберкулез кифозы; *к. физиологический* физиологик кифоз (һау кешеләге еңелсә беленгән кифоз) һ. б.)

**кифосколио́з** кифосколиоз (умыртҡа бағанаһының бер юлы артҡа һәм ян-яҡҡа бөкрәйеп сығыуы)

**кише́чник** эсәктәр (ашҡаҙандың сығышынан алып арт юл тишегенә тиклем һуҙыла)

**кишка́** эсәк; төрҙәре: *к. двенадцатиперстная* бөйән эсәге; *к. ободочная* туҡ эсәк; *к. ободочная восходящая* өҫкә үрләүсе туҡ эсәк; *к. ободочная нисходящая* түбәнләүсе туҡ эсәк; *к. ободочная поперечная* арҡыры туҡ эсәк; *к. подвздошная* бығым эсәге (нәҙек эсәктең аҙаҡҡы һуҡыр эсәккә тоташҡан өлөшө), *к. прямая* тура эсәк (сигма эсәге дауамы); *к. сигмовидная* сигма эсәк (ҡорһаҡтың һул яғында ятҡан йыуан эсәк); *к. слепая* һуҡыр эсәк (йыуан эсәк); *к. толстая* йыуан эсәк (һуҡыр, туҡ, сигма һәм тура эсәктәрҙән тора); *к. тонкая* нәҙек эсәк (бөйән һәм ас эсәктәрҙән тора)

**кла́пан** *(анат.)* клапан, япҡыс (йөрәк тишемдәрен, вена, лимфа тамырҙарын ваҡыты-ваҡыты менән ритмлы рәүештә ҡаплай торған яры, мәҫ., *к. вены* вена клапаны; *к. сердца* йөрәк клапаны (йөрәктең бер нисә клапаны бар); *к. сердца искусственный* йөрәктең яһалма клапаны (оператив юл менән ҡуйыла)

**классифика́ция болезней** ауырыуҙар классификацияһы

**клептомани́я** клептомания (урлашыуға әүәҫлек (сир))

**клептофоби́я** клептофобия (бурҙарға ҡарата фобия; *ҡара:* фобия)

**кле́тка** күҙәнәк, ситлек, мәҫ., *к. бактериальная* бактерия күҙәнәге; *(анат.); к. костная* һөйәк күҙәнәге; *к. крови* ҡан күҙәнәге, *к. крови белая* ҡандың аҡ күҙәнәге (лейкоцит); *к. крови красная* ҡандың ҡыҙыл күҙәнәге (эритроцит), *к. мышечная* мускул күҙәнәге; *к. половая* енес күҙәнәге; *к. грудная* күкрәк ситлеге

**кле́точный** күҙәнәк, күҙәнәкле, күҙәнәктәр, мәҫ., күҙәнәкле туҡыма, күҙәнәктәр тупланмаһы, күҙәнәк йәҙрәһе

**клетча́тка** *(анат.)* күҙәнәкле туҡыма (май күҙәнәктәре ҡатыш тоташтырғыс туҡыма)

**клещ** талпан, бетсә, мәҫ., *к. гамазовый* гамаз талпаны (нигеҙҙә, ҡомаҡ тифын таратыусы талпан); *к. иксодовый* иксод талпаны (нигеҙҙә, тайга энцефалитын таратыусы талпан); *к. таёжный* урман (ҡыр) талпаны; *к. чесоточный* ҡысынма (ҡорсаңғы) талпаны һ. б.)

**клещеви́на** кенә уты (кастор майы биреүсе үлән)

**кли́зма (клистир)** клизма (арт юл аша һыу йәки дарыу ебәреү; төрҙәре: *к. гипертоническая* гипертоник клизма (аш тоҙонан яһалған гипертоник иретмә клизмаһы;) *к. капельная* тамсылы клизма; *к. лечебная* дауалау клизмаһы; *к. очистительная* (тиҙәктән) бушандырыу клизмаһы; *к. питательная* туҡландырыу клизмаһы; *к. сифонная* сифон клизма (тиҙәктән бушандырыу клизмаһының бер төрө) һ. б.)

**кли́зменный** клизма (клизмаға ҡағылышлы, мәҫ., *клизменный наконечник* клизма ослоғо)

**кли́макс (климактерий, климактерический период)** климакс (кешенең ғүмерендә бала табыу, балаға ҡалдырыу функцияһы туҡтау дәүере: *к. женский* ҡатын-ҡыҙ климаксы; *к. мужской* ирҙәр климаксы)

**климактери́ческий** климакс (мәҫ., климакс дәүере)

**кли́мат** климат (1. көн торошоноң күп йылдарҙағы режимы; 2. *к. искусственный* яһалма климат (ябыҡ бинала булдырылған климат)

**климатоло́гия медици́нская** медицина климатологияһы (дауалау-профилактик маҡсатта климат һәм уның айырым факторҙарының кешегә яһаған тәьҫирен өйрәнеүсе фән)

**климатопатоло́гия** климатопатология (медицина климатологияһының климат тәьҫиренән килгән ауырыу үҙгәрештәрҙе һәм уларҙы булдырмау юлдарын өйрәнеүсе тармағы)

**климатопрофилактика** климатопрофилактика (климаттың за-

рарлы тәьҫиренән һаҡлаусы саралар комплексы)

**климатотерапия** климатотерапия (климат факторҙарынан дауалау маҡсатында файҙаланыу)

**климатофизиология** климатофизиология (медицина климатологияһының кеше организмының климат шарттарына яраҡлашыу процестарын өйрәнеүсе тармағы)

**клиника** клиника (1. медицина юғары уҡыу йорто йәки ғилми-тикшеренеү институты составына ингән ятып дауалау учреждениеһы, унда дауалау менән бер ҡатарҙан ғилми-тикшеренеү һәм уҡытыу эше алып барыла, мәҫ., *к. педиатрическая* педиатрия клиникаһы һ. б.; 2. *ҡара:* **клиническая картина)**

**клиническая картина** клиник картина (ауырыуҙың төрлө үҙгәрештәренең дөйөмләштерелгән исеме)

**клиницист** клиницист (дауалау эше менән шөғөлләнеүсе врач, клиникала эшләүсе врач)

**клинический** клиник, клиника (мәҫ., клиника шарттары)

**клитор** клитор, нәфсе төймәһе (ҡатын-ҡыҙ енес ағзаларының береһе)

**клонорхоз** клонорхоз (трематодоз рәтенә ингән үҙенә бер төрлө паразит селәү йоғоуҙан килгән, нигеҙҙә, бауыр һәм үт юлдарын зарарлаусы гельминтоз ауырыуы; кеше сей балыҡ ашап ауырыуға һабыша; *ҡара:* **гельминтоз)**

**клонус** клонус (тартышыуҙың бер төрө)

**клоп постельный** ҡандала (торлаҡ ҡандалаһы)

**клостридии** клостридийҙар (бер төркөм һеркә *(спора)* яһаусы анаэроб бактериялар, мәҫ., ботулизм, һын ҡатыу *(столбняк)* ауырыуҙарын тыуҙырыусы микроорганизмдар)

**клостридиоз** клостридиоз (клостридийҙар тыуҙырған бер төркөм: ботулизм, һын ҡатыу (столбняк) ауырыуҙарының дөйөм исеме һ. б.)

**клубочек (почечный)** бөйөр йомғаҡсаһы (бөйөрҙөң ҡабыҡ матдәһендәге ҡан капиллярҙары йомғаҡсаһы)

**клык** ҡаҙыҡ теш

**ключица** умрау (һөйәге)

**кодеинизм** кодеинизм (кодеин дарыуына ҡарата барлыҡҡа килгән наркомания)

**кожа** тире (үҙ сиратында төп өс ҡатламдан: эпидермистан, дерманан һәм тире аҫты туҡымаһынан тора)

**козелок** ҡолаҡ сөйө (ҡолаҡ япрағы үҫентеһе)

**койка больничная** больница койкаһы

**койка-носилки** носилка койка (күсереп йөрөтөү өсөн ҡулайлаштырылған койка)

**койлонихия** койлонихия (тырнаҡтың дистрофик үҙгәрештәренең бер төрө: тырнаҡ өҫтөнөң батынҡылы булыуы)

**кокаинизм (кокаиномания)** кокаинизм (1. кокаинға ҡарата булған наркомания; 2. кокаин менән дауамлы ағыуланыу)

**кокк** кокк (борсаҡ рәүешендәге йомро бактерия)

**коккобактерия** коккобактерия (йыуан һәм ҡыҫҡа таяҡса рәүешендәге бактерия)

**коклюш** коклюш, быума йүтәл, сәсәтмә (коклюш таяҡсаһы йоҡ-

ҡандан килгән инфекцион ауырыу)

**коксалги́я** коксалгия (бот быуыны ауыртыу)

**кокси́т** коксит (бот быуыны шешеүе)

**кокцигодини́я** кокцигодиния (невралгия характерында ҡоймос тәңгәлендә булған көслө ауыртыу)

**кокци́дии** кокцидиялар (паразит булып йәшәүсе иң ябай микроскопик хайуандарҙың береһе)

**кокцидио́з** (кокцидиялар йоғоуҙан килгән һәм, нигеҙҙә, эс китеү, температура күтәрелеү һ. б. билдәләр менән характерлы инвазион ауырыу, кеше һәм хайуандарҙа күҙәтелә)

**кокцидиоидо́з** кокцидиоидоз (тире, үпкә, ашҡаҙан-эсәктәрҙе зарарлау менән үтеүсе бәшмәк ауырыуы, сүлле яҡтарҙа осрай)

**ко́лбочки сетчатки** күҙ колбочкалары (күҙҙең селтәрле ҡатламында урынлашып, яҡтылыҡ нурҙарын ҡабул итә торған күреү рецепторы күҙәнәктәре)

**коле́но** тубыҡ

**ко́ли-се́псис** коли-сепсис (эсәк таяҡсаһы тыуҙырған сепсис; *ҡара:* **сепсис)**

**ко́лики(а)** колика, ҡатыу, ҡаҙалыу (башлыса, ҡорһаҡ эсендәге ағзалар ауырыуынан килгән ауыртыу өйәнәге; төрҙәре: *к. аппендикулярная* аппендикуляр колика (аппендицит ауырыуы билдәһе; *ҡара:* **аппендицит)**; *к. газовая* газлы колика (эсәк газдары күбәйеп китеүҙән ҡаҙалыу); *к. желчная (печеночная)* үт (бауыр) коликаһы (үт ташы һәм үт ҡыуығы шешеүҙән ҡаҙалыу); *к. кишечная* эсәк коликаһы (эсәк ауырыуҙарынан ҡаҙалыу); *к. панкреатическая* панкреас коликаһы (ашҡаҙан аҫты биҙе ауырыуынан ҡаҙалыу); *к. почечная* бөйөр коликаһы (бөйөр ташынан килгән ҡаҙалыу); *к. ректальная* ректаль колика (йыш ауыртыу менән үтеүсе оло ярау теләге); *к. свинцовая* ҡара ҡурғаш коликаһы (ҡара ҡурғаш менән дауамлы ағыуланыуҙан ҡаҙалыу); *к. слизистая* (оло яраүҙан күп лайла бүленеү менән үтеүсе ҡаҙалыу); *к. при беге* йүгереү коликаһы (йүгергәндә барлыҡҡа килгән ҡаҙалыу) һ. б.

**коли́т** колит (йыуан эсәк тиресәһенең шешеүе)

**ко́ли-титр** коли-титр (һыу-тупраҡтың, аҙыҡ-түлектең һ. б. тышҡы тәбиғәт объекттарының тиҙәк менән бысраныуын белдергән күрһәткес: иң аҙ тикшерелгән материалдан эсәк таяҡсаһының үрсеүе)

**коллаге́н** коллаген (тоташтырғыс туҡыманың иң мөһим аҡһымы)

**коллагено́зы** коллагеноздар (тоташтырғыс туҡыманың ныҡ зарарланыуы менән билдәләнгән бер төркөм етди дөйөм ауырыуҙар: дерматомиозит, системалы ҡыҙыл сөсө ауырыуы, склеродермия һ. б.)

**колла́пс** коллапс (ҡан тамырҙарының тонусы юғалыу һөҙөмтәһендә ҡапыл һуштан яҙыу һәм хәлдән тайыу)

**коллапсотерапи́я** коллапсотерапия (торакопластика һәм яһалма пневмоторакс ярҙамында үпкә туҡымаһын бөрөштөрөү рәүешендә үпкә туберкулезын дауалау)

**коллапсохирурги́я** коллапсохирургия (коллапсохирургияға нигеҙ-

ләнгән бер төркөм операциялар: торакопластика, диафрагма нервыһына операция һ. б.)

**колобо́ма** колобома (күҙҙең ниндәй ҙә булһа ҡатламының өлөшсәһе юҡлығынан торған физик кәмселек, мәç., күҙ яçмығы колобомаһы)

**коло́ния бактериа́льная** бактериялар колонияһы («ҡатҡан» (ҡойҡаға оҡшаған) туҡлыҡлы средала бер бактериянан үçтерелгән һәм ябай күҙгә күренгән ошо бактерия популяцияһы)

**колоноско́пия** колоноскопия (йыуан эсәк тиресәһен махсус көҙгө ярҙамында ҡарап тикшереү)

**колту́н** колтун (сәстең йәбешеп кейеҙләнеүе менән билдәләнгән баш тиреһе ауырыуы, элек йыш осраған)

**кольпи́т** кольпит (ҡатын-ҡыҙ еңсәһе тиресәһенең шешеүе)

**кольпоскопи́я** кольпоскопия (ҡатын-ҡыҙ еңсәһе тиресәһен махсус көҙгө ярҙамында ҡарап тикшереү)

**кольцо́** *(анат.)* дүңгәләк, уратма (мәç., *к. пупочное* кендек дүңгәләге һ. б.)

**ко́ма** ко́ма (үҙәк нервы системаһы эшсәнлегенең ныҡ насарайыуы, тәрән һуштан яҙыу менән үткән һаулыҡтың ҡаҡшауы; төрҙәре: *к. диабетическая* диабетик кома *(ҡара:* **диабет сахарный**); *к. уремическая* уремия комаһы *(ҡара:* **уремия**) һ. б.)

**кома́р** серекәй, мәç., *к. малярийный* тапма ауырыуы серекәйе

**комато́зный** кома, коматоз (комаға ҡағылышлы)

**комедо́ны** комендондар (ҡара төçтәге ваҡ һытҡылар)

**коми́ссия** *(мед.)* комиссия (төрҙәре: *к. военно-медицинская* хәрби-медицина комиссияһы; *к. врачебная* врачлыҡ комиссияһы; *к. врачебно-консультативная (ВКК)* консультатив врачлыҡ комиссияһы; *к. врачебно-трудовая экспертная (ВТЭК)* хеҙмәт-экспертиза врачлыҡ комиссияһы һ. б.)

**комиссова́ние больного** ауырыу кешене (сирлене) комиссия аша үткәреү

**комиссуротоми́я** комиссуротомия (1. йөрәк клапандары йәбешеп үçкән ерҙәрен айырыу операцияһы; 2. арҡа мейеһенә яһала торған операция)

**комме́нсал** комменсал (организмда уға зарар килтермәй йәшәй торған зат)

**комме́нсализм** комменсализм (организмда комессал рәүешендә йәшәүе)

**коммо́ция** коммоция *(ҡара:* **сотрясение**)

**компенсато́рные приспособления организма** организмдың компенсатор яраҡлашыуы (һау ҡалған ағза-туҡыманың зарарланған ағза-туҡыма эшсәнлеген үҙ өçтөнә алыуы)

**компенса́ция** *(мед.)* компенсация (организмдың ҡулайлаштырыу көстәре тарафынан ауырыу ағзаһы эшсәнлегенең яйға һалыныуы, мәç., *к. деятельности сердца* йөрәк эшсәнлеге компенсацияһы һ. б.)

**компле́мент** комплемент (иммунологик процеста актив роль уйнаусы бер төркөм ҡан сыворотҡаһы аҡһымдары)

**компости́рование** компостлау (көнкүреш, ауыл хужалығы һәм ҡайһы бер промышленность ҡалдыҡ һәм ташландыҡтарын зарарһыҙлау ысулы)

**компре́сс** компресс (марля һәм мамыҡ, ҡағыҙ, һыу үткәрмәүсе пленканан торған күп ҡатлы бәй; төрҙәре: *к. согревающий* йылытыусы *компресс; к. сухой* ҡоро компресс һ. б.)

**компре́ссия (сдавление)** компрессия (тышҡы йәки йәнәштәге ағза-туҡыма баҫымы һөҙөмтәһендә теге йәки был ағза-туҡыманың зарарланыуы, мәҫ., баш мейеһе компрессияһы, күкрәк компрессияһы һ. б.)

**комфо́рт** комфорт (көнкүрештә төрлө уңайлыҡтарҙы булдырыу)

**конверге́нция** конвергенция (ике күҙҙең дә күреү күсәрҙәренең ҡаралған объектта ҡушылыуы)

**конволю́та (лекарственная)** конволюта (һатыу өсөн әҙерләнгән таблетка, борсаҡ рәүешендәге дарыу тултырылған ҡап)

**конву́льсия** конвульсия (бөтә кәүҙәнең йәки аяҡ-ҡулдың көҙән йыйырыуы)

**конгенита́льный** конгениталь (тыумыштан булыуға ҡағылышлы, мәҫ., конгениталь сифилис)

**кондило́ма** кондилома (тышҡы тиресәләрҙә барлыҡҡа килгән ябай шештәрҙең бер төрө, улар, ғәҙәттә, енси ағзалар йәки арт юл тәңгәлендә сығыусан); төрҙәре: *к. остроконечная (бородавка остроконечная)* осло башлы кондилома (үҙенә бер төрлө вирус йоҡҡандан килгән кәбеҫтәне хәтерләткән шеш); *к. широкая (сифилитическая)* киң төплө кондилома, сифилис кондиломаһы *(ҡара:* **сифилис)**

**кондиционер** кондиционер (бинала һауа йылылығын, дымлылығын талап ителгән кимәлдә тота торған аппарат)

**кондиционирование воздуха** һауаны кондиционирлау (бинаға талап ителгән температуралағы, дымлылыҡтағы таҙартылған һауа индереү)

**кондо́м** кондом *(ҡара:* **презерватив)**

**коне́чность** *(анат.)* ослоҡ (ҡул йәки аяҡ), мәҫ., *к. верхняя* өҫкө ослоҡ (йәки ҡул)

**конио́з** кониоз (туҙан тәьҫиренән барлыҡҡа килгән ауырыуҙарҙың дөйөм исеме)

**конкреме́нт** конкремент (ҡара: **камень)**

**консерва́нты** консерванттар (боҙолоуҙан һаҡлау маҡсатында ашамлыҡҡа һ. б. нәмәгә өҫтәү өсөн ҡулланыла торған матдәләр)

**консервати́вный** консерватив (операция ҡулланмайынса, мәҫ., консерватив дауа)

**консерви́рование** консервалау (оҙаҡ һаҡланырға тейешле нәмәгә боҙолоуҙан һаҡлай торған матдә-консервант өҫтәү, мәҫ., *к. крови* ҡанды консервалау)

**конси́лиум** консилиум (сирле кешенең ауырыуын асыҡлау, дауалау һ. б. билдәләү өсөн врачтар кәңәшмәһе)

**конститу́ция** *(мед.)* конституция (организмдың нәҫелдән һәм тышҡы тәьҫирҙәрҙән барлыҡҡа килгән физик һәм психик үҙенсәлектәр бергәлеге, төрҙәре: *к. астеническая* астеник конституция (төп билдәләре: кеше ҡаҡса, сибек, мускуллы һ. б.); *к. гиперстеническая* гиперстеник конституция (төп билдәләре: кеше мускуллы, тиҙ һимереп бара һ. б.); *к. нормостеническая* нормостеник конституция (тән төҙөлөшө пропорциональ-гиперстеник менән астеник араһында)

**консульта́нт** консультант (үҙ специальносы буйынса кәңәш биреүсе медик)

**консульта́ция** *(мед.)* консультация (1. белгес кәңәше, мәҫ., *к. врачебная* врачлыҡ консультацияһы; *к. профессорская* профессор консультацияһы һ. б.; 2. дауалау-профилактик учреждениеларҙың бер төрө, мәҫ., *к. женская* ҡатын-ҡыҙ консультацияһы; *к. медико-генетическая* медицина-генетик консультация (нәҫел ауырыулы баланың донъяға килеү мөмкинлеген алдан билдәләү консультацияһы)

**консульти́ровать** консультация үткәреү (биреү)

**контагио́зность** контагиозлыҡ (йоғошло булыу)

**контагио́зный** контагиоз (йоғошло, мәҫ., *б. контагиозная* контагиоз ауырыу)

**конта́кт** контакт (аралашыу, мәҫ., *к. с больным* ауырыу кеше менән контакт; *к. непрямой* тура булмаған контакт (мәҫ., әйбер, кейем аша); *к. прямой* тура контакт (мәҫ., сирле кеше менән бергә булыу, йоҡлау)

**контракту́ра** контрактура (быуын тәңгәлендәге йомшаҡ туҡыманың ауырыуы, имгәнеп үҙгәреүе арҡаһында быуын хәрәкәтсәнлегенең ныҡ сикләнеүе; төрҙәре: *к. мышечная* мускул контрактураһы; *к. рубцовая* бирсәле контрактура һ. б.)

**контрацепти́в** контрацептив (буйға ҡалыуҙан һаҡланыу өсөн ҡулланыла торған матдә, мәҫ., контрацептин һ. б.)

**контрацéпция** контрацепция (яһалма юл менән — химик матдәләр, презерватив һ. б. ярҙамында буйға ҡалыуҙан һаҡланыу)

**контро́ль врачебный** врач(лыҡ) контроле

**конту́женный** контузия алған, контузияланған

**конту́зия (головного мозга)** баш мейеһе контузияһы (баш мейеһенең ябыҡ имгәнеүе) (нигеҙҙә, һуғыу, һауа тулҡыны менән имгәнеүе: һуштан яҙыу, хәтерҙең насарайыуы, баш әйләнеү, ҡолаҡ ҡатыу һ. б. характерлы)

**ко́нус** *(анат.)* конус (мәҫ., *к. гортани* ҡурылдай конусы; *к. мозговой* мейе конусы (арҡа мейеһенең аҫҡы өлөшө)

**конфабуля́ция** конфабуляция (психик ауырыу кешеләр уйлап сығарған һәм үҙҙәре ышанған ялған ваҡиғалар)

**конфронта́ция** *(мед.)* конфронтация (кәрәк булған мәғлүмәттәрҙе алыу өсөн венерик ауырыусыны уға сир йоҡторған кеше менән осраштырыу)

**ко́нчик** *(анат.)* ос, мәҫ., *к. носа* танау (морон) осо; *к. языка* тел осо

**конъюга́та акушерская** акушерлыҡ конъюгатаһы (ҡатын-ҡыҙ янбашының арттан-алға араһы)

**конъюнкти́ва** конъюнктива (күҙҙең тиресә шекәрәһе)

**конъюнктиви́т** конъюнктивит (күҙҙең конъюнктиваһы шешеүе, төрҙәре күп, мәҫ., эренле конъюнктивит һ. б.)

**копрогра́мма** копрограмма (тиҙәкте тикшереүҙән алынған мәғлүмәт)

**копроли́т** копролит (тиҙәк ташы)

**копростаз** копростаз (йыуан эсәктә тиҙәктең күп йыйылып китеүе)

**копрофаги́я** копрофагия (шизофрения, идиотизм менән сирләгән кешеләр араһында тиҙәк һәм башҡа имәнес нәмәләрҙе ашауға ынтылыш)

**копуля́ция** копуляция (1. ата һәм инә енес күҙәнәктәренең ҡушылыуы; 2. енси контакт)

**ко́пчик** ҡоймос, ҡоймос һөйәге (умыртҡа бағанаһының иң аҫҡы өлөшө)

**кора́** ҡабыҡ (1. мәҫ., *к. больших полушарий (головного мозга)* баш мейеһенең ҙур ярымшарҙар ҡабығы (ярымшарҙарҙы ҡаплаусы һоро матдә; *к. мозжечка* *кесе мейе ҡабығы (шулай уҡ һоро матдәнән тора), һ. б.;* 2. мәҫ., *к. дуба* имән ҡабығы (дауалау өсөн ҡулланыла)

**ко́рень** *(анат.)* тамыр (мәҫ., *к. зуба* теш тамыры; *к. лёгкого* үпкә тамыры һ. б.)

**корешо́к** *(анат.)* тамырса (мәҫ., *к. лицевого нерва* бит нервыһы тамырсаһы һ. б.)

**коринебакте́рии** коринебактериялар (суҡмар, шар формаһын алырға һәләтле булған таяҡса бактериялар, уларҙың ҡайһылары кешелә ауырыу (мәҫ., дифтерия, листериоз һ. б.) тыуҙыра)

**коринебактерио́з** коринебактериоз (үҙенә бер төрлө коринебактериялар йоғоуҙан барлыҡҡа килгән конъюнктивит; *ҡара:* **конъюнктивит)**

**ко́рка** ҡутыр *(к. гнойная* эренле ҡутыр; *к. молочная* имсәк бала ҡутыры (баштың сәсле өлөшөндәге күренеш) һ. б.)

**кормле́ние** ашатыу, туйындырыу (мәҫ, *к. грудью* имеҙеү, имеҙеп туйындырыу; *к. искусственное* имеҙмәй туйындырыу; *к. смешанное* ҡатнаш туйындырыу (баланы имсәк һөтө һәм ашамлыҡ ҡатышмалары биреп туйындырыу)

**коро́бка черепна́я** мейе ҡумтаһы

**коронавиру́сы** коронавирустар (вирустарҙың бер төрө, ҡайһылары кешелә респиратор ауырыуҙар тыуҙыра)

**коронари́т** коронарит (йөрәк артерияларының шешеүе)

**корона́рный** коронар (йөрәккә ҡағылышлы, мәҫ., коронар тамырҙар)

**коронарогра́фия** коронарография (йөрәк тамырҙарына контраст матдә индереп яһалған рентгенография)

**коронаросклеро́з** коронаросклероз (йөрәк һәм ҡан тамырҙарының склерозы; *ҡара:* **склероз)**

**коронароспа́зм** коронароспазм (йөрәк ҡан тамырҙары спазмы; *ҡара:* **спазм)**

**коронаротромбо́з** коронаротромбоз (йөрәк ҡан тамырының тромбозы; *ҡара:* **тромбоз)**

**коро́нка зу́ба** теш, теш тажы (1. тештең күренеп торған өлөшө; 2. теш коронкаһы (теш өҫтөнә кейелә торған протез, төрҙәре күп)

**коротконе́лость** ҡыҫҡа бармаҡлылыҡ (нәҫелдән килгән физик кәмселек)

**ко́рпус (те́ла)** тән корпусы, кәүҙә

**корре́кция (зре́ния)** коррекция (күҙлек ярҙамында ниндәй ҙә булһа күреү етешһеҙлегенән ҡотолоу, мәҫ., астигматизм коррекцияһы һ. б.)

**корреля́ция (о́рганов)** (ағзалар) корреляцияһы (организм ағзаларының эшсәнлегендә үҙ-ара бәйләнеш)

**корсе́т ортопедический** ортопедик (йәки коррекциялау) корсет (ор-

топедияла ҡулланылыусы дауалау сараһы, мәҫ., гипс корсеты һ. б.)

**кортикостеро́иды (кортикоиды)** кортикостероидтар (бөйөр өҫтө биҙенән сыҡҡан гормондар, малдан алынғандары һәм синтетик юл менән табылғандары дауалау өсөн ҡулланыла, мәҫ., гидрокортизон, преднизолон һ. б.)

**корь** ҡыҙылса (үҙенә бер төрлө вирус йоҡҡандан килгән балаларҙың инфекцион ауырыуы)

**коса́ (волосы)** толом

**косме́тика** косметика (1. кешенең тышҡы ҡиәфәтен яҡшыртыуы һәм яҡшыртыу ысулдары хаҡындағы ғилем; төрҙәре: *к. врачебная* врачлыҡ косметикаһы (тышҡы дефекттарҙы юҡ итеү өсөн косметик матдәләрҙән тыш физиотерапия, хирургия ысулдары ҡулланыу); *к. декоративная* декоратив косметика (биттең теге йәки был физик дефектын косметик матдәләр ярҙамында йәшереү); 2. сәсте, тирене, тештәрҙе, тырнаҡтарҙы тәрбиәләү өсөн косметик матдәләр: лосьон, теш пастаһы, пудралар һ. б.)

**космето́лог** косметолог (дауалау косметикаһы белгесе, врач)

**косметологи́ческий** косметологик, косметология (мәҫ. косметология кабинеты)

**космето́логия** косметология (фәндең дауалау (врачлыҡ) һәм биҙәнеү (декоратив) косметикаһын өйрәнә торған тармағы)

**косноязы́чие** һаҡаулыҡ

**косноязы́чный** һаҡау

**косогла́зие** ҡылыйлыҡ (төрҙәре: *к. паралитическое* паралитик ҡылыйлыҡ (күҙ алмаһы хәрәкәтсәнлеге кәмеүе йә юҡлығы менән характерлы); *к. расходящееся (наружное)* ян-яҡҡа ҡараған ҡылыйлыҡ; *к. сходящееся (внутреннее)* танауға ҡараған ҡылыйлыҡ; *к. содружественное* берлектәге ҡылыйлыҡ (ике күҙ ҡылыйлығы ла бер төрлө — йә ситкә, йә танауға ҡарай) һ. б.)

**косола́пость** салыш аяҡлыҡ

**косору́кость** кәкре ҡуллыҡ

**костномозгово́й** ҡыҙыл кимек (матдәһе); елек матдәһе йәки елек майы

**костое́да** *ҡара:* **остеомиелит**

**косты́ль** *(в мед.)* ҡултыҡ таяғы

**кость, ко́сти** һөйәк, һөйәктәр (мәҫ., *к. бедренная* бот һөйәге; *к. большеберцовая* сираҡ һөйәге (сираҡтың йыуан һөйәге); *к. верхней конечности* ҡул һөйәктәре; *к. верхнечелюстная* өҫкө яңаҡ һөйәге; *к. височная* сикә һөйәге; *к. гороховидная* борсаҡ һөйәк (шаушаҡ һөйәктәренең береһе); *к. грудинная* түш һөйәге; *к. губчатая* кимекле һөйәк; *к. запястья* шаушаҡ (беләҙек) һөйәктәре; *к. затылочная* соңҡа һөйәге; *к. клиновидная (основная)* сөй һөйәк (мейе ҡумтаһында); *к. копчиковая* ҡоймос һөйәге; *к. крестцовая* һигеҙгүҙ һөйәге; *к. лица* бит һөйәктәре; *к. лобковая* түмһәкәй һөйәге; *к. лобная* маңлай һөйәге; *к. локтевая* терһәк һөйәге; *к. лучевая* терһәк ҡушары һөйәге; *к. малоберцовая* сираҡ ҡушары һөйәге; *к. нёбная* аңҡау һөйәге; *к. нижней конечности* аяҡ һөйәктәре; *к. пальцев кисти* ҡул бармаҡтары һөйәктәре; *к. плечевая* ҡулбаш һөйәге, *к. плюсны* бәшәләй һөйәктәре (улар 5); *к. подвздошная* бығым һөйәге, *к. предплюсны* туларһыҡ һөйәктә-

ре (улар 7); *к. пястные* ус төбө һөйәктәре (улар 5); *к. решётчатая* рәшәткәле һөйәк (танау ҡыуышлығы көбөндә); *к. седалищная* ултырыш һөйәге; *к. скуловая* бит осо һөйәге; *к. слёзная* күҙ йәше һөйәге; *к. тазовая (безымя́нная)* янбаш һөйәге (быҒым, түмһәкәй, ултырыш һөйәктәренән тора, улар икәү; һул һәм уң янбаш һөйәктәре); *к. таранная* ашыҡ һөйәге (тулаpһыҡта; *ҡара:* **предплюсна**); *к. теменная* түбә һөйәге; *к. черепные баш һөйәктәре һ. б.)*

**костю́м** костюм, кейем (мәҫ., *к. защитный* һаҡлағыс костюм, әйтәйек, медиктарҙың аҡ халаты; *к. противочумный* тагундан һаҡлағыс костюм һ. б.)

**косы́нка медицинская** медиктарҙың өскөл яулығы

**кофеини́зм** кофеинизм (кофеинға бай ашамлыҡ: сәй, кофе менән артыҡ мауығыуҙан килгән токсикомания; *ҡара:* **токсикомания)**

**ко́фермéнт (коэнзим)** кофермент (организмда эшләнеп, ферменттар барлыҡҡа килеүен тәьмин итеүсе матдә)

**кофотерапи́я** кофотерапия (ҡолаҡҡа ҡатылыҡты һәм һаңғыраулыҡты дауалау комплексы)

**кофохирурги́я** кофохирургия (ҡолаҡҡа ҡатылыҡты һәм һаңғыраулыҡты хирургик операциялар ярҙамында дауалау комплексы)

**кохлеопати́я** кохлеопатия (һаңғыраулыҡҡа килтергән эске ҡолаҡ ауырыуҙарының дөйөм исеме)

**кошма́р** баҫлығып йоҡлау

**коэффицие́нт** коэффициент (ҡайһы бер күрһәткес ошолай атала, мәҫ., балалар үлеүсәнлеге коэффициенты, шулай уҡ *ҡара:* **показатель)**

**край** *(анат.)* сит, ҡыр (мәҫ., *к. века* күҙ ҡабағы сите; *к. языка* тел сите һ. б.)

**кра́йняя плоть** 1. *к. п. клитора* клитор (нәфсе төймәһе) япмаһы (уның башын ҡаплай); 2. *к. п. мужского полового члена* ҡаҫа (ир енес ағзаһы башын ҡаплаусы япма)

**краниогра́фия** краниография (баш һөйәктәрен рентген ярҙамында тикшереү ысулы)

**краниоло́гия** краниология (антропологияның баш һөйәктәрен өйрәнеүсе тармағы)

**краниопла́стика** краниопластика (баш һөйәктәре дефектын хирургик юл менән бөтөрөү ысулдарының дөйөм исеме)

**крапи́ва** кесерткән (нигеҙҙә, ҡан туҡтатҡыс дарыу бирә торған үлән)

**крапи́вница** кесерткән биҙгәге, бөре ыуы (тәндә ҡабарынҡы сабыртма ҡалҡыу менән характерлы аллергик тире ауырыуы)

**краси́тели пищевые** ашамлыҡ буяуҙары

**краснота́** ҡыҙарыу, ҡыҙыллыҡ, ҡыҙарған ер, мәҫ., бит ҡыҙарыуы

**красну́ха** ҡыҙамыҡ, мәҫ., *к. коревая* ҡыҙылса ҡыҙамығы (үҙенә бер төрлө вирус йоҡҡандан килгән еңел үтеүсе һәм ҡыҙылсаға оҡшаш инфекцион балалар ауырыуы); 2. *к. скарлатинозная (болезнь Филатова — Дьюкса)* скарлатиноз ҡыҙамыҡ (үҙенә бер төрлө вирус йоҡҡандан килгән еңел үтеүсе скарлатинаға оҡшаш инфекцион балалар ауырыуы)

**крауро́з** крауроз (өлкәндәрҙең кли-

мактерий вакытында тышкы енес ағзаларҙың атрофияһы (*кара:* **атрофия**) менән характерлы ауырыу; төрҙәре: *к. вульвы* вульва краурозы (катындар ауырыуы); *к. полового члена* ир енес ағзаһы краурозы)

**краш-синдром** (*кара:* **токсикоз травматический**)

**креатин** креатин (мускул тукымаһында була торған аминокислота)

**креатинемия** креатинемия (креатин аминокислотаның канда булыуы)

**креатинурия** креатинурия (креатин аминокислотаһының һейҙектә булыуы)

**крем** крем (кулға, биткә һөртөү өсөн кулланыла торған косметик май)

**крематорий** крематорий (мәйет яндырыу йорто)

**кремация** кремация (крематорийҙа мәйетте яндырыу)

**крепитация** крепитация, крепитациялау (һөйәк һынғанда, кайһы бер үпкә ауырыуы һ. б. булғанда барлыкка килгән һәм сәс бөртөктәренең ышкылыуын хәтерләткән өн-шауҙың ишетелеүе, мәҫ., һөйәк крепитацияһы)

**кресло** (*мед.*) кресло (мәҫ., теш дауалау креслоһы, хирургик кресло һ. б.)

**кресло-носилки** кресло-носилка (тәгәрмәсле носилка)

**крестец** һигеҙгүҙ һөйәге

**кретин** кретин (кретинизмы булған кеше)

**кретинизм** (**гипотиреоз врожденный**) кретинизм (калкан биҙе тыумыштан етәрлек дәрәжәлә эшләмәүенән килгән физик һәм психик үҫештең нык артта калыуы)

**кретиноид** кретиноид (тышкы яктан кретинға окшаш, әммә психик үҫеше нормаль булған кеше)

**кривобокий** кыйыш яурынлы

**кривизна желудка** ашкаҙан бөгөмө (төрҙәре: *к. большая* ашкаҙандың ҙур бөгөмө; *к. малая* ашкаҙандың кесе бөгөмө)

**кривой** һыңар күҙле

**кривошея** кыйыш муйынлылык

**криз** криз (теге йәки был ауырыу үтелешенең кыҫка вакытка капыл үҙгәреп китеүе, мәҫ., гипертония кризы (етди күренеш) һ. б.)

**кризис болезни** ауырыу кризисы (ауырыу үтелешенең капыл (ғәҙәттә якшы якка) үҙгәреүе)

**криокоагуляция** криокоагуляция (тукыманы туңдырып таркатыу, дауалау өсөн кулланыла)

**криоконсервирование** криоконсервалау (ағза-тукымаларҙы һыуытыу ярҙамында консервалау ысулы)

**криотерапия** криотерапия (һыуык менән дауалау: туңдырыу, һыуытыу, һалкын һыу менән койоноу һ. б.)

**крипта** крипта (бәләкәй, тар сокорса, мәҫ., эсәк крипталары)

**криптит** криптит (арт юл крипталарының шешеүе)

**криптококкоз** криптококкоз (криптококк бәшмәге йоғоуҙан килгән һәм үпкәне, тире, тиресә катламдарын һ. б. ағзаларҙы зарарлау менән үтеүсе бәшмәк ауырыуы)

**крипторхизм** крипторхизм (1. тыумыштан бер йә ике күкәйҙең дә токсаға төшмәйенсә корһакта калыуы; 2. *к. ложный* ялған крипторхизм (күкәйҙең токса-

нан тик ваҡытлы рәүештә «юғалып» тороуы) һ. б.)

**кровезаменители** ҡан алмаштырғыстар (ғәҙәттә, һыйыр малының ҡан сывороткаһынан алынған һәм дауалау өсөн ҡулланыла торған шыйыҡ аҡһымлы матдәләр)

**кровеносный** ҡан, ҡан йөрөткөс (мәҫ., *кровеносный сосуд* ҡан тамыры; *кровеносная система* ҡан йөрөткөс (йәки ҡан тамырҙары) системаһы)

**кровепаразиты** ҡан паразиттары (ҡанға эйәләшеүсән паразиттар, мәҫ., тапма ауырыуы паразиты һ. б.)

**кроветворение** ҡан эшләнеше

**кровоизлияние** ҡан һауыу (тәндең берәй ағза-туҡымаһында ҡан йыйылыу, мәҫ, мейегә ҡан һауыу)

**кровообращение** ҡан (йөрөшө) әйләнеше (мәҫ., *к. большого круга* ҙур урауҙың (түңәрәктең) ҡан әйләнеше; *к. искусственное* ҡандың яһалма әйләнеше (махсус аппарат ярҙамында булдырыла); *к. коллатеральное* коллатераль ҡан әйләнеше (өҫтәмә тамырҙар буйлап); *к. коронарное* коронар ҡан әйләнеше (йөрәктә); *к. малого круга* кесе урауҙың (түңәрәктең) ҡан әйләнеше (үпкәлә); *к. периферическое* периферик ҡан әйләнеше (ағза-туҡымаларҙағы); *к. плода* ғомандағы ҡан әйләнеше һ. б.)

**кровоподтёк (синяк)** күмгәк

**кровопотеря** ҡан юғалтыу

**кровопускание** ҡан алыу, ҡан алдырыу

**кровоснабжение** ҡан менән тәьмин итеү

**кровососущий** ҡан эскес (мәҫ., ҡан эскес бөжәктәр; ҡан һурғыс (мәҫ., ҡан һурғыс банкалар)

**кровотечение** ҡан ағыу (йәки килеү), ҡанау (мәҫ., *к. артериальное* артериаль ҡан ағыу; *к. венозное* веноз ҡан ағыу; *к. внутреннее* эске ҡан ағыу (мәҫ., ҡорһаҡ, күкрәк эсенә); *к. маточное* аналыҡтан ҡан килеү; *к. наружное* тышҡа сыҡҡан ҡан һауыу; *к. почечное* бөйөрҙән ҡан килеү һ. б.)

**кровоточивость** ҡанаусанлыҡ (әҙләп йәки дауамлы ҡанау)

**кровохарканье** ҡан төкөрөү

**кровь** ҡан (төрҙәре: *к. артериальная* артериаль ҡан (йөрәктең һул өлөшөнән, кислородҡа байытылып килгән ҡан); *к. венозная* веноз ҡан (йөрәктең уң яҡ өлөшөнә ҡайта торған ҡара ҡан); *к. донорская* донор ҡаны (*ҡара:* **донор**); *к. консервированная (цитратная)* консерваланған ҡан (ҡанға ойоуҙан һаҡлаусы матдә (консервант) өҫтәлгән ҡан); *к. несовместимая* группаһы ярашһыҙ ҡан; *к. резус-отрицательная* кире резуслы ҡан (*ҡара:* **резус-фактор**): *к. резус-положительная* ыңғай резуслы ҡан); *к. совместимая* группаһы ярашлы ҡан)

**кровянистый(ая)** ҡан ҡатыш, ҡанлы (мәҫ., ҡан ҡатыш ҡаҡырыҡ)

**кровяной** ҡан (мәҫ., ҡан сывороткаһы)

**круг** урау, түңәрәк (1. *к. кровообращения, большой* ҡан әйләнешенең ҙур урауы (түңәрәге); *к. кровообращения, малый (легочный)* ҡан әйләнешенең кесе урауы; *к. кровообращения сердца* йөрәктәге ҡан әйләнеше урауы); 2. *к. порочный* пороклы (боҙоҡ) урау (ашҡаҙанға яһалған операцияның ҡатмарлашыуы: аш

массаһы эсәктәрҙән кире ашҡаҙанға ҡайта)
**кру́жка Эсмарха (клизменная)** Эсмарх (клизма) көрөшкәһе (клизма ҡуйыу приборы: махсус һауыттан, резина көпшәнән һәм клизма ослоғонан тора)
**круп** круп (ҡайһы бер ауырыу (дифтерия, грипп, скарлатина һ. б.) һөҙөмтәһендә боғарлаҡ һәм ҡурылдайҙың киҫкен шешеүе, иң ауыры — дифтерия крупы)
**крупо́зный** крупоз (мәҫ., крупоз пневмония)
**крылья** *(анат.)* япраҡ, мәҫ., *к. носа* танау япраҡтары
**крыша** *(анат.)* ҡапҡас, мәҫ., *к. черепа* баш (һөйәге) ҡапҡасы
**ксантела́зма** ксантелазма (холестерин тупланышынан килгән күҙ ҡабағының ябай шеше)
**ксанто́ма** ксантома (холестерин һәм липоидтарҙың тире аҫтында тупланыуынан килгән һарғылт төҫтәге ваҡ ябай шештәр)
**ксантомато́з** ксантоматоз (холестерин алмашыныуы боҙолоуҙан килгән һәм төрлө ағзаларҙа ксентоматоз күҙәнәктәренең барлыҡҡа килеүе менән үткән ауырыу, мәҫ., күҙ ҡабағы ксантоматозы)
**ксантопси́я** ксантопсия (һары ауырыуы булғанда, сантонин, пикрин кислотаһы кеүек матдәләр менән ағыуланғанда, кешегә күҙ алдындағы бөтә нәмәнең дә һары булып күренеүе)
**ксенопла́стика** ксенопластика (пластика хирургияһының бер төрө: операция яһағанда хайуандан алынған ағза-туҡыма ҡулланыла)
**ксенотрансплента́ция** ксенотрансплантация (хайуан ағза-туҡымаһын кешегә (йәки башҡа биологик тип хайуанға) күсереү операцияһы)
**ксероде́рма пигме́нтная** пигментлы ксеродерма (ҡояш нурҙарына юғары һиҙеүсәнлек һәм тәндең асыҡ ерендә пигментлы таптар, тиренең ҡороуы, ҡауаҡ-ҡабырсаҡланыу менән үткән етди нәҫел ауырыуы)
**ксеродерми́я** ксеродермия (еңел үтеүсе ихтиоз ауырыуы; *ҡара:* **ихтиоз)**
**ксеро́з** ксероз (ауырыу характерында тиренең ҡоро булыуы)
**ксерофтальми́я** ксерофтальмия (ауырыу һөҙөмтәһендә күҙ йәше юлдарының тығылыуы арҡаһында күҙ алмаһының ҡороуы, сабыртма менән ҡапланыуы, аҙаҡтан күҙҙең һуҡырайыуы)
**куве́з** кувез (етлекмәй тыуған баланы тәрбиәләү өсөн махсус аппарат, уның эсендә бер кимәлдә температура һаҡлана; *к. закрытый; ҡара:* **инкубатор медицинский)**
**ку́колка** *(биол.)* ҡурсаҡ (бөжәктәрҙең үҫеш дәүеренең тәүге мәле, мәҫ., себен ҡурсағы)
**Ку-лихора́дка** Ку-биҙгәк (үҙенә бер төрлө риккетсий йоҡҡандан һуң килгән киҫкен йоғошло ауырыу)
**культиви́рование** *(биол.)* культивациялау (микроорганизмдарҙы, хайуан һәм үҫемлек күҙәнәктәрен яһалма шарттарҙа үҫтереү)
**культу́ра** культура (1. *(гиг.) к. гигиеническая* гигиеник культура; *к. санитарная* санитария культураһы; *к. физическая* физик культура; 2. *(биол.)* яһалма шарттарҙа туҡлыҡлы матдәлә (средала) үҫтерелгән микроорга-

низмдар, үҫемлек һәм хайуан туҡымаһы күҙәнәктәре)

**культя́ ампутацио́нная** ампутация тупысы (аяҡ-ҡул йә берәй башҡа ағзаның ампутация операцияһынан һуң ҡалған өлөшө)

**кумуля́ция** *(мед.)* кумуляция (организмда дарыу йәки башҡа биологик актив матдәнең тупланырға һәм ҡайһы ваҡыт кешене ағыуларға һәләтлеге, мәҫ., *к. лекарственная* дарыу кумуляцияһы һ. б.)

**кумы́с** ҡымыҙ (1. башҡорт халыҡ медицинаһында гигиеник һәм дауалау маҡсатында ҡулланылған, бейә һөтөнән әҙерләнгән эсемлек; медицинала ул киң файҙаланыла; 2. *к. из коровьего молока* һыйыр һөтөнән ҡымыҙ; *к. из козьего молока кәзә һөтөнән ҡымыҙ)*

**кумысолечё́бница** ҡымыҙ дауаханаһы

**кумысолече́ние** ҡымыҙ менән дауалау, дауаланыу маҡсатында ҡымыҙ эсеү

**купери́т** куперит (Купер биҙенең шешеүе; *кара:* **железа куперова**)

**кура́ция** *(мед.)* курация (врач тарафынан ауырыу кешене ҡарау: сирҙе асыҡлау, дауалау һәм тейеш булған документацияны алып барыу)

**курно́сый** йәмшек танау(лы)

**куро́рт** курорт (тәбиғи шифалығы (климаты, ләм-һыуы һ. б.) һәм дауалау-профилактик учреждениелары (санаторий, ял йорто, курорт поликлиникаһы) булған урын; төрҙәре: *к. бальнеологический* бальнеология курорты (минераль һыуы йәки шифалы ләме булған урын), *к. грязевой* шифалы ләме булған курорт; *к. климато-кумысолечебный* климат һәм ҡымыҙ менән дауалау курорты һ. б.)

**куро́ртный** курорт, курорттар (курортҡа ҡағылышлы, мәҫ., курорт дауалауы, курорттар идаралығы)

**курортоло́гия** курортология (клиник медицинаның тәбиғәттең шифалы сифаттарын, улар менән дауалауҙы өйрәнеүсе тармағы)

**курортотерапи́я** курортотерапия (курорт шарттарында дауалау)

**ку́рс (лечения)** дауалау курсы (ауырыу кешегә тәғәйенләнгән дауалау)

**курсо́вка** курсовка (ауырыу кешегә санаторийҙа дауаланыу һәм туҡланыу хоҡуғын биргән медицина документы)

**куру́т** ҡорот (башҡорт халыҡ медицинаһында, нигеҙҙә, тирләткес һәм эс китеүҙән дауа биргән ашамлыҡ)

**куэйзм** куэйзм (үҙ-үҙеңә башҡарыла торған психотерапияның бер төрө, ҡат-ҡат үҙеңә бер үк фекерҙе (мәҫ., «көндән-көн хәлем яҡшыра» тип ҡабатлау)

**ку́хня** молочная һөт аштары кухняһы (йәш балалар өсөн һөтлө ашамлыҡ әҙерләүсе махсус кухня)

**кюрета́ж** кюретаж (теш тәңгәлендәге туҡыманы таҙартыу операцияһы)

**кюритерапи́я** кюритерапия (радий ҡулланыуға нигеҙләнгән нурланыш дауалауы)

# Л

**лабильность** *(физиол.)* лабиллек (ҡуҙғыу күренешен тәшкил иткән физиологик процестарҙың теремеклеге, тиҙ үҙгәреүсән булыуы)

**лабиринт** лабиринит (1. эске ҡолаҡтағы ҡатмарлы ағза, төп ике өлөштән тора: *л. костный* һөйәк лабиринты; *л. перепончатый* ярылы лабиринт; 2. *л. решётчатый кости* рәшәткәле һөйәк лабиринты)

**лабиринтит** лабиринтит (эске ҡолаҡтың шешеүе)

**лабиринтопатия** лабиринтопатия (эске ҡолаҡтың бер төркөм ауырыуҙарының дөйөмләштерелгән исеме)

**лаборант(ка)** *(мед.)* лаборант, лаборантка (клиник, биохимик һ. б. лабораторияларҙа эшләүсе урта белемле медицина работнигы)

**лаборатория** *(мед.)* лаборатория (1. төрлө анализ үткәреү өсөн махсус бүлек йәки учреждение, мәç., *л. бактериологическая* бактериология лабораторияһы; *л. гистологическая* гистология лабораторияһы; *л. клинико-диагностическая* клиник-диагностика лабораторияһы; *л. санитарно-пищевая* санитария-ашамлыҡ лабораторияһы; *л. санитарно-эпидемиологическая* санитария-эпидемиологик лаборатория; *л. серологическая* серология лабораторияһы һ. б.; 2. ғилми-тикшеренеү учреждениеһы, мәç., *л. авиационной медицины* авиация медицинаһы лабораторияһы һ. б.)

**лабораторный** лаборатория, лаборатор (мәç., лаборатория бүлексәһе, лаборатор анализ)

**лагофтальм** лагофтальм (күҙҙе тулыһынса яба алмау менән характерлы ауырыу күренеше)

**ладонь** ус, ус йөҙө

**лазарет** лазарет (хәрби дауалау учреждениеһы, мәç., *л. гарнизонный* гарнизон лазареты; *л. дивизионный* дивизия лазареты һ. б.)

**лактация** лактация (имсәк биҙенән һөт бүленеүе)

**лактобациллы** **(лактобактерии)** лактобациллалар (һөттө әсетеп углеводтарҙы бүлемләгән һәм һөт кислотаһы сығарған бактериялар)

**лактозурия** лактозурия (лактоза шәкәренең һейҙек менән бүленеүе)

**лактотерапия** лактотерапия (һөт менән укол йәки эсереү рәүешендә дауалау)

**лакуна** лакуна (анатомик соҡорса, мәç., *л. миндалины* миндалина лакунаһы)

**лалофобия** лалофобия (тотлоғоуға ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**лампа** *(физиотер.)* лампа (мәç., *л. инфракрасного излучения* инфра — ҡыҙыл нурланыш лампаһы; *л. ультрафиолетового излучения* ультрафиолет нурланыш лампаһы һ. б.)

**ландыш** ынйы сәскәһе (нигеҙҙә, йөрәк ауырыуынан һәм тынысландырғыс дауа бирә торған үлән)

**ланолин** ланолин (дауа һәм косметик майҙар әҙерләгәндә киң ҡулланылыусы һарыҡ йөнө майы)

**ланцéт** ланцет (ике яғы осло хирургик бысаҡ)
**лапаротомия** лапаротомия (ҡорһаҡты ярыу операцияһы)
**ларвицйды** ларвицидтар (бөжәктәрҙе ҡырыу өсөн ҡулланыла торған ағыуҙарҙың бер төрө)
**ларингит** ларингит (ҡурылдай тиресәһенең шешеүе)
**ларингология** ларингология (ҡурылдай һәм ҡурылдай ауырыуҙарын өйрәнеү тураһындағы фән)
**ларингоскопия** ларингоскопия (ларингоскоп приборы ярҙамында ҡурылдай эсен тикшереү)
**ларингоспáзм** ларингоспазм (ҡурылдай спазмы; *ҡара:* **спазм)**
**ларингостенóз** ларингостеноз (ҡурылдай стенозы; *ҡара:* **стеноз)**
**ларинготрахеит** ларинготрахеит (ҡурылдай һәм боғарлаҡ тиресәһенең бер юлы шешеүе)
**ларингофарингит** ларингофарингит (йотҡолоҡ һәм ҡурылдайҙың бер юлы шешеүе)
**латéнтный** латент (йәшерен, мәҫ., ауырыуҙың латент осоро)
**латерáльный** латераль (ҡабырға яҡ, ян-яҡ, мәҫ., ҡулдың латераль яғы)
**леворýкость** һулаҡай ҡуллылыҡ (нәҫелдән килә)
**лёгкое** үпкә
**легкоранéнный** еңелсә яраланған (яраланған кеше үҙе йөрөй, үҙен тәрбиәләй ала)
**лейкемия** *ҡара:* **лейкоз**
**лейкогрáмма** *ҡара:* **формула лейкоцитарная**
**лейкодéрма** лейкодерма (төрлө сәбәптәрҙән тәндең теге йәки был ерендә меланин тигән пигменттың кәмеүе йәки уның булмауынан аҡ таптарҙың барлыҡҡа килеүе)
**лейкóз (лейкемия, белокровие)** лейкоз (ҡан күҙәнәктәрен барлыҡҡа килтереүсе туҡыманы — ҡыҙыл кимек матдәһен, лимфатик төйөрҙәрҙе һ. б. ағзаларҙы зарарлаусы етди дөйөм ауырыу; төрҙәре: *л. лимфоидный хронический* хроник лимфоид лейкоз; *л. миелоидный острый* киҫкен миелоид лейкоз; *л. миелоидный хронический* хроник миелоид лейкоз һ. б.)
**лейкóма** *ҡара:* **бельмо**
**лейкомиелит** лейкомиелит (арҡа мейеһенең шешеүе, нигеҙҙә мейенең аҡ матдәһе зарарлана)
**лейкопения** лейкопения (ҡанда лейкоциттарҙың кәмеүе)
**лейкоплакия** лейкоплакия (тел һәм ауыҙ эсе тиресәһендә аҡ таптар барлыҡҡа килеүе менән билдәләнгән рак алды ауырыуы)
**лейкоплáстырь** лейкопластырь (йәбешкес материал, ғәҙәттә бәй һалыу өсөн ҡулланыла)
**лейкопоэ́з (лейкогенез)** лейкопоэз (лейкоциттарҙың барлыҡҡа килеү процесы)
**лейкотоксин** лейкотоксин (лейкоциттарҙы зарарлаусы матдә)
**лейкоцит** лейкоцит (ҡандың аҡ күҙәнәге, бер нисә төрө бар: базофил, лимфоцит, моноцит, эозинофил һ. б.)
**лейкоцитóз** лейкоцитоз (периферик ҡанда лейкоциттарҙың норманан күберәк булыуы)
**лейкоэнцефалит** лейкоэнцефалит (баш мейеһенең нигеҙҙә аҡ матдәһе шешеүе)
**лейомиóма** лейомиома (шыма мускулдарҙан барлыҡҡа килгән ябай үтелешле шеш)
**лейшманиóз** лейшманиоз (лейшманийҙар йоғоуҙан килгән бер төркөм ауырыуҙар: *л. висце-*

*ральный* висцераль (эске ағзалар) лейшманиоз йәки калаазар); *л. кожный* тире лейшманиозы; лейшманийҙарҙы москиттар тарата)

**лейшмания** лейшмания (микроскопик ябай зат)

**лекарственный** дарыу (мәç., дарыу препараттары)

**лекарство** дарыу (*ҡара:* **средство лекарственное**)

**лекарствоведение** (ҡара: **фармация**)

**лекарь** лекарь (батша Россияһында врачты шулай атағандар)

**лентец широкий** киң таçма селәү (кеше эсәктәренә эйәләшеүсән иң оҙон (10 метрға тиклем етә) ялпаҡ паразит селәү)

**лентецы (ленточные черви)** таçма паразит селәүҙәр (цестодалар исемле паразит селәүҙәрҙең дөйөмләштерелгән исеме; *ҡара:* **цестоды)**

**лентиго** лентиго (ялпаҡ миңдең бер төрө)

**лепра (проказа)** лепра, махау ауырыуы (үҙенә бер төрлө микроб йоҡҡандан килгән дауамлы етди инфекцион ауырыу)

**лепрозный** лепра, лепроз (мәç., лепроз ауырыулы)

**лепрозорий** лепрозорий (махау менән ауырыусылар өсөн махсус дауалау учреждениеһы)

**лепрология** лепрология (инфекцион ауырыуҙарҙың махау ауырыуын, уны дауалау һәм иçкәртеү юлдарын өйрәнеүсе тармағы)

**лепрома** лепрома (махау ауырыуы булғанда барлыҡҡа килгән шеш)

**лепрофобия** лепрофобия (махау ауырыуына ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**лептоменингит** лептоменингит (мейенең йомшаҡ һәм үрмәксел шекәрәләренең шешеүе)

**лептопахименингит** лептопахименингит (менингиттың бер төрө: мейенең бөтә шекәрәләре шешкән була)

**лептоспира** лептоспира (спирохеталар рәтенә ингән бактерия, уның ҡайһы бер төрҙәре хайуандарҙа һәм кешелә ауырыу тыуҙыра)

**лептоспироз** лептоспироз (лептоспиралар йоғоуҙан килгән киçкен инфекцион ауырыу; төрҙәре: *л. безжелтушный* һарыһыҙ лептоспироз; *л. желтушный* һарылы лептоспироз һ. б.)

**летальность** леталлек (ауырыусылар араһында күҙәтелгән үлеү осраҡтарын билдәләй торған статистик күрһәткес, мәç, *л. больничная* больница леталлеге)

**летальный** леталь (үлеүгә бәйле)

**летаргия (летаргический сон)** летаргия, мәрткә китеү (йәшәү процестарының ҡырҡа түбәнәйеүе менән характерлы, бер нисә сәғәттән алып бер нисә көнгә тиклем һуҙылған патологик йоҡо, ул, мәçәлән, истерия булғанда күҙәтелә)

**лечебница** дауахана (ҡайһы бер дауалау учреждениелары шулай атала: *л. бальнеологическая* бальнеологик дауахана һ. б.

**лечебный** дауалау (мәç., дауалау эше)

**лечение** дауалау, дауаланыу (төрҙәре: *л. амбулаторное* амбулатор дауалау (сирле кешене өйөндә йәки амбулатория-поликлиника шарттарында дауалау); *л. больничное (стационарное)* боль-

ницала дауалау; *л. врачебное* врачлыҡ дауалауы; *л. комплексное* комплекслы дауалау (бер юлы төрлө дауа ҡулланыла); *л. консервативное* консерватив дауалау (хирургик операция ҡулланылмайынса); *л. курортное* курорт дауалауы; *л. лучевое* нурҙар менән дауалау (һүҙ рентген, радиактив нурҙар ҡулланыу хаҡында бара); *л. медикаментозное (лекарственное)* медикаментоз дауалау; *л. общеукрепляющее* (дөйөм) һаулыҡты нығытыу маҡсатында дауалау; *л. оперативное (хирургическое)* оператив (хирургик) дауалау; *л. паллиативное* паллиатив дауалау (сирленең хәлен ваҡытлыса яҡшыртҡан дауалау); *л. принудительное* мәжбүри дауалау (бындай дауалау психик ауырыу, хроник алкоголизм, венерик ауырыу, туберкулез булғанда ҡулланылырға мөмкин); *л. пробное* һынау маҡсатында дауалау (ауырыуҙы асыҡлау өсөн); *л. противовоспалительное* шешеүҙе ҡайтарыусы дауалау; *л. профилактическое (превентивное)* профилактик дауалау (ауырыуҙы булдырмау маҡсатында дауалау); *л. радикальное* радикаль дауалау (ауырыу сығанағын бөтөрөп дауалау, мәҫ., аппендэктомия); *л. санаторное* санаторий дауалауы; *л. санаторно-курортное* санаторий-курорт дауалауы; *л. седативное* седатив (тынысландырыусы) дауалау; *л. симптоматическое* симптоматик дауалау (ауырыу билдәләрен юҡ итеү маҡсатында дауалау, мәҫ., температураны төшөрөү һ. б.); *л. этиопатогенетическое* этиопатогенетик дауалау (ауырыуҙың сәбәбен бөтөрөү, үҫешен туҡтатыу маҡсатында дауалау); *л. этиотропное* этиотроп дауалау (ауырыуҙың сәбәбенә ҡаршы йүнәлтелгән дауалау)

**либи́до** либидо (енси әүәҫлектең булыуы)

**лигату́ра** лигатура (хирургик ярҙам күрһәткәндә ҡан тамырын йә башҡа көпшәле ағзаны ҡыҫып бәйләү)

**лигни́н** лигнин (ағастан яһалған мамыҡ)

**лизи́ны** лизиндар (микробтарҙы йәки ят күҙәнәктәрҙе тарҡата йә иретә торған антиесемдәр)

**ли́зис** лизис (1. ауырыуҙың кәмеүе менән бер юлы температураның да әкренләп төшә, нормалләшә барыуы; 2. лизин антиесеме тәьҫиренән ҡан күҙәнәктәренең, микробтарҙың тарҡалыуы, иреүе, мәҫ., микробтар лизисы)

**лизоци́м** лизоцим (микробтар һәм ят күҙәнәктәр үҫешен туҡтата торған иммунологик матдә)

**ли́квор** ликвор (арҡа мейеһе шыйыҡсаһы)

**ликворе́я** ликворея (гәҙәттә, умыртҡа бағанаһы тәңгәле имгәнгәндә, оҙаҡ ваҡыт арҡа мейеһе шыйыҡсаһының ағып юғалыуы)

**лиманотерапи́я** лиманотерапия (диңгеҙ һауаһы һәм ләме менән дауалау)

**ли́мфа** лимфа (аҡһымға бай физиологик шыйыҡса)

**лимфадени́т** лимфаденит (лимфатик төйөрҙәрҙең шешеүе, төрҙәре күп)

**лимфадено́з** лимфаденоз (лимфоид туҡыманың система характерында артыуы, үҫеше, мәҫ., лейкоз ауырыуы булғанда)

**лимфангии́т** лимфангиит (лимфа тамырҙарының шешеүе)

**лимфангио́ма** лимфангиома (лимфа тамырҙарынан үҫкән ябай шеш)

**лимфангиомио́ма** лимфангиомиома (лимфа тамырҙарынан үҫкән, эсендә шыма мускул епсәләре булған ябай шеш)

**лимфангиосарко́ма** лимфангиосаркома (лимфа тамырҙарынан сыҡҡан яман шештәрҙең дөйөмләштерелгән исеме)

**лимфангиэктази́я** лимфангиэктазия (лимфа тамырҙарының тороҡло рәүештә киңәйеүе)

**лимфеде́ма** лимфедема (лимфа ағымы туҡтауҙан килгән шешенеү)

**лимфогранулемато́з** лимфогранулематоз (1. ретикулездың бер төрө: лимфатик төйөрҙәрҙең ҙурайып шешеүе һ. б. үҙгәрештәр менән билдәләнгән дөйөм дауамлы ауырыу; 2. *л. паховый* сандыр лимфогрануломатозы (үҙенә бер төрлө вирус тыуҙырған венерик ауырыу)

**лимфолейко́з** лимфолейкоз (лимфатик күҙәнәктәрҙән барлыҡҡа килгән лейкоз; *ҡара:* **лейкоз**)

**лимфо́ма** лимфома (лимфоид туҡыманан сыҡҡан шештәрҙең дөйөм исеме)

**лимфообраще́ние** лимфа әйләнеше (йөрөшө)

**лимфопени́я** лимфопения (периферик ҡанда лимфоцит күҙәнәктәренең кәмеүе)

**лимфоре́я** лимфорея (лимфа шыйыҡсаһының тән өҫтөнә йә тәндең берәй ҡыуышлығына ағып сығыуы)

**лимфосарко́ма** лимфосаркома (йәш лимфоид күҙәнәктәрҙән сыҡҡан саркома шеше; *ҡара:* **саркома**)

**лимфоста́з** лимфостаз (лимфа тамырҙарында лимфа ағымының туҡтауы, һеҙөмтәлә шешенеү һ. б. үҙгәрештәр менән характерлы сирле күренеш)

**лимфоци́т** лимфоцит (ҡандың агранулоцит тибындағы аҡ күҙәнәк)

**лимфоцито́з** лимфоцитоз (периферик ҡанда лимфоциттарҙың артыуы)

**лингватуле́з** лингватулез (лингватула паразиты йоғоуҙан килгән инвазион ауырыу, паразит күкәйҙәре кешегә ашамлыҡ аша йоға)

**ли́нза** линза (оптик быяла; төрҙәре; *л. астигматическая* астигматизм линзаһы һ. б.)

**линиме́нт** линимент (шыйыҡ дауа майы)

**ли́ния** линия, һыҙыҡ (1. тән аша үткән шартлы һыҙыҡ, мәҫ., *л. среднеключичная* умрау уртаһы һыҙығы һ. б.); 2. *л. демаркационная* демаркацион һыҙыҡ (гангрена булғанда ағзаның үле туҡымаһын һау-сәләмәт ҡалғанынан айырған урын)

**липеми́я** липемия (ҡанда майҙың артыҡ булыуы)

**липидо́з** липидоз (липид матдәләренең алмашыныуы боҙолоуҙан килгән нәҫел ауырыуы)

**липи́ды** липидтар (майға оҡшаш матдәләрҙең дөйөм исеме)

**липобластóма** липобластома (май шеше)

**липогрануле́ма** липогранулема (1. дауамлы үтеүсе ябай шештәрҙең бер төрө; 2. *л. инъекционная* инъекцион липогранулема (тире аҫтына майлы дарыу индергән-

дән һуң барлыҡҡа килгән майлы шеш) һ. б.)

**липодистрофи́я** липодистрофия (ауырыу рәүештә тәндәге май ҡатламының артыуы йәки кәмеүе)

**липо́ид** липоид (майға оҡшаш матдә)

**липо́ма** липома (май туҡымаһынан барлыҡҡа килгән май шеше)

**липомато́з** липоматоз (май шештәренең күп һанда барлыҡҡа килеүе)

**липосарко́ма** липосаркома (май күҙәнәктәренән сыҡҡан саркома шеше)

**липури́я** липурия (май матдәләренең һейҙеккә сығыуы)

**листе́рии** листериялар (таяҡса рәүешендәге аэроб бактериялар)

**листерио́з** листериоз (листерии бактериялары йоғоуҙан килгән инфекцион ауырыу)

**листо́к нетрудоспособности (больничный лист)** эшкә яраҡһыҙлыҡ танытмаһы (ҡағыҙы)

**литре́йт** литреит (һейеү каналы көбөндәге биҙҙәрҙең шешеүе)

**ли́хен** лихен (бер төркөм тире ауырыуҙары, мәҫ., *л. красный плоский* ҡыҙыл ялпаҡ лихен һ. б.)

**лихениза́ция (лихенификация)** лихенизация (ауырыу һөҙөмтәһендә тиренең шешеп ҡалынайыуы, тире һырҙарының көсәйеүе)

**лихора́дка** биҙгәк тотоу, биҙгәк (1. организмдың, нигеҙҙә, температура күтәрелеү, өшөттөрөү, тирләтеү һ. б. күренештәр менән характерлы һаҡланыу-яраҡлашыу реакцияһы; 2. бер төркөм ауырыуҙар: *л. гемоглобинурийная* гемоглобинурия биҙгәге (тапма ауырыуының ҡатмарлашыуы: эритроциттарҙың тарҡалыуы менән характерлы); *л. геморрагическая* геморрагик биҙгәк (биҙгәк тотоу, тәнгә ҡан һауыу, көслө ауыртыу һ. б. үҙгәрештәр менән үтеүсе үҙенә бер төрлө вирустар йоғоуҙан килгән ауырыу); *л. денге* денге биҙгәге (үҙенә бер төрлө вирус йоғоуҙан килгән инфекцион ауырыу (тропик һәм субтропик илдәрҙә күҙәтелә); *л. жёлтая* һары биҙгәк (үҙенә бер төрлө вирус йоҡҡандан килгән етди инфекцион ауырыу, беҙҙең илдә күҙәтелмәй; *л. марсельская* Марсель биҙгәге (үҙенә бер төрлө риккетсия микроорганизмы йоғоуҙан килгән киҫкен инфекцион ауырыу); *л. моноцитарная (эозинофильная)* моноцитар биҙгәк (үҙенә бер төрлө вирус йоғоуҙан килгән киҫкен инфекцион ауырыу); *л. окопная (траншейная)* окоп биҙгәге (үҙенә бер төрлө риккетсия микроорганизмы йоғоуҙан килгән киҫкен инфекцион ауырыу); *л. скарлатиноподобная дальневосточная* Алыҫ Көнсығыш яҡ скарлатина һымаҡ биҙгәк (псевдотуберкулез ауырыуының бер төрө; *ҡара:* **псевдотуберкулез**); *л. флеботомная (мокоитная)* флеботом биҙгәк (үҙенә бер төрлө вирус йоҡҡандан килгән киҫкен инфекцион ауырыу, уны москиттар тарата)

**лицо́** бит, йөҙ (*л. Гиппократово* Гиппократ йөҙө (үлем ғазабын кисергән кешенең йөҙө); *л. изнуренное* йонсоған йөҙ; *л. львиное* арыҫлан йөҙө (махау ауырыуы булғанда биткә лепрома шештәре сығыуҙан була); *л. одутловатое* бурҫлаҡ йөҙ; *л. отечное* шешенгән йөҙ; *л. пры-*

*щеватое* һытҡылы йөҙ; *л. рябое* шаҙра (йәки быжыр) йөҙ һ. б.)

**личи́нка** ҡарышлауыҡ, ҡорт (мәҫ., гельминт (йәки паразит селәү) ҡарышлауығы, себен ҡорто)

**лиша́й** тимерәү (төрлө сәбәптәрҙән килгән бер нисә тире ауырыуының дөйөм исеме; төрҙәре: *л. опоясывающий (ҡара:* **герпес опоясывающий**); *л. отрубевидный (разноцветный)* ваҡ ҡауаҡлы тимерәү (үҙенә бер төрлө бәшмәк йоҡҡандан килгән йоғошло тире ауырыуы); *л. розовый* ҡыҙыл тимерәү (алһыу төҫтәге таптар сығыу менән характерлы йоғошһоҙ тире ауырыуы); *л. стригущий* ҡырҡылсан тимерәү *(ҡара:* **трихофития**); *л. чешуйчатый* тәңкәле тимерәү *(ҡара:* **псориаз**) һ. б.)

**лоб** маңлай

**лобо́к** түмһәкәй, ҡашаға (тышҡы енес ағзалары өлкәһенең йөн ҡаплаған ере)

**логоневроз** логоневроз (невроз һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән тотлоғоу)

**логопати́я** логопатия (телмәр боҙолоуҙың бөтә төрҙәренең дөйөм исеме)

**логопеди́я** логопедия (педагогиканың телмәр боҙолоуын һәм быны коррекциялау юлдарын өйрәнеүсе тармағы)

**логоре́я** логорея (сир рәүешендә туҡтауһыҙ, күп һәм тиҙ һөйләү)

**лоды́жка** бәкәл

**ло́коть** терһәк

**локтево́й** терһәк

**ломо́та** һыҙлау, һыҙланыу

**лонге́та** лонгета (иммобилизациялау өсөн ҡулланылыусы гипс йәки тиҙ ҡатыусы пластмасса бәйе)

**лопа́тка** ҡалаҡ һөйәге

**лордо́з** лордоз (умыртҡа бағанаһының алға табан сығыбыраҡ тороуы; төрҙәре: *л. патологический* патологик лордоз (ниндәй ҙә булһа ауырыуҙан килгән лордоз); *л. физиологический* физиологик лордоз (тәбиғи күренеш, мәҫ., *л. поясничный* бил лордозы, *л. шейный* муйын лордозы)

**лордосколио́з** лордосколиоз (умыртҡа бағанаһында бер юлы лордоз һәм сколиоздың булыуы; *ҡара:* **сколиоз**)

**лорзаболевания** *(разг.)* лор ауырыуҙары (ҡолаҡ, танау, тамаҡ һәм ҡурылдай ауырыуҙары)

**лоску́т** (в хирургии) ялғау (күсереү операция өсөн ҡулланыла торған туҡыма киҫәге, мәҫ., тире ялғауы)

**лоха́нка по́чечная** бөйөр лаҡаны (ялғашы)

**ло́хии** лохиялар (бәпесләгәндән һуң килгән ҡанлы бүлендек)

**лу́ковица** *(анат.)* тамырса (мәҫ., *л. вкусовая* тәм тойоу тамырсаһы)

**лунати́зм** *ҡара:* **сомнамбулизм**

**луна́тик** илерек, иләүһерәп йөрөүсе *(ҡара:* **сомнамбулизм**)

**лу́нка** *(анат.)* соҡорса, мәҫ., *л. зуба* теш соҡорсаһы, *л. ногтя* тырнаҡ төбө ағы һ. б.)

**лучезапя́стный** терһәк ҡушарышаушаҡ (мәҫ., быуыны)

**лучи́** нурҙар (мәҫ., *л. рентгеновские* рентген нурҙары; *л. рентгеновские жесткие* көслө рентген нурҙары; *л. рентгеновские* мягкие (Букки) йомшаҡ (дозаһы аҙ булған) рентген нурҙары; *л. ультрафиолетовые* ультракөрән нурҙар (спектрҙың күҙгә күренмәгән өлөшөндәге нурҙар) һ. б.)

**лысый** *кара:* **плешивый**

**люмбáго** люмбаго (бил тәңгәлендә киҫкен ауыртыу өйәнәге, күпселектә бил тәңгәле умыртҡа-ара дискылары (кимерсәктәре) остеохондрозы һөҙөмтәһендә була; *кара:* **остеохондроз)**

**люмбалгúя** люмбалгия (бил-һигеҙгүҙ өлкәһендәге дауамлы ауыртыуҙарҙың дөйөм исеме)

**люмбáльный** люмбаль (бил өлкәһенә, шул иҫәптән бил тәңгәле умыртҡалыҡ бағанаһына ҡағылышлы)

**люпозóрий** люпозорий (тире туберкулезын дауалау учреждениеһы, 1950 йылға тиклем булды)

**люминесцéнция** люминесценция (теге йәки был есемдең ниндәйҙер энергия сығанағынан тоҡанып китеп, үҙ сиратында яҡтылыҡ бүлеүе)

**люпóма** люпома (туберкулез сөсө ауырыуына хас төйөрсә рәүешендәге анатомик үҙгәреш)

**лямблиóз** лямблиоз (эсәк лямблийы йоғоуҙан килгән эсәк һәм үт юлдары ауырыуы)

**ля́мблия (кишечная)** эсәк лямблийы (лямблиоз тыуҙырыусы бер күҙәнәкле микроскопик хайуан)

**ля́жка** *(разг.)* таҡым (бот ите)

**ля́мки носилочные** носилка бауҙары

# М

**мáгия** магия (сихыр, арбау)

**магнитотерапúя** магнитотерапия (физиотерапияның бер төрө: магнит майҙансығы менән дауалау)

**магнúты медицинские** медицина магниттары (тәнгә эләккән тимер, ҡорос ярсыҡтарын сығарыу өсөн прибор, мәҫ., күҙ магниты)

**мазóк** мазок (ғәҙәттә, тикшереү маҡсатында алынған ҡан йәки бүлендек, физиологик шыйыҡса, мәҫ., ҡан мазогы, ҡаҡырыҡ мазогы һ. б.)

**мазохúзм** мазохизм (сексуаль боҙоҡлоҡ, оргазм булдырыу өсөн партнер тарафынан кеше үҙен йәберләү йәки ауырттырыу алырға тейеш)

**мазь** мазь, дауа майы, май (дарыу ҡатыштырылған май йәки вазелин, мәҫ., күҙ мазы, көкөрт мазы һ. б.)

**макрогематурúя** макрогематурия (гематурияның төрө: һейҙек менән күҙгә күренерлек күләмдә ҡан юғалтыу)

**макроглоссúя** макроглоссия (телдең лимфа тамырҙары киңәйеүенән йәки мускулдары үҫеүенән ҙурайыуы)

**макродактилúя** макродактилия (тыумыштан бармаҡтарҙың артыҡ оҙон булыуы)

**макроорганúзм** макроорганизм (микроскоп-лупаһыҙ ҙа яҡшы күренә торған организм)

**макроскопúческий** макроскопик (микроскоп-лупаһыҙ ҙа яҡшы күренгән, мәҫ., макроскопик препарат)

**макроцефалúя** макроцефалия (баштың ҙур булыуы)

**макроэлемéнты пищевы́е** ашамлыҡ макроэлементтары/ашамлыҡта булып, тәүлегенә 1 грам-

ға яҡын кәрәк булған матдәләр (натрий, калий, кальций, магний, фосфор тоҙҙары һ. б.)

**маку́шка** *(разг.)* баш түбәһе, түбә

**малигниза́ция** малигнизация (нормаль күҙәнәктәрҙең йәки ябай шештәрҙең яман шеш формаһын алыуы)

**маллеиниза́ция** маллеинизация (маңҡа ауырыуын билдәләү өсөн ҡулланыла торған аллергик һынау)

**малобе́рцо́вый(ая)** сираҡ ҡушары (мәҫ., *кость малоберцовая* сираҡ ҡушары һөйәге́)

**малокро́вие** аҙ ҡанлылыҡ (ҡара: **анемия)**

**маляри́я** тапма ауырыуы (тапма плазмодийы тыуҙырған биҙгәкле ауырыу; төрҙәре: *м. трехдневная* өс көнлөк тапма ауырыуы; *м. тропическая* тропик тапма ауырыуы; *м. четырехдневная* дүрт көнлөк тапма ауырыуы)

**маммографи́я** маммография (имсәк биҙенә рентгенография яһау)

**мандре́н** мандрен (көпшәле инструментты, мәҫ., инъекция энәһен таҙартыу өсөн махсус сыбыҡ)

**маникю́р** маникюр (ҡул бармаҡтарын махсус тәрбиәләү, тырнаҡтарға лак һөртөү һ. б.)

**ма́ния** мания (1. *ҡара:* **синдром маниакальный;** 2. бер нисә психико-патологик күренештәрҙең дөйөмләштерелгән исеме; төрҙәре: *м. величия* бөйөклөлөк манияһы; *м. преследования* эҙәрләү манияһы һ. б.)

**мара́зм** маразм (йәшәү процестары ныҡ һүлпәнәйеү менән үтеүсе организмдың әлһерәүе, мәҫ., *м. психический* психик маразм; *м. старческий* ҡартлыҡ маразмы)

**марья́ник гребе́нчатый** күгәрсен бүрке (йөрәк дарыуы бирә торған үлән)

**ма́ска** 1. битлек, маска, мәҫ., *м. защитная* һаҡлағыс битлек; 2. косметик сара, мәҫ., шифалы үлән маскаһы

**ма́сло** май, мәҫ., *м. камфорное* камфара майы (йөрәк дарыуы); *м. касторовое* касторка (кенә) майы (нигеҙҙә, эс ҡатыуҙан ҡулланылыусы май); *м. облепиховое* һырғанаҡ майы (ашҡаҙан-эсәк һәм тире ауырыуҙарынан дауа бирә)

**масса́ж** массаж (ҡул йәки махсус аппарат ярҙамында механик тәьҫир комплексы; төрҙәре: *м. гигиенический* гигиеник массаж; *м. лечебный* дауалау массажы; *м. сердца* йөрәк массажы; *м. сердца непрямой (закрытый, наружный)* йөрәккә тыштан массаж; *м. сердца прямой (открытый)* йөрәккә тура массаж (хирург күкрәк ситлеген асып йөрәккә йә йөрәк ҡабына туранан-тура массаж яһай)

**массажи́рование** массажлау, массаж яһау

**масти́т** мастит (имсәк биҙенең шешеүе)

**мастодини́я** мастодиния (имсәк биҙендәге ауыртыу)

**мастоиди́т** мастоидит (сикә һөйәгендәге ҡолаҡ арты үҫентеһенең шешеүе)

**мастопати́я** мастопатия (гормональ регуляция боҙолоуҙан килгән имсәк биҙенең сирле үҙгәреше)

**мастоцито́з** мастоцитоз (төрлө ағза-туҡымала лаброцит исемле ретикуло-эндотелиаль күҙәнәктәренең ныҡ артыуы менән характерлы ауырыу)

**мастурба́ция** *ҡара:* **онанизм**
**матери́нство** әсәлек, әсә булыу
**ма́тка** *(анат.)* аналыҡ
**ма́точка** *(анат.)* аналыҡса (эске ҡолаҡтың һәм проста́та биҙенең ҡыуыҡсаһы)
**ма́трица ногтевая** тырнаҡ шәбеһе
**мать-и-ма́чеха** үгәй-инә үләне, үгәй әсә япрағы (нигеҙҙә ҡаҡырҡыс дауа бирә торған үлән)
**мацера́ция** *(мед.)* мацерация (туҡымаларҙың сирле рәүештә йомшарыуы, һыуланыуы, мәҫ., тире мацерацияһы)
**маши́на** машина (мәҫ., *м. санитарная* санитария машинаһы; *м. скорой помощи* ашығыс ярҙам машинаһы)
**мегакариоци́т** мегакариоцит (ҡыҙыл кимектәге эре күҙәнәк, ул бүленеүҙән тромбоциттар барлыҡҡа килә)
**мегако́лон** мегаколон (туҡ эсәктең киңәйеүе һәм ҡалынайыуы менән характерлы тыумыштан килгән физик кәмселек)
**мёд** бал (халыҡ медицинаһында киң ҡулланылыусы татлы ашамлыҡ)
**медвытрезвитель** медицина айныҡҡысы
**медиа́льный** медиаль (урталыҡ яҡ, мәҫ., ҡулдың медиаль яғы)
**медиастени́т** медиастенит (үпкәләр арауығындағы тоташтырғыс туҡыманың шешеүе)
**ме́дик** медик (медицина хеҙмәткәре)
**медикаме́нт** медикамент (ҡулланыу өсөн әҙер дарыу)
**медикаментозный** медикаментоз (мәҫ., медикаментоз дауалау)
**мединститу́т** медицина институты
**медицина** медицина (кеше һаулығын һаҡлауға, ауырыуҙарҙан һаҡланыуға, дауалауға йүнәлтелгән фән һәм практик эшмәкәрлек системаһы; төрҙәре: *м. авиационная* авиация медицинаһы; *м. военная* хәрби медицина; *м. географическая* географик медицина (медицина һәм географияның теге йәки был урында тәбиғәт һәм социаль факторҙарҙың кеше һаулығына яһаған йоғонтоһон һәм күҙәтелгән ауырыуҙарҙы өйрәнеүсе тармағы); *м. космическая* космос медицинаһы; *м. советская* совет медицинаһы һ. б.)
**медосмо́тр (медици́нский осмо́тр)** медосмотр (медицина осмотры)
**медперсона́л (медицинский персонал)** медперсонал (медицина персоналы)
**медпу́нкт (медици́нский пункт)** медпункт (медицина пункты)
**медрабо́тник (медицинский работник)** медработник (медицина хеҙмәткәре)
**медсанба́т (медико-санитарный батальон)** медсанбат (медицина-санитария батальоны)
**медсанча́сть (медико-санитарная часть)** медсанчасть (медицина-санитария часы,— нигеҙҙә, эре предприятиелар эргәһендә булдырылған дауалау-профилактика учреждениеһы)
**медсестра́ (медицинская сестра)** медсестра, сестра, туташ (мәҫ., *м. главная* баш медсестра; *м. младшая* кесе медсестра; *м. операционная* операцион медсестра; *м. палатная* палата медсестраһы; *м. патронажная* патронаж медсестраһы *(ҡара:* **патронаж**); *м. перевязочная* бәй һалыусы медсестра; *м. старшая* өлкән медсестра һ. б.)
**медучи́лище (медици́нское учи́лище)** медучилище (урта белемле

медицина хеҙмәткәрҙәрен әҙерләүсе уҡыу йорто)

**мезаденит** мезаденит (ҡорһаҡтың ҡатлы шекәрәһендәге лимфатик төйөрҙәрҙең шешеүе)

**мезаортит** мезаортит (аорта көбө уртансы ҡатламының шешеүе)

**мезартериит** мезартериит (артерия көбө уртансы ҡатламының шешеүе)

**мезентерит** мезентерит (ҡатлы шекәрә шешеүе)

**мезотимпанит** мезотимпанит (урта ҡолаҡ ҡыуышлығы шешеүе)

**мейбомит** мейбомит (күҙ ҡабағы биҙҙәренең шешеүе)

**меланодермия** меланодермия (тирелә меланин пигментының артыҡ тупланыуы)

**меланодермия** меланодермия (тирелә булған меланоз)

**меланоз** меланоз (ҡайһы бер эске ауырыуҙар һөҙөмтәһендә тирелә меланин күп тупланғанлыҡтан, тотош бөтә тәндең йәки тән өлөшөнөң көрән-ҡара төҫ алыуы; төрҙәре: *м. профессиональный* профессиональ меланоз һ. б.)

**меланома** меланома (меланин эшләп сығарған туҡымала барлыҡҡа килгән яман шеш)

**меланосаркома** меланосаркома (меланин эшләп сығарған туҡымала барлыҡҡа килгән саркома; *ҡара:* **саркома**)

**меланоцит** меланоцит (меланин эшләп сығарыусы күҙәнәк)

**меланурия** меланурия (ғәҙәттә, меланома булғанда меланиндың һейҙек менән бүленеүе)

**меланхолик** меланхолик (1. кәйеф төшөүгә, күңелһеҙлеккә бирелеүсән кеше; 2. *ҡара:* **темперамент меланхолический**)

**меланхолия** *ҡара:* **депрессия**

**мелена** мелена (ҡыҙыл үңәс, ашҡаҙан һәм эсәктәрҙең өҫкө өлөшөнә ҡан һауыу һөҙөмтәһендә тиҙәктең дегет рәүешендә ҡара төҫ алыуы)

**мелиоидоз** мелиоидоз (йылы яҡтарҙа күҙәтелгән инфекцион ауырыу)

**мембрана** мембрана (яра, шекәрә, мәҫ., күҙәнәк мембранаһы)

**мензес** мензес (*ҡара:* **менструация**)

**менингизм** менингизм (мейе шекәрәләренең шешмәүенә ҡарамаҫтан, ниндәй ҙә булһа ағыуланыу, имгәнеү һ. б. сәбәптәр арҡаһында менингит билдәләренең булыуы)

**менингит** менингит (мейе шекәрәләренең шешеүе; төрҙәре: *м. вирусный* вирус менингиты; *м. гнойный* эренле менингит; *м. отогенный* отоген менингит (ҡолаҡ шешеүенән килгән менингит); *м. эпидемический* эпидемик менингит (менингококк бактерияһы йоғоуҙан килгән менингит; *м. туберкулёзный* туберкулез менингиты һ. б.)

**менингококк** менингококк (эпидемик менингит тыуҙырған диплококк микробтарҙың бер төрө)

**менингококковый** менингококк (мәҫ., менингококк менингиты)

**менингомиелит** менингомиелит (арҡа мейеһе һәм уның шекәрәләренең бер юлы шешеүе)

**менингоцеле** менингоцеле (мейе бүҫере)

**менингоэнцефалит** менингоэнцефалит (баш мейенең һәм уның шекәрәләренең бер юлы шешеүе)

**менингоэнцефаломиелит** менингоэнцефаломиелит (баш, арҡа ме-

йеһе шекәрәләренең һәм матдәләренең бер юлы шешеүе)

**мени́ск** мениск (ярым айға оҡшаш ялпаҡ кимерсәк, ' мәҫ., быуын менискыһы)

**менопа́уза** менопауза (күрем килеүе туҡталғандан һуң, ырыуҙан ҡалыу дәүере)

**меноррагúя** *ҡара:* **гиперменория**

**менструа́льный** менструаль (күрем килеүгә ҡағылышлы)

**менструа́ция (месячные)** менструация, күрем, күрем килеү (цикл рәүешендә аналыҡтан ҡанлы бүлендек килеү)

**мероприя́тия** *(мед.)* саралар (мәҫ., профилактик саралар)

**мертворожда́емость** үле тыуыусанлыҡ (үле тыуған балаларҙың иҫәбен билдәләгән статистик күрһәткес)

**мертворождённый** үле тыуған

**ме́стный** *(мед.)* сикләнгән, урынлы (мәҫ., сикләнгән шешеү)

**ме́сячные** *ҡара:* **менструа́ция**

**металлергúя** металлергия (аллергияның бер төрө: төп матдәнән тыш тағы ла бер нисә матдәгә ҡарата барлыҡҡа килгән аллергик реакция)

**метаболúзм** метаболизм *(ҡара:* **обмен веществ)**

**метаболúты** метаболиттар (организмда барған матдәләр алмашыныуынан ҡалған берләшмәләр)

**металло́з** металлоз (ағза-туҡымаларға металл туҙаны ҡуныуҙан килгән ауырыу, мәҫ., күҙ металлозы, үпкә металлозы һ. б.)

**метаплазúя** метаплазия (бер туҡыманың икенсе туҡымаға әүерелеүе)

**метаста́з** метастаз (1. *ҡара:* **диссеминация**; 2. диссеминация һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән ауырыу усағы)

**метастазúрование** метастазлау *(ҡара:* **диссеминация)**

**мета́ться в бреду** иләүһерәп һаташыу (йоҡлағанда)

**мета́физ** метафиз (көпшәле һөйәктең урта өлөшө)

**метафизúт** метафизит (көпшәле һөйәктең метафиз өлөшөнөң шешеүе)

**метацерка́рий** метацеркарий (ҡайһы бер трематод исемле паразит селәүҙәрҙең ҡарышлауыҡ дәүере)

**метгемоглобúн** метгемоглобин (ағыулы матдәләр, шул иҫәптән ҡайһы бер дарыу препараттары зарарлығынан гемоглобиндың физиологик функцияһын (туҡымаларҙы кислород менән тәьмин итеү) юғалтҡан формаһы; шунлыҡтан туҡымалар етерлек күләмдә кислород менән байытылмай).

**метгемоглобинемúя** метгемоглобинемия (метгемоглобулиндың ҡанда булыуы)

**метгемоглобинурúя** метгемоглобинурия (метгемоглобиндың һейҙеккә күсеүе)

**метеопатúя** метеопатия (ғәҙәти климат шарттары үҙгәрешенең һаулыҡҡа тәьҫир итеүе)

**метеопатоло́гия** метеопатология (климатопатологияның көн үҙгәреүҙән килгән һаулыҡ ҡаҡшауын өйрәнеүсе тармағы)

**метеорúзм** метеоризм (эсәктәрҙә газдарҙың күбәйеүе һөҙөмтәһендә эс күбеү)

**метод** метод, ысул (мәҫ., дауалау методы һ. б.)

**метрúт** метрит (аналыҡ шешеүе)

**метробленноре́я** метробленнорея (бәпесләгәндән һуң аналыҡта гонорея башланыуы)

**метроно́м** метроном (ҡыҫҡа ритмик сигнал биреүсе аппарат, дауалау физкультураһы һәм механотерапия үткәргәндә ҡулланыла)

**метроррагúя** метроррагия (күремдән тыш ваҡытта аналыҡтан ҡан килеү)

**метросальпингúт** метросальпингит (аналыҡ һәм аналыҡ торбаларының шешеүе)

**метроэндометрúт** метроэндометрит (аналыҡтың тиресә һәм мускулдар ҡатламының бер юлы шешеүе)

**механокардиографúя** механокардиография (гемодинамиканы тикшереү ысулдарының береһе; *ҡара:* **гемодинамика**)

**механотерапúя** механотерапия (махсус дауалау аппараттары ярҙамында үткәрелгән дауалау физкультураһы)

**мешки под глазами** күҙ төбө шешмәктәре

**мешок** *(анат.)* ҡап (мәҫ., *м. грыжевой* бүҫер ҡабы (ҡорһаҡ шекәрәһенең бүҫер эсендәге нәмә ингәнлектән тумпайып сыҡҡан өлөшө); *м. плевральный* плевраль ҡап (плевраль ҡыуышлыҡ; *ҡара:* **плевра**) һ. б.

**миа́зы** миаздар (ҡайһы бер себен төрҙәренең яра-йәрәхәткә һалған күкәйҙәренән сыҡҡан ҡарышлауыҡтар арҡаһында барлыҡҡа килгән ауырыуҙар, мәҫ., күҙ миазы)

**миалгúя** миалгия (мускулдар ауыртыуы)

**миастенúя** миастения (мускулдар хәлһеҙлеге һәм нервы системаһының ҡаҡшауы менән үтеүсе ауырыу)

**миатонúя (врожденная)** миатония (тыумыштан килгән нервы системаһы ауырыуы, мускулдар хәлһеҙлеге, рефлекстарҙың түбәнәйеүе һ. б. менән характерлы)

**мигре́нь** мигрень (айырыуса баштың ярты яғының ауыртыуы менән билдәләнгән нервы ауырыуы)

**мидриа́з** мидриаз (күҙ ҡараһының киңәйеүе)

**миелúт** миелит (арҡа мейеһенең шешеүе)

**миелобласто́з** миелобластоз (миелобласт исемле күҙәнәҡтәр ныҡ күбәйеүе менән характерлы лейкоз; *ҡара:* **лейкоз)**

**миелогра́мма** миелограмма (ҡыҙыл кимек матдәһе пунктаты тураһындағы мәғлүмәт)

**миелографúя** миелография (арҡа мейеһе каналына контраст матдә индереп үткәрелгән рентгенография)

**миелолейко́з (миелоз)** миелолейкоз (миелоцит исемле өлгөрмәгән лейкоциттарҙың ныҡ күбәйеүе менән характерлы лейкоз)

**миело́ма (миеломато́з)**; *ҡара:* **болезнь миеломная**

**миеломенингоце́ле** миеломенингоцеле (арҡа мейеһе бүҫере)

**миелопатúя** миелопатия (арҡа мейеһенең бер төркөм специфик булмаған ауырыуҙарының дөйөм исеме)

**мизúнец** сәтәкәй (сәнгәсәй, бәпес) бармаҡ (иң бәләкәй бармаҡ)

**микúды** микидалар (бәшмәк ауырыуы булғанда тәндә барлыҡҡа килгән аллергик сабыртма)

**микобакте́рия** микобактерия (кислота тәьҫиренә бирешмәй торған таяҡса бактерия, мәҫ., *м. туберкулезная* туберкулез микобактерияһы)

**мико́з** мико́з (паразит бәшмәктәр

йоғоуҙан килгән кеше һәм хайуандар ауырыуҙарының дөйөм исеме, төрҙәре: *м. глубокий (висцеральный)* тәрән (висцераль) микоз (эске ағзаларҙы зарарлау менән характерлы бәшмәк ауырыуы); *м. стоп* аяҡ башы микозы)

**микология медицинская** медицина микологияһы (медицинаның кеше өсөн зарарлы булған паразит бәшмәктәрҙе өйрәнеүсе тармағы)

**микоплазмоз** микоплазмоз (микоплазма исемле микроорганизм йоғоуҙан килгән ауырыуҙарҙың дөйөм исеме)

**микотоксикоз** микотоксикоз (организмға микотоксиндар эләгеүҙән килгән ауырыуҙарҙың дөйөм исеме)

**микотоксины** микотоксиндар (микроскопик бәшмәктәр бүлеп сығарған ағыуҙар, мәҫ., арыш атаһы микотоксины)

**микроанализ** микроанализ (аҙ күләмдәге матдәләр ҡатнашлығында яһалған лаборатор тикшереү)

**микроб** микроб (*ҡара:* **микроорганизм**)

**микробиолог** микробиолог (микробиология белгесе)

**микробиологический** микробиология, микробиологик (мәҫ., микробиологик тикшеренеү, микробиология белгесе)

**микробиология** микробиология (микроорганизмдар хаҡындағы фән; төрҙәре: *м. клиническая* клиник микробиология; *м. медицинская* медицина микробиологияһы; *м. санитарная* санитария микробиологияһы һ. б.)

**микрогематурия** микрогематурия (һейҙектә булған ҡанды тик микроскоп аша ғына билдәләп була)

**микроинсульт** микроинсульт (баш мейелә күҙәтелеүсән ваҡ сығанаҡлы инсульт)

**микроинфаркт миокарда** йөрәк инфарктының бер төрө; *ҡара:* **инфаркт миокарда мелкоочаговый**

**микроклизма** микроклизма (аҙ күләмдәге клизма, мәҫ., арт юлға 1—2 балғалаҡ глицерин ебәреү)

**микроклимат** микроклимат (1. ҙур булмаған территорияла климат үҙенсәлеге; 2. был термин шулай уҡ бүлмә-биналарҙа һауа температураһын, дымлылығын аңлатыу өсөн дә ҡулланыла, мәҫ., торлаҡ микроклиматы)

**микрококк** микрококк (төркөм рәүешендә урынлашҡан кокк бактерияһы)

**микролит** микролит (организмда барлыҡҡа килгән ваҡ таш)

**микролитиаз** микролитиаз (организмда күп һанда микролиттар барлыҡҡа килеүе)

**микронекроз** микронекроз (микроскопик күләмдәге некроз; *ҡара:* **некроз**)

**микрооперация** микрооперация (бер күҙәнәктән торған организмға йә күп күҙәнәкле организмдың берәй айырым күҙәнәгенә яһала торған операция)

**микроорганизм** микроорганизм (тик микроскоп аша күренә торған ябай хайуан йәки үҫемлек организмы: бактерия, риккетсия һ. б.)

**микроперфорация** микроперфорация (ҡыуышлы ағза көбөнөң нөктә рәүешендә үтәләй тишелеүе, мәҫ., ашҡаҙан микроперфорацияһы)

**микропипетка** микропипетка (аҙ

күләмдә шыйыҡса алыу өсөн ҡулланылған пипетка)

**микроско́п** микроскоп (ябай күҙгә күренмәгән ваҡ объекттарҙы тикшерреү өсөн оптик прибор төрҙәре: *м. бинокулярный* бинокуляр микроскоп (бер юлы ике күҙ менән ҡарау өсөн микроскоп); *м. операционный* операцион микроскоп; *м. электронный* электрон микроскоп (үтә ваҡ объектты, мәҫ., вирустарҙы ҡарау өсөн микроскоп)

**микроскопи́ческий** микроскопия, микроскопик (мәҫ., микроскопик зат һ. б.)

**микроскопи́я** микроскопия (микроскоп аша тикшереү)

**микроспори́я** микроспория (микроспорон бәшмәге йоҡҡандан килгән сәс, тирене зарарлаусы бәшмәк ауырыуы)

**микротра́вма** микройәрәхәт

**микрофизиоло́гия** микрофизиология (физиологияның тере күҙәнәктә барған тереклекте өйрәнеүсе тармағы)

**микрофло́ра** микрофлора (1. эволюция барышында теге йәки был хайуан һәм үҫемлектә әйәләшкән төрлө микроорганизмдар берләшмәһе, мәҫ., кеше микрофлораһы, 2. берәй объектта, тән ҡыуышлығында, ярала һ. б. ерҙә булған микроорганизмдар берләшмәһе)

**микрофтальми́я** микрофтальмия (бер йәки ике күҙҙең дә күҙ алмаһының үтә бәләкәй булыуы)

**микрохи́мия** микрохимия (үтә бәләкәй күләмдәге матдәләрҙе химик тикшереү)

**микрохирурги́я** микрохирургия (оптик приборҙар һәм махсус инструмент ҡулланып ваҡ анатомик объекттарға операция яһау, мәҫ., күҙ микрохирургияһы)

**микроцефали́я** микроцефалия (баш, баш мейеһенең үтә бәләкәй булыуы, быңдай осраҡта гәҙәттә кеше аҡыл яғынан камил булмай)

**микроэлеме́нты** микроэлементтар (организм өсөн үтә аҙ миҡдарҙа (1 : 100000 һәм бынан да түбәнерәк концентрацияла булған химик элементтар: алюминий, кобальт һ. б.; улар гормондар, ферменттар, витаминдар составына инеп, матдәләр алмашыныуында мөһим роль уйнайҙар)

**микрурги́я** *ҡара:* **микрохирургия**

**микседе́ма** микседема (ҡалҡан биҙенең гормонды аҙ эшләп сығарыуынан килгән дөйөм ауырыу)

**миксо́ма** миксома (лайлалы туҡыманан торған ябай шеш)

**миксосарко́ма** миксосаркома (лайлалы туҡыманан сыҡҡан саркома шеше; *ҡара:* **саркома)**

**миксту́ра** микстура (төрлө дарыу матдәләре ҡушып яһалған шыйыҡ дарыу)

**ми́ллиум** миллиум *(ҡара:* **угри белые)**

**милосердие** шәфҡәтлелек, мәрхәмәтлелек, рәхимлелек, аяусанлыҡ

**ми́мика** мимика (1. йөҙ мускулдарының кәйеф-хискә бәйләнешле хәрәкәтләнеүе; 2. йөҙ мускулдары хәрәкәте менән тойғо-кисереште аңлата алыу оҫталығы)

**минда́лины** миндалиналар (лимфоид туҡыма тупланмаһы, мәҫ., *м. глоточная* тамаҡ миндалинаһы; *м. нёбная* аңҡау миндалинаһы һ. б.)

**минералокортико́стероиды** минералокортикостероидтар (бөйөр

өҫтә биҙе эшләп сығарған бер төркөм гормондар; ҡайһылары дауалау өсөн ҡулланыла)

**минера́льный** минераль (мәҫ., минераль (йәки шифалы) һыу)

**министе́рство** министерство (мәҫ., *м. здравоохранения* һаулыҡ һаҡлау эштәре министерствоһы; *м. социального обеспечения* социаль тәьминәт министерствоһы һ. б.)

**миоглобули́н** миоглобулин (мускулдағы глобулин аҡһымы)

**миоглобинурия** миоглобинурия (миоглобин аҡһымының һейҙеккә сығыуы (ҡайһы бер ауырыу билдәһе)

**миографи́я** миография (мускулдар ҡыҫҡартылышын миограф приборы ярҙамында өйрәнеү)

**миодистрофи́я** миодистрофия (мускул туҡымаһының дистрофик үҙгәреүҙәренең дөйөм исеме)

**мио́з** миоз (күҙ ҡараһының тарайыуы)

**миози́т** миозит (арҡыры һыҙатлы (һөлдә) мускулдарының шешеүе)

**миока́рд** миокард (йөрәктең мускул ҡатламы)

**миокардиодистрофи́я** миокардиодистрофия (миокардтың дистрофик үҙгәрештәренең дөйөмләштерелгән исеме)

**миокарди́т** миокардит (миокардтың шешеүе)

**миокардо́з** миокардоз (ҡайһы бер дөйөм ауырыуҙан килгән миокардтың зарарланыуы)

**миокардиофибро́з** миокардиофиброз (йөрәк мускулдарында тоташтырғыс туҡыма усаҡтары барлыҡҡа килеү менән характерлы кардиосклероз; *ҡара:* **кардиосклероз)**

**миоклони́я** миоклония (ғәҙәттә, синергист мускулдарҙың тиҙ ритмда тартышыуы менән билдәләнгән гиперкинез)

**миолипо́ма** миолипома (мускул епсәләре ҡатыш липома шеше; *ҡара:* **липома)**

**мио́ма** миома (мускулдарҙан барлыҡҡа килгән ябай шеш)

**миометри́т** миометрит (аналыҡтың мускул ҡатламы шешеүе)

**миопати́я** миопатия (нәҫелдән килгән мускулдар хәлһеҙлеге һәм башҡа үҙгәрештәр менән характерлы дауамлы ауырыу)

**миопи́я** миопия *(ҡара:* **близору́кость)**

**миосарко́ма** миосаркома (мускул туҡымаһынан сыҡҡан саркома; *ҡара:* **саркома)**

**миосидеро́з** миосидероз (мускул туҡымаһында тимерле пигменттың тупланыуы)

**миосклеро́з** миосклероз (мускулдарҙа тоташтырғыс туҡыманың ныҡ үҫеш алыуы)

**миотендини́т** миотендинит (мускулдың тарамыш менән тоташҡан еренең шешеүе)

**мио́тик** миотик (күҙ ҡараһын тарайтыусы дарыу)

**миотони́я** миотония (ауырыу рәүешендә мускулдарҙың ныҡ ҡыҫҡарылышы); *м. врожденная* тыумыштан килгән миотония (нәҫел ауырыуы)

**миоэндокарди́т** миоэндокардит (йөрәктең мускул һәм эндокард ҡатламдарының бер юлы шешеүе; *ҡара:* **эндокард)**

**мирингит** мирингит (ҡолаҡ (барабаны) ярыһының шешеүе)

**митра́льный** митраль (йөрәктең ике япраҡлы клапанына ҡағылышлы)

**младе́нчество** балалыҡ, сабыйлыҡ

**мнемодермия** мнемодермия (уйланыу-шикләнеүҙән килгән тән ҡысытыуы, мәҫ., кеше ҡан эскес бөжәктәрҙе хәтерләй һәм уның тәне ҡысыта башлай)

**мнительность** шикләнеүсәнлек

**многоводие** ғоман ҡыуығының күп һыулылығы (буйға ҡалыу күренеше)

**многоплодие** күп ғоманлы (балалы) йөклөлөк

**мозг** мейе (1. *м. большой* ҙур мейе (баш мейеһенең ҙур ярымшарҙары); *м. головной* баш мейеһе; *м. задний* артҡы мейе (баш мейеһенең Варолий күпере менән кесе мейенән торған өлөшө); *м. передний* алғы мейе *(ҡара:* мозг большой); *м. продолговатый* оҙонса мейе (баш мейеһе олононоң өлөшө, арҡа мейеһе менән тоташа); *м. промежуточный* аралыҡ мейеһе (баш мейеһе олононоң өлөшө); *м. ромбовидный* ромб мейе (баш мейеһенең оҙонса һәм артҡы мейеләрҙән торған өлөшө); *м. спинной* арҡа мейеһе; *м. средний* урта мейе (баш мейеһе олононоң өлөшө); 2. *м. костный* елек, кимек матдәһе, *м. костный желтый* елек майы; *м. костный красный* ҡыҙыл кимек матдәһе)

**мозжечок** кесе мейе

**мозоль** һөйәл, йөй (1. дауамлы механик ярһытыуҙан нигеҙҙә ҡул суғы, табандың ҡалынайып ҡатыуы; 2. *м. водяная* һыулы һөйәл; 3. *м. костная* һөйәк йөйө (һынған һөйәк остарының тоташҡан ере)

**мокнутие** еүешләнеү, еүешләнгән ер (мәҫ., экзема булғанда)

**мокрецы** еүеш бөжәктәр (ике ҡанатлы ҡан эскес бөжәктәр, уларҙың йәш дәүере туляремия һ. б. ҡайһы бер ауырыуҙарҙы тарата)

**мокрота** ҡаҡырыҡ *(м. гнойная* эренле ҡаҡырыҡ; *м. слизистая* лайлалы ҡаҡырыҡ һ. б.)

**моллюск контагиозный (заразительный)** контагиоз моллюск (үҙенә бер төрлө вирус йоҡҡандан килгән ваҡ шеш сығыу менән характерлы тире ауырыуы, нигеҙҙә балаларҙа була)

**молоко** һөт *(м. грудное* имсәк һөтө; *м. молозивное* ыуыҙ һөтө; *м. пастеризованное* пастеризацияланган һөт һ. б.)

**молокоотсасыватель** һөтһурғыс (имсәктән һөттө һурып сығарыу аппараты)

**молоточек (косточка)** сүкеш һөйәге (урта ҡолаҡта урынлаша)

**молочная кухня** һөт ашы кухняһы (балалар поликлиникаһы ҡарамағында)

**молочница** *ҡара:* **1. стоматит кандидозный, 2. мастит**

**молочные смеси** һөт ҡатышмалары

**монартрит** монартрит (бер быуындың шешеүе)

**монилиаз** *ҡара:* **кандидоз**

**монилиформоз** монилиформоз (үҙенә бер төрлө паразит селәүген менән зарарланған тараҡанды яңылыш аш менән йотоуҙан килгән гельминтоз ауырыуы; *ҡара:* **гельминтоз)**

**моноанестезия** моноанестезия (бер аяҡ йә бер ҡулдың ауырыуҙан һиҙеү тойғоһон юғалтыуы)

**моноаутовакцина** моноаутовакцина (бер төр микроорганизм йәки серологик варианты нигеҙендә әҙерләнгән вакцина; *ҡара:* **вакцина)**

**мононеврит** мононеврит (бер нервы шешеүе)

**мононуклео́з инфекционный (болезнь Филатова)** инфекцион мононуклеоз (лимфатик төйөрҙәрҙең, бауырҙың шешеүе, периферик ҡанда моноциттар артыуы менән билдәләнгән киҫкен инфекцион ауырыу)

**монопаре́з** монопарез (бер аяҡ йә бер ҡул парезы; *ҡара:* **парез)**

**монорхи́зм** монорхизм (крипторхизмдың төрө: тоҡсала бер күкәйҙең булмауы)

**монотони́я** монотония (бер үк эште оҙаҡ башҡарыуҙан килгән һаулыҡ ҡаҡшауы)

**монотри́х** монотрих (осонда ҡамсыһы булған бактерия)

**моноци́т** моноцит (бөртөктәре булмаған лейкоцит; *ҡара:* **лейкоцит)**

**моноцито́з** моноцитоз (ҡанда моноциттар артыуы)

**моноцитопени́я** моноцитопения (ҡанда моноциттарҙың кәмеүе)

**морг** морг (ятып дауалау учреждениеһы эргәһендә мәйеттәрҙе ҡуйыу һәм ярып тикшереү бинаһы)

**«морж»** «морж» (ҡышын боҙло һыуҙа ҡойоноусы кеше)

**морфини́зм** морфинизм (әфиүн наркоманияһының бер төрө; *ҡара:* **наркомания)**

**морщи́на** сырыш, йыйырсыҡ

**моски́т** москит (көньяҡ серәкәйе, бер нисә төрө бар)

**москито́з** москитоз (москиттар һеләгәйе менән зарарланыуҙан килгән тире шешеүе)

**моцио́н** моцион (һаулыҡты нығытыу, һаҡлау маҡсатында һауала йөрөү)

**моча́** һейҙек, бәүел *(м. кровавая* ҡан ҡатыш һейҙек; *м. остаточная* ҡалдыҡ һейҙек (кесе яраудан һуң йәки катетер ярҙамында сығарғандан һуң һейҙек ҡыуығында ҡалған һейҙек)

**мочего́нный** һейҙек ҡыуғыс (мәҫ., һейҙек ҡыуғыс дарыу)

**мочеиспуска́ние** һейеү, кесе ярау итеү (төрҙәре: *м. непроизвольное* ирекһеҙҙән һейеү (бәүел тотмау)

**мочека́менный** һейҙек ташы (мәҫ., һейҙек ташы ауырыуы)

**мочеполово́й** һейҙек-енес (мәҫ., һейҙек-енес ағзалары)

**мочеприёмник** һейҙек һауыты (ҡаты ауырып ятҡандар өсөн кесе ярау итеү һауыты)

**мочето́чник** һейҙек үткәргесе көпшәһе (бөйөр лаҡанын һейҙек ҡыуығы менән тоташтыра)

**мочи́ться** һейеү (кесе ярау итеү)

**мо́чка ушно́й ра́ковины** ҡолаҡ йомшағы (ите), йәберсәк

**мо́шки (мушки, мошкара)** ләпәк, һуҡыр себен

**мошо́нка** тоҡса

**МСЧ** *ҡара:* **медсанчасть**

**музыкотерапи́я** музыка терапияһы (музыканы дауалау маҡсатында ҡулланыу)

**мужско́й** ир, ирҙәр, аталыҡ (мәҫ., ир заты, ирҙәр гигиенаһы, ир енес (аталыҡ) күҙәнәге)

**мукоро́з** мукороз (үңәҙ бәшмәктәре тыуҙырған бәшмәк ауырыуҙарының дөйөм исеме)

**мумифика́ция** мумификация (1. мәйет кибеүе; 2. ҡоро гангрена булғанда үле туҡыманың кибеүе)

**му́мия** мумия (мумификацияға бирелгән мәйет)

**му́скул** мускул *(ҡара:* **мышца)**

**мускулату́ра** мускулатура (тәндең бөтә ерендәге йәки берәй ағза өлөшөндәге һөлдә мускулдарының дөйөм исеме, мәҫ., *м. ды-*

*хательная* тын алыу мускулатураһы)

**мутаге́н** мутаген (мутация тыуҙырырға һәләтле булған физик, химик, биологик агенттарҙың (факторҙарҙың) дөйөм исеме)

**мутагене́з** мутагенез (мутация барлыҡҡа килеү процесы)

**мутаге́нность** мутагенлыҡ (мутаген агенттың мутация тыуҙырыу һәләтлеге)

**мута́ция** мутация (1. организмдың берәй сифатының йәки билдәһенең ҡапыл үҙгәреүе һәм нәҫелдән күсә килеүе; 2. *м. голоса* тауыш мутацияһы (үҫмерҙәр тауышының ҡалынайып, өлкәндәр тауышына әүерелеүе)

**мути́зм** мутизм (1. ҡайһы бер ауырыуҙар сәбәпле телдән яҙыу; 2. телдән яҙған булып маташыу)

**му́хи** себен (төрҙәре: *м. комнатная* торлаҡ себене; *м. мясная* ит себене; *м. цеце* цеце себене (Африкала йәшәүсе һәм йоҡо ауырыуын (трипаносомозды) таратыусы себен һ. б.)

**муче́ние** яфаланыу, интегеү

**«му́шка»** яһалма миң

**му́шки лета́ющие** күҙ алды сыбарлығы (ныҡ беленгән күрәгарашлыҡ һәм быяла һымаҡ тәндең томанланыуы арҡаһында күҙ алдында ҡара бөртөксәләр һәм буй һыҙаттар күренеүе)

**мыльня́нка (лекарственная)** күпертке (һабын) үләне (нигеҙҙә, ҡаҡыртҡыс дауа бирә торған үлән)

**мы́сли** фекер, уйланыу (*м. навязчивые* бәйләнсек уйланыуҙар (үҙенән-үҙе килеп, баштан сыҡмаған уй-фекер); *м. суицидальные* суицидаль уйланыуҙар (йәшәүҙең кәрәген тапмауға бәйле уй-фекер)

**мышле́ние** фекерләү

**мы́шца(ы)** мускул, мускулдар (мәҫ., *м. бедра двуглавая* боттоң ике башлы мускулы; *м. большая скуловая* бит осоноң ҙур мускулы; *м. гладкая* шыма мускул (арҡыры һыҙаттары булмаған мускул, уның менән, йөрәктән тыш, бөтә эске ағзалар тәьмин ителгән); *м. глазная* күҙ мускулы; *м. грудинная* түш (һөйәге) мускулы; *м. грудной клетки поперечная* күкрәк ситлегенең арҡыры мускулы; *м. длинный лучевой разгибатель* терһәк ҡушарын турайтҡыс оҙон мускул; *м. жевательная* сәйнәү мускулы; *м. живота наружная косая* ҡорһаҡтың тышҡы ҡыя мускулы; *м. икроножная* балтыр мускулы; *м. плечевая* ҡулбаш мускулы; *м. поперечнополосатая* арҡыры һыҙатлы мускул (уның менән бөтә һөйәктәр ҡапланған); *м. сжиматель мочевого пузыря* һейҙек ҡыуығын ҡыҫҡыс мускул һ. б.)

**мы́щелок** байырса (ҡайһы бер һөйәктәрҙең быуын эсенә сығып торған өлөшө, мәҫ., бот һөйәге байырсаһы)

**мышь** сысҡан (1. кимереүсе: *м. домовая* торлаҡ сысҡаны; *м. полевая* ҡыр сысҡаны; 2. *м. суставная* быуын «сысҡаны» (быуын ауырыуы һөҙөмтәһендә быуын эсендә барлыҡҡа килгән хәрәкәтсән кимерсәк киҫәге)

**мя́коть (пульпа) зу́ба** теш (пульпаһы) йомшағы

**мя́сцо глазно́е** күҙ (йәш) имсәһе

**мя́та пе́речная** бөтнөк үләне (япрағы нигеҙҙә күңел болғаныуҙан, үт ҡыуғыс һ. б. дауа бирә торған үлән)

# Н

**навя́зчивое состояние (невроз навязчивости)** бәйләнсек неврозы (кешенең ихтыярынан тыш яңылыш фекер йөрөтөүе, ҡурҡыушикләнеүгә бирелеү менән характерлы психик һаулыҡтың ҡаҡшауы)

**нагноéние** эренләү

**нагрубáние грудных желёз** имсәк (түш) биҙенең тулышыуы (ҡатыуы)

**нагру́зка** нагрузка, һынау (мәç., шәкәр менән һынау (биохимик анализ: шәкәр диабеты барлығы-юҡлығын тикшереү ысулдарының береһе); *н. физическая* физик нагрузка һ. б.)

**надбро́вье** ҡаш өçтө

**надгортáнник** ҡурылдай ҡапҡасы

**надзо́р** надзор (мәç., санитария надзоры)

**надкóстница** һөйәк ярыһы

**надло́м (кости)** һөйәк сатнау (һөйәк ярыһы йәрәхәтләнмәй)

**надорвáться** *(разг.)* ауыр күтәреү, көс төшөү

**надпóчечники** бөйөр өçтө биҙе (эске секреция биҙе)

**надры́в** биртенеү (мәç., мускулдарҙың биртенеүе)

**надхря́щница** кимерсәк ярыһы

**надчрéвье** күкрәк ауыҙы өлкәһе

**назначéние** *(мед.)* тәғәйенләү, билдәләү (мәç., дарыу тәғәйенләү)

**назофаринги́т** назофарингит (тамаҡ өçтө тиресәһенең шешеүе)

**наковáльня (кость)** һандал һөйәге (урта ҡолаҡтағы ишетеү һөйәге)

**накомáрник** серәкәй битлеге (серәкәйҙән һаҡлаусы селтәрле баш кейеме)

**наконéчник клизменный** клизма ослоғо йәки индергесе

**налёт** ҡуныҡ (мәç., теш ҡунығы)

**нани́зм** нанизм (иргәйел булыу)

**напáльчник** бармаҡса (бармаҡҡа кейҙереү өсөн резина ҡулайлама)

**напряжéние** көсөргәнеш, һығылмалыҡ (мәç., *н. пульса* пульс һығылмалылығы; *н. физическое* физик көсөргәнеш)

**нарзáн** нарзан (Кавказда сыҡҡан шифалы һыу)

**наркоанáлиз** наркоанализ (психик сирлеләрҙе һорашып өйрәнеү, тикшереү)

**наркóз** наркоз (наркотик матдә биреп тәрән йоҡоға талдырыу рәүешендә тәндең ауыртыу тойғоһон юғалттырыу; төрҙәре: *н. газовый* газ наркозы; *н. комбинационный* комбинацион наркоз һ. б.)

**наркóзный** наркоз (мәç., наркоз аппараты)

**нарколепси́я** нарколепсия (ғәҙәттәге йоҡо ваҡытынан тыш түҙә алмаçлыҡ йоҡо баçыу өйәнәге: йоҡо 1—5—10 минут самаһы була)

**наркологи́я** наркология (психиатрия фәненең хроник алкоголизмды, наркоманияны, токсикоманияны һәм был ауырыуҙарҙы булдырмау, дауалау юлдарын өйрәнеүсе тармағы)

**наркомáния** наркомания (наркотик матдәләргә һәм наркотик дарыуҙарға өйрәнеп китеүҙән барлыҡҡа килгән етди ауырыу)

**наркотизáтор** наркотизатор (наркоз биреүсе)

**наркóтики** наркотиктар (наркотик матдәләрҙең һәм наркотик дарыуҙарҙың дөйөм исеме)

**нарушéние** *(мед.)* боҙолоу (мәç.,

*н. кровообращения* ҡан йөрөшө (әйләнеше) боҙолоуы)
**нарыв** шешек *ҡара:* **абсцесс**
**насекомое** бөжәк (мәҫ., ҡандала)
**наследственность** нәҫел, нәҫеллек (нәҫел үҙенсәлектәренең күсә килеүе)
**насморк** тымау (тейеү), тымаулау (*ҡара:* **ринит**)
**настой** төнәтмә (шифалы үҫемлекте эҫе һыуҙа тотоу ярҙамында алынған дарыу шыйыҡсаһы)
**настойка** спиртлы төнәтмә, сығым (шифалы үҫемлекте спиртта тотоу ярҙамында алынған спиртлы дарыу шыйыҡсаһы, мәҫ., йод сығымы)
**настроение** кәйеф
**насыщение пищевое** ашап туйыу
**нательный** эске (мәҫ., эске күлдәк)
**натёчник** ыйыҡ (*ҡара:* **абсцесс холодный**)
**натощак** аслай, ас ҡарынлай (ҡарынға)
**натужиться** көсәнеү
**нафталанолечение** нафталан (нефте) менән дауалау
**неартроз** неартроз (пластик операция юлы менән яһалған яңы быуын)
**нёбо** аңҡау (*н. костное* һөйәк аңҡауы; *н. мягкое* йомшаҡ аңҡау (аңҡау пәрҙәһе); *н. твёрдое* ҡаты аңҡау)
**невирулентный** вирулент булмаған (*ҡара:* **авирулентный**)
**невменяемость** яуап бирә алмаҫлыҡ хәлдә булыу (психик ауырыу йәки аҡылға еңел булыу сәбәпле шәхестең ҡылған эшенә яуап бирә алмауы)
**невосприимчивость** *ҡара:* **иммунитет**
**невралгия** невралгия (һиҙеү нервы үтелеше урынында ниҫкен ауыртыу өйәнәге булыу, мәҫ., *н. межреберного нерва* ҡабырға-ара нервы невралгияһы)
**неврастения** неврастения (тиҙ ҡуҙғыу, тиҙ ярһып китеү, насар йоҡлау, тиҙ арығанлыҡ кеүек үҙгәрештәр менән үткән невроз)
**неврилемма** неврилемма (нервы епсәләрен уратып алыусы шекәрә)
**невринома** невринома (нервы шекәрәһенән сыҡҡан ябай шеш)
**неврит** неврит (ниндәй ҙә булһа нервының шешеүе, зарарланыуы, мәҫ., *н. зрительного нерва* күреү нервы невриты; *н. лицевого нерва* бит нервы невриты һ. б.)
**неврогенный (нейрогенный)** невроген (нервы системаһына ҡағылышлы)
**невроглиома** невроглиома (нейроглия туҡымаһынан сыҡҡан ябай шеш)
**невроз** невроз (үҙәк нервы системаһының функциональ ауырыуы; уның бер нисә төрө бар: неврастения, истерия, психастения һ. б.)
**невролиз** невролиз (нервыны бирсәләрҙән ҡотҡарыу операцияһы)
**неврологический** неврология, неврологик (неврологияға ҡағылышлы мәҫ., неврология бүлексәһе, неврологик ауырыу)
**неврология** неврология (нервылар һәм нервы ауырыуҙары хаҡында ғилем)
**невролюэс** невролюэс (нервы системаһы сифилисы; *ҡара:* **сифилис**)
**неврома** неврома (нервы туҡымаһынан торған ябай шеш; *н. ампутационная* ампутацион неврома (ампутацион тупыстағы нер-

вы епсәләренең артыҡ үҫеше)
**неврóн (нейрон)** неврон (нервы күҙәнәге)
**невропатúя** невропатия (1. нервы системаһының невротик реакциялар биреү менән характерлы үҫеш үҙенсәлеге; 2. дистрофик үҙгәрештәр менән характерлы периферик нервылар сирҙәренең дөйөм исеме)
**невропатóлог** невропатолог (нервы системаһы ауырыуҙары буйынса белгес-врач)
**невропатолóгия** невропатология (нервы ауырыуҙары тураһындағы фән)
**невротúческий** невротик (неврозға ҡағылышлы)
**нéвус** (невус) миң (нигеҙҙә, нәҫелдән килгән тирелә була торған һары, көрән тап, шеш рәүешендәге пигментлы үҙгәреш; төрҙәре күп)
**негативúзм** негативизм (һәр нәмәне киреһенсә эшләүҙән торған шизофрения ауырыуының билдәһе)
**недееспосóбность** дееһәләтһеҙлек (психик һаулыҡтың етди ҡаҡшауы һөҙөмтәһендә шәхестең гражданлыҡ хоҡуғын һәм бурыстарын башҡарыу һәләтлеген юғалтыу)
**недержáние** 1. тота алмау, мәҫ., *н. кала* тиҙәк (кал) тота алмау; 2. бойлоҡһоҙлоҡ, бойлоҡһоҙ булыу (кесе яраүҙы — һейҙекте тота алмауға ҡағылышлы термин), уның төрө: *н. мочú* ночное (энурез) төнгө бойлоҡһоҙлоҡ)
**недомогание** ауырыҡһыныу, сирләштереп тороу
**недонóшенность** етлекмәй тыуыу
**недоразвитие** етлекмәгәнлек, үҫеп етмәгәнлек (мәҫ., *н. половое* енси яҡтан етлекмәгәнлек; *н. физическое* физик яҡтан етлекмәгәнлек һ. б.)
**недостáточность** *(физиол.)* етешмәүсәнлек, ҡыҫанҡлыҡ (ауырыу рәүешендә ниндәй ҙә булһа ағзаның, туҡыманың үҙ эшен тейешенсә башҡармауы йәки организм өсөн мөһим булған матдәнең етешмәүе; **төрҙәре**: *н. белковая* аҡһым етешмәүсәнлеге; *н. венозных клапанов* вена клапандары етешмәүсәнлеге; *н. витаминная* витамин(дар) етешмәүсәнлеге; *н. клапана аорты* аорта клапаны етешмәүсәнлеге; *н. клапана легочной артерии* үпкә артерияһы клапаны етешмәүсәнлеге; *н. коронарная* коронар етешмәүсәнлек (йөрәктең коронар артериялары етешмәүсәнлеге); *н. кровообращения* ҡан йөрөшө етешмәүсәнлеге; *н. легочная* үпкә етешмәүсәнлеге; *н. легочно-сердечная* үпкә-йөрәк етешмәүсәнлеге; *н. миокарда* миокард (йөрәк мускулдары) етешмәүсәнлеге; *н. острая* киҫкен етешмәүсәнлек (мәҫ., йөрәктең); *н. печени* бауыр етешмәүсәнлеге; *н. почечная* бөйөрҙәр етешмәүсәнлеге; *н. сердечно-сосудистая* йөрәк-тамырҙар етешмәүсәнлеге; *н. сердца* йөрәк етешмәүсәнлеге; *н. хроническая* хроник (дауамлы) етешмәүсәнлек (мәҫ., йөрәктең хроник етешмәүсәнлеге) һ. б.)
**нéдуг** *(мед.) ҡара:* **болезнь**
**нежизнеспосóбность** йәшәүгә һәләтһеҙлек
**нежизнеспосóбный** йәшәүгә һәләтһеҙ (мәҫ., тыуған бала)
**незаживáющий (о ране)** уңалмаҫ, төҙәлмәҫ (яра)
**незарáзный** йоғошло булмаған, йоғошһоҙ

**незаращéние** бөтәшмәү, бөтәшмәгәнлек, уңалмау (мәҫ., 1. *н. неба* аңҡау бөтәшмәгәнлеге (тыуымыштан килгән физик ғәриплек: аңҡауҙың ярыҡлығы); 2. *н. раны* яра уңалмауы)

**нездорóвится** *(разг.)* ауырыҡһыныу, ауырып (сирләп) тороу

**неизлечи́мость** һауыҡмаҫлыҡ, төҙәлмәҫлек (ауырыу)

**нейробластóма** нейробластома (нервы күҙәнәктәренән башланған яман шеш)

**нейробруцеллёз** нейробруцеллёз (нигеҙҙә, нервы системаһын зарарлау менән үтеүсе бруцеллез ауырыуы)

**нейрови́русы** нейровирустар (тик нервы системаһы күҙәнәктәрен зарарлаусы вирустар)

**нейродерми́т** нейродермит (тәнгә сабыртма сығып, ҡысытыу менән билдәләнгән дауамлы йоғошһоҙ тире ауырыуы; төрҙәре: *н. диффýзный* диффуз нейродермит (тәндең ҙур өлөшөн алған нейродермит); *н. ограниченный* сикле нейродермит (мәҫ., муйын, терһәк тирәһе зарарлана) һ. б.)

**нейроинфекция** нейроинфекция (ауырыу тыуҙырыусы микроорганизмдар (нигеҙҙә үҙәк нервы системаһын зарарлауҙан килгән ауырыуҙарҙың дөйөмләштерелгән исеме)

**нейролейкóз** нейролейкоз (лейкоз булғанда нервы системаһы зарарланыуҙарының дөйөм исеме; *ҡара:* **лейкоз**)

**нейролéптики (нейроплегики)** нейролептиктар *(ҡара:* **средство нейролептическое)**

**нейроофтальмолóгия** нейроофтальмология (офтальмологияның баш мейеләге күреү юлдарын һәм күреү үҙәктәрен өйрәнеүсе тармағы)

**нейропсихолóгия** нейропсихология (психологияның кеше психикаһын баш мейеһе эшсәнлеге менән бәйләнештә өйрәнеүсе тармағы)

**нейроревмати́зм** нейроревматизм (ревматизм тарафынан нервы системаһы зарарланыуҙарының дөйөм исеме; *ҡара:* **ревматизм)**

**нейрорегуля́ция** нейрорегуляция (ағза-туҡымалар эшмәкәрлегенең нервы системаһы тарафынан идара ителеүе)

**нейроси́филис** нейросифилис (сифилис инфекцияһы менән нервы системаһы зарарланыуҙарының дөйөм исеме; *ҡара:* **сифилис)**

**нейротокси́н** нейротоксин (нервы системаһына зарар килтереүсе биологик характерҙағы ағыулы матдә, төрҙәре күп)

**нейротрóпность** нейротроплыҡ (матдәләрҙең, шул иҫәптән дарыуҙарҙың тик нервы системаһына тәьҫир итә алыуы)

**нейрофармаколóгия** нейрофармакология (фармакологияның дарыу матдәләренең нервы системаһына йоғонто яһауын өйрәнеүсе тармағы)

**нейрофибрóма** нейрофиброма (периферик нервы системаһындағы тоташтырғыс туҡыма епсәләренән сыҡҡан ябай шеш)

**нейрофиброматóз (болезнь Реклингаузена)** нейрофиброматоз (нигеҙҙә, тире аҫтында шулай уҡ баш һәм арҡа мейеһе нервыларында күп һанда нейрофиброма, невринома һымаҡ шештәр барлыҡҡа килеү менән характерлы дауамлы ауырыу)

**нейрофизиолóгия** нейрофизиоло-

гия (физиологияның нервы системаһының эшсәнлеге механизмын өйрәнеүсе тармағы)

**нейрохиру́рг** нейрохирург (нейрохирургия белгесе, врач)

**нейрохирурги́ческий** нейрохирургия, нейрохирургик (мәҫ., нейрохирургия клиникаһы, нейрохирургик ауырыу)

**нейрохирурги́я** нейрохирургия (хирургияның үҙәк һәм периферия нервы системаһы ауырыуҙарын дауалау менән шөғөлләнә торған тармағы)

**нейроэндокриноло́гия** нейроэндокринология (эндокринологияның эске секреция биҙҙәре һәм үҙәк нервы системаһы араһындағы бәйләнеште өйрәнеүсе тармағы)

**нейтропени́я** нейтропения (периферик ҡанда нейтрофил күҙәнәктәренең кәмеүе)

**нейтрофи́л** нейтрофил (гранулоцит лейкоциттарҙың бер төрө; *ҡара:* **гранулоцит**)

**нейтрофилёз** нейтрофилез (периферик ҡанда нейтрофилдарҙың артыуы)

**некаторо́з** некатороз (некатор исемле паразит селәү йоғоуҙан килгән һәм йылы яҡтарҙа күҙәтелгән гельминтоз ауырыуы; *ҡара:* **гельминтоз**)

**некробациллёз** некробациллез; *ҡара:* **фузоспириллез**

**некробио́з** некробиоз (ауырыу сәбәпле туҡыма йәки айырым күҙәнәктәрҙең үлә барыуы)

**некро́з** некроз (туҡыма үлеүе)

**некронефро́з** некронефроз (некроз менән үтеүсе нефроз; *ҡара:* **нефроз**)

**некросперми́я** некроспермия (орлоҡта ир енес күҙәнәктәренең үле булыуы)

**некротокси́н** некротоксин (ҡайһы бер бактериялар бүлеп сығара торған һәм туҡыма үлеүенә килтереүсе ағыу)

**некротоми́я** некротомия (үле туҡыманы ярыу операцияһы)

**нематодо́з** нематодоз (нематодалар йоғоуҙан килгән гельминтоз ауырыуҙарының дөйөм исеме)

**немато́ды** нематодалар (бер төркөм йомро селәүҙәр, күптәре гельминтоз ауырыуҙарына сәбәпсе; *ҡара:* **гельминтоз**)

**немо́й** телһеҙ

**немота́** телһеҙлек

**неонатоло́гия** неонатология (педиатрияның яңы тыуған балаларҙың физиологияһын һәм ауырыуҙарын өйрәнеүсе тармағы)

**неопла́зма** неоплазма *(ҡара:* **опухоль)**

**неопря́тный** (о человеке) шапшаҡ, тырҡыш

**неотло́жный** *(мед.)* кисектергеһеҙ (мәҫ., кисектергеһеҙ ярҙам)

**непереноси́мость (лекарственная)** кисермәгәнлек

**неподви́жность** (сустава) *ҡара:* **анкилоз**

**неполноце́нность психическая** психик яҡтан камил булмау

**неполовозре́лый** енси яҡтан етлекмәгән

**непроизво́льный** ирекһеҙ, ирекһеҙҙән (мәҫ., ирекһеҙ хәрәкәт)

**непроница́емость** үтмәүсәнлек (мәҫ., ҡан тамырҙары үтмәүсәнлеге)

**непроходи́мость** *(мед.)* үткәрмәүсәнлек (мәҫ., 1. *н. кишечника* эсәктәр үткәрмәүсәнлеге (оло ярау итә алмау, бушандыҡ газдарҙың бүленмәүе, ҡоҫоу һ. б. етди үҙгәрештәр менән характерлы, күпселектә ашығыс хирургик ярҙам талап иткән киҫ-

кен ауырыу; төрҙәре: *н. кишечника алиментарная* эсәктәрҙең алиментар үткәрмәүсәнлеге (ас ҡарынлай күп ашауҙан эсәктәрҙең тығылыуы); *н. кишечника динамическая* эсәктәрҙең динамик үткәрмәүсәнлеге (эсәктәрҙең параличы йәки эсәктәр спазмаһынан килгән эсәк үткәрмәүсәнлеге; *ҡара:* **паралич, спазм**); *н. кишечника механическая* эсәктәрҙең механик үткәрмәүсәнлеге (эсәктәрҙең тығылыуы, уралып төйөрләнеүе йәки йәбешкес менән ҡыҫылыуынан килгән эсәк үткәрмәүсәнлеге); *н. кишечника обтурационная* эсәктәрҙең обтурацион үткәрмәүсәнлеге (эсәктәрҙең тығылыуы менән характерлы); *н. кишечника острая* эсәктәрҙең киҫкен үткәрмәүсәнлеге (ҡыҫҡа ваҡытта барлыҡҡа килеп, тиҙ үтеүсе эсәк үткәрмәүсәнлеге); *н. кишечника паралитическая* эсәктәрҙең паралитик үткәрмәүсәнлеге (эсәктәрҙең динамик үткәрмәүсәнлегенең бер төрө); *н. кишечника спаечная* эсәктәрҙең йәбешкес үткәрмәүсәнлеге (йәбешкес ҡыҫыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән эсәк үткәрмәүсәнлеге); *н. кишечника спастическая* эсәктәрҙең спазмалы үткәрмәүсәнлеге (механик үткәрмәүсәнлектең бер төрө); *н. кишечника функциональная* эсәктәрҙең функциональ үткәрмәүсәнлеге; *н. кишечника хроническая* эсәктәрҙең хроник (дауамлы) үткәрмәүсәнлеге; *н. кишечника частичная* эсәктәрҙең ярым үткәрмәүсәнлеге (механик үткәрмәүсәнлегенең бер төрө) һ. б.; 2. *н. маточных труб* түл юлдары үткәрмәүсәнлеге һ. б.

**неработоспосо́бность** эшкә яраҡһыҙлыҡ

**неработоспосо́бный** эшкә яраҡһыҙ

**не́рв(ы)** нервы, нервылар (үҙәк нервы системаһын ағза-туҡымалар менән тоташтырыусы һәм нервы ярһыуын йөрөтөүсе нервы епсәләр шәлкеме, мәҫ., *н. афферентные* афферент нервылар һиҙеү-тойоуҙы мейегә илтеүсе нервылар); *н. бедренный* бот нервыһы; *н. большеберцовый* сираҡ һөйәге нервыһы; *н. глазо-двигательный* күҙ (алмаһын) йөрөтөүсе нервы; *н. локтевой* терһәк нервыһы; *н. лучевой* терһәк ҡушары нервыһы; *н. тройничный* өс тармаҡлы нервы (баш мейеһе нервыһы); *н. черепно-мозговой* баш мейеһе нервыһы; *н. эфферентные* эфферент нервылар (ярһыуҙы нервы үҙәктәренән ағза-туҡымаларға алып килә) һ. б.)

**нерви́зм** нервизм (медицина фәненең организмда барған бөтә йәшәү процестары нигеҙен нервы системаһында күреүсе йүнәлеше)

**нерви́ровать** *(разг.)* нервыға (йәки нервыһына) тейеү, асыу килтереү

**не́рвничать** ҡыҙыу, туҙыныу, сәпсәләнеү, ғасабилланыу

**нервнобольно́й** нервы ауырыулы (кеше)

**не́рвный(ая)** 1. нерв, нервы (мәҫ., нервы системаһы), 2. нервылы (ҡыҙыу, ҡыҙып барыусан)

**нерво́зность** нервозлыҡ (ҡыҙып китеүсәнлек, ҡыҙыу ҡанлылыҡ)

**нерво́зный** нервозлы *(ҡара:* **не́рвный$_2$**)

**нера́шливость** шапшаҡлыҡ, әрпешлек, шаҡшылыҡ, шамтырлыҡ

**несваре́ние желу́дка** үтләү (аш һеңдермәү)

**несовмести́мость** ярашһыҙлыҡ (килешмәгәнлек), мәҫ., *н. крови (переливаемой)* ҡан ярашһыҙлығы (сирле кешегә ебәрелгән ҡандың килешмәгәнлеге); *н. лекарственная* дарыу ярашһыҙлығы, *н. тканевая* туҡыма ярашһыҙлығы (кешегә оператив юл менән күсерелгән туҡыманың килешмәгәнлеге) һ. б.

**несовмести́мый** *(биол.)* ярашһыҙ (мәҫ., ярашһыҙ ҡан)

**несозре́вший** (фурункул) тулышмаған (мәҫ., тулышмаған сиҡан)

**несъедо́бный** ашарға яраҡһыҙ

**нетре́звый** иҫерек

**нетрудоспосо́бность** хеҙмәткә яраҡһыҙлыҡ

**нетрудоспосо́бный** хеҙмәткә яраҡһыҙ

**неуравнове́шенный** тотороҡһоҙ тәбиғәтле

**неусваиваемый** үҙләштерелмәгән (мәҫ., аш)

**нефри́т** нефрит (ғәҙәттә, бөйөр йомғаҡсалары зарарланыуы менән билдәләнгән бөйөр шешеүе; төрҙәре: *н. острый* киҫкен нефрит; *н. хронический* хроник (дауамлы) нефрит һ. б.)

**нефроангиосклеро́з** нефроангиосклероз (бөйөрҙөң артерия тамырҙары зарарланыуы (склерозы) менән үтеүсе ауырыу)

**нефро́з** нефроз (нигеҙҙә, бөйөр каналсыҡтарының дегенератив үҙгәреүе менән билдәләнгән бөйөр ауырыуы)

**нефрозонефри́т** нефрозонефрит (бер юлы нефрит һәм нефроз билдәләренә оҡшаш үҙгәрештәр менән билдәләнгән бөйөр ауырыуы)

**нефрокальцино́з** нефрокальциноз (бөйөрҙөң дистрофик ауырыуы, иретелмәгән кальций тоҙҙары бөйөр туҡымаһында ултырыу һәм аҙаҡтан нефросклерозға килтереү һ. б. менән характерлы)

**нефролитиа́з** нефролитиаз *(ҡара:* **болезнь почечнокаменная)**

**нефроло́гия** нефрология (медицинаның бөйөр төҙөлөшө, эшсәнлеге, ауырыуҙары һәм уларҙың дауаһын өйрәнә торған бүлеге)

**нефро́ма** нефрома (бөйөрҙөң яман шеше)

**нефро́н** нефрон (бөйөрҙөң иң бәләкәй функциональ өлөшсәһе — бөйөр тәнсәһе)

**нефропати́я** нефропатия (бөйөрҙәрҙең үҙ туҡымаһы шешмәйенсә, төрлө сәбәптәрҙән килгән бөйөр ауырыуы, мәҫ., *н. беременных* йөклө' ҡатындар нефропатияһы (буйға ҡалыуҙың икенсе дәүерендә күҙәтелгән ауырыу) һ. б.)

**нефропто́з** нефроптоз (бөйөрҙөң төшөүе, үҙ урынынан ҡуҙғалыуы, күсеүе)

**нефросклеро́з** нефросклероз (тоташтырғыс туҡыманың үҫеүе һөҙөмтәһендә бөйөрҙөң тығыҙланып ҡатыуы һәм бөрөшөүе)

**нечистопло́тность** шапшаҡлыҡ, шаҡшылыҡ, бысраҡлыҡ

**нечистопло́тный** шапшаҡ, шаҡшы, шамтыр, һәпрә

**нечисто́ты** 1. бысраҡлыҡ; 2. ташландыҡ нәмәләр

**нечувстви́тельность** һиҙмәү, toймау, һиҙмәүсәнлек, тоймаусанлыҡ

**нечувстви́тельный** һиҙмәүсән, тоймаусан, һиҙемһеҙ

**никоти́н** никотин (тәмәке составына ингән көслө ағыу)

**никотини́зм** никотинизм (дауамлы йәки киҫкен рәүештә никотин менән ағыуланыу)

**никталги́я** никталгия (төнөн барлыҡҡа килгән ауыртыу)

**никтофоби́я** никтофобия (ҡараңғылыҡҡа ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**никтури́я** никтурия (һейҙектең нигеҙҙә төнгө мәлдә эшләнеше һәм бүленеп сығарылыуы)

**ниста́гм** нистагм (күҙ алмаһының үҙ аллы һелкенеү хәрәкәте)

**нитеви́дный** *(мед.)* ептәй (мәҫ., ептәй пульс)

**ни́ша** ниша (рентгендан тикшергәндә ниндәй ҙә булһа ағзала булған яранан килгән соҡорса)

**новообразова́ние** *ҡара:* **опухоль**

**новорождённый** яңы тыуған (беренсе айҙағы бала)

**нога́** аяҡ

**но́готь** тырнаҡ *(н. вросший* батҡан тырнаҡ (тырнаҡ ситтәре шәбенә кереп киткән була, дауалау талап итеЛә) һ. б.)

**ногтекуса́лка** тырнаҡ ҡырҡҡысы

**но́жка** *(анат.)* 1. тәпәй (ҡайһы бер ағзаларҙың өлөшө, мәҫ., *н. мозжечка* кесе мейе тәпәйе; 2 *(разг.)* бала, ҡатын-ҡыҙ аяғына ҡарата ҡулланылыусы термин)

**ноздря́** танау тишеге

**нозогеогра́фия** нозогеография (медицина географияһының ауырыуҙарҙың ерҙә таралышын өйрәнеүсе тармағы)

**нозоло́гия** нозология (ауырыуҙар тәрән, уларҙың классификацияһын өйрәнә торған ғилем)

**нозофоби́я** нозофобия (етди ауырыуға ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**но́ма** нома (ауыҙ тиресәһенең гангреноз тарҡалыуы менән билдәләнгән ауырыу)

**номенклату́ра и классифика́ция боле́зней и причи́н сме́рти** ауырыуҙар һәм үлеү сәбәптәре номенклатураһы һәм классификацияһы (Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау эштәре ойошмаһының (ВОЗ-дың) официаль документы. Беҙҙең илдә лә медиктар тарафынан башҡарыла)

**норадренали́н** норадреналин (бөйөр өҫтө биҙенән һәм хромаффин системаһында барлыҡҡа килгән һәм төҙөлөшө менән адреналинға оҡшаш гормон)

**но́рма** норма (мәҫ., туҡланыу нормаһы)

**нормализа́ция** *(мед.)* нормалашыу (мәҫ., һаулыҡтың нормалашыуы, башҡаса әйткәндә, яҡшырып, тәбиғи хәлгә ҡайтыуы)

**нормати́вы** *(гиг.)* нормативтар (мәҫ., гигиеник нормативтар)

**нормосте́ник** нормостеник *(ҡара:* конституция нормостеническая)

**нос** танау, морон (төрҙәре: *н. горбатый* көмрө танау; *н. курносый* йәмшек танау; *н. седловидный* батынҡы танау һ. б.)

**носи́лки (медицинские)** носилкалар

**носи́тель возбуди́теля инфе́кции** *ҡара:* **бактерионоситель**

**носогло́тка** тамаҡ өҫтө

**ностальги́я** ностальгия (үҙ иленән китеп сит илдә оҙаҡ йәшәгән кешеләрҙә күҙәтелгән психик һаулыҡтың ҡаҡшауы, нигеҙҙә, депрессия күренештәре менән характерлы; *ҡара:* **синдром депрессивный)**

**нуклеи́н** нуклеин (күҙәнәк йәҙрә-

һе составына ингән ҡатмарлы органик матдә)

**нутрициоло́гия** нутрициология (кеше һәм хайуандарҙы туҡландырыу хаҡындағы фән)

**ныть (больное место)** һыҙлау, әрнеү

**няня** 1. бала ҡараусы; 2. *ҡара:* **санитарка**

# О

**обве́тривание** *(разг.)* елгә ҡарайтыу (битте)

**обезбо́ливание** ауыртыуҙы баҫыу;

**обезбо́ливающий** ауыртыуҙы баҫҡан (баҫа торған)

**обезво́живание (организма)** организмдың кибеүе, (ағза-туҡымаларҙа һыуҙың кәмеүе)

**обезвреживание** зарарһыҙлау, ағыуһыҙлау

**обеззара́живание** йоғошһоҙлау; *ҡара:* **дезинфекция**

**обезобра́женный** йәмһеҙләнгән, йәмһеҙләндерелгән

**обескро́вленный** ҡанһыраған (мәҫ., ҡанһыраған сирле)

**обеспече́ние** тәьминәт (мәҫ., *о. пенсионное* пенсия тәьминәте; *о. социальное* социаль тәьминәт һ. б.)

**обесси́леть** хәлдән тайыу, көсһеҙләнеү

**обже́чься, обжигаться;** *ҡара:* **ожог**

**обжо́рство** ҡомағайлыҡ, мәскәйлек, убырлыҡ

**обка́лывание (опухоли)** шеш урынға тире аша дарыу ебәреү, ҡаҙау

**область** *(анат.)* өлкә, мәҫ., *о. бедра* бот өлкәһе; *о. височная* сикә өлкәһе; *о. затылочная* соңҡа өлкәһе; *о. паховая* сандыр өлкәһе; *о. подключичная* умрау аҫты өлкәһе; *о. подкрыльцовая* ҡултыҡ аҫты өлкәһе; *о. промежностная* сат өлкәһе һ. б.

**обла́тка** *(в фармак.) ҡара:* **капсула**

**облепиха** һырғанаҡ (емешенән алынған майы тәндә бешкән ерҙе, ашҡаҙандың сей яра ауырыуын дауалау өсөн ҡулланыла)

**облздравотдел (областной отдел здравоохранения)** өлкә һаулыҡ һаҡлау (эштәре) бүлеге

**облигатный** облигат (мотлаҡ, мәжбүри, мәҫ., облигат ауырыу тыуҙырғыс)

**облитера́ция** облитерация, облитерациялау (ауырыу һөҙөмтәһендә ҡыуыҡлы ағзаларҙың, үт, һейҙек юлдарының, тамырҙарҙың бөрөшөүе йәки бөрөшә башлауы, мәҫ., ҡан тамыры облитерацияһы)

**облитерирование** облитерациялау *(ҡара:* **облитерация)**

**обложенность (языка)** тел(дең) ағарыуы (үңәҙләнеүе)

**облуче́ние** нурландырыу, нурландырыш (мәҫ., рентген нурландырылышы)

**облысе́ние** *ҡара:* **алопеция**

**обман зрения** *(мед.)* күҙгә күренеү

**обме́н веществ** матдәләр алмашыныуы (организмда барған бөтә химик реакциялар, мәҫ., *о. белковый* аҡһым матдәләре алмашыныуы; *о. жировой* май матдәләре алмашыныуы; *о. основной* матдәләрҙең төп алмашыныуы (уяу, тыныс хәлдә, опти-

маль температура булғанда, организмда барған бөтә матдәләр һәм энергия алмашыныуы процестарының йыйылмаһы) һ. б.)

**обморок** һуштан (иҫтән) яҙыу

**обмывание** йыуындырыу, йыуыу (мәҫ., ауырыу кешене йыуындырыу)

**обнажение тела** тәнде яланғаслау

**оболочка** *(анат.)* шекәрә, ҡатлам, мембрана, мәҫ., *о. глаза белочная* күҙҙең аҡһымлы шекәрәһе; *о. глаза радужная* күҙҙең төҫлө шекәрәһе; *о. глаза роговичная* күҙҙең мөгөҙсә шекәрәһе; *о. глаза сетчатая* күҙҙең селтәрле шекәрәһе; *о. глаза соединительная* күҙҙең тиресәһе; *о. глаза сосудистая* күҙҙең тамырлы шекәрәһе; *о. мозга мягкая* мейенең йомшаҡ шекәрәһе; *о. мозга паутинная* мейенең үрмәксе шекәрәһе; *о. мозга твердая* мейенең итле шекәрәһе; *о. сердца внутренняя* йөрәктең эске шекәрәһе (эндокард); *о. сердца мышечная* йөрәктең мускул ҡатламы (йәки миокард); *о. сердца наружная* йөрәктең тышҡы шекәрәһе (йәки эпикард); *о. серозная* сероз (ҡатлы) шекәрә (мәҫ., ҡорһаҡтың ҡатлы шекәрәһе); *о. синовиальная* синовий шекәрәһе (быуындарҙа, тарамыш-һеңер тирәһендә); *о. слизистая* лайлалы шекәрә (йәки тиресә); мәҫ., ашҡаҙандың тиресәһе һ. б.

**обоняние** еҫ тойоу (һиҙеү) һәләте

**оборот койки** койка алмашыныуы (дауалау учреждениеларында ҡулланылыусы статистик күрһәткес)

**обострение (болезни)** ауырыуҙың киҫкенләшеүе

**обработка** эшкәртеү, әҙерләү, мәҫ., *о. рук хирургическая* ҡулдарҙы операцияға әҙерләү (үтә ентекләп йыуыу һәм антисептик дарыу менән эшкәртеү); *о. санитарная* санитария эшкәртеүе (ауырыу тыуҙырғыс заттарҙы, радиоактив һәм химик матдәләрҙе зарарһыҙлау саралары; *о. санитарная полная* тулы санитария эшкәртеүе; *о. санитарная частичная* ярым санитария эшкәртеүе һ. б.)

**образ жизни** йәшәү рәүеше

**образование медицинское** медицина белемен алыу

**обрезание крайней плоти** сөннәтләү операцияһы (1. *ҡара:* **циркумцизия**; 2. дини йола)

**обряд** йола, ғөрөф-ғәҙәт

**обсеменение** (мед.) *ҡара:* **диссеминация**

**обсервация** обсервация (йоғошло ауырыу менән сирләп китеүгә шик булғанда, сәләмәт кешеләрҙе айырыу һәм күҙәтеү)

**обследование больного** ауырыу кешене ҡарап тикшереү

**обслуживание медицинское** (халыҡты) медицина хеҙмәтләндереүе

**обтирание влажное** еүешләп ышҡыныу (һыуҙа сылатылған таҫтамал менән)

**обтурация** обтурация (тығылыу, мәҫ., ҡан тамыры обтурацияһы)

**общество** йәмғиәт (мәҫ., *о. врачебное (научное)* врачтарҙың фәнни йәмғиәте; *о. глухонемых* һаңғырау-телһеҙҙәр йәмғиәте; *о. Красного Креста и Красного Полумесяца* Ҡыҙыл Тәре һәм Ҡыҙыл Ярым ай йәмғиәте)

**объём** күләм *(о. дыхания минутный* тын (һулыш) алыуҙың минутлыҡ күләме; *о. сердца минутный* йөрәктең минутлыҡ күләме (минут эсендә йөрәктән үткән

ҡан күләме); *о. циркулирующей крови* циркуляцияла булған ҡандың күләме һ. б.)
**обызвествле́ние** әзбизләнеү; *ҡара:* **кальциноз**
**обы́чай** ғөрөф, ғәҙәт, йола
**ОВ** *ҡара:* **вещество отравляющее**
**овици́д** овицид (паразит селәү күкәйҙәрен юҡ итеү өсөн ҡулланыла торған химик матдә)
**овуля́ция** овуляция (өлгөргән түл күҙәнәгенең түллектән сығыуы)
**оглуше́ние** иҫәңгерәү (һуштан яҙыуҙың бер төрө)
**огрубе́ние го́лоса** тауыштың ҡалынайыуы
**одежда защитная** ҡара: **костюм защитный**
**одногла́зый** һыңар (йәки бер) күҙле
**одноно́гий** һыңар (йәки бер) аяҡлы
**однору́кий** һыңар (йәки бер) ҡуллы
**одонталги́я** одонталгия (теш ауыртыуы)
**одонтоло́гия** одонтология (стоматологияның теш һәм теш ауырыуҙары хаҡындағы бүлеге)
**одонтома** одонтома (тештәр тәңгәлендә барлыҡҡа килгән ябай шеш)
**одряхле́ние** бәлтерәү, бәлйерәү
**одутлова́тый (о лице)** бурҫлаҡ
**оды́шка** тын ҡурылыу (йәки ҡыҫылыу, бөтөү)
**ожере́лье Вене́ры** Венера муйынсаһы (сифилис булғанда муйындағы тире үҙгәреше)
**оживле́ние** терелтеү (*ҡара:* **реанимация**)
**ожире́ние** 1. һимереү; 2. *о. болезненное (ҡара:* **болезнь Деркума**)
**ожо́г** бешеү (дүрт дәрәжәлә: I, II, III һәм IV була)
**оздорови́тельный** һауыҡтырғыс, һауыҡтырыу, сәләмәтләндереү (мәҫ., һауыҡтырғыс саралар)
**оздоровле́ние** һауыҡтырыу, сәләмәтләндереү
**озе́на (насморк зловонный)** озена (дауамлы рәүештә танау тиресәһенең һаҫыҡ еҫ килеү менән шешеүе)
**озно́б** өшөп ҡалтыраныу, дерелдәү
**ознобле́ние** өшөнөү (һыуыҡ алыуҙан тәндең дауамлы рәүештә ҡыҙарып бүртеп тороуы)
**озно́быши** өшөнөү таптары (өшөнөүҙән килгән ҡыҙыл-күк шештәр)
**озокери́т** озокерит (дауалау өсөн ҡулланылған балауыҙға оҡшаш ҡара төҫтәге минераль май)
**озокеритотерапи́я** озокеритотерапия (озокерит менән дауалау)
**озона́тор** озонатор (һауаны озон менән байыттырыу аппараты)
**озони́рование** озонлау
**окисле́ние** окисланыу (әсеү)
**окись углерода** углерод окисы (һөрөм газына инген бик көслө ағыу)
**окклю́зия** окклюзия (1. ҡыуышкөпшәле ағзаларҙың (мәҫ., ҡан тамырының) тығылыуы; 2. ауыҙ ябылғанда өҫкө һәм аҫҡы тештәрҙең ҡушылыуы)
**оконча́ние** *(анат.)* **бөтөм** (мәҫ., нервы бөтөмө)
**окостене́ние** һөйәкләнеү, һөйәккә әйләнеү
**окочене́ние трупное** мәйеттең ҡатыуы
**оксало́з** оксалоз (нәҫелдән килгән һәм матдәләр алмашыныуы боҙолоу менән характерлы ауырыу)
**оксалури́я** оксалурия (һейҙек менән оксалат тоҙҙарының бүленеүе)
**оксигемоглоби́н** оксигемоглобин (гемоглобин һәм кислород ҡушылыуынан килгән органик

берләшмә, ул кислородты туҡымаларға ташый, ҡанға ҡыҙыл төҫ бирә)

**оксигемометри́я** оксигемометрия (ҡандың кислород менән байыуын билдәләү ысулы)

**оксигенератор** (оксигенератор (хирургик операция ваҡытында үпкәне алмаштыра торған аппарат)

**оксигенотерапи́я** оксигенотерапия (кислород менән дауалау)

**оксиури́ды** оксиуриды (бер төркөм паразит селәүҙәр, мәҫ., бабасыр)

**окули́ст** *ҡара:* **офтальмолог**

**оку́ривание** төтәтеү (дезинфекция ысулдарының береһе; мәҫ., көкөрттө төтәтеү)

**олеогранулёма** *ҡара:* **липогранулема инъекционная**

**олигеми́я** олигемия (ҡандың күләм яғынан аҙайыуы)

**олигозоосперми́я** олигозооспермия (бүленгән орлоҡта (эякулятта) сперматозоидтарҙың аҙ булыуы)

**олигоменоре́я** олигоменорея (күремдең ҡыҫҡа ваҡытҡа килеүе)

**олигоспермия** олигоспермия (орлоҡтоң (эякуляттың) аҙ миҡдарҙа бүленеүе)

**олигофрени́я** олигофрения (бала саҡта барлыҡҡа килгән психик үҫештең камил булмауы; өс дәрәжәһе бер: дебиллек, имбециллыҡ һәм идиотия)

**олигури́я** олигурия (бөйөрҙәр тарафынан һейҙектең аҙ бүленеүе)

**ольха́** ерек (ҡабығы, емеше нигеҙҙә эсәк ауырыуҙарынан дауа биреүсе ағас)

**омартри́т** омартрит (ҡулбаш быуынының шешеүе)

**омертве́ние** үлеү, туҡыма үлеүе (туҡыма-ағзалар йә уларҙың өлөшө үлеүе хаҡында бара)

**омозоле́лость** *ҡара:* **мозоль**

**омфали́т** омфалит (яңы тыуған баланың кендек тәңгәленең эренләп шешеүе)

**онани́зм** онанизм (нигеҙҙә, енес ағзаларындағы эротоген зоналарҙы ләззәт табыу ниәтендә ҡуҙғытыу)

**онеме́ние** *(разг.)* 1. ойоу, иҫ китеү; 2. телһеҙләнеп ҡатып ҡалыу

**онихи́я** (онихоз) онихоз (1. тырнаҡ ауырыуы; 2. тырнаҡ аҫты һәм тырнаҡ эргәһендәге туҡыманың шешеүе)

**онихогрифо́з** онихогрифоз (тырнаҡтарҙың ҙурайыуы, ҡалынайыуы һәм ҡош тырнағы кеүек бөгөлөүе)

**онихомико́з** онихомикоз (патоген бәшмәк йоҡҡандан килгән тырнаҡ ауырыуы)

**онихофаги́я** онихофагия (тырнаҡтарҙы кимереү ғәҙәте)

**онкоге́н** онкоген (гендарҙа яман шеш башланыуға булышлыҡ итә алыусы есем)

**онкогене́з** онкогенез (шештең барлыҡҡа килеүе һәм үҫеше)

**онкодиспансе́р** *ҡара:* **диспансер онкологический**

**онко́лог** онколог (онкология буйынса белгес, врач)

**онкологи́ческий** онкология, онкологик (мәҫ., онкология кафедраһы, онкологик ауырыу)

**онколо́гия** онкология (медицина һәм биологияның шештәрҙең барлыҡҡа килеү сәбәбен, уларҙың үҫешен булдырмау һәм дауалау юлдарын өйрәнеүсе тармағы)

**онкосфе́ра** онкосфера (ҡайһы бер паразит селәүҙәрҙең ҡарышлауығы)

**онкоцеркоз** онкоцеркоз (филяриатоз рәтенә ингән һәм Үҙәк Аме-

рика илдәрендә күҙәтелеүсән гельминтоз; *ҡара* **гельминтоз)**

**онтогене́з** онтогенез (организмдың тыуғандан алып йәшәү ахырына тиклемге индивидуаль үҫеше)

**оофори́т** оофорит (түллек биҙе шешеүе)

**операбельность** *(хир.)* операбеллек (ауырыу кешенең хәле операция яһарлыҡ)

**операцио́нная** операционная (операцион бүлмә)

**опера́ция** *(мед.)* операция (хирургик ярҙам, мәҫ., *о. акушерская* акушерлыҡ операцияһы; *о. диагностическая* диагностик операция (ауырыуҙы билдәләү маҡсатында яһала); *о. торакальная* торакаль операция (күкрәк ситлегендә башҡарыла); *о. экстренная* экстрен (кисектергеһеҙ) операция һ. б.)

**опери́ровать** операция яһау

**опиомани́я** опиомания (наркоманияның бер төрө: әфиун (опий) йәки уның препараттарын ҡабул итеүгә өйрәнеп китеү)

**описторхо́з** описторхоз (үҙенә бер төрлө паразит селәү тыуҙырған бешеп етмәгән балыҡ ашауҙан йоҡҡан һәм нигеҙҙә үт юлдарын, ашҡаҙан аҫты биҙен зарарлау менән үтеүсе гельминтоз ауырыуы)

**оплодотворе́ние** аталаныу, аталандырыу

**опорожне́ние** *(мед.)* бушандырыу, бушатыу (мәҫ., һейҙек ҡыуығын катетер ярҙамында бушатыу)

**опра́ва очко́вая** күҙлек тирәсе

**опре́лость** бешегеү (бот араһы, сандыр тирәһе һ. б. ҡыҙарыуы, сейләнеүе)

**опры́скивание** *(дезин.)* һиптереү, һиптереп дезинфекциялау *(ҡара:* **дезинфекция)**

**опря́тность** бөхтәлек

**опсиури́я** опсиурия (һейҙектең бөйөрҙәр тарафынан аҙ бүленеүе; ҡан йөрөшө насарайғанда, бөйөрҙәр сирләгәндә һ. б. күҙәтелә)

**опсоменоре́я** опсоменорея (күрем килеү циклының боҙолоуы, күрем килмәүе 35 көндән ашыу ваҡытҡа һуҙыла)

**опсони́ны** опсониндар (фагоцитозға булышлыҡ итеүсе иммун матдәләр)

**о́птика** оптика (1. физиканың яҡтылыҡты өйрәнә торған бүлеге; 2. оптик приборҙарҙың, инструменттарҙың дөйөм исеме; төрҙәре: *о. очковая* күҙлек оптикаһы)

**оптикоэнцефали́т** оптикоэнцефалит (энцефалиттың баш мейеһе һәм күреү нервыларының зарарланыуы менән үтеүсе формаһы; ҡара: **энцефалит)**

**оптима́льный** оптималь (айырыуса килешле, мәҫ., оптималь йәшәү шарттары)

**оптими́зм** оптимизм (шат, яҡшы күңелле, киләсәккә ҙур ышаныс менән ҡарап йәшәү менән характерлы донъяға ҡараш)

**оптими́ст** оптимист (оптимистик тойғо менән йәшәгән кеше)

**опти́ческий** оптик (мәҫ., оптик быяла)

**о́пухоль** шеш (мәҫ., *о. доброкачественная* ябай (үтешле) шеш; мәҫ., май шеше — липома, һөйәл һ. б.; *о. злокачественная* яман (үтелешле) шеш, мәҫ., рак һ. б.)

**опуще́ние** *(анат.)* төшөү (ниндәй ҙә булһа ағзаның төшөүе йәки үҙ тәбиғи урынынан күсеүсән булыуы, мәҫ., *о. желудка* ашҡаҙан төшөүе; *о. матки* аналыҡ төшөүе; *о. почки* бөйөр төшөүе һ. б.)

**опыле́ние** *(дезин.)* бөркөү, һибеү (мәҫ., химик матдә бөркөү)
**опьяне́ние** иҫерeү (мәҫ., алкоголле иҫереү, наркотик иҫереү)
**орби́та** *(анат.)* орбита (күҙ соҡоро)
**орга́зм** оргазм (енси мөнәсәбәт ваҡытында алынған ләззәт тойғоһо)
**о́рган** орган, ағза (1. мәҫ., *о. зре́ния* күреү ағзалары, *о. ко́ртиев (спиральный)* кортий ағзаһы (эске ҡолаҡ өләшсәһе, унда ишетеү анализаторҙары урынлаша); *о. слуха* ишетеү ағзалары һ. б.; 2. учреждение, мәҫ., *о. здравоохранения* һаулыҡ һаҡлау органдары)
**органи́зм** организм (ниндәй ҙә булһа тере йән эйәһенең бөтә тәнкәүҙәһенә ҡарата ҡулланылған термин; мәҫ., кеше организмы)
**органо́иды** органоидтар (күҙәнәк цитоплазмаһындағы есемдәр)
**органоле́птика** органолептика (һиҙеү-тойоу ағзалары ярҙамында ниндәй ҙә булһа объектты тикшереү)
**органопла́стика** органопластика (ниндәй ҙә булһа ағзаны төҙөкләндереүгә йүнәлтелгән пластик операция)
**органотерапи́я (опотерапия)** органотерапия (хайуан ағзаларынан алынған матдәләрҙе, мәҫ., гормондарҙы дауалау маҡсатында ҡулланыу)
**ордина́тор** ординатор (1. дауалау учреждениеларында ауырыу кешеләрҙе дауалаусы врач; 2. *о. клинический* клиник ординатор (ике йыл буйы ниндәй ҙә булһа специальность (хирург, терапевт һ. б.) буйынса белемен күтәргән врач һ. б.)
**орнито́з** орнитоз (үҙенә бер төрлө вирус йоҡҡандан килгән үпкә шешеүе, температура күтәрелеүе һ. б. үҙгәрештәр менән үтеүсе инфекцион ауырыу, бер нисә төрө бар, кешегә ауырыу, гәҙәттә, сирле ҡоштарҙың йомортҡаһын ашауҙан йоға)
**ороговéние** ҡатыу, һөйәлләнеү (туҡымала мөгөҙ матдәнең барлыҡҡа килеүе, мәҫ., табандың (һөйәлләнеүе) ҡатыуы һ. б.)
**ороше́ние** *(мед.)* һиптереү, һиптереп йыуыу, сайҡау (мәҫ., тамаҡты һиптереп сайҡау)
**ортогени́я** ортогения (дөрөҫ тешләнеш: өҫкө тештәр аҫҡы тештәргә тура килә)
**ортогнати́я** ортогнатия (тешләнеш дөрөҫ түгел: өҫкө тештәр аҫҡы тештәргә ҡарағанда алғараҡ сығып тора)
**ортомиксови́русы** ортомиксовирустар (грипп вирустарын берләштергән вирустар ғаиләһе)
**ортопе́д** ортопед (ортопедия белгесе, врач)
**ортопеди́ческий** ортопедия, ортопедик (мәҫ., ортопедия фәне, ортопедик аяҡ кейеме)
**ортопеди́я** ортопедия (медицинаның хәрәкәтләнеү ағзалары зәғифлеген өйрәнеп, уларҙың дауапрофилактикаһы менән шөғөлләнгән тармағы)
**ортопно́э** ортопноэ (үтә ныҡ тын ҡурылыу)
**ортопоксви́русы** ортопоксвирустар (вирустарҙың бер төрө, улар араһында натураль сәсәк вирусы һ. б.)
**ортопсихиатри́я** ортопсихиатрия (психиатрияның психик ауырыуҙарға яҡын сирле күренештәрҙе өйрәнеүсе тармағы)
**ору́жие** ҡорал (мәҫ., бактериологик ҡорал, химик ҡорал)
**орхиалги́я** орхиалгия (күкәйҙә, кү-

кәй өсҭәмәләрендә, орлоҡ бауырында ауырыу-травма булмауға ҡарамаҫтан, ауыртыу һиҙеү)
**орхи́т** орхи́т (күкәй шешеүе)
**орхоэпидедими́т** орхоэпидедимит (күкәйҙең һәм күкәй өсҭәмәһенең бер юлы шешеүе)
**оса́док** *(лаб.)* ултырма, ҡуныҡ (мәҫ., һейҙек ултырмаһы)
**оса́нка** һын (һын-кәүҙә торошо)
**осветле́ние воды́** һыуҙың болғансыҡлығын бөтөрөү
**освеще́ние** 1. яҡтылыҡ (мәҫ., тәбиғи яҡтылыҡ); 2. яҡтыртыу (мәҫ., электр яҡтыртыу)
**освещённость** яҡтыртылыу, яҡтылыҡ кимәле
**освиде́тельствование** *(мед.)* тикшереү, тикшереп ҡарау (мәҫ., суд-медицина тикшереүе һ. б.)
**оси́плость го́лоса** тауыш ҡарлығыуы
**оско́лок** ярсыҡ (мәҫ., *о. мины* мина ярсығы; *о. кости* һөйәк ярсығы һ. б.)
**оско́мина** теш ҡамашыу (ҡамаштырыу)
**ослепле́ние** күҙҙе сағылдырыу (яҡтылыҡ көслө булһа йәки ҡапыл төшһә)
**осле́пнуть** һуҡырайыу, күҙҙән яҙыу
**осложне́ние (болезни)** ауырыу(ҙың) ҡатмарлашыуы (өҙлөгөүе, аҙып китеүе)
**осмотерапи́я** осмотерапия (венаға гипертоник һәм юғары молекуляр иретмә ебәреп дауалау)
**осмо́тр** осмотр, ҡарап тикшереү (мәҫ., *о. медицинский,* медицина осмотры; *о. профилактический* профилактик осмотр һ. б.)
**основа́ние** *(анат.)* нигеҙ (мәҫ., *о. сердца* йөрәк нигеҙе (йөрәктең өҫкә ҡараған йыуан өлөшө) һ. б.)
**о́спа** сәсәк (1. *о. натуральная* натураль сәсәк (үҙенә бер төрлө вирус йоҡҡандан килгән үтә етди инфекцион ауырыу); *о. чёрная* ҡара сәсәк (натураль сәсәктең бигерәк тә ҡаты үтеүсән төрө); 2. *о. ветряная* һыу сәсәге (нигеҙҙә, балалар араһында осраған, үҙенә бер төрлө вирус йоҡҡандан килгән инфекцион ауырыу); 3. *о. коровья* һыйыр малы сәсәге (үҙенә бер төрлө вирус йоҡҡандан килгән һыйыр малы инфекцион ауырыуы, һыйыр малын ҡарағанда, һауғанда кешегә лә йоғоусан)
**о́спина** шаҙра (натураль сәсәк шаҙраһы)
**оспопо́добный** сәсәк һымаҡ (мәҫ., сәсәк һымаҡ ауырыу)
**оспопривива́ние** сәсәк һалыу
**оспоприви́ватель** сәсәк һалыусы
**оссифика́ция** оссификация *(ҡара:* **окостенение**)
**остано́вка** *(мед.)* туҡтау, туҡтатыу, өҙөлөү (мәҫ., ҡан ағыуҙы туҡтатыу, тын алыуҙың туҡтауы һ. б.)
**остеоартри́т** остеоартрит (быуын һәм быуын эсендә тоташҡан һөйәк остарының бер юлы шешеүе)
**остеоартро́з** остеоартроз (*ҡара:* **артроз**)
**остеоартропати́я** остеоартропатия (быуын һәм быуын эсендә тоташҡан һөйәк остарының шешеүһеҙ үтеүсе хроник ауырыуы)
**остеодистрофи́я** остеодистрофия (туҡымаларҙа барған матдәләр алмашыныуы боҙолоу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән һөйәктең дистрофик үҙгәреүе; *ҡара* **дистрофия**)
**остеоклази́я** остеоклазия (1. зәғифләнгән һөйәккә пластик опера-

ция яһағанда уны башта яһалма рәүештә һындырыу; 2. эзбизләнгән кимерсәк һәм һөйәк туҡымаһының резорбцияһы; *ҡара:* **резорбция**)

**остеóма** остеома (һөйәк туҡымаһынан торған ябай шеш)

**остеомаля́ция** остеомаляция (ғәҙәттә, йөклө ҡатындарҙа күҙәтелгән һөйәктәрҙең йомшарыуы)

**остеомиели́т** остеомиелит (һөйәктең кимеге, эргәләге компакт матдәһе һәм һөйәк ярыһының бер юлы шешеүе; төрҙәре: *о. гнойный* эренле остеомиелит; *о. туберкулезный* туберкулез остеомиелиты һ. б.)

**остеомиелофибрóз** остеомиелофиброз (һөйәк ҡыуышлыҡтарында тоташтырғыс һәм һөйәк туҡымалары үҫеш алыуы менән характерлы ауырыу)

**остеомикóз** остеомикоз (һөйәк туҡымаһында барлыҡҡа килгән бәшмәк ауырыуы, мәҫ., актиномикоз; *ҡара:* **актиномикоз**)

**остеонекрóз** остеонекроз (һөйәк туҡымаһында барлыҡҡа килгән некроз; *ҡара* **некроз**)

**остеопати́я** остеопатия (бер төркөм һөйәк ауырыуҙарының дөйөмләштерелгән исеме)

**остеопериости́т** остеопериостит (һөйәк һәм һөйәк ярыһының бер юлы шешеүе)

**остеопойкили́я** остеопойкилия (күпшәле һөйәктәрҙең дөрөҫ үҫешмәүе менән үтеүсе нәҫел ауырыуы)

**остеопла́стика** остеопластика (һөйәккә пластик операция яһау)

**остеопорóз** остеопороз (һөйәк туҡымаһының тығыҙланыуы кәмеү менән характерлы дистрофик ауырыу)

**остеосаркóма** остеосаркома (һөйәк туҡымаһында барлыҡҡа килгән саркома шеше; *ҡара:* **саркома**)

**остеоси́нтез** остеосинтез (һынған һөйәк остарын тоташтырыу операцияһы)

**остеосклерóз** остеосклероз (ауырыу һөҙөмтәһендә һөйәк туҡымаһының артыҡ эшләп сығарылыуы һәм ныҡ тығыҙланыуы)

**остеотоми́я** остеотомия (һөйәкте тишеү йәки ярыу операцияһы)

**остеофибрóз** остеофиброз (һөйәктә тоташтырғыс туҡымаһының үҫеш алыуы)

**остеохондри́т** остеохондрит (бер юлы һөйәктең һәм уны ҡаплаған кимерсәктең шешеүе)

**остеохондрóз** остеохондроз (һөйәктең һәм һөйәкте ҡаплаған кимерсәктең дистрофик үҙгәреүе, мәҫ., умыртҡа бағанаһы остеохондрозы)

**остеохондропати́я** остеохондропатия (һөйәктә һәм һөйәк остарын ҡаплаусы кимерсәктә булған дистрофик ауырыуҙарҙың дөйөмләштерелгән исеме)

**ости́т** остит (компакт һөйәктең шешеүе йәки дистрофик үҙгәреүе)

**остри́ца** бабасыр (ваҡ йомро паразит селәү)

**острогла́зый** *(разг.)* үткер күҙле

**острота́** *(мед.)* үткерлек, сослоҡ (мәҫ., *о. зрения* күреү үткерлеге; *о. слуха* ишетеү сослоғо)

**óстрый** *(мед.)* киҫкен (мәҫ., киҫкен ауыртыу, киҫкен ауырыу)

**ость** *(анат.)* һырт (осло үҫенте, сығынты) мәҫ., *о. подбородочная* эйәк һырты

**осумкóванный** *(мед.)* ит үргән, ҡаплы (мәҫ., ит үргән ят есем)

**осу́нуться** *(разг.)* һурылыу, ябығыу

**ось** күсәр (мәҫ., *о. зрительная* күреү күсәре)

**осяза́ние** тейгәнде тойоу (һиҙеү)

**отал́гия** оталгия (ҡолаҡ япрағы һәм ҡолаҡ тишегендә ауырыу билдәләре булмауға ҡарамаҫтан ауыртыу)

**отбро́сы** ташландыҡ, сүп-сар

**отва́р** *(лек.)* ҡайнатма, һарҡынды (шифалы үләндән ҡайнатып алынған шыйыҡ дарыу)

**отве́рстие** *(анат.)* тишек (мәҫ., *о. зева* тамаҡ (тарлығы) тишеге; *о. матки* аналыҡ тишеге һ. б.)

**отде́л** *(в мед.)* бүлек (мәҫ., һаулыҡ һаҡлау эштәре бүлеге)

**отделе́ние** *(в мед.)* бүлексә (мәҫ., больницала: терапия бүлексәһе, хирургия бүлексәһе һ. б.)

**отделя́емое** бүлендек (ғәҙәттә, һүҙ яра-йәрәхәттән килгән эренле бүлендек хаҡында бара, мәҫ., эренле бүлендек)

**о́тдых** ял (мәҫ., *о. активный* актив ял; *о. пассивный* пассив ял)

**отёк** шешенеү (төрҙәре: *о. голодный* аслыҡтан шешенеү; *о. мозга* (баш) мейеһе шешенеүе; *о. легких* үпкә шешенеүе; *о. общий* дөйөм шешенеү; *о. почечный* бөйөрҙән шешенеү (бөйөр ауырыуынан килгән тән шешенеүе); *о. сердечный* йөрәктән шешенеү (йөрәк ауырыуынан килгән шешенеү); *о. беременных* йөклө ҡатындар шешенеүе һ. б.)

**отёчность** шешенгәнлек (мәҫ., *о. века* күҙ ҡабағы шешенгәнлеге)

**отёчный** шешенгән

**отиатри́я** отиатрия (медицинаның ҡолаҡ төҙөлөшө, ҡолаҡ ауырыуҙары һәм уларҙы дауалау хаҡындағы бүлеге)

**оти́т** отит (ҡолаҡтың шешеүе: *о. внутренний* эске ҡолаҡ шешеүе; *о. наружный* тышҡы ҡолаҡ тишеге һәм япрағы шешеүе; *о. средний* урта ҡолаҡ шешеүе; *о. хронический* хроник отит (һүҙ ғәҙәттә урта ҡолаҡ (барабан ҡыуышлығы) шешеүе хаҡында бара) һ. б.

**отложе́ние** (солей) тоҙ (йыйылыуы) ултырмаһы (ҡайһы бер ауырыу үҙгәрештәре һөҙөмтәһендә теге йәки был ағза-туҡымала минераль тоҙҙар ултырыуы, ҡуныуы)

**отло́мок** (кости) һөйәк һынығы (эре ярсыҡ)

**отмороже́ние** туңдырыу, туңыу (тәндең берәй ерен туңдырыу, уның дүрт дәрәжәһе бар: I, II, III, IV)

**отня́тие** (**отлучение**) **ребенка от груди** имсәк ташлатыу

**отоге́нный** отоген (ҡолаҡҡа ҡағылышлы)

**отоларинго́лог** отоларинголог (ҡолаҡ, танау, тамаҡ, ҡурылдай ауырыуҙары буйынса врач)

**отоли́ты** отолиттар (эске ҡолаҡта урынлашыусы һәм организмдың арауыҡта (пространствола) дөрөҫ тотолошон тәьмин итеүсе кристалл рәүешендәге есемдәр)

**отомико́з** отомикоз (ҡолаҡ тишегендә күҙәтелгән бәшмәк ауырыуы)

**отопла́стика** отопластика (ҡолаҡ япрағына яһала торған пластик операция)

**отоpе́я** оторея (ҡолаҡтан эрен килеү)

**оториноларингологи́ческий** оториноларингология, оториноларингологик (мәҫ., оториноларингология бүлексәһе)

**оториноларинголо́гия** оториноларингология (медицинаның ҡолаҡ, танау тәңгәле ҡыуышлыҡтары, тамаҡ һәм ҡурылдай ауырыуҙарын, уларҙы дауалау

һәм профилактик юлдарын өйрәнеүсе тармағы)

**отосклеро́з** отосклероз (әске ҡолаҡтың һаңғыраулыҡ менән тамамланған дауамлы дистрофик ауырыуы)

**отосклеро́ма** отосклерома (склерома үҙгәрештәренең урта ҡолаҡ ҡыуышлығында, ҡолаҡ тишегендә барлыҡҡа килеүе; *ҡара:* **склерома**)

**отоскопи́я** отоскопия (ҡолаҡты маңлай рефлекторы һәм ҡолаҡ көҙгөһө ярҙамында тикшереү)

**отправле́ния физиологи́ческие,** физиологик функциялар (мәҫ., ашау-эсеү, йоҡлау һ. б.)

**отра́ва** ағыу

**отравле́ние (интоксика́ция)** ағыуланыу (төрҙәре: *о. алкогольное* алкоголдән ағыуланыу; *о. медикаментозное* медикаментоз ағыуланыу; *о. острое* киҫкен ағыуланыу; *о. пищевое* аҙыҡтан ағыуланыу һ. б., шулай уҡ *ҡара:* **интоксикация**)

**отравля́ющий** ағыулатҡыс

**отрезвле́ние** айныу

**отро́сток** *(анат.)* үҫенте, мәҫ., *о. височной кости шиловидный* сикә һөйәгенең беҙ үҫентеһе; *о. локтевой* терһәк (һөйәге) үҫентеһе; *о. плечевой* ҡулбаш (һөйәге) үҫентеһе

**отры́жка** кикереү, кикертеү

**отсло́йка** ҡубыу (ауырыу күренеше; *о. плаценты* плацентаның (бала ятҡылығының) ҡубыуы (бәпесләүҙең ҡатмарлашыуы); *о. сетчатой оболочки* күҙҙең селтәрле ҡатламы ҡубыуы (үтә етди ауырыу һ. б.)

**отста́лость (развития)** артта ҡалғанлыҡ, мәҫ., *о. умственная* аҡыл үҫешенең артта ҡалғанлығы; *о. физическая* физик үҫештең артта ҡалғанлығы һ. б.)

**отсу́тствие** юҡлыҡ, мәҫ., аппетит юҡлығы

**отха́ркивание** ҡаҡырыҡ сығарыу, ҡаҡырыу

**отха́ркивающий** ҡаҡыртҡыс (мәҫ., ҡаҡыртҡыс дарыу)

**отхо́ды** ҡалдыҡтар

**отхо́жее ме́сто** *ҡара:* **туалет**

**офтальми́я** офтальмия (күҙҙең бер төркөм шешеүенең дөйөм исеме; төрө: *о. снежная* ҡар офтальмияһы (ҡояш төшкәндән, ҡарбоҙға ҡарауҙан күҙҙәрҙең шешеүе) һ. б.)

**офтальмогельминто́з** офтальмогельминтоз (күҙ туҡымаһында барлыҡҡа килгән гельминтоз ауырыуы; *ҡара:* **гельминтоз**)

**офтальмо́лог** офтальмолог (офтальмология белгесе, врач)

**офтальмоло́гия** офтальмология (медицинаның күҙ ауырыуҙарын һәм күреү етешһеҙлектәрен, уларҙы дауалау һәм булдырмау юлдарын өйрәнеүсе тармағы)

**офтальмомико́з** офтальмомикоз (күҙҙәрҙе зарарлау менән үтеүсе бәшмәк ауырыуы)

**офтальмомикрохирурги́я** офтальмомикрохирургия (күҙгә яһала торған микрохирургик операциялар; *ҡара:* **микрохирургия**)

**офтальмоонколо́гия** офтальмоонкология (офтальмология һәм онкологияның күҙ алмаһында, күҙ соҡоронда барлыҡҡа килеүсе шештәрҙе өйрәнеүсе тармағы)

**офтальмоскопи́я** офтальмоскопия (офтальмоскоп приборы ярҙамында күҙ шекәрәләрен күреү)

**офтальмоплеги́я** офтальмоплегия (күҙ мускулдары параличы; *ҡара:* **паралич**)

нервы дискыһын өйрәнеү ысулы)

**офтальмохирургия** офтальмохирургия (офтальмологияның күҙ ауырыуҙарын хирургик ысул менән дауалау юлдарын өйрәнеүсе тармағы)

**охра́на** һаҡ, һаҡлау (мәҫ., *о. внешней среды* тирә-яҡ мөхитте һаҡлау; *о. материнства и детства* әсәлекте һәм балалыҡты һаҡлау; *о. санитарная* санитария һағы һ. б.)

**охри́плость (голоса)** тауыш ҡарлығыуы

**оцепене́ние** ҡатып (аптырап) ҡалыу

**оча́г** сығанаҡ (мәҫ., *о. болезни* ауырыу сығанағы; *о. инфекционной болезни* йоғошло ауырыу сығанағы һ. б.)

**очаго́вость природная** тәбиғәт сығанаҡлығы (ҡайһы бер йоғошло ауырыуҙар сығанағының ҡыр йәнлектәренең бер төрөнән икенсеһенә күсеү рәүешендә һаҡланыуы)

**очаго́вый** сикле, сикләнгән, сығанаҡлы (мәҫ., сикле процесс)

**очи́стка** таҙартыу (мәҫ., һыуҙы таҙартыу)

**очки́** күҙлек (төрҙәре: *о. защитные (предохранительные)* һаҡлағыс күҙлек; *о. контактные* контакт күҙлек (күҙлек быялаһы күҙ өҫтөнә һалына); *о. корригирующие* коррекциялау күҙлеге (күреүҙе яҡшырта торған күҙлек); *о. солнце-защитные (дымчатые)* ҡояштан һаҡлағыс күҙлек; *о. телескопические* телескопик күҙлек (күреү һәләтлеге бик түбән булғанда ҡулланылыусы бер нисә быяланан торған күҙлек) һ. б.)

**оши́бка** хата (мәҫ., *о. врачебная* врач(лыҡ) хатаһы; *о. диагностическая* диагнозлау (ауырыуҙы асыҡлау) хатаһы һ. б.)

**ошпа́ривание** 1. бешекләү (мәҫ., емеште); 2. бешеү, бешереү (мәҫ., ҡулды бешереү)

**ощу́пывание** ҡапшау, ҡапшап ҡарау (мәҫ., сирлене ҡапшап (ҡарау) тикшереү)

**ощуще́ние** 1. тойғо; 2. һиҙеү, һиҙенеү, тойоу (мәҫ., *о. боли* ауыртыуҙы тойоу тойғоһо; *о. фантомное* фантом тойғоһо; *ҡара:* **боль фантомная**) һ. б.

# П

**паду́чая** *ҡара:* **эпилепсия**

**па́зуха** *(анат.)* ҡыуышлыҡ (мәҫ., *п. верхнечелюстная* өҫкө яңаҡ ҡыуышлығы һ. б.)

**паке́т** пакет (мәҫ., *п. индивидуальный* индивидуаль пакет

**пала́та** палата (стационар дауалау учреждениеһында ауырыу кешеләр, йөклө ҡатындар һ. б.-ға ятаҡ бүлмә, мәҫ., *п. больничная* больница палатаһы һ. б.)

**пала́тка кислородная** кислород палаткаһы (кислород менән дауалау ҡоролмаһы)

**па́лец** бармаҡ (мәҫ., *п. кисти (руки)* ҡул (суғы) бармағы; төрҙәре: *п. большой* баш бармаҡ; *п. наименьший* сәтәкәй (бәпес) бармаҡ; *п. средний* урта бармаҡ; *п. указательный* һуҡ бармаҡ

**па́лочка** *(микроб.)* таяҡса (оҙонса һәм тура бактерияларҙың дөйөм исеме; мәҫ., *п. ботулизма* ботулизм таяҡсаһы; *п. дифтерии* дифтерия таяҡсаһы һ. б.)

**па́лочки и ко́лбочки глаза** күҙ таяҡсалары һәм колбочкалары (күҙҙең селтәрле шекәрәһендәге

яҡтылыҡ нурҙарын ҡабул итеүсе күҙәнәктәр — күреү рецепторҙары)

**пальпа́ция** пальпация, пальпациялау (ауырыу кешене ҡапшап ҡарау рәүешендәге тикшереү; төрҙәре: *п. глубокая* тәрән пальпация; *п. поверхностная* өҫтөн пальпация һ. б.)

**пальпи́ровать** пальпация үткәреү

**па́льцы бараба́нные (гиппократовы)** барабан (Гиппократ) бармаҡтары (ауырыу һөҙөмтәһендә ҡул бармаҡ остарының ҡалынайып үҙгәреүе)

**па́мятка больному** ауырыу (сирле) кешегә иҫкәртмә (санитария-ағартыу эшенең баҫма төрҙәренең береһе)

**па́мять** хәтер (зиһен)

**паналги́я** паналгия (бөтә тәндә ауыртыу тойоу)

**панари́ций** панариций (бармаҡ туҡымаһының киҫкен эренләп шешеүе, ғәҙәттә ашығыс хирургик ярҙам талап ителә; төрҙәре: *п. кожный* тире панарицийы; *п. костный* һөйәк панарицийы; *п. околоногтевой* тырнаҡ шәбеһе панарицийы; *п. подкожный* тире аҫты панарицийы; *п. подногтевой* тырнаҡ аҫты панарицийы; *п. суставной* бармаҡ быуыны панарицийы; *п. сухожильный* һеңер панарицийы)

**панаорти́т** панаортит (аортаның бөтә ҡатламдарының шешеүе)

**панартерии́т** панартериит (артерияның бөтә ҡатламдарының шешеүе)

**панартри́т** панартрит (1. быуындың бөтә ҡатламдарының шешеүе; 2. бөтә быуындарҙың шешеүе)

**панаце́я** панацея (бөтә ауырыу кешеләргә һәм бөтә ауырыуҙарҙан да ярҙам итергә тейеш булған универсаль дарыу (ундай дарыуҙы алхимиктар эҙләгән, ләкин ундай дарыу табылмаған)

**пангидро́з** пангидроз (бөтә тәндең ныҡ тирләүе)

**пандактили́т** пандактилит (бармаҡтың бөтә ҡатламдары зарарланыу менән билдәләнгән эренләп шешеүе)

**пандеми́ческий** пандемик, пандемия (пандемияға ҡағылышлы)

**пандеми́я** пандемия (илдең күпселек өлөшөнә йәки бер нисә илгә таралған эпидемик ауырыу)

**панкарди́т** панкардит (йөрәктең бөтә ҡатламдары шешеүе)

**панкреати́т** панкреатит (ашҡаҙан аҫты биҙенең шешеүе)

**панмиелофти́з (аплазия костного мозга)** панмиелофтиз (ҡыҙыл кимектә ҡан эшләп сығарыусы туҡыманың киҫкен кәмеүе; етди ауырыу күренеше)

**панникули́т** панникулит (тоташтырғыс туҡымаһы ныҡ үҫеш алыу менән характерлы тире аҫты туҡымаһының шешеүе)

**па́ннус** паннус (ҡайһы бер күҙ ауырыуы һөҙөмтәһендә күҙҙең мөгөҙсә шекәрәһенең дауамлы шешеүе һәм бара тора күреү һәләтлегенең юғалыуы, мәҫ., трахома паннусы)

**паноти́т** панотит (урта һәм эске ҡолаҡтың бер юлы шешеүе)

**панофтальми́т** панофтальмит (күҙҙең бөтә ҡатламдарының эренләп шешеүе)

**пансерози́т** пансерозит (бөтә сероз шекәрәләрҙең (күкрәктә, ҡорһаҡта һ. б. ерҙә) бер юлы шешеүе)

**пансинуси́т** пансинусит (танауҙың бөтә өҫтәмә ҡыуышлыҡтарының

(маңлай, өҫкө яңаҡ һ. б.) бер юлы шешеүе)

**пантокри́н** пантокрин (болан мөгөҙөнән алынып, нервы системаһы ҡаҡшауын дауалау өсөн ҡулланылыусы дарыу)

**панэнцефали́т** панэнцефалит (баш мейеһенең аҡ һәм һоро матдәләренең бер юлы шешеүе)

**папилли́т** папиллит (1. теш араһы имсәһенең шешеүе; 2. күреү нервыһы дискыһының шешеүе; 3. бөйөр имсәләренең шешеүе)

**папилло́ма** папиллома (тиреlә һәм тиресәлә күҙәтелгән ябай эпителиаль шеш, мәҫ., ҡурылдай папилломаһы)

**папиллома́то́з** папилломатоз (папиллома шештәренең күп һанда барлыҡҡа килеүе)

**па́поротник мужской** ҡара һарына (нигеҙҙә, паразит селәүҙәрҙән дарыу бирә торған үлән)

**паппа́тачи** *ҡара:* **лихорадка флеботомная**

**па́пула** папула (арпа, дөгө ярмаһы ҙурлығындағы ҡыуышһыҙ тире сабыртмаһы бөртөгө)

**парааллерге́н** парааллерген (парааллергия күренешен тыуҙырыусы аллерген)

**парааллерги́я** парааллергия (аллергияның бер төрө: бер специфик матдәнән тыш, тағы ла өҫтәмә матдәләргә ҡарата барлыҡҡа килгән аллергик реакция)

**парабио́з** парабиоз (1. организмдың йәшәү менән үлем араһында булған физиологик торошо; 2. эксперимент рәүешендә ике йәки бер-нисә хайуанды оператив юл менән тоташтырыу; улар ошондай хәлдә тереклек итә ала)

**параганглий** параганглий (эре ҡан тамырҙары парасимпатик нервылар тирәһендә урынлашыусы төйөр рәүешендәге ағзалар: хромаффин күҙәнәктәре тупланыштарынан һәм хеморецепторҙан тора)

**парагангліо́ма** параганглиома (бөйөр өҫтө биҙендәге хромаффин тупланыштарынан барлыҡҡа килгән ябай шеш)

**парагонимо́з** парагонимоз (үҙенә бер төрлө паразит селәү йоғоуҙан килгән гельминтоз ауырыуы, нигеҙҙә, үпкә зарарлана; парагонимоз көнсығыш илдәрҙә күҙәтелә)

**парагри́пп** парагрипп (үҙенә бер төрлө вирус йоғоуҙан килгән киҫкен респиратор ауырыу)

**парази́т** паразит (паразитизм характерҙа йәшәүсе зат)

**паразитеми́я** паразитемия (паразит заттарҙың ҡанда булыуы)

**паразити́зм** паразитизм (хайуандар һәм үҫемлектәр донъяһында бер заттың икенсеһе иҫәбенә зарар килтереп йәшәүе, мәҫ., паразит селәүҙәр кешелә йәшәй)

**паразити́ческий** паразит, паразитик (мәҫ., паразит селәү, паразитар ауырыу)

**паразито́лог** паразитолог (паразитология белгесе)

**паразитоло́гия** паразитология (паразит заттарҙы һәм уларға ҡаршы көрәшеү юлдарын өйрәнә торған фән)

**паразитоноси́тель** паразит йөрөтөүсе

**паразитоноси́тельство** паразит йөрөтөүсәнлек (организмда ниндәйҙә булһа паразит затты йөрөтөү, әммә беленерлек ауырыу үҙгәрештәре булмай)

**паразитоцено́з** паразитоценоз (организмда эйәләшкән бөтә паразит заттарҙың бергәлеге)

**паракератóз** паракератоз (эпидермистың сирле үҙгәрешенең бер төрө; *ҡара:* **эпидермис**)

**паракóклюш** паракоклюш (коклюшка оҡшаш, үҙенә бер төрлө микроб йоғоуҙан килгән киҫкен инфекцион ауырыу)

**параколи́т** параколит (йыуан эсәк артында ятҡан туҡыманың шешеүе)

**парализóванный** паралич һуҡҡан (кеше)

**парали́зовать** паралич һуғыу

**парали́ч** паралич, фалиж (1. нервы системаһы зарарланыу һөҙөмтәһендә хәрәкәтсәнлектең юғалыуы; төрҙәре: *п. аккомодации* аккомодация параличы (күҙҙең ҡайһы бер мускулдары параличы һөҙөмтәһендә күреү һәләтлелегенең түбәнәйеүе); *п. бульбарный* бульбар паралич (баш мейеһе нервыларының оҙонса мейе йәҙрәләре зарарланыуҙан килә һ. б.); 2. *п. дрожательный* ҡалтыраҡҡыс паралич (тән ҡалтырау һ. б. билдәләр менән үтеүсе нәҫелдән килгән дауамлы баш мейеһе ауырыуы); 3. *п. прогрессивный* прогрессив паралич (сифилистың аҙаҡҡы дәүерендә барлыҡҡа килгән психик ауырыу) һ. б.)

**параметри́т** параметрит (аналыҡ эргәһендәге туҡыманың шешеүе)

**парамиксови́русы** парамиксовирустар (бер төркөм, шул иҫәптән эпидемик паротит, парагриппоз инфекциялар тыуҙырыусы вирустар)

**парамнези́я** парамнезия (ҡайһы бер психик ауырыу ваҡытындағы күренеш: булмаған хәлде ысын итеп хәтерләү)

**паранестези́я** паранестезия (тәндең симметрик урындарында һиҙеүсәнлектең юғалыуы, мәҫ., ике ҡулда ла)

**паранефри́т** паранефрит (бөйөр эргәһендәге туҡыманың шешеүе)

**паранóид** параноид (яңылыш уйлау, төрлө нәмә күреү һәм ишетеү менән характерлы психоз; *ҡара:* **психоз**)

**паранóйя** паранойя (илереү күренештәре менән характерлы психик һаулыҡтың ҡаҡшауы)

**парапарéз** парапарез (ике ҡулдың йәки ике аяҡтың парезы; *ҡара:* **парез**)

**параплеври́т** параплеврит (ҡабырға плевраһы аҫтындағы туҡыманың шешеүе)

**параплеги́я** параплегия (ике ҡулдың йәки ике аяҡтың да параличы; *ҡара:* **паралич**)

**парапрокти́т** парапроктит (тура эсәк тәңгәлендәге туҡыманың шешеүе)

**парапростати́т** парапростатит (простата биҙе тәңгәлендәге туҡыманың шешеүе)

**парапсихолóгия** парапсихология (бер кешенең нервы-психик хәлен алыҫта йәшәгән икенсе кешегә еткереү һәм башҡа психик йоғонто мәсьәләләрен өйрәнеүсе психологик эҙләнеүҙәр, ошо өлкәлә булған күп фекерҙәр фәнни яҡтан нигеҙләнмәгән)

**парапсориáз** парапсориаз (бер төркөм ҡысытыуһыҙ үткән тире ауырыуҙарының дөйөм исеме)

**парати́ф** паратиф (сальмонеллез рәтенә ингән ҡайһы бер бактериялар йоғоуҙан килгән һәм бер аҙ ҡорһаҡ тифына оҡшаш ауырыу; төрҙәре: *п. A* A паратифы; *п. B.* B паратифы; *п. C* C паратифы)

**паратонзилли́т** паратонзиллит

(кесе тел миндалинаһы эргәһендәге туҡыманың шешеүе)

**парауретери́т** парауретерит (һейҙек үткәргес көпшә эргәһендәге туҡыманың шешеүе)

**парауретри́т** парауретрит (һейеү каналы тәңгәлендәге аномаль үҫештән килгән юлдарҙың шешеүе)

**парафимо́з** парафимоз (енес ағза башының ҡаҫа менән ҡыҫылыуы)

**парафинотерапи́я** парафинотерапия (парафин менән дауалау)

**парафрени́я** парафрения (бер нисә психик ауырыуҙарға хас илереү: ишетеү, күреү һ. б. галлюцинациялар менән характерлы психик һаулыҡтың ҡаҡшауы)

**параценте́з** парацентез (тишеү операцияһы, мәҫ., ҡолаҡ ярыһы парацентезы)

**парацисти́т** парацистит (һейҙек ҡыуығы тәңгәлендәге туҡыманың шешеүе)

**паре́з** парез (иннервацияһы боҙолоу сәбәпле ҡайһы бер мускулдарҙың көсө һәм хәрәкәтсәнлегенең түбәнәйеүе)

**паренте́ральный** парентераль (аш һеңдереү юлынан тыш, мәҫ., парентераль юл (укол) менән дарыу индереү)

**паренхи́ма** паренхима (ҡайһы бер эске ағзаларҙың төп туҡымаһы, мәҫ., бауыр паренхимаһы)

**парестези́я** парестезия (неврит, радикулит кеүек ауырыу булғанда тәндә сәнсеү, ҡырмыҫҡа йөрөгән һымаҡ тойғо булыуы)

**паркинсони́зм** паркинсонизм (тәндең айырым ағзалары тартышыуы йәки ҡалтырауы менән характерлы күренеш; ул эпидемик энцефалит, баш мейеһе тамырҙары атеросклерозы, Паркинсон ауырыуы һ. б. булғанда күҙәтелә)

**пародо́нт** парадонт (тештәрҙе беркетеп тороусы анатомик аппарат: теш ите, теш тамыры ярыһы һ. б.)

**пародонто́з** пародонтоз (теш һөйәгенең ашалыуы, теш итенең шешеүе һәм тештәрҙең ҡаҡшауы менән характерлы ауырыу)

**пародонтопати́я** пародонтопатия (теш тамыры ярыһы, теш ите һ. б. теш тамыры эргәһендәге туҡыма ауырыуҙарының дөйөм исеме)

**пароксі́зм** пароксизм (ауырыуҙың ҡапыл барлыҡҡа килеп тороуы йәки ҡыҫҡа ваҡытҡа киҫкенләшеүе)

**пароксизма́льный** пароксизмаль (пароксизмға ҡағылышлы)

**паронихи́я** паронихия (тырнаҡ ситтәрендәге туҡыманың шешеүе)

**пароти́т** паротит (ҡолаҡ артындағы ауыҙ һыуы биҙенең шешеүе; төрҙәре: *п. эпидемический* эпидемик паротит (үҙенә бер төрлө вирус йоҡҡандан килгән һәм күпселектә балалар араһында күҙәтелеүсән йоғошло ауырыу) һ. б.)

**па́ста** паста (ҡамыр һымаҡ ҡуйы дауа йәки гигиеник май, мәҫ., *п. защитная* һаҡлағыс паста (ҡулдарҙы зарарлы тәьҫирҙән һаҡлау өсөн гигиеник препарат); *п. зубная* теш пастаһы; *п. цинковая* цинк пастаһы (дауа майы) һ. б.)

**парша́** таҙ (*ҡара:* **фавус**)

**пастереллёз** пастереллез (пастерелла исемле бактериялар йоғоуҙан килгән бер төркөм инфекцион ауырыуҙар, кеше был

ауырыуҙы, ғәҙәттә, йорт хайуандары тешләүенән йоҡтора)
**пастеризация** пастеризация, пастеризациялау (органик шыйыҡсаларҙы, шул иҫәптән шыйыҡ ашамлыҡты — 100 градусҡа бер аҙ еткерелмәгән температурала йылытыу рәүешендә зарарһыҙлау; микроорганизмдың вегетатив формаларын ҡырыу)
**пастеризовать** пастеризациялау (*кара:* **пастеризация**)
**пастилка** пастилка (эре төймә рәүешендәге дарыу формаһы)
**пастозность** пастозлыҡ (шешенгәнлек, мәҫ., бит пастозлығы)
**патогенез** патогенез (ауырыуҙың йәки ауырыу процесының барлыҡҡа килеүе һәм үҫеше)
**патогенность** патогенлыҡ (ауырыу тыуҙырырға һәләтле булыу)
**патогенный** патоген (ауырыу тыуҙырғыс, мәҫ., патоген бактерия)
**патологический** патологик (патологияға ҡағылышлы)
**патология** патология (1. ауырыу барышын һәм ауырыу ваҡытында булған үҙгәрештәрҙе өйрәнә торған фән; патанатомия менән патофизиологиянан тора; төрҙәре: *п. общая* дөйөм патология; *п. частная* хосуси патология һ. б.);
2. һәр бер норманан тайпылыу)
**патоморфоз** патоморфоз (тышҡы йоғонтолар һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән ауырыуҙың төп һәм даими билдәләре)
**патопсихология** патопсихология (психологияның психик һаулыҡтың ҡаҡшауын өйрәнеүсе тармағы)
**патофизиология** *кара:* **физиология патологическая**)
**патронаж** патронаж (1. торлаҡ шарттарында башҡарылған медицина күҙәтеүе, мәҫ., *п. беременных* йөклө ҡатындар патронажы; 2. яңғыҙ һәм ныҡ ҡартайған ауырыу кешеләргә, һуғыш һәм хеҙмәт ветерандарына Ҡыҙыл Тәре һәм Ҡыҙыл Ярым ай йәмғиәте тарафынан медицина-социаль ярҙам күрһәтеү)
**пах** сандыр (бот төбө өлкәһе)
**пахидермия** пахидермия (1. тыуыштан килгән тире ҡалынайыуы һәм ҡатыуы менән үткән ауырыу; 2. *кара:* **болезнь слоновая**)
**пахименингит** пахименингит (баш йәки арҡа мейеһенең итле шекәрәһе шешеүе)
**пахионихия** пахионихия (тырнаҡ аҫты шәбеһенең ҡалынайып үҙгәреүе)
**пациент(ка)** пациент, пациентка (медицина ярҙамын алыусы кеше)
**педаудиология** педаудиология (ҡолаҡҡа ҡаты дефектлы балаларҙы тәрбиәләү һәм уҡытыу методтарының бергәлеге)
**педераст** педераст (гомосексуализмға бирелгән кеше)
**педерастия** педерастия (ирҙәрҙә булған гомосексуализм)
**педиатр** педиатр (педиатрия белгесе, балалар дауалаусы врач)
**педиатрический** педиатрия, педиатрик (мәҫ., педиатрия участкаһы, педиатрик ауырыу)
**педиатрия** педиатрия (медицинаның балалар ауырыуҙарын һәм уларҙы дауалау юлдарын өйрәнә торған бүлеге)
**педикулез** педикулез (бетләү)
**педикюр** педикюр (аяҡ бармаҡтарын махсус тәрбиәләү: таҙартыу, буятыу һ. б.)
**педофилия** педофилия (балаларға

ҡарата булған гомосексуализм, *ҡара:* **гомосексуализм)**
**пеленáние (ребенка)** баланы биләү, йүргәккә урау
**пелёнка** йүргәк, биләү, биләм
**пеллáгра** пеллагра (туҡланыуҙа дауамлы рәүештә РР витамины етмәгәнлектән килгән авитаминоз ауырыуы)
**пелоидотерапи́я** пелоидотерапия (шифалы ләм менән дауалау)
**пельвиоперитони́т** пельвиоперитонит (янбаш эсе менән сикләнгән ҡорһаҡ шекәрәһенең шешеүе; *ҡара:* **перитонит)**
**пéмза** күбек таш
**пéмфигус** *ҡара:* **пузырчатка**
**пенди́нка** *(разг.)* пендинка *(ҡара:* **лейшманиоз кожный)**
**пенснé** пенсне (күҙлектең бер төрө)
**пенетрáция** пенетрация (ашҡаҙан йәки бөйән эсәгенең сей яра ауырыуы һөҙөмтәһендә тишелеүенең бер төрө)
**пеницилли́н** пенициллин (пенициллий исемле үҙәҙ бүлеп сығарған антибиотик, бер нисә төрө бар)
**пенициллинотерапи́я** пенициллинотерапия (пенициллин менән дауалау)
**пенициллиоз** пенициллиоз (пенициллий үҙәҙе тыуҙырған бәшмәк ауырыуы, ғәҙәттә тире һәм тиресә ҡатламдары зарарланыусан)
**пентовакци́на** пентовакцина (бер юлы биш йоғошло ауырыуға ҡаршы әҙерләнгән вакцина)
**пепси́н** пепсин (ашҡаҙан һуты ферменты, малдан алынғаны дауалау өсөн ҡулланыла)
**первéрсии** перверсиялар *(ҡара:* **извращение половое)**
**пéрвенец** *(разг.)* баш бала
**перворожáщая** беренсе тапҡыр бәпесләүсе (ҡатын)

**перебóи сердца** *ҡара:* **аритмия (сердца)**
**переболéвший** ауырыу кисергән (үткәргән) кеше
**переболéть** ауырыу (сир) кисереү (үткәреү)
**перевáривание (пищи)** аш ҡайнау (һеңдереү, үҙләштереү) барышы (ҡабул ителгән ашамлыҡтың ферменттар тәьҫиренән ябай матдәләргә бүлемләнеүе, мәҫ., *п. внутриклеточное* күҙәнәк эсендәге аш ҡайнау (һеңеү) барышы һ. б.)
**перевя́зка** бәй һалыу, бәйләтеү
**перевя́зочная** бәй һалыу (бәйләтеү) бүлмәһе
**перегорóдка** *(анат.)* бүлге (шаршау, пәрҙә), мәҫ., *п. носа костная* танауҙың һөйәк бүлгеһе)
**перегревáние организма** эҫе тейеү
**переедáние** артыҡ ашау
**пережи́тки** иҫкелек ҡалдыҡтары
**перекáрмливание** артыҡ ашатыу (мәҫ., баланы)
**переливáние** *(мед.)* ебәреү, мәҫ., *п. крови* ҡан ебәреү; *п. крови внутриартериальное* артерия аша ҡан ебәреү; *п. крови внутривенное* вена аша ҡан ебәреү; *п. крови капельное* тамсылап ҡан ебәреү; *п. крови непрямое* консерваланған ҡан ебәреү; *п. прямое* туранан-тура ҡан ебәреү (донорҙан алынған ҡанды махсус аппарат ярҙамында туранан реципиентҡа (ҡан алған кешегә) ебәреү) һ. б.
**перелóм** һыныу, мәҫ., 1. *п. кости* һөйәк һыныу; *п. (кости) вдавленный* һөйәктең инеп китеп һыныуы (һынған һөйәктең осо йәнәш ятҡан ҡыуышлы ағзаға ингән була); *п. (кости) внутрисуставной* һөйәктең быуын эсендәге һыныуы; *п. (кости) закрытый*

һөйәктең ябыҡ һыныуы (һынған һөйәк остары тире йәки тиресә ҡатламды тишмәгән була); *п (кости) косой* һөйәктең ҡыя һыныуы; *п. (костей) множественный* күп һөйәктәрҙең һыныуы; *п. (кости) неполный* һөйәктең яртылаш һыныуы; *п. (кости) огнестрельный* һөйәктең атыуҙан һыныуы; *п. (кости) оскольчатый (раздробленный)* һөйәктең ярсыҡлы һыныуы; *п. (кости) осложненный* һөйәктең ҡатмарлашҡан һыныуы; *п. (кости) открытый* һөйәктең асыҡ һыныуы (һынған һөйәк остары тире йә тиресәне тишкән була); *п. (кости) патологический (спонтанный)* һөйәктең патологик (спонтан) һыныуы (сирле һөйәктең һыныуы); *п. (кости) полный* һөйәктең тулы һыныуы; *п. (кости) поперечный* һөйәктең арҡыры һыныуы; *п. (кости) продольный* һөйәктең буйға һыныуы; *п. (кости) спиральный (винтообразный)* һөйәктең спираль һыныуы; *п (кости) эпифизарный* һөйәктең эпифизар һыныуы (көпшәле һөйәктең ос яғы һыныу); 2. *п. полового члена* ир енес ағзаһы һыныуы һ. б.)

**переломовывих** һыныу-тайыу (быуын эсендәге һыныу һәм бер юлы быуын сығыуы)

**перенапряжéние** артыҡ көсәргәнеш (мәҫ., артыҡ физик көсәргәнеш)

**перенáшивание беременности** ваҡытынан оҙағыраҡ йөклө йөрөү

**перенóсица** *(анат.)* танау биле

**перенóсчик** тараҡыс (мәҫ. ауырыу тараҡыстар: тараҡан, бөрсә)

**переохлаждéние организма** һыуыҡ (тейҙереү) тейеү

**перепóнка** яры (мәҫ., *п. барабанная* ҡолаҡ (барабан) ярыһы)

**перерéзка** *(хир.)* ҡырҡыу (мәҫ., кендек бауын ҡырҡыу)

**перерождéние** *ҡара:* **дистрофия**

**пересáдка** *(хир.)* күсереү операцияһы *(ҡара:* **трансплантация)**

**перетренирóванность** артыҡ күнекмә алыу

**переутомлéние** ныҡ арыу, арығанлыҡ (мәҫ., *п. хроническое* хроник (дауамлы) арығанлыҡ)

**периаденúт** периаденит (1. лимфатик төйөрҙө уратып алыусы туҡыманың шешеүе; 2. ниндәй ҙә булһа биҙҙе уратып алыусы туҡыманың шешеүе)

**периаднексúт** периаднексит (аналыҡ өҫтәмәләрен ҡаплаусы ҡатлы шекәрәнең шешеүе)

**периаппендицúт** периаппендицит (һуҡыр эсәк үҫентеһен ҡаплаусы ҡатлы шекәрәнең шешеүе)

**периартериúт** периартериит (1. артерия тамырының тышҡы ҡатламы шешеүе; 2. *п. нодозный (узелковый)* нодоз периартерииты (коллагеноз рәтенә ингән етди дөйөм ауырыу) һ. б.)

**периартрúт** периартрит (быуындың фиброз ҡабы эргәһендәге йомшаҡ туҡымаһының шешеүе)

**перибронхúт** перибронхит (үпкә бронхтарын уратып алыусы туҡыманың шешеүе)

**перивисцерúт** перивисцерит (ниндәй ҙә булһа эске ағзаны уратып алыусы туҡыманың шешеүе)

**перигастрúт** перигастрит (ашҡаҙандың сероз ҡатламының шешеүе)

**перигепатúт** перигепатит (бауыр ҡабының шешеүе)

**перидуоденúт** перидуоденит (бө-

йән эсәгенең тышҡы ҡатламының шешеүе)

**перика́рд** перикард (йөрәк ҡабы)

**перикарди́т** перикардит (перикард шешеүе)

**перколи́т** периколит (туҡ эсәкте ҡаплаусы ҡатлы шекәрәнең шешеүе)

**перикольпи́т** перикольпит (ҡатынҡыҙ еңсәһе тирәһендәге йомшаҡ туҡыманың шешеүе)

**перили́мфа** перилимфа (эске ҡолаҡтың ярым түңәрәк каналсыҡтары араһында булған шыйыҡса)

**перилимфанги́т** перилимфангит (лимфа тамырын уратып алыусы туҡыманың шешеүе)

**периметри́т** периметрит (аналыҡты ҡаплаусы ҡатлы шекәрәнең шешеүе)

**периневрий** периневрий (нервы йәки нервы епсәләр шәлкемен уратып алыусы яры)

**перинефри́т** перинефрит (бөйөр ҡабы (капсулаһының) шешеүе)

**пери́од** период, дәүер, осор (мәҫ., *п. инкубационный* инкубация дәүере (ауырыу тыуҙырғыс зат йоғоуҙан башлап ауырыу билдәләре беленгәнгә тиклемге ваҡыт); *п. продромальный* продрома дәүере (ҡайһы бер инфекцион ауырыу үтелешендә инкубацион дәүерҙән һуң килгән осор: ауырыуҙың бер аҙ беленә башлаған мәле)

**периодо́нт** периодонт (теш тамыры ярыһы)

**периодонти́т** периодонтит (периодонттың шешеүе)

**периоофори́т** периоофорит (түллекте ҡаплаусы ҡатлы шекәрәнең шешеүе)

**периости́т** периостит (һөйәк ярыһының шешеүе)

**перисальпинги́т** перисальпингит (аналыҡ торбаларын ҡаплаусы ҡатлы шекәрәнең шешеүе)

**перисальпингоофори́т** перисальпингоофорит (түллек һәм аналыҡ торбаһын ҡаплаусы ҡатлы шекәрәләрҙең бер юлы шешеүе)

**перисигмоиди́т** перисигмоидит (сигма эсәген ҡаплаусы ҡатлы шекәрәнең шешеүе)

**периста́льтика** перистальтика (ҡыуышлы ағзаларҙың: аш һеңдереү юлының, үт ҡыуығының һ. б. ритмик рәүештә ҡыҫҡарыуы; шул арҡала ҡыуышлы ағза эсендә булған нәмәнең күсеүе, мәҫ., ашҡаҙан перистальтикаһы)

**пери́стола** перистола (ашҡаҙандың унда булған ашамлыҡты уратып алыу һәләтлеге)

**перитифли́т** перитифлит (һуҡыр эсәкте ҡаплаусы ҡатлы шекәрәнең шешеүе)

**перитони́зм** перитонизм (ҡорһаҡтың ҡатлы шекәрәһенең, унда ниндәй ҙә булһа ауырыу тыуҙырғыс заттың булмауына ҡарамаҫтан, еңелсә шешеүе)

**перитони́т** перитонит (ҡорһаҡ эсен һәм ундағы ағзаларҙы ҡаплаусы ҡатлы шекәрәнең шешеүе; төрҙәре: *п. гнойный* эренле перитонит; *п. местный (ограниченный)* сикле перитонит (ҡорһаҡ эсенең айырым бер ере зарарланған була); *п. общий (разлитой)* дөйөм (таралмалы) перитонит; *п. острый* киҫкен перитонит; *п. туберкулезный* туберкулез перитониты; *п. экссудативный* экссудатив перитонит (ҡорһаҡ эсендә шыйыҡса (экссудат) йыйылған була; *ҡара:* экссудат) һ. б.)

**перитрансверзи́т** перитрансверзит

(арҡыры туҡ эсәктең ҡатлы шекәрәһе шешеүе)

**перитромбофлеби́т** перитромбофлебит (тирә-яҡ туҡыма шешеүҙең вена тамыры көбөнә күсеүе)

**периуретери́т** периуретерит (*ҡара:* **параурeтерит**)

**периуретрит** периуретрит (һейҙек каналы әргәһендәге туҡыманың шешеүе)

**перифлеби́т** перифлебит (вена тамыры тирәһендәге туҡыманың шешеүе)

**перихоланги́т** перихолангит (үт юлдарын ураусы туҡыманың шешеүе)

**перихолецисти́т** перихолецистит (үт ҡыуығы әргәһендәге туҡыманың шешеүе)

**перихондри́т** перихондрит (кимерсәк ярыһының шешеүе)

**перицисти́т** перицистит (үт ҡыуығын йәки һейҙек ҡыуығын уратып алыусы туҡыманың шешеүе)

**перку́ссия** перкуссия (эске ағзаларҙы ҡаҡҡылап тикшереү, мәҫ., *п. легких* үпкә перкуссияһы; *п. сердца* йөрәк перкуссияһы һ. б.)

**перкуто́рный** перкутор, перкуссия (перкуссияға ҡағылышлы, мәҫ., перкутор өн)

**перницио́зный** пернициоз (яман үтелешле, мәҫ., ауырыу)

**перора́льный** перораль (ауыҙ аша ҡабул итеүгә ҡарата, мәҫ., дарыуҙы перораль ҡабул итеү)

**персевера́ция (мышления)** персеверация (төрлө һорауҙарға мәғәнәһеҙ рәүештә бер үк яуап ҡайтарыу)

**персона́л** персонал (мәҫ., медицина персоналы)

**перфорати́вный** перфоратив (перфорацияға ҡағылышлы)

**перфора́ция** перфорация (1. ниндәй ҙә булһа ҡыуышлы ағза көбөнөң тишелеүе, мәҫ., ашҡаҙан перфорацияһы (үтә етди ауырыу күренеше); 2. тишеү операцияһы, мәҫ., ҡорһаҡта йыйылған һары һыуҙы тишеп алыу)

**перфу́зия** перфузия (дауалау маҡсатында организм йәки ағза-тән өлөшө аша ҡан йәки ҡан алмаштырғыс шыйыҡса үткәреү)

**пе́рхоть** кәүәк, ҡауаҡ (баш тирәһендә булған күренеш)

**перча́тки** бирсәткә (1. мәҫ., *п. защитные* һаҡлағыс бирсәткә; *п. резиновые* резина бирсәткә; 2. *п. пеллагрические* «пеллагра» бирсәткәһе (пеллагра булғанда ҡулдарҙың үҙенсәлекле шешеүе; *ҡара:* **пеллагра**) һ. б.)

**перше́ние (в го́рле)** ҡымырйыу (тамаҡ ҡымырйыуы)

**песо́к** ҡом (ваҡ таш, мәҫ., *п. мочевой* һейҙек ҡомо (һейҙек юлдарында барлыҡҡа килгән ваҡ таш)

**песса́рий** пессарий (1. ҡатындар еңсәһенә индереү өсөн суппозиторий; *ҡара:* **суппозиторий)**

**пессими́зм** пессимизм (рухи төшөнкөлөк, өмөтһеҙлөк)

**пессими́ст** *(разг.)* пессимист (пессимизмға бирелгән кеше)

**пестици́ды** пестицидтар (төрлө зарарлы заттарға: бөжәк-талпандарға, бактерия-бәшмәктәргә, ҡый үләндәренә һ. б. ҡаршы ҡулланыла торған ағыулы химикаттар)

**песь** ала ауырыуы (*ҡара:* **витилиго)**

**пете́хия** петехия (тәндә барлыҡҡа килгән ваҡ нөктә ҙурлығындағы ҡан һауыуҙар)

**петля** *(анат.)* тоҡан (мәҫ., эсәк тоҡаны)

**петрифика́т** петрифика́т (ағза-туҡымала барлыҡҡа килгән әҙбизләнгән өлөшсә)

**петрифика́ция** петрификация (дистрофик үҙгәрешле туҡымала әҙбизләнгән өлөшсә барлыҡҡа килеүе)

**пе́чень** бауыр

**пигме́нт** пигмент (организмда барлыҡҡа килгән органик буяу, мәҫ., тәнгә төҫ биреүсе меланин, үт пигменты һ. б.)

**пигмента́ция** пигментация (организмда барлыҡҡа килгән ниндәй ҙә булһа пигменттың тупланыуы, мәҫ., *п. кожи* тире пигментацияһы; *п. патологическая* патологик пигментация (ауырыу һөҙөмтәһендә тәбиғи булмаған пигментация һ. б.)

**пиели́т** пиелит (бөйөр лаҡанының шешеүе)

**пиелогра́фия** пиелография (бөйөр лаҡанына, һейҙек үткәргесенә контраст матдә индереп яһалған рентгенография)

**пиелонефри́т** пиелонефрит (бөйөр лаҡаны һәм һейҙек ҡыуығының бер юлы шешеүе)

**пиелоуретерэктази́я** пиелоуретерэктазия (бөйөр лаҡаны һәм һейҙек үткәргесенең эктазияһы; *ҡара:* **эктазия**)

**пиелоцисти́т** пиелоцистит (бөйөр лаҡаны һәм һейҙек ҡыуығының бер юлы шешеүе)

**пиелоэктази́я** пиелоэктазия (бөйөр лаҡаны эктазияһы; *ҡара:* **эктазия**)

**пиеми́я** пиемия (сепсистың бер төрө: микроорганизмдар ҡан менән теге йәки был ағза-туҡымаға күсеп, эренле шештәр тыуҙыра)

**пикно́з** пикноз (күҙәнәк йәҙрәһенең тығыҙланып, күләм яғынан бәләкәйләнеүе)

**пикорнави́русы** пикорнавирустар (эсендә рибонуклеин кислотаһы булған бер төркөм вирустар, мәҫ., полиомиелит вирусы һ. б.)

**пиломико́з** пиломикоз (паразит бәшмәктәр йоғоуҙан килгән сәс ауырыуҙарының дөйөм исеме)

**пилоропла́стика** пилоропластика (ашҡаҙан сығышына яһалған пластик операция)

**пилороспа́зм** пилороспазм (ашҡаҙан сығышы спазмаһы; *ҡара:* **спазм**)

**пилоростено́з** пилоростеноз (ашҡаҙан сығышының стенозы; *ҡара:* **стеноз**)

**пилю́ля** пилюля (формаһы менән төймәгә оҡшаш итеп йотоу өсөн әҙерләнгән дарыу)

**пинце́т** пинцет, әҫкәк (медицина инструменты), мәҫ., анатомик пинцет, хирургик пинцет һ. б.

**пиоаллерги́ды** пиоаллергидтар (эренле шеш-сиҡан ҡалҡҡанда барлыҡҡа килгән аллергик сабыртма; *ҡара:* **аллергия**)

**пиогемоперика́рд** пиогемоперикард (йөрәк ҡабында ҡан ҡатыш эрен йыйылыу)

**пиогемотора́кс** пиогеототоракс (плевра ҡыуышлығында ҡан ҡатыш эрен йыйылыу)

**пиоге́нный** пиоген (эренләткес, мәҫ., пиоген бактериялар: стафилококк, стрептококк һ. б.)

**пиодерми́я (пиодермит)** пиодермия (тән өҫтөндәге эрен йыйғыс микробтар тыуҙырған ауырыуҙарҙың дөйөм исеме)

**пионефро́з** пионефроз (бөйөрҙөң эренләп шешеүе)

**пиопневмоперика́рд** пиопневмоперикард (йөрәк ҡабында эрен һәм газдың йыйылыуы)

**пиоса́льпинкс** пиосальпинкс (аналыҡ торбаһында эрен йыйылыу)
**пиоспе́рмия** пиоспермия (спермала эрен булыуы; *ҡара:* **сперма**)
**пиото́ракс** пиоторакс (плевра ҡыуышлығында эрен йыйылыуы)
**пипе́тка** пипетка, тамыҙғыс (мәҫ., *п. глазная* күҙ (пипеткаһы) тамыҙғысы)
**пирами́да** *(анат.)* пирамида (ҡайһы бер ағзаларҙың өлөшө, мәҫ., бөйөр пирамидаһы һ. б.).
**пиридокси́н** пиридоксин (*ҡара:* **витамин** $B_6$)
**пироге́нный** пироген (температураны күтәреүсе, мәҫ., пироген дарыу)
**пироге́н** пирогендар (тән температураһын яһалма рәүештә күтәреү өсөн ҡулланыла торған дарыу матдәләре, мәҫ., пирогенал)
**пиротерапи́я** пиротерапия (яһалма юл менән температураны күтәреп дауалау)
**пита́ние** туҡланыу, туҡландырыу, мәҫ., *п. диетическое* диетик туҡланыу (*ҡара:* **диета**); *п. искусственное* яһалма туҡландырыу (ашҡаҙан зонды ярҙамында йә тура эсәк, йә вена аша туҡлыҡлы матдә индереү); *п. парентеральное* парентераль туҡландырыу (ауыҙ аша булмаған туҡландырыу, мәҫ., укол формаһында, вена аша); *п. рациональное* рациональ (дөрөҫ төҙөлгән) туҡланыу һ. б.
**пита́тельный** туҡлыҡлы
**питириа́з** питириаз (тиренең тоторoҡло ҡауаҡланыуы менән үтеүсе тире ауырыуҙарының дөйөм исеме)
**питуитри́н** питуитрин (гипофиз биҙе эшләп сығарған гормон)
**пиури́я** пиурия (һейҙектә эрен булыуы)
**пи́ща** ашамлыҡ, аш (аҙыҡ), мәҫ., *п. доброкачественная* яҡшы сифатлы ашамлыҡ; *п. легкоусвояемая* еңел ашамлыҡ; *п. постная* ҡыҫыр ашамлыҡ һ. б.)
**пищеваре́ние** аш ҡайнау (һеңеү) барышы (ашалған ашамлыҡты ваҡлауҙан, химик бүлемләүҙән һәм кеше организмы өсөн яраҡлы итеүҙән торған ҡатмарлы физиологик процесс; формаһы: *п. внеклеточное* күҙәнәктән тыш аш ҡайнау барышы; *п. желудочное* ашҡаҙандағы аш ҡайнау барышы һ. б.)
**пищева́я ка́шица** ҡайнау барышындағы аш (ашҡаҙан һәм нәҙек эсәктәге аш)
**пищево́д** ҡыҙыл үңәс (*п. искусственный* яһалма ҡыҙыл үңәс)
**пищево́й** ашамлыҡ, аҙыҡ, аш, мәҫ., ашамлыҡ матдәләре
**пищево́й комо́к** аш йотомо
**пия́вка** һөлөк (1. *п. аптечная (медицинская)* медицина һөлөгө (дауалау өсөн ҡулланыла); 2. *п. искусственная* яһалма һөлөк (ҡан һурып алыусы махсус ҡоролош)
**пла́зма** плазма (ҡандың шыйыҡ өлөшө)
**плазмо́дий** плазмодий (микроскоп аша ғына күренә торған иң ябай бер күҙәнәкле йәнлек, мәҫ., *п. малярийный* тапма (ауырыуы) плазмодийы)
**плазмозамени́тель** плазма алмаштырғыс (ҡан плазмаһы урынына ҡулланылыусы органик матдә)
**плазмотерапи́я** плазмотерапия (плазма ярҙамында дауалау)
**пла́стика** *(мед.)* пластика (тәндең теге йәки был ағзаһын, туҡымаһын төҙөкләндереү, эшсәнлеген ҡайтарыу операцияларының дө-

йөм исеме; төрҙәре: *п. кожная* тире пластикаһы; *п. костная* һөйәк пластикаһы; *п. свободная* ирекле пластика һ. б.)

**пласти́нка** *(анат.)* пластинка (мәҫ., *п. костей черепа* баш һөйәк пластинкалары һ. б.)

**пласти́ческий** пластик (мәҫ., пластик операция)

**пла́стырь** пластырь (1. йәбешкәк ҡуйы дауа майы, мәҫ., *п. мозольный* һөйәл пластыры; *п. перцовый* боросло пластырь; 2. *п. липкий* йәбешкес пластырь (беркетеү өсөн ҡулланыла һ. б.)

**плаце́бо** плацебо (дауа сифатына эйә булмаған һәм теге йәки был дарыуға оҡшатып яһалған матдә, нигеҙҙә, психотерапия маҡсатында ҡулланыла)

**плаце́нта** плацента (ғоман (ҡарындағы бала) ятҡылығы

**плаценти́т** плацентит (бала ятҡылығы шешеүе)

**плева́ де́вственная** ҡыҙлыҡ (ҡыҙлыҡ пәрҙәһе)

**плева́тельница** төкөрөк һауыты

**плево́к** төкөрөк

**пле́вра** плевра (күкрәк ситлеге эсен һәм үпкәне ҡаплаусы шекәрә, бер нисә өлөштән тора: *п. диафрагмальная* диафрагма плевраһы; *п. легочная* үпкә плевраһы (үпкәне ҡаплай); *п. околосердечная* йөрәк тирәһе плевраһы); *п. пристеночная* күкрәк көбө плевраһы; *п. средостенная* нигрә арауығы плевраһы)

**плевралги́я** плевралгия (плевранан килгән ауыртыу)

**плеври́т** плеврит (плевраның шешеүе; төрҙәре: *п. гнойный* эренле плеврит; *п. сухой* ҡоро плеврит; *п. туберкулезный* туберкулез плевриты; *п. экссудативный* экссудатив плеврит (плевра ҡыуышлығында шыйыҡса (экссудат) йыйылған була; *ҡара:* **экссудат)** һ. б.)

**плевроперикарди́т** плевроперикардит (плевра һәм перикардтың бер юлы шешеүе; *ҡара:* **перикард, плевра)**

**плевропневмони́я** *ҡара:* **пневмония крупозная**

**плексалги́я** плексалгия (нервы сырмалсығы шешеүенән килгән ауыртыу)

**плекси́т** плексит (нервы сырмалсығы шешеүе, мәҫ., *п. плечевой* ҡулбаш плекситы; *п. шейный* муйын плекситы һ. б.)

**пле́нка рентгеновская** рентген пленкаһы (рентгенография үткәреү өсөн ҡулланылған фотопленка)

**плеоцито́з** плеоцитоз (арҡа мейеһе шыйыҡсаһы күҙәнәктәренең артыуы)

**пле́сень** үңәҙ (үҙенә бер төрлө сүпрә бәшмәктәре, ҡайһылары ауырыу тыуҙырырға һәләтле)

**плетизмогра́фия** плетизмография (ағзаларҙағы ҡан йөрөшө барышын өйрәнеү ысулы)

**пле́тора** плетора (тулы ҡанлылыҡ)

**плечо́** 1. яурын, иңбаш; 2. ҡулбаш (ҡулдың терһәктән өҫтәрәк ятҡан өлөшө)

**плеши́вость** ялтаслыҡ *(ҡара:* **алопеция)**

**плеши́вый** ялтас

**плод** ғоман (ҡарындағы бала)

**пло́мба зубная** теш пломбаһы (ауырыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән теш ҡыуышлығын тултырыу өсөн ҡулланыла торған тиҙ ҡатыусы матдә, мәҫ., *п. зубная постоянная* тештең даими пломбаһы)

**пломбирование зубов** тештәрҙе пломбалау (пломба һалыу)

**плоскостопие** яҫы табанлылыҡ (патологик күренеш; төрҙәре: *п. врожденное* тыумыштан килгән яҫы табанлылыҡ; *п. приобретенное* йәшәү мәлендә барлыҡҡа килгән яҫы табанлылыҡ; *п. профессиональное* профессиональ яҫы табанлылыҡ; *п. статическое* статик яҫы табанлылыҡ (оҙаҡ аяҡ өҫтө йәки күп йөрөп эшләгән кешеләрҙә күҙәтелә) һ. б.)

**площица** *ҡара:* **вошь лобковая**

**плюсна** бәшәләй (аяҡ башының үксә менән бармаҡтар араһы өлөшө)

**ПМП (полковой пункт медицинской помощи)** ПМП (полктың медицина ярҙамы пункты)

**пневмартроз** пневмартроз (быуын эсендә газ тупланыу)

**пневматурия** пневматурия (һейҙектә газ булыуы)

**пневмовирусы** пневмовирустар (паромиксовирустарҙың бер төрө; *ҡара:* **паромиксовирусы)**

**пневмогемоторакс** пневмогемоторакс (плевра ҡыуышлығында ҡан һәм һауа йыйылыу)

**пневмография** пневмография (күкрәк ситлегенең тын алыу хәрәкәттәрен тикшереү ысулы)

**пневмококк** пневмококк (диплококк бактерия; *ҡара:* **диплококк)**

**пневмокониоз** пневмокониоз (оҙаҡ ваҡыт буйы туҙанлы эштә эшләүҙән килгән үпкәнең профессиональ ауырыуы)

**пневмомикоз** пневмомикоз (паразит бәшмәктәр тыуҙырған үпкә ауырыуҙарының дөйөм исеме)

**пневмонит** пневмонит (үпкә шешеүенең ҡайһы бер төрҙәренең дөйөм исеме)

**пневмония** пневмония (үпкә шешеүе; төрҙәре: *п. абсцедирующая* абсцесланған пневмония (үпкәлә эренле шештәр барлыҡҡа килеү менән үтеүсе шешеү); *п. аспирационная* аспирацион пневмония (тын юлдарына берәй нәмә эләгеүҙән килгән шешеү); *п. гипостатическая* гипостатик пневмония (үпкәнең аҫҡы өлөшөндә ҡан тулышыуҙан килгән шешеү); *п. гриппозная* грипп пневмонияһы (грипп ҡатмарлашыуы); *п. двусторонняя* ике яҡлы пневмония (ике үпкә лә сиргә һабышҡан була); *п. долевая* үпкәнең бер өлөшө пневмонияһы; *п. дольковая* үпкәнең өлөшсәле пневмонияһы; *п. интерстициональная* интерстициаль пневмония (үпкә күҙәнәктәре араһындағы тоташтырғыс туҡыма шешеүе); *п. крупозная* круппоз пневмония (пневмококк бактерияһы йоғоуҙан килгән үпкәнең ҙур өлөшө шешеүе); *п. острая* киҫкен пневмония, һ. б.)

**пневмопатия** пневмопатия (сәбәбе асыҡланмаған бер төркөм үпкә ауырыуҙарының дөйөм исеме)

**пневмоперикард** пневмоперикард (йөрәк ҡабы эсендә газдың булыуы)

**пневмоперитонеум** пневмоперитонеум (ҡорһаҡ эсендә газдың булыуы)

**пневмоплеврит** пневмоплеврит (экссудатив плевриттың бер төрө: плевра ҡыуышлығында патологик шыйыҡса менән һауа туплана)

**пневмосклероз** пневмосклероз (үпкәләге тоташтырғыс туҡыманың артыҡ үҫеүе һәм тығыҙланыуы)

**пневмоторакс** пневмоторакс (плев-

ра ҡыуышлығында һауа йыйылыуы; төрҙәре: *п. закрытый* ябыҡ пневмоторакс (плевра ҡыуышлығының тышҡы һауа менән аралашыуы булмай); *п. искусственный (лечебный)* яһалма пневмоторакс (дауалау маҡсатында плевра эсенә һауа индерелә); *п. клапанный* клапанлы пневмоторакс (һулағанда асылған, тын сығарғанда ябылған пневмоторакс; *п. спонтанный* спонтан пневмоторакс (ҡайһы бер үпкә ауырыуы һөҙөмтәһендә була); *п. травматический* травматик пневмоторакс)

**пневмоэктомия** пневмоэктомия (һул йә уң яҡ үпкәне алыу операцияһы)

**побледнение** ағарыныу, төҫ ҡасыу

**побочные явления** *(мед.)* өҫтәмә үҙгәрештәр (ҡайһы бер дауалауҙан һуң һаулыҡҡа зарар килеү, мәҫ., сабыртма сығыу, баш ауыртыу һ. б.)

**поверхность** йөҙ, өҫкө яҡ, мәҫ., *п. губы* ирен йөҙө; *п. ладони* ус йөҙө (ус төбө); *п. кисти тыльная* ҡул суғының һырт яғы һ. б.)

**повреждение** 1. *(кожи, слизистой)* йәрәхәт, йәрәхәтләү (тире, тиресә һәм тәрәнерәк ятҡан туҡыма боҙолоу; 2. имгәтеү (мәҫ., ҡулды имгәтеү)

**повышение** күтәрелеү (мәҫ., температура күтәрелеүе)

**повязка** бәй (мәҫ. *п. давящая* ҡыҫынҡы бәй; *п. крестообразная* сатрашлы бәй; *п. укрепляющая* беркеткес бәй һ. б.)

**погрешность в питании** ашау-эсеүҙәге хаталар

**погрубение голоса** тауыш ҡалынайыуы

**подавиться** тамаҡҡа тороу (төйөләү)

**подагра** подагра (аҡһым алмашыныуы боҙолоуҙан килгән, нигеҙҙә быуындар зарарланыуы менән үтеүсе дауамлы ауырыу)

**подбородок** эйәк

**подвергаться порче (заболевание под влиянием каких-то мифических сил)** зәхмәт ҡағылыу (юҡ-барға ышаныуҙан килә)

**подвернуть ногу** аяҡты биртендереү (кимәлйетеү)

**подвздошный** бығым (мәҫ. бығым өлкәһе)

**подвывих (полувывих)** ҡаймығыу (еңелсә быуын сығыу), мәҫ., бармаҡтың ҡаймығыуы һ. б.

**подёргивание** *(разг.)* тартыу, дерелдәү (мәҫ., ҡаш тартыу)

**подключичный** умрау аҫты

**подкожный** тире аҫты

**подколенный** тубыҡ аҫты

**подкорковый** мейе ҡабығы аҫты (мәҫ., *подкорковые центры* мейе ҡабығы аҫтындағы үҙәктәр)

**подлечиться** *(разг.)* дауаланып алыу

**подмывание** *(разг.)* йыуыныу, йыуынып алыу

**подмышечный** ҡултыҡ аҫты

**подмышка** ҡултыҡ аҫты

**подорожник** (юл (яра) япрағы (нигеҙҙә, юл япрағы ашҡаҙан, эсәк ауырыуҙарын дауалау өсөн ҡулланыла)

**подострый** ярым киҫкен (мәҫ., *воспаление подострое* ярым киҫкен шешеү)

**подошва** табан

**подушка кислородная** кислород ҡабы (эсенә кислород тултырылған һәм кислород менән дауалау өсөн ҡулланыла торған ҡап)

**подреберье** ҡабырға аҫты (өлкәһе)

**подчревье** ҡаҫыҡ (кендек аҫты) өлкәһе

**подъём стопы** аяҡ алҡымы

**позвонóк** умыртҡа

**позвонóчник** умыртҡа бағанаһы, умыртҡалыҡ

**познáбливание** өшөттөрөп ҡалтыратыу

**позы́в** теләк (мәҫ., һейеү (кесе яраy) теләге, оло яраy теләге)

**пойкилодерми́я** пойкилодермия (тиренең дистрофик үҙгәреүенең бер төрө)

**пóйльник** эсергес һауыт (ғәҙәттә, ауырыу кешене эсереү өсөн ҡулланыла)

**пойкилоцитóз** пойкилоцитоз (эритроциттарҙың төрлө формала булыуы; *ҡара:* **эритроцит**)

**показáния** *(мед.)* дәлилдәр, мәҫ., *п. жизненные* ғүмер өсөн мөһим дәлилдәр (әйтәйек, ғүмер өсөн ҡурҡыныс тыуғанда, хирургик операция кәрәклеге иҫбат итеlә); *п. к операции* операция өсөн дәлилдәр һ. б.)

**показáтель** *(мед.)* күрһәткес (мәҫ., *п. рождаемости* тыуыусанлыҡ күрһәткесе; *п. смертности* үлеүсәнлек күрһәткесе һ. б.)

**покалéчиться** ғәрипләнеү (имгәнеү)

**покáшливание** йүтәлләштереү, йүткергеләштереү

**покóйник, покойница** мәйет (үлек)

**поколáчивание (при массаже)** ҡаҡҡылаштырыу

**покраснéние (тела)** ҡыҙарыу (ҡыҙарыныу)

**покрóв (кожный)** тән япмаһы (йәки тире)

**поксви́русы** поксвирустар (эсендә дезоксирибонуклеин кислотаһы булған бер төркөм вирустар, мәҫ., натураль сәсәк вирусы

**пол** енес, зат, мәҫ., *п. женский* ҡатын-ҡыҙ заты (енесе); *п. мужской* ирҙәр (заты) енесе

**пóле** майҙан, майҙансыҡ, офоҡ (1. *п. ассенизации* ассенизация майҙаны (тиҙәк-фәләнде тупраҡ ярҙамында зарарһыҙлау өсөн ер участкаһы); 2. *п. зрения* күреү офоғо (бер йүнәлештә ҡарағанда бөтә күренгән *(пространство)* арауыҡ; 3. *п. операционное* операция майҙансығы (тәндең операция яһау өлкәһе)

**полечи́ться** дауаланыу

**полиавитаминóз** полиавитаминоз (организмда бер юлы бер нисә төр витамин етешмәүҙән килгән ауырыу)

**полианатокси́н** полианатоксин (бер нисә анатоксиндан торған вакцина)

**полиартралги́я** полиартралгия (күп быуындарҙың бер юлы йәки береһе артынан икенсеһе ауырыуы)

**полиартри́т** полиартрит (күп быуындарҙың бер юлы йәки береһе артынан икенсеһенең шешеүе)

**полиаутовакци́на** полиаутовакцина (индивидиум микрофлораһында булған микроорганизмдарҙың бер нисәһенән әҙерләнгән аутовакцина; *ҡара:* **аутовакцина)**

**поливакци́на** *ҡара:* **вакцина ассоциированная**

**полиганглионеври́т** полиганглионеврит (күп нервы ганглийҙарының һәм уларға бәйле нервыларҙың шешеүе)

**полиганглиони́т** полиганглионит (күп нервы ганглийҙарының шешеүе)

**полидактили́я** полидактилия (тыумыштан килгән үҫеш аномалияһы: аяҡта йә ҡулда 6 йәки унан да күберәк бармаҡ булыуы)

**полидипси́я** полидипсия (ныҡ һыуһап шыйыҡлыҡты күп эсеү)

**поликисто́з** поликистоз (үсеш аномалияһы: паренхиматоз эске ағзаларҙа киста шештәренең күп һанда барлыҡҡа килеүе; *ҡара:* **киста)**

**поликли́ника** поликлиника (килгән ауырыу кешеләрҙе һәм йорт шарттарында булғандарҙы төрлө врачтар менән хеҙмәтләндерә торған дауалау учреждениеһы; төрҙәре: *п. городская* ҡала поликлиникаһы; *п. детская* балалар поликлиникаһы; *п. стоматологическая* стоматология поликлиникаһы һ. б.)

**полимасти́я** полимастия (үсеш аномалияһы: өҫтәмә имсәк биҙҙәренең булыуы)

**полименоре́я** полименорея (күрем ҡанының 6—7 көн йәки унан да күберәк ваҡыт килеүе)

**полимиалги́я ревматическая** ревматик полимиалгия (аяҡ-ҡул ауыртыуы, температура күтәрелеү һ. б. үҙгәрештәр менән үтеүсе ауырыу, сәбәбе әле тулыһынса асыҡланмаған)

**полимикси́ны** полимиксиндар (полимикстар исемле бациллалар бүлеп сығарған антибиотиктар; *ҡара:* **антибиотики)**

**полинаркома́ния** полинаркомания (бер нисә наркотик матдәгә ҡарата булған наркомания; *ҡара:* **наркомания)**

**полиневри́т** полиневрит (күп нервыларҙың шешеүе)

**полиодонти́я** полиодонтия (үсеш аномалияһы: артыҡ теш үсеп сығыуы)

**полиомиели́т (эпидемический острый)** полиомиелит үҙенә бер төрлө вирус йоғоуҙан килгән, нигеҙҙә, үҙәк нервы системаһын зарарлаусы, күпселектә балаларҙа күҙәтелеүсән киҫкен инфекцион ауырыу)

**поли́п** полип (тиресә ҡатламында барлыҡҡа килеүсе ябай шеш, мәҫ., *п. желудка* ашҡаҙан полипы; *п. носа* танау полипы һ. б.)

**полипо́з** полипоз (полип шештәренең бер нисә йә күп һанда барлыҡҡа килеүе, мәҫ., *п. желудка* ашҡаҙан полипозы һ. б.)

**полирадикулоневри́т** полирадикулоневрит (арҡа мейеһе тамырсалары һәм периферик нервыларҙың бер юлы шешеүе)

**полисахари́ды** полисахаридтар (ҡатмарлы углеводтар, мәҫ., гликоген)

**полисерози́т** полисерозит (бер нисә сероз ҡыуышлыҡтарҙың (ҡорһаҡ, күкрәк ситлеге һ. б.) бер юлы шешеүе)

**полисперми́я** полиспермия (сперманың күплеге)

**полиури́я** полиурия (һейҙектең күп бүленеүе)

**полифаги́я** полифагия (саманан артыҡ ашау)

**полифаланги́я** полифалангия (үсеш аномалияһы: ҡул йәки аяҡ бармаҡтарында артыҡ фаланга (быуынтыҡ) булыу)

**полифекали́я** полифекалия (саманан артыҡ тиҙәктең бүленеүе, нигеҙҙә хроник панкреатит булғанда күҙәтелә)

**полифибромиози́т** полифибромиозит (арҡыры һыҙатлы мускулдарҙың шешеүе)

**полихимиотерапи́я** полихимиотерапия (химиотерапевтик дарыуҙар комплексы менән дауалау)

**полицитеми́я истинная** ысын полицитемия (ҡыҙыл кимек матдәһенең артыҡ үсеше, эритроциттар һәм лейкоциттар күбәйеүе,

тән ҡыҙарыуы һ. б. менән үтеүсе етди дөйөм ауырыу)

**поллакиури́я** поллакиурия (йыш — тәүлегенә алты тапҡырҙан да йышыраҡ кесе яра итеү)

**поллино́з** поллиноз (үлән һеркәһенә (туҙанына) ҡарата юғары һиҙеүсәнлек булыу һәм күҙ һәм танау-тамаҡ тиресәһе шешеү менән үтеүсе аллергик ауырыу)

**поллю́ция** поллюция (ир-егеттең йоҡлағанда ирекһеҙҙән орлоғо ағып сығыуы; ғәҙәттә төш күргәндә була)

**полово́й(ая)** енес, енси (мәҫ., енси тормош, енес ағзалары, енси тәрбиә һ. б.)

**положе́ние плода́** ҡарындағы баланың (ғомандың) ятыуы, мәҫ., ҡарындағы баланың буй ятыуы

**положи́тельный** *(мед.)* ыңғай (мәҫ., Вассерман реакцияһы ыңғай)

**полоска́ние** *(процед.)* сайҡау (мәҫ., ауыҙ сайҡау)

**по́лость** *(анат.)* ҡыуышлыҡ (мәҫ., *п. брюшная* ҡорһаҡ ҡыуышлығы; *п. плевральная* плевраль ҡыуышлыҡ һ. б.)

**по́лосы бере́менных** йөклөлөк һыҙаттары (бәпеслəгəндəн һуң ҡорһаҡ өҫтөндә ҡалған аҡ һыҙаттар)

**полубо́кс** яртылаш бокс (больница палатаһының быяла аралығы менән бүлеп алынған өлөшө, унда бик йоғошло булмаған ауырыуҙар урынлаштырыла)

**полува́нна** яртылаш ванна (дауалау процедураһы: тәнде тик билгә тиклем сумып ултырырға рөхсәт ителәә)

**полуко́ронка** яртылаш коронка (теш протезының алынмай торған металл өлөшө)

**полуша́рия (головно́го мо́зга)** баш мейеһенең ярымшарҙары

**по́люс** *(анат.)* полюс (мәҫ., *п. глазного яблока* күҙ алмаһы полюсы һ. б.)

**помеша́тельство** *(разг.)* аҡылдан яҙыу

**помочи́ться** *(разг.)* кесе яраu итеү, балаға ҡарата: бес итеү, бес иттереү

**по́мощь** *(мед.)* ярҙам (мәҫ., *п. врачебная* врач ярҙамы; *п. неотложная* кисектергеһеҙ ярҙам; *п. скорая* ашығыс ярҙам һ. б.)

**помраче́ние (помутне́ние) созна́ния** аҡыл юйылыу (томаланыу)

**помутне́ние** томаланыу (мәҫ., күҙ мөгөҙсәһе томаланыуы)

**пониже́ние** *(физиол.)* түбәнәйеү, төшөү, насарайыу (мәҫ., ишетеү һәләтлегенең түбәнәйеүе, температураның төшөүе, аппетит насарайыуы һ. б.)

**понима́ние** аңлау

**поно́с** эс китеү; төрҙәре: *п. кровавый* ҡанлы эс китеү һ. б.

**попе́рхивание** сәсәү, сәсәп китеү

**по́ра** күҙәнәк, мәҫ., *п. потовая* тир күҙәнәге

**пораже́ние** зарарлау, атыу, һуғыу (мәҫ., *п. молнией* йәшен атыу; *п. радиационное* радиацион зарарлау; *п. электрическим* током электр тогы һуғыу һ. б.)

**пора́ниться** *(разг.)* яраланыу, йәрәхәтләнеү

**поре́з** бәләкәй яра (киҫеү, ҡырҡыу һөҙөмтәһендә тиренең өҫкө өлөшөнә генә үткән ҙур булмаған яра)

**порногра́фия** порнография (натуралистик әҙәпһеҙ рәүештә сексуаль тормошто һүрәтләү, СССР-ҙа закон буйынса тыйылған)

**поро́г раздраже́ния** *(физиол.)* сик (ярһыу процесын булдырыу өсөн талап ителгән минималь ҡуҙғытыу, мәҫ., *п. зрительный* күреү

һәләте сиге; *п. слуховой* ишетеү сиге һ. б.)

**поро́к** порок (ниндәй ҙә булһа физик кәмселек, дефект, мәҫ., *п. развития* үҫеш порогы (һүҙ тыумыштан килгән физик кәмселек хаҡында бара, әйтәйек, ярыҡ аңҡау һ. б.); *п. сердца* йөрәк порогы (тормошта барлыҡҡа килгән йәки тыумыштан булған йөрәктәге физик кәмселек); *п. сердца аортальный* йөрәктең аорталь порогы (аорта клапаны зарарланған була); *п. сердца декомпенсированный* йөрәктең декомпенсациялы порогы (порок һөҙөмтәһендә йөрәк үҙ эшсәнлеген тейешенсә башҡара алмай); *п. сердца комбинированный* йөрәктең комбинациялы порогы (йөрәктең ниндәй ҙә булһа клапаны япраҡтары һәм тишеге бер юлы зарарланған була); *п. сердца компенсированный* йөрәктең компенсациялы порогы (порок булыуға ҡарамаҫтан йөрәк эшсәнлеге тейеш дәрәжәлә башҡарыла) һ. б.

**порошо́к** порошок (онтаҡ матдә, мәҫ., *п. зубной* теш порошогы)

**порфири́н** порфирин (матдәләр алмашыныуынан ҡалған берләшмә)

**порфиринури́я** порфиринурия (организмда порфирин матдәһенең артыҡ эшләнеүе һәм һейҙек менән бүленеүе)

**порфири́я** порфирия (организмда порфирин алмашыныуы боҙолоуҙан килгән бер төркөм нәҫел ауырыуҙары)

**посе́в бактериологи́ческий** бактериалогик сәсеү (1. микробтарҙы үрсетеү маҡсатында уларҙы махсус туҡлыҡлы матдәгә сәсеү; 2. ошондай матдәлә үрсетелгән микробтар)

**поседе́ние (волос)** сәс ағарыу, салланыу, сал кереү (төшөү)

**послабле́ние (пищей)** эскә тейеү (нигеҙҙә эс китеү менән үтеүсән)

**после́д** һуңғылыҡ (ғоман яҫтығының һәм ғоман шекәрәләренең дөйөм исеме)

**послеоперацио́нный** операциянан һуңғы

**послеро́довой** бәпесләгәндән һуңғы

**посме́ртный** үлгәндән һуң

**пост санита́рный** санитария посы (махсус әҙерлек алған кеше менән тәьмин ителгән тәүге медицина ярҙам урыны)

**постаре́ние** ҡартайыу

**поствакцина́льный** поствакциналь, вакцинациянан һуңғы *(ҡара:* **вакцинация)**

**постгеморраги́ческий** постгеморрагик, геморрагиянан һуңғы *(ҡара:* **геморрагия)**

**постинфа́рктный** постинфаркт, инфарктан һуңғы *(ҡара:* **инфаркт)**

**посттравмати́ческий** травманан һуңғы

**пот** тир

**потемне́ние в глазах** *(разг.)* күҙ алды ҡараңғыланыу

**поте́ние** тирләү

**поте́ртость** өйкәлеү (механик ярһытыуҙан) мәҫ., тығыҙ аяҡ кейеменән өйкәлеүҙән булған тире шешеүе: ҡыҙарыуы, шешенеүе, ҡыуыҡланыуы һ. б.)

**поте́ря** *(мед.)* юғалтыу, яҙыу (мәҫ., *п. глаза* күҙҙән яҙыу; *п. голоса* тауыш юғалыуы; *потеря языка* телдән яҙыу һ. б.)

**потли́вость** тирселлек, тирсел булыу (мәҫ., *п. общая* дөйөм тирселлек; *п. ограниченная* сикле тирселлек (мәҫ., аяҡтарҙың ғына) һ. б.)

**потни́ца** тирселлек сабыртмаһы (тирләүсән кеше тәнендә бөрсөк-бөрсөк ваҡ ҡыҙыл тимгелдәрҙең сығыуы)

**потого́нный** тирләткес (мәç., тирләткес дарыу)

**пото́мство** нәçел, быуын

**потоотделе́ние** тир (бүленеү, сығыу)

**потрясе́ние нервное** *(разг.)* нервыларҙың ныҡ ҡаҡшауы (ауыр кисереш)

**по́туги родовые (при родах)** тулғаҡ тотоу (бәпесләгәндә ҡорһаҡ алды көбөнөң, күкрәк шаршауы мускулдарының өйәнәк рәүешендә ҡыçҡарыуы)

**похме́лье** эскелек зәле (дауамлы алкоголизм ауырыуының тәүге билдәһе)

**похо́дка** йөрөш, атлау (мәç., *п. старческая* ҡарттар йөрөшө)

**похотли́вый** аҙғын нәфселе

**похо́тник** нәфсе төймәһе *(ҡара:* **клитор)**

**почесу́ха (пруриго)** пруриго, ҡысытма (ҡысытыу, ваҡ ҡыуыҡсалар, төйөрҙәр ҡалҡыу менән характерлы бер төркөм йоғошло булмаған аллергик тире ауырыуҙары: *п. детская* балалар пруригоһы *(ҡара:* строфулюс) *п. летняя (солнечная)* йәйге пруриго; *п. узлова́тая* төйөрлө пруриго һ. б.)

**по́чечный** бөйөр (бөйөргә ҡағылышлы)

**по́чка(и)** 1. *(анат.)* бөйөр (мәç., *п. вторично-сморщенная* икенсел бөрөшкән бөйөр (етди ауырыу күренеше); *п. первично-сморщенная* беренсел бөрөшкән бөйөр (етди ауырыу күренеше); 2. *п. искусственная* яһалма бөйөр (йәки яһалма бөйөр аппараты); 3. бөрө, мәç., *п. березовые* ҡайын бөрөләре (тирләткес, үт, һейҙек ҡыуғыс дауа бирә); *п. сосновые* ҡарағай бөрөләре (ҡаҡырҡыс, һейҙек ҡыуғыс һ. б. дауа бирә)

**по́яс** *(анат.)* билбау (төрҙәре: *п. плечевой* ҡулбаш билбауы (умрау һәм ҡалаҡ һөйәктәренән тора); *п. тазовый* янбаш билбауы (янбаш һәм һигеҙгүҙ һөйәктәренән тора)

**поясни́ца** *(анат.)* бил

**пра́вила** *(мед.)* ҡағиҙәләр, мәç., санитария ҡағиҙәләре

**превенти́вный** *(мед.)* превентив (ауырыуҙы булдырмау маҡсатында, мәç., превентив дауалау)

**преаго́ния** преагония, агония алды (үлеү алдындағы хәлдең бер дәүере)

**предве́стники болезни** ауырыу (сир) һиҙҙергестәре (ауырыу башланыр алдынан булған күренеш)

**преддве́рие** *(анат.)* инеш алды (мәç., *п. гортани* ҡурылдай алды; *п. носа* танау инеше алды) (танау аçты)

**преде́л дозы** доза сиге (ҡулланырға яраҡлы иң ҙур доза)

**предели́рий** делирий алды (делирийҙың тәүге башланғыс стадияһы: йоҡо ҡасыу, ваҡыты менән ҡурҡыу ғәләмәте һ. б. характерлы; *ҡара:* **делирий)**

**предлежа́ние плода** ғомандың (баланың) килеүе (аналыҡта ятыу торошо, мәç., *п. плода головное* ғомандың башы менән килеүе; *п. плода лобное* ғомандың маңлай менән килеүе; *п. плода коленное* ғомандың тубыҡ менән килеүе; *п. плода пуповинное* ғомандың кендек бауы менән килеүе (тәбиғи булмаған хәл) һ. б.)

**предоперацио́нная** операционная алды бүлмәһе

**предохранéние** һаҡланыу

**предохранíтельный** һаҡлағыс, һаҡланыу (мәҫ., һаҡлағыс прививкалар)

**предплéчье** беләк (ҡулдың терһәк быуынынан алып ҡул суғына тиклемге өлөшө)

**предплю́сна** тулар һыҡ (аяҡ башының сираҡ менән йәнәш ятҡан өлөшө)

**предрáк** рак алды (рак шешенә әүерелергә һәләтле булған сирле күренештәр, мәҫ., полиптар, кератома шеше һ. б.)

**предрáковый** рак алды (мәҫ., рак алды ауырыуҙары)

**предрасположéнность (к болезни)** ауырыуға бирешеүсәнлек

**предрассу́дки** хөрәфәт (юҡ-барға ышаныу)

**предсéрдие** йөрәк алды

**предсмéртный** үлем (үлеү алды, үлеү алдындағы)

**предстáрческий** ҡартлыҡ алды (алдындағы)

**предупреждéние** *(мед.)* һаҡланыу сараһы (мәҫ., ауырыуҙарҙан һаҡланыу сараһы)

**презервати́в (кондом муж.)** презерватив (ирҙәр ҡуллана торған, буйға ҡалыуҙан механик һаҡланыу ысулы)

**презéрвы** презервылар, стерилизацияһыҙ әҙерләнгән ашамлыҡтар (тоҙлау, ҡаҡлау)

**прекóма** кома алды (команың тәүге мәле; *ҡара:* **кома**)

**препарáт** препарат (1. әҙер дарыу йәки химик матдә, мәҫ., *п. пенициллина* пенициллин препараттары һ. б.; 2. өйрәнеү, тикшереү өсөн әҙерләнгән кеше, йә башҡа тере зат, үҫемлек организмынан алынған өлөшсә, мәҫ., *п. бактериальный* бактериаль препарат (эйтәйек, вакцина); *п. гистологический* гистологик препарат)

**препари́рование** препарирлау, препаривать итеү (нигеҙҙә анатомик, патоанатомик тикшереү үткәргәндәге термин)

**прерывáние берéменности;** *ҡара:* **аборт**

**пресбиаку́зис** пресбиакузис (ҡартайыуҙан килгән ҡолаҡҡа ҡатылыҡ)

**пресбиопи́я** пресбиопия *(ҡара:* **дальнозоркость старческая)**

**пресбиофрени́я** пресбиофрения (ныҡ ҡартайған ҡайһы бер кешелә күҙәтелгән еңел формалағы аҡылға камил булмау)

**пресклерóз** пресклероз (йәшерен үткән склероз; *ҡара:* **склероз**)

**преэклампси́я** преэклампсия (буйға ҡалыуҙың һуңлап килгән токсикозы; *ҡара:* **токсикоз беременных, эклампсия)**

**приапи́зм** приапизм (үҙәк нервы системаһы ауырыу сәбәпле ир енес ағзаһының ныҡ ауыртып ҡатыуы)

**прибóр** *(мед.)* прибор (мәҫ., радиодиагностик прибор)

**приви́вки** (профилактические) прививка(лар); *ҡара:* **иммунопрофилактика**

**при́вкус** ят тәм (тойоу)

**приврáтник желу́дка** ашҡаҙан биге (ашҡаҙандың ҡыҫҡыс мускул менән тәьмин ителгән сығыш өлөшө)

**привыкáние** (в т о к с и к о л о г и и) күнегеп китеү (хроник интоксикацияның бер стадияһы: элек ҡулланылған токсик (йәки дарыу) матдәһе миҡдарының тәьҫир итмәй башлауы һәм уларҙың дозаһын арттырыу кәрәклеге, мәҫ., дарыуға күнегеп китеү, тәмәкегә күнегеп китеү

һ. б.; төрҙәре: *п. лекарственное* дарыуға күнегеп китеү; *п. патологическое; ҡара:* **наркомания**)

**привы́чка** ғәҙәт

**прида́ток** придатки *(анат.)* өҫтәмә ағза(лар), мәҫ., *п. матки* аналыҡ өҫтәмәләре: аналыҡ торбалары, түллек биҙҙәре; *п. яичка* күкәй өҫтәмәһе; *п. яичника* түллек өҫтәмәһе һ. б.)

**приём** *(мед.)* ҡабул итеү (мәҫ., дарыуҙы ҡабул итеү, ауырыу кешене ҡабул итеү һ. б.)

**прижига́ние** *(мед.)* көйҙөрөү (дауалау маҡсатында берәй зәһәр нәмә (мәҫ., карбол кислотаһы) йәки электр ярҙамында көйҙөрөү

**при́знак(и)** билдә(ләр), мәҫ., *п. беременности* буйға ҡалыу билдәләре; *п. болезни* ауырыу билдәләре (йәки симптомдары); *п. половые* енес билдәләре; *п. половые вторичные* икенсе (өҫтәмә) енес билдәләре (мәҫ., ирҙәрҙә һаҡалмыйыҡ үҫеүе һ. б.)

**прико́рм** өҫтәмә ашатыу (имсәк балаларға ҡарата ҡулланылыусы термин — имеҙеүҙән тыш ашатыу)

**при́кус** тешләнеш, тешләү торошо (тешләгәндә аҫҡы һәм өҫкө тештәрҙең бер-береһенә ҡарата торошо; төрө: *п. патологический* патологик тешләнеш (тешләгәндә өҫкө һәм аҫҡы тештәрҙең бер-береһенә тура килмәүе)

**прили́вы** *(мед.)* ҡан (тулышыу) йүгереү (ваҡыты-ваҡыты менән бит-муйынға һ. б. ҡан тулышыу сәбәпле янып-бешеү тойғоһо, нигеҙҙә климакс дәүерендә күҙәтелә)

**прима́нка** *(пищевая)* алдатҡыс ем (мәҫ., сысҡан-ҡомаҡтарҙы ҡырыу өсөн ағыу өҫтәлгән ем)

**примо́чка** примочка (марля киҫәген сылатып ауыртҡан ерҙе ҡаплау өсөн ҡулланыла торған шыйыҡ дарыу)

**припа́док** быума, өйәнәк (һуштан яҙыу, тән тартышыу һ. б. менән характерлы ҡыҫҡа ваҡытлы сирле күренеш, мәҫ., *п. истерический* истерия быумаһы; *п. эпилептический* эпилепсия быумаһы)

**припа́дочный** *(разг.)* быумалы

**припа́рка** 1. *п. влажная; ҡара:* **компресс**; 2. *п. сухая* (йылытылған ҡом-көлдө тоҡсайға тултырып ауыртҡан ергә һалыу)

**припу́дривание** һибеү, пудралау (мәҫ., дарыу порошогын һибеү)

**припу́хлость** *ҡара:* **отечность**

**приспособле́ние** *(мед.)* яраҡлашыу (мәҫ., климат шарттарына яраҡлашыу; шулай уҡ *ҡара:* **адаптация**)

**пристра́стие** болезненное; *ҡара:* **наркомания**

**при́ступ** *(мед.)* өйәнәк (мәҫ., стенокардия өйәнәге)

**приступообра́зный** өйәнәк һымаҡ

**присыпка** һибелмә, һибелмә дарыу (онтаҡ дарыу йәки гигиеник матдә, мәҫ., *п. детская* балалар һибелмәһе)

**при́хоть** талым, көһәү (урынлы урынһыҙ булған теләк, бигерәк тә буйға ҡалғанда күҙәтелә)

**про́ба** һынау (нигеҙҙә, ауырыуҙарҙы асыҡлау өсөн башҡарылған тикшереү, мәҫ., *п. аллергическая* аллергик һынау (*ҡара:* **аллергия**); *п. кожная* тире аша һынау; *п. туберкулиновая* туберкулин һынауы (туберкулездың барлығын-юҡлығын белеү өсөн); *п. функциональная* функциональ һынау (организмдың йәки берәй ағза-туҡыманың эшсәнлеген тикшереү) һ. б.)

**проби́рка** пробирка (лабораторияларҙа, аптекаларҙа ҡулланылыусы быяла һауыт)

**про́бка** *(клин.)* 1. *п. миндалины* миндалина тығыны (тамаҡ төбөндәге миндалиналар ярыҡтарында тупланған аҡһыл-һоро матдә); 2. *п. серная* сайыр ҡатыуы (ҡолаҡ тишегенең ҡуйырған ҡолаҡ сайыры менән тығылыуы)

**прободе́ние** тишелеү (мәҫ., ашҡаҙан тишелеүе)

**прове́тривание** еләтеү

**прови́зор** провизор (фармацевтика институты тамамлаған һәм аптека мөдире булыу хоҡуғын алған белгес)

**провитами́н** провитамин (организмға аш менән инеп һәм аҙаҡтан витаминға әүерелеүсе ашамлыҡ матдәһе, мәҫ., каротин һ. б.)

**проводи́мость** *(физиол.)* үткәреүсәнлек (һүҙ ниндәй ҙә булһа ярһыу, импульс үткәреү хаҡында бара, мәҫ., *п. нервная* нервы үткәреүсәнлеге)

**прогестеро́н** прогестерон (ҡатынҡыҙҙарға хас гормондарҙың береһе)

**проглотти́да** проглоттида (цестодалар рәтенә ингән таҫма селәүҙәрҙең бер быуынтығы; *ҡара:* **цестоды)**

**прогнати́я** прогнатия (ауыҙҙы япҡанда өҫкө тештәрҙең аҫҡы тештәргә тура килмәүе)

**прогно́з** *(мед.)* прогноз (мәҫ., *п. болезни* ауырыу үтелешен, тамамланыуын алдан билдәләү; *п. трудовой* хеҙмәт прогнозы (ауырыу кешенең киләсәктә эшләй алырлығын алдан фәнни нигеҙләү); *п. эпидемиологический* эпидемиологик прогноз (фәнни яҡтан теге йә был инфекцион ауырыуҙарҙың булырын-булмауын билдәләү) һ. б.)

**продезинфици́ровать** *(разг.)* дезинфекциялау, дезинфекция үткәреү (мәҫ., бүлмәне дезинфекциялау; *ҡара:* **дезинфекция** һ. б.)

**продрома́льный** *ҡара:* **период продромальный**

**продува́ние** *(процед.)* өрҙөртөү, өрҙөрөп таҙартыу (мәҫ., урта ҡолаҡты өрҙөртөү: танау аша махсус прибор ярҙамында урта ҡолаҡҡа һауа өрҙөртөп үткәреләһ. б.)

**проду́ть** *(разг.)* ел бәреү (ғәҙәттә үтәнән-үтә өргән елдән һыуыҡ тейеүҙе аңлата)

**прозе́ктор** прозектор (1. мәйеттәрҙе ярып тикшереүсе врач; 2. патологоанатомия бүлексәһе мөдире)

**прозекту́ра** прозектура (йәки патологоанатомия бүлексәһе — мәйеттәрҙе ярыу бинаһы)

**прозоплеги́я** прозоплегия (бит нервыһы параличы)

**прокажённый** махау менән ауырыусы (сирләүсе)

**прока́за** махау ауырыуы *(ҡара:* **лепра)**

**проко́л** *(мед.) ҡара:* **пункция**

**проконсульти́ровать** консультация биреү

**прокти́т** проктит (тура эсәк тиреһәһенең шешеүе)

**проктоло́гия** проктология (медицинаның тура эсәк ауырыуҙары һәм уларҙы дауалау юлдарын өйрәнеү тармағы)

**проктосигмоиди́т** проктосигмоидит (сигма һәм тура эсәк тиресәләренең бер юлы шешеүе)

**про́лежень** ятыу зәле (яҡындағы һөйәккә оҙаҡ ваҡыт өҙләкһеҙ ҡыҫылыу арҡаһында тире йәки тиресәнең үлеүе)

**промéжность** 1. сат (янбаш ҡыуышлығы төбөн ҡаплаусы бөтә туҡымаларҙың дөйөм исеме; 2. *п. женская* ҡатын-ҡыҙ тапырығы (арт юл менән енес ағзалары араһында ятҡан урын)

**промывáние** *(процед.)* йыуып таҙартыу (мәç., ашҡаҙанды йыуып таҙартыу, эсәктәрҙе йыуып таҙартыу һ. б.)

**проницáемость** *(физиол.)* үткәреүсәнлек, мәç., тамыр үткәреүсәнлеге (һүҙ тамыр көбө аша ҡан күҙәнәктәренең үтә алыусанлығы хаҡында бара)

**пропедéвтика** пропедевтика (клиник дисциплинаның ауырыу кешене ҡарау, сирҙе асыҡлау һ. б. мәсьәләләрҙе яҡтыртыусы инеш курсы, мәç., *п. внутренних болезней* эске ауырыуҙар пропедевтикаһы)

**прóпись лекарства** дарыу яҙылышы (яҙып биреү)

**прополис** умарта елеме, прополис (бал ҡорто бүлеп сығарған йәбешкәк матдә, дауалау өсөн ҡулланыла)

**просвéт** *(анат.)* киңлек (көпшәле ағзаның эске киңлеге, мәç., *п. кровеносного сосуда* ҡан тамыры киңлеге)

**просвещéние санитарное** санитария-ағартыу эше (санитария мәғарифы)

**проcлáбить** *(разг.)* эс китеү, эскә тейеү

**простáта** *ҡара:* **железа предстательная**

**простатит** простатит (простата биҙенең шешеүе)

**простаторéя** простаторея (кесе һәм оло яраү иткәндә простата һутының бүленеп сығыуы)

**простéйшие** иң ябай (йәнлектәр) хайуандар (бер күҙәнәктән торған һәм микроскоп аша ғына күренгән заттар, мәç., дизентерия амебаһы, тапма ауырыуын тыуҙырыусы плазмодий һ. б.)

**простерилизовáть** стерилизация үткәреү (*ҡара:* **стерилизация**)

**прострáнство** *(анат.)* арауыҡ (мәç., *п. заглоточное* тамаҡ төбө арауығы: *п. межлопаточное* ҡалаҡ һөйәктәре араһы арауығы)

**прострáция** прострация (ҡаты ауырығандан һуң үтә ныҡ хәлдән тайыу)

**прострéл** *ҡара:* **люмбаго**

**простýда** һыуыҡ (тейеү) тейҙереү (ғәҙәттә һыуыҡ тейҙергәндән һуң башланған бер төркөм киçкен респиратор ауырыуҙар; *ҡара:* **болезни респираторные**)

**протéз** протез (тәндең йә берәй ағзаның булмаған өлөшөн алмаштырыусы аппарат йәки яйланма, мәç., *п. глазной* күҙ протезы; *п. зубной* теш протезы һ. б.

**протезировáние** протезлау, мәç., тештәрҙе протезлау

**протеи́н** протеин (*ҡара:* **белок**)

**протеинурия** протеинурия (аҡһымдың һейҙек менән бүленеүе)

**протéй** протей (кеше эсәктәрендә йәшәүсе микроорганизм, ашамлыҡҡа эләгеп кешенең ағыуланыуына (токсикоинфекцияһына) килтерә ала)

**протеотоксикóз** протеотоксикоз (аҡһымлы матдә менән ағыуланыу)

**противовытяжéние** ҡаршыға һуҙыу (хирургик дауаларҙың бер төрө, һуҙыу дауалауының кирәһе)

**противозавитóк** ҡолаҡ япрағының ҡалҡыу бормаһы

**противокозелóк** ҡолаҡтың ҡаршы сөйө (ҡолаҡ сөйөнөң ҡаршыһында урынлаша)

**противопоказа́ния** *(мед.)* ҡаршы дәлилдәр (сирҙең үҙенсәлеге, үтелешенә нигеҙләнгән ауырыуҙы тикшереүгә, дауалауға ҡаршы дәлилдәр, мәҫ., *п. абсолютные* абсолют ҡаршы дәлилдәр (дауалау йәки тикшереү үткәреү бөтөнләй ярамай); *п. к лечению* дауалауға ҡаршы дәлилдәр; *п. к операции* операцияға ҡаршы дәлилдәр; *п. относительные* (дауалауҙы йәки тикшереүҙе хаҡлы рәүештә үткәреп була)

**противоя́дие** ағыу ҡайтарғыс дарыу (*ҡара:* **антидот**)

**протозооло́гия** протозоология (иң ябай микроскопик хайуандарҙы өйрәнә торған ғилем)

**прото́к** *(анат.)* көпшә (мәҫ., *п. желчный общий* дөйөм үт көпшәһе; *п. семявыбрасывающий* орлоҡ ырғытҡыс көпшә һ. б.)

**протоско́лекс** протосколекс (таҫма селәү ҡарышлауығы)

**протромбин** протромбин (тромбин ферментының активлашып өлгөрмәгән дәүере)

**профдермато́з** профдерматоз (йәки профессиональ дерматоз)

**профила́ктика** *(мед.-гиг.)* профилактика *(п. вторичная* икенсел профилактика (башланған ауырыуҙы юҡ итеү, йә уның үтелешен кәметеү маҡсатында үткәрелгән саралар, мәҫ., туберкулез профилактикаһы); *п. индивидуальная* индивидуаль профилактика (шәхси гигиенаны һаҡлап йәшәү); *п. общественная (социальная)* йәмғиәт (социаль) профилактика (совет халҡының һаулығын һаҡлауға, нығытыуға йүнәлтелгән саралар комплексы); *п. первичная* беренсел профилактика (ауырыуҙарҙы булдырмау саралары, һаулыҡты һаҡлау саралары)

**профилакти́ческий** профилактик, профилактика (мәҫ., профилактик саралар)

**профилакто́рий** профилакторий *(ҡара:* **санаторий-профилакторий)**

**профу́зный** профуз (үтә көслө ҡан ағыҙыуҙы аңлатҡан термин, мәҫ., профуз ҡан килеүе)

**процеду́ра** процедура (ниндәй ҙә булһа дауалау сараларын үткәреү, мәҫ., физиотерапия процедураһы)

**проце́сс** процесс (үтелеш, барыш, мәҫ., *п. обмена веществ* матдәләр алмашыныу процесы һ. б.)

**прохо́д** *(анат.)* юл, тишек (мәҫ., *п. слуховой наружный* ҡолаҡ тишеге йәки ҡолаҡтың тышҡы юлы һ. б.)

**пру́риго** пруриго *(ҡара:* **почесуха)**

**прыщ** *ҡара:* **угри**

**псаммотерапи́я** псаммотерапия (ҡом ваннаһы менән дауалау методы)

**псевдоабсце́сс** псевдоабсцесс (абсцесты хәтерләткән, әммә эренһеҙ шеш)

**псевдоанеми́я** псевдоанемия (ялған анемия: тән ағарына, әммә ҡанда анемия билдәләре булмай; *ҡара: анемия)*

**псевдоартро́з** *ҡара:* **сустав ложный**

**псевдобере́менность** ялған йөклөлөк

**псевдогаллюцина́ции** псевдогаллюцинациялар (психик һаулыҡ ҡаҡшауының бер төрө: галлюцинациялар була, әммә сирле кеше уларҙың ысынбарлыҡ менән нигеҙләнеүенә ышанмай)

**псевдогемофили́я** псевдогемофилия (гемофилияға оҡшаш ауы-

рыу, ләкин ҡанды ойотоу факторҙары нормаль була)

**псевдогермафроди́т** псевдогермафродит (ялған гермафродитизмы булған кеше; *ҡара:* **гермафродитизм ложный)**

**псевдоглауко́ма** псевдоглаукома (глаукомаға оҡшаш күҙ ауырыуы, әммә күҙ эсе баҫымы нормаль була; *ҡара:* **глаукома)**

**псевдожелту́ха** псевдоһарылыҡ (акрихин һымаҡ дарыуҙы ҡабул иткәндән һуң йә кишер, цитрус емештәрен күп ашауҙан барлыҡҡа килә)

**псевдоишиа́с** псевдоишиас (ишиасҡа оҡшаш ауырыуҙар, әммә ишиасҡа хас төп билдәләре булмай)

**псевдокверуля́нты** псевдокверулянттар (психопатиялы шәхестең хатта аҙ ғына булған ғәҙелһеҙлеккә адекват булмаған реакция биреүе)

**псевдокрипторхи́зм** псевдокрипторхизм (ялған крипторхизм: күкәй тоҡсайға төшмәйенсә сандыр каналында була)

**псевдомиксо́ма** псевдомиксома (лайлалы шештең бер төрө)

**псевдоневри́т зрительный** күреү нервыһы псевдоневриты (күреү нервы невритына оҡшаш үҫеш аномалияһы: нервы атрофияһы булмай, күреү һәләтлеге һаҡлана)

**псевдопелла́да** псевдопеллада (пеллада булғандағы кеүек башта пеләшле таптар барлыҡҡа килеү)

**псевдопода́гра** псевдоподагра (эре быуындар шешеү менән характерлы подаграға оҡшаш ауырыу; *ҡара:* **подагра)**

**псевдопсихопати́я** псевдопсихопатия (шәхес психикаһы психопатияға бер аҙ оҡшап үҙгәреүе; *ҡара:* **психопатия)**

**псевдопто́з** псевдоптоз (птозды хәтерләткән күренеш, әммә күҙ ҡабағы мускулдары зарарланмай; *ҡара:* **птоз)**

**псевдосклеро́з** псевдосклероз (бер аҙ тарауыҡ склерозды хәтерләткән сирле күренеш; *ҡара:* **склероз рассеянный)**

**псевдотуберкуле́з** псевдотуберкулез (аш-һыу менән йоғоусы, үҙенә бер төрлө микроорганизм тыуҙырған төрлө ағза-туҡымаларҙы зарарлаусы инфекцион ауырыу)

**псевдофурункуле́з** псевдофурункулез (күп һандағы тир биҙҙәренең эренләп шешеүе)

**псевдохолелитиа́з** псевдохолелитиаз (бауыр коликаһын хәтерләткән көслө ауыртыу өйәнәге)

**пситтако́з** пситтакоз (*ҡара:* **орнитоз)**

**психа́лгия** психалгия (психик травма һөҙөмтәһендә шомланыу, ҡурҡыу менән үтеүсе ауырыуҙар)

**психастени́я** психастения (1. ихтыяр көсө кәмеү, үҙеңде кәмһетеү һ. б. билдәләр менән үтеүсе невроз *(ҡара:* **невроз**); 2. дауамлы шикләнеү, ҡурҡыу, ҡыйыуһыҙлыҡ һымаҡ билдәләр менән үтеүсе психопатия; *ҡара:* **психопатия)**

**психиа́тр** психиатр (психик ауырыуҙар белгесе, врач)

**психиатри́ческий** психиатрия, психиатрик (мәҫ., психиатрия больницаһы)

**психиатри́я** психиатрия (медицинаның психик ауырыуҙарҙы, уларҙың барлыҡҡа килеүен, дауалау һәм профилактика юлдарын өйрәнеүсе тармағы)

**пси́хика** психика (кешенең рухи хәле, эске тойғолары)

**психи́ческий** психик, психика (кешенең психик тормошона ҡағылышлы)

**психоанале́птики** (**психотоники**) *ҡара:* **средство психостимулирующее**

**психобиоло́гия** психобиология (психик ауырыуҙарҙың биологик нигеҙен өйрәнеүсе ғилем)

**психогени́я** психогения (эмоциональ кисерештәр һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән психик һаулыҡтың ҡаҡшауы)

**психоге́нный** психоген (кешенең психикаһынан килгән)

**психогигие́на** психогигиена (гигиена фәнендә тормош шарттарының кеше психологияһына яһаған тәьҫирен һәм психик һаулыҡты һаҡлау юлдарын өйрәнә торған бүлек)

**психо́з** психоз (галлюцинация, илереү һ. б. үҙгәрештәр менән характерлы психик һаулыҡтың ҡаҡшауы; төрҙәре: *п. алкогольный* алкоголле психоз; *п. гриппозный* грипп психозы; *п. маниакально-депрессивный* маниакаль-депрессив психоз, һ. б.)

**пси́холог** психолог (психология белгесе)

**психологи́ческий** психология, психологик (мәҫ., психология кафедраһы, психологик климат)

**психоло́гия** психология (кеше психикаһы һәм уның торошо хаҡында фән)

**психоневроло́гия** психоневрология (неврология һәм психиатриянан торған фән комплексы)

**психоортопеди́я** психоортопедия (шәхестең тормош һәм үҙен тота белеү рәүешен үҙгәртеү формаһындағы психопатияны дауалау ысулы)

**психопати́ческий** психопатия, психопатик

**психопати́я** психопатия (ыңғай булмаған йоғонтолар һөҙөмтәһендә шәхестең дөрөҫ тәрбиәләнмәүе: ҡыҙыу булыуы, төрлө шарттарға тиҙ яраҡлаша алмауы һ. б.; төрҙәре күп)

**психопатоло́гия** психопатология (психиатрияның дөйөм мәсьәләләрен өйрәнеүсе ғилем)

**психопрофила́ктика** психопрофилактика (1. психиатрияның психик ауырыуҙарҙы булдырмау һәм барлыҡҡа килгән психик ауырыуҙарҙың киҫкенләшеп китеүенән һаҡланыу юлдарын өйрәнеүсе тармағы); 2. *п. родов* бәпесләү психопрофилактикаһы (бәпесләүҙе еңеләйтеү өсөн ҡатындар менән башҡарылған медиктар әңгәмәләре)

**психосома́тика** психосоматика (психик факторҙарҙың эске ауырыуҙар башланыуына, үтелешенә йоғонтоһон өйрәнеүсе ғилем)

**психотерапи́я** психотерапия (психик йоғонто ярҙамында дауалау йәки кешенең холҡон нормаллаштереү саралары)

**психофармаколо́гия** психофармакология (фармакология һәм психиатрияның психик процестарға һәм психик ауырыуҙарға дауалауҙың тәьҫир йоғонтоһон өйрәнеүсе тармағы)

**психофизиоло́гия** психофизиология (физиология һәм психологияның психик процестарҙың физиологик нигеҙен өйрәнеүсе тармағы)

**психохирурги́я** психохирургия (психик ауырыуҙарҙы хирургик

ысулдар менән дауалау бергәлеге)

**психро́метр** психрометр (һауа дымлылығын билдәләү өсөн прибор)

**псориа́з** псориаз (дауамлы, йоғошло булмаған тәңкә, төймә рәүешендәге сабыртма, ҡайһы ваҡыт быуындар шешеү һ. б. билдәләр менән үтеүсе дөйөм ауырыу; формалары: *п. весенне-летняя форма* псориаздың яҙғы-йәйге формаһы (ауырыу яҙғы-йәйге миҙгелдә көсәйеп китеүсән); *п. осенне-зимняя форма* псориаздың көҙгө-ҡышҡы формаһы (ауырыу көҙгө-ҡышҡы миҙгелдә көсәйеп китеүсән); *п. прогрессивная стадия* псориаздың прогрессив стадияһы; *п. регрессивная стадия* псориаздың регрессив стадияһы (ауырыуҙың ҡайтыу дәүере); *п. стационарная стадия* псориаздың стационар стадияһы (ауырыу бер кимәлдә тора) һ. б.

**псориати́ческий** псориаз, псориатик, псориазға ҡағылышлы)

**птери́гий (крыловидная плева)** птеригий, келәүек (күҙҙе ҡаплай торған яры)

**птери́гиум ногтя** тырнаҡ птеригиумы (тырнаҡ өҫтөнә сығыусы шәбе)

**птоз** птоз (күҙ ҡабағы мускулдары ауырыу сәбәпле күҙҙең өскө ҡабағы һалынып төшөүе)

**птомаи́ны** птомаиндар (мәйет тарҡалғанда барлыҡҡа килгән ағыулы матдәләр: кадаверин һ. б.)

**пузырёк** ҡыуыҡса (1. анатомик күренеш, мәҫ., *п. Граафов* Грааф ҡыуыҡсаһы (түл биҙендә); 2. тәнгә сыҡҡан сабыртма төрө)

**пузырча́тка (пемфигус)** пемфигус (1. тәнгә һыулы ҡыуыҡ һәм ҡыуыҡсалар ҡалҡыу һәм дөйөм һаулыҡтың ҡаҡшауы менән үтеүсе ауырыу; төрҙәре: *п. вульгарная* вульгар пемфигус һ. б.); 2. *п. новорожденных* балаларҙың сифилис пемфигусы (*ҡара:* **сифилис**); 3. *п. новорожденных эпидемическая* яңы тыуған балаларҙың эпидемик пемфигусы (етди сепсис ауырыу)

**пузы́рь** *(анат., мед.)* ҡыуыҡ (1. ауырыу сәбәпле тире һәм тиресәгә сығыусы һыулы йәки эренле сабыртма, мәҫ., эренле ҡыуыҡ; 2. ҡайһы бер ҡыуышлы ағза, мәҫ., *п. мочевой* һейҙек ҡыуығы, үт ҡыуығы)

**пузырько́вый** ҡыуыҡсалы (мәҫ., ҡыуыҡсалы сабыртма)

**пузырь со льдом** һыуыҡтыс ҡыуыҡ (һалҡын һыу йәки боҙ тултырылған тәнгә һалыу өсөн ҡулланылған махсус резина һауыт)

**пульмоно́лог** пульмонолог (пульмонология белгесе, врач)

**пульмоноло́гия** пульмонология (медицинаның үпкә ауырыуҙарын, уларҙы дауалау ысулдарын өйрәнә торған бүлеге)

**пульмонэктомия** пульмонэктомия (бер үпкәне алыу операцияһы)

**пу́льпа** пульпа (теш йомшағы)

**пульпи́т** пульпит (теш йомшағының шешеүе)

**пульс** пульс (һүҙ нигеҙҙә артерия тамыры тибеүе хаҡында бара: 1. *п. аритмичный* ритмһыҙ пульс; *п. мягкий* йомшаҡ пульс; *п. напряженный* ҡаты пульс; *п. нитевидный* ептәй (беленер-беленмәҫ) пульс һ. б.; 2. *п. венный* вена пульсы (ғәҙәттә йөрәктең өс япраҡлы клапаны етешмәүсәнлегә булғанда барлау венаһының йөрәк тибешенә ярашлы тибеүе)

**пульса́ция** пульсация (йөрәк тибеше, ҡан тамыры ритмик киңәйеүенән килгән яҡын-тирәләге туҡымаларҙың ритмик һелкенеүе)

**пункт** пункт (медицина ярҙамы күрһәтеү урыны: *п. травматологический* травматология пункты; *п. фельдшерско-акушерский* фельдшер-акушерлыҡ пункты; *п. фронтовой эвакуационный* фронт эвакуация пункты һ. б.)

**пункта́т** пунктат (пункция ярҙамында алынған материал)

**пу́нкция** (ауырыуҙы асыҡлау йәки дауалау маҡсатында ағза-туҡыма, шеш фәләнде ҡаҙау; *п. диагностическая* диагнозлау (ауырыуҙы асыҡлау) пункцияһы; *п. сустава* быуын пункцияһы һ. б.)

**пупови́на** кендек бауы

**пупо́к** кендек

**пу́рпур зрительный** күреү пурпуры (күреү таяҡсаларында барлыҡҡа килгән күреү матдәһе)

**пу́рпура** пурпура (тире һәм тиресә эсендә булған ваҡ ҡан һауыуҙар, мәҫ., *п. лекарственная* дарыу пурпураһы (теге йәки был дарыу килешмәгәнлектән була); *п. тромбоцитопеническая* тромбоцитопения пурпураһы (периферик ҡанда тромбоциттар кәмеү һәм ҡанаусанлыҡ менән характерлы бер төркөм ауырыуҙар)

**пуруле́нтный** пурулент (эренләүгә ҡағылышлы)

**пу́стула** пустула (эренле ҡыуыҡса)

**пустуле́зный** пустулез (пусталарға ҡағылышлы, мәҫ., пустулез сабыртма)

**путёвка санаторная** санаторий путевкаһы

**путь(и)** *(анат.)* юл(дар), мәҫ., *п. мочевыводящие* һейҙек сығарғыс юлдар; *п. нервные* нервы юлдары; *п. нервный центробежный* үҙәктән килгән нервы юлы (импульсты үҙәк нервы системаһынан ағза-туҡымаларға алып килә); *п. центростремительный* үҙәккә барған юл (импульсты ағза-туҡымаларҙан үҙәк нервы системаһына алып бара) һ. б.

**пучегла́зие** аҡыш күҙле булыу (*ҡара:* **экзофтальм**)

**пуче́ние живота** *(разг.)* эс күбеү (*ҡара:* **метеоризм**)

**пучо́к** *(анат.)* шәлкем (һүҙ, нигеҙҙә, нервы йәки мускул епсәләре хаҡында бара, мәҫ., *п. плечевого сплетения* ҡулбаш нервылар сырмалсыһы шәлкеме)

**пуэрили́зм** пуэрилизм (ҡайһы бер өлкән кешенең балаларса фекер йөрөтөүе)

**пуэри́льный** пуэриль (балаларға ҡағылышлы)

**пчёлы** бал ҡорто

**пылезолоулови́тели** туҙан-көл йотоусы ҡорамал

**пье́дра белая** аҡ пьедра (сәсте зарарлаусы бәшмәк ауырыуы, сәс бөртөктәрендә аҡ төйөндәр барлыҡҡа килеү менән характерлы)

**пья́нство** эскелек, эскеселек (төрҙәре: *п. запойное* тыйылғыһыҙ (эсеү) эскеселек (алкоголизмдың бер төрө)

**пя́сть** ус төбө (ҡул суғының шаушаҡ һәм бармаҡтар араһындағы өлөшө)

**пя́тка** үксә

**пятно́** тап, тимгел (мәҫ., *п. родимое* миң табы)

# Р

**рабдито́зы** рабдитоздар (үҙенә бер төрлө йомро паразит селәүҙәр йоғоуҙан килгән гельминтоз ауырыуҙар; *ҡара:* **гельминтоз)**

**рабдови́русы** рабдовирустар (үҙенә бер төрлө вирустар, мәç., ҡотороу ауырыуы вирусы)

**рабдомио́ма** рабдомиома (арҡыры һыҙатлы мускулдарҙан барлыҡҡа килгән ябай шеш)

**рабдомиосарко́ма** рабдомиосаркома (арҡыры һыҙатлы мускулдарҙан барлыҡҡа килгән саркома шеше; *ҡара:* **саркома)**

**рабо́та** эш, эшсәнлек (мәç., аҡыл эше, физик эш, йөрәк эшсәнлеге)

**рабо́тник медици́нский** медицина хеҙмәткәре (работнигы)

**работоспосо́бность** эшкә (һәләтлелек) яраҡлылыҡ (мәç., *р. умственная* аҡыл эшенә яраҡлылыҡ; *р. физическая* физик эшкә яраҡлылыҡ)

**равнове́сие** *(физиол.)* тигеҙләнеш (мәç., тән тигеҙләнеше, физиологик тигеҙләнеш һ. б.)

**радиа́ция** радиация (нурланыш, мәç., ҡояш радиацияһы)

**радика́льный** радикаль (мәç., радикаль операция)

**радикула́лгия** радикулалгия (арҡа мейеһе нервыһы тамырсаһы иннервациялаған ерҙә ауыртыу тойоу)

**радикули́т** радикулит (арҡа мейеһе нервылары тамырсалары шешеүе; төрҙәре: *р. дискогенный* дискоген радикулит (умыртҡалыҡ остеохондрозын кисергәндә булған сирле күренеш; *ҡара:* **остеохондроз)**; *р. пояснично-крестцовый* бил-һигеҙгүҙ радикулиты; *р. шейно-грудной* муйын-күкрәк радикулиты)

**радикулоневри́т** радикулоневрит (арҡа мейеһе нервыһы һәм тамырсаһының бер юлы шешеүе)

**радиоакти́вность** радиоактивлыҡ (альфа, бета киçәксәләре йәки гамма нурҙар нурланышы, мәç., *р. естественная* тәбиғи радиоактивлыҡ; *р. искусственная* яһалма радиоактивлыҡ һ. б.)

**радиоакти́вный** радиоактив, мәç., радиоактив матдә

**радиобиоло́гия** радиобиология (биологияла радиоактив нурҙарҙың организмға яһаған тәьçирен өйрәнә торған бүлек)

**радиодерми́т** радиодермит (рентген йәки радиоактив нурҙар тәьçиренән тиренең шешеүе)

**радиоизото́п** *ҡара:* **изотоп радиоактивный**

**радиокардиографи́я** радиокардиография (йөрәк эшсәнлеген өйрәнеү ысулы)

**радио́лог** радиолог (медицина радиологияһы һәм нурҙар менән дауалау буйынса белгес, врач)

**радиоло́гия** радиология (радий һәм башҡа радиоактив элементтар тәьçирен һәм уларҙан файҙаланыу юлдарын өйрәнә торған фән; бер нисә төрө бар: медицина радиологияһы, хәрби радиология һ. б.)

**радиоме́тр** радиометр (1. нур энергияһын билдәләй торған прибор; 2. радиоактивлыҡты билдәләй торған прибор)

**радиометри́я** радиометрия (нур энергияһын үлсәү ысулдарын өйрәнә торған фән)

**радиопилю́ля (радиокапсула)** радиопилюля (ашҡаҙан-эсәктәр эшен өйрәнә торған һәм йоҭоу

өсән уңайлы булған радиотапшырғыс)

**радиопунктýра** радиопунктура (туҡыма эсенә укол рәүешендә үткәрелгән гамматерапия; *ҡара:* **гамматерапия**)

**радиорезистéнтность** радиорезистентлыҡ (организмдың йәки ағза-туҡыманың радиоактив тәьҫиргә бирешмәүсәнлеге)

**радиосенсибилизáция** радиосенсибилизация (радиактив тәьҫиргә ҡарата булған сенсибилизация, *ҡара:* **сенсибилизация**)

**радиотерапи́я** *ҡара:* **лечение лучевое**

**радиотокси́ны** радиотоксиндар (ионизация тәьҫиренән организмда барлыҡҡа килеп, зарар килтереүсе биологик матдәләр)

**радиохирурги́я** радиохирургия (яман шештәрҙе хирургик операция һәм нурланыш ярҙамында дауалау методы)

**радиочувствитéльность** радиоһиҙеүсәнлек (ионизациялауға ҡарата организмдың, ағза-туҡымаларҙың һиҙеүсән булыуы)

**радиоэпителии́т** радиоэпителиит (ионизация нурланышынан тиресә ҡатламдарҙың шешеүе)

**радóн** радон (радиоактив бүлемләнеүҙән килгән газ)

**радонотерапи́я** радонотерапия (эсеү, ванна алыу, клизма рәүешендә радонлы һыу менән дауалау)

**рáдужка** *ҡара:* **оболочка глаза радужная**

**разбинтовáть** бинтты сисеү (йәки тағатыу)

**разби́тость общая** тән ҡырылып барыуы (ныҡ арығанлыҡтан йәки ниндәйҙер ауырыуҙың билдәһе булырға мөмкин)

**разви́тие** үҫеш (мәҫ., *р. организма* организм үҫеше)

**разговóр жестами** ымлап һөйләшеү

**раздражáться** *(разг.)* асыуланыу, асыу ҡабарыу, йән көйөү, теңкәгә тейеү

**раздражáющий** 1. ҡуҙғытҡыс; 2. йән көйҙөргөс

**раздражéние** 1) *(физиол.)* ҡуҙғыу, ҡуҙғытыу (мәҫ., *р. световое* яҡтылыҡ менән ҡуҙғытыу); 2. боҙолоу (мәҫ., *р. кожи* тире боҙолоуы); 3. асыуланыу, асыуландырыу).

**раздражи́мость** *(физиол.)* ҡуҙғыусанлыҡ (ҡуҙғытыуға яуап биреү һәләтлеге)

**разложéние** тарҡалыу (мәҫ., мәйет тарҡалыуы, шулай уҡ *ҡара:* **распад**)

**разминáние** (массаж) ыуыу

**размúнка** разминка (спорт ярышы алдынан спорт формаһына килеү өсөн башҡарылған физик күнегеүҙәр комплексы)

**размозжéние (ткани)** туҡыма иҙралатыуы

**размягчéние тканей** йомшарыу

**разрéз** 1. ярыу, ҡырҡыу, ярыу операцияһы; 2. ярыу (ҡырҡыу яраһы)

**разрешéние (болезни)** ауырыуҙың ҡайтыуы (бөтөүе)

**разры́в** *(мед.)* 1. ярылыу (өҙөлөү, йыртылыу, тишелеү), мәҫ., *р. желудка* ашҡаҙан ярылыуы; *р. перепонки барабанной* ҡолаҡ (барабан) ярыһы тишелеүе; *р. сухожилия* тарамыш өҙөлөүе; 2. ярылған (өҙөлгән, йыртылған) урын, мәҫ., ашҡаҙандың ярылған урыны)

**райцтерапи́я** райцтерапия (организмдың тәбиғи көстәрен, иммун-

нитетын күтәреүгә йүнәлтелгән дауалау)

**рак** рак (эпителиаль туҡыманан сыҡҡан яман шеш, мәҫ., *р. желудка* ашҡаҙан рагы; *р. кожи* тире рагы һ. б.)

**ра́ковина** *(анат.)* ҡабырсаҡ, япраҡ (мәҫ., *р. носовая* танау ҡабырсағы (танау эсендә улар дүртәү); *р. ушная* ҡолаҡ япрағы)

**ра́на** яра (төрҙәре: *р. асептическая* асептик яра (микробтар эләкмәгән таҙа яра); *р. гнойная* эренле яра; *р. колотая* сәнсеү яраһы; *р. огнестрельная* атыу яраһы; *р. операционная* операцион яра; *р. открытая* асыҡ яра; *р. проникающая* үткел яра; *р. рваная* өҙгөләнгән яра; *р. резаная* киҫелгән (ҡырҡылған) яра; *р. рубленая* сабыу яраһы; *р. сквозная* үтәләй тишек яра; *р. ушибленная* иҙелгән яра һ. б.

**ране́ние** яраланыу, йәрәхәтләнеү (яра яһаусы механик тәьҫир итеү, тик был терминға операция яраһы инмәй; *р. проникающее* үтәләй тишелеп яраланыу; *р. слепое* һуҡыр яраланыу (пуля, ярсыҡ һ. б. тәндә ҡала) һ. б.)

**ра́неный** яраланған, яралы (йәрәхәтле)

**рани́мость** *(нерв.)* күңел кителеүсәнлек

**ра́нка** ваҡ яра

**ра́па** рапа (тоҙға бай булған күл һыуы)

**раскры́тие шейки матки** аналыҡ муйынтығы асылыуы (бәпесләү күренеше)

**распа́д** 1. тарҡалыу (туҡыма күҙәнәктәрҙең үлеүе менән характерлы күренеш, мәҫ., *р. казеозный* казеоз тарҡалыу (эремсекләнеп тарҡалыу); *р. раковой опухоли* рак шешенең тарҡалыуы; 2. *ҡара:* **расщепление;** 3. *р. личности; ҡара:* **деградация личности)**

**распуха́ние** *(разг.)* шешенеп китеү

**расса́сывание (напр. опухоли)** ҡайтыу (мәҫ., шештең ҡайтыуы)

**рассече́ние** *(хир.)* айырып ярыу (мәҫ., туҡыманы айырып ярыу)

**рассе́янность (внимания)** тарҡаулыҡ, тарҡау булыу

**расстро́йство (здоровья)** ҡаҡшау, боҙолоу, насарайыу (мәҫ., *р. здоровья* һаулыҡ ҡаҡшауы; *р. кровообращения* ҡан йөрөшө боҙолоуы; *р. памяти* хәтерҙең насарайыуы һ. б.)

**раство́р** иретмә (мәҫ., *р. гипертонический* гипертоник иретмә (ҡанға ҡарағанда юғарыраҡ осмотик баҫымлы иретмә); *р. гипотонический* гипотоник иретмә (ҡанға ҡарағанда түбәнерәк осмотик баҫымлы иретмә); *р. изотонический* изотоник иретмә (ҡан менән бер осмотик баҫымлы иретмә); *р. лекарственный* дарыу иретмәһе; *р. физиологический* физиологик иретмә (аш тоҙоноң изотоник иретмәһе)

**расте́ние** үҫемлек (мәҫ., *лекарственное (целебное)* дарыу үҫемлеге, шифалы үҫемлек); *р. ядовитое* ағыулы үҫемлек һ. б.)

**растяже́ние** кимәлйеү (мәҫ., *р. связок* бәйләүестәр кимәлйеүе *р. мышц* мускулдар кимәлйеүе)

**растира́ние** 1. ыуыу дарыуы (мәҫ., камфара спирты); 2. ыуыу, ыуып индереү (мәҫ., камфара спиртын тәнгә ыуыу)

**расчёсы** тырналған ер, тырнашыу эҙҙәре

**расшире́ние** *(мед.)* киңәйеү (мәҫ., *р. вен варикозное* веналарҙың варикоз (төйөрләнеп) киңәйеүе;

*р. желудка* ашҡаҙан киңәйеүе; *р. сердца* йөрәк киңәйеүе һ. б.)

**расще́лина** ярыҡ, китек, мәҫ., *р. губы* китек ирен (тыумыштан килгән физик кәмселек һ. б.)

**расщепле́ние** бүлемләнеү (мәҫ., 1. *р. белка* аҡһым бүлемләнеүе, *р. волос* сәс бүлемләнеүе; 2. *р. губы* китек ирен (*ҡара:* **расщелина губы**)

**ра́уш нарко́з** рауш наркоз (ҡыҫҡа ваҡытлы наркоз)

**рахи́т** рахит (Д витамины етешмәүҙән килгән һәм һөйәктәр үҙгәреүе менән үткән 1—3 йәштәге балаларға хас дөйөм ауырыу)

**рацио́н** рацион (1. билдәле ваҡытҡа бирелгән аҙыҡ нормаһы; 2. көндәлек аҙыҡ нормаһы һәм составы)

**рво́та** ҡоҫоу, ҡоҫтороу (мәҫ., *р. алкоголиков утренняя* алкоголиктарҙың иртәнге ҡоҫоуы; *р. беременных неукротимая* йөклө ҡатындарҙың туҡтауһыҙ ҡоҫоуы (буйға ҡалыуҙың тәүге 3—4 айындағы токсикоз (*ҡара:* **токсикоз беременных**); *р. желудочная* ашҡаҙандан килгән ҡоҫоу; *р. желчная* үт ҡоҫоу; *р. искусственная* ҡоҫтортоу (мәҫ., ағыуланғанда); *р. каловая* тиҙәк ҡоҫоу (нигеҙҙә эсәк үткәрмәүсәнлеге булғанда күҙәтелгән етди күренеш); *р. кровавая* ҡан ҡоҫоу; *р. мозговая* мейегә бәйле ҡоҫоу (баш мейеһендәге ҡайһы бер ауырыу йәки мейе имгәнгәндә булған күренеш һ. б.)

**рво́тные ма́ссы** ҡоҫҡолоҡ

**рво́тный** ҡоҫторғос, ҡоҫтора торған (мәҫ., ҡоҫторғос дарыу)

**реабилита́ция** *(мед.)* реабилитация, реабилитациялау (организм эшсәнлеген ҡайтарыуға йүнәлтелгән медицина, социаль һәм педагогик саралар комплексы, мәҫ., *р. трудовая* хеҙмәткә яраҡлылыҡты реабилитациялау)

**реадапта́ция** реадаптация (кешенең юғалған йә кәмегән физиологик реакцияларын ҡайтарыу буйынса саралар комплексы)

**реакклиматиза́ция** реакклиматизация (ҡасандыр йәшәп киткән тәбиғәт шарттарына ҡайтып уларға йәнә өйрәнеп китеү)

**реакти́вность** *(биолог.)* реактивлыҡ (организмдың теге йәки был тышҡы тәьҫир-йоғонтоға яуап биреү һәләтлеге; төрҙәре: *р. иммунологическая* иммунологик реактивлыҡ; *р. патологическая* патологик (сирле) реактивлыҡ һ. б.)

**реакти́вное состоя́ние** реактив торош (*ҡара:* **психогении**)

**реа́кция** *(мед.)* реакция (организмдың ниндәй ҙә булһа тәьҫир-йоғонтоға яуабы, мәҫ., *р. аллергическая* аллергия реакцияһы (*ҡара:* **аллергия**); *р. двигательная* хәрәкәт реакцияһы (мәҫ., эҫе нәмәгә тейгәндә ҡулды тартып алыу), *р. защитная* һаҡлағыс реакция; *р. зрачка* күҙ ҡараһы реакцияһы (яҡты төшһә, күҙ ҡараһы тарая); *р. иммунная* иммун реакция (организмда иммун матдәләр һәм антигендар араһындағы осрашыу-бәйләнештәр); *р. психогенная* психоген реакция: 1. психопатия булғандағы күренеш; *ҡара:* **психопатия**); 2. психик травма йәки көслө психик кисерештән һуң булған психик һаулыҡ ҡаҡшауҙарының дөйөм исеме, мәҫ. *р. депрессивная* депрессив реакция (*ҡара:* **депрессия**); *р. невротическая* невротик реакция (*ҡара:* **невроз**) һ. б.; 3. организмға йә айырым аға-

туҡымаға үткәрелгән тикшереү, мәҫ. *р. Вассермана* Вассерман реакцияһы (сифилисты асыҡлау реакцияһы; *ҡара:* **сифилис**); *р. Вейля-Феликса* Вейль-Феликс реакцияһы (сабыртма тифын асыҡлау реакцияһы); *р. Видаля* Видаль реакцияһы (ҡорһаҡ тифын асыҡлау реакцияһы); *р. Манту* Манту реакцияһы (туберкулин реакцияһы); *р. отрицательная* кире (ыңғай булмаған) реакция; *р. Пирке* Пирке реакцияһы (туберкулин реакцияһы); *р. положительная* ыңғай реакция; *р. Райта* Райт реакцияһы (бруцеллезды билдәләү реакцияһы (*ҡара:* **бруцеллез**); *р. связывания комплемента* **(РСК)** комплементты тотоу реакцияһы (иммунологик матдәләрҙе тотоуға бәйле реакция, мәҫ. Вассерман реакцияһы); *р. серологическая* серологик реакция (нигеҙҙә йоғошло ауырыуҙарҙы асыҡлау өсөн кеше йәки хайуан ҡанының специфик сифаттарын тикшереү, мәҫ. Райт реакцияһы, Видаль реакцияһы һ. б.); *р. туберкулиновая* туберкулин реакцияһы (туберкулин ҡулланып туберкулезды билдәләү, мәҫ. Манту, Пирке реакциялары; *ҡара:* **туберкулин**); 4. физиологик шыйыҡсаларҙың әселе-һелтеле булыуын билдәләү, мәҫ. *моча кислой реакции* һейҙектең әселе реакцияһы)

**реампута́ция** реампутация (ҡабатлап яһалған ампутация операцияһы; *ҡара* **ампутация**)

**реанимато́лог** реаниматолог (реаниматология белгесе, врач)

**реаниматоло́гия** реаниматология (медицинаның реанимация менән шөғөлләнә торған бүлеге)

**реанима́ция** реанимация (клиник үлеү хәлендәге кешеләргә ҡарата үткәрелгән бөтә терелтеү саралары)

**ребёнок** бала (мәҫ. *р. в утробе матери* ҡарындағы бала; *р. грудной* имсәк бала; *р. доношенный* етлегеп тыуған бала; *р. мертворожденный* үле тыуған бала; *р. недоношенный* етлекмәй тыуған бала; *р. новорожденный* яңы тыуған бала)

**ре́бро(а)** ҡабырға (төрҙәре: *р. истинные* ысын ҡабырғалар (түш һөйәге менән тоташҡандар); *р. колеблющиеся (свободные)* ирекле ҡабырғалар (түш һөйәге менән тоташмаған иң аҫҡы (11, 12-се) ҡабырғалар); *р. ложные* ялған ҡабырғалар (үҙ-ара кимерсәк ярҙамында тоташып, түш һөйәгенә кимерсәк дуғаһы ярҙамында беркетелгән аҫҡы 8, 9, 10-сы ҡабырғалар); *р. шейные* муйын ҡабырғалары (рудемент ҡалдыҡтар)

**ре́вень** иреүән (нигеҙҙә эс йомшартҡыс дауа биргән үҫемлек, борон-ғо ваҡытта бик популяр булған)

**ревмати́зм** ревматизм (нигеҙҙә тоташтырғыс туҡыманы, йөрәкҡан тамыры системаһын, быуындарҙы зарарлап үтеүсе стрептококк тыуҙырған инфекцион-аллергик ауырыу)

**ревмати́ческий** ревматизм, ревматик (мәҫ. ревматизм өйәнәге); ревматизм менән ауырыусы)

**ревмато́идный** ревматоид (*ҡара:* **артрит ревматоидный**)

**ревматоло́гия** ревматология (медицинала тоташтырғыс туҡыманың зарарланыуы менән үтеүсе бер төркөм ауырыуҙарын өйрәнеүсе тармаҡ)

**ревмокарди́т** ревмокардит (йөрәк-

теңбөтә йәки айырым ҡатламдарының шешеүе менән үтеүсе ревматизм)

**регенера́ция** регенерация (тарҡалған йәки ныҡ зарарланған туҡыма өлөштәренең һәм айырым күҙәнәктәрҙең, ә ябай хайуандарҙа тотош ағзаларҙың ҡайтанан үҫеп барлыҡҡа килеүе, мәҫ. нервы регенерацияһы һ. б.)

**регистрату́ра** регистратура (амбулатория-поликлиника һымаҡ учреждениеларҙа килгән сирлеләрҙе врачҡа яҙыу бүлеге)

**ре́гулы** *ҡара:* **менструация**

**регуля́ция** *(физиол.)* регуляция (яйға һалыу, мәҫ. *р. гормональная* гормональ регуляция һ. б.)

**редресса́ция** редрессация (ниндәй ҙә булһа физик кәмселекте операция ҡулланмайынса төҙәтеү сараһы)

**режи́м** режим (мәҫ. гигиеник режим, туҡланыу режимы, эш режимы һ. б.)

**резе́кция** резекция (ағза-туҡыма өлөшөн ҡырҡып алыу операцияһы, мәҫ. ҡабырға резекцияһы)

**резисте́нтность (организма)** организм резистентлығы (организмдың төрлө зарарлы тәьҫирҙәргә бирешмәүе)

**резо́рбция** резорбция (һеңеү, таралыу, ҡайтанан һеңеү, мәҫ., тире аҫтына индерелгән дарыуҙың резорбцияһы)

**резус-антитело** резус-антиесем (ыңғай резуслы кеше ҡанын кире резуслы кешегә ебәргәндә йәки ыңғай резуслы ирҙән кире резуслы ҡатын буйға ҡалғанда барлыҡҡа килгән иммун матдә; уның тәьҫиренән үрҙә күрһәтелгән хәл тағы ҡабатланһа, ҡан алған кешелә һәм буйға ҡалған ҡатындың башҡа балаларында етди ауырыу үҙгәреш тәре була); *р. несовместимый* ярашһыҙ резуслы (мәҫ., ҡан); *р. отрицательный* кире резуслы (мәҫ., ҡан); *р. положительный* ыңғай резуслы (мәҫ., ҡан); *резус система* резус система (резус-антиесем һәм резус-антиген); *резус-фактор* резус-фактор (резус тоҡомло маймылдар һәм 85 процент кешеләрҙә ҡандың ҡыҙыл күҙәнәктәрендә өҫтәмә рәүештә була торған агглютиноген)

**резь** әсетеп ауыртыу

**реинвази́я** реинвазия (бер үк паразитар сирҙең кешегә ҡабатлап йоғоуы)

**реинфе́кция** реинфекция (бер үк инфекцион ауырыуҙың ҡабатлап йоғоуы)

**рекомпре́ссия** рекомпрессия (кессон ауырыу менән сирләгән кешене барокамераға урынлаштырып дауалау; *ҡара:* **барокамера**)

**реконвалесце́нт** реконвалесцент (һауығып килгән сирле кеше)

**реконвалесце́нция** реконвалесценция (һауығып килеү)

**ректороманоскопи́я** ректороманоскопия (тура һәм сигма эсәктәрен махсус прибор ярҙамында тикшереү)

**ректоскопи́я** ректоскопия (ректоскоп приборы ярҙамында тура эсәк эсен тикшереү)

**релакса́нты** релаксанттар (релаксация булдырыусы дарыуҙар)

**релакса́ция** *(мед.)* релаксация (1. һөлдә мускулдары тонусын түбәнәйтеү; 2. психик көсөргәнеште кәметеү)

**релапоратоми́я** релапоратомия (ҡабатлап ҡорһаҡты ярыу операцияһы)

**ремиссия** ремиссия (ауырыуҙың еңел үтеү дәүере)

**рентге́н** рентген (рентген һәм гамма-нурҙар дозаһын үлсәү берәмеге)

**рентгеногра́мма** рентгенограмма, рентген һүрәте (рентген нурҙары ярҙамында фотопленкаға алынған һүрәт)

**рентгенография** рентгенография (рентген нурҙары ярҙамында эске ағзаларҙы фотоға төшөрөү, мәҫ. *р. легких* үпкә рентгенографияһы)

**рентгенодиагно́стика** рентгенодиагностика (рентген нурҙары ярҙамында ауырыуҙы асыҡлау)

**рентгенокимогра́фия** рентгенокимография (рентген нурҙары ярҙамында эске ағзалар хәрәкәтен тикшереү)

**рентгенокинематогра́фия** рентгенокинематография (рентгенда барлыҡҡа килгән һүрәтте киноға төшөрөү)

**рентгено́лог** рентгенолог (рентгенология һәм рентгенотерапия белгесе, врач)

**рентгеноло́гия** рентгенология (рентген нурҙары һәм уларҙан файҙаланыу тураһындағы ғилем)

**рентгеноостеоло́гия** рентгеноостеология (рентгенологияның һөйәктәрҙе өйрәнеүсе тармағы)

**рентгеноскопия** рентгеноскопия (рентген нурҙары ярҙамында ҡарап тикшереү)

**рентгенотерапи́я** рентгенотерапия (рентген нурҙары менән дауалау; төрҙәре: *р. глубокая* тәрән (үтешле) рентгенотерапия; *р. косвенная* ситләтелгән рентгенотерапия (мәҫ. арҡа мейеһен рентген нурҙары менән яҡтыртып тирегә тәьҫир итеү); *р. поверхностная* өҫтөн рентгенотерапия; *р. прямая* тура (үтешле) рентгенотерапия һ. б.)

**рентгеноте́хник** рентгенотехник (рентгенотехника белгесе)

**рентгеноте́хника** рентгенотехника (рентген аппараттары һәм улар ярҙамында рентген нурҙарын алыу методикаһы)

**реови́русы** реовирустар (кешелә, хайуандарҙа һәм үҫемлектәрҙә эйәләшеүсән вирустар ғаиләһе, уларҙың ҡайһы берҙәре ауырыу тыуҙыра ала)

**реогра́фия** реография (ҡан тамырҙары һуғыуын (пульсын) өйрәнеү ысулы)

**реокардиогра́фия** реокардиография (йөрәк эшсәнлеген график һүрәт рәүешендә өйрәнеү ысулы)

**реометри́я** реометрия (туҡыма-ағзаларҙағы электр күренештәрен үлсәп билдәләү)

**реопера́ция** реоперация (ҡабатлап хирургик операция яһау)

**реоэнцефалографи́я** реоэнцефалография (баш мейеләге ҡан тамырҙарының функциональ торошон тикшереү ысулы)

**ретинопа́тия** ретинопатия (күҙҙең селтәрле ҡатламындағы шешеүһеҙ үткән ауырыуҙарҙың дөйөм исеме)

**реплanта́ция** реплантация (травма ваҡытында урынынан сыҡҡан ағзаны элекке урынына күсереү буйынса пластик операция)

**реппеле́нт** реппелент (бөжәктәрҙе ҡурҡытыу өсөн ҡулланылыусы препарат, мәҫ., «ДЭТА» һ. б.)

**репози́ция** репозиция (һынған һөйәк остарын урынына ҡуйыу һәм беркетеү формаһындағы хирургик ярҙам)

**ресни́ца** керпек

**ресни́чки** керпексәләр (ваҡ үҫентеләр, мәҫ. *р. двигательные* хәрәкәт керпексәләре (тын юлдарында)

**респира́тор** респиратор (тын юлдарын, күҙ-колаҡты һаҡлаусы шәхси прибор)

**респирато́рный** респиратор (тын алыуға һәм тын алыу ағзаларына ҡағылышлы, мәҫ. респиратор ауырыуҙар)

**ретикуле́з** ретикулез (ҡан эшләп сығарыусы ағзаларҙағы ретикуляр күҙәнәктәрҙең яман үтелешле үҫеш алыуы менән характерлы бер төркөм ауырыуҙар исеме; төрҙәре: *р. кожи* тире ретикулезы һ. б.)

**ретикулосарко́ма** ретикулосаркома (ретикуляр туҡыманан сыҡҡан саркома шеше)

**ретикулоци́т** ретикулоцит (йәш эритроцит)

**ретикулоцито́з** ретикулоцитоз (периферик ҡанда йәш эритроциттарҙың артыуы)

**ретикулоцитопени́я** ретикулоцитопения (периферик ҡанда йәш эритроциттарҙың кәмеүе)

**ретини́т** ретинит (күҙҙең селтәрле шекәрәһенең шешеүе)

**ретино́л** ретинол (*ҡара:* **витамин А**)

**ретрави́русы** ретравирустар (вирустарҙың бер төрө, уларҙың ҡайһылары кешелә һәм хайуандарҙа ауырыу тыуҙыра ала)

**ретрове́рсия матки** (аналыҡ ретроверсияһы (аналыҡтың артҡа бөгөлөшө)

**ретроперитони́т** ретроперитонит (ҡорһаҡ артындағы туҡыманың шешеүе)

**ретрофле́ксия матки** аналыҡ ретрофлексияһы (аналыҡтың мөйөш яһап бөгөлөүе)

**рефле́кс** рефлекс (ҡуҙғытыу-ярһытыуға организмдың үҙәк нервы системаһы аша башҡарылған яуап реакцияһы; төрҙәре: *р. безусловный (врожденный)* мотлаҡ рефлекс (мәҫ. имеү, йотоу һ. б.); *р. двигательный* хәрәкәт рефлексы; *р. условный* шартлы рефлекс (тормошта барлыҡҡа килгән) һ. б.

**рефлекси́я** рефлексия (кешенең үҙенең уй-фекерҙәрен, мауығыуҙарын, эмоцияларын һ. б. анализлау рәүешендәге теоретик эшсәнлеге)

**рефлексотерапи́я** рефлексотерапия (энә менән ҡаҙау, электропункция һ. б. механик ярһытыуға ҡоролған дауаларҙың дөйөмләштерелгән исеме)

**рефле́ктор** рефлектор (1. яҡтылыҡ нурҙарын сағылдырған батынҡы көҙгө; 2. яҡтылыҡ нурҙарын сағылдырған электр лампалы йылытҡыс прибор)

**рефлю́кс** рефлюкс (кире килеү, мәҫ., ашҡаҙан һутының ҡыҙыл үңәскә үтеүе)

**рефра́кция глаза** күҙ рефракцияһы (күҙҙең тыныс хәлдә булған һынылыш һәләтлеге, мәҫ., *р. роговицы* күҙ мөгөҙсәһе рефракцияһы; *р. хрусталика* күҙ яҫмығы рефракцияһы һ. б.)

**реце́пт** рецепт (дарыу алыу өсөн врач биргән яҙыу; төрҙәре: *р. магистральный* магистраль рецепт (врач төҙөгән рецепт), *р. официнальный* официналь рецепт (фармакопея буйынса төҙөлгән рецепт) һ. б.)

**рецепто́р** рецептор (1. анализаторҙың һиҙеү-тойоуҙы булдыра торған периферик өлөшө — нервы бөтөмө, мәҫ., *р. зрительный* кү-

реү рецепторы; 2. цитоплазмалағы бер төркөм молекулалар)

**рецептýра** рецептура (1. фармацияның рецептарҙы дөрөҫ яҙыу хаҡындағы бүлеге; 2. дарыуҙарҙың составы һәм уларҙы әҙерләү ҡағиҙәләре)

**рецидив (болезни)** рецидив (баҫылып торғандан һуң ауырыуҙың йәнә көсәйеп китеүе)

**реципиéнт** реципиент (1. ебәрелгән ҡанды алған ауырыу кеше; 2. ағза-туҡыманы күсереү операцияһын кисергән ауырыу кеше)

**речь** телмәр, һөйләү (мәҫ., *р. быстрая и невнятная* һүҙҙе йотоп (лыбырлап) һөйләү; *р. гнусавая* тынҡыш (танау менән) һөйләү һ. б.)

**рибофлави́н** *ҡара:* **витамин $B_2$**

**риги́дность** ригидлыҡ (тартышып ҡатыу, мәҫ., мускулдар ригидлығы)

**риккéтсии** риккетсиялар (бер төркөм хәрәкәтһеҙ микроорганизмдар, уларҙың араһында кешеләр һәм хайуандарҙа ауырыу тыуҙырыусылары ла бар)

**риккетсиóзы** риккетсиоздар (ашһыуҙан, бөжәктәр тешләүенән йоғоп, патоген риккетсиялар тыуҙырған бер төркөм киҫкен инфекцион ауырыуҙар, мәҫ., *р. клещевой* талпан риккетсиозы һ. б.).

**рини́т** ринит (танау тиресәһенең шешеүе; төрҙәре: *р. аллергический* аллергик ринит (*ҡара:* **аллергия**); *р. атрофический* атрофик ринит (танау тиресәһенең йоҡарыуы менән үтеүсе дауамлы ауырыу); *р. вазомоторный* вазомотор ринит (нервы регуляцияһы ҡаҡшауына бәйле танау тиресәһенең шешеүе); *р. гонорейный* гонорея риниты (*ҡара:* **гонорея**); *р. гриппозный* грипп риниты (гриптың ҡатмарлашыуы); *р. катаральный* катараль ринит (*ҡара:* **воспаление катаральное**); *р. сифилитический* сифилис риниты (*ҡара:* **сифилис**); *р. хронический* хроник ринит һ. б.)

**ринови́русы** риновирустар (вирустарҙың бер төрө; ҡайһылары ауыртҡыс сифатҡа эйә, мәҫ., респиратор сирҙәр тыуҙырыусылар һ. б.)

**ринолали́я** ринолалия (тынҡыш һөйләшеү)

**риноли́т** ринолит (танау эсендә таш барлыҡҡа килеү)

**риномикóз** риномикоз (паразит бәшмәктәр тыуҙырған ринит, *ҡара:* **ринит**)

**ринопати́я** ринопатия (аллергик һәм вазомотор риниттарҙың дөйөмләштерелгән исеме)

**ринопла́стика** ринопластика (танауҙы төҙәтеү буйынса пластик операция)

**ринорéя** ринорея (танау бүлендегенең күп килеүе менән характерлы танау тиресәһе шешеүе)

**риносинуси́т** риносинусит (танау һәм танау тирәһендәге ҡыуышлыҡтар тиресәһенең бер юлы шешеүе)

**риносклерóма** риносклерома (танау склеромаһы; *ҡара:* **склерома**)

**риноскопи́я** риноскопия (риноскоп көҙгөһө ярҙамында танау эсен тикшереү)

**ринофаринги́т** ринофарингит (танау һәм йотҡолоҡ тиресәләренең бер юлы шешеүе)

**ринофи́ма** ринофима (танау тиреһенең йәмһеҙләнеп, төйөрләнеп ҡалынайыуы)

**ритм** *(биол.)* ритм (ниндәй ҙә булһа

биологик, физиологик процестарҙың билдәле ваҡыт үтеү менән ҡабатланыуы, мәҫ., *р. сердца* йөрәк ритмы; *р. суточный* тәүлек ритмы һ. б.)

**ришта** ришта (*ҡара:* **дракункулез**)

**РНК** РНК (*ҡара:* **кислота рибонуклеиновая**)

**рог** (*анат.*) мөгөҙ (1. ҡайһы бер ағзаларҙың, ҡыуышлыҡтарҙың бер аҙ ослайып торған өлөшө, мәҫ. *р. спинного мозга, задний* арҡа мейеһенең артҡы мөгөҙө һ. б.; 2. *р. кожный* тире ороһо)

**роговица** күҙ мөгөҙсәһе, (күҙҙең мөгөҙсә ҡатламы)

**роддом (родильный дом)** бәпесләү йорто

**родильница** бәпесләгән ҡатын

**родинка** миң (*ҡара:* **невус**)

**родить (ребенка)** бәпесләү, бала табыу (тыуҙырыу)

**родничок** (*анат.*) лепкә, баш һөйәге лепкәһе; төрҙәре: *р. задний* артҡы лепкә; *р. передний* алғы лепкә һ. б.)

**родовспоможение** акушерлыҡ эше (йөклө ҡатындарға бәпесләү мәлендә медицина ярҙамы ойоштороу)

**родопсин** родопсин (*ҡара:* **пурпур зрительный**)

**родоразрешение** *ҡара:* **роды искусственные**

**родство кровное** ҡан ҡәрҙәшлеге

**роды** бәпесләү (*р. быстрые* тиҙ үтеүсе бәпесләү; *р. запоздалые* һуңлап бәпесләү; *р. искусственные* яһалма (дарыу, инструмент һ. б. ярҙамында) бәпесләтеү; *р. нормальные* нормаль бәпесләү; *р. патологические* патологик бәпесләү (ауырыу күренештәре менән үтеүсе бәпесләү); *р. преждевременные* ваҡытынан элек бәпесләү; *р. сухие* һыуһыҙ (ҡоро) бәпесләү (ғоман ҡабындағы һыу киткәндән һуң бәпесләү)

**рожа** кила (1. гемолитик стрептококк микроорганизмы тыуҙырған инфекцион ауырыу, нигеҙҙә тире һәм тире аҫты туҡымаһы зарарлана; 2. *р. свиная (эризепилоид)* дуңғыҙ килаһы (үҙенә бер төрлө вирустар йоғоуҙан килгән һәм ҡул бармаҡтары шешеү менән үткән инфекцион ауырыу, нигеҙҙә, мал һуйыусылар араһында күҙәтелә)

**рождаемость** тыуыусанлыҡ, тыуым (тыуған балалар һанын билдәләүсе статистик күрһәткес)

**рождение (ребенка)** тыуыу (донъяға килеү)

**роженица** бәпесләүсе ҡатын (бәпесләү ваҡытындағы ҡатын)

**рожистый** кила (килаға бәйле)

**роза ветров** елдәр розаһы (донъялағы елдәрҙең ҡабатланыуын күрһәтеүсе график һүрәт)

**розеола** розеола (тәнгә сыҡҡан үҙенсәлекле ваҡ ҡыҙыл тап, мәҫ. *р. сифилитическая* сифилис розеолаһы һ. б.)

**рост** 1. буй, буйлы (мәҫ., *р. карликовый* иргәйел буйлы; *р. маленький* бәләкәй буйлы; 2. *ҡара:* **развитие**)

**ростомер** ростомер (буйҙы билдәләү приборы)

**рот** ауыҙ

**РОЭ** *ҡара:* **СОЭ**

**рубашка смирительная** тынысландырғыс күлдәк (19-сы быуатта үтә тынғыһыҙ психик ауырыусыларҙы тынысландырыу өсөн кейҙерелгән)

**рубец (рубцы)** бирсә (*р. атрофический* атрофиялы бирсә (*ҡара:* **атрофия**); *р. беременных* (*ҡара:* **полосы беременных**); *р. гипер-*

*трофический* гипертрофиялы бирсә (*кара:* **гипертрофия**); *р. келоидный* келоид бирсә (*кара:* **келоид**) һ. б.)

**рубиви́русы** рубивирустар (вирустарҙың бер төрө, араһында ауырыткыс сифатҡа эйә булғандары ла бар, мәҫ., ҡыҙамыҡ вирусы)

**руброфити́я** руброфития (эпидермофития тигән бәшмәк ауырыуының бер төрө)

**рубцева́ние** ит үреп уңалыу (бөтәшеү)

**рука́** ҡул

**рукоблу́дие** ҡул зинаһы (*кара:* **онанизм**)

**румя́нец** бит алһыулығы

**рупи́я** рупия (ҡатлы-ҡатлы ҡутыр, мәҫ. *р. сифилитическая* сифилис рупияһы)

**ру́сло** *(анат.)* йырҙа, мәҫ. *р. артерии* артерия йырҙаһы (йәки киңлеге)

**рыбья чешуя (заболевание)** *кара:* **ихтиоз**

**ряби́на** миләш (төрө: *р. черная* ҡара миләш (емеше нигеҙҙә ҡан баҫымын төшөрөүгә дауа биргән ҡыуаҡ)

**ряби́нка** *(разг.)* шаҙра (сәсәк ауырыуынан ҡалған ваҡ бирсә)

**рябо́й** шаҙра (битле)

# С

**сади́зм** садизм (сексуаль боҙоҡлоҡ: сексуаль партнерға физик ауыртыу килтереүҙән ләззәт табыу)

**сакролиза́ция** сакролизация (билдең 5-се умыртҡаһының 1-се һигеҙгүҙ умыртҡаһына оҡшауы йә тоташып үҫеүе менән характерлы күренеш)

**саливация** саливация (ауыҙ һыуы бүленеүе)

**салиури́я** салиурия (һейҙек менән күп тоҙ бүленеүе)

**салицилла́ты** салициллаттар (нигеҙҙә ауыртыуҙы кәметеү, шешеүҙе ҡайтарыу һ. б. өсөн ҡулланыла торған бер төркөм дарыуҙар: аспирин, анальгин һ. б.)

**са́ло ко́жное** тире майы (тән өҫтөнә бүленеп сыҡҡан май)

**салоотделе́ние** май бүленеү (тиреләге май биҙҙәре тарафынан май бүленеү процесы)

**салфе́тка** салфетка (марлянан яһалған бәй материалы)

**сальмонеллёз** сальмонеллёз (сальмонеллаларҙың бер төрө йоғоуҙан килгән һәм эсәк-ҡарынды зарарлау менән үткән инфекцион ауырыу, аш-һыу аша йоға)

**сальмоне́ллы** сальмонеллалар (бер төркөм таяҡса рәүешендәге бактериялар, уларҙың ҡайһылары, сальмонеллездан тыш, ҡорһаҡ тифы, паратиф тыуҙыра ала)

**са́льник** *(анат.)* ҡарынъяу (ике ҡатлы ҡорһаҡ шекәрәһе)

**сальпинги́т** сальпингит (аналыҡ торбаһының шешеүе)

**сальпингогра́фия** сальпингография (аналыҡ торбаларын, контраст матдә индереп, рентгендан тикшереү)

**самовнуша́емость** үҙ-үҙеңде ышандырыусанлыҡ, инандырыусанлыҡ

**самого́н** көмөшкә

**самоконтро́ль** *(спорт. мед.)* үҙ-үҙеңә контроль (спортсы, физкультурниктың ярыштар барғанда,

физик күнегеүҙәр башҡарғанда үҙ һаулығын (пульсын, мускулдар көсөн һ. б.) тикшерә барыуы)

**самолёт санитарный** санитария самолеты

**самомасса́ж** үҙ-үҙеңә массаж яһау, үткәреү

**самопо́мощь** үҙ-үҙеңә ярҙам итеү (күрһәтеү)

**самопроизво́льный** үҙенән-үҙе булған (мәҫ., үҙенән-үҙе булған аборт)

**самосозна́ние** үҙаң

**самоуби́йство** үҙ-үҙеңә ҡул һалыу (үҙ-үҙен үлтереү)

**самоуби́йца** үҙенә ҡул һалыусы

**самочу́вствие** кәйеф, хәл

**санакти́в** санактив (санитария активы)

**санато́рий** санаторий (курорт ерендә урынлашҡан, шифалы тәбиғәт факторҙары менән дауалауға нигеҙләнгән дауалау-профилактика учреждениеһы, мәҫ., *с. детский* балалар санаторийы; *с. неврологический* неврология санаторийы һ. б.)

**санато́рий-профилакто́рий** (ночной санаторий) санаторий-профилакторий (эре предприятиелар төҙөгән дауалау-профилактика учреждениеһы)

**санато́рный** санаторий, мәҫ. *санаторный режим* санаторий режимы; *санаторная карта* санаторий картаһы һ. б)

**сана́ция** санация (1. һауыҡтырыу, мәҫ., *с. полости рта* ауыҙ санацияһы (ауыҙ эсен һауыҡтырыу өсөн башҡарылған дауалау) һ. б.)

**сангви́ник** сангвиник (*ҡара:* **темперамент сангвинический**)

**сандружи́на** сандружина (санитария дружинаһы)

**санинстру́ктор** санинструктор (санитария инструкторы)

**сани́рование** санациялау, санация үткәреү (*ҡара:* **санация**)

**санита́р, санита́рка** санитар, санитарка (кесе белемле медицина хеҙмәткәре)

**санитари́я** санитария (һаулыҡ, таҙалыҡ һаҡлау буйынса үткәрелгән саралар системаһы, мәҫ., *с. коммунальная* коммуналь санитария; *с. пищевая* аҙыҡ санитарияһы; *с. школьная* мәктәп санитарияһы һ. б.)

**санита́рный(ая, ое)** санитария, санитарлыҡ (мәҫ., *санитарная охрана* санитария һағы; *санитарное просвещение* санитария ағартыу эше, *санитарные правила* санитария ҡағиҙәләре; *санитарный надзор* санитария надзоры һ. б.)

**санобрабо́тка (санитарная обработка)** санобработка, мәҫ., ауырыусыға санобработка үткәреү (йыуындырыу, кәрәк саҡта кейемһалымын зарарһыҙлау)

**саногене́з** саногенез (организмдың ауырыу ваҡытында боҙолған регуляция барышын яйға һалыу механизмы)

**санпропускни́к (санитарный пропускник)** санпропускник (йоғошло ауырыусыларҙы, улар менән аралашҡандарҙы йыуындырыу өсөн махсус мунса)

**санпросветрабо́та (санитарно-просветительная работа)** санитария-ағартыу эше

**санслу́жба (санитарная служба)** санслужба (санитария хеҙмәте)

**сану́зел (санитарный узел)** санузел (дауалау учреждениеһының йыуыныу урыны, бәҙрәфе булған бүлмә)

**санэпидслу́жба** санэпидслужба

(санитария-эпидемиологик хеҙмәте)

**санэпидстанция** санэпидстанция (санитария-эпидемиологик станция)

**сап** маңҡа ауырыуы (үҙенә бер төр микроб йоҡҡандан булған бер тояҡлы хайуандар ауырыуы, малдан кешегә лә йоғоусан; бер нисә төрө бар: *с. носа* танауҙың маңҡа ауырыуы; *с. кожи* тиренең маңҡа ауырыуы һ. б.)

**сапропели** сапропелдәр (йылға-күл һымаҡ тоҙһоҙ һыу сығанаҡтарындағы дауалау өсөн ҡулланыла торған ләм ятыштары)

**сапрофиты** сапрофиттар (үлек органик матдәләр менән туҡланып, организмға зарар килтермәй йәшәүсе микробтар һәм үҫемлектәр)

**саркоидоз** саркоидоз (тоташтырғыс туҡыма зарарланыу менән үтеүсе етди дөйөм ауырыу)

**сарколемма** сарколемма (мускул ярыһы)

**саркома** саркома (тоташтырғыс туҡыманан сыҡҡан яман шеш; төрҙәре: *с. гигантоклеточная* гигант күҙәнәкле саркома; *с. кожная* тире саркомаһы; *с. костная* һөйәк саркомаһы һ. б.)

**сарцина** сарцина (йөҙөм тәлгәшенә оҡшаш бактерия)

**сахара** *ҡара:* **углеводы**

**сбор (чай) лекарственный** дауа сәйе (бер йүнәлештәге шифалығы булған шифалы үҫемлектәр ҡатышмаһы, мәҫ., *ч. мочегонный* һейҙерткес дауа сәйе; *ч. потогонный* тирләткес дауа сәйе һ. б.)

**сведение мышц** *(разг.)* мускулдар тартышыуы

**свёртываемость крови** ҡан ойоусанлығы

**светильник бестеневой (бестеневая лампа)** күләгәһеҙ (лампа) яҡтыртҡыс (операция майҙанын яҡтыртыу өсөн ҡулланыла)

**светобоязнь** күҙ сағылыу, кепесләү (күҙҙең яҡтылыҡҡа ҡарата булған артыҡ һиҙеүсәнлеге)

**светловолосый** һары сәсле, ебәләй баш

**светолечение** яҡтылыҡ менән дауалау (*ҡара:* **фототерапия**)

**свечи** *ҡара:* **суппозитории ректальные**

**свидетельство** танытма (мәҫ., *с. медицинское* медицина танытмаһы)

**свинка** *ҡара:* **паротит эпидемический**

**свищ** бөтәү яра, фистула (берәй ҡыуышлы ағзанан йәки биҙ юлынан тән өҫтөнә сыҡҡан көпшә, ул ҡайһы бер ауырыуҙарҙан була йәки тикшереү, дауалау маҡсатында оператив юл менән яһала)

**свод влагалища** *(анат.)* еңсә көмбәҙе (ҡатын-ҡыҙ еңсәһенең киңәйгән төп яғы)

**связка (и)** *(анат.)* бәйләүес (һөйәктәрҙе йәки ағзаларҙы үҙ-ара беркетеүсе тарамыш, мәҫ., *с. межключичные* умрау араһы бәйләүестәре; *с. подошвенные* табан бәйләүестәре һ. б.)

**связь половая** енси бәйләнеш (яҡынлыҡ ҡылыу)

**сглаз (сглазить)** күҙ тейеү (йәки тейҙереү), күҙектереү (юҡ-барға ышаныуҙың бер төрө)

**сгорбленный** 1. бөкрәйгән (көмрәйгән); 2. бөкрө (көмрө)

**сгусток** ойош, ойошҡан киҫәк (мәҫ. ҡан ойошо, ойошҡағы)

**сгущение крови** ҡан ҡуйырыуы

**сдавление** *ҡара:* **компрессия**

**сдержанный** тыйнаҡ, тотанаҡлы, баҫалҡы

**себорóид** себороид (себорея булғанда барлыҡҡа килгән аллергия сабыртмаһы)

**себорéйный** себорея (мәç., себорея экземаһы)

**себорéя** себорея (тире май биҙҙәре эшсәнлегенең үҙгәреүе һәм ғәҙәттә баш-бит тиреһе зарарланыу менән үткән тире ауырыуы; төрҙәре: *с. жирная* майлы себорея; *с. смешанная* ҡатнаш себорея; *с. сухая* ҡоро себорея)

**сегмéнт** *(анат.)* сегмент (ҡайһы бер ағза-туҡыманың өлөшө, мәç., *с. матки* аналыҡ сегменты)

**седáлище** ултырыш

**седатúвный** седатив (тынысландырғыс дарыуҙарға ҡарата ҡулланылыусы термин, мәç., седатик дарыуҙар)

**сединá** *(разг.)* сал (аҡ) сәс

**седлó турецкое** төрөк эйәре (гипофиз биҙе ятҡан баш һөйәге соҡорсаһы)

**сейсмокардиогрáфия** *ҡара:* **баллистокардиография**

**секвéстр** секвестр (теге йәки был ағза-туҡыманан айырылған үлек өлөшсә, мәç., һөйәк секвестры)

**секвестрáция** секвестрация (секвестр барлыҡҡа килеүе)

**секрéт** секрет (биҙ туҡымаһы бүлгән физиологик шыйыҡса, мәç. *с. поджелудочной железы* ашҡаҙан аçты биҙе секреты һ. б.)

**секрéция** секреция (барлыҡҡа килгән секреттың бүленеүе; төрҙәре: *с. внешняя (экзокринная)* тышҡы секреция (эшләнгән секреттың эстәге берәй ҡыуышлы ағзаға йәки тышҡа, тән өçтөнә бүленеп сығыуы, мәç., һейҙек, тир һ. б.; *с. внутренняя (эндокринная)* эске (эндокрин) секреция (эшләнгән секреттың ҡанға бүленеүе); *с. желчи* үт секрецияһы һ. б.)

**секс** секс (енси затҡа йәки енси бәйләнешкә ҡағылышлы термин)

**сексолóгия** сексология (енси айырмалыҡты, енси тәрбиәне, енси тормошто, уның физиологик, психологик һәм социаль аспекттарын өйрәнеүсе фән)

**сексопатóлог** сексопатолог (сексопатология белгесе, врач)

**сексопатолóгия** сексопатология (медицинаның енси гигиена талаптарын боҙоуҙан килгән ауырыуҙарҙы һәм уларҙы дауалау юлдарын өйрәнеүсе бүлеге)

**сексуáльный** сексуаль (мәç. сексуаль тормош)

**секциóнная** секционная (мәйет тәрҙе ярыу өсөн бина)

**сéкция** *(мед.)* *ҡара:* **вскрытие трупа**

**селезёнка** *(анат.)* талаҡ *(с. блуждающая* талаҡ төшөүе)

**семеннúк** орлоҡ биҙе (*ҡара:* **яичко**)

**семинóма** семинома (күкәйҙә барлыҡҡа килгән яман шеш)

**семиóтика (семиология)** семиотика (ауырыу билдәләрен өйрәнә торған ғилем)

**сéмя мужское** аталыҡ орлоғо (*ҡара:* **сперма**)

**семяизвержéние** *ҡара:* **эякуляция**

**семяистечéние** *ҡара:* **сперматорея**

**сенúльный** сениль (ҡартайыуға ҡағылышлы термин)

**сенсибилизáция** сенсибилизация (организмдың йәки айырым ағза-туҡыманың ҡайһы бер тышҡы мөхит йәки кешенең эске тәбиғәте тәьçиренә юғары һиҙеүсәнлекле булыуы; төрҙәре: *с. активная* актив сенсибилизация (организмға антиген (аллерген) эләккәндә барлыҡҡа килгән

юғары һиҙеүсәнлек); *с. моновалентная* моновалент сенсибилизация (бер аллерген матдәгә ҡаратя юғары һиҙеүсәнлек); *с. пассивная* пассив иммунизация (актив сенсибилизацияланған кешенең ҡанын йәки лимфоцит күҙәнәктәрен берәйһенә ебәргәндә барлыҡҡа килгән юғары һиҙеүсәнлек); *с. поливалентная* поливалент сенсибилизация (бер нисә матдәгә ҡарата юғары һиҙеүсәнлек) һ. б)

**сенситúвность** сенситивлыҡ (шәхес үҙенсәлеге: тиҙ үпкәләп барыу, артыҡ выжданлыҡ, шикләнеүсән, үҙ көсөнә ышанып етмәү менән характерлы булыу)

**сéпсис** сепсис (эренләткес микробтар менән зарарланыуҙан торған үтә етди дөйөм ауырыу; төрҙәре күп)

**септикопиемúя** септикопиемия (сепсистың бер төрө: септицемия һәм пиемия билдәләре була; *ҡара:* **пиемия**)

**септицемúя** септицемия (сепсистың бер төрө: теге йә был ағза-туҡымала эренле шештәр барлыҡҡа килмәй)

**септúческий** септик; сепсис (сепсисҡа ҡағылышлы, мәҫ., септик аборт)

**сéра ушная** ҡолаҡ сайыры

**сердéчный(ая)** йөрәк (мәҫ., *с. недостаточность* йөрәк етешмәүсәнлеге һ. б.)

**сéрдце** йөрәк (сирле күренештәр: *с, детренированное* детренирланған йөрәк (оҙаҡ ваҡыт ятып дауаланғандан һуң йөрәктең хәлһеҙләнеүе); *с. лёгочное* үпкәнән сирле йөрәк (дауамлы үпкә ауырыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән йөрәктең киңәйеүе һәм эшсәнлегенең түбәнәйеүе); *с. пивное* һыранан сирле йөрәк (йөрәктең ритмы, эшсәнлеге боҙолоуы менән характерлы); *с. спортивное* спорттан сирле йөрәк (дауамлы һәм спорт менән саманһыҙ мауығыу һөҙөмтәһендә йөрәктең гипертрофияһы һәм эшсәнлегенең түбәнәйеүе); *с. юношеское* йәштәрҙең йөрәк ауырыуы (физик үҫеш мәлендә йәш йөрәктең ваҡытлыса йышыраҡ тибеүе, башҡа функциональ үҙгәрештәр ҙә күҙәтелә)

**сердцебиéние** 1. йөрәк тибеше (тибеүе, ҡағыуы); 2 йөрәк (тулауы) лепелдәүе (көсөргәнешле эштән һуң, ҡайһы бер йөрәк ауырыуҙары булғанда, йөрәк өлкәһендә ҡыйынлыҡ һиҙелеү)

**сероводорóд** көкөртлө водород (әсәктәрҙә барлыҡҡа килгән ташландыҡ газдарҙың береһе)

**серодиагнóстика** серодиагностика (ҡан сывороткаһын йәки башҡа сероз шыйыҡсаларҙы тикшереп диагноз ҡуйыу, мәҫ., Вассерман реакцияһы)

**серозúт** серозит (сероз шекәрәләрҙең, мәҫ. йөрәк ҡабының, плевраның һ. б. шешеүе)

**серóзно-гнóйный** сероз-эренле (мәҫ. сероз-эренле бүлендек)

**серóзный** сероз (сероз ҡатламға йәки сероз шыйыҡсаға ҡағылышлы, мәҫ., сероз шыйыҡса)

**серолечéбница** көкөрт дауаханаһы (көкөртлө минераль һыуҙар менән дауалауға нигеҙләнгән дауалау-профилактик учреждениелар бүлеге)

**серологúческий** серология, серологик (мәҫ. серология лабораторияһы, серологик тикшереү)

**сероло́гия** серология (иммунологияның серологик реакциялар механизмын һәм уларҙы меди-

цина менән биологияла ҡулланыу мәсьәләләрен өйрәнеүсе тармағы)

**серопрофила́ктика** серопрофилактика (профилактик маҡсатта иммун сывороткаларын ҡулланыу)

**серореа́кция** серореакция *(ҡара:* **реакция серологическая**)

**серотерапи́я** серотерапия (иммунологиҡ сывороткалар ярҙамында дауалау)

**серпента́рий** серпентарий (ағыуын алыр өсөн аҫралған йыландар питомнигы)

**серрацио́з** серрациоз (үҙенә бер төрлө бактерия йоғоуҙан килгән һәм бер аҙ сепсисҡа оҡшаш етди инфекцион ауырыу)

**се́румбанк** серумбанк (теге йәки был урында йәшәгән халыҡтың әле өйрәнелмәгән ауырыуҙарын асыҡлау маҡсатында был халыҡтан йыйылған ҡан сывороткалары коллекцияһы)

**сестра́** *(мед.)* 1. *ҡара:* **медсестра**; 2. *с.-хозяйка (кастелянша)* хужалыҡ сестраһы (ятаҡ дауалау учреждениеһында хужалыҡ эшен алып барыусы хеҙмәткәр)

**сетча́тка** *(глаза) ҡара:* **оболочка глаза сетчатая**

**се́ть** селтәр (1. *анат.* һүҙ, нигеҙҙә, нервы, ҡан һәм лимфа тамырҙары селтәре хаҡында бара, мәҫ. *с. артериальная* артериаль селтәр һ. б.); 2. (медицина-санитария-гигиеник учреждениелар, мәҫ. *с. медицинская* медицина селтәре)

**сиалогра́фия** сиалография (ауыҙ һыуы биҙҙәрен, контраст матдә индереп, рентгендан тикшереү)

**сиалодохи́т** сиалодохит (ауыҙ һыуы юлының шешеүе)

**сиалолитиа́з** сиалолитиаз (ауыҙ һыуы биҙҙәрендә таш барлыҡҡа килеүе)

**сиалоста́з** сиалостаз (ауыҙ һыуы биҙе юлдарының тығылыуы һөҙөмтәһендә ауыҙ һыуының бүленмәүе)

**сигмоиди́т** сигмоидит (сигма эсәгенең шешеүе)

**сигнату́ра** сигнатура (1. аптекала алынған рецепт урынына ауырыу кешегә бирелгән рецепт копияһы; 2. рецептың дарыуҙы нисек ҡабул итеү тураһындағы аңлатмаһы)

**сиде́лка** сиделка (ауырыу кеше эргәһендә булыусы санитарка)

**сидеро́з** сидероз (1. ағза-туҡымаларҙа тимер берләшмәләренең тупланыуы; 2. систематик рәүештә тимер туҙанын һулау һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән пневмокониоз ауырыуы; *ҡара:* **пневмокониоз**)

**сидеросилико́з** сидеросиликоз (систематик рәүештә тимер һәм кремний туҙанын һулау һөҙөмтәһендә үпкәлә барлыҡҡа килгән пневмокониоз ауырыуы; *ҡара:* **пневмокониоз**)

**сико́з** сикоз (нигеҙҙә һаҡал, мыйыҡ, сәс бөртөктәре ҡабының эренләп шешеүе; төрҙәре: *с. обыкновенный (стафилококковый)* ғәҙәти сикоз (уны стафилококк бактерияһы тыуҙыра); *с. паразитарный* паразитар сикоз (трихофитияның бер төрө; *ҡара:* **трихофития**) һ. б.

**силикатоантрокоз** силикатоантрокоз (кремнийы булған күмер туҙанын систематик рәүештә һулауҙан барлыҡҡа килгән пневмокониоз ауырыуы; *ҡара:* **пневмокониоз**)

**силикато́з** силикатоз (систематик рәүештә силикат туҙанын һулау

һөҙөмтәһендә үпкәлә барлыҡҡа килгән пневмокониоз ауырыуҙарының дөйөм исеме)

**силико́з** силикоз (дауамлы рәүештә кремний туҙанын һулауҙан барлыҡҡа килгән пневмокониоз; *ҡара:* **пневмокониоз**)

**силикозоопа́сность** силикоз хәүефе (производствола эшселәр өсөн силикоз башланыу ҡурҡынысы)

**силикотуберкулёз** силикотуберкулез (туберкулез менән ҡатмарлашҡан силикоз)

**симпаталги́я** симпаталгия (вегетатив нервы системаһының симпатик өлөшөнөң зарарланыуы: әрнетеп көслө ауыртыу, трофик үҙгәрештәр (шешенеү, ныҡ тирләү һ. б.) менән үтә)

**симпатикотони́я** симпатикотония (вегетатив нервы системаһында уның симпатик өлөшөнөң өҫтөнлөк тотоуы)

**симпто́м** симптом (патологик (сирле) күренештең йә ауырыуҙың ниндәй ҙә булһа билдәһе, мәҫ., *с. кардинальный* кардиналь симптом (төп билдә); *с. клинический* клиник симптом (ауырыуҙың үтеүендә күҙәтелгән билдә: әйтәйек, йүткереү, температура күтәрелеүе һ. б.); *с. патогномичный* патогномик симптом (теге йә был ауырыуға туранан-тура хас булған билдә); *с. субъективный* субъектив симптом (ауырыу кешенең хис-тойғоларынан, һөйләүенән беленгән ауырыу билдәһе)

**симптома́тика** симптоматика (бер йәки бер төркөм ауырыуға хас ауырыу билдәләренең бергәлеге)

**симптомоко́мплекс** *ҡара:* **синдром**

**симуля́нт** симулянт (симуляцияга бирелгән кеше)

**симуля́ция** симуляция (булмаған ауырыуҙы бар итеп күрһәтеү)

**си́напс** синапс (нервы күҙәнәктәренең үҙ-ара йәки улар тәьмин иткән туҡыма менән ҡушылыу урыны)

**синдро́м** синдром (ниндәй ҙә булһа ауырыу күренешенә хас бер төркөм билдәләр, был термин ҡайһы бер айырым ауырыуҙарҙы ла аңлата, мәҫ. *с. адаптационный* адаптация синдромы (организмдың ыңғай булмаған тәьҫир-йоғонтоға ҡаршы йүнәлтелгән көрәшеү реакцияларының бергәлеге); *с. геморрагический* геморрагия синдромы (ҡайһы бер ауырыуҙарға хас ағза-туҡымаларҙың ҡанаусанлығы); *с. депрессивный* депрессия синдромы (*ҡара:* **депрессия**); *с. катотонический* кататония синдромы (психик ярһып китеү йәки киреһенсә дәртһеҙлеккә, һүлпәнлеккә бирелеү менән характерлы психик һаулыҡтың ҡаҡшауы); *с. маниакальный* маниакаль синдром (самаһыҙ артыҡ кәйефләнеү, күңел күтәренкелеге, үҙ һәләтенә баһа бирмәү кеүек билдәләр менән характерлы психик һаулыҡтың ҡаҡшауы) һ. б.

**синерги́зм** *(фарм.)* синергизм (ҡабул ителгән бер нисә дарыуҙарҙың бер-береһенең тәьҫир-йоғонтоһон көсәйтеүе)

**сине́хии** синехиялар (*ҡара:* **спайки**)

**синови́т** синовит (быуындың синовиаль шекәрәһенең шешеүе)

**сино́вия** синовия (быуын эсенә бүленгән һәм быуын ҡабын майлай торған лайлалы матдә)

**си́нус** синус (организмдағы ҡайһы

бер ҡыуышлыҡтар ошолай ҙа атала, мәҫ. *с. плевры* плевра синусы һ. б.)

**синусит** синусит (танау тирәһендәге бер йәки бер нисә ҡыуышлыҡтың шешеүе)

**синюшность** күгәреү, күгәргәнлек (мәҫ. күҙ төптәре күгәргәнлеге)

**синяк** күмгәк (*ҡара:* **кровоподтек)**

**сирингомиелия** сирингомиелия (арҡа мейеһе зарарланыуы менән үткән дауамлы нервы ауырыуы)

**сироп** *(фарм.)* сироп (концентрациялы шәкәр йә башҡа шәрбәт эретмә менән бутап әҙерләнгән дарыу формаһы)

**система (органов)** система (организмдың бер йүнәлештәге эшмәкәрлеген башҡарыусы ағзалар, мәҫ. *с. автономная (вегетативная нервная)* автоном (вегетатив нервы) системаһы (нервы системаһының эске ағзалар һәм матдәләр алмашыныуы менән идара итеүсе бүлеге); *с. вторая сигнальная* икенсе сигнал системаһы (кешегә генә хас һүҙ-тел ярҙамындағы сигнализация системаһы); *с. мочевыделительная* һейҙек бүлеп сығарыу системаһы); *с. опорно-двигательная* таяныу-хәрәкәт системаһы; *с. парасимпатическая нервная* парасимпатик нервы системаһы (автоном нервы системаһы тармағы); *с. первая сигнальная* беренсе сигнал системаһы (тышҡы тәбиғәттең организмдың эске тәбиғәте менән мотлаҡ рефлектор бәйләнеше, мәҫ. яҡтылыҡ, тауыш һ. б.); *с. проводящая сердца* йөрәктең үткәргес системаһы (үҙенсәлекле нервы системаһы); *с. симпатическая нервная* симпатик нервы системаһы (автоном нервы системаһының тармағы); *с. эндокринная* эндокрин системаһы һ. б.)

**систола** систола (йөрәк мускулдарының ритмик рәүештә ҡыҫҡарыу дәүере)

**сифациоз** сифациоз (сысҡан-ҡомаҡтарҙа була торған һәм ошо йәнлектәрҙән бысранған аш-һыу аша кешегә лә йоғоусан гельминтоз ауырыуы)

**сифилид** сифилид (сифилис булғанда тәндә барлыҡҡа килгән сабыртма)

**сифилидология** сифилидология (венерологияның сифилисты өйрәнеүсе тармағы)

**сифилис** сифилис төҫһеҙ спирохета (трепонема) исемле бактерия йоғоуҙан килгән етди венерик ауырыу, ул тире һәм тиресәнән тыш эске ағза-туҡымаларҙы зарарлаусан; төрҙәре: *с. бытовой* көнкүреш сифилисы (һауыт-һаба, теш щеткаһы һ. б. аша йоҡҡан сифилис); *с. висцеральный* висцераль (эске ағзалар) сифилисы; *с. врожденный (конгенитальный)* тыумыштан килгән (конгениталь) сифилис (сирле әсәһенән ҡарында саҡта йоҡҡан сифилис); *с. вторичный* икенсел сифилис (ауырыуҙың икенсе дәүере); *с. латентный (скрытый)* латент (йәшерен) сифилис (ауырыу билдәләре күренмәй); *с. первичный* беренсел сифилис (ауырыуҙың тәүге дәүере); *с. тропический (ҡара:* **фрамбезия***); с. третичный* өсөнсөл сифилис (ауырыуҙың өсөнсө дәүере)

**сифилитический** сифилис, сифилитик (сифилисҡа ҡағылышлы)

**сифилома** сифилома *(с. первичная;*

*ҡара:* **шанкр твердый**; *с. третичная; ҡара:* **гумма сифилитическая**)

**сифилофоби́я** сифилофобия (сифилисҡа ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия**)

**ска́льпель** скальпель (хирургик бысаҡ)

**скальпи́рование** скальпирлау (тиренең һыҙырылып сығыуы менән характерлы йәрәхәт, мәҫ., баш тиреһенең скальпирланыуы)

**скарифика́ция** скарификация (вакцинация үткәргәндә ҡан сыҡҡансы тирене сыйыу)

**скарлати́на** скарлатина (үҙенә бер төрлө микроб йоҡҡандан һәм күпселектә балаларҙа күҙәтелгән йоғошло ауырыу)

**скарлатино́зный** скарлатиноз (мәҫ., скарлатиноз сабыртма)

**скато́л** скатол (тиҙәктәге аҡһым сереүҙән барлыҡҡа килгән органик матдә)

**сквамо́зный** сквамоз (ҡауаҡланыуға ҡағылышлы)

**сквозня́к** *(разг.)* үтәләй өргән ел

**скиаскопи́я** скиаскопия (офтальмоскоп ярҙамында күҙ рефракцияһын тикшереү)

**скеле́т** һөлдә (мәҫ. *с. костный* һөйәктәр һөлдәһе)

**скла́дка (и)** бөрмә (мәҫ. *с. голосовая* тауыш бөрмәһе; *с. подкрыльцовая* ҡултыҡ аҫты бөрмәһе; *с. прямой кишки* тура эсәк бөрмәһе һ. б.)

**скле́ра** склера (күҙ ағы)

**склеродактили́я** склеродактилия (склеродермияның төрө: бармаҡтар зарарлана)

**склереде́ма взрослых** өлкәндәр склередемаһы (тиренең ҡатып шешеүе менән характерлы ауырыу)

**склери́т** склерит (күҙ ағының шешеүе)

**склеродерми́я** склеродермия (тире һәм тире аҫты туҡымаһының ҡатыуы менән билдәләнгән коллегеноз рәтенә ингән ауырыу; төрҙәре: *с. диффузная* диффуз склеродермия (тәндең байтаҡ өлөшөн ҡаплаған склеродермия); *с. очаговая* сикле склеродермия)

**склеро́з** склероз (1. ауырыу һөҙөмтәһендә тоташтырғыс туҡыма үҫеүҙән ағза-туҡыманың тығыҙланып ҡатыуы, мәҫ. *с. сосудов* тамырҙар склерозы һ. б.; 2. *с. боковой амиотрофический* ян-яҡ амиотрофик склероз (үҙәк һәм периферия нервы системаһы зарарланыу менән үтеүсе дөйөм ауырыу; 3. *с. рассеянный* тарҡау склероз (баш һәм арҡа мейеһендә склероз үҙгәрештәре менән үтеүсе дөйөм ауырыу)

**склеро́ма** склерома (үҙенә бер төрлө таяҡса рәүешендәге бактерия йоғоуҙан килеп, өҫкө тын юлдарында шештәр ҡалҡыу менән үтеүсе инфекцион ауырыу)

**склероувеи́т** склероувеит (күҙ ағы һәм күҙҙең тамырлы шекәрәһенең шешеүе)

**склероэктази́я** склероэктазия (травма йә ауырыуҙан һуң күҙ ағының бүртеп сығыуы)

**сколио́з** сколиоз (умыртҡа бағанаһының берәй яҡҡа сығыбыраҡ тороуы, мәҫ. *с. поясничный* бил тәңгәле сколиозы; *с. профессиональный* профессиональ сколиоз; *с. травматический* травма сколиозы һ. б.)

**сколопе́ндры** сколопендралар (Кавказ, Урта Азия, Ҡырымда йәшәүсе ағыулы бөжәктәр)

**скопуляриопсио́з** скопуляриопсиоз

8*

(тырнаҡтарҙы зарарлаусы бәшмәк ауырыуҙарының бер төрө)

**скорбу́т** *ҡара:* **цинга**

**скотоло́жство** мал зинаһы (енси боҙоҡлоҡтоң бер төрө)

**ското́ма** скотома (күреү офоғо тарайыу менән билдәләнгән күреү етешһеҙлеге)

**скотомоги́льник** мал ҡәберлеге

**скри́нинг** скрининг (1. нык таралған ауырыуҙы асыҡлау маҡсатында күп халыҡты тикшереү; 2. *(фарм.)* яңы дарыуҙы табыу маҡсатында перспективалы матдәләрҙе һайлау)

**скрофулёз** скрофулез (туберкулезлы балаларҙа күҙәтелгән экссудатив диатезды аңлатҡан термин)

**скрофулёзный** скрофулезлы (мәҫ. скрофулезлы бала)

**скрофулодерма** скрофулодерма, ҡылауыр (эренле яра сығыу менән билдәләнгән тире һәм тире аҫты туҡымаһы туберкулезы)

**скрофулотуберкулёз** скрофулотуберкулез (балаларҙа күҙәтелеүсе танау тиресәһе, күҙ, лимфатик төйөрҙәр шешеүе менән характерлы туберкулез)

**скула́** бит осо

**сла́бить** *(разг.) ҡара:* **понос**

**слаби́тельный** эс киттергес (мәҫ. эс киттергес дарыу)

**слабови́дящие** насар күреүселәр

**сла́бость** хәлһеҙлек, һүлпәнлек, йомшаҡлыҡ (мәҫ., *с. родовой деятельности* бәпесләү барышының һүлпәнлеге)

**слабоу́мие** аҡылға (еңеләйеү) еңел булыу, аҡылға еңеллек (мәҫ. *с. алкогольное* алкоголдән аҡылға еңеләйеү; *с. старческое* ҡартлыҡтан аҡылға еңеләйеү)

**слеза́** күҙ йәше, йәш

**слезотече́ние** күҙ йәше ағыу

**слепоглухонемота́** һуҡырайыу-һаңғыраулыҡ-телһеҙлек (үҫеш аномалияһы йәки бала саҡта ҡайһы бер ауырыу кисергәндән булған күренеш)

**слепоглухота́** һуҡырайыу-һаңғыраулыҡ

**слепни́** күгәүен-күкселәр (туляремия, түләмә һ. б. йоғошло ауырыу таратыусы ике ҡанатлы бөжәктәр)

**слепо́й** һуҡыр

**слепота́** һуҡырлыҡ (төрҙәре: *с. абсолютная* абсолют (тома) һуҡырлыҡ; *с. куриная (ночная)* тауыҡ күҙ (*ҡара:* **гемералопия**); *с. неполная* яртылаш һуҡырлыҡ (күреү һәләтлеге нык түбәнәйгән була — 0,04%-тан артмай, коррекциялау күҙлегенән файҙаланырға тура килә); *с. снежная* (*ҡара:* **офтальмия снежная**); *с. цветовая* төҫтө айыра алмау (*ҡара:* **ахроматопсия**) һ. б.)

**сли́зисто-гно́йный** лайлалы-эренле (мәҫ., лайлалы-эренле ҡаҡырыҡ)

**слизи́стый** лайлалы

**сли́зь** лайла (лайла биҙҙәре эшләп сығарған йәбешкәк шыйыҡса)

**слой** *(анат.)* ҡатлам (мәҫ., *с. подкожный жировой* тире аҫты май ҡатламы; *с. слизистый* тиресә ҡатламы; *с. эпидермиса роговой* эпидермистың мөгөҙ ҡатламы һ. б.)

**слоно́вость (элефантиаз)** фил ауырыуы (аяҡтарҙың, ҡайһы ваҡыт тоҡсаның һәм ҡатын-ҡыҙ енес ситтәренең склеротик һәм трофик үҙгәреүе менән бер ҡатарҙан күләм йәһәтенән дә нык артыуы)

**слу́жба** *(мед.-гиг.)* хеҙмәт (мәҫ. *с. военно-медицинская* хәрби-медицина хеҙмәте; *с. медицин-*

*ская* медицина хеҙмәте; *с. санитарно-эпидемиологи́ческая* санитария-эпидемиологик хеҙмәт)

**слух** ишетеү, ишетеү һәләтлеге (*с. бинауральный* бинаураль ишетеү (ике ҡолаҡ менән дә); *с. монауральный* монаураль ишетеү (бер ҡолаҡ менән генә)

**слухопротези́рование** ҡолаҡты протезлау хеҙмәте (ишетеү аппараттарын әҙерләү һәм улар менән һаңғырауҙарҙы тәьмин итеү)

**слы́шимость** ишетеүсәнлек

**слюна́** ауыҙ һыуы

**слюнотече́ние** ауыҙ һыуы ағып тороуы

**сме́гма** үңәҙ (мәҫ. *с. крайней плоти* ҡаҫа үңәзе)

**смерте́льный** үлемесле (мәҫ. яра)

**сме́ртность** үлеүсәнлек (үлгәндәр һанын билдәләүсе статистик күрһәткес; төрҙәре: *с. антенатальная* антененталь үлеүсәнлек (баланың әсә ҡарынында үлеүсәнлеге); *с. детская* балалар үлеүсәнлеге (бер йәше менән барған балалар үлеүсәнлеге); *с. материнская* әсәләр үлеүсәнлеге (буйға ҡалыу дәүерендә һәм бала тапҡас 42 көн буйы йөклөлөккә бәйле ҡатындар үлеүен күрһәтеүсе статистик һан); *с. неонатальная* неонаталь үлеүсәнлек (тыуған балаларҙың беренсе ай ғүмерендәге үлеүсәнлеге); *с. неонатальная ранняя* иртә неонаталь үлеүсәнлек (яңы тыуған балаларҙың беренсе аҙна ғүмерендәге үлеүсәнлек); *с. общая* дөйөм үлеүсәнлек (бер меӊ халыҡҡа тура килгән үлгәндәр һаны); *с. перинатальная* перинаталь үлеүсәнлек (үле тыуған һәм беренсе аҙнала үлгән балаларҙың һанын берләштерелгән статистик күрһәткес) һ. б.)

**сме́ртный** үлемле

**смерть** үлем, үлеү (*с. биологическая* биологик үлеү (организмда терелтә алмаҫлыҡ үҙгәрештәр барлыҡҡа килә); *с. внутриутробная* ҡарындағы үлеү; *с. естественная (физиологическая)* тәбиғи (физиологик) үлеү; *с. клиническая* клиник үлеү (үлгәс йөрәк эше, тын алыуы туҡтағас 4—5 минут самаһы ваҡыт эсендәге дәүер, был ваҡытта әле терелтеп була); *с. местная; ҡара:* **омертвение**; *с. мнимая ҡара:* **летаргия**; *с. насильственная* фажиғәле үлеү һ. б.)

**сме́си пита́тельные** туҡлыҡлы ҡатнашмалар (йәш балалар өсөн әҙерләнгән махсус аҙыҡ)

**смог** смог (ҡала ерендә күҙәтелеүсе һаулыҡ өсөн бик зарарлы булған промышленность предприятиелары һәм автомашиналар бүлеп сығарған ташландыҡ газдарҙың томанға ҡушылыуынан килгән ҡатышма)

**сморка́ние** *(разг.)* һеңгереү

**смотрова́я** смотр үткәреү (бүлмәһе) бинаһы (профилактик ҡарау өсөн)

**смрад** һаҫыҡ еҫ

**смягча́ющий** йомшартҡыс (мәҫ. май)

**сниже́ние** *(физиол.)* түбәнәйеү, насарайыу (мәҫ., күреүҙең насарайыуы, эшкә һәләтлелектең түбәнәйеүе)

**сни́мок рентге́новский** *ҡара:* **рентгенограмма**

**снотво́рный** йоҡлатҡыс, йоҡлата торған (мәҫ. дарыу)

**совмести́мость кро́ви** ҡан ярашлығы (бер кеше ҡанының икенсе кешегә килешеүе)

**совокупле́ние** (енси) яҡынлыҡ ҡылыу

**содержи́мое** тупланма (мәҫ., *с. желудка* ашҡаҙан тупланмаһы, *с. толстых кишок* йыуан эсәктәге (тиҙәк) тупланма һ. б.)

**содо́ку** содоку (үҙенә бер төрлә спирилла бактерияһы тыуҙырған һәм температура күтәрелеү, мускулдар һыҙлауы һ. б. менән үтеүсе инфекцион ауырыу, ул ҡомаҡ тешләүенән була)

**сойти с ума** *(разг.)* аҡылдан яҙыу

**сок** *(физиол.)* һут (мәҫ. *с. желудочный* ашҡаҙан һуты)

**СОКК и КП СССР** (Союз обществ Красного Креста и Красного Полумесяца СССР) СССР-ҙың Ҡыҙыл Тәре һәм Ҡыҙыл Ярым ай йәмғиәттәре союзы

**сократи́мость** ҡыҫҡарыусанлыҡ

**сокраще́ние** *(физиол.)* ҡыҫҡарылыш, ҡыҫҡарыу (мәҫ., мускулдар ҡыҫҡарыуы)

**солани́зм** соланизм (шыҡҡан картуф ашап ағыуланыу)

**солани́н** соланин (картуфта була торған ағыу, айырыуса шыҡҡан картуфта күп була)

**солитёр** солитер (*ҡара:* **цепень**)

**соля́рий** солярий (ҡояшта ҡыҙыныу өсөн махсус урын)

**сомнамбули́зм** сомнамбулизм (йоҡлаған хәлдә йөрөү, гәҙәттә балаларҙа һәм психопатия, эпилепсия булғанда күҙәтелә)

**сон** йоҡо (төрҙәре: *с. беспокойный* тынғыһыҙ йоҡо; *с. гипнотический* гипноз йоҡоһо (*ҡара:* **гипноз**); *с. глубокий* тәрән йоҡо; *с. искусственный* яһалма йоҡо (йоҡлатыу); *с. кошмарный* баҫлығыу, баҫлығып йоҡлау; *с. летаргический* летаргия йоҡоһо (*ҡара:* **летаргия**); *с. наркотический* наркоз йоҡоһо (*ҡара:* **наркоз**); *с. патологический* патологик йоҡо (*ҡара:* **сопор**); *с. поверхностный* насар йоҡо, йоҡомһорап ятыу һ. б.)

**сонли́вость** йоҡо баҫыу, йоҡосолоҡ

**сопе́ние** мышнау, танау һыҙғыртыу

**со́пли** *(разг.)* маңҡа

**со́пор** (**сопорозное состояние**) сопор (ауырыу сәбәпле үтә ҡаты, һаулыҡ өсөн ҡурҡыныс булған һуштан яҙыу күренеше)

**соса́ние** имеү

**со́ска** имеҙлек

**сосо́к** *(анат.)* имсәк, имсә (1. *с. грудной железы* имсәк башы; 2. *с. зрительного нерва* күреү нервыһы имсәһе (күреү нервыһының башланған ере) һ. б.)

**со́сочек** *(анат.)* имсә, ҡытыр (*мәҫ. с. волосяной* сәс имсәһе (тире эсендә); *с. языка* тел ҡытыры һ. б.)

**состоя́ние** *(физиол.)* хәл, торош (мәҫ., *с. бессознательное* һушһыҙ (иҫһеҙ) хәл; *с. здоровья* һаулыҡ торошо)

**сосу́д** *(анат.)* тамыр (мәҫ., *с. артериальный* артериаль тамыр, артерия тамыры; *с. кровеносный* ҡан тамыры; *с. лимфатический* лимфа тамыры)

**сотрясе́ние** (**коммоция**) һелкенеү (ябыҡ механик имгәнеү, нигеҙҙә һуҙ баш мейеһе зарарланыуы хаҡында бара; *с. головного мозга* баш мейеһе һелкенеүе)

**сошни́к** төрән, төрән һөйәге (танау бүлгеһендә)

**СОЭ** (**состояние оседания эритроцитов**) СОЭ (лаборатор анализ: эритроциттарҙың ҡуныу (ултырыу) торошо)

**спазм** спазм (киҫкен ҡыҫылыу, мәҫ., *с. кровеносного сосуда* ҡан

тамыры спазмаһы)

**спазмолитики** спазмолитиктар (спазманы юҡ итеүсе дарыуҙар)

**спазмофилия** спазмофилия (кальций-фосфорлы матдәләр алмашыныуы боҙолоуынан килгән көҙән йыйырыу менән үтеүсе ауырыу)

**спайка** *(анат.)* тоташма (мәҫ., *с. век боковая* күҙ ҡабаҡтарының ян яҡ тоташмаһы)

**спайки** *(пат.)* йәбешкәк (ауырыу һөҙөмтәһендә ит үреп йәбешкән урын, мәҫ., плевра йәбешкәге)

**сперма** сперма, аталыҡ орлоғо (сперматозоидтарҙан һәм орлоҡ шыйыҡсаһынан торған ҡатышма)

**сперматозоид** сперматозоид (ир (аталыҡ) енес күҙәнәге)

**сперматорея** сперматорея (кесе ярау йәки оло ярау аҙағында аталыҡ орлоғоноң юғалыуы)

**сперматурия** сперматурия (сперматозоидтарҙың һейҙектә булыуы)

**СПИД (синдром приобретенного иммунодефицита)** СПИД (тормошта барлыҡҡа килгән иммунитет дефициты) (үҙенә хас вирус йоғоуҙан булған үтә етди донъя ауырыу, иң тәүҙә кешенең иммунитеты зарарлана)

**спина** арҡа

**спинальный** арҡа (арҡаға йәки арҡа мейеһенә ҡағылышлы)

**спинка** *(анат.)* һырт, буй (мәҫ., *с. носа* танау буйы; *с. языка* тел (өҫтө) һырты һ. б.)

**спинной** арҡа

**спинномозговой** арҡа мейеһе (мәҫ., арҡа мейеһе шыйыҡсаһы)

**спириллы** спириллалар (бормалы тәнле бактериялар, ҡайһылары кеше өсөн зарарлы — ауырыу тыуҙыра ала)

**спирометрия** спирометрия (үпкәләге һауа күләмен билдәләү ысулы)

**спирохета бледная** *ҡара:* **трепонема бледная**

**спирт** спирт (мәҫ., *с. метиловый* метил спирты (көслө ағыу); *с. этиловый (винный)* этил спирты һ. б.)

**спица для вытяжения** һуҙыу энәһе (тартышҡан һөйәк остарын урынына ҡуйыу өсөн ҡулланыла торған инструмент)

**спланхноптоз** спланхноптоз (эске ағзаларҙың аҫҡа төшөүе)

**спленит** спленит (талаҡ шешеүе)

**спленомегалия** спленомегалия (талаҡтың тотороҡло рәүештә ҙурайыуы)

**спленоптоз** спленоптоз (талаҡ төшөүе, уның ҡуҙғалыусан булыуы)

**спленэктомия** спленэктомия (талаҡты алыу операцияһы)

**сплетение** сырмалсыҡ (нервыларҙың йәки ҡан, лимфа тамырҙарының ҡушылыу урыны, мәҫ., *с. венозное* веналар сырмалсығы һ. б.)

**спонгиобластома** спонгиобластома (үҙәк нервы системаһында барлыҡҡа килгән шеш)

**спонгиоз** спонгиоз (тиренең өҫкө ҡатламы — эпидермис шешеүенең бер төрө)

**спондилез** спондилез (умыртҡаара кимерсәктәрҙең дистрофик үҙгәреүе менән характерлы хроник ауырыу)

**спондилит** спондилит (бер йәки бер нисә умыртҡа һөйәгенең шешеүе, мәҫ., *с. инфекционный* инфекцион спондилит; *с. туберкулезный* туберкулез спондилиты һ. б.)

**спондилоартрит** спондилоартрит

(умыртҡа-ара быуындарҙың шешеүе)

**спондилоартро́з** спондилоартроз (умыртҡа-ара быуындары артрозы (*ҡара:* артроз); төрҙәре: *с. грудной* күкрәк тәңгәле спондилоартрозы; *с. поясничный* бил тәңгәле спондилоартрозы һ. б.)

**спонта́нный** спонтан (үҙенән-үҙе булған, мәҫ., *аборт спонтанный* спонтан аборт)

**спо́ра** спора, саң-һеркә (1. бәшмәкмүктәрҙең енесһеҙ үрсеүен тәьмин иткән орлоҡ рәүешендәге зат; 2. микробтарҙың һәм ҡайһы бер иң ябай хайуандарҙың ыңғай булмаған шарттарҙа йәшәргә һәләтле формаһы, мәҫ., түләмә спораһы)

**споради́ческий** спорадик (һирәк күҙәтелеүсән, мәҫ., спорадик ауырыу)

**спороци́ды** спороцидтар (микроорганизм спораларын һәләк итеүсе химик матдәләр, мәҫ., хлорамин, формальдегид һ. б.)

**споро́вики** споровиктар (ябай микроскопик хайуандарҙың бер төрө, мәҫ. тапма ауырыуын, кокцидиоз сирен тыуҙырыусы заттар)

**споротрихо́з** споротрихоз (үҙенә бер төрлө бәшмәк йоҡҡандан килгән етди дөйөм бәшмәк ауырыуы)

**спо́соб флотации** флотация ысулы (бактериоскопия үткәргәндә туберкулез таяҡсаһы еңелерәк табылһын өсөн ҡаҡырыҡты «байыҡтырыу» ысулы)

**спринцева́ние** спринцовкалау (һиптереп йыуыу, мәҫ., *с. влагалища* еңсәне спринцовкалау (ҡатынҡыҙ гигиеник սараһы) һ. б.)

**спринцо́вка** спринцовка (спринцовкалау өсөн ябай прибор)

**спру** спру (тропик һәм субтропик климатлы илдәрҙә күҙәтелеүсән эс китеү, ҡан аҙайыу һ. б. үҙгәрештәр менән үтеүсе дөйөм ауырыу)

**спу́танность сознания** аңдың буталыуы (психик һаулыҡтың ҡаҡшауы: илереү, галлюцинация һ. б. билдәләр менән үтеүсән)

**спу́тник(и) в генетике** генетикалағы юлдаш (хромосома сегменты)

**срамно́й** оят (тышҡы енес ағзаларына ҡағылышлы, мәҫ., оят өлкәһе)

**сраще́ние** йәбешеп үҫеү, (мәҫ., плевраның йәбешеп үҫеүе)

**среда́** мөхит, тәбиғәт, среда *(с. внешняя (окружающая)* тышҡы мөхит (тирә-яҡ тәбиғәт); *с. внутренняя (человека)* кешенең эске тәбиғәте; *с. питательная* туҡлыҡлы среда (микроорганизмдарҙы үрсетеү өсөн әҙерләнгән ашамлыҡ; *с. социальная* социаль среда (кеше йәшәгән йәмғиәт шарттары: көнкүреше, эше, ялы һ. б.)

**сре́дняя занятость койки** койканың уртаса файҙаланыу кимәле (ятып дауалау учреждениеһында ҡулланылыусы статистик күрһәткес)

**сре́дняя продолжи́тельность (предсто́ящей) жи́зни** (буласаҡ) ғүмерҙең уртаса оҙонлоғо (статистик күрһәткес)

**средосте́ние** арауыҡ (*с. грудное* нигрә арауығы (ике үпкә арауығы, унда йөрәк ята); *с. яичка* күкәй арауығы)

**сре́дство(а)** 1. *(фарм.)* (дарыу, препарат, матдә, мәҫ., *с. аналгезирующее* аналгетик дарыу (ауыртыуҙы баҫыусы дарыу матдәһе; анальгин, промедол һ. б.); *с. аналептическое* аналептик дарыу (оҙонса мейеләге тын алыу

һәм тамыр йөрөткөс үҙәктәр эшсәнлеген шәбәйткес дарыу: кордиамин, коразол һ. б.); *с. антацидное* антацид дарыу (ашҡаҙан әселеген кәметеүсе дарыу); *с. антигельминтное* антигельминт дарыу (паразит селәүсендәргә ҡаршы көрәш дарыуы); *с. антисептическое* антисептик (дарыу) матдә (*ҡара:* **антисептика**); *с. бактерицидное* бактерицид (дарыу) матдә (бактерияларҙы юҡ итеүсе дарыу); *с. биогенные* биоген дарыуҙар (үҫемлек һәм хайуандар ағза-туҡымаһынан алынған дауа матдәләре); *с. ветрогонное* газ сығарғыс дарыу (эсәктәге бушандыҡ газдан ҡотолоу өсөн ҡулланыла торған дарыу); *с. вяжущее* ҡамаштыра торған дарыу (мәҫ, имән ҡабығы төнәтмәһе); *с. ганглиоблокирующее* ганглиоблокатор дарыу (вегетатив нервы системаһында нервы ҡуҙғыуҙың үтеүен туҡтатыусы дарыу); *с. гемостатическое* гемостатик дарыу (*ҡара:* **с. кровоостанавливающее**); *с. гипотензивное* гипотензив дарыу (ҡан баҫымын түбәнәйтеүсе); *с. дезинфицирующее* дезинфекциялау матдәһе (*ҡара:* **дезинфекция**); *с. дезодоризующее* дезодорациялау матдәһе (һаҫыҡ еҫте бөтөрөүсе препарат); *с. диагностическое* диагнозлау (препараты) матдәһе (ауырыуҙы асыҡлау өсөн ҡулланыла, мәҫ., ашҡаҙанды рентгенттан тикшергәндә көкөрт әселе барий бирелә); *с. диуретическое* диуретик (һейҙек ҡыуғыс) дарыу; *с. жаропонижающее* температураны төшөрөүсе дарыу; *с. желчегонное* үт ҡыуғыс дарыу; *с. инсектицидное* инсектицид (препарат) матдә (бөжәктәрҙе ҡырыусы матдә, мәҫ., хлорофос һ. б.); *с. косметическое* косметик матдә (мәҫ., пудра, лосьон һ. б.); *с. лекарственное* дарыу матдәһе; *с. наркотическое* 1. наркоз препараты (мәҫ., эфир); 2. наркотик дарыу (ауыртыуҙы баҫа торған дарыу, мәҫ., пантопон); *с. наружное* тышҡы дарыу (тәнгә һөртөү өсөн ҡулланылғаны, мәҫ., дарыу майы); *с. нейролептическое (нейроплегическое, антипсихотическое)* нейролептик дарыу (үҙәк нервы системаһы эшсәнлеген кәметеүсе дарыу, мәҫ., аминазин, галоперидол); *с. обволакивающее* ҡаплаусы (майлаусы) дарыу матдәһе, мәҫ., крахмал, аҡбалсыҡ); *с. общеукрепляющее* дөйөм һаулыҡты яҡшыртҡыс (дауа) дарыу; *с. отвлекающее* (*ҡара:* **с. раздражающее**); *с. отхаркивающее* ҡаҡыртҡыс дарыу; *с. паллиативное* паллиатив (дауа) дарыу (ауырыуҙы бөтөрмәйенсә бер аҙ хәлде яҡшыртыусы дарыу); *с. потогонное* тирләткес дарыу; *с. противовоспалительное* шешеүҙе ҡайтарғыс дарыу (мәҫ. салициллаттар һ. б.); *с. противозачаточное* буйға ҡалыуҙан һаҡлағыс матдә; *с. противосудорожное* көҙәнде (тән тартышыуҙы) баҫыусы (дауа) дарыу; *с. психостимулирующее* психостимулятор дарыу (үҙәк нервы системаһы эшсәнлеген шәбәйтеүсе дарыу); *с. раздражающее* ҡуҙғытҡыс дарыу (мәҫ., ментол һ. б.) *с. седативное* седатив дарыу (тынысландырғыс дарыу); *с. слабительное* эс китергес дарыу; *с. снотворное* йоҡлатҡыс (йоҡлата торған) дарыу; *с. сосудорасширяющее* ҡан тамырын

киңәйткес дарыу; *с. спазмолитическое* спазмолитик дарыу (спазм күренешен юҡ итеүсе дарыу); *с. тонизирующее* тонусты күтәреүсе дарыу (һаулыҡты яҡшыртыусы дарыу); *с. фунгицидное* фунгицид дарыу (патоген бәшмәктәрҙе юҡ итеүсе матдә); *с. химиотерапевтическое* химиотерапевтик дарыу (синтетик юл менән табылған дауа матдәһе); 2. *средство* сара (мәҫ., *с. защиты* һаҡлағыс средстволар: *с. защиты индивидуальные* индивидуаль һаҡлағыс средстволар (мәҫ., противогаз, респиратор); *с. защиты коллективное* коллектив һаҡлағыс средство (мәҫ., бомбоубежище); 3. кешеләрҙе зарарлаусы ҡорал, боевой матдәләр, мәҫ., *с. массового поражения* массовый зарарлау средстволары (атом, химик, бактериологик һөжүм итеү өсөн ысул-матдәләр)

**срыгивание** аш ҡайтарыу (ашаған аштың кире килеүе)

**ссáдина** һыҙырылған урын

**ставить, поставить** *(процед.)* ҡуйыу, һалыу (мәҫ., *на спину банки* арҡаға банка ҡуйыу (һүҙ медицина банкаһы хаҡында бара); *с. пиявки* һөлөк һалыу (һүҙ медицина һөлөгө хаҡында бара)

**стáдия** *(мед.)* стадия (дәүер, мәл, мәҫ., *с. болезни* ауырыу стадияһы; *с. выздоровления* һауығыу стадияһы)

**стаз** стаз (ҡан-лимфа тамырҙары, эсәк кеүек көпшәле ағзалар эсендә булған нәмәләр ағымының ҡырҡа һүлпәнәйеүе йәки туҡтауы, мәҫ., ҡан стазы, лимфа стазы һ. б.)

**стáнция** *(мед.-сан.)* станция (ҡайһы бер дауалау-профилактик учреждениелар исеме, мәҫ., *с. санитарно-эпидемиологическая* санитария-эпидемиологик станция; *с. скорой помощи* ашығыс медицина ярҙамы станцияһы һ. б.)

**старéние** ҡартайыу

**стáрость** ҡартлыҡ

**статúстика** статистика (төрҙәре: *с. военно-медицинская* хәрби-медицина статистикаһы; *с. демографическая* демография (халыҡты өйрәнеү) статистикаһы; *с. заболеваемости* ауырыуҙар статистикаһы; *с. здоровья населения* халыҡ һаулығы статистикаһы; *с. здравоохранения* һаулыҡ һаҡлау эштәре статистикаһы; *с. санитарная* санитария статистикаһы)

**стáтус** *(мед.)* статус (ҡайһы бер ауырыуға хас бер төркөм ауырыуҙар билдәләре комплексы, мәҫ., *с. астматический* астма статусы (*ҡара:* **астма**); *с. эпилептический* эпилепсия статусы (*ҡара:* **эпилепсия**) һ. б.)

**стафилодермúя** стафилодермия (стафилококк бактерияһы тыуҙырған сиҡан, ваҡ сиҡан һ. б. формалағы эренле сабыртма)

**стафилокóкк** стафилококк (төҙөлөшө менән йөҙөм тәлгәшен хәтерләткән борсаҡ рәүешендәге бактерия; төрҙәре: *с. белый* аҡ стафилококк; *с. золотистый* алтындай стафилококк һ. б.)

**стафилокóкковый** стафилококк (мәҫ., стафилококк сепсисы)

**стафилóма** стафилома (ауырыу, йәрәхәтләнеү һөҙөмтәһендә, күҙ алмаһының теге йәки был урында бүлтәйеп сығыуы)

**стационáр** стационар (сирләләр өсөн даими койкалары була торған дауалау учреждениеһы,

мәҫ., больница, санаторий һ. б.)
**стационарный** стационар (мәҫ., стационар дауалау)
**ствол** *(анат.)* олон (ҡайһы бер эре ҡан, лимфа тамырҙары, нервылар ошолай атала, мәҫ., *с. артериальный* артериаль олон (йәки эре артерия) һ. б.; *с. мозга* баш мейеһе олоно (баш мейеһенең оҙонса, артҡы, урталыҡ, аралыҡ мейеләрҙән һәм ярымшарҙарҙың аҫҡы яғынан торған өлөшө)
**створка** *(анат.)* япраҡ (мәҫ. *с. сердечного клапана* йөрәк клапаны япрағы)
**стеатодермия** стеатодермия (баштың сәсле өлөшө себореяһы; *ҡара:* **себорея**)
**стеатома** стеатома (тирелә күҙәтелә торған май шеше)
**стеаторея** стеаторея (май матдәләренең тиҙәк менән бүленеүе)
**стекло** быяла (мәҫ., *с. оптическое* оптика быялаһы (*ҡара:* **линза**); *с. покровное* япма быяла (микроскопия үткәргәндә ҡаралған материалды ҡаплау өсөн ҡулланыла); *с. предметное* (нигеҙҙә, микроскопия үткәргәндә тикшерелгән материалды һалыу өсөн ҡулланыла)
**стелька-супинатор** супинатор-олтораҡ (яҫы табанлылыҡ булғанда ҡулланыла торған махсус олтан)
**стенка** *(анат.)* көп (мәҫ., *с. желудка* ашҡаҙан көбө; *с. кишечная* эсәк көбө; *с. сердца* йөрәк көбө; *с. сосуда* тамыр көбө һ. б.)
**стеноз** стеноз (көпшәле ағзаның йә уның инешенең тарайыуы; *ҡара:* **стриктура**)
**стенокардия** стенокардия (йөрәк тәңгәлендә ауыртыу өйәнәге менән үтеүсе йөрәктең ишемия ауырыуы; *с. движения (напряжения)* хәрәкәт (көсәргәнеш) стенокардияһы (мәҫ., физик эш башҡарғанда); *с. покоя* тынлыҡ (тыныслыҡ) стенокардияһы (мәҫ., ултырғанда, ятҡанда)
**стереорентгенография** стереорентгенография (тикшерелгән объектты күләм рәүешендә төшөрөүсе рентгенография; *ҡара:* **рентгенография**)
**стереорентгеноскопия** стереорентгеноскопия (тикшерелгән объектты күләм рәүешендә күрһәтеүсе рентгеноскопия; *ҡара:* **рентгеноскопия**)
**стереоэлектроэнцефалография** стереоэлектроэнцефалография (баш мейеһендә барған электр процестарын тикшереү ысулы)
**стержень** 1. *(анат.)* һабаҡ, мәҫ., *с. волоса* сәс һабағы; 2. *(пат.)* үҙәк, мәҫ., *с. фурункула* фурункул (сиҡан) үҙәге
**стерилизатор** стерилизатор (инструментты, бәйләү материалын һ. б. стерилизациялау аппараты)
**стерилизационная** стерилизационная, стерилизациялау бүлмәһе (операцион блокта урынлаша)
**стерилизация** стерилизация (1. юғары температура йә химик препарат ярҙамында теге-был объектты микроорганизмдарҙан зарарһыҙлау; 2. кешене, хайуанды ырыуһыҙ итеү (кешегә ҡарата ҡайһы бер ауырыу булғанда ҡулланылыусы сара; төрҙәре: *с. лучевая* нурланыш стерилизацияһы; *с. хирургическая* хирургик стерилизация һ. б.)
**стерильный** стериль (1. микробҗәләндән ҡотҡарылған; 2. ырыуһыҙ ҡалдырылған)
**стеркобилин** стеркобилин (тиҙәккә билирубин үҙгәреүенән барлыҡ-

ҡа килгән төҫтә береүсе пигмент)

**стероиды** стероидтар (бер төркөм мөһим органик матдәләр: гормондар, үт кислоталары һ. б.)

**стетометр** стетометр (күкрәк ураүын үлсәү өсөн прибор)

**стетоскоп** стетоскоп (тыңлап тикшереү өсөн прибор; төрҙәре: *с. акушерский* акушерлыҡ стетоскобы (ҡарындағы баланың йөрәген тыңлар өсөн); *с. бинауральный* бинаураль стетоскоп (ике ҡолаҡ менән дә тыңлар өсөн стетоскоп); *с. электронный* электрон стетоскоп)

**стетофон** стетофон (йөрәкте тыңлап тикшереү өсөн прибор; йөрәк эшләүҙән килгән өн-тауыш көсәйтелә)

**стетофонендоскоп** стетофонендоскоп (ике ҡолаҡ менән дә тыңлау өсөн прибор)

**стигмы** стигмалар (тыумыштан йә тормошта барлыҡҡа килгән сирле күренештәрҙең бер төрө, мәҫ., *с. дегенеративные физические* дегенератив физик стигмалар (тыумыштан килгән физик кәмселектәр); *с. профессиональные* профессиональ стигмалар (ҡайһы бер профессия эшселәрендә күҙәтелгән физик үҙгәрештәр, мәҫ., ҡулдарҙың һөйәлләнеүе) һ. б.)

**стимул** *(физиол.)* стимул (шәбәйткес, ҡуҙғытҡыс фактор)

**стимулировать** стимуллаштырыу (*ҡара:* **стимуляция**)

**стимуляторы биогенные** биоген стимуляторҙар (үҫемлек, хайуан туҡымаларынан алынған һәм дауалау маҡсатында ҡулланыла торған биологик актив матдәләр)

**стимуляция** стимуллаштырыу (организмда теге йәки был ағзатуҡыма эшсәнлеген шәбәйтеү сараһы, мәҫ., *с. родов* бәпесләүҙе стимуллаштырыу; *с. сердца* йөрәк эшсәнлеген стимуллаштырыу һ. б.)

**стирание зубов** тештәрҙең ышҡылыуы, ышҡылып йоҡарыуы, ашалыуы

**стол** өҫтәл (мәҫ., *с. операционный* операция өҫтәле, *с. перевязочный* бәй һалыу өҫтәле һ. б.; *с. лечебного питания* дауа туҡланыу өҫтәле (СССР-ҙа булдырылған стандарт диеталарҙың дөйөм исеме, барыһы 15 диетик өҫтәл билдәле)

**столб** *(анат.)* бағана, һуҙылма (мәҫ., *с. позвоночный* умыртҡалыҡ бағанаһы)

**столбняк** һын ҡатыу ауырыуы, столбняк (үҙенә бер төрлө бактерия тыуҙырған, кешегә тупраҡҡа бысранған яра-йәрәхәт аша йоҡҡан үтә етди инфекцион ауырыу)

**столбнячный** һын ҡатыу ауырыуы (мәҫ., һын ҡатыу ауырыуы бактерияһы)

**столик предметный (микроскопа)** микроскоптың ҡарау өҫтәле (микроскоптан тикшерелгән нәмәне һалып ҡарау өсөн)

**столовая диетическая (диетстоловая)** диетик ашхана

**стоматит** стоматит (ауыҙ тиресәһенең шешеүе; төрҙәре: *с. афтозный (эрозивный)* афтоз (эрозив) стоматит (ауыҙ тиресәһендә ваҡ сей яралар барлыҡҡа килә); *с. кандидозный (молочница)* кандидоз стоматит (аҡ ҡуныҡ барлыҡҡа килеү менән характерлы һәм имсәк балаларҙа һәм үтә ҡарт кешеләрҙә күҙәтелеүсән бәшмәк ауырыуы); *с. курильщи-*

*ков* тәмәкеселәр стоматиты; *с. медикаментозный* медикаментоз стоматит (берәй дарыу килешмәгәнлектән ауыҙ тиресәһе шешеүе); *с. микотический* микотик стоматит (микроскопик бәшмәк тыуҙырған ауыҙ тиресәһе шешеүе һ. б.)

**стоматолóг** стоматолог (юғары белемле стоматология белгесе, врач)

**стоматологи́ческий** стоматологик, стоматология (мәҫ., стоматологик ауырыу, стоматология кафедраһы)

**стоматолóгия** стоматология (клиник медицинаның теш, яңаҡ һәм ауыҙ эсенең башҡа туҡымалар ауырыуын йә йәрәхәтен, уларҙы булдырмау һәм дауалау юлдарын өйрәнеүсе тармағы; төрҙәре: *с. ортопедическая* ортопедик стоматология; *с. терапевтическая* терапевтик стоматология; *с. хирургическая* хирургик стоматология)

**стоматоневрологи́я** стоматоневрология (стоматология һәм неврологияның нервы системаһынан килгән ауыҙ эсе ауырыуҙарын өйрәнеүсе тармағы)

**стопá (ступня)** аяҡ башы *(с. (средняя часть)* билтер; *с. конская* һалынып төшкән аяҡ башы (зәғифлек, кеше тик аяҡ бармаҡтары менән баҫырға мәжбүр); *с. мадурская* мадур аяҡ башы (аяҡ башын нык үҙгәртеүсе етди бәшмәк ауырыуы)

**стóчные воды** ташландыҡ һыуҙар

**стошни́ть** уҡшытып (күңел уйнап) ҡуйыу

**стрáбизм** страбизм (*ҡара:* **косоглазие**)

**странгуля́ция** странгуляция (механик быуылыу)

**страх (в психиатрии)** ҡурҡыу ғәләмәте (психик һаулыҡтың ҡаҡшауынан килгән артыҡ ҡурҡыу, мәҫ., *с. навязчивый; ҡара:* **фобия)**

**стрéмя (стремячко)** өҙәңге һөйәге (урта ҡолаҡта)

**стрептодерми́я** стрептодермия (стрептококк тыуҙырған эренҡутыр ауырыуы)

**стрептокóкк** стрептококк (төҙөләшә менән сылбырҙы хәтерләткән борсаҡ рәүешендәге бактерия, бер нисә төрө бар: *с. гноеродный* эренләткес стрептококк һ. б.)

**стрептокóкковый** стрептококк (стрептококка ҡағылышлы, мәҫ., стрептококк сепсисы)

**стрептолизи́н** стрептолизин (стрептококктарҙың ҡайһы бер төрө бүлеп сығарған ағыу)

**стрептостафилодерми́я** стрептостафилодермия (стрептококк һәм стафилококк һәм стафилококк бактериялары тыуҙырған эренҡутырлы сабыртма)

**стрептоцеркóз** стрептоцеркоз (филяриатоз төркөмөнә ингән, нигеҙҙә, тирене зарарлаусы гельминтоз ауырыуы; *ҡара:* **филяриатоз)**

**стресс** стресс (ыңғай булмаған бөтә тышҡы һәм эске йоғонто-тәьҫирҙәргә ҡаршы организмда барлыҡҡа килгән көсөргәнешле һаҡланыу сараһы)

**стресс-фáктор (стрессор)** стресс-фактор (ниндәйҙер стресс тыуҙырырға һәләтле тышҡы йәки эске күренеш)

**стригу́щий** ҡырҡылсан (мәҫ., ҡырҡылсан тимерәү)

**стрикту́ра** стриктура (ауырыу сәбәпле ниндәй ҙә булһа көпшәле ағзаның ҡырҡа тарайыуы, мәҫ.,

*с. пищевода* ҡыҙыл үңәс стриктураһы)

**стро́ма** строма (ниндәй ҙә булһа ағзаның йәки шештең тоташтырғыс туҡыманан торған һөлдәһе, мәҫ., *с. печени* бауыр строманы)

**стронгилоидо́з** стронгилоидоз (нематодоз төркөмөнә ингән һәм стронгилоид исемле паразит сеәүсен йоғоуҙан килгән, нигеҙҙә, ашҡаҙан-эсәктәрҙе зарарлаусы гельминтоз ауырыуы)

**стро́фулюс** строфулюс (өс йәшкә тиклем балаларҙа күҙәтелгән аллергик тире ауырыуы)

**стру́ма** струма (*ҡара:* **зоб**)

**струми́т** струмит (ҡалҡан биҙенең шешеүе)

**струп** ҡутыр (яраланған, сыйылған ерҙә барлыҡҡа килгән ҡутыр)

**стул** стул (1. оло ярау (итеү); 2. *ҡара:* **кал**)

**сту́пор** ступор (хәрәкәтһеҙ, ҡатып ҡалыу менән характерлы сирле күренеш, мәҫ., *с. истерический* истерия ступоры һ. б.)

**суберо́з** субероз (патоген бәшмәк йоғоуҙан килгән үпкә альвеолаларының аллергик шешеүе)

**субиктери́чный** субиктерик (еңелсә һары булыу, мәҫ., күҙ ағының)

**субкомпенса́ция** *(мед.)* субкомпенсация (ниндәй ҙә булһа ағзала булған декомпенсацияның башланғыс дәүере. мәҫ., йөрәк эшсәнлеге субкомпенсацияһы)

**субординату́ра** субординатура (медицина институты студенттарының тәүге специализацияһы)

**субфебрилите́т** субфебрилитет (оҙаҡ ваҡыт буйы тән температураһының еңелсә күтәрелеп тороуы)

**субфебри́льный** субфебриль (мәҫ., субфебриль температура)

**сугге́стия** суггестия (*ҡара:* **внушение**)

**суде́бно-медици́нский** суд-медицина (мәҫ., суд-медицина экспертизаһы)

**су́дно (подкладное)** ярау һауыты

**су́дорога** тартышыу, көҙән йыйырыу (ирекһеҙҙән теге йәки был мускулдарҙың ҡапыл ҡыҫҡарылышы; төрҙәре: *с. клоническая* клоник тартышыу (тиҙ ритмдағы тартышыу); *с. тоническая* тонуслы тартышыу (мускулдарҙың дауамлы ҡыҫҡартылған хәлдә ҡалыуы менән характерлы) һ. б.)

**су́дорожный** тартышыу, көҙән йыйырыу

**суеве́рие** хөрәфәт, юҡ-барға ышаныу

**суже́ние** *(анат.)* тарайыу, мәҫ., *с. кровеносного сосуда* ҡан тамырының тарайыуы; *с. поля зрения* күреү офоғоноң тарайыуы һ. б.

**суици́дный** суицид (үҙенә ҡул һалыуға ҡарата, мәҫ., суицид ынтылыш)

**су́кровица** яра бүлендеге (ҡан ҡатыш эрен)

**сульфанилами́ды (сульфаниламидные препараты)** сульфаниламидтар (патоген микроорганизмдарға ҡаршы киң ҡулланыла торған бер төркөм химиотерапевтик матдәләр; төрҙәре: сульфадимезин, норсульфазол һ. б.)

**сумасше́ствие** аҡылдан яҙыу

**су́мка** 1. *(анат.)* ҡап, муҡса (быуындарҙы, тарамыш-һеңерҙәрҙе, ҡайһы бер мускулдарҙы һ. б. уратып алыусы ҡап; мәҫ., *с. волоса* сәс (бөртөгө) муҡсаһы; *с. сустава* быуын ҡабы һ. б.; шулай уҡ *ҡара:* **капсула**); 2. сумка (мәҫ., *с. врачебная* врач

сумкаһы; *с. фельдшерская* фельдшерлыҡ сумкаһы; *с. санитарная* санитар сумкаһы һ. б.); 3. *(раст.) с. пастушья* көтөүсе муҡсаһы (нигеҙҙә, ҡан ағыуҙы туҡтатҡыс дауа биргән үлән)

**суперинфекция** суперинфекция (ниндәй ҙә булһа йоғошло ауырыу бөтмәҫ борон ошо ауырыуҙы тыуҙырыусы микробтарҙың йәнә йоғоуы)

**супинатор** супинатор (*ҡара:* **стелька-супинатор**)

**суппозитории** суппозиторийҙар (тән эсендә эрей йә тарала торған дарыу формаһы, мәҫ., *с. вагинальный* вагиналь суппозиторийҙар (ҡатын-ҡыҙ еңсәһенә индереү өсөн); *с. ректальные* ректаль суппозиторийҙар (арт юлға индереү өсөн) һ. б.)

**сурдолог** сурдолог (сурдология белгесе, врач)

**сурдология** сурдология (оториноларингологияның һаңғыраулыҡ һәм ҡолаҡҡа ҡатылыҡ сәбәбен, дауалау юлдарын өйрәнеүсе тармағы)

**сурдопедагогика** сурдопедагогика (оториноларингология һәм педагогиканың ҡолаҡҡа ҡаты булғандарҙың һөйләшеү телен камиллаштырыу юлдарын өйрәнеүсе тармағы)

**сурдотерапия** сурдотерапия (һаңғыраулыҡты, ҡолаҡҡа ҡатылыҡты дауалау ысулдарының бергәлеге)

**суспензия** *(фарм.)* суспензия (һыуҙа, шыйыҡ майҙа, глицеринда әҙерләнгән дарыу формаһы; ҡулланыр алдынан болғатыла)

**суспензорий** суспензорий (күкәй йә уның өҫтәмәһе шешкәндә ҡулланылыусы махсус бәй)

**сустав** быуын, мәҫ., *с. болтающийся* бушаған быуын (ауырыу йәки травманан һуң күҙәтелгән сирле күренеш); *с. голеностопный* сираҡ-аяҡ башы быуыны; *с. коленный* тубыҡ быуыны; *с. ложный* ялған быуын (һөйәктең һынған ере тоташмауҙан килгән сирле күренеш); *с. локтевой* терһәк быуыны; *с. луче-запястный* терһәк ҡушары-шаушаҡ (беләҙек) быуыны; *с. наковальни и стремени* һандал һәм өҙәңге быуыны (ҡолаҡта); *с. плечевой* ҡулбаш быуыны; *с. плече-лучевой* ҡулбаш-терһәк ҡушары быуыны; *с. тазобедренный* янбашбот быуыны һ. б.)

**сутулость** көмрәлек, бөкрәлек

**сухорукий** *(разг.)* сулаҡ

**сухожилие** тарамыш, һеңер (бау рәүешендә була), мәҫ., *с. ахиллово* Ахилл тарамышы (сираҡтың аҫҡы өлөшөндә; *с. рук* ҡул тарамыштары һ. б.)

**сухотка спинного мозга** (ҡара: **табес**)

**сухощавый, сухопарый** *(разг.)* ҡаҡса (асан), мәҫ., ҡаҡса кеше

**сучье вымя** *(разг.)* «эт имсәге» (*ҡара:* **гидраденит подмышечный**)

**существование** йәшәү, тереклек итеү

**сфигмография** сфигмография (сфигмограф приборы ярҙамында пульстың график һүрәтен алыу)

**сфигмоманометрия** сфигмоманометрия (сфигмоманометр приборы ярҙамында ҡан баҫымын үлсәү)

**сфинктер** сфинктер (теге йәки был ҡыуышлы ағзаны уратып һәм ҡыҫып тороусы мускул, мәҫ., арт юл сфинктеры, һейеү каналы сфинктеры һ. б.)

**схватки родовые** (бәпесләү (ауыртыуҙары) өйәнәге (бәпесләү ваҡытында аналыҡтың ҡат-ҡат ритмик рәүештә ҡыҫҡарыуы)
**схизофрения** *ҡара:* **шизофрения**
**сшибка** *(физиол.)* үҙәк нервы системаһында була торған ярһыу һәм тотҡарлау процестарының бәрелеше, һөҙөмтәлә юғары нервы системаһының ҡаҡшауы
**сшивание** *(мед.)* ялғау, ялғап тегеү (мәҫ., эсәктәрҙе ялғап тегеү)
**сыворотка (крови)** сыворотка (төрҙәре: *с. антибактериальная* антибактериаль сыворотка (әйтәйек, дизентерия, ваба һ. б. ауырыуҙар тыуҙырыусы микробтарға ҡаршы йүнәлтелгән иммун сыворотка); *с. антитоксическая* антитоксик сыворотка (мәҫ., дифтерияға, йылан сағыуына һ. б. ҡаршы иммун сыворотка); *с. диагностическая* диагнозлау сывороткаһы (ҡайһы бер ауырыуҙарҙы, мәҫ., дизентерияны һ. б. асыҡлау өсөн ҡулланыла торған иммун сыворотка); *с. иммунная* иммун сыворотка (ниндәй ҙә булһа инфекцион ауырыу кисергән кешенән йәки вакцинацияланған хайуандан алынған ҡан сывороткаһы); *с. крови* ҡан сывороткаһы (ҡан ойоғандан һуң бүленгән шыйыҡса һ. б.)
**сывороточный(ая)** сыворотка
**сыпной** сабыртма, сабыртмалы (тимгелле), мәҫ., сыпной тиф сабыртмалы тиф)
**сыпняк** *(разг.)* *ҡара:* **тиф сыпной**
**сыпь** сабыртма, тимгел (тире һәм тиресә ҡатламға сыҡҡан күпертке, ҡыуыҡса, тап һ. б. характерҙағы үҙгәрештәр, мәҫ., *с. аллергическая* аллергия сабыртмаһы (*ҡара:* **аллергия**); *с. медикаментозная* медикаментоз сабыртма (берәй дарыу килешмәгәнлектән); *с. скарлатинозная* скарлатина сабыртмаһы (*ҡара:* **скарлатина**) һ. б.)
**сырость** дымлылыҡ, еүешлек
**СЭС** *ҡара:* **санэпидстанция**

# Т

**табакоз** табакоз (тәмәке туҙанынан килгән пневмокониоз ауырыуы; *ҡара:* **пневмокониоз**)
**табакокурение** тәмәке тартыу
**табес (спинная сухотка)** табес (сифилис һөҙөмтәһендәге нервы системаһының хроник ауырыуы)
**таблетка** таблетка (төймә рәүешендә әҙерләнгән дарыу формаһы)
**таз** *(анат.)* янбаш (һул һәм уң яҡ янбаш һөйәгенән, һигеҙгүҙҙән һәм ҡоймостан тора; төрҙәре: *т. большой* ҙур янбаш (янбаш ҡыуышлығының өҫкө киң өлөшө; *т. малый* кесе янбаш (янбаш ҡыуышлығының аҫҡы тар өлөшө)
**тайна врачебная** врачлыҡ сере (медицина-профилактика учреждениеһының ауырыу кешенән алынған мәғлүмәтте таратмауы, тик йоғошло ауырыуҙың таралыу ҡурҡынысы булғанда, суд-тикшереү органдары һәм медицина учреждениелары талап иткәндә сер һаҡланмай)
**тактильный** тактиль (һиҙеү-тойоуға ҡағылышлы, мәҫ., тактиль нервы)

**талалги́я** талалгия (үксә һөйәгенән килгән көслө ауыртыу)

**тала́мус** таламус (аралыҡ мейеһенең өлөшө)

**та́лия** бил

**талласотерапи́я** талласотерапия (диңгеҙ һауаһы һәм диңгеҙҙә ҡойоноу менән дауалау)

**талласофоби́я** талласофобия (диңгеҙгә ҡарата булған фобия; *ҡара:* **фобия**)

**талько́з** талькоз (1. тальк порошогы һулауҙан килгән пневмокониоз ауырыуы; *ҡара:* **пневмокониоз**); 2. операцион яраға тальк порошогы эләгеүҙән килгән туҡыма шешеүе)

**тампо́н** тампон (махсус әҙерләнгән марля киҫәге)

**тампона́да** тампонлау (1. яраны йәки ҡыуышлы ағзаны дауалау маҡсатында марля киҫәктәре тултырыу, мәҫ., яраны тампонлау; 2. *т. сердца* йөрәк тампонадаһы (йөрәк ҡабына ҡан тулыу)

**тампони́рование** тампонлау (мәҫ., яраны тампонлау; 2. *т. сердца* йөрәк ҡабына ҡан тулыу)

**тампони́рование** тампонлау (мәҫ. яраны)

**танатоло́гия** танатология (үлем тураһындағы ғилем)

**танатофоби́я** танатофобия (үлемгә ҡарата булған фобия; *ҡара:* **фобия**)

**тарака́н** тараҡан, мәҫ., *т. рыжий* ҡыҙыл тараҡан; *т. черный* ҡара тараҡан (икеһе лә көнкүрештә аш-һыу бысратыусы, микроб таратыусы зат һ. б.)

**тара́нтул** бөйө (ағыулы бөжәк)

**татуиро́вка** татуировка (1. тәнгә иремәй торған буяу матдәнең инеүенән (йәки индереүҙән) килгән һүрәт, бындай күренеш шахтерҙарҙа күҙәтелеүсән; 2. *т. роговицы* күҙ мөгөҙсәһе татуировкаһы (күҙҙә барлыҡҡа килгән аҡты косметик маҡсатта буяуыу)

**тафофоби́я** тафофобия (мәйетте ерләүгә, тереләй күмелеүгә ҡарата фобия)

**тахиарди́я** тахикардия (йөрәк тибеүенең йышайыуы — минутына 100-ҙән ашыуударға етеүе; төрҙәре: *т. желудочковая* йөрәк ҡарынсалары тахикардияһы; *т. неврогенная* невроген тахикардия; *т. пароксизмальная* пароксизмаль тахикардия (өйәнәк рәүешендәге төрө); *т. предсердная* йөрәк алды тахикардияһы; *т. физиологическая* физиологик тахикардия; *т. эмоциональная* эмоциональ тахикардия һ. б.)

**тахилали́я** тахилалия (самаһыҙ тиҙ һөйләү менән характерлы телмәр боҙолоуы)

**тахипно́э** тахипноэ (тын алыуҙың йышайыуы)

**тахифаги́я** тахифагия (ашамлыҡты тиҙ, сәйнәмәй йотоу)

**теи́зм** теизм (сәйҙе самаһыҙ күп эсеү менән характерлы кофеинизм; *ҡара:* **кофеинизм**)

**телеангиэктази́я** телеангиэктазия (тән өҫтөнөң берәй өлөшөндә ваҡ ҡан тамырҙарының тотороҡло киңәйеүе)

**телегамматерапи́я** телегамматерапия (5—75 см алыҫлыҡтан башҡарылған гамма терапия; *ҡара:* **гамматерапия**)

**телепа́тия** телепатия (бер кешенең нервы-психик торошоноң икенсе кешегә еткерелеүе хаҡында фәнни яҡтан нигеҙләнмәгән фекер йөрөтөү; *ҡара:* **парапсихология**)

**телерентгеногра́фия** телерентгенография (тикшерелгән объектты

ҙурайтып һүрәтләү менән характерлы рентгенография)

**телерентгеноскопи́я** телерентгеноскопия (тикшерелгән объектты ҙурайтып күрһәтеү менән характерлы рентгеноскопия)

**телеэлектрокардиогра́фия** телеэлектрокардиография (электрокардиографияны (ЭКГ) алыҫтан — хатта йөҙ, мең саҡрым йыраҡ ятҡан ерҙән төшөрөп алыу ысулы)

**телеэндоскопи́я** телеэндоскопия (эндоскопия мәлендә алынған күренеште телевизор экранына төшөрөү; *ҡара:* **эндоскопия**)

**тели́т** телит (имсәк башының шешеүе)

**те́ло** тән, матдә, есем; мәҫ., 1. *т. грудной кости* түш һөйәгенең тәне; *т. позвонка* умыртҡа тәне; *т. стекловидное (глаза)* күҙҙең быяла тәне; *т. человека* кеше тәне; 2. *т. инородное* ят есем (кеше тәненә хас булмаған нәмә: снаряд, мина ярсығы, пуля, шырау һ. б.); 3. матдә, мәҫ., *т. ацетоновое* ацетон матдәләре (матдәләр алмашыныуынан барлыҡҡа килгән бер төркөм ҡалдыҡ берләшмәләр) һ. б.)

**телосложе́ние (габитус)** тән төҙөлөшө (тән төҙөлөшө үҙенсәлектәренең бергәлеге; төрҙәре: *т. астеническое* астеник тән төҙөлөшө (буйсан, тар күкрәкле,ябыҡ тәнле булыу менән характерлы); *т. атлетическое* атлетик тән төҙөлөшө (мускуллы, киң күкрәкле, май туҡымаһы аҙ булыу менән характерлы); *т. пикническое* пикник тән төҙөлөшө (түбән буйлы, ҡыҫҡа муйын, һимереүгә тартым менән характерлы) һ. б.)

**те́льце** тәнсә (мәҫ., *т. осязательное* тейгәнде тойоу тәнсәһе (улар ниегеҙҙә ҡул һәм аяҡ бармаҡтары йөҙөндә урынлаша) һ. б.

**темноволо́сый** ҡуңыр сәсле

**темпера́мент** темперамент (боронғо грек врачы Гиппократ билдәләгән; кешенең психик эшсәнлеге һәм ихтыяр көсөнөң бергәлеге; төрҙәре: *т. меланхолический* меланхолия темпераменты (күңелһеҙлеккә бирелеү, ихтыяр көсөнөң йомшаҡлығы менән характерлы); *т. сангвинический* сангвиник темпераменты (көслө ихтыярлы, теремек, хәрәкәтсән булыу менән характерлы); *т. флегматический* флегматик темпераменты (тыныс тәбиғәтле, эмоциональ реакциялары, ихтыяр көсө һәм эшсәнлеге һүлпән булыуы менән характерлы); *т. холерический* холерик темпераменты (ҡыҙыу ҡанлы, көслө ихтыярлы булыу менән характерлы)

**температу́ра** температура, мәҫ., *т. воды* һыу температураһы, *т. тела* тән температураһы; *т. тела субфебрильная* тәндең субфебриль температураһы (37—38° араһында тора) һ. б.

**температу́рная крива́я** температура кимәле (көн дә үлсәнеп килгән температураның һыҙыҡ менән күрһәтелгән диаграммаһы)

**те́мя** түбә, баш түбәһе

**тендобурси́т** тендобурсит (һеңер һәм һеңер еңсәһенең шешеүе)

**тендовагини́т** тендовагинит (һеңер еңсәһенең шешеүе, мәҫ., *т. острый* киҫкен тендовагинит)

**тене́змы** тенезма (оло ярауға ауыртыу менән килеүсе ялған теләк (көсәнеү), бындай күренеш дизентерия булғанда, тура эсәк шешкәндә күҙәтелеүсән)

**тениаринхо́з** тениаринхоз (һыйыр малы цепене тыуҙырған гель-

минтоз ауырыуы, кеше уны яҡшылап бешерелмәгән сирле һыйыр итен ашап йоҡтора)

**тениидо́з** тениидоз (цестодоз төркөмөнә ингән гельминтоз ауырыуҙары: эхинококкоз, тениоз һ. б)

**тени́иды** тениидалар (цестодалар рәтенә ингән һәм, нигеҙҙә, кеше эсәктәрендә һәм һөтимәр хайуандарҙың мускулдарында ҡарышлауыҡ рәүешендә йәшәүсән бер төркөм паразит селәүҙәр; мәҫ., сусҡа цепене, һыйыр малы цепене һ. б.)

**тенио́з** тениоз (сусҡа цепене менән зарарланған сусҡа итен (яҡшылап бешермәү арҡаһында) ашауҙан йоҡҡан гельминтоз ауырыуы)

**тениофоби́я** тениофобия (таҫма паразит селәүсен йоҡтороуға ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия)**

**теноии́т** тенонит (күҙ алмаһы ҡабының шешеүе)

**теплосветолече́ние** йылы һәм яҡтылыҡ менән дауалау (һүҙ физиотерапия ысулдары хаҡында бара)

**терапе́вт** терапевт (эске ауырыуҙар белгесе, врач)

**терапевти́ческий** терапия, терапевтик (мәҫ., *терапевтический участок* терапия участкаһы; *терапевтический больной* терапевтик ауырыу)

**терапи́я** терапия (1. медицинаның эске ауырыуҙар һәм уларҙы хирургик булмаған юлдар менән дауалау ысулдарын өйрәнеүсе тармағы; төрҙәре: *т. военно-полевая* хәрби-ялан терапияһы һ. б.; 2. дауалау; төрҙәре: *т. восстановительная* төҙөкләндереү (йәки реабилитациялау) терапияһы; *т. дезинтоксикационная* дезинтоксикациялау (ағыуһыҙлау) терапияһы; *т. десенсибилизирующая* десенсибилизациялау терапияһы (*ҡара:* **десенсибилизация**); *т. консервативная* (*ҡара:* **лечение консервативное**), *т. пирогенная* пироген терапия (тән температураһын күтәреү рәүешендәге дауалау); *т. ультразвуковая* ультратауыш терапияһы (ультрайышлыҡтағы тауыш менән дауалау); шулай уҡ *ҡара:* **лечение**

**тератобла́сто́ма** тератобластома (яман шештәрҙең бер төрө)

**тератогене́з** тератогенез (тыумыштан булған физик етешһеҙлек, ғәриплектең барлыҡҡа килеү барышы)

**тератоге́нность (тератогенное действие)** тератогенлыҡ (физик, химик, биологик факторҙарҙың (мәҫ., ионизациялау нурланышы, ҡайһы бер дарыу һ. б.) эмбриогенез барышын боҙоу һәләтлеге, һөҙөмтәлә тыуған бала организмында физик һәм психик етешһеҙлек барлыҡҡа килә)

**тератоло́гия** тератология (эмбриология фәненең тыумыштан килгән төрлө физик етешһеҙлекте, ғәриплекте өйрәнеүсе тармағы)

**терато́ма** тератома (үҫеш аномалияһынан килгән шеш; *ҡара:* **аномалия развития)**

**термалги́я** термалгия (һыуыҡта йәки йылыла булғандан һуң барлыҡҡа килгән ауыртыу хисе)

**терминоло́гия медицинская** медицина терминологияһы

**термобарока́мера** термобарокамера (һауа йәки газдың төрлө дәрәжәләге баҫым йә температура кимәле менән тәьҫир итеү ҡоралы)

**термогра́фия** термография (тән

температураһын график һүрәткә төшөрөү рәүешендә өйрәнеү)

**термокаустика** термокаустика (электр менән дауалау маҡсатында көйҙөртөү; электр термокаутер йәки электр бысаҡ ярҙамында операция яһау)

**термокаутер** термокаутер (термокаустика үткәреү өсөн прибор)

**термометр (градусник)** термометр (температура кимәлен билдәләү өсөн прибор; *т. комнатный* бүлмә термометры; *т. медицинский* медицина термометры (тән температураһын үлсәү өсөн) һ. б.)

**термометрия** термометрия (тән температураһын үлсәү)

**термопсис (ланцетовидный)** термопсис, йүтәл үләне (нигеҙҙә ҡаҡырыҡ сығарткыс дауа бирә торған үҫемлек)

**терморегуляция** терморегуляция (организм температураһын бер кимәлдә тотоуҙы тәьмин иткән физиологик процестар; бер нисә төрө бар: *т. сосудистая* ҡан тамыры терморегуляцияһы (ҡан тамырҙары тарайыу йәки киңәйеү формаһында); *т. физическая* физик терморегуляция (организмдан тышҡа сығарылған йылылыҡ кимәлен үҙгәртеү формаһында); *т. химическая* химик терморегуляция (ағза-туҡымаларҙа йылыны талап ителгәнсә булдырыу формаһында)

**термостат** термостат (даими температура һаҡлай торған аппарат)

**термотерапия** термотерапия (төрлө йылытыу юлдары: парафин, ванна һ. б. менән дауалау)

**термофобия** термофобия (ут сығыуға һәм йылы бинала булыуға ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия**)

**термы (минеральные горячие источники)** термылар (тәбиғәт шарттарында табылған йылы (+35°-тан артыҡ) һыу сығанаҡтары)

**тернидентоз** тернидентоз (аш-һыу аша йоҡҡан һәм, нигеҙҙә, эсәктәр ауырыуы менән үтеүсе үҙенә бер төрлө гельминтоз ауырыу; *ҡара:* **гельминтоз**)

**терренкур** терренкур (самалап йөрөү рәүешендәге дауалау физкультураһының бер формаһы)

**тест** тест (нигеҙҙә диагноз ҡуйыу, ғилми-тикшеренеү маҡсатында үткәрелгән һынау, мәҫ., *т. кожный* тире тесты)

**тетания** тетания (паращитовид биҙҙәренең тейешенсә эшләмәүе арҡаһында барлыҡҡа килгән көҙән йыйырыу өйәнәге)

**тетанус** тетанус (мускулдарҙың дауамлы һәм көслө тартышыуы)

**тетравакцина** тетравакцина (дүрт йоғошло ауырыуға ҡаршы әҙерләнгән вакцина; *ҡара:* **вакцина**)

**тетракокк** тетракокк (дүрт шарҙан торған бактерия)

**тетрапарез** тетрапарез (бөтә аяҡ-ҡулдарҙың парезы; *ҡара:* **парез**)

**тетраплегия** тетраплегия (бөтә аяҡ-ҡулдарҙың параличы; *ҡара:* **паралич**)

**техника** техника (мәҫ., *т. безопасности* хәүефһеҙлек техникаһы; *т. врачебная* врачлыҡ техникаһы һ. б.)

**тиамин** тиамин (*ҡара:* **витамин** $B_1$)

**тик** тик (мускулдар тартышыуының бер төрө, мәҫ., *т. лица* бит тиғы)

**тимпанопластика** тимпанопластика (урта ҡолаҡҡа пластик операция яһау)

**тимпаносклероз** тимпаносклероз (урта ҡолаҡта тоташтырғыс

туҡыманың артыҡ үҫеүенән килгән ҡолаҡҡа ҡатылыҡ)

**тинктýра** тинктура (*ҡара:* **настойка**)

**тип высшей нервной деятельности** юғары нервы эшсәнлегенең тибы; төрҙәре: *т. высшей нервной деятельности, мыслительный (речевой)* юғары нервы эшсәнлегенең фекерләү (һөйләү) тибы; *т. высшей нервной деятельности, сильный, неуравновешенный (или холерический)* юғары нервы эшсәнлегенең көслө, тотанаҡһыҙ (йәки холерик) тибы, *т. высшей нервной деятельности, сильный, уравновешенный, инертный (или флегматический)* юғары нервы эшсәнлегенең көслө, тотанаҡлы һәм инерт (йәки флегматик) тибы; *т. высшей нервной деятельности, уравновешенный, подвижный (или сангвинический)* юғары нервы эшсәнлегенең көслө, тотанаҡлы һәм хәрәкәтсән (йәки сангвиник) тибы; *т. высшей нервной деятельности, слабый (или меланхолический)* юғары нервы эшсәнлегенең йомшаҡ тибы; *т. высшей нервной деятельности, художественный* юғары нервы эшсәнлегенең нәфис тибы (беренсе сигнал системаһы икенсе сигнал системаһынан өҫтөнлөк тота)

**тиреоди́н** тиреодин (ҡалҡан биҙе эшләп сығарған гормон)

**тиреоиди́т** тиреоидит (ҡалҡан биҙенең шешеүе)

**тиреотоксикóз** тиреотоксикоз (ҡалҡан биҙенең ҡанға саманан артыҡ гормон бүленеүенән килгән һаулыҡтың ҡаҡшауы)

**тиреотокси́н** тиреотоксин (ҡалҡан биҙе эшләп сығарған гормон)

**тиф** тиф (төрҙәре: *т. брюшной* ҡорһаҡ тифы (үҙенә бер төрлө бактерия йоғоуҙан килгән инфекцион ауырыу); *т. возвратный вшивый* бетле ҡайтмалы тиф (үҙенә бер төрлө спирохета бактерияһы йоғоуҙан килгән киҫкен инфекцион ауырыу, уны бет тарата); *т. возвратный клещевой* талпанлы ҡайтмалы тиф (үҙенә бер төрлө бактерия йоғоуҙан килгән киҫкен инфекцион ауырыу, уны үҙенсәлекле талпан тарата); *т. сыпной вшивый (эпидемический, Европейский)* бетле сабыртмалы (эпидемик, Европалағы) тиф (үҙенә бер төрлө риккетсияһы йоғоуҙан килгән киҫкен инфекцион ауырыу, уны бет тарата) һ. б.)

**тифли́т** тифлит (һуҡыр эсәктең шешеүе)

**тифóид** тифоид (ҡорһаҡ тифының еңел төрө)

**ткань** *(анат.)* туҡыма, мәҫ., *т. костная* һөйәк туҡымаһы; *т. мышечная* мускул туҡымаһы; *т. нервная* нервы туҡымаһы; *т. слизистая* тиресә туҡымаһы; *т. соединительная* тоташтырғыс туҡыма; *т. хрящевая* кимерсәк туҡымаһы һ. б.

**ток** ток (һүҙ дауалау өсөн ҡулланыла торған электр тогы хаҡында бара: мәҫ., *т. гальванический* гальваник ток; *т. дарсонваля* дарсонваль тогы; *т. ультравысокой частоты (УВЧ)* (ультра) юғары йышлыҡтағы ток һ. б.)

**токоферóл** токоферол (*ҡара:* **витамин Е**)

**токофоби́я** токофобия (бәпесләүгә ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия**)

**токсеми́я (токсинемия)** токсемия (ниндәй ҙә булһа токсиндың

ҡанда булыуы)

**токсиге́нность** токсигенлыҡ (хайуан, үҫемлек йәки микроорганизмдарҙың зарар килтерерлек ағыу бүлеп сығарыуға һәләтлеге)

**токсидерми́я (токсикодермия)** токсидермия (дарыу йәки башҡа матдәне организмға индереү, һөртөү һөҙөмтәһендә тәнгә сыҡҡан аллергик сабыртма; төрҙәре: *т. алиментарная* алиментар токсикодермия (теге-был ашамлыҡ килешмәгәнлектән); *т. вакцинная* вакцина токсикодермияһы (яһалған прививка материалы килешмәгәнлектән); *т. медикаментозная* меликаментоз токсикодермия (теге йәки был дарыу килешмәгәнлектән һ. б.)

**токсико́з** токсикоз (1. дауамлы ағыуланыу, мәҫ., *т. инфекционный* инфекцион токсикоз (берәй инфекцион ауырыу булғанда күҙәтелгән ағыуланыу); *т. пищевой* туҡланыу токсикозы (ашамлыҡ аша ағыуланыу һ. б.); 2. *т. беременных* буйға ҡалыу токсикозы (йөклө булыу һөҙөмтәһендә булған ауырыу күренештәре); төрҙәре: *т. беременных, поздний* буйға ҡалыуҙың һуңғы токсикозы *(нефропатия, эклампсия* һ. б. формала үтә); *т. беременных, ранний* буйға ҡалыуҙың иртә токсикозы (тән ҡысытыуы, нервылар шешеүе һ. б. менән үтеүсән); 3. *т. травматический* травма токсикозы (тәндең йомшаҡ туҡымаһының оҙаҡ ваҡыт иҙелеүе һөҙөмтәһендә һаулыҡтың ҡаҡшауы)

**токсикоинфе́кция пищевая (отравление пищевое, бактериальное)** ашамлыҡ токсикоинфекцияһы (кеше организмына аш-һыу аша эләккән микроорганизмдар (протей, стафилококк, энтерококк һ. б.) һәм уларҙың токсиндары тыуҙырған киҫкен инфекцион ауырыуҙың дөйөмләштерелгән исеме)

**токсико́лог** токсиколог (врач, токсикология белгесе)

**токсикологи́ческий** токсикология, токсикологик (мәҫ., токсикология ғилеме, токсикологик тикшереү үткәреү)

**токсиколо́гия** токсикология (медицинаның ағыуҙарҙы, уларҙың кеше организмына яһаған тәьҫирен, ағыуланыуҙан һаҡланыу һәм унан дауалау юлдарын өйрәнеүсе тармағы; төрҙәре: *т. авиационно-космическая* авиация-космос токсикологияһы, *т. военная* хәрби токсикология; *т. лекарственная* дарыу токсикологияһы; *т. пищевая* ашамлыҡ токсикологияһы; *т. промышленная* промышленность токсикологияһы; *т. сельскохозяйственная* ауыл хужалығы токсикологияһы һ. б.)

**токсикома́ния** токсикомания (ҡайһы бер матдәләрҙе даими рәүештә ҡабул итергә ынтылыу һәм дауамлы ағыуланыу менән характерлы ауырыу күренештәре; мәҫ., *т. алкогольная* алкоголь токсикоманияһы йәки хроник алкоголизм һ. б.)

**токсикофоби́я** токсикофобия (ағыуланыуға ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия**)

**токси́н** токсин (бактерияларҙан, үҫемлектән, хайуандан алынып, кешегә йәки берәй йәнлеккә индергәндә ауырыуға (йәки үлеүгә) килтереүсе ағыу матдәһе; төрҙәре: *т. бактериальный* (мәҫ.,

дифтерия, дизентерия токсиндары) һ. б.)

**токсинотерапи́я** токсинотерапия (ағыу, мәç., йылан ағыуы менән дауалау)

**токси́чность (ядовитость)** токсиклыҡ (ағыуларға һәләтле булыу)

**токсокаро́з** токсокароз (эт-бесәй, тәлкә-ҡуян һымаҡ йәнлектәрҙә күҙәтелеүсән гельминтоз ауырыуы, был йәнлектәрҙән кешегә лә йоға ала)

**токсопла́зма** токсоплазма (токсоплазмоз тыуҙырыусы микроскопик ябай хайуан, уның бер нисә төрө билдәле)

**токсоплазмо́з** токсоплазмоз (токсоплазма йоғоуҙан килгән һәм төрлө эске ағзаларҙың зарарланыуы менән үтеүсе ауырыу; төрҙәре: *т. врожденный (новорожденных)* тыумыштан килгән токсоплазмоз (балаға ҡарында йоға); *т. приобретенный* тормошта йоҡҡан токсоплазмоз (ауырыуҙы эт-бесәй тарата) һ. б.)

**толера́нтность** *(фарм.)* толерантлыҡ (организмдың дарыу йәки ағыулы матдәгә ҡаршы булған бирешмәүсәнлеге: дарыуҙың шифалығы һиҙелмәй, ағыу зарар килтермәй)

**толчо́к серде́чный** йөрәк тибеүе (йәки һуғыуы)

**томинко́з** томинкоз (нематодоз рәтендәге һәм, нигеҙҙә, үпкәне зарарлаусан гельминтоз ауырыуы, кешегә ямғыр селәүе аша йоға; *ҡара:* **гельминтоз**)

**томогра́мма** томограмма (томография ярҙамында алынған рентгенограмма)

**томогра́фия** томография (рентгенографияның бер төрө: ағза-туҡымаға ҡатлы-ҡатлы яһала торған рентгенография)

**томофлюорогра́мма** томофлюорограмма (томофлюорография үткәргәндә алына торған рентген һүрәт)

**томофлюорогра́фия** томофлюорография (үпкәгә үткәрелгән ҡатлы-ҡатлы флюорография)

**тонзилли́т** тонзиллит (аңҡау миндалиналарының шешеүе; төрҙәре: *т. острый* киçкен тонзиллит; *т. хронический* хроник тонзиллит)

**тонзиллотоми́я** тонзиллотомия (аңҡау миндалиналарының бер өлөшөн алыу операцияһы)

**тонзиллэктоми́я** тонзиллэктомия (аңҡау миндалиналарын тотошлай алыу операцияһы)

**тонизи́рующий** тонуслау (нығытыусы, шәбәйтеүсе, мәç., *лекарство тонизирующее* тонуслау дарыуы)

**тони́ческий** тонуслы (тонусҡа ҡағылышлы; *ҡара:* **тонус**)

**тоно́метр (глазной)** тонометр (күҙ эсе баçымын үлсәү приборы)

**тонометри́я** тонометрия (1. тонометр ярҙамында күҙ эсе баçымын билдәләү; 2. артериаль ҡан баçымын билдәләү)

**то́нус** тонус (1. нервы йәки мускулдың оҙаҡ ваҡыт буйы арымайынса актив хәлдә булыуы; 2. йәшәү активлығы, эшмәкәрлеге, мәç., мускулдар тонусы)

**то́ны (сердца)** йөрәк тондары (йөрәк эшсәнлегенән килгән өнтауыш)

**торака́льный** торакаль (күкрәккә ҡағылышлы, мәç., торакаль хирургия)

**торакока́устика** торакокаустика (плевралар араһындағы йәбе-

шеп тоташҡан ерҙе көйҙөрөп юҡ итеү)

**торакопла́стика** торакопластика (үпкә туберкулезы булғанда бер нисә ҡабырға өлөштәрен алыу операцияһы)

**торакотоми́я** торакотомия (күкрәк ситлеген ярыу операцияһы)

**торможе́ние** *(физиол.)* тотҡарлау (үҙәк нервы системаһының ныҡ арып китеүенә юл ҡуймаҫ өсөн күрелгән организмды һаҡлау сараһы, мәҫ., йоҡо)

**то́чка** *(физиол.)* нөктә, мәҫ., *т. ясного зрения ближайшая* асыҡ күреүҙең иң яҡын нөктәһе; *т. ясного зрения дальнейшая* асыҡ күреүҙең иң алыҫ нөктәһе һ. б.

**тошнота́** күңел болғаныу (уйнау), уҡшытыу, ҡоҫҡо килеү

**тошнотво́рный** уҡшытҡыс, күңел болғандырғыс

**трава́ лекарственная** шифалы үлән, дарыу үләне

**тра́вма** травма (1. тышҡы тәьҫир һөҙөмтәһендә ағза йәки туҡыманың йәрәхәтләнеүе, функцияһы боҙолоуы; төрҙәре: *т. акустическая (шумовая)* акустик травма (көслө шау-шыуҙан ишетеү ағзаларының зарарланыуы); *т. бытовая* көнкүреш травмаһы; *т. закрытая* ябыҡ травма (тыштан йәрәхәт булмай тороп, эске ағзаларҙың зарарланыуы, мәҫ., аяҡ-ҡул һыныуы, мейе һелкенеүе һ. б.); *т. открытая* (мәҫ., һынған һөйәктең тирене тишеп сығыуы); *т. производственная* производство травмаһы; *т. родовая (акушерская)* бәпесләү травмаһы (тыуған баланың йәки бәпесләгән ҡатындың йәрәхәтләнеүе); *т. черепно-мозговая* баш мейеһе травмаһы һ. б.; 2. *т. психическая* психик травма (ыңғай булмаған эмоциональ тәьҫир арҡаһында психик һаулыҡтың ҡаҡшауы)

**травмати́зм** травматизм (травмаларҙың таралғанлығын күрһәтеүсе статистик һан; төрҙәре: *т. автодорожный* автомобиль юлы травматизмы; *т. бытовой* көнкүреш травматизмы; *т. детский* балалар травматизмы; *т. производственный* производство травматизмы; *т. сельскохозяйственный* ауыл хужалығы травматизмы; *т. спортивный* спорт травматизмы һ. б.)

**травмати́ческий** травма, травматик (мәҫ., травматик шок)

**травмато́лог** травматолог (травматология белгесе, врач)

**травматологи́ческий** травматология, травматология (мәҫ., травматология пункты йәки травмпункт; травматологик ярҙам)

**травматоло́гия** травматология (хирургияның төрлө имгәнеү-йәрәхәтләнеүҙәрҙе өйрәнә торған тармағы)

**тракт** *(анат.)* тракт, юл (мәҫ., *т. дыхательный* тын алыу тракты; *т. зрительный* күреү тракты (күҙҙең селтәрле шекәрәһен баш мейеһе менән тоташтырыусы нервы юлы; *т. пищеварительный (желудочно-кишечный)* аш ҡайнатыу (һеңдереү) тракты һ. б.)

**транквилиза́торы** транквилизаторҙар (бер төркөм тынысландырғыс дарыу препараттары)

**транс** транс (эпилепсия менән ауыраған кешенең ҡайҙалыр ашығыуы йә өҫтөн һалыуы йәки башҡа төрлө хәрәкәткә ынтылыуы менән характерлы психик күренеш)

**трансмисси́вный** трансмиссив

(ҡан аша йоғоуға ҡағылышлы, мәҫ; трансмиссив ауырыуҙар)

**трансплантáт** трансплантат (күсереү операцияһын башҡарғанда файҙаланыла торған ағза-туҡыма йәки уларҙың өлөшө)

**трансплантáция** трансплантация (1. күсереү операцияһы, мәҫ., *т. кожи* тире трансплантацияһы; *т. почки* бөйөр трансплантацияһы; 2. *т. опухоли* шеш трансплантацияһы (эксперименталь йәнлектәргә фәнни тикшереү үткәреү маҡсатында шеште күсереү операцияһы)

**трансплантолóгия** трансплантология (медицина һәм биологияның трансплантация мәсьәләләрен өйрәнеүсе тармағы)

**трáнспорт** *(мед.)* транспорт (мәҫ., *т. санитарный* санитария транспорты)

**транспортáбельный** транспортабель (транспорт ярҙамында күсереүгә яраҡлылыҡ, мәҫ. транспортабель ауырыу)

**транспортирóвка** *(мед.)* транспортлау (мәҫ. ауырыу кешене (сирлене) транспортлау)

**транссудáт** транссудат (йөрәк етешмәүсәнлеге, бөйөр ауырыуы һ. б. һөҙөмтәһендә тән ҡыуышлыҡтарына йыйылыусы һары һыу)

**транссудáция** транссудация (тамырҙан ҡандың шыйыҡ өлөшөнөң тән ҡыуышлыҡтарына йәки туҡымаларға һарҡып сығыуы)

**трансформáция** *(биол.)* трансформация (үҙгәреү, әүерелеү; мәҫ., кимерсәктең һөйәккә әүерелеүе)

**трансфузиолóгия** трансфузиология (клиник медицинаның кешегә ҡан, плазма, сыворотка йәки уларҙы алмаштырғыс препараттарҙы ебәреү мәсьәләләрен өйрәнеүсе тармағы)

**трансфýзия крови** *(ҡара:* **переливание крови)**

**трахéит** трахеит (боғарлаҡ тиресәһенең шешеүе)

**трахеобронхи́т** трахеобронхит (боғарлаҡ һәм үпкә көпшәләре (бронхылар) тиресәһенең шешеүе)

**трахеоплáстика** трахеопластика (боғарлаҡҡа яһалған пластик операция)

**трахеоспáзм** трахеоспазм (боғарлаҡ спазмы; *ҡара:* **спазм)**

**трахеостенóз** трахеостеноз (боғарлаҡ стенозы; *ҡара:* **стеноз)**

**трахеотоми́я** трахеотомия (боғарлаҡты ярыу операцияһы)

**трахéя** трахея, боғарлаҡ

**трахóма** трахома, сиплау (үҙенә бер төрлө вирус йоҡҡандан килгән күҙҙең дауамлы йоғошло ауырыуы)

**трахоматóзный** трахома, трахоматоз (мәҫ. трахома үҙгәрештәре, трахоматоз кабинет)

**трéзвенник** *(разг.)* эсмәгән кеше

**трематодóзы** трематодоздар (трематодалар йоғоуҙан килгән гельминтоз ауырыуҙары; *ҡара:* **гельминтоз)**

**трематóды** трематодалар (яҫы паразит селәүсендәрҙең бер төрө, уларҙың ҡайһылары кеше организмында эйәләшеп гельминтоз ауырыуы тыуҙыра; *ҡара:* **гельминтоз)**

**трéние плевры** плевраның ышҡылыуы (плеврит булғанда үпкә һәм ҡабырға плевралары ышҡылыуҙан килгән өн-тауыш)

**трéнинг аутогенный** аутоген тренинг (психотерапияның бер төрө, мускулдарҙы максималь йомшартыу (хәлһеҙләтеү) һәм

үҙ-үҙеңде инандырыу менән ғибәрәт)

**тренирóвка** *(физ.)* тренировка (физик күнекмәләр алыу)

**трепанáция** трепанация (һөйәкте тишеп һөйәк ҡыуышлығына үтеү операцияһы, мәҫ., *т. черепа* баш һөйәге трепанацияһы)

**трепанобиопсúя** трепанобиопсия (трепанация ярҙамында үткәрелгән биопсия; *ҡара:* **биопсия**)

**трепетáние сердца** йөрәк тирбәлеүе (йөрәктең йыш-йыш тибеүе; төрҙәре: *т. желудочковое* йөрәк ҡарынсаларының тирбәлеүе; *т. предсердий* йөрәк алды тирбәлеүе)

**трепонéма** трепонема (спиралде хәтерләткән микроорганизм, бер нисә төрө бар: *спирохета бледная* төҫһөҙ трепонема (сифилис ауырыуын тыуҙырыусы бактерия) һ. б.)

**треугóльник** *(анат.)* өсмөйөш (мәҫ., *т. бедренный* бот төбө өсмөйөшө һ. б.)

**трéщина** ярылыу, сатнау, ярылсыҡ, сатналыш, (мәҫ., *т. губы* ирен ярылыуы; *т. кости* һөйәк сатнауы һ. б.)

**триáда Гетчинсона** Гетчинсон триадаһы (тыумыштан килгән сифилис һөҙөмтәһендә булған тештәрҙең, ҡолаҡтың һәм күҙҙәрҙең сирле үҙгәрештәре)

**тривакцúна** тривакцина (өс йоғошло ауырыуға ҡаршы әҙерләнгән вакцина)

**тризм** тризм (һын ҡатыу ауырыуы (столбняк) һымаҡ сир булғанда яңаҡтарҙың тартышып ҡысылыуы)

**трипаносомóз** трипаносомоз (трипаносомалар йоғоуҙан килгән һәм температура күтәрелеү, лимфатик төйөрҙәр шешеүе һ. б. билдәләр менән үтеүсе бер төркөм инвазион ауырыуҙар; *т. африканский* Африка трипаносомозы (йәки йоҡо ауырыуы); *т. американский* Шагас ауырыуы (йәки Америка трипаносомозы) һ. б.

**трипаносóмы** трипаносомалар (трипаносомоз ауырыуы тыуҙырыусы микроскопик бер күҙәнәктән торған ябай хайуан, кешегә уны цеце себене йоҡтора)

**трипаносоматúды** трипаносоматидалар (кеше, хайуандарҙа һәм үҫемлектәрҙә паразит итеүсе ябай микроскопик заттарҙың бер ғаиләһе, улар рәтенә трипаносомалар ҙа инә)

**триплегúя** триплегия (ике ҡул һәм бер аяҡ йәки ике аяҡ һәм бер ҡул параличы)

**трúппер** *ҡара:* **гонорея**

**трипсúн** трипсин (ашҡаҙан аҫты биҙе бүлеп сығарған мөһим фермент)

**трихиáз** трихиаз (трахома кеүек күҙ ауырыуы һөҙөмтәһендә керпектәрҙең күҙ алмаһы йүнәлешендә үҫеүе; күҙҙең мөгөҙсә һәм тиресә шекәрәләре зарарлана)

**трихинéлла (трихина)** трихинелла (трихинеллез тыуҙырған ваҡ йомро паразит селәүсен)

**трихинеллéз (трихиноз)** трихинеллез (трихинеллалар менән зарарланған итте ашау сәбәпле мускулдарҙа трихина ҡарышлауыҡтарының эйәләшеүе менән билдәләнгән гельминтоз ауырыуы; *ҡара:* **гельминтоз**)

**трихинеллéзный** трихинеллезлы (мәҫ., трихинеллезлы ит)

**трихóз** трихоз (сәс ауырыуҙарының дөйөм исеме)

**трихоклазúя** трихоклазия (ауы-

рыу арҡаһында сәстең һыныусанлығы)

**трихомико́з** трихомикоз (патоген бәшмәк йоғоуҙан килгән сәс ауырыуы)

**трихомице́та** трихомицета (сәсте зарарлаусы патоген бәшмәк)

**трихомона́да** трихомонада (микроскоп аша күренгән бер күҙәнәкле микроб; төрҙәре: *т. кишечная* эсәк трихомонадаһы; *т. моче-половая* һейҙек-енес трихомонадаһы; *т. ротовая* ауыҙ трихомонадаһы)

**трихомоно́з** (трихомониаз) трихомоноз (һейҙек-енес трихомонадаһы тыуҙырған, күпселектә енси бәйләнеш аша йоҡҡан һейҙек-енес ағзаларының ауырыуы)

**трихонодо́з** трихонодоз (дөрөҫ тарамау һөҙөмтәһендә ҡоро, бөҙрә сәстең тоҡанланыуы)

**трихоптило́з** трихоптилоз (сәс бөртөктәре осоноң ҡауырһын һымаҡ ваҡланып бүленеүе)

**трихоспори́я** трихоспория (сәстең төйөрләнеп үҙгәреүе менән үтеүсе бәшмәк ауырыуы)

**трихостронги́лла** трихостронгилла (үҙенә бер төрлө паразит селәүсен, бер нисә төрө бар)

**трихостронгилёз** (**трихостронгилидоз**) трихостронгилез (трихостронгилла селәүсен йоғоуҙан килгән гельминтоз ауырыуы, бер нисә төрө билдәле; кешегә ашһыу менән йоға)

**трихотилломани́я** (**трихокриптомания**) трихотилломания (үҙ сәсен йолҡоу ғәҙәте менән үтеүсе бәйләнсек невроз ауырыуы)

**трихофити́я** трихофития (трихофитон бәшмәге йоғоуҙан килгән тире, сәс, тырнаҡтарҙы зарарлау менән характерлы бәшмәк ауырыуы; төрҙәре: *т. инфильтративно-нагноительная (глубокая)* инфильтратив-эренләткес трихофития; *т. ногтей* тырнаҡ трихофитияһы; *т. поверхностная* һай (өҫтөн) трихофития; *т. хроническая* хроник трихофития һ. б.)

**трихофи́тон** трихофитон (трихофития тыуҙырыусы патоген бәшмәк; төп ике төрө бар: *т. антропофильный* антропофиль трихофитон (тик кешене генә зарарлаусан); *т. зоофильный* зоофиль трихофитон (хайуандарҙы зарарлай, уларҙан кешегә йоға ала)

**трихоцефа́л** (**власоглав**) трихоцефал (ҡылбаш) (нематодалар рәтенә ингән паразит селәүсен)

**трихоцефале́з** трихоцефалез (трихоцефал селәүсене тыуҙырған, аш-һыу, бысраҡ ҡул аша йоғоуҙан килгән эс ауыртыу, эс китеү һ. б. билдәләр менән үтеүсе гельминтоз ауырыуы)

**три́цепс** трицепс (ҡулбаш өлкәһендәге өс башлы мускул)

**троака́р** троакар (берәй ҡыуышлы ағзаға тишеп инеү өсөн көпшәле энә)

**тромб** тромб (ҡан тамырында барлыҡҡа килгән ойошҡан киҫәк)

**тромбанги́ит облитерирующий** облитерациялы тромбангиит (*ҡара:* **болезнь Бюргера**)

**тромбартери́ит** тромбартериит (тромб барлыҡҡа килеү менән үтеүсе артериялар шешеүе, мәҫ. *т. инфекционный* инфекцион тромбартериит)

**тромбо́з** тромбоз (ҡан тамырында тромбтың барлыҡҡа килеү процесы)

**тромбокапилляри́т** тромбокапиллярит (тромбоз барлыҡҡа килеү менән үтеүсе капиллярҙар шешеүе)

**тромбофлеби́т** тромбофлебит (тромб барлыҡҡа килеү менән үтеүсе вена тамырҙарының шешеүе)

**тромбоци́т** тромбоцит (ҡандың иң ваҡ күҙәнәге, ҡандың ойоуында актив роль уйнай)

**тромбоцито́з** **(тромбоцитемия)** тромбоцитоз (периферик ҡанда тромбоциттарҙың артыуы)

**тромбоцитопати́я** тромбоцитопатия (тромбоциттарҙың сифаты ҡаҡшау сәбәпле барлыҡҡа килгән геморрагик диатез ауырыуҙары; *ҡара:* **диатез геморрагический)**

**тромбоцитопени́я** **(тромбопения)** тромбоцитопения (периферик ҡанда тромбоциттарҙың кәмеүе)

**тромбоцитопоэ́з** тромбоцитопоэз (тромбоциттарҙың барлыҡҡа килеү процесы)

**тромбоэмболи́я** тромбоэмболия (тромб нигеҙендә ҡан тамырының тығылыуы)

**тромбоэндокарди́т** тромбоэндокардит (ауырыу һөҙөмтәһендә йөрәк эсендә тромбтар барлыҡҡа килеүе)

**тромбоэктоми́я** тромбоэктомия (тромбты алыу операцияһы)

**тромбофоби́я** тромбофобия (таныш булмаған кешеләр барҙа ҡалтыранып китеүгә ҡарата фобия)

**трофеде́ма** трофедема (тәндең тегебыл еренең (йышыраҡ биттең) билдәһеҙ сәбәптән шешенеүе)

**тро́фика** трофика (ағза-туҡымаларҙың туҡланыуын, унда барған матдәләр алмашыныуын аңлатҡан термин)

**трофоневро́з** трофоневроз (нервы системаһының зарарланыуы һөҙөмтәһендә туҡланыуҙың боҙолоуы менән билдәле ауырыу)

**трохантери́т** трохантерит (бот һөйәгенең ҙур сурайы (вертелы) шешеүе)

**трохоскопи́я** трохоскопия (аҫтан өҫкә йүнәлтелгән рентген нурҙары ярҙамында башҡарылған рентгенологик тикшереү)

**труба́** торба (1. *(анат.) т. маточная* аналыҡ торбаһы (түл үткәреүсе көпшә); *т. слуховая* ишетеү торбаһы (урта ҡолаҡты тамаҡ өҫтө менән тоташтырыусы көпшә); 2. ҡулайлама, мәҫ., *т. водопроводная* һыу үткәргес торба һ. б.)

**тру́бка** торба (медицинала файҙаланылыусы ҡулайлама, мәҫ., *т. аспирационная* аспирацион торба (ҡыуышлы ағзала булған шыйыҡсаны һурып алыу өсөн ҡулланыла); *т. газоотводная* газдан бушатҡыс торба (эсәктәрҙә йыйылған газды сығарыу өсөн ҡулланыла); *т. дренажная* дренаж торба (ярала барлыҡҡа килгән бүлендекте сығарыу өсөн ҡулланыла); *т. интубационная* интубацион торба (боғарлаҡ, үпкә көпшәләренә индереү өсөн, мәҫ., наркоз биргәндә ҡулланыла); *т. клизменная* клизма торбаһы (*ҡара:* **клизма**); *т. рентгеновская* рентген торбаһы (рентген аппаратының рентген нурҙарын булдырған өлөшө); *т. трахеотомическая* трахеотомия торбаһы (*ҡара:* **трахеотомия** һ. б.)

**труд** хеҙмәт (мәҫ., *т. умственный* аҡыл хеҙмәте; *т. физический* физик хеҙмәт)

**трудоспосо́бность** хеҙмәткә (эшкә) яраҡлылыҡ

**трудотерапи́я** трудотерапия (сирлеләрҙе яраҡлы эшкә ҡушыу рәүешендә дауалау)

**труп** үлек, мәйет

**туале́т** 1. *(санит.)* туалет, бәҙрәф;

2. *т. раны* яра туалеты (яраны хирург тарафынан таҙартыу, зарарһыҙлау сараһы)

**тубдиспансéр** тубдиспансер (*ҡара:* **диспансер противотуберкулезный**)

**тубéркул** туберкул (1. сирле төйөрсә; 2. туберкулезға хас патологик үҙгәреш)

**туберкулёз** туберкулез (1. туберкулез микобактерияһы (Кох таяҡсаһы) тыуҙырған һәм кешелә, хайуанда (һыйыр малында, сусҡаларҙа) күҙәтелеүсән дауамлы инфекцион ауырыу; төрҙәре: *т. активный* актив туберкулез; *т. вторичный* икенсел туберкулез (беренсел туберкулезды кисергән кешеләрҙә күҙәтелә); *т. кожи* тире туберкулезы (мәҫ., туберкулезлы сөсө ауырыуы һ. б.); *т. костно-суставной* һөйәк-быуын туберкулезы; *т. легких, диссеминированный* үпкәнең диссеминациялы туберкулезы *(ҡара:* **диссеминация**); *т. легких, кавернозный* үпкәнең каверноз туберкулезы *(ҡара:* **каверна**); *т. легких, очаговый* үпкәнең усаҡлы туберкулезы; *т. легких, фиброзно-очаговый* үпкәнең фиброз-усаҡлы туберкулезы; *т. легких, первичный* үпкәнең беренсел туберкулезы (нигеҙҙә, балаларҙа күҙәтелә); *т. позвоночника* умыртҡа бағанаһы туберкулезы һ. б.); 2. *т. бычий* һыйыр малы туберкулезы (туберкулез микобактерияһының бер төрө тыуҙыра, ауырыу малдан кешегә лә йоғоусан); 3. *т. птичий* ҡош туберкулезы (туберкулез микобактерияһының бер төрө тыуҙыра, күпселектә тауыҡтар сирләй, уларҙан кешегә лә йоғоусан)

**туберкулёзный** туберкулез, туберкулезлы (мәҫ., туберкулез процесы)

**туберкулéма** туберкулема (туберкулезға хас эрен йыйыусы шеш)

**туберкули́ды** туберкулидтар (туберкулез булғанда тәнгә сыҡҡан аллергик сабыртма)

**туберкули́н** туберкулин (диагноз ҡуйыу, дауалау өсөн ҡулланылған зарарһыҙландырылған туберкулез таяҡсалары һығынтыһы)

**туберкулинодиагнóстика** туберкулинодиагностика (туберкулин ярҙамында диагноз ҡуйыу)

**туберкулинотерапи́я** туберкулинотерапия (туберкулин менән дауалау)

**тубооти́т** тубоотит (ҡолаҡ (Евстахий) торбаһы тиресәһенең шешеүе)

**тугоподви́жность** сустава быуын ҡатыу (быуын хәрәкәтсәнлегенең нығ түбәнәйеүе)

**тугоподви́жный** аҙ хәрәкәтле (мәҫ., аҙ хәрәкәтле быуын)

**тугоýхость** ҡолаҡҡа ҡатылыҡ (ҡаты булыу); төрҙәре: *т. профессиональная* профессияға бәйле ҡолаҡҡа ҡатылыҡ; *т. старческая* ҡартлыҡтан килгән ҡолаҡҡа ҡатылыҡ һ. б.)

**тýжиться** көсәнеү

**тýловище** кәүҙә (тәндең аяҡ-ҡулдан тыш башҡа өлөшө)

**туляреми́я** туляремия (кимереүсе йәнлектәрҙә һәм кешеләрҙә күҙәтелгән үҙенә бер төрлө микроб йоҡҡандан килгән инфекцион ауырыу; төрҙәре: *т. абдоминальная (кишечная)* абдоминаль (эсәк) туляремияһы; *т. генерализованная (септическая)* генерализацияланған (септик) туля-

ремия; *т. легочная* үпкә туляремияһы һ. б.)

**туляри́н** тулярин (туляремияны диагнозлау өсөн ҡулланыла торған бактериаль препарат)

**ту́ргор** тургор (ниндәй ҙә булһа ағза-туҡыманың тығыҙлығы, һығылмалылығы, мәç., тән тургоры)

**турнике́т** турникет (ҡан туҡтатҡыс жгуттың бер төрө)

**туру́нда** турунда (яраға, ҡолаҡҡа һ. б. индерелә торған марля киçәге)

**ту́тор** тутор (имгәтелгән аяҡ-ҡулға тыныслыҡ булдырыу өсөн әҙерләнгән ортопедик ҡулайлама)

**ту́чность** үтә тулы кәүҙәле булыу

**тыл** *(анат.)* һырт (мәç., *т. кисти* ҡул суғы һырты)

**тюба́ж** тюбаж (үт ҡыуығын, зонд индермәйенсә бушатыу: дарыу биреп, бауыр тәңгәлен йылытыу ярҙамында)

# У

**убе́жище** убежище (йәшеренеү урыны; *төрҙәре: у. медицинское* медицина убежищеһы (яраланған, сирләп киткән кешеләрҙе, медперсоналды һаҡлау өсөн төҙөлә)

**убо́рная** *(санит.)* бәҙрәф, туалет

**увеи́т** увеит (күҙҙең тамырлы шекәрәһенең тотошлай шешеүе)

**увеопати́я** увеопатия (күҙҙең тамырлы шекәрәһенең шешеүе менән үтеүсе бер нисә ауырыуҙың дөйөм исеме)

**уве́чье** ғәриплек (тормошта була торған күренеш)

**УВЧ-терапи́я** УВЧ терапияһы (ультрайышлыҡтағы ток менән дауалау)

**углево́ды** углеводтар (водород, кислород һәм углеродтан торған органик берләшмәләр: глюкоза, гликоген, шәкәр һ. б.)

**углубле́ние** *(анат.)* уйым, уйпаҡ (мәç., *у. глоточное* тамаҡ уйымы; *у. селезеночное* талаҡ уйымы һ. б.)

**у́гол** *(анат.)* мөйөш (мәç. *у. груди́ны* түш (һөйәге) мөйөшө; *у. щечный* урт мөйөшө)

**угоре́ть** *(разг.)* һөрөм (газы) тейеү (углерод окисы менән ағыуланыу)

**у́гри** һытҡы (сәс тамырының ҡабы һәм тиреләге май биҙҙәре ауырыуҙарының дөйөмләштерелгән исеме; төрҙәре: *у. белые* аҡ һытҡы; *у. медикаментозные* медикаментоз һытҡы (бром, йод, препараттары килешмәгәнлектән сыҡҡан һытҡы); *у. некротические* некрозлы һытҡы (*ҡара:* **некроз**); *у. обыкновенные (юношеские)* ғәҙәти (йәштәр) һытҡыһы; *у. профессиональные* профессияға бәйле һытҡы (мәç., хлор, парафин һ. б. менән эшләгәндә барлыҡҡа килеүсе һытҡы); *у. розовые* ҡыҙыл һытҡы (бит, танау ҡыҙарып тороу, ҡан тамырҙары киңәйеү, эренле күпертке сығыу менән билдәләнгән дауамлы тире ауырыуы); *у. черные (комедоны)* ҡара һытҡы (тиреләге май биҙҙәре юлдарының тығылыуынан барлыҡҡа килгән ҡара нөктә рәүешендәге һытҡы)

**у́грица кишечная** эсәк угрицаһы (1—2 мм оҙонлоҡтағы нематода

рәтендәге паразит селәүсен, кеше эсәктәрендә эйәләшеп, стронгилондоз ауырыуы тыуҙыра; *кара:* **стронгилоидоз)**

**уда́вка** *кара:* **парафимоз**

**уда́р** һуғыу, атыу, тейеү (мәҫ., *у. апоплексический* апоплексия һуғыуы (*кара:* **инсульт мозговой**); *у. молнии* йәшен һуғыу; *у. солнечный* ҡояш тейеү; *у. тепловой* эҫе тейеү)

**уду́шье** *кара:* **асфиксия**

**ужа́ление** сағыу (мәҫ., йылан сағыу, кесерткән сағыу)

**уздéчка** *(анат.)* кереш (мәҫ., *у. губы* ирен кереше; *у. клитора* клитор кереше; *у. крайней плоти* ҡаҫа кереше)

**у́зел** 1. *(анат.)* төйөр (мәҫ., *у. лимфатический* лимфатик төйөр; *у. нервный* нервы төйөрө һ. б.; 2. *(патол.)* төйөр, шеш (мәҫ., *у. варикозный* варикоз шеш (вена тамыры киңәйеүенән килгән шеш); *у. геморроидальный* геморрой шеше (*кара:* **геморрой)** *у. сифилитический* сифилис төйөрө (йәки гумма шеше) һ. б.)

**узело́к** 1. *(анат.)* төйөрсә (мәҫ., *у. лимфоидный* лимфоид төйөрсә); 2. *(пат.)* төйөрсә, ваҡ шеш (мәҫ., *у. кожный* тире төйөрсәһе (йәки папула шеше) һ. б.)

**узкогла́зый** ҡыҫыҡ күҙле

**узкопле́чий** тар яурынлы

**узлова́тость волос** сәс төйөндәре

**ука́чивание** *кара:* **болезнь высотная, болезнь морская**

**УКВ (ультракороткие волны)** УКВ (ультра ҡыҫҡа тулҡындар (дауалау өсөн ҡулланыла)

**уко́л** 1. ҡаҙау, сәнсеү (мәҫ., бармаҡты сәнсеү); 2. укол яһау (мәҫ., *у. подкожный* тире аҫтына укол яһау)

**укро́п аптечный** аптека укробы (нигеҙҙә ҡаҡыртҡыс, бушандыҡ газды ҡыуғыс дауа биргән үлән)

**уку́с** 1. тешләү (мәҫ., эт тешләү; 2. *кара:* **ужаление**; 3. тешләнгән (сағылған) ер)

**ули́тка** *(анат.)* ҡусҡар (эске ҡолаҡта)

**ультрави́рус** ультравирус (*кара:* **вирус)**

**ультразву́к** ультратауыш (үтә юғары йышлыҡтағы тирбәлеү менән барлыҡҡа килгән һәм ҡолаҡ аша ишетелмәгән тауыш)

**ультрамикро́бы** ультрамикробтар (*кара:* **вирус, риккетсии)**

**ультрамикроско́п** ультрамикроскоп (оптик микроскоптың бер төрө, ғәҙәти булмаған үтә ваҡ (0,15 мкм бәләкәйерәк) нәмәләрҙе ҡарарға мөмкинлек бирә)

**ультрафиоле́товый** ультрафиолет (мәҫ., ультрафиолет нурҙар)

**ульцеро́зный** ульцероз (сей яралы, мәҫ., ульцероз процесс)

**ум** аҡыл

**умалишённый** аҡылдан яҙған

**уме́рший** үлгән

**умерщвле́ние** йәнһеҙләндереү, үлтереү

**умопомеша́тельство** аҡылдан яҙыу

**у́мственный** аҡыл (мәҫ., аҡыл эше)

**университе́т здоровья** һаулыҡ университеты (санитария-ағартыу эшенең бер формаһы)

**уничтоже́ние** *(сан.-гиг.)* ҡырыу, юҡ итеү (мәҫ., сысҡан-ҡомаҡты ҡырыу һ. б.)

**унцинарио́з** унцинариоз (үҙенә бер төрлө паразит селәү йоғоуҙан килгән һәм тиренең боҙолоуы менән характерлы нематод рәтендәге гельминтоз ауырыуы; *кара:* **гельминтоз)**

**уперизáция** уперизация (көсәйтелгән пастеризация: шыйыҡ ашамлыҡты 150—160 градуста-

ғы пар менән зарарһыҙлау; *ҡара:* **пастеризация**)

**упи́танный** *(человек)* тулы кәүҙәле (кеше)

**управле́ние** *(мед.)* идаралыҡ (мәҫ., курорттар идаралығы)

**упражне́ние** *(физ.)* күнекмә (мәҫ., физик күнекмә)

**урани́зм** уранизм (1. ирҙәр гомосексуализмының бер төрө: ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата сексуаль ынтылыштың бөтөнләй булмауы менән характерлана; 2. *ҡара:* **педерастия**)

**ураноплá́стика** уранопластика (ярыҡ аңҡау булғанда яһалған пластик операция)

**уратури́я** уратурия (һейҙек менән һейҙек кислотаһы тоҙҙарының күп бүленеүе)

**ура́ты** ураттар (организмда барлыҡҡа килгән һәм һейҙек менән бүленеүсе һейҙек кислотаһы тоҙҙары)

**урбаниза́ция** урбанизация (ҡалалар һәм ҡала халҡы артыуы менән характерлы социаль-демографик процесс)

**уреми́я** уремия (1. һейҙектең барлыҡҡа килеүе боҙолоуы сәбәпле матдәләр алмашыныуы ҡалдыҡтары менән ағыуланыу; төрҙәре: мәҫ., *у. азотемическая (истинная, хроническая)* азотемик уремия (бөйөр етешмәүсәнлегенән тыуған дауамлы уремия); 2. *у. эклamптическая (ложная)* эклампсия уремияһы (бөйөрҙәрҙең киҫкен етешмәүсәнлегенән булған ваҡытлы уремия)

**уретери́т** уретерит (һейҙек үткәргес көпшәнең шешеүе)

**уретеросте́но́з** уретеростеноз (һейҙек үткәргес көпшәһенең стенозы; *ҡара:* **стеноз**)

**уретерографи́я** уретерография (һейҙек үткәргес көпшәләренә контраст матдә индергәндән һуң яһалған рентгенография)

**уре́тра** *ҡара:* **канал мочеиспускательный**

**уретри́т** уретрит (һейеү каналының шешеүе; төрҙәре: *у. аллергический* аллергик уретрит; *у. амикробный* амикроб (микробһыҙ) уретрит; *у. бактериальный* бактериаль уретрит; *у. гонорейный* гонорея уретриты; *у. микотический* микоз уретриты (патоген бәшмәк тыуҙырған уретрит); *у. острый* киҫкен уретрит; *у. трихомонадный* трихомонад уретриты *(ҡара:* **трихомонада**); *у. туберкулезный* туберкулез уретриты; *у. хронический* хроник уретрит һ. б.)

**уретрогра́фия** уретрография (һейеү каналына рентгенологик тикшереү үткәреү)

**уретроскопи́я** уретроскопия (һейеү каналы эсен махсус көҙгө ярҙамында ҡарап тикшереү)

**уретростено́з** уретростеноз (һейеү каналы стенозы; *ҡара:* **стеноз**)

**уретроцисти́т** уретроцистит (һейеү каналы һәм һейҙек ҡыуығының бер юлы шешеүе)

**уробили́н** уробилин (һейҙектә барлыҡҡа килгән пигмент)

**уробилинури́я** уробилинурия (һейҙек менән уробилин пигментының артыҡ бүленеүе)

**урогенита́льный** урогениталь (һейҙек һәм енес ағзаларына ҡағылышлы)

**урогинеколо́гия** урогинекология (урологияның һейҙек ағзалары һәм уларға бәйле ҡатын-ҡыҙ ауырыуҙарын өйрәнеүсе тармағы)

**уро́графия** урография (һейҙек ҡыуығы, бөйөр лаҡанына, һейҙек

үткәргес көпшәләренә башкарылған рентгенография)

**урод** ғәрип

**уродство** ғәриплек (тыумыштан килгән күренеш, мәҫ., ярыҡ аңҡаулы булып тыуыу)

**уролитиаз** уролитиаз (*ҡара:* **болезнь мочекаменная**)

**уролог** уролог (урология белгесе, врач)

**урология** урология (венерик сирҙәрҙән тыш бөтә енес, һейҙек ағзалары ауырыуҙары тураһындағы фән)

**урометр** урометр (һейҙектең сағыштырма ауырлығын үлсәү приборы)

**уросепсис** уросепсис (һейҙек (ирҙәрҙең шулай уҡ енес) ағзаларынан башланып киткән сепсис; *ҡара:* **сепсис**)

**урофобия** урофобия (теләмәгән ваҡытта (мәҫ. лекция уҡығанда) һейеү теләге уяныуға ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия**)

**урчание в животе** эс гөтөрләү

**усвояемость (пищевого вещества)** аш үҙләштереүсәнлеге (һеңеүсәнлеге)

**успокаивающий** *(лек.)* тынысландырғыс, тынысландыра торған (мәҫ. дарыу)

**усталость** арығанлыҡ, хәл бөткәнлек, арыу

**устье** *(анат.)* тамаҡ, сығыш тишеге (мәҫ., *у. аорты* аорта тамағы)

**усы** мыйыҡ

**усыпляющий** *ҡара:* **снотворный**

**«утка»** *ҡара:* **мочеприёмник**

**утоление** *(физиол.)* ҡандырыу (мәҫ., асығыуҙы ҡандырыу, һыуһынды ҡандырыу)

**утомление** арыу, талыу, йонсоу (мәҫ., баш арыу, физик арыу, аяҡ-ҡул талыу һ. б.)

**утомляемость** арыусанлыҡ, талыусанлыҡ

**утопающий** батып барған

**утопленник, утопленница** батып үлгән (кеше)

**утрата трудоспособности** хеҙмәткә (эшкә) яраҡлылыҡты юғалтыу (мәҫ., *у. трудоспособности временная* хеҙмәткә яраҡлылыҡты ваҡытлыса юғалтыу; *у. трудоспособности стойкая* хеҙмәткә яраҡлылыҡты тотороҡло юғалтыу)

**утроба** *(разг.)* ҡарын (йәки ҡорһаҡ)

**ухо** ҡолаҡ (эс өлөштән тора: *у. внутреннее* эске ҡолаҡ; *у. наружное* тышҡы ҡолаҡ; *у. среднее* урта ҡолаҡ; *у. искусственное* ҡолаҡ япрағы протезы, яһалма ҡолаҡ

**уход** *(мед.)* ҡарау, тәрбиәләү (мәҫ., сирлене (ауырыусыны) тәрбиәләү)

**участок** *(мед.)* участка (мәҫ., *у. врачебный городской* ҡала врачлыҡ участкаһы; *у. врачебный сельский* ауыл ере врачлыҡ участкаһы)

**училище медицинское** медицина училищеһе (урта белемле медицина хеҙмәткәрҙәрен әҙерләй)

**учреждение** *(мед.)* учреждение (мәҫ., *у. детское* балалар учреждениеһы: *у. медицинское* медицина учреждениеһы)

**ушиб** бәрелеп (һуғылып) имгәнеү (тире-тиресә йәрәхәтләнмәй эске ағза-туҡымаларҙың зарарланыуы, мәҫ., *у. головного мозга (ҡара:* **контузия (головного мозга)**; *у. грудной клетки* күкрәк ситлегенең имгәнеүе һ. б.)

**ушко предсердия** йөрәк алды ҡолаҡсаһы

**ущемле́ние** ҡыҫылыу (мәҫ., *у. грыжи* бүҫер ҡыҫылыуы (етди ауырыу күренеше, ашығыс хирургик ярҙам талап ителә); *у. кишки ҡара:* **непроходимость кишечника, механическая** һ. б.)

# Ф

**фави́д** фавид (таҙ ауырыуы һөҙөмтәһендә тәнгә сыҡҡан аллергик сабыртма)

**фа́вус** фавус, таҙ (үҙенә бер төрлө патоген бәшмәк йоғоуҙан килгән, нигеҙҙә баш тиреһен, тырнаҡтарҙы һ. б. зарарлаусы йоғошло бәшмәк ауырыуы)

**фагедени́зм** фагеденизм (ғәҙәттә, йомшаҡ шанкр һәм сифилис булғанда күҙәтелеүсән сей яра, туҡыманың үлеүе менән үтеүсе ауырыу күренеше; *ҡара:* **шанкр твердый, сифилис**)

**фагодиагно́стика** фагодиагностика (инфекцион ауырыуҙарҙы бактериофаг ярҙамында диагнозлау)

**фаготерапи́я** фаготерапия (инфекцион ауырыуҙы бактериофаг ҡулланып дауалау)

**фагоци́т** фагоцит (организмға эләккән микроорганизмдарҙы, ят есемдәрҙе йотоусы күҙәнәк)

**фагоцито́з** фагоцитоз (фагоцит күҙәнәктәре тарафынан микроб, ят есемдәрҙе йотоу барышы)

**фа́за** *(мед.)* фаза (йәки осор, дәүер; мәҫ., *ф. болезни* ауырыу фазаһы)

**фа́ктор** фактор мәҫ., *ф. патогенетический* патогенетик фактор (организмға һәр бер зарар йәки ауырыу килтереүсе нәмә, әйтәйек, патоген микроб)

**факульте́т** факультет (юғары уҡыу йорто бүлеге, мәҫ., медицина институтында: *ф. лечебный* дауалау факультеты, *ф. педиатрический* педиатрия факультеты; *ф. санитарно-гигиенический* санитария-гигиена факультеты; *ф. стоматологический* стоматология факультеты; *ф. фармацевтический* фармацевтика факультеты)

**фала́нга** *(анат.)* фаланга (1. *ф. пальца* бармаҡ (йәкәле) фалангаһы (бармаҡ быуынтығы һөйәге; төрҙәре: *ф. дистальная (ногтевая)* дисталь (тырнаҡ) фалангаһы; *ф. проксимальная* проксималь (төп) фаланга; *ф. средняя* урта фаланга; 2. ағыулы бөжәк)

**фаллопла́стика** фаллопластика (ир енес ағзаһын төҙәкләндереү операцияларының дөйөм исеме)

**фанто́м** фантом (мәҫ., 1. *ф. акушерский* акушерлыҡ фантомы (бәпесләү барышын өйрәнеү өсөн яһала торған ҡатын-ҡыҙ янбашына һәм бәпесләү юлдарына оҡшаған модель-ҡурсаҡ); 2. *ф. ампутационный ҡара:* **боль фантомная**)

**фарадиза́ция** фарадизация (стабиль булмаған йышлыҡтағы электр тоғы менән дауалау ысулы)

**фаринги́т** фарингит (тамаҡ (йотҡолоҡ) тиресәһенең шешеүе)

**фарингомико́з** фарингомикоз (үҙенә бер төрлө микроорганизм тыуҙырған тамаҡ (йотҡолоҡ) тиресәһенең ауырыуы)

**фарингоспа́зм** фарингоспазм (тамаҡ (йотҡолоҡ) спазмаһы; *ҡара:* **спазм**)

**фармакогене́тика** фармакогенетика (медицина генетикаһының кешегә индерелгән дарыуға ҡа-

рата организм реакцияһының генетик нигеҙен өйрәнеүсе тармағы)

**фармакогнози́я** фармакогнозия (фармацияның шифалы үҫемлектәрҙе һәм дауалау өсөн алынған хайуан матдәләрен өйрәнә торған бүлеге)

**фармакодина́мика** фармакодинамика (фармакологияның дарыуҙың яһаған йоғонтоһо механизмын өйрәнеүсе тармағы)

**фармако́лог** фармаколог (юғары белемле фармакология хеҙмәткәре)

**фармакологи́ческий** фармакологик, фармакология (мәҫ., фармакологик матдәләр, фармакология кафедраһы)

**фармаколо́гия** фармакология (дарыуҙар, уларҙың төҙөлөшөн, организмға яһаған тәьҫирен, ҡулланылыуын өйрәнә торған фән)

**фармакома́ния** фармакомания (1. нигеҙһеҙ күп дарыу ҡабул итергә ынтылыу; 2. транквилизатор, йоҡлатҡыс дарыуҙар һымаҡ препараттар менән күптәрҙең нигеҙһеҙ мауығыуы)

**фармакопе́йный** фармакопея (1. фармакопеяға ингән; 2. аптекала алдан әҙер булған дарыуҙарға ҡағылышлы)

**фармакотерапи́я** фармакотерапия (дарыу матдәләрен ҡулланып дауалау методтарының бергәлеге)

**фармакофоби́я** фармакофобия (дарыу ҡабул итеүгә ҡарата фобия; *ҡара:* фобия)

**фармаце́вт** фармацевт (дарыу әҙерләү эшендә) (юғары йәки урта белемле хеҙмәткәр)

**фармаце́втика** фармацевтика (дарыуҙарҙы әҙерләү, һаҡлау һ. б. тураһындағы фән)

**фармацевти́ческий** фармацевтик фармацевтика (дарыуҙарға, фармацияға ҡағылышлы; мәҫ., фармацевтика предприятиелары)

**фармаци́я** фармация (дарыуҙарҙы табыу, әҙерләү, һаҡлау, ауырыуҙарға тапшырыу һ. б. тураһындағы фән)

**фармпрепара́т** фармпрепарат (фармацевтик препарат, дарыу)

**фасцио́ла** фасциола (трематодалар төркөмөндәге паразит селәү; төрҙәре: *ф. гигантская* гигант фасциола (СССР-ҙа һирәк күҙәтелә); *ф. печеночная (двуустка печеночная)* бауыр фасциолаһы

**фасциолёз** фасциолез (фасциолалар йоғоуҙан килгән үт юлдарын һәм бауырҙы зарарлаусы гельминтоз ауырыуы, кешегә һыу һәм үҫемлектәр аша йоға)

**фасци́т** фасцит (ниндәй ҙә булһа фасцияның шешеүе)

**фа́сция** *(анат.)* фасция (мускулдарҙы һәм ҡайһы бер эске ағзаларҙы ҡаплаусы тоташтырғыс туҡыманан торған яры, мәҫ., *ф. височная* сикә фасцияһы; *ф. подколенная* тубыҡ аҫты фасцияһы һ. б.)

**фека́лии** фекалийҙар (йәки кал, тиҙәк)

**фека́льный** фекаль (тиҙәккә ҡағылышлы, мәҫ., фекаль еҫ)

**фе́льдшер** фельдшер (урта белемле медицина хеҙмәткәре)

**фе́льдшерский** фельдшер, фельдшерлыҡ, фельдшерҙар (мәҫ., фельдшер кәңәше, фельдшерлыҡ сумкаһы, фельдшерҙар кәңәшмәһе)

**феминиза́ция** феминизация (ҡатын-ҡыҙҙарға хас өҫтәмә сифаттарҙың ир кешелә барлыҡҡа килеүе)

**фемини́зм** феминизм (ҡатын-ҡыҙ-

ҙарға хас физик һәм психик сифаттарҙың ир кешелә булыуы, психиатрияла күҙәтелә торған күренеш)

**фенилкетонурия** фенилкетонурия (матдәләр алмашыныуының боҙолоуы менән билдәләнгән нәҫел ауырыуы)

**фенотип** фенотип (организм үҫешендә барлыҡҡа килгән, уны характерлаған сифат-билдәләр төркөмө)

**фермент (энзим)** фермент (күҙәнәктәрҙә барлыҡҡа килеп, матдәләр алмашыныуын тиҙләтә торған ҡатмарлы органик матдә, мәҫ., фибринолизин, химотрипсин һ. б.)

**ферментотерапия** *ҡара:* **энзимотерапия**

**фертильный** фертиль (бала табыуға һәләтле булыуға ҡағылышлы)

**фетишизм (в сексопатологии)** фетишизм (ҡатын-ҡыҙ кейем-фәләненә сексуаль ынтылыш булыу менән характерлы сирле күренеш)

**фетопатия** фетопатия (зағифлеккә йә баланың ҡарында үлеүенә килтереүсе бер төркөм ауырыуҙар, мәҫ., *ф. бактериальная* бактериаль фетопатия; *ф. диабетическая* диабет фетопатияһы; *ф. сифилитическая* сифилис фетопатияһы; *ф. токсоплазмозная* токсоплазмоз фетопатияһы; *ф. туберкулезная* туберкулез фетопатияһы һ. б.)

**фибрилла** фибрилла (епсә рәүешендәге туҡыма өлөшө, мәҫ., *ф. мышечная* мускул фибриллаһы һ. б.)

**фибрилляция** фибрилляция (айырым мускул епсәләренең үтә тиҙ ҡыҫҡартылышы, шул иҫәптән йөрәк мускулдарының да: *ф. желудочков* йөрәк ҡарынсалары фибрилляцияһы; *ф. предсердий* йөрәк алды фибрилляцияһы — етди ауырыу күренеше)

**фибрин** фибрин (ҡан ойоғанда фибриноген үҙгәреүенән барлыҡҡа килгән аҡһым)

**фибриноген** фибриноген (ҡанда ирегән хәлдә булған плазма аҡһымының бер төрө)

**фибринолизин** фибринолизин (ҡан плазмаһындағы аҡһымды бүлемләүсе фермент)

**фиброаденома** фиброаденома (тоташтырғыс туҡымаға бай булған аденома шеше; төрҙәре: *ф. молочной железы* имсәк биҙе фиброаденомаһы һ. б.)

**фиброз** фиброз (тоташтырғыс туҡыманың ныҡ үҫеш алыуы)

**фибролипома** фибролипома (май туҡымаһында барлыҡҡа килгән фиброма шеше)

**фиброма** фиброма (тоташтырғыс туҡыманан барлыҡҡа килгән ябай шеш)

**фиброматоз** фиброматоз (фиброма шештәренең күп һанда барлыҡҡа килеүе)

**фибросаркома** фибросаркома (тоташтырғыс туҡыманан торған саркома; *ҡара:* **саркома**)

**фиброцит** фиброцит (тоташтырғыс туҡыма күҙәнәге)

**фиброэластоз субэндокардиальный** субэндокардиаль фиброэластоз (тыумыштан килгән йөрәк ауырыуы, йөрәктең эндокард ҡатламының ҡалынайыуы менән характерлы)

**физвоспитание (физическое воспитание)** физик тәрбиә

**физзарядка (физическая зарядка)** физзарядка (йәки иртәнге гигиеник гимнастика)

**физиогномика** физиогномика

(ауырыуҙарҙы асыҡлау өсөн кешенең йөҙөн һәм тышҡы физик ҡиәфәтен өйрәнеү)

**физиолог** физиолог (физиология белгесе; физиологияны өйрәнә торған ғалим)

**физиологический** физиология, физиологик (мәҫ., физиологик процестар, физиология кафедраһы)

**физиология** физиология (1. *ф. нормальная* нормаль физиология (организмда барған бөтә йәшәү процестарын өйрәнә торған фән; уның төрҙәре: *ф. авиационная* авиация физиологияһы; *ф. питания* туҡланыу физиологияһы; *ф. труда* хеҙмәт физиологияһы һ. б.; 2. *ф. патологическая* патологик физиология (ауырыу процестарының барлыҡҡа килеүен һәм үҫешен өйрәнә торған фән)

**физиономия** физиономия (1. кешенең йөҙө, сырайы; 2. һәр кемдең үҙенә хас тышҡы ҡиәфәте)

**физиопатия** физиопатия (һуғыш ваҡытында психик тәьҫир нигеҙендә, хатта еңел яраланыу һөҙөмтәһендә, паралич һәм контузия барлыҡҡа килеүе)

**физиопрофилактика** физиопрофилактика (тәбиғи һәм яһалма физик факторҙар ярҙамында һаулыҡты нығытыу һәм ауырыуҙарҙы булдырмау өсөн көрәшеү юлдары)

**физиотерапевт** физиотерапевт (физиотерапия белгесе, врач)

**физиотерапевтический** физиотерапия, физиотерапевтик (физиотерапияға ҡағылышлы, мәҫ., физиотерапия кабинеты, физиотерапевтик процедура)

**физиотерапия** физиотерапия, физиатрия (физик ысулдар йәғни яҡтылыҡ, йылылыҡ, һыу, электр менән дауалау)

**физкультура** физкультура (физик культура; төрҙәре: *ф. лечебная* дауалау физкультураһы (дауалау һәм профилактик маҡсатта ҡулланылыусы бер төркөм физик күнегеүҙәр) һ. б.)

**филлохинон** филлохинон (*ҡара:* **витамин К**)

**филогенез** филогенез (бер төркөм организмдарҙың үҫеш процесы)

**филяриатоз** филяриатоз (филярийҙарҙың йоғоуынан килгән бер төркөм (онхоцеркоз һ. б.) гельминтоз ауырыуҙары *ҡара:* **онхоцеркоз, гельминтоз**)

**филярии** филярийҙар (нематодтар рәтендәге паразит селәүҙәр, уларҙың ҡайһы берҙәре ҡан эскес бөжәктәр аша кешегә йоға)

**фимоз** фимоз (тыумыштан йәки ауырыу һөҙөмтәһендә ҡаҫа тишегенең тарлығы; һөҙөмтәлә, ҡаҫаны енес ағза башы аша әйләндереп булмай; төрө: *ф. физиологический* физиологик фимоз (яңы тыуған балаларҙа ҡаҫа тишегенең тар булыуы)

**финка (финна)** финка (*ҡара:* **цистицерк**)

**финноз** финноз (тениид исемле паразит селәү ҡарышлауыҡтарының һыйыр малы һәм сусҡаларҙа паразит булып йәшәүе)

**финнозный** финноз (мәҫ., финноз ит)

**фистула** фистула (*ҡара:* **свищ**)

**фистулография** фистулография (фистулаға контраст матдә индереп үткәрелгән рентгенография)

**фитонцидность** фитонцидлыҡ (үҫемлектең фитонцидтар бүлеү һәләтлеге)

**фитонциды** фитонцидтар (юғары үҫемлектәрҙә барлыҡҡа килгән бактерияларға, бәшмәктәргә

һ. б. ҡаршы тороу һәләтлеге булған матдәләр)

**фитотерапи́я** фитотерапия (шифалы үҫемлектәр ярҙамында дауалау)

**фитотокси́н** фитотоксин (үҫемлек ағыуы)

**флеби́т** флебит (ниндәй ҙә булһа вена тамырының шешеүе)

**флеографи́я** флебография (веналарға контраст матдә индереп яһалған рентгенография)

**флебоста́з** флебостаз (веналарҙағы ҡан ағымының туҡтауы йәки ныҡ насарайыуы)

**флебостено́з** флебостеноз (вена тамыры стенозы; *ҡара:* **стеноз**)

**флеботромбо́з** флеботромбоз (вена тамырында тромбтың барлыҡҡа килеүе; *ҡара:* **тромб**)

**флебофибро́з (флебосклероз)** флебофиброз (вена тамыры көбөндә тоташтырғыс туҡыманың артыҡ үҫеш алыуы)

**флебэктоми́я** флебэктомия (венаны алыу операцияһы)

**флегма́тик** флегматик (1. *ҡара: темперамент флегматический;* 2. һүлпән кеше)

**флегмо́на** флегмона (эренле шештең бер төрө)

**флегмоно́зный** флегмоноз (мәҫ., флегмоноз процесс)

**флекте́на** фликтена (1. күҙ ағында йәки күҙҙең мөгөҙсә ҡатламында барлыҡҡа килгән ваҡ төйөрсә; 2. ялпаҡ күпертке; 3. *ҡара:* **волдырь**)

**фло́ра микробная** *ҡара:* **микрофлора**

**флуктуа́ция** флуктуация (эсендә шыйыҡсаһы булған ҡыуышлы ағзаның ҡаҡҡылып тикшергәндә алынған һелкенеү тойғоһо, ҡайһы бер ауырыуҙарҙы асыҡлау өсөн файҙаланыла)

**флюорогра́мма** флюорограмма (флюорография үткәргәндә алынған рентгенограмма, мәҫ., үпкә флюорограммаһы)

**флюорогра́фия** флюорография (флюоресцентлы экраны булған рентген аппараты ярҙамында кеше ағза-туҡымаһына үткәрелгән рентгенография, мәҫ., үпкә флюорографияһы)

**флюоро́з** флюороз (эскән һыуҙа фторҙың артыҡ булыуы арҡаһында теш үҙенең зарарланыуы менән үткән теш ауырыуы)

**флюс** флюс (теш ауырыуы һөҙөмтәһендә теш итенең эренләп шешеүе)

**фоби́я** фобия (неврозДың бер төрө: бәйләнсек рәүештә ҡайһы бер нәмәнән, хәрәкәттән, ауырыуҙан һ. б. ҡурҡыу гәләмәте, мәҫ., берәү ут сығыуҙан, икенсе кеше бейеклектән, ҡараңғылыҡтан ҡурҡа һ. б.)

**фобофоби́я** фобофобия (ҡурҡыуға ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия**)

**фока́льный** фокаль (*ҡара:* **очаговый,** мәҫ., фокаль инфекция)

**фолли́кул** фолликул (1. ҡайһы бер ағзаларҙың функциональ өлөшсәһе мәҫ., *ф. гортани лимфатический* ҡурылдайҙың лимфатик фолликулдары; *ф. яичниковый, зреющий* түллектең өлгөрөп килгән фолликулы; *ф. червеобразного отростка* селәү үҫентеһе фолликулдары һ. б.; 2. *ф. волоса* сәс бөртөгө фолликулы)

**фолликулёз конъюнктивы** конъюнктива фолликулезы (күҙ тиресәһенең эренләп шешеүе)

**фолликули́н** фолликулин (түл биҙендә барлыҡҡа килгән ҡатынҡыҙ енес гормоны)

**фолликули́т** фолликулит (сәс ҡабының эренләп шешеүе)

**фонендоско́п** фонендоскоп (целлофан мембраналы һәм ҡолаҡҡа индереү өсөн ике резина көпшәле тыңлау приборы)

**фониатри́я** фониатрия (кешенең тауышы, уның боҙолоуы, ошо боҙолоуҙы дауалау тураһындағы ғилем)

**фонокардиогра́фия** фонокардиография (йөрәк эшләүенән килгән тауыш-өндәрҙе фонокардиограф приборы ярҙамында график һыҙыу рәүешендә өйрәнеү)

**фо́рма лекарственная** дарыу формаһы (дарыуҙы ҡулланыу рәүеше: мәҫ., таблетка, иҙелмә һ. б.)

**фо́рмула** *(мед.)* формула (мәҫ., *ф. зубная* тештәр формулаһы (тештәрҙең һанын һәм ниндәй тәртиптә булыуын күрһәтә); *ф. крови* ҡан формулаһы (ҡанды тикшергәндә бер тәртиптә яҙылып алынған мәғлүмәт; *ф. лейкоцитарная (гемограмма)* лейкоцитар формула (периферия ҡанында айырым лейкоциттар төрҙәренең процентлы сағыштырмаһы; *ҡара:* **лейкоциты**)

**фосфатеми́я** фосфатемия (фосфаттарҙың ҡанда артыуы)

**фосфатури́я** фосфатурия (фосфаттарҙың һейҙектә артыҡ булыуы)

**фота́рий** фотарий (1. ультрафиолет һәм йылы биреүсе нурҙар менән бер юлы бер төркөм кешене дауалау кабинеты)

**фотоаллерги́я** фотоаллергия (ҡояш яҡтылығына ҡарата аллергия; *ҡара:* **аллергия**)

**фотодермати́т** фотодерматит (ниндәй ҙә булһа яҡтылыҡ нурҙары (мәҫ., ҡояш, электр дуғаһынан төшкән) тәьҫиренән тиренең шешеүе)

**фотодермато́з** фотодерматоз (яҡтылыҡ нурҙарына ҡарата юғары һиҙеүсәнлектән килгән тире ауырыуы)

**фотоофтальми́я** фотоофтальмия (яҡтылыҡ нурҙары (ультрафиолет һәм инфраҡыҙыл нурҙар) тәьҫиренән күҙ тиресәһе һәм күҙ ҡабағы тиреһенең шешеүе)

**фотосенсибилиза́ция** фотосенсибилизация (ҡояш нурҙарына ҡарата юғары һиҙеүсәнлек: ҡояшта булғандан һуң тире һәм тиресәләрҙең шешеүе)

**фототерапи́я (светолечение)** фототерапия (дауалау маҡсатында терегөмөш-кварц лампаһы, соллюкс һ. б. төшкән инфраҡыҙыл һәм ультрафиолет нурҙарынан файҙаланыу)

**фрамбе́зия** фрамбезия (тропик илдәрҙә күҙәтелгән үҙенә бер төрлө микроб йоҡҡандан булған сифилисҡа оҡшаш венерик ауырыу)

**френокарди́я** френокардия (психик кисереш тәьҫиренән йөрәктең ауыртыуы)

**фриги́дность** фригидлыҡ (сексуаль тормошта ҡатын-ҡыҙҙарҙың сексуаль һалҡынлығы)

**фронти́т** фронтит (маңлай ҡыуышлығының шешеүе)

**фруктозури́я** фруктозурия (һейҙек менән фруктоза шәкәренең артыҡ бүленеүе (ауырыу күренеш)

**фтизиа́тр** фтизиатр (туберкулез буйынса белгес, врач)

**фтизиатри́я** фтизиатрия (медицинаның үпкә туберкулезын һәм уны дауалау юлдарын өйрәнеүсе бүлеге)

**фтизиофоби́я** фтизиофобия (туберкулез йоғоуға ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия**)

**фтизиотерапе́вт** фтизиотерапевт (туберкулезды терапевтик ысулдар менән дауалаусы фтизиатр)

**фтизиохиру́рг** фтизиохирург (фтизиохирургия белгесе, врач)

**фтизиохирурги́я** фтизиохирургия (фтизиатрия һәм хирургияның үпкә туберкулезын хирургик ысулдар менән дауалау хаҡындағы тармағы)

**фтириа́з** фтириаз (ҡорһаҡтың аҫҡы өлөшөндә, түмһәкәй, бот тирәһендә түмһәкәй бете эйәләшеүе)

**фтори́рование воды** һыуҙы фторлау (теш кариесы булдырмау маҡсатында эскән һыуҙы фтор менән байытыу)

**фузариотоксико́з** фузариотоксикоз (фузарий бәшмәге менән зарарланған игенде ашап ағыуланыу)

**фузоспирилле́з** **(фузоспирохетоз)** фузоспириллез (үҙенә бер төрлө бактерия йоғоуҙан килгән тире һәм тиресә ҡатламдарҙың шешеүе)

**фунгици́дность** фунгицидлыҡ (бәшмәктәр үҫешен туҡтатыу һәләтлеге булыу)

**фунгици́ды** фунгицидтар (паразит бәшмәктәр менән көрәшеү өсөн ҡулланыла торған матдәләр)

**фуникули́т** фуникулит (1. арҡа мейеһе тамырсаларының шешеүе; 2. орлоҡ бауының шешеүе)

**фу́нкция** *(в физиол.)* функция (эшсәнлек, эш, мәҫ. мускулдар функцияһы)

**фуру́нкул** фурункул, сиҡан (сәс ҡабы һәм уның эргәһендә ятҡан тир биҙенең шешеүе)

**фурункулёз** фурункулез (күп сиҡан сығыу йәки бер сиҡан артынан икенсеһенең ҡалҡыуы)

**футля́р для очков** күҙлек футляры (һауыты)

**ФЭП** *ҡара:* **пункт фронтовой эвакуационный**

# Х

**хала́зион** халазион (күҙ ҡабағындағы биҙҙәрҙең шешеүе)

**хала́т** халат (мәҫ., *х. медицинский* медицина халаты; *х. хирургический* хирургия халаты һ. б.)

**халько́з** халькоз (ағза-туҡымаларҙа еҙ тупланыуы)

**хара́ктер** характер (айырым кешегә хас сифаттар бирәмеге)

**ха́рканье** *(разг.)* ҡаҡырыу

**хво́рь** *(разг.) ҡара:* **болезнь**

**хвост** *(анат.)* ҡойроҡ (ҡайһы бер ағза-туҡыманың йәки ҡыуышлыҡтың ҡойроҡто хәтерләткән өлөшө, мәҫ., *х. конский* ат ҡойроғо (арҡа мейеһе осонан һалынып төшкән нервы епсәләре); *х. придатка яичка* күкәй өҫтәмәһе ҡойроғо һ. б.)

**хейли́т** хейлит (ирен шешеүе; төрҙәре: *х. актинический* актиник хейлит (ҡояшта артыҡ ҡыҙыныуҙан була); *х. гнойный* эренле хейлит; *х. кандидозный* кандидоз хейлит (сүпрә бәшмәге тыуҙырған ирен шешеүе) һ. б.)

**хейло́з** хейлоз (ашамлыҡта $B_2$ витамины (рибофлавин) етешмәүҙән килгән ирендең шешеүе)

**хейлопла́стика** хейлопластика (иренгә пластик операция яһау)

**хеморецéптор** хеморецептор (химик ҡуҙғытыуҙы тойоусы рецептор; *ҡара:* **рецептор**

**хилоперика́рд** хилоперикард (йөрәк ҡабында лимфа йыйылыу)

**хилопиопневмото́ракс** хилопиопневмоторакс (плевра ҡыуыш-

лығында һауа, лимфа һәм эрен йыйылыуы)

**хилопневмото́ракс** хилопневмоторакс (плевра ҡыуышлығында һауа һәм лимфа тупланыуы)

**хи́лость** *(разг.)* сибеклек, кәгезлек

**хилури́я** хилурия (һейҙек менән лимфа бүленеп сығыуы)

**химиопрофила́ктика (инфекционных болезней)** химиопрофилактика (ҡайһы бер инфекцион ауырыуҙарҙан һаҡланыу маҡсатында алдан дарыу ҡабул итеү, мәҫ., *х. малярийная* малярияға ҡаршы химиопрофилактика)

**химиотерапи́я** химиотерапия (химиотерапевтик препараттар ҡулланыуға нигеҙләнгән дауалау, мәҫ., *х. противоопухолевая* шешкә ҡаршы химиотерапия)

**хи́мия** химия (төрҙәре: *х. биологическая* биологик химия (*ҡара:* **биохимия**); *х. фармацевтическая* фармацевтик химия (фармацияның дарыуҙарҙың физик һәм химик сифаттарын өйрәнеүсе тармағы) һ. б.)

**химотрипси́н** химотрипсин (ашҡаҙан аҫты биҙе ферменты)

**хи́мус** химус (нәҙек эсәктәге шыйыҡланған аҙыҡ матдәһе)

**хиропра́ктика** хиропрактика (умыртҡа тайыу кеүек ауырыуҙарҙы ҡул ярҙамында дауалау системаһы, Америка Ҡушма Штаттарында таралған)

**хиру́рг** хирург (хирургия белгесе, врач, хәҙер хирургтарҙың бер нисә төрө билдәле: *х. ведущий* етәксе хирург; *х. детский* балалар хирургы һ. б.)

**хирурги́ческий** хирургия, хирургик (мәҫ., хирургия кафедраһы, хирургик инҫтрумент)

**хирурги́я** хирургия (медицинаның, нигеҙҙә операция йәки механик юл менән дауалай торған тармағы; төрҙәре: *х. абдоминальная* абдоминаль хирургия (ҡорһаҡ хирургияһы; *х. военно-полевая* хәрби ялан хирургияһы; *х. восстановительная* төҙәкләндереү хирургияһы; *х. гнойная* эренле ауырыуҙар хирургияһы; *х. детская* балалар хирургияһы; *х. косметическая* косметика хирургияһы; *х. общая* дөйөм хирургия; *х. оперативная* оператив хирургия (операциялар һәм хирургияның башҡа ысулдарын өйрәнә); *т. торакальная (грудная)* торакаль хирургия; *х. ургентная* ургент хирургия (ашығыс ярҙам талап иткән хирургия); *х. челюстно-лицевая* битяңаҡ хирургияһы)

**хладнокро́вие** тыныс тәбиғәтле булыу, һалҡын ҡанлылыҡ

**хлами́дии** хламидийҙар (бер төркөм микроорганизмдар, улар кешелә трахома, конъюнктивит, пситтакоз кеүек ауырыуҙар тыуҙыра ала)

**хлоа́зма** хлоазма (буйға ҡалғанда, бауыр сирле булғанда, самаһыҙ күп ҡояшта ҡыҙынғанда һ. б. биткә сыҡҡан һипкелгә оҡшаш һары-көрән таптар)

**хлоранеми́я** хлоранемия (организмда тимер етешмәүҙән килгән аҙ ҡанлылыҡ)

**хлори́ды** хлоридтар (матдәләр алмашыныуында актив роль уйнаусы минералдар, уларҙың иң мөһиме хлорлы натрий, йәғни аш тоҙо)

**хлори́рование воды** һыуҙы хлорлау (һыуҙы зарарһыҙлау ысулы)

**хлорлейко́з** хлорлейкоз (ҡыҙыл кимектә, лимфатик төйөрҙәрҙә һ. б. ағзаларҙа йәшел төҫтәге шештәр барлыҡҡа килеүе менән

характерлы лейкоз; *ҡара:* **лейкоз)**

**хлороз** хлороз (ҡатын-ҡыҙҙарҙа күҙәтелеүсән тимер етешмәүҙән булған аҙ ҡанлылыҡ; төрҙәре: *х. поздний* һуңлап килгән хлороз (30 йәште уҙған ҡатындарҙа); *х. ранний* иртә килгән хлороз (енси етлегеү дәүерендәге ҡыҙҙарҙа)

**хлороформомания** хлороформомания (хлороформға ҡарата токсикомания; *ҡара:* **токсикомания)**

**хмель** 1. *(раст.)* ҡомалаҡ (нигеҙҙә тынысландырғыс һәм һейҙек ҡыуыҡы шешеүенә ҡаршы дауа биреүсе үлән); 2. *(разг.)* иҫереү

**хоаны** хоандар (танау ҡыуышлығының тамаҡ өҫтө менән тоташтырыусы тар урыны)

**ход** *(анат.)* юл (мәҫ., *х. носовой* танау юлы һ. б.)

**ходьба дозированная** дозалап йөрөү (дауалау физкультураһының бер төрө: самалап йөрөү)

**хозяин (паразита)** паразит зат (эйәһе хужаһы) (үҙендә паразит заты эйәләштергән организм, мәҫ., кеше, мал һ. б.; төрҙәре: *х. окончательный* паразиттың аҙаҡҡы хужаһы (етлеккән дәүерҙәге паразит эйәләшкән була, мәҫ., таҫма селәү өсөн кеше); *х. промежуточный* паразиттың ваҡытлы хужаһы (ҡарышлауыҡ дәүерендәге паразит эйәләшкән була, мәҫ., тапма ауырыуы плазмадийы өсөн кеше һ. б.)

**холангиография** холангиография (үт юлдарына контраст матдә индереп яһалған рентгенография)

**холангиолит** холангиолит (бауырҙың күҙәнәк-ара ярыҡтарының шешеүе)

**холангиоскопия** холангиоскопия (махсус эндоскоп приборы ярҙамында үт юлдарын ҡарап тикшереү)

**холангиотиф** холангиотиф (ҡорһаҡ тифы таяҡсаһы эйәләшеүҙән килгән үт юлдарының шешеүе)

**холангит** холангит (үт юлдарының шешеүе)

**холедохолитиаз** холедохолитиаз (дөйөм үт юлында үт ташы барлыҡҡа килеүе)

**холекальциферол** холекальциферол *(ҡара:* **витамин** $Д_3$)

**холекинетика** холекинетиктар (үт юлдарынан үт сығыуҙы шәбәйткес спазмолитик дарыуҙар: атропин, папаверин, магний сульфаты һ. б.)

**холелитиаз** холелитиаз (*ҡара:* **болезнь желчнокаменная)**

**холемия** холемия (ҡан, ағза-туҡымаларҙа үт матдәләренең артыҡ тупланыуы)

**холера (азиатская)** ваба (ваба вибрионы исемле бактерия тыуҙырған һәм бысраҡ ҡул, аш-һыу аша йоҡҡан үтә ҡурҡыныс инфекцион ауырыу; төрҙәре: *х. сухая (молниеносная)* ҡоро (йәшендәй) ваба (бигерәк тә ауыр үтеүсән ваба); *х. эль-тор* эльтор вабаһы (эль-тор исемле ваба вибрионы тыуҙыра) һ. б.)

**холерик** холерик *(ҡара:* **темперамент холерический)**

**холестаз** холестаз (үттең бөйән эсәгенә үтмәйенсә үт юлдарында тупланыуы)

**холестеатома** холестеатома (холестерин кристалдары һәм ҡубып төшкән эпителий күҙәнәктәре уҡмашыуҙан килгән шешкә оҡшаш нәмә)

**холестерин** холестерин (организмда иркле һәм юғары май кисло-

талары менән химик бәйләнештә булған липоид; *кара:* **липоид)**

**холестеро́з желчного пузыря** үт ҡыуығы холестерозы (матдәләр алмашыныуы боҙолоуҙан килгән ауырыу)

**холецисти́т** холецистит (үт ҡыуығының шешеүе; төрҙәре: *х. аллергический* аллергик холецистит; *х. бескаменный* ташһыҙ холецистит; *х. гангренозный* гангреноз холецистит (*кара:* **гангрена)** *х. гнойный* эренле холецистит; *х. калькулезный* калькулез (ташлы) холецистит; *х. хронический* хроник (дауамлы) холецистит һ. б.)

**холецистогепати́т** холецистогепатит (үт ҡыуығы, үт юлдары һәм бауырҙың бер юлы шешеүе)

**холецистогра́фия** холецистография (үт юлдарына, үт ҡыуығына яһала торған рентгенография)

**холецистопанкреати́т** холецистопанкреатит (үт ҡыуығы һәм ашҡаҙан аҫты биҙенең бер юлы шешеүе)

**холецистопати́я** холецистопатия (үт ҡыуығының бөтә булған ауырыуҙарының дөйөмләштерелгән исеме)

**холецистохоланги́т** холецистохолангит (үт ҡыуығы һәм үт юлдарының бер юлы шешеүе)

**холецистоэктази́я** холецистоэктазия (үт ҡыуығының тотороҡло киңәйеүе)

**холецистоэктоми́я** холецистоэкто́мия (үт ҡыуығын алыу операцияһы)

**холи́н** холин (витамин характерындағы матдә; *кара:* **витамин У)**

**холиноли́тики** холинолитиктар (ацетилхолин тәьҫирен юҡ итеүсе дарыуҙар, мәҫ., атропин)

**холиномиме́тики** холиномиметиктар (холинорецептор системаһында ҡуҙғыу эффекты биреүсе дарыу матдәләре; *кара:* **холинорецепторы)**

**холинореце́пторы** холинорецепторҙар (нервы импульсын, мускулдар ҡыҫҡарылышын тәьмин итеүсе күҙәнәктәрҙең биохимик структураһы)

**холм** *(анат.)* бейеклек (мәҫ., *х. лобковый* түмһәкәй бейеклеге)

**хо̀лмик** *(анат.)* (ваҡ) ҡалҡыулыҡ, мәҫ., *х. семенный* орлоҡ ҡалҡыулығы (ирҙәрҙең һейеү каналында урынлаша) һ. б.)

**«хо̀лод»** «һыуыҡ» һалыу (дауалау процедураһы: һалҡын һыу йәки боҙ тултырылған резина ҡап сирле урынға һалына)

**хондри́т** хондрит (кимерсәк шешеүе)

**хондробласто́ма** хондробластома (оҙон һөйәк осонда барлыҡҡа килгән ябай шеш)

**хондрогене́з** хондрогенез (кимерсәк туҡымаһы барлыҡҡа килеүе)

**хондродисплази́я** хондродисплазия (кимерсәк туҡыманың дөрөҫ үҫеше булмауҙан килгән ауырыуҙарҙың дөйөм исеме)

**хондродистрофи́я** хондродистрофия (тыумыштан килгән зәғифлек: буйҙың бәләкәйлеге, аяҡҡулдың ҡыҫҡа булып үҫеүе һ. б.)

**хондрокальцино́з** хондрокальциноз (кимерсәк туҡымаһында кальций тоҙҙарының тупланыуы)

**хондроло́гия** хондрология (гистологияның кимерсәк туҡымаһының барлыҡҡа килеүен, үҫешен өйрәнеүсе тармағы)

**хондро́ма** хондрома (гиалин исемле кимерсәккә сыҡҡан ябай шеш)

**хондромато́з** хондроматоз (быуын кимерсәген һәм һөйәкте зарарлаусы бер төркөм ауырыуҙар: *х. костей* һөйәк хондроматозы (һөйәк туҡымаһының насар үҫеше һ. б. үҙгәрештәр менән характерлы нәҫел ауырыуы); *х. сустава* быуын хондроматозы (быуын капсулаһында барлыҡҡа килгән ябай шеш)

**хондроперихондри́т** хондроперихондрит (кимерсәк, кимерсәкте ҡаплаусы яры һәм йәнәш ятҡан туҡыманың бер юлы шешеүе)

**хондросарко́ма** хондросаркома (кимерсәк туҡыманан барлыҡҡа килгән саркома шеше)

**хордо́ма** хордома (арҡа мейеһендәге күҙәтелеүсән шеш)

**хоре́я** хорея (ирекһеҙҙән аяҡ-ҡулдың һәм башҡа мускулдарҙың тартышыуы менән характерлы сирле күренеш, ревматизм йәки үҙенә күрә нәҫел ауырыуынан була, мәҫ., *х. ревматическая (малая)* ревматизм (йәки кесе) хорея һ. б.)

**хориодерми́я** хориодермия (күреү һәләтлегенең түбәнәйеүе, күреү офоғоноң тарайыуы, күрәғарашлыҡ барлыҡҡа килеү менән үтеүсе тыумыштан килгән ауырыу)

**хориоди́т** хориодит (күҙҙең тамырлы шекәрәһенең шешеүе; төрҙәре: *х. сифилитический* сифилис хориодиты; *х. туберкулезный* туберкулез хориодиты һ. б.)

**хориоидкарцино́ма** хориоидкарцинома (баш мейеһе ҡарынсаһында барлыҡҡа килгән рак шеше)

**хориоменинги́т** хориоменингит баш мейеһе шекәрәләре һәм тамырҙар сырмалсыҡтарының бер юлы шешеүе)

**хорио́н** хорион (толҡаттың тышҡы ҡатламы)

**хориоретини́т** хориоретинит (күҙҙең селтәрле һәм тамырлы шекәрәләренең бер юлы шешеүе; төрҙәре: *х. сифилитический* сифилис хориоретиниты; *х. туберкулезный* туберкулез хориоретиниты һ. б.)

**хориоретинопати́я** хориоретинопатия (күҙҙең селтәрле һәм тамырлы шекәрәләренең шешеүһеҙ үткән бер нисә ауырыуҙарының дөйөм исеме)

**хориоэнцефали́т** хориоэнцефалит (баш мейеһе һәм уның тамырҙар сырмалсыҡтарының бер юлы шешеүе)

**хориоэпендимати́т** хориоэпендиматит (баш мейеһенең тамырҙар сырмалсыҡтары шешеүе)

**храп (храпе́ние) во сне** хырылдау, хырылдап йоҡлау

**хризотерапи́я** хризотерапия (алтын препараттары: кризанол, санокризин һ. б. менән дауалау)

**хри́плый (голос)** ҡарлыҡҡан (тауыш)

**хрипота́** тауыш ҡарлығыуы

**хри́пы** ғыжылдауыҡ (үпкә туҡымаһы, үпкә көпшәләре шешеүе һөҙөмтәһендә һулыш ваҡытында барлыҡҡа килгән һулыш шауы; төрҙәре: *х. влажные* ҡаҡырыҡлы ғыжылдауыҡ; *х. свистящие* сыйылдаҡ ғыжылдауыҡ; *х. сухие* ҡоро ғыжылдауыҡ һ. б.)

**хромати́н** хроматин (күҙәнәк йәҙрәһенең бер есеме)

**хромидро́з** хромидроз (кобальт, еҙ һәм башҡа матдәләр менән эш итеү һөҙөмтәһендә төҫлө тир бүленеүе)

**хромобактерио́з** хромобактериоз

(үҙенә бер төрлө пигмент биреүсе бактерия йоғоуҙан килгән, сепсис рәүешендәге инфекцион ауырыу; кешелә, хайуандарҙа күҙәтелә)

**хромомико́з** хромомикоз (үҙенә бер төрлө микроскопик бәшмәк йоғоуҙан килгән һәм, нигеҙҙә, тире һәм тире аҫты туҡыманы зарарлаған бәшмәк ауырыуы)

**хромосо́мы** хромосомалар (күҙәнәк йәҙрәһендә урынлашыусы күҙәнәктең һәм организмдың нәҫел сифаттарын йөрөтөүсе органоидтар)

**хромота́** сатанлыҡ (мәҫ., *х. перемежающая* ҡайтмалы сатанлыҡ (облитерлау эндоартериит ауырыуының төп билдәһе, аяҡҡа ҡандың етерлек күләмдә килмәүенән була)

**хромофоби́я** хромофобия (буятылған нәмәләргә ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия**)

**хромоцистоскопи́я** хромоцистоскопия (бөйөрҙәр һәм һейҙек үткәргес көпшәләр эшсәнлеген тикшереү ысулы)

**хронакси́я** хронаксия (физиологик яуап реакцияһын тыуҙырыу өсөн кәрәк булған иң ҡыҫҡа ваҡытлы ҡуҙғытыу)

**хруста́лик** күҙ яҫмағы

**хрящ** *(анат.)* кимерсәк (мәҫ., *х. бронхиальный* бронх (үпкә көпшәһе) кимерсәге; *х. межпозвоночный* умыртҡа-ара кимерсәк; *х. перстневидный* уймаҡ кимерсәк (ҡурылдайҙа); *х. реберный* ҡабырға кимерсәге; *х. ушной раковины* ҡолаҡ япрағы кимерсәге һ. б.)

**худо́й** ябыҡ

**худоща́вый** ҡаҡса (асан)

# Ц

**цара́пина (ссадина)** сыйыҡ, сыйылған, тырналған ер

**цвет** төҫ (мәҫ., *ц. крови* ҡан төҫө; *ц. мочи* һейҙек төҫө һ. б.)

**цветобоя́знь** *ҡара:* **хромофобия**

**цветоощуще́ние** төҫтәрҙе айыра алыу (һәләте)

**целе́бный (целительный)** шифалы (мәҫ., шифалы үләндәр)

**целлюли́т** целлюлит (*ҡара:* **панникулит**)

**цеме́нт (зубной)** теш цементы (теш муйынтығын һәм тамырын ҡаплаған һөйәккә оҡшаш матдә)

**цементо́ма** цементома (яңаҡта күҙәтелеүсән ябай шеш)

**центр** үҙәк (1. организмдың ниндәй ҙә булһа эшсәнлегенә идара итеүсе нервы күҙәнәктәренең тупланмаһы, мәҫ., *ц. дыхательный* тын алыу үҙәге (оҙонса мейелә) һ. б.; 2. ҡайһы бер анатомик объекттың уртаһы, мәҫ., *ц. диафрагмы сухожильный* диафрагманың (күкрәк шаршауының) тарамышлы үҙәге); 3. күҙәнәк есеме: *ц. клеточный* күҙәнәк үҙәге; 4. ҡайһы бер дауалау профилактик учреждениелар исеме (мәҫ., *ц. кардиологический* кардиология үҙәге)

**центробе́жный** үҙәктән сыҡҡан (үҙәк нервы системаһынан сыҡҡан нервыларға, импульстарға ҡарата ҡулланылыусы термин, мәҫ., *центробежные нервы* үҙәктән сыҡҡан нервылар)

**центростреми́тельный** үҙәккә барған (мәҫ. *ц. нерв* үҙәккә барған нерв)

**ценуро́з** ценуроз (күпселектә эттәрҙә күҙәтелеүсән, баш мейе-

һен, мускулдарҙы һ. б. зарарлаусан һәм ценур паразит селәүенең ҡарышлауығы йоғоуҙан килгән гельминтоз ауырыуы, кешегә лә сирле эттән йоғоусан)

**це́пень** цепень (таҫманы хәтерләткән ялпаҡ паразит селәү, төрҙәре: *ц. бычий (невооруженный)* һыйыр малы цепене; *ц. карликовый* иргәйел цепене; *ц. крысиный* ҡомаҡ цепене; *ц. свиной (вооруженный)* сусҡа цепене)

**цервици́т** цервицит (аналыҡ муйынтығының шешеүе)

**церебрастения** церебрастения (баш ауыртыу, баш әйләнеү, хәтер насарайыу менән үтеүсе ауырыу, йыш ҡына баш травмаһы йәки берәй инфекция кисергәндән һуң була, мәҫ., *ц. травматическая* травматик церебрастения һ. б.)

**церебропати́я** *ҡара:* **энцефалопатия**

**цереброспина́льный** цереброспиналь (арҡа һәм баш мейеһенә ҡағылышлы)

**церка́рий** церкарий (моллюск эсендә үҫеүсе трематод исемле паразит селәүҙәрҙең ҡарышлауығы)

**цестодо́зы** цестодоздар (ялпаҡ паразит селәүҙәр йоғоуҙан килгән бер төркөм гельминтоз ауырыуҙар: ценуроз, эхинококкоз, цистицеркоз һ. б.)

**цесто́ды** цестодалар (ялпаҡ, таҫма тәнле айырым быуынтыҡтарҙан торған паразит селәүҙәр төркөмө: эхинококк һ. б.)

**цефалги́я** цефалгия (баш ауыртыуы)

**цефалоспорио́з** цефалоспориоз (үҙенә бер төрлө микроскопик бәшмәк йоғоуҙан килгән һәм тирене, тиресә ҡатламды, ҡайһы ваҡыт эске ағзаларҙы зарарлау менән үтеүсе бәшмәк ауырыуы)

**циано́з** цианоз (ҡанда кислород етешмәүҙән тире һәм тиресәләрҙең күк төҫ алыуы)

**цианокобалами́н** цианокобаламин (*ҡара:* **витамин $B_{12}$**)

**цианоти́чный** цианоз (цианозға ҡағылышлы)

**цикл** *(мед.)* цикл (мәҫ., дауалау циклы)

**цикли́т** циклит (күҙҙең керпексәле (цилиар) тәненең шешеүе)

**циклопи́я** циклопия (үҫеш аномалияһы: баланың бер күҙле булып тыуыуы)

**циклотими́я** циклотимия (маникаль-депрессив психоздың еңел төрө)

**циклофрени́я** циклофрения (*ҡара:* **психоз маниакально-депрессивный**)

**цилиндро́ма** цилиндрома (тир биҙе һәм сәс фолликулаларында барлыҡҡа килгән яман шеш)

**цилиндрури́я** цилиндрурия (һейҙектә цилиндрҙарҙың булыуы; *ҡара:* **цилиндры**)

**цили́ндры (в моче)** цилиндрҙар (һейҙектә цилиндрға оҡшаш есемдәр күҙәтелеүе, уларҙың булыуы, ғәҙәттә, бөйөрҙәрҙең сиргә һабышыуын раҫлай)

**цинга́** зәңге (С витамины етешмәүҙән килгән авитаминоз ауырыуы)

**циркулято́рный** циркулятор (ҡан әйләнешенә ҡағылышлы)

**циркуля́ция** *(физиол.)* циркуляция (түңәрәкләп, урап йөрөү, мәҫ., *ц. крови* ҡан циркуляцияһы)

**циркумци́зия** циркумцизия (сөннәтләү операцияһы)

**цирро́з** цирроз (паренхималы ағзала тоташтырғыс туҡыманың артыҡ үҫеүе һәм ағзаның үҙ туҡымаһының кәмеүе, бөрөшөүе менән үткән етди ауырыу, мәҫ.,

*ц. печени* бауыр циррозы (уның бер нисә төрө бар: *ц. печени алиментарный* бауырҙың алиментар циррозы (дөрөҫ туҡланмауға бәйле цирроз); *ц. печени алкогольный* бауырҙың алкоголгә бәйле циррозы (эскеселек һөҙөмтәһендә була); *ц. печени постгепатитный* бауырҙың постгепатит циррозы (бауыр шешеүе һөҙөмтәһендә күҙәтелеүсән); *ц. печени инфекционный* бауырҙың инфекцион циррозы (ниндәй ҙә булһа инфекцион ауырыу кисергәндән һуң була һ. б.)

**ци́ста** циста (насар шарттарға бирешмәҫ өсөн үтә сыҙамлы ҡап менән ҡапланған бер күҙәнәкле хайуан йәки үҫемлек заты, мәҫ., лямблий цистаһы һ. б.)

**цистадено́ма** цистаденома (түллектә барлыҡҡа килгән ябай шеш)

**цистаденофибро́ма** цистаденофиброма (түллектә барлыҡҡа килгән ябай шеш)

**цисталги́я** цисталгия (йыш һәм ауыртыу менән үтеүсе кесе яраu)

**цисте́рна** *(анат.)* цистерна үҙенсәлекле ҡыуышлыҡ, мәҫ., *ц. млечного сока* һүл һуты цистернаһы (күҙәнәктәге лимфа юлының киңәйгән өлөшө)

**цистинури́я** цистинурия (1. цистин һ. б. мөһим аҡһымдар юғалыу менән үтеүсе нәҫел ауырыуы; 2. цистин аминокислотаһының һейҙек менән юғалыуы)

**цисти́т** цистит (һейҙек ҡыуығы тиресәһенең шешеүе; төрҙәре: *ц. геморрагический* геморрагик цистит (һейҙек менән ҡан бүленеү); *ц. микотический* микоз циститы (паразит бәшмәктәр эләгеүҙән һейҙек ҡыуығының шешеүе); *ц. острый* киҫкен цистит, *ц. хронический* хроник (дауамлы) цистит һ. б.)

**цистице́рк** цистицерк (ҡайһы бер таҫма паразит селәүҙәрҙең (мәҫ., сусҡа цепененең һ. б.) ҡарышлауығы)

**цистицерко́з** цистицеркоз (сусҡа цепене цистицеркы теге-был ағзала (йышыраҡ баш мейеһендә, күҙ алмаһында) эйәләшеүҙән барлыҡҡа килгән гельминтоз ауырыуы, уны, ғәҙәттә, финнозлы сусҡа итен ашап йоҡторалар)

**цистицерко́ид** цистицеркоид (иргәйел цепене һымаҡ паразит селәүҙәрҙең ҡарышлауығы)

**цистогра́фия** цистография (һейҙек ҡыуығына контраст матдә индереп яһалған рентгенография)

**цистолитиа́з** цистолитиаз (һейҙек ҡыуығында таш булыуы йәки унда таш барлыҡҡа килеүе)

**цистопиели́т** цистопиелит (бөйөр лаҡаны һәм һейҙек ҡыуығының бер юлы шешеүе)

**цистоплеги́я** цистоплегия (һейҙек ҡыуығы мускулдарының параличы; *ҡара:* **паралич**)

**цистоскопи́я** цистоскопия (цистоскоп приборы ярҙамында һейҙек ҡыуығы эсен тикшереү)

**цистоспа́зм** цистоспазм (һейҙек ҡыуығы мускулдары спазмы; *ҡара:* **спазм**)

**цистоуретри́т** цистоуретрит (һейҙек ҡыуығы һәм һейеү каналының бер юлы шешеүе)

**цистоуретрографи́я** цистоуретрография (һейҙек ҡыуығы һәм һейеү каналын бер юлы рентген ярҙамында тикшереү)

**цитоархитекто́ника** цитоархитектоника (ниндәй ҙә булһа ағзаның күҙәнәк кимәлендәге төҙөлөшө тураһында дөйөм пландағы фән)

**цитогене́тика** цитогенетика (гене-

тиканың нәçел күренештәрен күҙәнәк кимәлендә өйрәнеүсе тармағы)

**цитодиагно́стика** цитодиагностика (микроскоп ярҙамында теге йәки был ағза-туҡыма күҙәнәктәрен тикшереп, ауырыуҙы асыҡлау, диагноз ҡуйыу)

**цито́лог** цитолог (цитология белгесе, врач)

**цитологи́ческий** цитология, цитологик (мәç., цитология кабинеты, цитологик тикшереү)

**цитоло́гия** цитология (хайуан, үçемлек күҙәнәктәре тураһындағы фән)

**цитопени́я** цитопения (тикшерелгән материалда, мәç., ҡанда күҙәнәктәрҙең аҙ булыуы)

**цитопла́зма** цитоплазма (күҙәнәктең йәҙрәнән тыш башҡа өлөшө)

**цитоста́тики** цитостатиктар (нигеҙҙә яман шештәрҙе дауалау өсөн ҡулланылыусы, күҙәнәктәрҙең бүленеү һәләтен бөтөрөү дарыу препараттары)

**цитотокси́н** цитотоксин (күҙәнәк өсөн ағыулы булған матдәләрҙең дөйөм исеме)

**цитофизиоло́гия** цитофизиология (физиологияның күҙәнәктәрҙә барған тереклекте өйрәнеүсе тармағы)

**цитохи́мия** цитохимия (күҙәнәк эсендә барған химик процестарҙы өйрәнеүсе фән)

**цуцугаму́ши** цуцугамуши (риккетсиоздар рәүешенә ингән киçкен инфекцион ауырыу; ауырыу тыуҙырғысты ҡыр талпандары тарата)

**«цыпка»** *(разг.)* «себей», «себей сығыу» (бала-сағала аяҡ-ҡулдарҙың ярылып бөтөүе)

# Ч

**чабре́ц** юшан үләне (нигеҙҙә невралгия, радикулит, ҡайһы бер үпкә ауырыуҙарынан дауа биргән үлән; төрө: *ч. башкирский* кейәү үләне)

**ча́га (березовая), гриб березовый** күҙле бәшмәк, ҡайын ороһо (ҡайһы бер ашҡаҙан, эсәк ауырыуҙарынан, рак шешенән дауа биреүсе үçемлек)

**чай лекарственный** *ҡара:* **сбор лекарственный**

**чароде́йство** сихырсылыҡ

**часть** *(анат.)* өлөш (мәç., *ч. желудка привратниковая* ашҡаҙандың сығыш өлөшө)

**чахо́тка** *(устар.)* үпкә сире (үпкә туберкулезының элекке исеме)

**ча́шка (чашечка)** *(анат.)* 1. ҡапҡас, мәç., *надколенная* (надколенник) тубыҡ ҡапҡасы; 2. ҡыуыҡса, мәç., *ч. почечная* бөйөр ҡыуыҡсаһы)

**человекове́дение** кешене өйрәнеү фәне (психологик һәм социологик планда кешене белеү, өйрәнеү)

**че́люсть** яңаҡ *(ч. верхняя* өçкө яңаҡ; *ч. нижняя* аçҡы яңаҡ)

**че́рвь** селәү (1. *(анат.)* анатомик өлөш, мәç., *ч. мозжечка* кесе мейе селәүе; 2. паразит селәү, мәç., *ч. круглый* йомро паразит селәү (*ҡара:* **нематоды**); *ч. ленточный* таçма паразит селәү (*ҡара:* **цестоды**); *ч. плоский* ялпаҡ паразит селәү, мәç. фасциола, цепень, эхинококк һ. б.)

**черёмуха** муйыл, шоморт (еләге, ғәҙәттә эс китеүҙән дауа биреүсе ағас)

**че́реп** баш (һөйәге) һөйәктәре (төп

ике өлөштән тора: *ч. лицевой* бит һөйәктәре; *ч. мозговой* баш мейеһе ҡумтаһы)
**черепной** баш һөйәк(тәре), мәç., баш һөйәк йөйҙәре
**черепно-мозговой** баш мейеһе (мәç., баш мейеһе нервылары)
**черника** ҡара көртмәле еләге (ғәҙәттә эсә китеүҙән дауа биреүсе үлән)
**черты лица** йөҙ һыҙаттары
**чесаться** *(разг.)* тырнаныу
**чесотка** 1. ҡысынма (ҡысынма талпаны йоғоуҙан килгән тире ауырыуы; унық төрө: *ч. норвежская* норвегия ҡысынмаһы (ҡысынманың ҡаты төрө); 2. ҡорсаңғы (үҙенә бер төрлө талпан йоғоуҙан килгән, хайуандарҙа күҙәтелеүсән тире ауырыуы, мәç., *ч. кур* тауыҡ ҡорсаңғыһы; *ч. собачья* эт ҡорсаңғыһы һ. б. ҡорсаңғы кешегә лә күсеүсән); *ч. зерновая (матрацная, соломенная)* иген ҡорсаңғыһы (иген, һаламда әйәләшеп кешегә күсеүсән талпан тыуҙырған тире ауырыуы); *ч. никелевая* никель ҡысынмаһы (никель менән эшләгән профессия кешеләрендә күҙәтелеүсән тире ауырыуы)
**чесоточный** ҡысынма, ҡорсаңғы
**четверохолмие** *(анат.)* дүрт ҡалҡыулыҡ (баш мейеһе өлөшө)
**чешуйка** ваҡ ҡауаҡ, ҡауаҡса
**чешуйчатый** ҡауаҡлы, тәңкәле, ҡабырсаҡлы (мәç., тәңкәле тимерәү)
**чешуя** тәңкә, ҡабырсаҡ (1. *(анат.)* ҡайһы бер һөйәктәрҙең өлөшө, мәç., *ч. височной кости* сикә һөйәге тәңкәһе; 2. эре ҡауаҡ, мәç., ҡайһы бер тире ауырыуы булғанда күҙәтелә)
**чирей** сиҡан (*ҡара:* **фурункул**)
**чистоплотность** таҙалыҡ (йәки бөхтәлек) һөйөү
**чистота** таҙалыҡ, сафлыҡ
**чистый** 1. таҙа (мәç., таҙа тән); 2. саф (мәç. саф һауа); 3. керһеҙ (мәç. керһеҙ кейем)
**чихание** сөскөрөү
**чихательный** сөскөрткөс
**член мужской половой** ир енес ағзаһы; у мальчиков *(разг.)* бөстөр
**членик (ленточного червя)** быуынтыҡ
**членовредительство** үҙ-үҙеңде ғәриплəү
**членораздельность речи** телмәр аңлайышлығы
**чревосечение** *ҡара:* **лапоратомия**
**чувствительность** һиҙеүсәнлек (мәç. *ч. болевая* ауыртыуҙы һиҙеүсәнлек; *ч. пониженная* түбәнәйгән һиҙеүсәнлек һ. б.)
**чувство** тойоу хисе, тойғо, хис (мәç. *ч. холода* һыуыҡты тойоу хисе: өшөү, өшөттөрөү һ. б.)
**чума** тагун (зооноз рәтендәге үҙенә бер төрлө бактерия тыуҙырған үтә етди инфекцион ауырыу, ул һауа, аш-һыу аша йәки бөрсә әйәләшеүҙән тарала, тагундың бер нисә төрө бар: *ч. бубонная* бубонлы тагун (юғары температура һәм лимфатик төйөрҙәрҙең шешеүе менән үтә); *ч. легочная* үпкә тагуны (тагундың иң йоғошло һәм иң ауыр формаһы)
**чумной** тагун (мәç., тагун бактерияһы)

# Ш

**шалфе́й (лекарственный)** шалфей (япрағы, нигеҙҙә ауыҙ-тамаҡты сайҡау өсөн файҙаланыла)

**шанкр** шанкр (1. ҡайһы бер инфекцион ауырыу тыуҙырғыс заттың тәнгә ингән ерендә барлыҡҡа килгән сей яра (эрозия); төрҙәре: *ш. лимфогранулематозный* лимфогранулематоз шанкры (*ҡара:* **лимфогранулематоз паховый**); *ш. смешанный* ҡатнаш шанкр (сифилис һәм йомшаҡ шанкрҙарҙың берлектә килеүе); *ш. споротрихозный* спортрихоз шанкры *(ҡара:* **споротрихоз**), *ш. твердый (сифилитический)* ҡаты шанкр (сифилистың беренсе дәүере; уның төрө: *ш. амигдалит* — тамаҡ төбө зарарлана); 2. *ш. мягкий* йомшаҡ шанкр (үҙенә бер төрлө бактерия йоғоуҙан килгән венерик ауырыу)

**шар бледный** төҫһөҙ шар (баш мейеһе йәҙрәләренең береһе)

**шарлата́нство медицинское** медицина шарлатанлығы (дауалаған ваҡытта белә тороп сирлене алдау)

**шате́н** шатен (ҡуңыр сәсле кеше)

**шате́р** *(анат.)* сатыр (баш мейеһе өлөшө)

**шва́рта** *ҡара:* **спайки**

**шевеле́ние плода** ғомандың (ҡарындағы баланың) ҡуҙғалыуы

**ше́йка** *(анат.)* муйынтыҡ, муйын (1. *ш. бедренной кости* бот һөйәге муйынтығы; *ш. матки* аналыҡ муйынтығы; 2. *ш. ребенка* бала муйыны һ. б.)

**ше́йный** муйын (муйынға ҡарата)

**шелуше́ние кожи** тәндең ҡауаҡланыуы, төләүе (ике төрө бар: *ш. отрубевидное* тәндең өнөрөлө ҡауаҡланыуы; *ш. эксфолиативное* тәндең эксфолиатив (төләүе) ҡауаҡланыуы)

**шепеля́вость** шышылдап һөйләшеү

**ше́пот (при лечении заговором)** өшкөртөү, өшкөрөү

**шея** муйын (1. *затылочная часть шеи* елкә; 2. *передняя часть шеи* үңәс)

**шизогони́я** шизогония (споровик исемле ябай микроскопик хайуандарҙың ишәйеүсе төрө)

**шизомани́я** шизомания (еңел үтеүсе шизофрения төрҙәренең дөйөм исеме)

**шизо́нт** шизонт (споровик исемле ябай микроскопик хайуандарҙың үҫеш стадияһы)

**шизонтоци́д** щизонтоцид (тапма ауырыуын дауалау өсөн дарыу, мәҫ., акрихин, хиноцид һ. б.)

**шизофази́я** шизофазия (мәғәнә юҡлығы менән характерлы телмәр аңлайышһыҙлығы)

**шизофрени́я** шизофрения (кешенең шәхесе үҙгәреү, интеллекты кәмеү, галлюцинациялар булыу менән характерлы психик ауырыу; төрҙәре: *ш. латентная (скрытая)* латент шизофрения; *ш. острая* киҫкен шизофрения һ. б.)

**ши́на** шина (имгәнеү-һыныу булғанда зарарланған урынды тыныс хәлдә ҡалдырыу өсөн файҙаланыла торған ҡулайлама; төрҙәре: *ш. гипсовая* гипс шинаһы; *ш. транспортная* транспорт(лау) шинаһы һ. б.)

**шини́рование** шина һалыу (шина ярҙамында иммобилизациялау)

**широколицый** яҫы (киң) битле

**широкопле́чий** киң яурынлы, яурынтаҡ

**шистосо́ма** шистосома (ваҡ паразит селәү)

**шистосомо́з (шистоматоз)** шистосомоз (шистосомалар менән зарарланған һыуҙа ҡойоноу (йәки уны эсеү) арҡаһында барлыҡҡа килгән гельминтоз; бер нисә төрө билдәле; *ҡара:* **гельминтоз)**

**ши́шка** *(разг.) ҡара:* **опухоль;** *ш. геморроидальная; ҡара:* **узел геморроидальный**

**шко́ла** школа *(ш. санаторная* санаторий мәктәбе (һаулығы ҡаҡшаған балалар өсөн мәктәп) һ. б.)

**шлюзова́ние (в гигиене)** шлюзлау (1. кешенең юғары баҫымлы урындан (мәҫ., кессондан) нормаль баҫымлы шарттарға күсерелеүе); 2. кешеләрҙең (йәки материалдың) бысранған һауанан саф һауалы бинаға күсерелеүе)

**шов** йөй, шов, ялғау (1. *(анат.)* тоташҡан урын, мәҫ., *ш. лобно-носовой* маңлай-танау йөйө; *ш. промежностный* сат йөйө (тире йөйө) һ. б.; 2. хирургик тегеүҙән килгән йөй, мәҫ., *ш. кишечный* эсәк шовы, йөйө һ. б.)

**шок** шок (ҙур психик, физик кисереш, имгәнеү һ. б. һөҙөмтәһендә һаулыҡтың үтә киҫкен насарайыуы; төрҙәре: *ш. анафилактический* анафилаксия шогы (*ҡара:* **анафилаксия**); *ш. болевой* ауыртыу шогы (бик көслө ауыртыу һөҙөмтәһендә); *ш. геморрагический* геморрагия шогы (күп ҡан юғалтыуҙан һуң); *ш. послеоперационный* операциянан һуңғы шок; *ш. психогенный* психоген шок (көслө психик кисереш һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән психоз реакцияһы) һ. б.)

**шо́ковый** шок

**шпа́тель** шпатель (медицина инструменты)

**шпо́ра пяточная (костная)** тибенге (үксә һөйәгендә барлыҡҡа килгән һөйәк үҫентеһе)

**шприц** шприц (дауалау шыйыҡсаһын организмға ебәреү йәки организмдан ниндәй ҙә булһа физиологик шыйыҡсаны һурып алыу өсөн ҡулланыла торған инструмент, бер нисә төрө бар, шулар араһында: *ш. безыгольный* энәһеҙ шприц (дарыу фәлән тәнгә көслө һауа ағымы менән индерелә); *ш.-тюбик* тюбик шприц (бер тапҡыр ғына ҡулланыла)

**шрам** яра бирсәһе

**штифтова́ние (в травматологии)** штифтлау (һынған һөйәк остарын һөйәк каналына металдан йәки башҡа материалдан яһалған штифт индереп тоташтырыу характерындағы остеосинтез; *ҡара* **остеосинтез)**

**шум** шау (шау-шыу) тауыш, сыңлау (мәҫ. *ш. уличный* урамдағы шау-шыу; *шум в ушах* ҡолаҡ сыңлауы)

**шум (в диагностике)** шау (йөрәк, үпкәне һәм башҡа ағзаларҙы тыңлап тикшергәндә килгән өн-тауыш, мәҫ. *ш. артериальный* артериаль шау (эре артериялар эшен тыңлағанда килгән өн-тауыш); *ш. венный* веноз шау (эре веналар эшен тыңлағанда килгән өн-тауыш); *ш. сердца (сердечный)* йөрәк шауы (йөрәк эшенән килгән өн-тауыш); *ш. трения плевры* плевра ышҡылыуы шауы (гәҙәттә плеврит булғанда килгән өн-тауыш; *ҡара:* **плеврит** һ. б.)

**шумоме́р** шумомер (шау-шыу яңғырауыҡлығын билдәләү өсөн прибор)

# Щ

**щека́** бит алмаһы (урт)

**щеко́тка** *(разг.)* ҡытыҡ

**щель** ек, ҡыҫыҡ, тишек, ярыҡ (мәҫ., *щ. анальная* аналь ек (ултырыш араһы); *щ. глазная* күҙ ҡыҫығы; *щ. голосовая* тауыш еге; *щ. ротовая* ауыҙ (еге) тишеге; *щ. срамная (половая)* оят (енес) еге һ. б.)

**щётка** щетка (мәҫ., *щ. для рук* ҡул йыуыу щеткаһы; *щ. зубная* теш щеткаһы һ. б.)

**щёчный** бит алмаһы (урт)

**щиколотка** *ҡара:* **лодыжка**

**щитови́дный** ҡалҡан (ҡалҡан биҙенә йәки ҡалҡан кимерсәгенә ҡағылышлы)

**щу́риться** күҙ ҡыҫылыу (ҡыҫыу, секрәйтеү)

# Э

**эвакого́спиталь** **(эвакуационный госпиталь)** эвакуация госпитале

**эвакуа́ция** эвакуация, эвакуациялау (алыу, күсереү, мәҫ., *э. раненых* яраланғандарҙы эвакуациялау)

**эвентра́ция** эвентрация (ҡорһаҡты ярғанда йәки ул ярылғанда эсәк-ҡарындың тумпайып сығыуы)

**эзофаги́т** эзофагит (ҡыҙыл үңәс тиресәһенең шешеүе)

**эзофаголо́гия** эзофагология (гастроэнтерологияның ҡыҙыл үңәс сирҙәрен, уларҙы дауалау юлдарын өйрәнеүсе тармағы)

**эзофагопати́я** эзофагопатия (ҡыҙыл үңәс сирҙәре билдәләр комплексының дөйөм исеме)

**эзофагопла́стика** эзофагопластика (ҡыҙыл үңәскә яһала торған пластик операцияларҙың дөйөм исеме)

**эзофагоскопи́я** эзофагоскопия (эзофагоскоп приборы ярҙамында ҡыҙыл үңәсте ҡарап тикшереү)

**эзофагоспа́зм** эзофагоспазм (ҡыҙыл үңәс спазмы; *ҡара:* **спазм**)

**эзофагостено́з** эзофагостеноз (ҡыҙыл үңәс стенозы; *ҡара:* **стеноз**)

**эзофагофиброскопи́я** эзофагофиброскопия (эзофагофиброскоп приборы ярҙамында ҡыҙыл үңәсте ҡарап тикшереү)

**эзофагэктази́я** эзофагэктазия (ҡыҙыл үңәс эктазияһы; *ҡара:* **эктазия**)

**эйзоптрофоби́я** эйзоптрофобия (көҙгөгә ҡарауға ҡарата фобия; *ҡара:* **фобия**)

**эйтанази́я** **(эвтаназия)** эйтаназия (буржуаз илдәрҙә һауыҡмаҫлыҡ сирле кешенең үлемен тиҙләтеү хаҡындағы реакцион ғилем)

**эйфори́я** эйфория (нигеҙһеҙ күтәренке кәйеф, еңеләйеп китеү, мәҫ., алкоголь эскәндә, ҡайһы бер психик ауырыуҙар булғанда һ. б.; *э. ипохондрическая* ипохондриялы эйфория (берсә нигеҙһеҙ күтәренке кәйеф, берсә күңелһеҙлеккә бирелеү һ. б.)

**ЭКГ** ЭКГ (*ҡара:* **электрокардиограмма**)

**экзальта́ция** экзальтация (тәбиғи булмаған күтәренке кәйеф)

**экзанте́ма** экзантема (тәнгә сыҡҡан сабыртмаларҙың дөйөм исеме, мәҫ., *э. сыпнотифозная* сабыртма тифы экзантемаһы; *э. токсическая* токсик экзантемаһы (*ҡара:* **токсикодермия**) һ. б.)

**экзартикуляция** экзартикуляция (аяҡ йәки ҡулды тотошлай алыу операцияһы)

**экзема** экзема, тимерәү (йоғошло булмаған нейро-аллергик тире ауырыуы; төрҙәре: *э. варикозная* варикоз экзема (сираҡ тәңгәлендә веналарҙың варикоз киңәйеү урындарында барлыҡҡа килә); *э. детская* балалар экземаһы (экссудатив диатез менән сирләгән балаларҙа күҙәтелә; *ҡара:* **диатез экссудативно-катаральный**;); *э. дисгидротическая* дисгидрозлы экзема (устабанда һыулы күперткеләр сығыу менән характерлы); *э. истинная* ысын экзема (аяҡ-ҡулда симметрия характерында була); *э. контактная* контакт экземаһы (юғары һиҙеүсәнлек тыуҙырыусы матдә менән аралашҡан ерҙә (мәҫ., ҡулдарҙа) барлыҡҡа килгән экзема); *э. микробная* микроблы экзема (эрен-ҡутыр ауырыуы булған ерҙә башланған экзема), *э. паратравматическая* паратравматик экзема (тәндең йәрәхәтләнгән ерендә барлыҡҡа килгән экзема); *э. профессиональная* профессиональ экзема (эш шарттарында нимәлер килешмәүҙән килгән экзема); *э. себорейная* себорея экземаһы (себорея нигеҙендә барлыҡҡа килгән экзема; *ҡара:* **себорея**); *э. солнечная* ҡояш экземаһы (ҡояш нурҙарына юғары һиҙеүсәнлек булғанда килгән экзема) һ. б.

**экзематизация** экзематизация (төрлө сәбәптән экземаға оҡшаш сабыртманың барлыҡҡа килеүе)

**экзематозный** экзема, экзематоз (мәҫ., экзема(тоз) сабыртма)

**экзематоид** экзематоид (үтелеше менән экземаға оҡшаш тире ауырыуы, бара торғас микроблы экземаға әүерелеүсән)

**экзоаллергия** экзоаллергия (тышҡы мөхиттәге аллергенға ҡарата барлыҡҡа килгән аллергия)

**экзобиология** экзобиология (биологияның Ер шарынан тыш урындарҙа булған тереклекте өйрәнеүсе тармағы)

**экзогенный** экзоген (тышҡы сәбәптәрҙән барлыҡҡа килгән, мәҫ., экзоген ауырыуҙар)

**экзостоз** экзостоз (һөйәк ороһо)

**экзотоксин** экзотоксин (микробтың үҙе йәшәгән средаға бүленеп сыҡҡан ағыуы)

**экзофтальм** экзофтальм (ауырыу һөҙөмтәһендә аҡайған күҙле булыу)

**эклампсия** эклампсия (ғәҙәттә, йөклө булыуҙың икенсе яртыһында барлыҡҡа килгән көҙән йыйырыу менән үткән токсикоз; *ҡара:* **токсикоз беременных**)

**экология** экология (организмдарҙың үҙ-ара һәм тышҡы мөхит менән аралашыуы хаҡындағы фән; төрҙәре: *э. человека* кеше экологияһы)

**эксгибиционизм** эксгибиционизм (ҡайһы бер психик ауырыу булғанда сирлененң енес ағзаларын күрһәтергә ынтылыуы)

**эксгумация** эксгумация (суд-медицина тикшереүе өсөн мәйетте ҡәберҙән соҡоп алыу)

**экскориация** экскориация (тире һәм тиресәнең сыйылыуы)

**экскременты** экскременттар (тиҙәк, һейҙек)

**экскрет** экскрет (эсәк-ҡарын, үпкә, бөйөр, тире аша сыҡҡан бүлендек, мәҫ., ҡаҡырыҡ, тир һ. б.)

**экскреция** экскреция (экскреттарҙың барлыҡҡа килеүе һәм бүленеүе)

**экспериме́нт** эксперимент (фәнни тәжрибә)

**экспе́рт** эксперт (экспертиза үткәреүсе белгес, мәҫ., медицина эксперты)

**эксперти́за** экспертиза (теге йәки был мәсьәләне белгестәр тарафынан тикшереп һөҙөмтә алыу; төрҙәре: *э. военно-врачебная* хәрби-врачлыҡ экспертизаһы; *э. врачебно-страховая* врачлыҡ-страхование экспертизаһы; *э. врачебно-трудовая* врачлыҡ-хеҙмәт экспертизаһы; *э. временной нетрудоспособности* хеҙмәткә ваҡытлыса яраҡһыҙлыҡ экспертизаһы; *э. психиатрическая* психиатрия экспертизаһы; *э. судебно-медицинская* суд-медицина экспертизаһы һ. б.)

**экспре́сс-ме́тод** экспресс-метод (ниндәйҙер тикшереүҙе тиҙлек менән башҡарыу ысулы)

**экспре́ссия** экспрессия (кисерештең көсө, тәьҫирлеге, хисе)

**экссуда́т** экссудат (шешеү һөҙөмтәһендә ҡан, лимфа тамырҙарынан сығып тән ҡыуышлыҡтарында, туҡымаларҙа йыйылған аҡһымға бай шыйыҡса)

**экссудати́вный** экссудатив (экссудатҡа ҡағылышлы)

**экссуда́ция** экссудация (шешеү һөҙөмтәһендә ҡан, лимфа тамырҙарынан шыйыҡса бүленеү, экссудат йыйылыу)

**экста́з** экстаз (1. сиктән тыш шатланыу, бик күтәренке кәйеф; 2. психиатрияла психик һаулыҡ ҡаҡшауҙың бер күренеше)

**экстирпа́ция** экстирпация (ниндәй ҙә булһа ағзаны тотошлай алыу операцияһы, мәҫ., бөйөр экстирпацияһы)

**экстероре́це́птор** экстерорецептор (нервы үҙәгенә барыусы нервының тән өҫтөндә урынлашҡан бөтөмө — рецепторы)

**экстра́кт** экстракт (шифалы үҫемлектән һыу, спирт йәки эфир ярҙамында алынған төнәтмә, мәҫ., *э. валерианы* валериан (бесәй үләне) экстракты һ. б.)

**экстра́кция** экстракция (1. *(хир.)* һурып алыу, мәҫ., теште; 2. *(акуш.)* акушер ҡыпһыуыры ярҙамында ҡарындағы баланы сығарыу операцияһы; 3. *(фарм.)* экстракт әҙерләү)

**экстраси́стола** экстрасистола (йөрәктең өҫтәмә ҡыҫҡарылышы; төрҙәре: *э. желудочковая* йөрәк ҡарынсалары экстрасистолаһы; *э. предсердная* йөрәк алды экстрасистолаһы һ. б.)

**экстрасистоли́я** экстрасистолия (йөрәк эше ритмының боҙолоуы, экстрасистолалар барлыҡҡа килеүе)

**эксфолиа́ция** эксфолиация (тире йәки тиресәнең эре ҡауаҡ, төләү рәүешендә ҡубып төшөүе)

**эксфу́зия крови** ҡан эксфузияһы (ҡан тамырҙарынан ҡанды тулыһынса алыу)

**эксцеребра́ция** эксцеребрация (ҡарындағы үле баланы сығарыуҙы еңеләйтеү маҡсатында уның баш мейеһен алыу операцияһы)

**эктази́я** эктазия (ҡыуышлы йәки көпшәле ағзаның киңәйеүе, мәҫ, бронхэктазия)

**э́ктима** эктима (тәнгә сығып эренле яраға әйләнеүсе эренле ҡыуыҡса, мәҫ., сифилис эктимаһы; *ҡара:* **сифилис**)

**эктопарази́т** эктопаразит (тышҡы паразит, мәҫ., ҡандала)

**эктопи́я** эктопия (тыумыштан дөрөҫ үҫеш булмау сәбәпле ағзаның үҙ урынынан — ғәҙәттә тән өҫтөнә табан күсеүе, мәҫ., *э. мочевого пузыря* һейҙәк ҡыуығы эктопияһы; *э. яичка* күкәй эктопияһы һ. б.)



**экхимо́з** экхимоз (тире, тиресә аҫтына ҡан һауыуҙан килгән ҡан шеше)

**эласти́чность** эластиклыҡ (һығылмалылыҡ, мәҫ., тире эластиклығы)

**эласто́з** эластоз (тиреләге эластик епсәләрҙең ныҡ үҫеш алыуы менән характерлы тире ауырыуҙарының дөйөм исеме)

**элеиди́н** элеидин (эпидермистың ялтырауыҡ ҡатламында булған аҡһым)

**электроаналгези́я** электроаналгезия (электр ярҙамында ауыртыуҙы баҫыу)

**электроанестези́я (электронаркоз)** электроанестезия (электр тогы ярҙамында йоҡлатыу)

**электроаэрозоль** электроаэрозоль (электр заряды булған ваҡ кисәксәләр)

**электроаэрозольтерапи́я** электроаэрозольтерапия (электроаэрозолде дауалау һәм профилактик маҡсатта ҡулланыу)

**электрогемоско́п** электрогемоскоп (ҡан күҙәнәктәрен автоматик рәүештә иҫәпләү өсөн прибор)

**электрогидротерапи́я** электрогидротерапия (бер юлы һыу ваннаһы һәм электр менән дауалау)

**электрогимна́стика** электрогимнастика (электр тогы ярҙамында дауалау, профилактик саралар үткәреү йәки мускулдарҙы күнектереү)

**электродиагно́стика** электродиагностика (организмдың хәрәкәт итеү функциялары боҙолоуын электр ярҙамында билдәләү)

**электрокардиогра́мма (ЭКГ)** электрокардиограмма (йөрәктә булған электр күренештәренең электрокардиограф приборы ярҙамында алынған график һүрәте)

**электрокардиогра́фия** электрокардиография (электрокардиограф приборы ярҙамында йөрәктәге электр күренештәренең яҙып алыныуы)

**электрокардиостимуля́тор** электрокардиостимулятор (электр импульстары ярҙамында йөрәк эшен шәбәйтеүсе прибор)

**электрокардиостимуля́ция** электрокардиостимуляция (электрокардиостимулятор ярҙамында йөрәк эшсәнлеген стимуллаштырыу)

**электрокимогра́фия** электрокимография (рентген ярҙамында үпкә, йөрәк, эре ҡан тамырҙарының һелкенеү барышына нигеҙләнгән эшсәнлеген өйрәнеү)

**электрокоагуля́ция** электрокоагуляция (юғары йышлыҡтағы электр тогы менән көйҙөрөү рәүешендә башҡарылған хирургик операция)

**электролече́ние** электр менән дауалау (диатермия, УВЧ һ. б.)

**электромасса́ж** электромассаж (махсус прибор менән электр тогы ярҙамында яһала торған массаж)

**электромиографи́я** электромиография (биоэлектрик потенциалды яҙып алыу рәүешендә мускулдар эшсәнлеген өйрәнеү)

**электронарко́з** *ҡара:* **электроанестезия**

**электроофтальми́я** электроофтальмия (ультрафиолет нурҙар күп төшөүҙән күҙҙең мөгәҙсә ҡатламының һәм тиресәһенең шешеүе)

**электропункту́ра** электропунктура (электр тогы тәьҫиренә нигеҙлән-

гән рефлексотерапия; *кара:* **рефлексотерапия**)

**электрорентгеносканѝрование** электрорентгеносканирлау (рентген һәм радиоизотоп тикшеренеүҙе берлектә үткәреүгә нигеҙләнгән ысул)

**электроретиногра́фия** электроретинография (күҙҙең селтәрле шекәрәһендә барлыкка килгән биоэлектрик потенциалды яҙып алыу ысулы)

**электросо́н** электройоҡо (1. баш мейеһенә электр тәьҫире менән йоҡлатыу; 2. электр ярҙамында йоҡлатыу рәүешендә дауалау)

**«электросо́н»** «электройоҡо» (йоҡлатып дауалау өсөн аппарат)

**электростимуля́тор** электростимулятор (электростимуляция үткәреү аппараты, бер нисә төрө билдәле)

**электростимуля́ция** электростимуляция, электростимуллаштырыу (ауырыуҙы асыҡлау, өйрәнеү, дауалау маҡсатында теге йәки был ағзаны ҡуҙғытыу, мәҫ., йөрәк стимуляцияһы)

**электротермо́метр медицинский** медицина электротермометры (тән температураһын үлсәү өсөн прибор)

**электротра́вма** электротравма (көслө электр тогы тәьҫиренән килгән травма; *кара:* **травма**)

**электрофизиоло́гия** электрофизиология (физиологияның организмда барған электр күренештәрен өйрәнеүсе тармағы)

**электрофоре́з** электрофорез (электры булған киҫәксәләрҙең дисперс средала күсеп йөрөүе, был күренеш физиотерапияла ҡулланыла, мәҫ. э. **лекарственный** дарыу электрофорезы)

**электрохирурги́я** электрохирургия (хирургияның операцияларҙы юғары йышлыҡтағы электр тогы ярҙамында башҡарыу тармағы)

**электроэксци́зия** электроэксцизия (электробысаҡ ярҙамында ниндәй ҙә булһа ағзаны алыу операцияһы)

**электроэнцефалогра́фия** электроэнцефалография (баш мейе биотоктарын электроэнцефалограф ярҙамында өйрәнеү ысулы)

**электроэнцефалоскопи́я** электроэнцефалоскопия (баш мейеһе биопотенциал күренештәрен өйрәнеү ысулы, алынған мәғлүмәт махсус экранға төшөрөлә)

**элеме́нт крови, форменный;** *кара:* **клетка крови**

**элеутероко́кк** элеутерококк (шифалығы менән женьшень тамырына оҡшаш үҫемлек)

**элефантиа́з** элефантиаз (*кара:* **слоновость**)

**элекси́р** эликсир (1. ҡайһы бер гигиеник йәки косметик шыйыҡса, мәҫ. *э. зубной* теш эликсиры; 2. *э. жизни* йәшәү эликсиры (боронғо ваҡытта алхимиктар эҙләгән ғүмерҙе оҙайтҡыс дарыу)

**эма́ль зубная** теш (үҙе) эмале (тештең коронка өлөшөндәге дентинды ҡаплаусы ялтыраусы матдәһе)

**э́мбол** эмбол (эмболия тыуҙырғыс нәмә: тромб йәки май тамсыһы, һауа ҡыуыҡсаһы һ. б.)

**эмболи́я** эмболия (ҡан тамырының эмбол менән тығылыуы; төрҙәре: *э. бактериальная* бактериаль эмболия; *э. воздушная* һауа эмболияһы; *э. жировая* май эмболияһы һ. б.)

**эмболэктоми́я** эмболэктомия (эмболды алыу операцияһы)

**эмбриокарди́я** эмбриокардия (ауырыу кешеләге йөрәк ритмының

ҡарындағы баланың йөрәк ритмына оҡшаш булыуы)

**эмбриоло́гия** эмбриология (толҡат һәм уның үҫеше хаҡындағы фән)

**эмбрио́н** эмбрион (түл күҙәнәгенең аталаныуҙан башлап бала донъяға килгәнгә тиклем дәүере)

**эмбриопати́я** эмбриопатия (ҡарындағы үҫеш дәүерендә күҙәтелгән аномаль күренештәрҙең дөйөм исеме)

**эмбриотокси́чность** эмбриотоксиклыҡ (йөклө ҡатынға эләккән теге йәки был матдәнең ҡарындағы бала өсөн ағыулы булыуы)

**эмметропи́я** эмметропия (нормаль күреү: кеше алыҫ һәм яҡын ятҡан әйберҙәрҙе лә яҡшы күрә)

**эмоциона́льный** эмоциональ (эмоцияларға ҡағылышлы)

**эмо́ция** эмоция (эмоцияның төрҙәре: *э. биологические* биологик эмоциялар (ас булыуға, һыуһауға, енси ынтылышҡа һ. б. бәйле барлыҡҡа килгән хис-тойғо); *э. отрицательные* ыңғай булмаған эмоциялар; *э. положительные* ыңғай эмоциялар һ. б.)

**эмпие́ма** эмпиема (тәндең берәй ҡыуышлығында йәки ҡыуышлы ағзаһында байтаҡ эрен йыйылыу, мәҫ., *э. аппендикса* аппендикс (йәки һуҡыр эсәк үҫентеһе) эмпиемаһы; *э. желчного пузыря* үт ҡыуығы эмпиемаһы; *э. плевры* плевра эмпиемаһы һ. б.)

**эму́льсия** *(лек.)* эмульсия (бер шыйыҡсаның икенсе шыйыҡсала иремәгән хәлдә булыуы менән характерлы ҡушылдыҡ, мәҫ. синтомицин эмульсияһы)

**эмфизе́ма** эмфизема (1. ниндәй ҙә булһа ағза-туҡыманың һауа йәки газ инеүе һөҙөмтәһендә киңәйеүе, мәҫ., *э. подкожная* тире аҫты эмфиземаһы; 2. *э. легких* үпкә эмфиземаһы (үпкәлә ауырыу һөҙөмтәһендә артыҡ һауа тупланыуы һәм шунлыҡтан үпкәнең киңәйеүе)

**энанте́ма** энантема (тиресәлә барлыҡҡа килгән сабыртма)

**эндаорти́т** эндаортит (аорта тамырының эске ҡатламы шешеүе)

**эндартерии́т** эндартериит (артерияларҙың эске ҡатламының шешеүе; төрҙәре: *э. облитерирующий* облитерациялы эндоартериит (нигеҙҙә аяҡ артериялары шешеүе һәм тарайыуы менән характерлы етди ауырыу) һ. б.)

**эндеми́ческий** эндемик (эндемияға ҡағылышлы; *ҡара:* **эндемия,** мәҫ., эндемик ауырыу)

**эндеми́чность** эндемиклыҡ (социаль йәки тәбиғәт үҙенсәлегенә бәйле ҡайһы бер ауырыуҙарҙың тик айырым ер-урынға характерлы булыуы, мәҫ., Уралда боғаҡ сире)

**эндеми́я** эндемия (берәй ерҙә, өлкәлә йоғошло ауырыуҙың даими рәүештә күҙәтелеүе)

**эндоваскули́т** эндоваскулит (ҡан тамырының эске ҡатламы шешеүе)

**эндогени́я** эндогения (ауырыуҙың организм эсендәге сәбәптән барлыҡҡа килеүе)

**эндоге́нный** эндоген (1. организм эсендә тышҡы сәбәпһеҙ барлыҡҡа килгән; 2. организм үҙенсәлеге арҡаһында барлыҡҡа килгән, мәҫ., эндоген ауырыуҙар)

**эндокапилляри́т** эндокапиллярит (капилляр тамырҙарҙың эске эндотелиаль ҡатламының шешеүе)

**эндока́рд** эндокард (йөрәктең эске ҡатламы)

**эндокарди́т** эндокардит (эндокардтың шешеүе; төрҙәре: *э. ревма-*

*тический* ревматизм эндокардиты; *э. язвенный* сей яралы эндокардит һ. б.)

**эндокри́нный** эндокрин (эске секреция биҙҙәренә һәм уларҙың эшенә ҡағылышлы, мәҫ., эндокрин ауырыуҙар)

**эндокрино́лог** эндокринолог (эндокринология белгесе, врач)

**эндокриноло́гия** эндокринология (медицинаның эске секреция биҙҙәрен, уларҙың ауырыуҙарын һәм дауалау юлдарын өйрәнә торған бүлеге)

**эндокринопати́я** эндокринопатия (эске секреция биҙҙәре ауырыуҙарының дөйөм исеме)

**эндоли́мфа** эндолимфа (ярылы лабиринттағы үҙенә бер төрлө шыйыҡса; *ҡара:* **лабиринт**)

**эндоме́трий** эндометрий (аналыҡтың эске ҡатламы)

**эндометри́т** эндометрит (аналыҡ тиресәһенең шешеүе; төрҙәре: *э. острый* киҫкен эндометрит; *э. постабортный* аборттан һуңғы эндометрит; *э. хронический* хроник (дауамлы) эндометрит һ. б.)

**эндоне́врий** эндоневрий (нервы эсендәге нервы епсәләре араһында ятҡан туҡыма)

**эндопарази́т** эндопаразит (эске паразит, мәҫ., ҡыҫал, бабасыр һымаҡ паразит селәүҙәр)

**эндопроте́з** эндопротез (теге йәки был ағза эсендә урынлаштырылыусы протез, мәҫ., *п. аорты* аорта протезы)

**эндосальпинги́т** эндосальпингит (аналыҡ торбаһы тиресәһенең шешеүе)

**эндоско́п** эндоскоп (тәбиғи тишемдәргә индереп эске ағзаларҙы тикшереү өсөн торба формаһындағы приборҙарҙың дөйөм исеме, мәҫ., фиброгастроскоп, бронхоскоп һ. б.)

**эндоскопи́я** эндоскопия (ҡыуышлы йәки көпшәле ағзаны эндоскоп приборы ярҙамында тикшереү, мәҫ., ларингоскопия — ҡурылдайҙы тикшереү һ. б.)

**эндо́ст** эндост (һөйәк эсен ҡаплауы йоҡа яры)

**эндоте́лий** эндотелий (ҡан-лимфа тамырҙарҙың, сероз ҡыуышлыҡтарҙың эске яғын ҡаплай торған һәм капилляр аралыҡтарын тәшкил иткән ялпаҡ эпителий, мәҫ., тамыр эндотелийы)

**эндотелио́ма** эндотелиома (ҡан һәм лимфа тамырҙары эндотелийҙан сыҡҡан яман шеш)

**эндотокси́н** эндотоксин (бактериялар тәнендә барлыҡҡа килгән һәм бактериялар тарҡалғанда бүленгән ағыу)

**эндотромбофлеби́т** эндотромбофлебит (вена тамырҙары эске ҡатламының тромб барлыҡҡа килгәндә шешеүе)

**эндофили́я** эндофилия (ҡайһы бер ҡырағай ҡан эскес бөжәктәрҙең кеше йәшәгән биналарҙа эйәләшергә ынтылыуы)

**эндофлеби́т** эндофлебит (вена тамырының эске ҡатламы шешеүе)

**эндофтальми́т** эндофтальмит (күҙҙең эске ҡатламының эренләп шешеүе)

**эндоцервици́т** эндоцервицит (аналыҡ муйынтығы тиресәһенең шешеүе)

**энергометри́я** энергометрия (организм тарафынан түгелгән энергияны үлсәү методтарының дөйөм исеме)

**энзи́м** энзим (*ҡара:* **фермент**)

**энзимоло́гия** энзимология (биохимияның ферменттарҙы өйрәнеүсе тармағы)

**энзимопати́я** энзимопатия (фер-

менттарҙың етешмәүе йәки уларҙың активлығы боҙолоуҙан килгән ауырыу күренештәренең дөйөм исеме)

**энзимотерапи́я** энзимотерапия (дауалау маҡсатында ферменттарҙы ҡулланыу)

**энзооти́я** энзоотия (теге йәки был урын-ерҙә йәшәгән хайуандарҙа ниндәй ҙә булһа инфекцион ауырыуҙың тотороҡло күҙәтелеүе)

**энофта́льм** энофтальм (күҙ алмаһының күҙ соҡоронда батыбыраҡ ятыуы, нык ябыҡҡанда күҙәтелә)

**энтамёба** энтамеба (амебаларҙың бер төрө; *ҡара:* **амёба**)

**энтералги́я** энтералгия (эс ауыртыу)

**энтери́т** энтерит (нәҙек эсәктең тиресә ҡатламы шешеүе; төрҙәре: *э. инфекционный* инфекцион энтерит; *э. острый* киҫкен энтерит; *э. токсический* токсик энтерит (ниндәй ҙә булһа ағыуланыуҙан килгән энтерит); *э. хронический* хроник энтерит һ. б.)

**энтеробио́з** энтеробиоз (бабасыр эйәләшеүҙән килгән гельминтоз ауырыу; *ҡара:* **гельминтоз**)

**энтерови́русы** энтеровирустар (эсәктәрҙә эйәләшеүсән вирустар, уларҙың күбеһе ауырыу тыуҙырыусылар)

**энтероко́кк** энтерококк (ғәҙәттә һау эсәктәрҙә йәшәүсе кокк формаһындағы микроорганизм)

**энтероколи́т** энтероколит (нәҙек һәм йыуан эсәктәрҙең бер юлы шешеүе; төрҙәре: *э. инфекционный* инфекцион энтероколит; *э. острый* киҫкен энтероколит; *э. туберкулезный* туберкулез энтероколиты; *э. хронический* хроник энтероколит һ. б.

**энтероло́гия** энтерология (гастроэнтерологияның эсәк ауырыуҙарын өйрәнеүсе тармағы)

**энтеропати́я** энтеропатия (эсәк ауырыуҙарының дөйөм исеме)

**энтероспа́зм** энтероспазм (нәҙек эсәк спазмы; *ҡара:* **спазм**)

**энтеротокси́н** энтеротоксин (нәҙек эсәктә эйәләшеүсе стафилококк)

**энтомоло́гия** энтомология (бөжәктәрҙе өйрәнә торған фән)

**энтропио́н** энтропион (күҙ ҡабағы өлөшөнөң йәки уның кимерсәгенең күҙгә табан бөгөлөүе)

**энуклеа́ция** энуклеация (күҙҙе алыу операцияһы)

**энуре́з** энурез (*ҡара:* **недержание мочи, ночное**)

**энцефали́т** энцефалит (баш мейеһенең шешеүе; төрҙәре: *э. аллергический* аллергик энцефалит; *э. вирусный, клещевой* талпан (таратыусы) вирус энцефалиты (иксод талпаны тарата); *э. вирусный комариный* серәкәй (таратыусы) вирус энцефалиты; *э. гриппозный* грипп энцефалиты (грипптың ҡатмарлашыуы); *э. дизентерийный* дизентерия энцефалиты (дизентерияның ҡатмарлашыуы); *э. клещевой, весенне-летний (таёжный)* яҙғы-йәйге талпан таратыусы энцефалит (ауырыуҙы иксод талпаны тешләүҙән йә кәзә һөтөн эсеп йоҡторалар һ. б.)

**энцефалогра́фия** энцефалография (мейе ҡарынсыҡтарына һәм субарахноидаль арауыҡҡа контраст матдә индереп үткәрелгән рентгенография)

**энцефаломаля́ция** энцефаломаляция (ауырыу һөҙөмтәһендә мейенең тарҡалып йомшарыуы)

**энцефаломиели́т** энцефаломиелит

(баш һәм арҡа мейеләренең бер юлы шешеүе)

**энцефаломиелополирадикули́т** энцефаломиелополирадикулит (инфекция йә ағыуланыу һөҙөмтәһендә нервы системаһының тотошлай шешеүе)

**энцефалопати́я** энцефалопатия (баш мейеһе ауырыуҙарының дөйөм исеме)

**энцефалоце́ле** энцефалоцеле (баш мейеһе бүҫере)

**эозинофи́л** эозинофил (бөртөклө лейкоциттарҙың бер төрө)

**эозинопени́я** эозинопения (периферик ҡанда эозинофилдарҙың кәмеүе)

**эозинофили́я** эозинофилия (периферик ҡанда эозинофилдарҙың артыҡ булыуы)

**эпенди́ма** эпендима (мейе ҡарынсыҡтарын һәм арҡа мейеһе каналы эсен ҡаплаусы эпителий)

**эпендимати́т** эпендиматит (баш мейеһе эпендимаһының шешеүе)

**эпендимо́ма** эпендимома (баш йәки арҡа мейеһе эпендима ҡатламында барлыҡҡа килгән шеш)

**эпига́стрий** эпигастрий (ҡорһаҡтың күкрәк ауыҙы өлкәһе)

**эпиглотти́т** эпиглоттит (ҡурылдай ҡапҡасы тиресәһенең шешеүе)

**эпидемио́лог** эпидемиолог (эпидемиология белгесе, врач)

**эпидемиологи́ческий** эпидемиология, эпидемиологик (мәҫ., эпидемиология кафедраһы, эпидемиологик тикшереү)

**эпидемиоло́гия** эпидемиология (йоғошло ауырыуҙар сығышын һәм улар менән көрәшеү ысулдарын өйрәнә торған фән)

**эпидеми́ческий** эпидемия, эпидемик (мәҫ., эпидемик ауырыу, эпидемия сығанағы)

**эпиде́мия** эпидемия (ныҡ таралып киткән инфекцион ауырыу, мәҫ., грипп эпидемияһы)

**эпиде́рмис** эпидермис (тиренең өҫкө ҡатламы, үҙ сиратында 5 ҡаттан тора: үҫеш ҡатламы, осло күҙәнәктәр, ялтырауыҡ, бөртөксәле һәм мөгөҙлө ҡатламдар)

**эпидермо́лиз буллезный, врожденный** тыумыштан килгән эпидермолиз (тәнгә һыулы ҡыуыҡ-күперткеле сабыртма сығыу менән үтеүсе тире ауырыуы)

**эпидермомико́зы** эпидермомикоздар (тиренең нигеҙҙә эпидермис ҡатламын зарарлаусы бер төркөм бәшмәк ауырыуҙары: эпидермофития, руброфития һ. б.)

**эпидермофити́ды** эпидермофитидтар (эпидермофития барлыҡҡа килгәндә сыҡҡан аллергия сабыртмаһы)

**эпидермофити́я** эпидермофития (эпидермофитон бәшмәге йоҡҡандан килгән тире бәшмәк ауырыуы; уның төрҙәре: *э. ногтей* тырнаҡ эпидермофитияһы; *э. паховая* сандыр эпидермофитияһы; *э. стоп* аяҡ башы эпидермофитияһы һ. б.)

**эпидермофи́тон** эпидермофитон (эпидермофития тыуҙырыусы үҙенә бер төрлө микроскопик бәшмәк)

**эпидидими́т** эпидидимит (күкәй өҫтәмәһенең шешеүе)

**эпидури́т** эпидурит (мейенең эпидураль арауыҡтағы туҡымаһының шешеүе)

**эпизооти́я** эпизоотия (инфекцион ауырыуҙың хайуандар араһында ныҡ таралыуы)

**эпизоотоло́гия** эпизоотология (ветеринарияның эпизоотик процес-

тарҙы, уларҙы булдырмау, көрәшеү юлдарын өйрәнеүсе тармағы)

**эпика́рд** эпикард (йөрәктең тышҡы ҡатламы)

**эпикри́з** эпикриз (берәй кешенең ауырыуы хаҡында врачтың һуңғы (һығымта) һүҙе, гәҙәттә ауырыу кеше тарихына, амбулатор картаһына яҙыла)

**эпиле́псия** эпилепсия, ҡуянсыҡ (ваҡыты-ваҡыты менән һуштан яҙыу, тартышыу быумаһы менән үткән үҙәк нервы системаһы ауырыуы; уның төрҙәре: *э. алкогольная* алкоголь эпилепсияһы; *э. генуинная* генуин эпилепсия (сәбәбе асыҡланмаған эпилепсия); *э. детская* балалар эпилепсияһы һ. б.)

**эпилептифо́рмный** эпилептиформ (эпилепсия һымаҡ, мәҫ. эпилептиформ быума)

**эпилепти́ческий** эпилепсия, эпилептик (мәҫ. эпилепсия быумаһы, эпилептик ауырыу)

**эпиля́ция** эпиляция (косметик йәки дауалау маҡсатында сәс бөртөктәрен йолҡоп алыу)

**эписклери́т** эписклерит (күҙ ағының өҫкө ҡатламы шешеүе)

**эписпади́я** эписпадия (һейеү каналы өҫкө көбөнөң ярыҡлы булыуы менән характерлы тыумыштан килгән физик кәмселек)

**эпителиза́ция** эпителизация (йәрәхәтләнгән тире, тиресәлә яңы эпителий күҙәнәктәре барлыҡҡа килеүе һәм уңалыуы, мәҫ. *э. раны* яра эпителизацияһы

**эпите́лий** эпителий (тире, тиресәләрҙе, сероз шекәрәләрҙе, биҙҙәрҙе һ. б. ҡаплаусы күҙәнәктәрҙән һәм күҙәнәк-ара матдәнән торған йоҡа ҡатлам; төрҙәре: *э. мерцательный* емелдәгес эпителий; *э. плоский* ялпаҡ эпителий һ. б.)

**эпителио́ма** эпителиома (эпителий туҡымаһынан сыҡҡан шештәрҙең дөйөм исеме)

**эпитимпани́т** эпитимпанит (урта ҡолаҡ һәм сикә һөйәгенең берлектә шешеүе)

**эпи́физ** эпифиз (1. баш мейеһендә урынлашыусы эске секреция биҙе 2. көпшәлә һөйәктең ос яғы, мәҫ. бот һөйәге эпифизы һ. б.)

**эпу́лис** эпулис (теш ите йәки яңаҡ эсендәге тоташтырғыс туҡыманың артыҡ үҫеш алыуы)

**эргографи́я** эргография (мускул көсөнөң эшен график һүрәткә төшөрөү)

**эргокальциферо́л** эргокальциферол (*ҡара:* **витамин** $Д_2$)

**эргоно́мика** эргономика (эштә уңайлыраҡ шарттар булдырыу маҡсатында эш барышын өйрәнә торған фән)

**эрготерапи́я** эрготерапия (яраҡлы эш ярҙамында дауалау)

**эргoти́зм** эрготизм (ата арыш менән зарарланған игенде ашап ағыуланыу)

**эре́кция** эрекция (енси ҡуҙғыу булғанда ир енес ағзаһының, клиторҙың тулышып ҡатыуы)

**эрети́зм** эретизм (сирле кешеләрҙең тиҙ ҡыҙып китеүсәнлеге)

**эризипело́ид** *ҡара:* **рожа свиная**

**эрите́ма** эритема (1. тәндең йә уның берәй өлөшөнөң ҡыҙарыуы; 2. бер төркөм ауырыуҙар атамаһы, мәҫ., *э. инфекционная* инфекцион эритема (сәбәбе асыҡланмаған киҫкен ауырыу); *э. узловатая* төйөрлө эритема (инфекцион-аллергик ауырыу һ. б.)

**эритемато́з** эритематоз; *ҡара:* **волчанка красная**

**эритемотерапи́я** эритемотерапия (ультрафиолет нурҙар ярҙамында тәндең берәй ерендә эритема яһап дауалау)

**эритра́зма** эритразма (үҙенә бер төрлө паразит бәшмәк йоҡҡандан һәм ғәҙәттә бот төбө тирәһен зарарлаусы тире ауырыуы)

**эритерми́я** эритермия (*ҡара:* **полицитемия истинная**)

**эритробла́ст** эритробласт (ҡандың ҡыҙыл күҙәнәктәренең иң йәш—башланғыс төрө)

**эритробласто́з** эритробластоз (эритробластарҙың күбәйеүе (нигеҙҙә, лейкозға хас күренеш; *ҡара:* **лейкоз**)

**эритробласто́ма** эритробластома (эритробласт күҙәнәктәренән барлыҡҡа килгән яман шеш)

**эритродерми́я** эритродермия (ҡайһы бер тире ауырыуҙарының ҡатмарлашыуы: тәндең күпселек өлөшөнөң ҡауаҡ-ҡабырсаҡланып ҡыҙарыуы, шешеүе; төрҙәре: *э. десквамативная новорожденных* яңы тыуған балаларҙың десквамативэритродермияһы (тәндә эре ҡауаҡ-ҡабырсаҡ барлыҡҡа килеүе менән характерлы); *э. псориатическая* псориаз эритродермияһы (псориаздың ауыр формаһы; *ҡара:* **псориаз**) һ. б.)

**эритродиапеде́з** эритродиапедез (ҡайһы бер ауырыу булғанда эритроциттарҙың ҡан тамырҙарынан тирә-яҡ туҡымаға сығыуы)

**эритродиаре́з** эритродиарез (ҡартайған эритроциттарҙың физиологик тарҡалыуы)

**эритрокератодерми́я** эритрокератодермия (тәндең ҡыҙарыуы һәм ҡалынайып ҡатыуы менән характерлы дөйөм ауырыу)

**эритромелалги́я** эритромелалгия (тәндең шешеү, ҡыҙарыу өйәнәге менән үткән ангионевроз ауырыуы; *ҡара:* **ангионевроз**)

**эритромиело́з** эритромиелоз (киҫкен лейкоздың бер төрө; *ҡара:* **лейкоз**)

**эритропоэ́з** эритропоэз (эритроциттарҙың барлыҡҡа килеүе)

**эритрофоби́я** эритрофобия (ҡыҙыл төҫкә фобия; *ҡара:* **фобия**)

**эритроци́т** эритроцит (ҡандың ҡыҙыл күҙәнәге)

**эритроцито́з** эритроцитоз (ҡанда эритроциттарҙың артыуы)

**эритроцитопени́я** эритроцитопения (ҡанда эритроциттарҙың кәмеүе)

**эро́зия** эрозия (тире йәки тиресәнең өҫкө ҡатламында барлыҡҡа килгән еңелсә йәрәхәт-яра)

**эроти́зм** эротизм (сексуаль әүәҫлекте аңлатҡан термин)

**эротографомани́я** эротографомания (ҡайһы бер психик ауырыуға хас күренеш: өҙлөкһөҙ мөхәббәткә арналған хат яҙыу)

**эрома́ния** эротомания (ауырыу рәүешле сиктән тыш көслө сексуаль әүәҫлек)

**эротофоби́я** эротофобия (сексуаль тормошто күрә алмау йәки унан ҡурҡыу менән характерлы фобия; *ҡара:* **фобия**)

**Эскула́п** Эскулап (1. боронғо грек мифтарында дауалау аллаһы; 2. *(ирон.)* врач, медик)

**эстезиоло́гия** эстезиология (һиҙеүтойоу ағзаларын өйрәнеүсе фән)

**эстетикотерапи́я** эстетикотерапия (медицинаның һаулыҡ өсөн эстетик тәьҫир файҙалылығын өйрәнә торған бүлеге)

**эстрадио́л** эстрадиол (эстрогендарҙың береһе)

**эстрогены** эстрогендар (түллектә, бөйөр өҫтө биҙҙәрендә, плацентала барлыҡҡа килеп, ҡатын-

ҡыҙ үҫешендә мөһим роль уйнаған бер төркөм гормондар: эстрадиол, эстрон һ. б.)

**этап** *(мед.)* этап (мәҫ., *э. медицинский эвакуационный* медицина эвакуацияһы этабы)

**этика врачебная** врач (врачлыҡ) этикаһы (этиканың медицина профессияһына ҡағылышлы үҙенсәлекле бүлеге)

**этили́зм** этилизм (*ҡара:* **алкоголизм хронический**)

**этиоло́гия** этиология (1. ауырыу тыуҙырыусы сәбәптәр тураһындағы ғилем; 2. ауырыуҙың сәбәбе)

**этиопатогене́з** этиопатогенез (ауырыуҙың сәбәбе һәм ауырыуҙың нисек үтеүе тураһындағы белемдең бергәлеге)

**этиотро́пный** этиотроп (ауырыуҙың сәбәбенә тәьҫир иткән, мәҫ., этиотроп дарыу)

**этмоиди́т** этмоидит (танау эсендәге селтәрле һөйәк күҙәнәктәре тиресәһенең шешеүе)

**эупареуни́я** эупареуния (ир һәм ҡатындың бер үк ваҡытта оргазм кисереүе; *ҡара:* **оргазм**)

**эупарифио́зы** эупарифиоздар (трематодоздар рәтенә ингән һәм үҙенә бер төрлө паразит селәүҙәр йоғоуҙан килгән, эс китеү менән характерлы гельминтоз ауырыуҙары; *ҡара:* **гельминтоз**)

**эуритремато́з** эуритрематоз (трематоздар рәтенә ингән һәм үҙенә бер төрлө паразит селәү йоғоуҙан килгән гельминтоз ауырыуы; *ҡара:* **гельминтоз**)

**эфир наркозный** наркоз эфиры (*ҡара:* **наркоз**)

**эфирома́ния** эфиромания (эфирға ҡарата барлыҡҡа килгән наркомания; *ҡара:* **наркомания**)

**эффлоресце́нция** эффлоресценция (*ҡара:* **сыпь**)

**эхиноко́кк** эхинококк (1. эт, бесәй, бүре кеүек йәнлектәр эсегендә эйәләшеүсән таҫма паразит селәү; 2. кешенең һәм һарыҡ кеүек хайуандарҙың ағза-туҡымаларында эйәләшкән эхинококктың ҡарышлауығы)

**эхинококко́з** эхинококкоз (кешелә эхинококк ҡарышлауығының эйәләшеүенән килгән ауырыу)

**эхиностомо́зы** эхиностомоздар (трематоздар рәтенә ингән һәм көньяҡ илдәргә хас бер төркөм гельминтоз ауырыуҙары)

**эхографи́я ультразвуковая** ультратауыш эхографияһы (тауыш импульстары ярҙамында эске ағзаларҙы тикшереү)

**эхолали́я** эхолалия (ҡайһы бер психик ауырыуҙарға хас күренеш: кеше әйткәнен ҡабатлау)

**эхомими́я** эхомимия (ҡайһы бер психик ауырыуға хас күренеш: кеше хәрәкәтен ҡабатлау)

**эхопати́я** эхопатия (ҡайһы бер психик ауырыуға хас күренеш: кеше мимикаһын, хәрәкәтен, һүҙҙәрен ҡабатлау)

**эхоэнцефалогра́фия** эхоэнцефалография (ультратауыш эхографияһы ярҙамында баш мейе ауырыуҙарын: шеште, ят есем дәрҙе һ. б. өйрәнеү)

**эшара** эшара (ултырыш тирәһендә күҙәтелеүсән тире гангренаһы; *ҡара:* **гангрена**)

**эякуля́т** эякулят (яҡынлыҡ ҡылғанда ағып сыҡҡан аталыҡ орлоғо)

**эякуля́ция** эякуляция (яҡынлыҡ ҡылыу аҙағында аталыҡ орлоғоноң бүленеүе)

# Я

**явления побочные** өҫтәмә сирле үҙгәрештәр (һүҙ, нигеҙҙә, дауа килешмәүҙән барлыҡҡа килгән: сабыртма, ҡоҫоу һ. б. үҙгәрештәр хаҡында бара)

**ягодица** ултырыш

**яд** ағыу, зәһәр (мәҫ. *я. гепатотропный* гепатотроп ағыу (бауыр өсөн зарарлы ағыу); *я. промышленный* промышленность ағыуы)

**ядовитый** ағыулы, зәһәрле

**ядохимикаты** ағыулы химикаттар (зарарлы бөжәктәргә һәм ҡый үләндәренә ҡаршы ҡулланылған ағыу)

**ядро** йәҙрә (1. мейелә нервы күҙәнәктәренең тупланмаһы, мәҫ., *я. глазодвигательного нерва* күҙ йөрөткөс нервы йәҙрәһе (урта мейелә); *я. чувствительное* һиҙеү йәҙрәһе (баш һәм арҡа мейеләрендә) һ. б.; 2. күҙәнәктең мөһим есеме: *я. клеточное* күҙәнәк йәҙрәһе; 3. күҙ яҫмығының үҙәк өлөшө: *я. хрусталика* күҙ яҫмығы йәҙрәһе)

**ядрышко** кесе йәҙрә (күҙәнәк йәҙрәһе эсендә булған есем)

**язва** сей яра, язва (тире, тиресәне һәм улар аҫты туҡымаға үтеүсе сирле дефект; төрҙәре: *я. атеросклеротическая* атеросклероз сей яраһы; *я. варикозная* варикоз сей яра (веналарҙа варикозлы киңәйеү булғанда күҙәтелеүсән); *я. гангренозная* гангреноз сей яра (*ҡара:* **гангрена**); *я. двенадцатиперстной кишки* бөйән эсәге сей яраһы (*ҡара:* **болезнь язвенная**); *я. желудка* ашҡаҙандың сей яраһы (*ҡара:* **болезнь язвенная**); *я. пептическая* пептик сей яра (ашҡаҙан кислотаһы артыҡ булыуынан килгән ашҡаҙан йәки бөйән эсәгенең сей яраһы); *я. прободная* тишелгән сей яра; *я. раковая* рак сей яраһы (*ҡара:* **рак**); *я. сибирская* түләмә (үҙенә бер төрлө микроорганизм тыуҙырған, кешегә түләмәле малдан йоҡҡан үтә етди инфекцион ауырыу); *я. трофическая* трофик сей яра (туҡыманың насар туҡланыуынан килгән сей яра); *я. туберкулезная* туберкулез сей яра (*ҡара:* **туберкулез кожи**); *я. хроническая* хроник сей яра (даимлы үтеүсе) мәҫ., ашҡаҙандың хроник сей яра ауырыуы)

**язвенный** сей яра(лы), язвалы (мәҫ., *язвенная болезнь* сей яра ауырыуы; *язвенный процесс* сей яралы процесс)

**язык** тел *я. борозчатый* йыйырсыҡлы тел (тыумыштан килгән күренеш); *я. обложенный* ҡуныҡлы тел һ. б.)

**язычок** 1. *я. небный* кесе тел (йомшаҡ аңҡауҙың артҡы өлөшө); 2. тел өлөшө (ҡайһы бер ағзаларҙың бер аҙ телде хәтерләткән өлөшө, мәҫ., *я. клиновидной кости* сөй һөйәктең тел өлөшө)

**яичко** күкәй (аталыҡ күҙәнәктәрен — сперматозоидтарҙы эшләп сығарыусы енес биҙе)

**яичник** түллек, түллек биҙе (ҡатын-ҡыҙ енес күҙәнәктәрен — түлде эшләп сығарыусы енес биҙе)

**яйца гельминтов (паразитических червей)** гельминттар (паразит селәүҙәр) йомортҡалары

**яйцевод** түл юлы (йәки аналыҡ торбаһы)

*Гумаров Варис Зиякаевич*

**Краткий русско-башкирский словарь медико-гигиенических терминов**

Редакторҙары *Ғ. Ғ. Ғәлимова, З. И. Ҡазыева*
Художество редакторы *И. С. Файрушин*
Техник редакторы *Н. Ғ. Пятаева*
Корректоры *Ә. Н. Әсәҙуллина*

ИБ № 3972

Наборға бирелде 03.11.89. Баҫырға ҡул ҡуйылды 19.11.90. Ҡағыҙ форматы $84\times108^1/_{32}$. Мәктәп гарнитураһы. Ҡалҡыу ысул менән баҫылды. Тип. ҡағыҙы № 2. Шартлы баҫма таб. 14,28. Шартлы буяу отт. 14,39. Учет.-изд. таб. 18,24. Тиражы 5000 экз. Заказ № 722. Хаҡы 1 һум 70 тин.

Башҡортостан китап нәшриәте. 450000, Өфө-үҙәк, Совет урамы, 18. Башкирское книжное издательство. 450000, Уфа-центр, ул. Советская, 18.

Башҡорт ССР-ы Нәшриәттәр, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса дәүләт комитетының Өфө полиграфия комбинаты. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

1 р. 70 к.